БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ МӘҒАРИФ МИНИСТРЛЫҒЫ
БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ МӘҒАРИФТЫ ҮҪТЕРЕҮ ИНСТИТУТЫ

Шағир һүҙе – шағир намыҫы

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына арналған йыйынтыҡ

(Дәрес һәм дәрестән һуң эшмәкәрлек эшкәртмәләре)

ӨФӨ 2013

УДК 31.031
ББК 74.202.5(2Рос=Баш)
Б 60

Шағир һүҙе – шағир намыҫы: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына арналған йыйынтыҡ (дәрес һәм дәрестән һуң эшмәкәрлек эшкәртмәләре). – Өфө: БР МҮИ нәшриәте, 2013. – 340 бит.

Яуаплы редактор: Ғәбитова З.М., филология фәндәре кандидаты, доцент

Редколлегия: *Рәхмәтуллина З.Ә., Санъяров Ф.Б., Илмөхәмәтов Ә.Г., Сөләймәнов Р.Ф., Таһирова М.Р., Ҡыуатова Г.Д., Гәрәева Г.Ф.*

Техник секретарь: Мәксүтова Р.Р.

Йыйынтыҡ республикабыҙҙың башҡорт һәм рус телле мәктәптәрҙә эшләүсе башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле, татар теле, марый теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Рауил Бикбаевтың тыуыуына 75 йыл тулыуға арналған дәрес һәм кластан тыш саралар өлгөләренән тора.

Йыйынтыҡ юғары уҡыу йорттары һәм педагогия колледждары студенттарына, уҡытыусылар, ғөмүмән, педагогика мәсьәләләре менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

© Авторы, 2013.
© ИРО РБ, 2013.

Инеш һүҙ

Ваҡыт ағышына күҙ ҙә эйәрерлек түгел – Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаевтың тыуыуына 75 йыл тула.

Халыҡ моңона, йырына бай кешеләр араһында үҫеү, туған моң, туған тел серҙәре, йәмдәре менән һуғарылыу Рауил Бикбаевты шиғыр яҙырға, шиғриәт донъяһына инеп китергә рухландыра.

“Был мөхиттең тағы ла мөһимерәге, нығыраҡ арбаусаны, бәлки, шул осорҙа беҙҙең яҡтарҙа нығ һаҡланып ҡалған, телдән-телгә күсеп йәшәгән фольклор традициялары, бай ауыҙ-тел ижады булғандыр. Ни тиклем тылсымлы һүҙ балҡыштары стихияһында үҫкәнебеҙҙе мин йылдар үткән һайын нығыраҡ баһалай барам, нығыраҡ һағынам. Беҙ бәләкәй саҡта кем күпме әкиәт, күпме таҡмаҡ белә тип ярыша торғайныҡ. Йомаҡ ҡойоу ғәҙәти хәл ине. Ауылыбыҙҙа Нәзифә Байтимерова тигән һуҡыр әбей торғаны әкиәт хазинаһы ине. Уны әкиәт һөйләтер өсөн ауылда өйҙән өйгә ҡундырып йөрөтөрҙәр ине, уны ҡундырыр көндә балалар байрам һымаҡ көтөп ала торғайны. Ҡайһы бер әкиәттәр бер көндә генә бөтмәй, дауамы икенсе көн һөйләнелә ине. Беҙҙең бала саҡтың сериалдары…”, тип хәтерләй шағир үҙ ижадының шишмә башын.

Рауил Бикбаевтың ныҡлабыраҡ яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы баҫылып сыға. 1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән беренсе китабы донъя күрә. Унан һуң баҫылған “Ҡош юлы”, “Автобиография”, “Ғүмер уртаһы”, “Ерем балҡышы”, “Яҙмышым”, “Ай күргәндәй, ҡояш алғандай” һ.б. китаптары башҡорт шиғриәтенең үҫешенә ҙур өлөш индерҙе. Бигерәк тә замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған “Халҡыма хат”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ”, “Система”, “Баҙар балтаһы”, “Башһыҙ һыбайлы”, “Барокамера” тигән поэмалары киң танылыу алды.

Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы булараҡ билдәлелек тапты. Ул Ш. Бабич, Р. Ғарипов әсәрҙәрен ентекле өйрәнеп халыҡҡа еткерҙе. Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙҙы, башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын баҫтырып сығарыуға ла күп көс һалыусы ғалим ул.

Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, З. Биишева исемендәге премиялар лауреаты. 1992 йылда Рауил Бикбевҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

Р. Бикбаев бик күп йылдар Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе вазифаһын башҡара. Был ҙтә яуаплы эш: үҙ ижадын өсөн генә түгел, ә республикабыҙҙың күп милләтле халыҡтар әҙәбиәте үҫеше, уның әҙәби мираҫын киләсәк быуындарға ҡалдырыу, әҙәби дуҫлыҡ, берҙәмлек, әҙәби асыш кеүек мөһим мәсьәләләр өсөн дә ҙур яуаплылыҡ тойоу. Бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе талантлы шағир халҡыбыҙға, йәштәргә рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүгә, милләтебеҙҙең бәҫен күтәреүгә тос өлөш индерә. Халҡыбыҙ иле, милләте, теле тип янған үҙ улына ҙур ышаныс күрһәтте: 2008 йылда Рауил Төхвәт улы Башҡортостан Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтай депутаты итеп һайланды. Фән, мәғариф, сәнғәт буйынса комитетты етәкләү бурысы йөкмәтелде.

Рауил Бикбаев илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем ижадында халыҡ яҙмышы, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә тора. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә. Башҡортса һәм русса фундаменталь шиғри антологияларҙы уҡыусыларға еткереүгә лә ул күп көс һалды. Ҡәләмдәштәре хаҡында әйтелгән һүҙҙәр, төрлө жанрҙар буйынса ғилми тикшеренеүҙәр, яҙыусыларҙың съездарындағы бай йөкмәткеле докладтар, публицистик сығыштар, шиғри тәржемәләр, һуңғы йылдарҙа үҙенсәлекле күренешкә әйләнгән шиғри хәҙистәр үҙҙәре махсус томдарҙы тәшкил итерлек. Рауил Бикбаевтың «Сәфәрҙәрҙә сығам сәхәрҙәрҙә» китабы башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын өр-яңы баҫҡыҫҡа күтәрҙе.

“Шағирҙар, яҙыусылар бер-береһен бик һирәк уҡый йәки бөтөнләй тиерлек уҡымай, – тип яҙа Р.Бикбаев “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” китабының баш һүҙендә. – Ә мин ҡәләмдәштәремде һәр ваҡыт уҡып барҙым: шиғриәтебеҙҙең барлыҡ яҡтарын да күреп-белеп, уңыштарыбыҙ өсөн ҡыуанып, уңышһыҙлыҡ-тарыбыҙ өсөн һыҙланып, шуларҙың барыһы хаҡында ла уҡыусыларға уй-фекерҙәремде еткереп йәшәнем”, – ти ул үҙенең ижад офоҡтарының киңлеген билдәләп. Был һүҙҙәрҙә шағирҙың башҡорт әҙәбиәте һәм ҡәләмдәштәре хаҡындағы борсолоуҙарын да, хәстәрлеген дә күрәбеҙ.

Тимер Йосоповтың Рауил Бикбаевҡа арналған “Бөркөт саңҡыуы” шиғырында шағирҙың ижад асылы бар дөрөҫлөгөндә асып бирелгән:

Оранында бөркөт саңҡыуы бар,
Ҡылыстарҙың унда бар сыңы,
Сәсәндәрҙең алыҫ һин - бер осо,
Ғәйәр Кинйәләрҙең ярсығы.

Йәш быуын халҡыбыҙҙың бөйөк шағиры Рауил Бикбаевтың әҫәрҙәрен уҡып белергә тейеш. Халыҡ шағирының хаҡлыҡ, ғәҙеллек, киләсәк йырсыһы булыуын, тыуған илдең үткәндәре, бөгөнгөһө, уның киләсәге алдында яуаплылыҡ тойғоһо менән йәшәгәнен, халыҡ яҙмышын үҙ ижадында сағылдырыуҙы төп маҡсат итеп ҡуйыуын киләсәк быуынға еткереү беҙҙең мөҡҡәдәс бурыс. Уҡыусылар менән уның тормош юлын, уның ижадын

өйрәнеү, әҙиптең шәхесенә ҡарата ихтирамлыҡ, ғорурлыҡ тойғоһо уятыу, уның әҫәрҙәре өлгөһөндә тәрбиә биреү, әҫәрҙәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу, әҫәрҙәрен өйрәнеү теләге тыуҙырыу, уның ижады яҡты нур булып балҡып тороуын уҡыусы күңеленә еткерергә кәрәк. Бөгөнгө көндә туған тел уҡытыусылары алдына Рауил Бикбаевтың әҫәрҙәре менән танышҡандан һуң, уҡыусыны килеп тыуған проблема алдына ҡуйыу, уны хәл итеү юлдарын билдәләү, үҙ тәьҫораттары менән уртаҡлашыу, уҡыусыны уйландыра алыу, аңғамә ҡора белеү, үҙ позицияһын яҡларға өйрәтеү, үҙ фекерҙәрен әйтеп биреү һ.б. кимәлгә еткереү бурыстары ҡуйыла. Мәктәп программаһында тәҡдим ителгән Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлын, уның әҫәрҙәрен өйрәнеүҙән тыш, уның менән осрашыуҙар ойоштороу, уның тураһында яҙмалар ҡарау, уның шиғырҙарын тыңлау, әҫәрҙәрен тәрәнәйтеп өйрәнеү өсөн уларҙы сәхнәләштереү, кисәләр, уҡыу конференциялары, яҙыусылар, яҡындары менән осрашыуҙар һ.б. ойоштороу бик отошло буласаҡ.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың 75 йыллыҡ юбилейына бағышлап эшкәртелгән йыйынтыҡ тулыһынса уның ижадын, тормош юлын һәм уның әҫәрҙәрен өйрәнеүгә бағышланған дәрес һәм дәрестән һуң эшмәкәрлек буйынса методик эшкәртмәләрҙән тупланған.

Республикабыҙҙың төрлө райондарынан ебәрелгән башҡорт һәм рус телле мәктәптәрҙә эшләүсе башҡорт һәм башҡа туған телдәр һәм әҙәбиәттәр һәм башҡа предмет уҡытыусыларының эшкәртмәләре иғтибарға лайыҡ. Һәр уҡытыусы Р. Бикбаевтың тормош юлын, ижадын өйрәнеүгә арналған дәрестәрҙе үҙенсәлекле итеп асҡан. Дәрестәр традицион методика, федераль дәүләт белем биреү стандарттар нигеҙендә лә төҙөлгән. Тәҡдим ителгән дәрес өлгөләре, класс сәғәттәре, төрлө кисәләр, уҡыу конференциялары бик ентекле, бөгөнгө стандарттар талаптарын иҫәпкә алып, уҡыусыны уйландырырлыҡ, үҙ фекерен әйтеп бирерлек, аңғамә ҡоролоҡ, үҙ аллы эшләү мөмкинлектәре булдырырлыҡ алым һәм методтар ҡулланып, уҡыусыны ижади эшмәкәрлеккә йәлеп итә алырлыҡ эш төрҙәре һәм һорауҙар менән байытылған.

Йыйып әйткәндә, Рауил Бикбаевтың оло юбилейына бағышланып эшләнелгән “Шағир һүҙе-шағир намыҫы” (Р. Бикбаевтың “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” тигән ижади портреттар, әҙәби мәҡәләләр, сығыштар йыйынтығынан) исемле йыйынтыҡҡа тупланған материал йәғни дәрес һәм дәрестән һуң эшмәкәрлек буйынса методик эшкәртмәләр туған тел һәм әҙәбиәт уҡытыусылары, филология факультеты студенттары өсөн бик кәрәкле ҡулланма булып хеҙмәт итер.

З.М. Ғәбитова

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ РАУИЛ ТӨХФӘТ УЛЫ БИКБАЕВ ИЖАДЫНА БАҒЫШЛАНҒАН КИСӘ

Мусина Гөлнара Рамаҙан ҡыҙы,
Тәтешле районы Иҫке Аҡбулат мәктәбе

Туған халҡы, теле өсөн янып-көйөп йәшәгән көслө рухлы кешеләр араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев айырым бер урын биләй. 2013 йылдың 12 декабрендә бөйөк шағирыбыҙға 75 йәш туласаҡ. Ә беҙ шағирҙың тормошон һәм ижадын беләбеҙме? Әйҙәгеҙ, командаларға бүленеп ярышып ҡарайыҡ.

Командаларға бүленеү.

Р. Бикбаевтың шиғыр юлдарынан алып командаларға исем һәм девиз уйлау.

Командалар әҙер булғансы, шағирҙың тормош юлына, ижадына ҡыҫҡаса байҡау яһайыҡ.(1-6 слайдтар)

Рауил Төхфәт улы Биҡбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Ғәбдерәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда “Хәҙерге башҡорт поэмаһы” тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Утыҙ йылға яҡын ошо Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Р. Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә.

Ә хәҙер һүҙҙе 1-се командаға бирәбеҙ.

Исем: Хазина

Девиз: Тәбиғәтебеҙ – хазина. Ялмауыҙҙар уны алмаһын!

2-се команда.

Исем: Ағиҙел

Девиз: Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!

I. Был юлдар Р. Бикбаевтың ҡайһы шиғырынан алынған?

1. Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы илдең тоткаһы тип,
Ҡарай бөгөн беҙгә ил күҙе. *(Ғүмер уртаһы)* (7 слайд).

2. Еткералмай һине өҙгөләнәм,
Үткәралмай китә иҫтәрем.
Ысҡынғандай бәйҙән берсә сабып,
Шып туҡтайһың берсә, тиҫкәре. *(Ваҡыт менән һөйләшеү)* (8 слайд).

1. Уйлайым да кеше яҙмыштарын, (9 слайд)
Хайран ҡалып ҡуям аптырап:
Күпме быуын аманатын кеше
Килер быуындарға тапшыра. *(Ете быуыным).*

2. Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү, (10 слайд)
Ул баҡсаны яман ҡый алһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан,
Сыуаш булыуынан,
Мари булыуыннан оялһа? *(Халҡымы хат).*

1. Һин башҡорт балаһы, (11 слайд)
Хужамы бөгөн
Башҡорт нефтенә,
Башҡорт урманына,
Хатта ташына? *(Хазина)*

2. Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты (12 слайд)
Һуң түгелдер әле, һуң түгел*... (Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!)*

II. Был һүҙҙәрҙе кем әйткән?

1. Рауил Биҡбаев – юғары граждандлыҡ тойғоло шағир. Уның поэзияһына эҙләнеүсән тынғыһыҙ фекер, болоҡһоу хис, замандың ҙур социаль-фәлсәфәүи, әхлаҡ-әҙәп мәсьәләләрен күтәреү, шуларҙы үтемле алымдарҙа поэтиҡлаштырыу хас. *(Ғайса Хөсәйенов).* (13 слайд)

2. "Рауилдең «башлап яҙыусылар» ҡоронда йөрөгәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым. Тәүге шиғыр китаптары күп тыуа, ләкин тәүге китабы менән бергә һөрәнләп әҙәбиәт донъяһына килгән шағир һирәк. Шул һирәктәрҙең береһе – Рауил Бикбаев" *(Мостай Кәрим).* (14 слайд)

III. Ҡайһы команда Р. Биҡбаевтың шиғырҙарын һәм поэмаларын белә? Исемдәрен яҙып жюриға бирегеҙ.

Ә беҙгә Г. Мусина Р. Биҡбаевтың «Халҡыма хат» шиғырын уҡып ишеттерер.

IV. Кроссворд. (15 слайд)



1. Р. Бикбаев тыуған өлкә. (Ырымбур)
2. Яҙыусы тыуған район. (Покровка)
3. Р. Бикбаевтың тыуған ауылы. (Үрге Ҡунаҡбай)
4. Р. Бикбаев яҙған поэма. (Хазина)
5. Р. Бикбаев яҙған шиғыр. (Уралыма)
6. Туған халҡының күңел биографияһын һүрәтләгән китабы. (Автобиография).
7. Р. Бикбаев яҙған шиғыр. (Революция)
8. Р. Бикбаев яҙған поэма. (Ҡаруанһарай)
9. Р. Бикбаев ҡайһы айҙа тыуған? (Декабрь)
10. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп яҙған шиғыры. (Халҡыма хат)
11. Етмешенсе йылдаруртаһында сыҡҡан китабы. (Ғүмер уртаһы)
12. Тәүге поэмаһы. (Вокзал)

Командалар кроссворд сискәнсе, беҙ Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады буйынса тест һорауҙарына яуап биреп алайыҡ. (16-39 слайдтар)

1. Р. Бикбаев ҡасан тыуған?

а) 1928 йылда;
б) 1938 йылда;
в) 1939 йылда;
г) 1941 йылда.

2. Р. Бикбаев ҡайҙа тыуған?

а) Ырымбур өлкәһендә;
б) Башҡортостанда;
в) Силәбе өлкәһендә;
г) Һамар өлкәһендә

3. Р. Бикбаевтың бер поэмаһы нисек атала?

а) “Ҡаруанһарай”;
б) “Күлдәк”;
в) “Үлмәҫбай”;
г) “Табыныу”.

4. Р. Бикбаевтың экология темаһы яҡтыртылған поэмаһы нисек атала?

а) “Аманат”;
б) “Икмәк еҫе”;
в) “Бөрөләр”;
г) “Һыуһаным, һыуҙар биреген!”

5. Р. Бикбаев – …
а) Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы;
б) Башҡортостандың халыҡ шағиры;
в) Башҡортостандың халыҡ шағиры һәм яҙыусыһы;
г) Башҡортостандың халыҡ артисы.

6. Р. Бикбаев ҡайҙа уҡый?
а) Башҡорт дәүләт университетында;
б) Башҡорт дәүләт педагогия университетында;
в) Башҡорт дәүләт аграр университетында;
г) Ырымбур дәүләт университетында.

7. Р. Бикбаевтың атаһының исеме нисек?
а) Таһир;
б) Төхфәт;
в) Тимер;
г) Тәлғәт.

8. Р. Бикбаев – …
а) күренекле әҙәбиәт ғалимы;
б) күренекле тел ғалимы;
в) философия фәндәре докторы;
г) педагогия фәндәре докторы.

Ошоноң менән ярыш төрҙәре тамам. Һүҙҙе жюри ағзаларына бирәбеҙ.

Хәрмәтле уҡыусылар! Башҡортостандың халыҡ шағиры, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге премияһы лауреаты Р.Т. Бикбаевтың ижадына бағышланған кисәне Рауил Бикбаев һәм Рәшит Шәкүр һүҙҙәренә яҙылған Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны менән тамамлайбыҙ. (40 слайд)

Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны. (41 слайд)
Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙҙәре. Фәрит Иҙрисов музыкаһы.

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.
ҡушымта:
Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыма дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Башҡортостан, һин хөрмәтле данлы ил,
Еңеү яулап алға барабыҙ.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.
ҡушымта:
Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Тыуған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫНА ЛИНГВОКУЛЬТУРОЛОГИК АНАЛИЗ

Әбхәлимова Зилә Салауат ҡыҙы,
Күмертау ҡалаһы, Республика политехник лицей-интернаты

Тема. Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһына лингвокультурологик анализ.

Маҡсат.

1) “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;

2) Поэмаға лингвокультурологик анализ яһау, тасуири уҡыу күнекмәләре өҫтөндә эшләү;

3) Р. Бикбаев ижадының әһәмиәтен төшөндөрөү, аңлатыу уҡыусыларҙың иғтибарын образлы фекерләү ҡеүәһен, яҙыу һәм һөйләү телмәр мәҙәниәтен, ижади һәләтен үҫтереү; тыуған яҡҡа, әҙәп-әхлаҡ, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. Р. Бикбаевтың китаптары, портреты, «Лингвокультурологик һүҙлек», аңлатмалы һүҙлек, мультимедиа проекторы.

Методик алымдар: лекция, әңгәмәләшеү, уҡыусыларҙың сығышы, әҙәби текст өҫтөндә эш.

Ойоштороу формалары: фронталь (уҡытыусы лекцияһы, аңғәмәләшеү), төркөмдә эш (тексты анализлау), индивидуаль (проблемалы һорау, теслау).

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

Эй, ғәмһеҙлек! Ҡылған ҡылыҡтарың
Тетрәтерлек хатта йәнһеҙҙе.
Йылғаларҙа үлгән балыҡ булып,
Ағып ҡына китмәй ғәмһеҙлек.

Р. Бикбаев "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ"

II. Дәрестең маҡсаты менән таныштырыу.

– Уҡыусылар, дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Рауил Бикбаевтың "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ" поэмаһын лингвокульторологик яҡтан тикшерәсәкбеҙ. Дәрестең эпиграфына иғтибар итәйек (*Уҡыу*). Дәрес аҙағында был юлдар кемгә мөрәжәғәт ителгәнлеген асыҡларбыҙ.

III. Ә хәҙер Рауил Бикбаевтың тормош юлы буйынса тест эшләйек.

1. Рауил Бикбаев ҡайҙа тыуған?

А. Силәбе өлкәһендә В. Ырымбур өлкәһендә
Б. Һамар өлкәһендә Г. Пермь өлкәһендә

2. Рауил Бикбаев ниндәй юғары уҡыу йортон тамамлай?

А. Стәрлетамаҡ педагогия институты.
Б. Башҡорт дәүләт педагогия институты.
В. Ырымбур башҡорт педагогия техникумы.
Г. Башҡорт дәүләт университеты

3. Утыҙ йылға яҡын эшләгән урынын билдәләгеҙ.

А. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты
Б. Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһы
В. Башҡорт дәүләт университеты.
Г. Башҡорт дәүләт педагогия нституты.

4. Рауил Бикбаев нисәнсе йылда Башҡортостан яҙыусылар идараһы рәйесе итеп һайлана?

А. 1995 В. 1999
Б. 1997 Г. 1992

5. «Ағиҙел" журналында баҫылып сыҡҡан тәүге әҫәре нисек атала?

А. "Революция" В."Дала офоҡтары"
Б. "Уҡ" Г."Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ"

6. Ҡайһы шағирҙың ижадын ентекле өйрәнә ?

А. Ш. Бабич В. F. Сәләм
Б. М. Кәрим Г. Р. Ниғмәти

7. Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем ҡасан бирелә?

А. 1992. В. 2001.
Б. 1990. Г. 1995.

8. Рауил Бикбаевты "Үҙе – баҫыу, үҙе – һабансы" тип кем атаған?

А. Н. Мусин В. Р. Солтангәрәев
Б. Ә. Хәкимов Г. М. Кәрим

9. Нисәнсе йылда Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты була?

А. 1987 В. 1989
Б. 1999 Г. 1992

10. Рауил Бикбаевтың сәйәхәтнамә жанрында яҙылған китабын билдәлә.

1. «Ҡош юлы» 3. «Поющие скалы»
2. *«Сәфәрҙәрҙә сығам сәхәрҙәрҙә»* 4. «Бураҙналар»

Һүҙлек эше

Хәтфә – плющ
Монарланыу – покрываться мглой
Армыт – отрог
Һөрәм – копоть
Ыулы – ядовитый
Сәсәү – поперхнуться

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев шиғриәте – етди уйланыуҙар, ҡатмарлы кисерештәр донъяһы. Бындай шағирҙың әҫәрен уҡып, хозурлыҡ донъяһында ғына йөҙмәй, киреһенсә, борсолоулы уйҙар ҡосағына сумаһың. Беҙ һеҙҙең менән "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаһының йөкмәтеһе менән танышып үткән инек. Бөгөн беҙ поэманың лингвокультурологик сиктәрен билдәләйәсәкбеҙ.

Лингвокультурологияның предметы булып тел дә, мәҙәниәт тә тора һәм берлектә өйрәнелә. Ул халыҡ мәҙәниәтен, тарихи һәм хәҙерге көн тел факттарын рухи мәҙәниәт, туған тел аша өйрәнә. Туған тел – милли культураның нигеҙе һәм беренсе элементы. Шулай итеп, беҙ поэмала башҡорт теленә, еренә милләтенә хас һүҙҙәрҙе эҙләйәсәкбеҙ, йәки лингвокультурологик сиктәрҙе билдәләйәсәкбеҙ.

"Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаһының культурологик лексика түбәндәгесә бүлеп ҡарарға мөмкин.

1. Башҡорт халыҡ ижадына ҡараған юлдар.

2. Мифологияға ҡараған һүҙҙәр (ҡот).
3. Тыуым-үлемгә ҡараған һүҙҙәр.
4. Фразеологизмдар.
5. Яңғыҙлыҡ исемдәр.

Тәүҙә әҫәрҙең жанрын билдәләйек.

Уҡыусы. **“**Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы лиро-эпик поэма тип уйлайым.

Уҡытыусы. Эйе, дөрөҫ. Хәҙер яуабыңды иҫбатлап ҡуй.

Уҡыусы. Был поэмала теманың лирик хәл ителеше менән берлектә сюжеты ла бар. Халыҡ тарихы ла сағылыш таба.

Уҡытыусы. Эйе, дөрөҫ. Рауил Бикбаев үҙенең поэмаһын сәйәхәт формаһында алған. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Уның сәйәхәте ҡалған сәйәхәттәр менән нимәһе менән айырыла?

Уҡыусы. Сәйәхәт ваҡытында бик күп яңылыҡтар менән танышаһың, бөтә урындарҙы күрә алаһың һәм фекерҙәреңде халыҡҡа еткерә алаһың. Сәйәхәт һүҙе ишеткәс тә ниндәйҙер шатлыҡ кисерәһең. Йөҙ тапҡыр ишеткәнсе, бер тапҡыр барып күр, тиҙәр халыҡта. Ләкин Рауил Бикбаевтың сәйәхәте башҡа сәйәхәттәрҙән айырыла, сөнки был сәйәхәттән һуң, киреһенсә, күңелгә нисектер моңһоу булып китә. Автор Ағиҙел буйлап сәйәхәттә йөрөй һәм бара торған күренештәргә битараф булып ҡала алмай, уға үҙенең эске мөнәсәбәтен белдерә.

Уҡытыусы. Эйе, яҙыусылар ниндәйҙер мәсьәләне халыҡ күңеленә еткерер өсөн сәйәхәт жанрына элек-электән мөрәжәғәт иткәндәр. Мәҫәлән, рус яҙыусыһы А.Н. Радищев “Мәскәүҙән Петербургҡа сәйәхәт” әҫәрендә лә был сәйәхәттән бер ниндәй ҙә шатлыҡ кисермәй.

Уҡыусы. Эйе, был әҫәрендә Радищев Рәсәй халҡының ниндәй бөлгөнлөктә йәшәүен, был бөлгөнлөктән сығыу юлдарын күрһәтергә тырышҡан. Рәсәйҙә закон бар, ләкин был законды бер кем дә үтәмәй.

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев ни өсөн сәйәхәт өсөн Ағиҙел йылғаһын һайлаған?

Уҡыусы. Ағиҙел йылғаһы башҡорт халҡы кеүек үк күпте күргән күпте кисергән. Рәми Ғарипов һүҙҙәре менән әйткәндә:

“Урал күкрәгендә йөрәк кеүек
Башҡортостан – тыуған илкәйем.
Шул йөрәктең киң тамыры булып
Күкһелләнә Ағиҙелкәйем”

Ағиҙел – Башҡортостандың ҡан тамыры кеүек. Ләкин ошо ҡан тамыры ағыуланған.

Уҡытыусы. Поэманың исеме үк оло мәғәнәгә эйә. Һыу буйында һыуһыныңды ҡандыра алмау... Унда үҙәктә тәбиғәт һәм рух экологияһы, шуға бәйләнештә халыҡ һәм шәхес мәсьәләләре тора. Тәбиғәт байлығы менән һарауһыҙ ҡыланыу тәбиғәт йәмен генә бөтөрөп, тау-урмандарын яланғасландырып, йылға-күлдәрен һайыҡтырып йә киптереп кенә ҡалмай, әҙәм күңелдәрен дә ҡорғаҡһыта, үҙҙәрен ғәмһеҙ бәндәләргә әйләндерә - шулары өсөн нығыраҡ борсола шағир. Ошондай күңелһеҙ күренештәрҙе тасуирлауҙа ниндәй һүҙҙәрҙе күберәк ҡулланған.

Уҡыусы. Күңел, ҡот, үлем, ғәмһеҙлек кеүек һүҙҙәрҙе ҡулланған.

Уҡытыусы. Эйе. Дөрөҫ. Ә хәҙер һәр береһен айырым ҡарап үтәйек. Нимә ул күңел?

Уҡыусы. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлегендә ошолай итеп бирелә. Күңел – кешенең эске рухи донъяһы, хис-тойғоһо уй-фекере.

Поэмала ошо юлдар бар:

Бер кинәнеп ошо киңлектәргә
Ҡарар саҡта күңел һыҡтаны.

күңел һыҡтаны – фразеологизм.

Эйе, сәйәхәттән алған тәьҫораттарҙан тик күңел һыҡтай, илай.

Уҡытыусы. Автор шунан һорау менән менән мөрәжәғәт итә:

Сафланырмы тағы был күңел,
Сафланырмы тағы был күңел?

Был юлдар ике тапҡыр ҡабатланған, сөнки шағир бында кешеләргә оран һала. Лирик мөрәжәғәт поэманың моңһоу интонацияһына тап килә. Шулай уҡ поэмала күңел һүҙенең синонимы – йән һүҙе лә йыш ҡабатлана, йән һүҙе булған юлдарҙы тикшереп үтәйек.

Уҡыусы. Ошо юлдар:

Күпме төрлө ағыу-кислоталар –
Ағиҙелгә нимә тулмаған!?
Ул ағыуҙар
Һүҙҙә булһа булһын,
Телдә булһын,
Йәндә булмаһын
Күңелебеҙ олатайҙарҙан ҡалған
Киләсәктең ҡарашында янған
Инсафлы уй менән нурланһын.

Шулай итеп, шағир Ағиҙел менән кеше күңелен, йәнен сағыштыра. Ағиҙел ағыуланған һайын кешеләрҙең дә йәне ағыулана бара кеүек.

Йәнен биргән илгә Урал батыр,
Ҡобайырға ундай ир лайыҡ.

Урал батыр кеүек беҙҙе лә илебеҙҙе, еребеҙҙе һаҡларға саҡыра. Йәнен биргән – фразеологизм, үлгән мәғәнәһендә.

Уҡытыусы. **“**Ҡот” һүҙе лә йыш осрай поэмала. Нимә була ул ҡот? Ул һүҙҙе ҡасан, ҡайҙа ишеткәнегеҙ бар?

Уҡыусы. Аңлатмалы һүҙлектә ошолай тип бирелә. Ҡот – 1. Тереклек биргән нәмә; йән. 2. Күңелгә кинәнес, йәм биргән, бәхет килтергән нәмә. 3. Уңыш, бәхет килтергән нәмә. 4. Ҡурҡҡан кешене имләр өсөн ҡурғаштан ҡойоп, муйынға, түшкә таҡҡан нәмә.

Яңы әйбер алғанда ҡотло булһын, тип теләк теләйҙәр, йәғни рәхәтләнеп, иҫән-һау кейергә булһын тиҙәр.

Уҡытыусы. Тимәк, ҡот кешенең эске донъяһы, күңел тыныслығы менән бәйле. Берәй нәмәнән ныҡ ҡурҡыу, үҙеңде кәмһетеү, оялыу тойғоһо, хәүефләнеү, икеләнеү, шикләнеү, өмөт һүнеү һәм башҡа хистәр күңел ҡотон осора. Кеше йәшәүҙән йәм тапмаһа, күңел бушлығы барлыҡҡа килһә, сиргә һабыша. Кешенең, йорттоң ҡото була. Кешенең ҡото оса, нимәнәндер ҡурҡһа беҙҙә ҡот ҡойоу, йәғни ырымлау, имләү йолаһы бар. Шағир әҫәрҙә ҡот һүҙен ниндәй мәғәнәлә ҡулланған?

Уҡыусы. Йорттоң ҡото китеү- яман,
Рухтың ҡото китеү- яман.
Ҡот осоп йәшәү сиренән
Ҡотола алмайбыҙ һаман.

Шулай итеп, автор кешенең, йорттоң ғына ҡото түгел, ә рухтың ҡото барлығын, һәм халыҡтан рух ҡото китеүен яман йола, тип иҫкәртә. Заманалар үҙгәрҙе. Берәүҙәр байый, икенселәре фәкирләнә, берәүҙәр асыҡтан-асыҡ илде, дәүләтте талай, икенселәре ауыҙҙарын асып ҡарап тора, береһе бөлә, икенселәре айҡаша-һуғыша үргә менә.

Тәбиғи байлыҡтарҙың һаман таланыуы, ситкә ағылыуы, һауаларҙың ағыуланыуы, илебеҙҙәге ҡоттоң-бәрәкәттең китеүе дауам итә.

Уҡытыусы. Эйе, ҡасан ысын хаҡлыҡ, ғәҙеллек тантана итер, ҡасан матур, иркен тормоштар килер, кешеләр ысын бәхеткә тейенер- әле һаман да әйтеүе ҡыйын. Поэма авторын был мәсьәләләр өҙлөкһеҙ уйландыра. Тау, урман, йылғаларҙың ер йөҙөнән юҡ булыуын да автор әсенеп яҙа. Әйҙәгеҙ, шул юлдарҙы табайыҡ.

Уҡыусы. Беҙҙең генә китеү китеүме ни,
Ер йөҙөнән тауҙар китәләр. (тауҙар китәләр – йәнләндереү)
Һуңғы тамсы ҡанын илгә биреп,
Ауған һалдат кеүек тау шиңә. (Ауған һалдат кеүек тау шиңә – сағыштырыу.)

Ошо юлдар менән был кешелеккә тау һынлы тауҙы юҡ итеү бер ни түгеллеген аңлата. Ысынлап та тәбиғәт ҡомартҡыһы булған Шаһтауҙы төҙөләш материалдары, заводҡа сырье алыу маҡсатында емереү һаман дауам итә. Тауҙарҙың үлемен кеше үлеме менән сағыштыра.

Уҡытыусы. Ә хәҙер халыҡ ижадына ҡараған юлдарҙы эҙләп ҡарайыҡ һәм автор ниндәй маҡсат менән ҡулланыуын асыҡлайыҡ.

Уҡыусы. Шағир халыҡ ижадынан килгән йыр, ҡобайыр, әйтештәрҙе файҙалана. Мәҫәлән, ҡобайыр әйтеше:

Бер тигәс тә ни яман?
Берҙән-берең – Ергенән
Емерелһә, шул яман!
Ике тигәс тә ни яман?
Илгә терәк кәрәктә,
Ике ҡулың ҡаушарып
Ҡарап торһаң шул яман!..

Поэманың стилен төрлөләндерә, тәьҫир көсөн үтемлерәк итеп ебәрә.

Уҡытыусы. Яңы тарихи шарттарҙа айырата борсоғаны – тыуған ил-йортоңдоң яҙмышы, тыуыр көнө. Быға ғәжәпләнәһе түгел. Сөнки был, барыһынан элек, ер мәсьәләһенә бәйле. Ошо урында шағирҙың ҡобайыр стиленә күсеүе – тарихи боролоштоң етдилегенә ишаралап ҡына ҡалмайынса, ереңде күкрәгең менән һаҡлай торған мәл, иң яуаплы мәл етеүен дә иҫкәртеүе ул.

Уҡыусы. Баланы бит
Ни тип тирбәлтәһең – шул була.
Был юлдар "Бала күңеле аҡ ҡағыҙ, ни яҙһаң шул була", тигән халыҡ мәҡәлен хәтерләтә.
Ағиҙелдең көнө – илдең көнө,
Ағиҙелдең йөҙө – ил йөҙө, – тигән юлдар ҙа мәҡәлде хәтерләтә: "Ер- һыуҙарың ниндәй, ил- йорттарың да шундай".

Уҡытыусы. Уҡыусылар, поэмала автор бер нисә тапҡыр “ғәмһеҙлек” һүҙен ҡабатлай. Нимә була ул ғәмһеҙлек? Тамырын, синонимын билдәләгеҙ.

Уҡыусы. "Ғәмһеҙлек" һүҙенә "битарафлыҡ" һүҙе тап килә, йәғни кемгәлер, нимәгәлер битараф тигәнде аңлата. Тамыры – ғәм.

Уҡытыусы. Эйе, дөрөҫ билдәләнегеҙ. Һуңғы ваҡытта ҡайһыһы күберәк ҡулланыла, “ғәм” һүҙеме, ғәмһеҙлекме? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

Уҡыусы. “Ғәмһеҙлек” һүҙе йышыраҡ ҡулланыла. Ғәмде ғәмһеҙлек алмаштыра бара. Кеше үҙйәшәйеше өсөн төп шарт булған Тәбиғәткә, балаһының киләсәгенә, теленә, тәрбиәгә, хатта үҙенең һаулығына ла ғәмһеҙ ҡарай. Балаһы йәшәйәсәк хаҡында бөтөнләй уйламаусылар, көн хәстәрлеге менән генә йәшәүселәр артҡандан-арта бара. Эсәр һыуҙар бысрана, тирә-яҡ мөхит төҫһеҙләнә, ер аҫты байлығы кәрәк-кәрәкмәгәнгә тәләфләнә, уңдырышлы ҡара тупраҡ ҡатламы йоҡара, күңелдәргә наҙ бөркөр сәскәләр, һайрар ҡоштар кәмей…

Уҡытыусы. Эйе, бик дөрөҫ билдәләнегеҙ. Хәҙер эпиграфҡа тағы бер тапҡыр иғтибар итәйек.

Эй, ғәмһеҙлек! Ҡылған ҡылыҡтарың
Тетрәтерлек хатта йәнһеҙҙе.
Йылғаларҙа үлгән балыҡ булып,
Ағып ҡына китмәй ғәмһеҙлек.

Эйе, ғәмһеҙлек арҡаһында Ағиҙелебеҙ менән бергә күңелебеҙ ҙә бысрана икән. Рауил Бикбаевтың теләге буйынса ғәмһеҙлек ниңә үлгән балыҡ кеүек ағып ҡына китмәй икән? Ғәмһеҙлеккә сик ҡуйып буламы? Әлбиттә, була. Ғәм менән Ғәмһеҙлек яратыуға бәйле. Ғәмле булыу – тормошто, йәшәүҙе, эшеңде, халҡыңды, теленде, милләтеңде яратыу ул. Яратыу ғәм тойғоһо уята, яратмау ғәмһеҙлек, битарафлыҡ тыуҙыра. Уҡыусылар, әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә, тәбиғәткә, телгә ҡарата ғәмле булайыҡ.

Беҙ һеҙҙең менән “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһының лингвокультурологик яҡтан тикшереп сыҡтыҡ. Өйгә эш булып поэмала бирелгән бөтә яңғыҙлыҡ исмдәрҙе асыҡлап килегеҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫ

Исхаҡова Ә.Ә.,
Благовар районы Языков урта белем биреү мәктәбе

Тема: Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Рауил Бикбаевтың ижады

Маҡсат:

1) уҡыусыларҙы Рауил Бикбаевтың биографияһы, ижады менән таныштырыу; алынған мәғлүмәттәрен барлап, системаға һалыу;

2) фекерләү ҡеүәһен, ижади һәләттәрен, телмәрен үҫтереү;

3) матур әҙәбиәткә һөйөү, китап уҡырға ынтылыш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, китаптарынан күргәҙмә, компьютер, проектор, экран.

I. Ойоштороу моменты.

– һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ.

II. Дәрестең темаһы һәм маҡсаты менән таныштырыу.

Бөгөнгө көн тураһында әңгәмә ойоштороу.

– Бөгөн беҙ Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары темаһын дауам итеп С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың ижады менән танышырбыҙ. Дәрестең эпиграфы итеп мин ошо юлдарҙы алдым (слайд)

– Дәфтәрҙәрегеҙҙе асып бөгөнгө числоны һәм дәрестең темаһын яҙып ҡуяйыҡ.

III. Яңы тема өҫтөндә эш.

Уҡыусыларҙы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштырыу.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙер Переволоцкий) районында Соран йылғаһы буйындағы Юғары Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. (картанан тыуған ерен табып күрһәтеү)

Башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәғрифәтенә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Агиш, ауылдашы Ғабдулла Амантай, нәҫелдәштәре Сәғит Мерәсов, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ арҙаҡлы шәхестәрҙе биргән Туҡсоран ерендә Рауил бәләкәстән йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә. 1953-1956 йылдарҙа Ҡаҙағстан менән Ырымбур сигендәге Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты уңышлы тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда «Хәҙерге башҡорт поэмаһы» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай.

Рауил Бикбаевтың ныҡлабыраҡ яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда «Ағиҙел» журналында «Вокзал» исемле тәүге поэмаһыбаҫылып сыҡты. 1964 йылда «Дала офоҡтары» тигән беренсе китабы донъя күрҙе. Р. Бикбаев хәҙер тиҫтәнән артыҡ китап авторы. Уға «Автобиография» тигән китабы өсөн 1970 йылда республика комсомолының F. Сәләм исемендәге премияһы бирелде.

Рауил Бикбаев шағирлыҡ эшен әҙәбиәт ғилеме менән тығыҙ бәйләп алып бара. Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында оҙаҡ йылдар әҙәбиәт секторында өлкән ғилми сотрудник булып эшләй.

Р. Бикбаев тәржемә өлкәһендә лә актив эшләй, матбуғатта публицистик мәҡәләләр менән йыш сығыш яһай.

1989 йылда Р. Бикбаевҡа «Яҙмышым» китабы һәм «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы өсөн республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелде.

1993 йылда ул Халыҡ шағиры исеменә лайыҡ була.

1999 йылда Рауил Бикбаевҡа Өфө ҡалаһының Почетлы гражданины исеме бирелә. (слайд)

Рауил Бикбаевтың биографияһын дәфтәрҙәрҙә таблицаға яҙыу.

– Ә хәҙер “ Яңғыҙлыҡ” шиғыры менән танышып үтәйек. Һүҙлек эше (слайд).

- шиғырҙы уҡытыусының өлгөлө уҡыуы
- үҙ аллы уҡыу
- тасуири уҡыу өҫтөндә эш
- тәржемә өҫтөндә эш
- бергәләп уҡыу

Һорауҙарға яуап биреү

- шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара?
- шағирҙың яңғыҙ булмауын нисек аңлайһығыҙ?
- һуңғы икә юлды уҡып аңлатабыҙ.

– Ә хәҙер дәрестең эпиграфына әйләнеп ҡайтайыҡ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, И. Кинйәбулатов Рауил Бикбаевты кемдең улы тип атай, ни өсөн?

– Ысынлап та, бар булмышы менән иле, халҡы, заманы өсөн янып-көйгән шағир бөгөнгө көндә лә илһамланып ижад итә, йәмғәт эштәрендә ҡайнай, йәш ҡәләмдәштәренә ярҙам итә. Шулай итеп, И. Кинйәбулатов яҙғанса, Р. Бикбаев һис тә яңғыҙ түгел, халҡының улы, улар өсөн ижад итә.

IV.Грамматик тема өҫтөндә эш.

- Хәҙер Р. Бикбаевтың “Ниңә беҙҙе юлдар саҡыра?” юлъяҙмаһынан бер нисә һөйләм яҙып үтәйек һәм ябай һөйләмдәргә синтаксик анализ яһайыҡ. (таҡтала эшләү)

V. Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

Шулай итеп, уҡыусылар, бөгөнгө дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың биографияһы, ижады менән танышып үттек. Хәҙер иҫкә төшөрөп һорауҙарға яуап бирәйек:

– Рауил Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
– Мәктәптән һуң ҡайҙа белем ала?
– Рауил Бикбаевтың ижад емештәре ниндәй наградалар менән баһаланған?
– Шағирҙың тәүге поэмаһы нисәнсе йылда баҫылып сыҡҡан?
– 1999 йылда уның тормошона бәйле ниндәй мөһим ваҡиға була?
– Ғ. Сәләм премияһы ниндәй китабы өсөн бирелә?
– Рауил Бикбаевҡа быйыл нисә йәш була?
– Үҙегеҙгә ниндәй яңылыҡтар алдығыҙ?
– Уның ижады күңелегеҙҙә ниндәй тойғолар ҡалдырҙы?

VI. Баһалау.

VII. Өй эше. Рауил Бикбаевтың берәй шиғырын тасуири итеп уҡырға әҙерләнеп килергә.

ЙӘНШИШМӘБЕҘ ОШО ТУПРАҠТА

Хәйбуллина Зилә Хәкимйән ҡыҙы,
Бөрйән районы Байназар урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу аша уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү, һүрәтләү-тел сараларын асыҡлау; уҡыусыларҙа тыуған еребеҙгә, илебеҙгә һөйөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Башҡортостан һәм Бөрйәндең картаһы, Рауил Бикбаевтың портреты, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылына арналған эмблема, плакат ”Ил ҡәҙерен белмәгән – башын юғалтҡан, Ер ҡәҙерен белмәгән – ашын юғалтҡан”.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу моменты.
II. Дәрес темаһы өҫтөндә эш.

Уҡыусылар, беҙ бөгөн Рауил Бикбаевтың “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта” шиғыры менән танышасаҡбыҙ. Уның йөкмәткеһен үҙләштереп, тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтте һаҡлау тураһында һөйләшәсәкбеҙ. *(Рауил Бикбаевтың портреты, китаптары интерактив таҡтала күрһәтелә*.) Шиғыр шулай уҡ халҡыбыҙ, киләсәк хаҡында тәрәнерәк фекер йөрөтөргә, ғәмһеҙ йәшәмәҫкә өндәүе менән дә актуаль, шуға күрә һеҙ ҙә әҫәрҙе яратып ҡабул итерһегеҙ, тип уйлайым.

III. Уҡытыусы шиғырҙы тасуири уҡый. Йөкмәткеһе буйынса әңгәмә.

- Тыуған ер,уның тарихы тураһында шағир нимә ти?
- Беҙ йәшәгән изге еребеҙҙе һаҡлап, ата-бабаларыбыҙ нисек көрәшкән?

(Улар халҡыбыҙ үҙ ерендә үҙе хужа булып бәхетле йәшәһен тип, азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелгән. Ялҡынлы шағир Бабичтың һәм бөтә донъяға билдәле ғалим Вәлидиҙең исемдәре телгә алына.)

- Ошо шәхестәребеҙҙән башҡа тағы кемдәрҙе атай алаһығыҙ?

- Урал ҡоросонан ҡойған балта

Боғаҙына саба Уралдың, – тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтәләр.

Шағир бер нисә урында колониаль баҙар балтаһы һүҙен ҡуллана. Был һүҙҙе нисек аңлайһығыҙ?

(СССР тарҡалғас, Рәсәй Федерацияһы төҙөлдө һәм ул баҙар экономикаһына күсте. Илдең байлығын кем ҡулына күберәк төшөрә, шулар байып, ә ярлылар аптырашып ҡалдылар).

– Ер-һыуҙарын һатҡан кешегә шағирҙың ҡарашы нисек? Шул юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ:

Рәхиме юҡ баҙар балтаһының,
Тик ир булып ҡалһын ир заты.
Ерен һатҡан йәнде ере йотһон
Ерен һатҡан йәнде ер баҫһын.

– “Йәншишмә” һүҙен нисек аңлайһығыҙ? Ни өсөн шағир “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”, ти?

(Беҙ ошо ерҙә тыуып,уның һыуын эсеп, һауаһын һулап, көс алғанбыҙ икән, тамырыбыҙ ошо ергә береккән. Беҙ уны һаҡларға, киләсәк быуындарға еткерергә тейешбеҙ.)

- Уҡыусылар, шиғырҙа автор ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланған?

Даръя булып аҡҡан ер,
Алтын ҡуйынында батырҙарҙың
Изге һөйәктәре яткан ер.
Күкрәккәйе тулы ут ҡына
Барыһы ла ерҙең хәтерендә,
Яралары һаман һулҡылдай.

– Уҡыусылар, быйылғы йыл нимә йылы?

Хөкүмәтебеҙ 2013 йылды Тирә-яҡты һаҡлау йылы тип иғлан итте. (Республика картаһы күрһәтелә, эмблема тураһында һөйләшеү).

– Беҙҙең районда ер-һыуҙар таҙамы, тәбиғәт ярлыланмаймы? Бөрйән – халҡыбыҙҙың сал тарихын һаҡлаған изге ҡомарткылар иле: данлыҡлы Шүлгән мәмерйәһе, Йылҡысыҡҡан күле, Бабсаҡ бей ҡәбере һ.б. Әммә һуңғы йылдарҙа кешеләр тәбиғәтте һаҡлауға битараф ҡалалар. Быға ниндәй миҫалдар әйтерһегеҙ? Ерһеҙ-һыуһыҙ ҡалһа, халыҡ ни эшләр һуң? (Урмандарҙы ҡырҡып, таҙартмай кителәр, йылға буйҙарына сүп ташлайҙар һ.б).

IV. Ижади эш.

Хәҙер тыуған тәбиғәтте һаҡларға саҡырып төркөмдәрҙә ижади эш башҡарабыҙ.

I төркөм	II төркөм	III төркөм
шиғыр	мәҡәлә	кроссворд

Һәр төркөм үҙ эшенә презентация яһай.

V. Йомғаҡлау. Шулай итеп, шиғыр беҙҙе тәбиғәт, халҡыбыҙ яҙмышы хаҡында уйларға, ғәмһеҙ йәшәмәҫкә саҡыра. Уҡыусылар, беҙ ҙә тәбиғәтте бысратмайыҡ, уны һаҡлайыҡ!

VI. Өйгә эш: өҙөк ятлау.

РАУИЛ БИКБАЕВ “ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ”

Шәмсетдинова Гөлдәр Тимерхан ҡыҙы,
Өфө районы Дмитриевка урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Уҡытыусы эшмәкәрлегенең маҡсаты: уҡыусыларҙы башҡорт телендә аралашырға, белем алырға, үтелгәндәргә таянып тыуған ер, тәбиғәт тураһында һөйләшеү, уны яҡлау, һаҡлау кәрәклеген уҡыусыларға төшөндөрөү; Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу; уҡыусыларҙың интеллектуаль шәхес булып үҫеүен тәьмин итеү.

Дәрес тибы: бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе.

Көтөлгән шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре:

Шәхси үҫеш кимәле: белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу; ижади-эҙләнеү эше менән шөғөлләнеү; телмәр мәҙәниәтен камиллаштырырыуға ынтылышты үҫтереү.

Метапредмет кимәле: төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү, алған белемде системалаштырыу; башҡаларҙы тыңлау, үҙ фекереңде яҡлай белеү; башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында белемде тулыландырыу; үҙ-үҙеңә баһа биреүҙе тормошҡа ашырыуҙы дауам итеү.

Предметты үҙләштереү кимәле**:** тасуири, етеҙ, шыма уҡыуға өлгәшеү; текст, китап менән эш итеү алымдарын өйрәнеүҙе дауам итеү, кәрәкле материал туплау; бәйләнешле телмәр үҫтереү; үтелгән орфограмма ҡағиҙәләрен ҡабатлау.

Тема	Кластан тыш уҡыу. Рауил Бикбаев “Тәбиғәттең теле асылған саҡ”	
Маҡсат	Р. Бикбаевтың ижады менән ҡыҫҡаса таныштырыу. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Һөйләм телмәрен, фекерләү һәләтен, анализлау, синтезлау күнекмәләрен үҫтереү. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттары тәрбиәләү. Тыуған ергә мөхәббәт тәрбиәләү; тыуған ерҙең ҡәҙерен белергә, уның менән ғорурлана белеү хистәрен тәрбиәләү.	
Планлаштырылған һөҙөмтә	Шиғырҙың йөкмәткеһен аңлау, үҙ теленде һәм иленде хөрмәт итеү, аралашыуҙы мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу	
Предмет-ара бәйләнеш	Рус теле, Башҡортостан географияһы	
Ресурстар: - төп - өҫтәмә	Толомбаев Х.А. 4-се класс өсөн дәреслек; компьютер, экран, презентация, Р.Бикбаевтың портреты, “Тәбиғәттең теле асылған саҡ “ шиғыры.	
Эште ойоштороу төрҙәре	Фронталь, индивидуаль, парлап эшләү.	
Үткәреү технологияһы	һәр этаптың өйрәтеү һәм үҫтереү биремдәре. Уҡытыусы эшмәкәрлеге.	Уҡыусылар эшмәкәрлеге
Iэтап. Ойоштороу. Маҡсат: белем алыуға мотивлаштырыу.	I этап. Ойоштороу. 2-се слайд а) - Хәйерле көн, Гөлдәр апай! - Хәйерле көн, Әнисә! - һаумы, Фәфүр, Катерина! - һаумы, Зилә, Нәфисә! б) һәр әҙәби уҡыу дәресендә ҡуллана торған ҡағиҙәләрҙе иҫкә төшөрөгөҙ.	I этап. Ойоштороу. 1.Тулы һөйләмдәр менән дөрөҫ итеп яуап бир! 2. Иғтибар менән тыңла! 3. Кеше фекерен ҡабатлама, үҙ фекереңде әйт**!**
II этап. Актуалләштереү Маҡсат: алдағы дәрестә алған белемдәрҙе иҫкә	II этап. Актуалләштереү. һ. Дәүләтшинаның «Яҙғы тантана хикәйәһен уҡытыусы тасуири уҡый. (эстәлеген иҫкә төшөрөү).	II этап. Актуалләштереү. - Беҙ был хикәйәне үткән дәрестә уҡығайныҡ. (Яҙ тураһында шиғырҙарҙы иҫкә төшөрөү). (Уҡыусылар шиғырҙар һөйләгәндә слайдта Башҡортостан

төшөрөү		тәбиғәте тураһында рәсемдәр күрһәтелә). 3-8-се слайдтар. - Тасуири уҡыу күнегеүҙәре. *(Шәхси, рефлексив, универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу). Үҙбаһа.*
III этап. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.	III этап. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу. 1. - Балалар, һеҙ тыуған ил тигән төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ? - Әйтегеҙ әле, тыуған ил ҡайҙан башлана? “Фекерҙәр кәрзине” алымы -Уҡыусылар, тыуған ил темаһына ҡараған һүҙҙәрҙе ошо кәрзингә йыяйыҡ. 2. - Һеҙгә атай-әсәйегеҙ, туғандарығыҙ ҡәҙерлеме? 3. - Шулай булғас, тыуған илебеҙ, еребеҙ ҙә ҡәҙерле, сөнки беҙ шунда тыуғанбыҙ, беҙҙең ата-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ ҙә шунда тыуған. Шуға күрә беҙ, тыуған ерҙең ышаныслы улдары, ҡыҙҙары булып үҫергә тейеш. 4. - Халҡыбыҙҙың данлыҡлы улдары күп. Һеҙ арҙаҡлы шәхестәрҙән тағы ла кемдәрҙе беләһегеҙ? Шуларҙың береһе – Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа быйыл 75 йәш.	III этап. 1. – Дөрөҫ, балалар. Тыуған ил – ул тыуған өй, тыуған мәктәп, тыуған ҡала, һин беренсе тәпәй баҫып атлап киткән ер ул. Бына шунан башлана тыуған ил. “Фекерҙәр кәрзине” алымы Таҡтаға кәрзин рәсеме эленә. Һәр бер уҡыусы сығып был темаға ярашлы һүҙҙәр яҙа. 2. Уҡыусыларҙың ике-өсө туғандары тураһында һөйләй. 3. Үтелгәндәргә таянып уҡыусылар менән әңгәмәләшеү. 4. Бер уҡыусы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштыра. (10-11-се слайд)
	- Ә хәҙер экрандағы танышасаҡ шиғырҙың исеменә иғтибар итегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ: ул нимә тураһында икән? Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы.	Был шиғыр тыуған ер, тәбиғәт тураһында *(Танып-белеү универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).*
IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. Маҡсат:таныш булмаған яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен иҫтә ҡалдырыу.	IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. Шыйыҡ-жидкий, һығыу-выжимать, һарылып- прильнув, хаҡ- дөрөҫлөк Ошо һүҙҙәрҙе һеҙ телмәрегеҙҙә ҡулланаһығыҙмы? Дәфтәрҙәрҙә эш. 1)Число,теманы яҙыу. 2)Ауыр орфограммалы һүҙҙәрҙе табыу.	IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. 1. Һүҙҙәрҙе уҡыу. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен тормош менән бәйләп асыҡлау. *(Танып-белеү универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).*
Физминут	Физминут Беҙҙең Башҡортостанда бына ошондай тауҙар, бына ошондай урмандар, бына ошондай йылғалар, бына ошондай ҡырҙар, ҡырҙарында сәскәләр - барыһы ла матурҙар.	Физминут
V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу. Маҡсат: уҡыу күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалаштырыу.	V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу.	V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу. Балалар гөжләп уҡыйҙар. Айырым балаларҙан уҡытыу. Шиғырҙың иң оҡшаған ерен генә уҡыу.
VI этап. Әҫәрҙе аңлауҙарын тикшереү. Маҡсат: телмәр күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалаштырыу.	VII этап. Әҫәргә анализ яһау. - Тәбиғәттә япраҡ яҙын үҙен нисек һиҙә? Шиғырҙан ошо юлдарҙы ҡабат уҡып күрһәтегеҙ.	VII этап. Әҫәргә анализ яһау. - Автор, лирик герой.
	Теле асыла, сабый япраҡ, ярһып шыбырлай, тел осо, тел осонда талпына, ялғанға юлыҡмам һүҙбәйләнештәрен нисек аңлайһығыҙ?	- Тыуған яҡтың яҙғы тәбиғәтенең һәр япрағы, ташы кешенең күңеленә яҡын. Ошо матурлыҡты күрә белеп, беҙ тыуған еребеҙҙе, тәбиғәтебеҙҙе һаҡларға тейешбеҙ. (һуңғы юлдарға иғтибар итеү).

		һәр кемгә үҙ тыуған яғы,тәбиғәте яҡын, ғәзиз. Өйҙә әҙерләп килгән мәҡәлдәрен уҡып ишеттерәләр. (15-16-сы слайдтар) Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ер артыҡ. Үҙ илем-алтын бишек. Иленән айырылған-ҡанаты ҡайырылған. Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ. Илһеҙ кеше - йырһыҙ һандуғас. *(Коммуникатив, ижади эҙләнеү, танып-белеү универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).*
	-Уҡыусылар, теләүселәргә презентация эшләп килергә ҡушылғайны. Хәҙер Уралдың “Башҡортостан – тыуған ерем” тип исемләнгән презентацияһын ҡарарбыҙ.	1) Презентация ҡарау. 2) Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү. (17-се слайд) Башҡортостан! Һин икмәкле тупраҡ, Йәшел урман,болон, тау, дала. Йәнһеҙгә – йән, Йәмһеҙгә - йәм биргән, Һин ут һәм һыу,һауа һәм дауа. (Н.Нәжми) *(Предмет-ара бәйләнеш)* *(Коммуникативуниверсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).*
Йомғаҡлау	Шиғырҙан өҙөктө хор менән уҡыу. Күсереп яҙыу. (18-се слайд) Тыуған илдә- барыбыҙ бер туған, Бик ҡәҙерле беҙгә ул шуға. Тыуған ил ул була бер генә, Тыуған илдең ҡәҙерен бел генә. (З. Туфайлова)	Мин нимә белдем? Нисек белдем?
Өйгә эш биреү.	Өйгә эш биреү.	Үҙбаһа. Кемдәр был дәрестә “5”гә яуап бирҙем тип уйлай? Кем бер аҙ тырышырға кәрәк тип уйлай?
	- Һеҙ өйҙә ниндәй эш эшләрһегеҙ?	Өйгә эш биреү. 1. Шиғырҙы тасуири уҡырға. 2. “Тыуған еремдең тәбиғәте” тигән темаға проект эше башларға мөмкин. 3. Тыуған яҡ тураһында һүрәт төшөрөргә мөмкин. 4. Башҡа шағирҙарҙың тыуған яҡ, тәбиғәт тураһында шиғырҙары бармы икән? Шуларҙы табып алып килергә. *(Рефлексив, шәхси универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).*

РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫНА АРНАЛҒАН ӘҘӘБИ КИСӘ

Хәкимйәнова Лилиә Әхмир ҡыҙы,
Әфә районы Авдон урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Сараның маҡсаты:

1. Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижадына байҡау, уҡыусыларҙа уға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тойғоһо уятыу.

2. Балаларҙың ижади әүҙемлеген үҫтереү.

Йыһазлау: шағирҙың портреты, китаптар күргәҙмәһе, интерактив таҡта. Кисә барышында унда шағирҙың фотоһүрәттәре күрһәтелә.

1-се уҡыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында донъяға килгән. Күрше Ғәбдрәфиҡ ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған. Аҙаҡ Аҡбулаҡ педучилищеһында белем алғас, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филология факультетында уҡый.

2-се уҡыусы.
Сабый саҡта аунағанда һиндә,
Хәтфә далам, ниндәй инең һин!
Ул сағыңды ҡабат күрә алмам,
Төштәремә генә инерһең.
Һис юғында, төштәремә инегеҙ,
Ләм күммәгән йылы ҡырсындар

Сумып-сумып буйламаҫлыҡ һыуҙар,
Ҡамышлы Туҡ, Соран. Ҡырсоран!
Хәтерләргә генә бары ҡалды,
Аттар көтөп, таңда ҡайтҡаным,
Ташҡын кеүек өйөрҙәргә ҡушылып,
Ҡолондарҙың кешнәп сапҡаны.

3-сө уҡыусы. Артабан Өфө Фәндәр академияһында аспирантураны тамамлап, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 1965-1995 йылдарҙа ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яҡлай.

4-се уҡыусы. Һыу шикелле аға был ғүмерҙәр,
Тынғы белмәй ваҡыт, эй, елә!
Күҙ тултырып көнгә бер баға ла
Умырзая ергә эйелә.
Ә беҙ ергә мәңге килгән төҫлө,
Мәңге тере ҡалыр, гүйә беҙ…
Аҡ теләктәр менән яныр саҡта,
Көнсөлләктән ҡара көйәбеҙ.
Ниңә ҡай саҡ зирәк аҡылдарҙы
Сикләп ҡуя күңел тарлығы?
Ел артынан йүгереп, онотабыҙ
Ерҙә яҡты үрҙәр барлығын.

5-се уҡыусы. Рауил Бикбаев 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың рәйесе булып эшләй. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. Бер нисә орден-миҙалдар лауреаты.

6-сы уҡыусы. Өтәләнеп сапма юҡҡа, шағир,
Тотам, тиеп, дандың ал ҡошон.
Илертмәһен һине буш маҡтауҙар,
Тилетмәһен залдың алҡышы.
Алҡыш тыныр. Маҡтау онотолор,
Тик күбеге һиңә тағылыр.
Ә кешеләр һаман элеккесә
Йырлар, көлөр, илар, һағыныр…

6-сы уҡыусы. Шағирҙың тәүге "Дала офоҡтары" исемле тәүге китабы 1964 йылда донъя күрә. Унда тыуып үҫкән яҡтың яландар иркенлеген, һауаларының йәмен-тәмен тойорға мөмкин. Шағир үҙе һәм тиҫтерҙәре хаҡында, ҡарт даланы, элекке сиҙәм ерҙәрҙе хәҙер иген баҫыуҙарына әйләндереүселәр хаҡында уйлана. Соранда һыуҙар ҡойонған, туғай-яландарын ҡыҙырған, бесән сабышҡан, мал баҡҡан иләҫ-миләҫ йәшлеген, тәүге мөхәббәт хистәрен иҫенә төшөрә.

1-се уҡыусы.
Мин ҡайҙарҙа ғына йөрөһәм дә,
Онота алмамдыр колхоз аттарын.
Йәшлегем бит минең юлға сыҡты
Ошо аттарыма атланып.
Мин ҡолондар менән бергә үҫтем,
Ялдарына йәбешеп, ҡосаҡлап…
Яңынан бер ҡабынһындар ине
Беҙ сабаҡтар өткән усаҡтар.
Сиҙәмдәрҙә иген беҙҙән тамған
Тир йылыһын алып тулышыр.
Ҡайнар һулышыбыҙ булып ҡалыр
Беҙ төҙөгән домна һулышы.

2-се уҡыусы.
Дала офоҡтары.
Умырзаялар уяна,
Сайҡалып ҡына елгә.
Күктә - һабан турғайҙары,
Киләләр ҡапыл телгә.
Йондоҙҙарҙы сүпләй-сүпләй,
Төн китеп барҙы ары.
Ҡайһылай киңәйеп китте
Даламдың офоҡтары.
Тулҡынланып аға кеүек
Умырзаялы ялан.
Уның зәңгәр ситтәренә
Ҡараһаң, күҙең тала.

3-сө уҡыусы. ”Ҡош юлы” (1967) исемле икенсе китабынан күренеүенсә, Рауил Бикбаев поэзияһы дала офоҡтары аша космос бейеклектәренә күтәрелә.

4-се уҡыусы.
Ҡояш ҡалҡты, офоҡ ситендәге
Болотттарға ялҡын ялатып.

Ҡырауланып ятҡан ҡырҙар битен
Һөртөп алды йылы ҡанаты.
Тыуһын ине, тимен, шундай бер йыр,
Йөрәгемә ялҡын ялатып.
Кешеләрҙең йөрәк пәрҙәһенә
Тейһен ине йылы ҡанаты.

5-се уҡыусы. Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнә һәм тыуыр киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк- кешелектктең ике ҡанаты. Мин баш өҫтөмдәге ҡояшҡа ғына ҡыҙынып йәшәмәйем. Шәфәҡ моңһоулығы ла,һыҙылып ҡына атҡан таңдың яҡтылығы ла миңә берҙәй ҡәҙерле, ти шағир.

6-сы уҡыусы. Арнау

- Тыуған йылың ҡайһы?
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған юлың ҡайһы?
- Халҡым ҡыуған юл.
Яҙмышынан уның уҙмышым юҡ,
Ярам-яралары.
Күҙе менән күреп, айырам ерҙең
Ағын-ҡараларын.
Аллалары минең аллам булыр,
Иманы – иманым.
Илдең йәнендәге йәншишмәгә
Туймамын инанып.

1-се уҡыусы. Рауил Бикбаев – заман һулышына үтә һиҙгер шағир. Ул ер шарының һәр тарафынан иҫкән төрлө елдәрҙе, тетрәнеүҙәрҙе йәһәт тоя, шатлыҡлы һәм хәүефле өн-тауыштарҙы ҡолағы сос ишетә, күҙҙәре күп нәмәләрҙе зирәк күрә.

2-се уҡыусы.
Асылын эҙләп тормоштоң,
Ваҡлыҡтарын иләнем.
Хаҡ менән нахаҡ алышын
Төшөнөргә теләнем.
Ҡырҡылып елгә йөҙ түгел,
Ҡатта йөрәк теләне.
Йыраҡтағы йөрәктәрҙе төшөнөргә теләнем.
Төпсөнмә, ти, миңә донъя,
Беләм, ти, белмәҫеңде.
Мин дә, тормош, серең бөтһә,
Күрмәҫ инем бәҫеңде!

3-сө уҡыусы. Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышының, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә тора. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә.Шуға ла уның шиғырҙары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә.

4-се уҡыусы.
Тыуған ерем! Ҡуйыныңдан бәрелә
Батырҙарҙың эҫе тындары.
Ҡайнар күкрәгеңә бер ныйыһһам,
Яҙылып китә һындарым.
Тыуған ерем! Тәрән-тәрәндәрҙән
Атылып сыға аҫыл шишмәләр.
Ошо шишмәләрҙән бер ятып эс -
Кәрәк түгел башҡа шифалар.
Башҡортостан!
Тамсы нурыңа ғына
Тиңләй алһам ине йырымды,
Һинең кеүек, йомарт бүлһәм ине
Башҡаларға йөрәк йылымды.

5-се уҡыусы.
Намыҫыбыҙға тамсы тап төшөрмәй
Һаҡлай алһаҡ бөгөн был ерҙе,
Ҡыҙармабыҙ уҙғаныбыҙ өсөн,
Иртәгәбеҙ булыр хәйерле.
Бөгөн эшләр эште бөгөн эшләп,
Шатлыҡтарҙы тигеҙ бүләйек.
Иртәгә һуң булыр. Бөгөнгөнөң
Ҡәҙерҙәрен бөгөн беләйек.

6 -сы уҡыусы. Рауил Бикбаев башҡортса һәм русса фундаменталь шиғри антологияларҙы уҡыусыларға еткереүгә ҙур көс һалды.

Ҡәләмдәштәре хаҡында әйтелгән һүҙҙәр, төрлө жанрҙар буйынса ғилми тикшеренеүҙәр, яҙыусыларҙың съездарындағы бай йөкмәткеле докладтар, публицистиҡ сығыштар, шиғри тәржемәләр, һуңғы йылдарҙа үҙенсәлекле күренешкә әйләнгән шиғри хәҙистәр үҙҙәре махсус томдарҙы тәшкил итерлек.

6-сы уҡыусы. Рауил Бикбаев – ысын мәғәнәһендә көслө ижтимағи хеҙмәткәр, аҡыл эйәһе, трибун шағир. Күп тармаҡлы, юғары сифатлы, тәрән тамырлы ижады менән Рауил Бикбаев башҡорт әҙәбиәте үҫешенә, Башҡортостандың рухи тормошона үҙенең һыр өлөшөн индерә.

1-се уҡыусы.
Дүрт офоғом баҡһын дүрт тарафтан,
Ҡаяларым булһын трибуна.
Ошо ҡаяларҙан еркәйемде
Сәләмләйем һүҙһеҙ, тын ғына,
Ғәйептәрем булһа, хөкөм итһен
Тыуған ерем - иң хаҡ трибунал.
Бәхетте тик ул татыттырһын,
Язаһына тик ул ултыртһын.

Р. Бикбаев һүҙҙәренә яҙылған “Өфө-Ырымбур юлдары” йыры яңғырай.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ЯҢҒЫҘЛЫҠ» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Л.М. Ғафарова,
Өфө районы, Чернолес дөйөм белем бирем мәктәбе

Маҡсат.

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, тормошо, “«Яңғыҙлыҡ” шиғырының йөкмәткеһе менән таныштырыу.

2. Тыуған илгә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу.

3. Уҡыусылырҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, Башҡортостан тәбиғәте фотолары, мультимедиа, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма.

Дәрес барышы:

1. *Уҡытыусы.*

- һаумыһығыҙ, уҡыусылар.
һаумыһығыҙ, һаумы әле,
Ниндәй йылы һүҙ икән.
Күңелдәрҙе иретерлек,
Һәр кемгәлә үҙ икән.

Уҡыусылар.

һаумы, тыуған илкәйем,
һаумы, сал Уралҡайым,
һаумыһығыҙ, уҡытыусым,
һаумыһығыҙ, дуҫтарым.

2. *Артикуляцион күнегеүҙәр.*

1) Эй еркәйем. Уттар үткән халҡым
Мәңгелеккә төйәк тапҡан ер.
Тынғы белмәҫ сиктәреңдә һаҡлап,
Ир-егеттәр яуҙар сапҡан ер.
(Р. Бикбаев «Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”)

2) - Тыуған йылың ҡайһы
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған юлың ҡайһы
- Халҡым ҡыуған юл.(Р. Бикбаев “Арнау”)

3. *Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.*

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә кроссворд сисергә кәрәк булыр. Кроссвордты сискәндә, үткән дәрестәрҙең темаларын һәм Башҡортостан тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫләгеҙ.

Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы

1. Ағиҙел йылғаһы башланған тау, Башҡортостандың иң бейек түбәһе.
2. Башҡорт халыҡ йыры, башҡорт халҡының милли гимны.
3. Белем шишмәһе.
4. Башҡортостандың иң ҙур күле.
5. Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы.
6. Башҡортостандың иң оҙоң йылғаһы.
7. З. Биишева тыуған район.
8. Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарының ҡыллы музыка ҡоралы.
9. Башҡорт халҡының милли батыры.
10. Республикалағы йәштәр гәзите.
11. Тыуған ил.

Бөгөн дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың “Яңғыҙлыҡ“ әҫәре менән нимәләр эйтергә теләгәнен, кеше ғүмерен нисек һүрәтләүен белербеҙ. Уның күңеле ни өсөн тыныс булмауын аңларбыҙ.

4. *Яңы тема.*

- Әйҙәгеҙ, хәҙер Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын һәм яҙыусыларын иҫкә төшөрәйек. (Уҡытыусы

Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусыларҙың портреттарын күрһәтә, уҡыусылар уларҙы атап, тыуған еҙәрен, уҡылған әҫәрҙәрен әйтә).

«Яңғыҙлыҡ» шиғыры буйынса эш.

1. Уҡытыусы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштыра.
2. Шиғыр буйынса һүҙлек эше (уҡыусылар хор менән уҡытыусы артынан яңы һүҙҙәрҙе уҡый, тәржемә итә, һүҙлектәренә яҙып ала):

3. Йыһан,тоғро дуҫтарым,яҙмыш,япа-яңғыҙ, йәшәү һуланы
4. Уҡытыусы ҡурай моңона ҡушылып шиғырҙы уҡый.

5. Уҡыусылар уны рус теленә тәржемә итә һәм үҙ аллы уҡый.
6. Һорауҙарға яуаптар:

– Автор яңғыҙлыҡты нисек һүрәтләй?

Бер яңғыҙым йоҡоһоҙ йыһандарҙа
Төндәр буйы сығам ут йотоп.

– Шиғырҙың юлдарында «ут йотоп” тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
– Шағырҙың күңеле ни өсөн тыныс?
– Һеҙҙең тоғро дуҫтарығыҙ бармы? Улар тураһында һөйләгеҙ.

Япа-яңғыҙ ҡалған саҡтарымда
Яндарымда йәшәү һуланы...

– Шиғырҙың юлдарында «йәшәү һуланы” тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?
– Шағирҙың яңғыҙ булмауын нисек аңлайһығыҙ?
– Шиғырҙың идея-тематик проблемаһын билдәләү.
– Шиғыр кем йәки нимә тураһында?
– Ул ни өсөн шулай тип атала?
– Уҡыу барышында ниндәй уй-фекерҙәр йәки һорауҙар тыуҙы
– Шиғырҙың композицияһы.
– Шиғыр композиция яғындан нисә өлөштән тора?
– Һәр бүлектә нимә һүрәтләнә?
– Шиғырҙың идеяһы.
– Шиғырҙың төп фекере ниндәй? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?
– Автор шиғыр аша беҙгә нимә әйтергә теләгән

Шиғырҙы йомғаҡлау.

Р. Бикбаев шиғыр-монологында тормош күренештәренә үҙ мөнәсәбәттәрен белдерә. Кеше донъяла, тыуған илендә,тоғро дуҫтары менән япа-яңғыҙ булмаясаҡ. Ғүмерҙә кеше туғандары, ҡәрҙәштәре, ырыуҙаштары менән йәнтәйәгендә йәшәй. Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла.

Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр.

Тыуған илем – (6н 5ек)

Мәҡәлде тәржемә итеү, аңлатыу. Ни өсөн Тыуған ил алтын бишек менән сағыштырыла? Тағы ла тыуған ил тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ. (Ватанһыҙ кеше – урманһыҙ һандуғас. Иле бар батыр хур булмаҫ, батыры бар ил хур булмаҫ. Иле юҡтың – көнө юҡ.)

Дәфтәрҙә эш. Үтелгәнде ҡабатлау өсөн 59-сы күнегеүҙе эшләү.

5. *Дәрестә йомғаҡлау. Баһалау.*

- Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ? Кем ул Рауил Бикбаев? Бөгөн тағы кемдәрзең исемдәре яңғыраны?

2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа 75 йәш тула.

Мин дә һеҙҙең илен, телен яратҡан ысын шәхес булыуығыҙҙы теләйем. Аҡыллы, тырыш булығыҙ, аң-белемгә ынтылығыҙ.

Онотмағыҙ, Рауил Бикбаев "Башҡортостан бында башлана" тигән шиғырында шулай тип әйткән;

Мин башланам һеҙҙән,кешеләрем.
Күңелегеҙҙең һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был доңъяға тура ҡараҡлыҡ.

6. Өйгә эш.

а) Шиғырҙы таусирлап уҡырға,
б) шиғырҙы яттан һөйләргә әҙерләнергә,
в) бәләкәй генә хикәйә төҙөргә.

ИР УРТАҺЫ – ИЛ ТОТҠАҺЫ

(Р. Бикбаев ижадына арналған әҙәби – музыкаль кисә)

Хәснәтдинова Н. Г.,
Бүздәк районы Бүздәк 2-се дөйөм белем биреү мәктәбе

Сәхнә байрамса биҙәлгән. Сәхнәнең түренә Р. Бикбаевтың шиғырҙарынан алынған түбәндәге юлдар яҙып эленгән:

Был ерҙәрҙә тамырыбыҙ тәрән,
Ырыу-шәжәрәбеҙ боронғо.

Күпме иҫтәлектәр һаҡлайһың һин
Башҡорт тарихынан, Ырымбур.
("Был ерҙәрҙә тамырыбыҙ тәрән")

Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип,
Ҡарай беҙгә бөгөн ил күҙе.
("Ғүмер уртаһы") (1- слайд)

1-се алып барыусы. Шағир донъяһы. Төкләп-төкләп тупланған рухи байлыҡтың даирәһен иңләй башлаһаң, мең уйҙарға, мең хәсрәттәргә сумып өр-яңы, ҡабатланмаҫ моң иленә килеп юлығаһың. Был ил әкиәттәге кеүек серле лә, шул уҡ ваҡытта ғәҙәти ҙә, һәр күренеш моңға мансылып шиғри телдә генә һөйләшә. Әйтерһең, шиғри аһәң тирә-яҡ кибланы балҡытыр бер көс. Ә уның инештәре ҡайҙа һуң? (2-се слайд)

2-се алып барыусы. Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың кендеге киҫелгән, яҡты донъяға күҙен асҡан ер – Ырымбур өлкәһе, Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылы. Боронғо Яйыҡ, Туҡ-Соран буйҙары Ырымбур далалары – башҡорттарҙың борон-борондан йәшәгән урындары. Ырымбур яҡтары республикабыҙға күренекле дәүләт эшмәкәрҙәрен, хеҙмәт алдынғыларын, әҙәбиәтебеҙгә Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Сәғит Агиш кеүек атаҡлы яҙыусыларҙы биргән.

(3 - 5-се слайдтар)

1 -се уҡыусы. ("Был ерҙәрҙә тамырыбыҙ тәрән" шиғырын уҡый).

(6-сы слайд)

2-се уҡыусы. Эйе, башҡорт донъяһы бөйөк шәхестәргә бик бай. Башҡорт донъяһы үҙенең талантлы улдары һәм ҡыҙҙары менән ғорурланып йәшәй. Улар араһында үҙенең күңел байлығы, тыйнаҡлығы, олпатлығы менән халыҡ күңелендә мәртәбәле урын алған шағир Рауил Бикбаев та бар. (7-се слайд)

1-се алып барыусы. Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә тыуған. Шулай итеп, уның бала сағы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына тура килә. Был ауыр йылдарҙа ғәзиз кешеләре, ауылдаштары күргән-кисергәндәрҙе ул йөрәгенә яҡын алып, күңеле аша үткәреп тоя. Ил азатлығы өсөн Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған яугиҙарҙың батырлыҡтарына шағир дан йырлай.

Ошоға асыҡ миҫал булып, "Почтальон малай", "Ҡояш", "Йондоҙло йорт" шиғырҙары тора. "Почтальон малай" шиғырында ауылдағы хат ташыусы малай атаһының үлем ҡағыҙын әсәһенә бирә алмай йөрөй, сөнки:

Үлем ҡағыҙҙары йылан булып,
Әсәләрҙең саға йөрәген. (8 - 9-сы слайдтар)

2-се алып барыусы. 1962 йылда "Ағиҙел" журналында донъя күргән "Вокзал" поэмаһы ла һуғыш темаһына арналған. Үҫмер йылдарында уҡ ҡәләм тибрәткән, 1957 йылдан алып шиғырҙары ташҡа баҫыла башлаған шағирҙы вокзал аша уҙған донъя шау-шыуы, кешеләр яҙмышы уйландыра, ире яуға киткәндә тыумай ҡалған улын армияға оҙатыусы әсәнең кисерештәре, вагон ишеген асҡанда ҡулдарының ҡалтырауы шағир күңелен тетрәтә, ул шаулы, әммә ғәмһеҙ күҙәтеүсе вокзал һымаҡ битараф ҡала алмай, уның менән бәхәскә инә:

Вокзал кеүек, күпте күреү – бәхет,
Ғәмһеҙ булыу – үлем шағирға.
тип тормошҡа үҙенең әүҙем мөнәсәбәтен белдерә. (9-сы слайд)

3-сө уҡыусы. Рауил Бикбаевтың ныҡлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә.1964 йылда "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға. Академик Ғайса Хөсәйенов шағир ижадына байҡау яһап: "Дала егетенең тәүге шиғырҙарынан уҡ дала һауаһын, яландар иркенлеген һәм киңлеген тойорға мөмкин",- тип билдәләй.Йылдар бер-бер артлы үтеп тора, ижады яңы киңлектәргә сығып, Уралдан да бейегерәк тауҙарҙы ашып, Ағиҙелдәй даръяларҙы кисеп, Башҡортостанды иңләп-буйлап гиҙә дала егетенең. (10-сы слайд)

4-се уҡыусы. Ысынлап та, "Ҡош юлы" тигән икенсе китабы Рауил Бикбаев поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә барыуын күрһәтте. Ул Ырымбур далалары киңлектәренән урман-таулы, ялан-туғайлы Башҡортостан тарафтарына сығып, яңы шиғри артылыштарға, алдағы офоҡтарға ынтыла, поэтик бейеклектәргә үрләй. Әммә уй-хыялдары менән нисек кенә күктәргә, йыһандарға ашмаһын, ул барыбер бар хәстәре, булмышы менән ер улы, туған халҡының балаһы. (11-се слайд)

(9-сы синыф уҡыусыһы Мамлеева Алһыу башҡарыуында Ә. Бикташева көйө, Р. Бикбаев һүҙҙәренә "Әсәй мине таңда уят әле" йыры). (12 – 13-сө слайдтар)

1-се алып барыусы. Шағирҙың һәр әҫәрендә Тыуған төйәгенә, Уралына, Башҡортостанына, уның кешеләренә һәм тәбиғәтенә ҡайнар һөйөү тойғолары урғылып тора.

Байрам бит ул – һауаларың нулап,
Һуҡмағыңдан тик бер үтеүҙәр.
Ниндәй бәхет, ниндәй сикһеҙ бәхет –
Ошо ерҙә тыуып-үҫеүҙәр!
("Тыуған ерем! Ҡуйыныңдан бәрелә...")

5-се уҡыусы. "*Башҡортостан бында башлана" шиғырын уҡый.* (14 – 15-се слайдтар)

2-се алып барыусы. Р. Бикбаевтың 1976 йылда сыҡҡан "Ғүмер уртаһы" китабы шул уҡ исемдәге шиғыр менән асылып китә. Ғүмер уртаһына етеп, үҙен өлгөргән шәхес итеп тойған әҙип үткән ғүмер һәм ижад юлын байҡап, бер аҙ хәүефләнә лә:

Хафаларым артта намыҫымдың
Хаҡ һүҙҙәрен ҡайсаҡ онотоуҙан.

Шул уҡ ваҡытта ул инде еңел-елпе тейәп юртыуҙы ташлаған, ауыр йөктө уртаға егелеп тартырға әҙер шәхес кимәленә еткән, үҙен ил тотҡаһы булыр ил уҙаманы итеп тойған гражданин булараҡ сығыш яһай:

Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә

Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы – илдең тотҡаһы тип,
Ҡарай беҙгә бөгөн ил күҙе.

(10-сы синыф уҡыусыһы Дулатов Илфат башҡарыуында башҡорт халыҡ бейеүе “Байыҡ”)

1-*се алып барыусы.* Рауил Бикбаев – заман шағиры. Ул үҙ осороноң һәр һулыш-хәрәкәтен һиҙгер тоя. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған, хәүефләндергән мәсьәләләр, төрлө һорауҙар асыҡтан-асыҡ һәм бик үткер итеп ҡуйыла. Илебеҙҙең үткәненә лә, бик үк төҫмөрләнмәгән киләсәгебеҙгә лә ҡараш ташлана; ебәрелгән ҙур етди хаталар, битарафлыҡтар уйландыра; тәбиғәттең ярлыланыуы, экологик хәүефтәр, кеше күңелдәренең ҡорғаҡһыуы, әҙәп-әхлаҡтың ҡаҡшауы нык борсой. (16 - 18-се слайдтар)

2-се алып барыусы. “Һыуһаным – һыуҙар биреген” поэмаһы бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр, моғайын. Поэмала тәбиғәт – кеше – сәнәғәт тураһында һүҙ бара. Әҫәрҙә шулай үк халыҡ һәм тел яҙмышы мәсьәләләре лә киҫкен ҡуйыла. “Һыуһаным – һыуҙар биреген” поэмаһы шағир ижадында яңы бер күтәрелеште билдәләй, юғары бер аккорд булып яңғырай”, – тип баһалай был поэманы Мостай Кәрим.

Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнө – илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө – ил йөҙө” үлсәмендә. Сөнки шағир тыуған-үҫкән ер-һыуҙарыбыҙҙың ҡороуы, ағыуланыуы, Башҡортостаныбыҙ тәбиғәтенең ярлылана барыуы тураһында борсола, уларҙы таҙа итеп һаҡларға саҡыра. Ер-һыуҙар ҡороуҙан, тәбиғәт ҡорғаҡһыуҙан ғүмеребеҙ ҡыҫҡарыуы, тормош күрке китеүе хаҡында иҫкәртә.

(Уҡыусылар йылғаны һүрәтләүсе костюмдарҙа Ағиҙел, Ҡариҙел һәм Димдең һөйләшеү диалогын башҡаралар.)

(19 – 20-се слайдтар)

1-се алып барыусы. “Һыуһаным, һыуҙар биреген” поэмаһында күтәрелгән мөһим проблемаларҙы шағир артабан “Халҡыма хат” шиғырында дауам итә, ер-һыу, тәбиғәт ҡороуҙан күргән зыян ни дәрәжәлә оло булһа, туған телебеҙҙең ҡороп барыуы шул тиклем үк ҙур юғалтыу, киләсәгенә янаусы, милләт булып йәшәүен һәләкәт аҫтына ҡуйыусы күренеш тип һыҙыҡ өҫтөнә ала. Бөйөк шағирыбыҙ Ш. Бабич һымаҡ уҡ, милләттәштәрен уянырға саҡырып ялҡынлы оран ташлай.

(6-сы уҡыусы “Халҡыма хат” шиғырынан өҙөк уҡый). (21 – 22-се слайдтар)

2 -се алып барыусы. Рауил Бикбаев ижадының йөҙөн билдәләүсе жанр – лирика. “Лирика – ул шағирҙың күңел биографияһы”, – тигән Герцен. Шул күңел биографияһын Р. Бикбаев үҙенең поэзияһында уҡыусыларға асып бирә лә инде. Уның поэзияһында шағир күңеленең киңлеген, ихласлығын, сафлығын тоябыҙ. Бикбаевтың гражданлыҡ лирикаһы менән йәнәш мөхәббәт лирикаһы ла үрелеп бара. Ижадының башланғыс осорондағы шиғырҙарында сағылған мөхәббәт сатҡылары ғүмере буйы берсә ялҡынланып, берсә һүрелә төшөп, оҙатып баралар. Күптән түгел тура эфирҙа Р. Бикбаев: “Шағир ижад итһен өсөн уға Муза кәрәк,”- тип әйтте. Ә Рауил Бикбаевтың Музаһы – ул Мөхәббәт.

Оноттоңмо, тиһең...
Онотманым.
Тырышһам да юҡтыр онотаһым.
Оноторға, тиеп, һөйөүемде
Килеләрҙә, гүйә, онтаным.
Көлдән терелеп осҡан Феникстай,
Ҡанатланды яңынан ул тағы.

1-*се алып барыусы.* Шағир ғүмере буйы ғашиҡ. Ул һөйгәненә, тыуған төйәгенә, халҡына, йыйнап ҡына әйткәндә – донъяға ғашиҡ. Уның көндәлегенән алынған яҙма ла ошо турала һөйләй.

22 июнь, 1972 йыл.

Берәй музыканы тыңлап, уйланып ҡалһам, минән ҡайһы саҡта: «Был кем әҫәре, әйт әле?» – тип һорайҙар. Матурлыҡтың исемен ҡайҙан белеп бөтмәк кәрәк? Матурлыҡҡа һоҡланыу өсөн уның исемен белеү ҙә мотлаҡмы ни? Был – наҙанлыҡты аҡларға тырышыу түгел. Ерҙә мин күпме аҡландарҙы, тауҙарҙы, туғайҙарҙы күреп һоҡландым. Уларҙың күбеһенең исемен белмәйем. Мин һоҡланған таңдарҙың, эңерҙәрҙең, томандарҙың, ямғырҙарҙың да һәр береһенең исеме юҡ. Көн һайын урамдан күпме буй-һындың гүзәллегенән йөрәгем тетрәп, таң ҡалып атлайым. Уларҙың исемен белмәү генә минең һоҡланыуымды баҫа алмай, бәлки, көсәйтә генәлер ҙә әле.

Эйе, тормош – мөғжизә: уның бәхетлеләре лә, бәхетһеҙҙәре лә, ҡайғы – хәсрәтлеләре лә, шатлыҡтан һөйөнөп туймаусылары ла,ҡайнар мөхәббәт утында яныусылары ла, бәхетһеҙ мөхәббәттән йәш түгеүселәре лә, йәшлеген һағынып йырлаусылары ла бар.

(10-сы синыф уҡыусыһы Солтанова Альбина башҡарыуында, И. Сәлимов көйө, Р. Бикбаев һүҙҙәре “Даръялар аръяғында” йыры). (23-24-се слайдтар)

2-се алып барыусы. Оло әҙәбиәтебеҙҙә үҙ урынын тапҡан, үҙ йүнәлешен һайлаған шәхестәребеҙ бик күп. Рауил Бикбаев бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтенең ғорурлығы – мәшһүр һүҙ оҫтаһы тигән баһаға эйә. Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Р. Бикбаевҡа арналған әҙәби-музыкаль кисәбеҙ тамам. Яратҡан әҙибебеҙгә ижади уңыштар, беҙҙе тағы ла яңы матур әҫәрҙәре менән шатландырыуын теләп хушлашабыҙ.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “ТӘБИҒӘТТЕҢ МӘЛЕ АСЫЛҒАН САҠ” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Зарипова Бүләк Сибәғәтулла ҡыҙы,
Килем урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Рауил Бикбаевтың «Тәбиғәттең мәле асылған саҡ» шиғырын өйрәнеү.

Маҡсат: Шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу; телмәр үҫтереү, тасуири уҡырға өйрәтеү; тәбиғәт күренештәрен күҙәтергә, һығымта яһарға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: мультимедия проекторы, Рауил Бикбаевҡа арналған күргәҙмә, слайдтар, һүрәттәр, 4-класс өсөн дәреслек.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле. Һаумыһығыҙ, һаумы әле,
Ниндәй йылы һүҙ икән
Күңелдәрҙе иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән!

Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләшәйек.

II. Артикуляцион күнегеүҙәр. (2-се слайд) *Уҡытыусы.* Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ әле.

1. Башҡорт телендәге өндәрҙе ҡабатлау: ә, ө, ҡ, ғ, ҫ,ҙ,һ,ү,ң.
2. Ижектәрҙе әйтәйек: -лә,-мә,-нә,-кө, -рө,-тө,-ҫа, -һа, -ға,-ҡа һ.б
3. Телтөҙәткес: Тә-тә-тә- ултырабыҙ дәрестә,
Са-са-са- һөйләшәбеҙ башҡортса,
Ый-ый-ый- уҡыусы шиғыр уҡый,
Ыш-ыш-ыш- беҙ шундай тырыш.
4. Шиғырҙы ҡабатлау һәм тасуири уҡыу. (3-сө слайд)
Ер өҫтөнә ҡыйыҡтарҙан төшөп,
Тыпылдаша тәүге тамсылар.
Иркен атлап бара һәр бер кеше
Һәм йылмая яҙҙы ҡаршылап.

Уҡытыусы. - Был шиғыр нимә тураһында? - Дөрөҫ, бөгөн беҙ яҙ миҙгеле тураһында шиғыр уҡыясаҡбыҙ. Шиғырҙың исемен һәм асҡыс һүҙҙәрҙе уҡығыҙ. *(“Тәбиғәттең мәле асылған саҡ”. Тәбиғәт, япраҡ, йәшкелт).* (4-се слайд)

Уҡытыусы. - Нисек уйлайһығыҙ, был шиғыр нимә тураһында?

- 185- битте астыҡ.
- Шиғырҙың авторы кем?
- Кем белә, кем ул Рауил Бикбаев? (5-се слайд)
- Шағир тураһында мәғлүмәт биреү.
- Рауил Бикбаевҡа арналған китаптар күргәҙмәһе менән таныштырыу.

III. Ял минуты. (6-сы слайд) Ҡояш ҡарай йылмайып, *(Ҡара-ҡаршы ҡарап йылмайышалар*)
Иҫәләр йылы елдәр. (*Ҡулдары менән ел иҫкән хәрәкәт яһайҙар*)
Шатланып йылы көнгә,
Шуҡ турғайҙар бейейҙәр. (*Бейеү хәрәкәттәре яһайҙар*)

IV. Текст өҫтөндә эш.

- уҡытыусы уҡый
- хор менән уҡытыу
- аңлашылмаған һүҙҙәрҙе таптырыу һәм мәғәнәһен аңлатыу, һөйләмдәр төҙөтөү (7-се слайд)
- ниндәй кәйеф менән уҡырға кәрәк?
- эстән уҡытыу
- парлы уҡыу
- тасуири уҡытыу
- төркөмдәрҙә эш (телдән һүрәт)
- Шиғыр буйынса бер-берегеҙгә һорауҙар биреген, әгәр һеҙ рәссам булһағыҙ, был шиғыр йөкмәткеһе буйынса ниндәй һүрәт төшөрөр инегеҙ?
- Шиғырҙан художестволы һүрәтләү сараларын табыу.
- Тере булмаған әйберҙәрҙе йәнле заттарға хас сифаттар менән һүрәтләүсе урындарҙы табыу.

V. Теманы нығытыу

- шиғырҙың төп фекере, асылы нимә тураһында?
- төркөм менән эш (Тейешле яуапты һыҙыҡ менән тоташтыр). (8-се слайд)

Тәүге шиғырҙар йыйынтығы	75 йәш
1992 йылда ниндәй юғары исемгә лайыҡ була?	Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай
Ҡайҙа тыуа?	Башҡортостан халыҡ шағиры
Ҡасан тыуа?	“Дала офоҡтары”
2013 йылда нисә йәш тула?	1938 йылдың 12 декабрендә

VI. Уҡытыусы һүҙе

Р. Бикбаевтың һәр шиғыры йырлап тора, күңелгә ятышлы, уҡымлы. Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы, көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла.

Талантлы шағырыбыҙ һау-сәләмәт булып, беҙҙе артабан да матур әҫәрҙәре менән шатландырып торһон.

VII. Баһалау

Кем дәрестә әүҙем ҡатнаштым, дөрөҫ яуап бирҙем ти - шулар баҫалар! (*уҡыусылар баһалай)*

VIII. Өй эше.

1. Шиғырҙы тасуири уҡырға
2. Яҙ темаһына мини- инша йәки шиғыр яҙып килергә.
3. Яҙ темаһына һүрәт төшөрөргә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Хәйруллина Әлфирә Имамғәли ҡыҙы,
Буздәк районы Иҫке Тауҙар урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу.
2. Тыуған илде, туған телде һөйөү тойғоһо, улар менән ғорурланыу хисе тәрбиәләү, тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу.
3. Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу. Р. Бикбаевтың портреты, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары плакаттары, Башҡортостан тураһында һүрәттәр, ребус, мультимедиа, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, магнитофон.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты: Сәләмләйбеҙ һауаны
Именлек булһын өсөн,
Сәләмләйбеҙ Ер-Әсәне
Беҙҙе туйҙырған өсөн,
Сәләмләйбеҙ дуҫтарҙы
Гел дуҫлыҡ булһын өсөн!

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ әле бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек!

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

Уҡытыусы. Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ әле.

1. Башҡорт телендәге өндәрҙе ҡабатлау: ә, ө, ҡ, ғ, ҫ, ҙ, һ, ү, ң.
2. Ижектәрҙе әйтәйек:- лә,- мә,- нә,- кө,- өрө,- тө,- ҫа,- һа,-ға,- ҡа.
3. Телтөҙәткес: *тә-тә-тә* - ултырабыҙ дәрестә
са-са-са – һөйләшәбеҙ башҡортса
ый-ый-ый – уҡыусы шиғыр уҡый
ыш-ыш-ыш – беҙ шундай тырыш.

4. Башҡортостан! Һин икмәкле тупраҡ,
Йәшел урман, болон, тау, дала.
Йәнһеҙгә - йән, йәмһеҙгә йәм биргән
Һин ут һәм һыу, һауа һәм даяа.

III. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә кроссворд сисергә кәрәк булыр. Кроссвордты сискәндә үткән дәрестәр темаларын һәм Башҡортостан тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫләгеҙ.



1. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы. 2. Ағиҙел йылғаһы башланған тау, Башҡортостандың иң бейек түбәһе. 3. Башҡорт халыҡ йыры, башҡорт халҡының милли гимны. 4. Белем шишмәһе. 5. Башҡортостандың иң ҙур күле. 6. Башҡортостандың төгре халыҡ яҙыусыһы. 7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға. 8. З. Биишева тыуған район. 9. Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарының ҡыллы музыка ҡоралы. 10. Башҡорт халҡының милли батыры. 11. Республикалағы йәштәр гәзите. 12. Тыуған ил.

Бөгөнгө дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың «Башҡортостан бында башлана» шиғыры менән танышырбыҙ.

IV. Яңы тема**.**

Уҡытыусы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштыра.

- Әйҙәгеҙ, хәҙер Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын һәм яҙыусыларын иҫкә төшөрәйек (Уҡытыусы Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары һәм шағирҙарының портреттарын күрһәтә, уҡыусылар уларҙы атап, тыуған ерҙәрен, әҫәрҙәрен әйтәләр).

«Башҡортостан бында башлана» шиғыры буйынса эш.

Һүҙлек эше (уҡыусылар хор менән уҡытыусы артынан һүҙҙәрҙе уҡый, тәржемә итә, һүҙлек дәфтәрҙәренә яҙып ала):

офоҡ – горизонт
һырт – хребет
улан – дитя
ҡарыш – пядь (мера длины)
тараф – направление.

Уҡытыусы ҡурай моңо аҫтында шиғырҙы уҡый.

Уҡыусылар үҙ аллы уҡый.

Һорауҙарға яуап биреү:

- Шиғырҙа Башҡортостан нисек тасуирлана? Текстан миҫалдар килтерегеҙ.
- Башҡортостан исеменән әйтелгән «Мин бит башланамын һинән, унан, Кешеләрем һеҙҙән башланам!» тигән шиғыр юлдарының мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
- Һеҙ Башҡортостан тураһында өҫтәп нимәләр әйтер инегеҙ?

Уҡыусылар шиғырҙы ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев шиғриәте һүрәтләү сараларына бик бай. К. Әхмәтйәнов билдәләүенсә, «һүрәтләү саралары, шиғриәттең үҙенсәлекле атомы булараҡ, әҙәбиәттең тәбиғәтенә тәрәнерәк үтеп инергә мөмкинлек бирә». Ә был сараларҙы белеү уҡыусылар өсөн бик мөһим. Әйҙәгеҙ, һүрәтләү сараларының бер нисәһенә туҡталып китәйек. Уларҙың иң күп таралған төрө - сағыштырыу.

1. Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан.
2. Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайындай.
3. Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.
4. Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек,
Был донъяға тура ҡаралыҡ.

Был юлдарҙа шағир ҡайындарҙы аҡ нурҙарға тиңләй, үҙен күктә талпынып һайраусы һабан турғайына оҡшата. Сит ерҙәрҙә йөрөп, үҙ илен һағынып ҡайтыусыға уның ни тиклем ҡәҙерле булыуын, тыуған ерҙең яҡты йөҙ менән ҡаршы алыуын, халҡының киң күңеллелеген әйтеү өсөн Башҡортостанды ул ҡояш менән сағыштыра.

Р. Бикбаев һүрәтләү сараларының бер төрө – йәнләндереүҙе лә уңышлы файҙалана.

1. Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын.
2. Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә
Берсә көлөп, берсә уйланып.

Был осраҡта йәнләндереү ер образын асығыраҡ күҙ алдына баҫтырыу өсөн ҡулланыла. Шағир Ер-Әсә монологы аша тыуған ерҙең ҡайҙан һәм кемдән башланыуын әйтеп биреүгә өлгәшә.

Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән уланым, - тип үҙенең ҡайҙан башланыуын аңлата.

Әҙәбиәттә образлылыҡты һәм матурлыҡты көсәйтеү өсөн киң ҡулланылған һүрәтләү сараларының береһе – метафора. Метафорала образлылыҡ тыуҙырыу өсөн бер предметтың сифаты икенсеһенә күсә.

1. Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп…
2. Кешем намыҫында кер күрһәләр.
3. Ер ҡуйыны, тауыш ағыуы.
4. Талпына күңел.
5. Күңел күктә тулай.

Эпитет – художестволы аныҡлаусыларҙың күсерелгән мәғәнәләге бер төрө. «Башҡортостан бында башлана» шиғырында «ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр», «йөҙөгөҙ аҡ булһын», «сабыр тауыш» һүҙбәйләнештәре эпитет булып йөрөй.

Дәфтәрҙә эш. Һүрәтләү сараларын дәфтәргә яҙып алыу.

V. Шиғырҙы йомғаҡлау.

Башҡортостан тураһында шиғыр күп яҙылған. Һәр шағир республиканың матурлығын, байлығын, халҡының киң күңеллелеген һәм дуҫ йәшәүен ҙур оҫталыҡ менән һүрәтләй. Рауил Бикбаев та был шиғырында Башҡортостан еренең ҙурлығын, сафлығын тасуирлай. Уның экономик ҡеүәте, танылған ғалимдары сит ҡитғаларға ла киң билдәле. Ә башҡорт балы, ҡымыҙы, курайы үҙе бер мөғжизә! Күп милләтле республика, ҡаллылыҡ яулап тыныс һәм дуҫ йәшәүҙең аҫыл бер үрнәге булып тора. Ә Башҡортостандың кешеләргә теләк һүҙе түбәндәгесә яңғырай:

Мин башланам һеҙҙән,кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Әҫәрҙең төп идеяһы ла ошо юлдарҙа бирелгән.

Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр әйтеү.

Ребус сисеү:

Тыуған илем – 6н 5ек

VI. Дәрестә йомғаҡлау, баһалау.

- Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?
- Кем ул Р. Бикбаев?
- Бөгөн тағы кемдәрҙең исемдәре яңғыраны?

- Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағылғанын күрҙек.

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы, аң-белемгә ынтылыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала.

VII. Өйгә эш.

Шиғырҙы тасуири уҡырға, Башҡортостан, уның тәбиғәте тураһында һөйләргә әҙерләнергә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Абдрахманова Лиза Фәһим ҡыҙы,
Буздәк районы Буздәк 1-се урта белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу.
2. Тема буйынса телмәр үҫтереү.
3. Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу:

Р.Бикбаевтың портреты, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары һәм яҙыусылары портреттары, шағирҙың тормош юлын, Башҡортостан тәбиғәтен һынландырған презентация (уҡыусылар эше), ребус, мультимедия проектор, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, магнитофон

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу мәле: 1.1 һаумыһығыҙ, һаумы әле,
Ниндәй йылы һүҙ икән!
Һәр күңелде иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән.

1.2. һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
- Хәлдәрегеҙ нисек?
- Һәйбәт!
- Кәйефтәрегеҙ яҡшымы?
- Бик яҡшы.

Беҙ мәктәптә уҡыйбыҙ,
Башҡорт телен өйрәнәбеҙ.

1.3. «Уҡыусылар ҡобайыры”н әйтеү:

- Бер, тигәс тә, ни яҡшы?
- Бер ваҡытта ауырымай,
Шат йәшәһәң, шул яҡшы.
- Ике, тигәс, ни яҡшы?
- Бер үк эште ике ҡабат
- Эшләмәһәң, шул яҡшы.
- Өс, тигәс тә, ни яҡшы?
- “Өс”кә, көскә уҡыуҙы
-Бөтөрә алһаҡ, шул яҡшы.
- Дүрт, тигәс тә, ни яҡшы?

- “Дүрт”кә, “биш”кә уҡып бөтөп,
-Һөнәр алһаң, шул яҡшы.
- Биш, тигәс тә, ни яҡшы?
- Башҡорт телде дәрестәрен
«Биш»кә уҡыһаң, шул яҡшы.

2. Артикуляцион күнегеүҙәр:

2.1 Башҡорт өндәрен ҡабатлау:

ә, ө, ҡ, ғ, ҫ, ҙ, һ, ү, ң

2.2 Ижектәр әйтеү:

2.3 Ла-лә, ма-мә, на-нә ко-кө, ҡа-ҡә, ро-рө, то-тө, һ.б.

- Телтөҙәткес: Тә-тә-тә – ултырабыҙ дәрестә
Са-са-са – һөйләшәбеҙ башҡортса
Ый-ый-ый – уҡыусы шиғыр уҡый
Ыш-ыш-ыш – беҙ шундай тырыш

2.4 Күгәреп ятҡан Урал тауы -
Атай-олатайҙарҙың тәйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

3. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

3.1 Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләү өсөн беҙгә кроссворд сисергә кәрәк булыр. Кроссвордты сискәндә үткән дәрестәр темаларын һәм Башҡортостан тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөгөҙ.

Кроссворд һорауҙары:

1. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы. 2. Ағиҙел йылғаһы башланған тау, Башҡортостандың иң бейек түбәһе. 3. Башҡортхалыҡ йыры, башҡорт халҡының милли гимны. 4. Белем шишмәһе. 5. Башҡортостандың иң ҙур күле. 6. Башҡортостандың төҙгә халыҡ яҙыусыһы. 7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға. 8. З.Биишева тыуған район. 9. Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарының ҡыллы музыкм ҡоралы. 10. Башҡорт халҡының милли батыры. 11. Республикалағы йәштәр гәзите. 12. Тыуған ил.

Бөгөн дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышырбыҙ. Шағирҙың “Башҡортостан бында башлана” шиғыры менән нимәләр әйтергә теләгәнен, тыуған ергә һөйөү хистәре нисек һүрәтләнеүен белербеҙ.



4. Яңы тема.

4.1 Р.Бикбаевтың биографияһы (төркөмдәргә бүленгән уҡыусылар презентацияларын яҡлай)

4.2 Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын һәм яҙыусыларын иҫкә төшөрөү (портреттарын күрһәтеү, уларҙың тыуған ерҙәрен, уҡылған әҫәрҙәрен атау)

4.3 Башҡортостан бында башлана шиғыры өҫтөндә эш:

-һүҙлек эше (уҡыусылар хор менән уҡытыусы артынан һүҙҙәрҙе уҡый, тәржемә итә, һүҙлек дәфтәренә яҙып ала)

Офоҡ, тараф, ҡан тибеше, туғай, тулай, ҡабырға, һырт, ҡарыш, һуҡмаҡ, булмыш, улан, кер, ғәрлек

-ҡурай моңо аҫтында шиғырҙы уҡытыусы уҡый

-уҡыусылар шиғырҙың йөкмәткеһен рус теленә тәржемә итә һәм үҙ аллы уҡый

-уҡыусылар шиғыр тексы буйынса һорауҙар төҙөп, бер-береһенә бирә, мәҫәлән:

1. Шиғырҙа Башҡортостан нисек тасуирлана (текстан миҫалдар табып уҡыу)
2. Башҡортостан исеменән әйтелгән
“Мин бит башланғанмын һинән, унан,
Кешеләрем һеҙҙән башланам!” тигән шиғыр юлдарының мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
3. Шиғырҙың ҡайһы юлдары авторҙың күңел торошон, тыуған еренә һөйөү хистәрен сағылдыра?
4. Урал ере тураһында тағы нимәләр әйтеп булыр ине?

4.4 Уҡыусылар шиғырҙы ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

4.5 Шиғырҙы йомғаҡлау.

Шағир Башҡортостан ерендә йәшәүе менән ғорурлана. Уның тәбиғәт матурлығын, ер йомартлығын, унда йәшәгән кешеләрҙең йөҙҙәре һәм күңелдәре аҡ булыуын теләй. Был хис-тойғолар шиғырҙың ҡайһы юлдарында күренә?

- Ә мин мәңге бында – Уралымда,

Тик булмышым инде өр-яңы…

тигән юлдарҙа автор нимә тураһында һөйләй?

4.6 Уҡыусылар Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр иҫкә төшөрөп әйтә һәм уларҙы дәфтәргә яҙа.

4.7 Ижади эш тәҡдим итеү: бирелгән мәҡәлгә ребус төҙөргә

Тыуған илем – алтын бишек.

(Тыуған илем – 6н 5ек.)

- Мәҡәлде тәржемә итеү, аңлатыу.

5. Дәрестә йомғаҡлау, баһалау.

- Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?
- Кем ул Рауил Бикбаев?
- Бөгөн тағы кемдәрҙең исемдәре яңғыраны?

Эйе, ысынлап та, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла. 2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевҡа 75 йәш тула.

Уҡыусылар, һеҙ ҙә, Тыуған илегеҙҙе яратыр, аҡыллы, аң-белемгә ынтылыусан шәхестәр булырһығыҙ. Илен, телен яратыусы ғына ысын кеше була ала.

6. Өйгә эш.

6.1 Шиғырҙы тасуири уҡырға.

6.2 Башҡортостан, уның тәбиғәте тураһында һөйләргә әҙерләнергә.

6.3 Бәләкәй генә хикәйә төҙөргә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Байрамғолова Гөлнур Рәүеф ҡыҙы,
Салауат районы 1-се Малаяҙ урта мәктәбе

Дәрестең темаһы: Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғыры.

Маҡсат: 1) *Тәрбиәүи:* тыуған илде ҡәҙерләү, Ватан менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; 2) *Үҫтереүсе:* уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү һәм эҙләнеү. күнекмәләрен, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү; 3) *Белем биреү:* шағирҙың тормош юлын, ижадын. өйрәнеү, шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, әҫәрҙәренән һәм тел тураһындағы китаптарҙан торған күргәҙмә, проектор.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу ваҡыты.

- Һаумыһығыҙ, балалар! Кәйефтәрегеҙ нисек?
- Ҡояшлы иртә көүек!

Дәресебеҙҙе иң яратҡан шиғырыбыҙ менән башлап ебәрәйек.

Слайд 1.

Мин - Салауат тоҡомонан
Яратамын телемде.
Маҡсатыма ирешәмен,
Аламын тик ”бишлене”!

II. Сәсәнлек бәйгеһе.

Уҡыусылар өйҙә әҙерләп килгән дүрт юллыҡ шиғырҙарын тасуири итеп уҡыйҙар.

- Уҡыусылар, был шиғырҙар нимә тураһында?
- Шиғырҙар тыуған яҡ, уның матурлығы, байлығы тураһында.
- Эйе, беҙҙең күренекле шәхестәребеҙ Рәми Ғарипов, Рауил Бикбаев, Зәйнәб Биишева, Факиһа Туғыҙбаева Башҡортостандың гүзәл тәбиғәтен, уңған кешеләрен данлап шиғырҙар ижад иткәндәр.
- Беҙҙең тыуған илебеҙ Башҡортостан - гүзәл, бай республика, ә телебеҙ моңло, уларҙы яратмау мөмкин түгел.

Слайд 2. (Шиғыр йәйғор формаһында бирелә)

Донъяла иң матур ил -
Ул минең Тыуған илем.
Донъяла иң матур тел -
Ул мин туған телем.

- Был шиғырҙың яҙылышына ҡарап нимә әйтеп була? Ул ниндәй фигураны хәтерләтә?
- Был фигура йәйғор һүрәтен хәтерләтә.
- Унда ниндәй төҫтәр күрәһегеҙ?
- Йәшел, аҡ,зәңгәр төҫтәрҙе күрәбеҙ.
- Ә төҫтәр нимәне аңлата?
- Был Башҡортостандың дәүләт флагындағы төҫтәр.
- Төҫтәр нимәне аңлата?
- Йәшел төҫ – азатлыҡ, мәңгелек тормошто аңлата.

Аҡ төҫ – тыныслыҡ төҫө. Зәңгәр төҫ яҡтылыҡ, сафлыҡ билгеһе.

Слайд 3.

Башҡортостандың дәүләт флагы күрһәтелә.

- Эйе, уҡыусылар, был беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың дәүләт флагы. Башҡортостан үҙ аллы республика итеп иғлан ителгәс, беҙҙең флагыбыҙ, гербыбыҙ, гимныбыҙ барлыҡҡа килде.

Слайд 4. Герб күрһәтелә.

III. Ә хәҙер һеҙҙең белемегеҙҙе тикшереп ҡарайыҡ.

Слайд 5. Викторина. (һорауҙар экран аша күрһәтелә)

- Башҡортостан автономиялы Совет Социалистик Республикаһының төҙөлөүе?
- 1919 йылдың 23 марты.
- Башҡортостан Республикаһы суверенлы тип иғлан ителгән көн?
- 1990 йыл, 11 октябрь.
- Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагын раҫлаған көн?
- 1992 йыл, 25 февраль.
- Башҡортостан Республикаһының дәүләт гербы һәм гимны раҫланған көн?

- Уҡыусылар ни өсөн беҙ был даталарҙы иҫкә төшөрҙөк ?

- Сөнки беҙ бөгөн дәрестә Башҡортостан тураһында һөйләшәсәкбеҙ.

IV. Ә хәҙер бөгөнгө числоны, теманы яҙып ҡуябыҙ.

1) Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлын блок-схема төҙөп өйрәнәбеҙ.

Слайд 6.

2) Электрон дәреслектән Рауил Бикбаевтың сығышын тыңлау.

3) Шиғырҙың йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү.

- Ә хәҙер шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышайыҡ.

1. Шиғырҙы аудиотаҫманан тыңлау;
2. һүҙлек өҫтөндә эш

Слайд 7.

Офоҡ – горизонт
тараф- сторона
ҡитға – материк
ғәрлек- позор
һуҡмаҡ - тропинка

3. Уҡыусылар үҙ аллы уҡыйҙар;
4. 3-4 уҡыусы тасуири итеп уҡып күрһәтә;
5. Йәкмәткеһен асыр өсөн һорауҙарға яуап биреү.

- Шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара?
- Шиғри әҫәрҙең ниндәй төрөнә ҡарай?
- Тыуған ил тураһында лирик шиғыр.
- Шиғырҙа ҡайһы образдар менән танышабыҙ?
- Лирик герой-шағир һәм Башҡортостан образы.
- Башҡортостандың географик күренешен автор нисек беҙҙең күҙ алдына баҫтыра?(Шул урынды текстан табып уҡыу)
- Яйыҡ йылғаһынан Сөн ярына тиклем, көньяҡтан Юшатыр буйҙарынан төнъяҡтағы Әй буйҙарына тиклем.
- Шағирҙың Башҡортостанға ҡарата мөнәсәбәте ниндәй?(Текстан табып уҡыу.)
- Уға туған иленең һәр ҡарышы күңеленә ғәзиз һәм ҡәҙерле.
- Башҡортостан ҡайҙан башлана? Ул нимәләре менән маҡтаулы?
- Урман- тауҙары, йылға-күлдәре, ер-һыу байлыҡтары менән генә күркәм түгел, шул ерҙә йәшәгән кешеләре , уны данлаған, исемен ил-ерҙәргә ишеттергән батыр, эшсән ул - ҡыҙҙары менән дә маҡтаулы.
- Башҡортостан киләсәк быуынға ниндәй өмөт бағлай?

һуңғы строфаға иғтибар итәйек.

- Туған республикабыҙ ул – ҡыҙҙарынан үҙенең дә һәм уларҙың да йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек итеп йәшәү һәм эшләүҙәрен үтенеп һорай.
- – Был шиғыр һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, ниндәй хистәр уятты? (Яуаптар).
- Физкультминутка.

Слайд 8.

Беҙ бәхетле, шат балалар,
Һис ҡайғыны белмәйбеҙ.
Эх, йәмле шул, күңелле шул
Беҙҙең тыуған илебеҙ!

4) Ә хәҙер авторҙың теленә иғтибар итәйек. Рауил Бикбаев был шиғырында ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланған? Әйҙәгеҙ, бергәләп табайыҡ әле.

- Был шиғырҙа автор сағыштырыуҙар, йәнләндереүҙәр, метафоралар ҡулланған.

Сағыштырыуҙарҙы табабыҙ.

- Һабан турғайындай талпына, ҡояш кеүек ҡарай.

Йәнләндереүҙәр: Башҡортостан ҡаршы ала; ҡабырғаһын, һыртын бора, ти; ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты; ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә.

Метафоралар: ер һулышы, тауыш ағыуы; талпына күңел; күңел күктә тулай; ҡара ер, йөҙ ҡарайыр, донъяға килеү.

- Шағир ни өсөн был һүрәтләү сараларын ҡулланған?
- Рауил Бикбаев үҙенең әҫәрен яңғырашлы, хисле булдырыу өсөн ҡулланған.

- Тыуған ил берәү генә була. Һәр бер кешегә үҙенең йәшәгән төйәге, тыуған иле яҡын. Шуның өсөн беҙ ҡайҙа ғына булһаҡ та, ошо донъяға килгән, тәпәй баҫҡан еребеҙҙе, ауылыбыҙҙы һағынабыҙ.

V. Тыуған илгә һөйөү мәҡәлдәрҙә лә сағыла. Ниндәй мәҡәлдәр беләбеҙ?

Иле барҙың - көнө бар.

Ил ҡәҙерен белмәгән - башын юғалтҡан,

Ер ҡәҙерен белмәгән - ашын юғалтҡан.

Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.

Үҙ илең - алтын бишек.

VI. Ижади эш.Төркөмләп эшләү.

1-се рәт: ” Халҡыма хат”

2-се рәт: Шиғыр ижад итә

---------- биҙәгем,

---------- төйәгем

3-сө рәт: Мәҡәлдәрҙең яртыһын табырға.

Уҡыусыларҙың сығышын тыңлау.

- Ә һеҙ, уҡыусылар, Тыуған илебеҙ шаулап, гөрләп үҫһен, сәскә атһын өсөн ни эшләргә тейешһегеҙ?

- Яҡшы уҡырға, мәктәпте тамамлағас, яратҡан һөнәр һайлап, Тыуған илгә, халыҡҡа хеҙмәт итергә тейешбеҙ.

VII. Йомғаҡлау.

- Бөгөн дәрестә нимәләр тураһында һөйләштек?

- Нимә белдек ?

- Маҡсатыбыҙға ирештекме?

Шулай итеп, балалар, беҙ бөгөн дәрестә тыуған республикабыҙ - Башҡортостан хаҡында һүҙ йөрөттөк. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - үҙ илебеҙҙең ысын хужаһы, патриоты булып ҡалыу һәм киләсәктә Республикабыҙҙың сәскә атыуын, унда йәшәгән халыҡтарҙың дуҫлыҡ, берҙәмлеген нығытыу.

VII. Баһалау.

VIII. Өйгә эш.

1) Әҫәрҙе тасуири уҡырға;

2) Инша яҙырға “ Башҡортостан- тыуған илем”.

Дәресте Р. Шәкүрҙең һүҙҙәренә яҙылған, М. Сәлимов көйөнә “ Ерем, илем, телем” йыры менән тамамлау.

РАУИЛ БИКБАЕВ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ”

Дилмөхәмәтова Юлиә Әнсәр ҡыҙы,
Салауат районы Мөрсәлим мәктәбе

Тема: Р. Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”

Маҡсат: әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, проблематикаһын өйрәнеү; балаларҙың фекерләү ҡеүәһен, һөйләү телмәрен үҫтереү, һүҙ байлыҡтарын арттырыу; тәбиғәтте ҡәҙерләргә, яратырға, уны тере итеп ҡабул итергә өйрәтеү һәм бала күңелендә рухи ҡиммәттәр тәрбиәләү.

Йыһазлау: Башҡортостандың картаһы, компьютер, интерактив таҡта.

Дәрес барышы:

Ойоштороу моменты.

Өйгә эште тикшереү.

- Өйгә нимә бирелгәйне?

- Поэманың эстәлеген өйрәнергә, әҫәрҙә бирелгән яңғыҙлыҡ атамаларҙы табырға, географик урындарын билдәләргә, улар тураһында мәғлүмәттәр тупларға.

- Поэманың эстәлеге буйынса ике-өс кенә һөйләм менән яуап бирәбеҙ - әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ бара?

- Автор Ағиҙел йылғаһының башынан аҙағына тиклем юл үтә, тик эсергә таҙа һыу тапмай.

- Ниндәй топоминик атамалар осраны?

- Ирәмәл, Йүрүҙән, Яйыҡ, Уй, Әй, Бөрйән, Ямантау, Шүлгәнташ, Нөгөш, Иштуған, Торатау, Шәкетау, Шаһтау, Стәрлетамаҡ, Өфө, Ағиҙел, Кама.

Теманы һәм маҡсатты билдәләү.

- Шундай географик атамаларға бай булған тағы берәй ниндәй әҫәрҙе хәтерләйһегеҙме?

- Юҡ.

- Ни өсөн, уҡыусылар, һеҙҙең иғтибарығыҙҙы ошо атамаларға йүнәлтәм, тип уйлайһығыҙ?

- Башҡортостандың байлығын һыҙыҡ өҫтөнә алыу өсөн.

- Байлығын ғынамы икән... Атамаларҙың аңлатмаһы халыҡ яҙмышына бәйлеме?

- Әлбиттә, тәбиғәт яҙмышы – халыҡ яҙмышы.

- Автор топонимик атамаларҙың күплеге менән беҙгә нимә әйтергә теләй?

- Бәлки, Ағиҙел – Башҡортостандағы иң оҙон йылға.

- Дәрестең маҡсаты итеп ҡайһы һорауҙы билдәләйек?

- Дөрөҫ, топонимик атамаларҙың күплеге менән автор беҙгә нимә әйтергә теләй? Дәрес һуңында һеҙҙән ошо һорауға яуап көтәм.

Әҫәргә анализ. Бының өсөн беҙгә поэманы анализларға кәрәк. Эште былай ойошторабыҙ:

Беренсе баҫҡыста беҙ Башҡортостан Республикаһының картаһында поэмала осраған топонимик атамаларҙы билдәләп сығайыҡ. Сылбыр буйынса эшләйбеҙ. Карточкала бирелгән атамаларҙы магнит ярҙамында картаға ҡуябыҙ. Таҡтаға беренсе уҡыусы сыға, ҡалғандары дөрөҫмө-түгелме икәнлеген билдәләй. Иҫкәрмә, унда йылғаларҙың башланған урындары тураһында һүҙ барғас, уйлағыҙ, ҡайһы урынды күрһәтергә була икән...

Билдәләп сыҡтыҡ һәм һығымта эшләйбеҙ: картаға күҙ ташлау менән кеше ниндәй уйҙар кисерә ала? (Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәте бай һәм үҙенсәлекле.

Тыуған төйәгебеҙҙең матурлығын һөйләп тә аңлатырлыҡ түгел.

Эштең икенсе баҫҡысында топонимик атамаларҙы сағылдырған һүҙҙәрҙең составын тикшерәйек һәм мәғәнәһенә аңлатма биреп ҡарайыҡ. Шулай уҡ был географик урындарҙың ниндәй үҙенсәлектәре бар? Улар тураһында ниндәй мәғлүмәттәр тупланығыҙ? (Уҡыусылар аңлатма биргән ыңғайы, үҙҙәре туплаған мәғлүмәттәр менән бүлешә).

Ирәмәл – ир+әмәл – батырҙың эйәре, ерҙең кендеге, йыһан менән бәйле урын.

Бөрйән – бер+йән – тәүге кеше шунда барлыҡҡа килгән (Йәнбирҙе менән Йәнбикә).

Шүлгәнташ – Шүлгәндең ташы, Шүлгәндең, Аҡбуҙаттың торлағы, тәүтормош кешеләре йәшәгән урын.

Нөгөш – таҙа һыу тигәнде аңлата.

Торатау – Тура хандың тауы, изге тау, һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш бара.

Иштуған – иш+туған – ауыл исеме.

Ямантау – яман+тау – иң бейек тау.

Йүрүҙән – йор+үҙән – шәп йылға, йүгерек йылға.

Һығымта эшләп үтәйек.

- Һәр атама башҡорт халҡы тарафынан бирелгән.
- Тарихты сағылдыра.
- Тәбиғәт күренештәренең үҙенсәлектәрен сағылдыра.

Эштең өсөнсө баҫҡысында поэманан алынған цитаталар менән эшләйбеҙ. Экранда бирелгән өҙөктәр менән танышабыҙ һәм улар ярҙамында авторҙың ниндәй проблеманы сағылдырыуын билдәләйбеҙ.

Сәләм яҡташтары үҙ телендә
Уҡый белмәй Сәләмде.

(Силәбе өлкәһендә тороп ҡалған Арғаяш, Ҡоншаҡ башҡорттары үҙ телдәрен онотоуға дусар ителгәндәр).

Ылау-ылау китап күмелгән. (Коммунистарҙың дөрөҫ булмаған сәйәсәте халыҡ байлығын, ҡомартҡыларын юҡҡа сығара).

Ил нигеҙен нығытам тип,
Һөрҙәм нигеҙен тыуған йорттоң. (Бик күп башҡорт ауылдары “перспективаһыҙ” ауылдар исемлегенә керетелеп, ер йөҙөнән юҡ ителде).

Күпме йәштәр туған телдән биҙҙе,
Туған моңдан, йырҙан биҙҙеләр. (Милли телдәр бөтә тигән булып, бик күп ата-әсәләр балаларын манҡрот итеп тәрбиәләнеләр).

Күпме бысраҡ, күпме ағыулы ләм
Төбөн ҡаплап ята йылғаның. (Батып ҡалған бүрәнәләр ағыуға әйләнделәр).

Заводтарҙың тынынан
Төнгө һауаң
Янып тора ҡыҙған тимерҙәй. (Завод мөрйәләренән сыҡҡан ағыулы һауа кеше һаулығына ҡот осҡос зыян килтерә).

Качалкалар ерҙән май һура. (Нефть һурылып алынғандан һуң, тапалған, йырғысланған, таланған ерҙәр ҡала).

Ҡоштоң, кейектең, кешенең дә
Туҙҙырыла ғәзиз ояһы. (Һаҙлыҡлы урындарҙы киптереп, сәсеү ерҙәрен арттырыу сәйәсәте тәбиғәткә ҙур зыян килтерҙе).

Һайрар һандуғасты күңелдәрҙән
Компьютерҙар ҡыуып сығара. (Яңы замандың технологиялары кеше күңелен ярлыландыра).

Ҡайындарҙы ҡосаҡлар йәш йөрәк
Импорт сепрәктәрҙе ҡосаҡлай. (Акса, байлыҡ бик күптәрҙең күҙен томаланы).

Күрһәттеләр:

Бына ошо ерҙә
Атом реакторы булыр тип. (Электростанциялар төҙөлгән урындар кешелекте борсой).

Һығымта эшләп үтәбеҙ:

- Кешелек донъяһын һәр саҡ тел, экология һәм социаль проблемалар борсой.
- Дөрөҫ, уҡыусылар, был тормошта беҙ һәр ваҡыт бына шул проблемаларҙы хәл итеүгә әҙме-күпме үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә тейешбеҙ.

Дүртенсе баҫҡыста әҫәрҙең теленә иғтибар итеп үтәйек.

- Нисек уйлайһығыҙ, һүрәтләү сараларының ҡайһыһы поэмала йыш осраны.
- Йәнләндереү.
- Дөрөҫ, йәнләндереү алымын автор бик йыш ҡулланған.
- Ни өсөн автор был сараға йыш мөрәжәғәт иткән?
- Әлбиттә, ул шул юл менән уҡыусыларына тәбиғәттең тере йән икәнлеген тағы бер тапҡыр иҫбат итергә тырышҡан. Экранға күҙ һалығыҙ. Бына улар:

Илай аҡ балыҡ.
Һынсыл ҡарай Ирәмәл.
Тарих һөйләй Ағиҙелкәй.
Һыҙлана Иштуған.

Киләсәк киҫәтә.
Тауҙар китәләр.
Белореттың ҡорос сымдары
Уралдылар минең сәсемә.
Ташлан миңә, таш!
Һүк, ҡәһәрлә мине күк!
Оран һала ҡала.
Шаршы үлде
Заман Ямантауға ямау һала.
Заман башына баҫа Шаһтауҙың.

- Ни өсөн автор был сараға йыш мөрәжәғәт иткән?

- Әлбиттә, ул шул юл менән уҡыусыларына тәбиғәттең тере йән икәнлеген тағы бер тапҡыр иҫбат итергә тырышҡан.

- Хәҙер шул йәнләндереүҙәрҙе үҙегеҙ билдәләгән проблемалар ҡаршыһына ҡуйып сығығыҙ. (Социаль һәм экологик проблемалар).

- Күпселеге ниндәй проблемаларҙы аса инде?

- Дөрөҫ, был әҫәрҙә күберәге экологик проблемалар күтәрелгән.

Йомғаҡлау.

- Тимәк, ни өсөн автор топонимик атамаларҙы йыш телгә ала?

- Экологик проблемаларҙың киҫкенлеген күрһәтә.

- Нисек уйлайһығыҙ, был проблемаларҙы хәл итеп буламы?

- Була, тик бының өсөн берҙәмлек кәрәк. Автор топонимик атамалар ярҙамында уҡыусыларына нимә тип әйтергә теләй?

- Иҫ киткес мөғжизәле, бай, күркәм урында йәшәйбеҙ. Тере тәбиғәт беҙгә Урал батырҙан васыят булып ҡалған. Шуға ла беҙ тәбиғәтте һаҡларға, ҡәҙерләргә тейешбеҙ.

- Р. Бикбаев шул теләкте түбәндә бирелгән ҡайһы һүҙ менән әйтеп бирә?

Һаҡлайыҡ! Көрәшкә сығығыҙ! Ишетегеҙ! Ҡот тулһын!

- Дөрөҫ, ҡот тулһын! Бына ниндәй теләк менән тамамлай автор әҫәрен:

Йәмле Ағиҙелем буйҙарына
Ярҙарынан ашып ҡот тулһын!

- Ҡот һүҙенә аңлатма бирегеҙ.

- Бәхет, изге нур, яҡты теләк тигәнде аңлата. Ҡотлайым тигән һүҙ ҙә шунан килеп сыҡҡан. Ҡотло булһын да шул уҡ мәғәнәлә әйтелә. Ҡотло урында ғына яҡты көстәргә урын бар.

- Тимәк, киләсәктә беҙ нимә өсөн көрәшергә тейешбеҙ?

- Ҡот өсөн.

- Дөрөҫ, уҡыусылар, юғалтмаһаҡ ине шул ҡотто. Йорттарыбыҙҙан ҡот китмәһен, күңелдәребеҙҙең ҡото осмаһын, тәбиғәтебеҙгә яңынан ҡот ҡунһын!

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ“САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ” ӘҪӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ

Ситдикова Венера Мәхәсим ҡыҙы,
Салауат районы Лағыр урта мәктәбе

Тема: Ҡылыс нимә һөйләй?

*Маҡсат***:** шиғырҙы анализларға өйрәнеү, бәйләнешле телмәр, фекер ҡеүәһен үҫтереү. (әҫәр аша тыуған илгә һөйөү тәрбиәләү. Батырлыҡ һәм матурлыҡ тойғоларының әҙәбиәттә сағылышын күрһәтеү. Салауат образының үлемһеҙлеген төшөндөрөү. Яҡташыбыҙ өлгөһөндә уҡыусыларҙа ғорурлыҡ һәм шәхес тәрбиәләү.

Йыһаз: презентация. Салауат тураһында, Салауат музейы тураһында материалдар. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.

Эпиграф.

Һәр башҡорттоң күңелендә үҙ Салауаты бар.
М. Кәрим.

1. Ойоштороу. Проблемалы һорау ҡуйыу. Уҡыусылар! Нимә ул мөғжизә? Кем нисек аңлай? Был донъяла мөғжизә бармы? /яуаптар/ Бына бөгөн беҙ ҙә алған белемдәребеҙ менән дәрестә иҫ китерлек мөғжизәләр уйлап табайыҡ, үҙебеҙ мөғжизә яһайыҡ, мөғжизәгә ышанайыҡ. Ошо маҡсаттан сығып, беҙ һеҙҙең менән дәрес-күпер үткәрербеҙ. Бөгөнгө көн менән үткән быуат араһын тоташтырыр был күпер. Күперҙе беҙгә “Салауат ҡылысы” шиғыры менән Рауил Бикбаев һуҙа.

2. Уҡыусыларҙы шағир һәм уның ижады менән таныштырыу.

Кем ул Рауил Бикбаев? /Презентация/

Ҡыҫҡаса биографияһы менән танышыу. Танышыу терәк-схема ярҙамында бара.

Кем? –



Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы. Бик күп шиғырҙар, поэмалар авторы. Күренекле йәмәғәт эшмәкәре. Заман улы, заман шағиры. Рауил Бикбаев

Ҡасан? Ҡайҙа?

1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районы Ҡунаҡбай ауылында тыуған.

3. Хәҙер шағир һалған күпер аша үткән быуаттарға юл алайыҡ. Был юл – “Салауат ҡылысы” шиғыры.

1. Шиғырҙы тасуири уҡыу.

2. Һүҙлек эше. Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.

Аманат, ҡомартҡы, ырыҫ.

1. Йөкмәткеһе буйынса эш.

Һәр строфа буйынса эшләү.Строфаны уҡып, төп фекерҙе шағир һүҙҙәре менән әйтеү.

Коммуникатив атака. Яуаптарҙы бергәләп эҙләү.

1. Салауат нисә йәшендә?

- Ни өсөн автор Салауаттың йәшен һорай?

- Ил ҡайғыһы уның башында, тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

- Салауаттың ҡылысы ҡасан әйләнеп ҡайтты?

Салауат ҡылысынынң табылыу тарихын һөйләү. Бөгөн ҡылыс Салауат музейында һаҡлана. Презентациянан фотоһын күрһәтеү.

- Ҡылыс ниндәй? Уның һабына нимә төшөрөлгән? Һеҙ был турала нимә уйлайһығыҙ? Ни өсөн?

2. Ялтлаған ул күпме йәшен булып,

Даулап илдең бәхет – ырыҫын.

- Ни өсөн Салауаттың ҡылысы ил өҫтөндә йәшен булып ялтлаған?

- Илдең бәхет – ырыҫын даулауҙа ҡылыс ниндәй роль уйнай?

- Ҡылыстың тутыҡмауы нимә тураһында һөйләй?

3. Бар Рәсәйҙе дер һелкеткән был ҡылыс..

- Бар Рәсәйҙе дер һелкеткән был ҡылыс, тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

- Был ҡылыстан батшаларҙың башы саҡ-саҡ осмай ҡалған ҡырҡылып, тигән блдарҙа ниндәй фекер төйнәлгән?

4. Ҡарарға ине батыр күҙҙәренә…

- Салауат тип әйтеү менән күҙ алдына нимә килә?

Дөрөҫөн әйткәндә, Салауат тип әйтеү менән беҙ һәйкәлде күҙ алдына килтерәбеҙ. Шулаймы? (бит Салауат - кеше, реаль шәхес, уйҙары, хыялдары булған ир-егет, атай, ул булған.)

- Салауаттың киәфәтен, күҙ ҡарашын нисек күҙ алдына килтерәһегеҙ?

- Рәссамдар нисек күҙ алдына килтергән? Бер эш икенсеһенә оҡшағанмы? /картиналар күрһәтеү/

Яҡташ рәссамыбыҙ Тархан Заһиҙуллин эшләгән Салауаттың портретын күрһәтеү.

– Рәссам батырҙы нисек күҙ алдына килтергән?

Рәссамдың үҙ фекере лә уҡыла /«Салауат батыр – ил күрке» китабынан/.

Эпиграфты уҡыу. Мостай Кәрим ни өсөн шулай тине икән?

5. Телгә килһә, ни һөйләмәҫ ине.

Төркөмләп эшләү. Һәр төркөм үҙ фекерен яҡлай.

- Салауаттың ҡылысын автор ҡомартҡы, ти. Ни өсөн?

- Яуға әйҙәр өсөн кешегә ниндәй сифаттар кәрәк? Артынан меңләгән кешене эйәртә алған батырға ниндәй сифаттар хас булған?

6. Улының ҡулына ҡылысы күсмәһә лә…

- *Улының ҡулына ҡылысы күсмәһә лә, телдән телгә күсер һүҙ ҡалған,* тигән юлдарға ниндәй мәғәнә һалынған? Нимә ул телдән телгә күсер һүҙ?

- Бөгөн Салауаттың исеме нисек мәңгеләштерелгән?

- Яҡташыбыҙ исеме менән бәйле ниндәй иҫтәлекле урындар бар? /презентация/. Уҡыусылар сығышы.

7. Исемен әйтһәң, телде киҫкәндәр. Парлап эшләү.

- Салауатты ҡулға алғас, батшабикә ниндәй указ сығара? Ни өсөн? Ул быны ни өсөн эшләй?

- Халыҡ Салауатты онотҡанмы? Йөҙ йыл исемен әйтеүҙе тыйыу менән генә батыр исеме халыҡтың хәтеренән юйылдымы?

Архив материалдарынан күренеүенсә, 1814 йылда беҙҙең Лағыр ауылында Салауат Юлаев исемле ир-егет булған. Шулай булғас, ауылым халҡы ҡурҡаҡтарҙан һаналмаған, батшаларҙың указдары уны ҡурҡытмаған. Салауаттың эйәре, йырҙары һаҡланыуы ла күп нәмә хаҡында һөйләй.

8. Ғүмерҙең иң аяныс мәле – батыр ҡулынан ҡылыс төшкәне.

- Ғүмерҙең иң аяныс мәлен автор нимә менән сағыштыра? Ни өсөн?

- Батыр ҡылысы кемгә күсергә тейеш? Ни өсөн? Быныңменән шағир нимә әйтергә теләй?

- Дошман ҡулына батыр ҡылысы күсеүе нимә ул?

- Халҡымдың аяныслы тарихында быға миҫалдар күп. Башҡор ихтилалдарын иҫкә төшөрәйек /хронологик таблица. Презентация/

9. Һелтәй алмаҫ Салауаттың ҡылысын һатлыҡ йән.

- Ни өсөн Салауаттың ҡылысын һатлыҡ йән һелтәй алмаясаҡ?

- Салауатты һатыусыларҙың артабанғы яҙмышы нисек булған тип уйлайһығыҙ? Вәғәҙә ителгән алтындарҙы ала алдымы икән һатлыҡтар? Алмаһа, ни өсөн? Бында беҙгә ниндәй фәһем ята?

10. Салауаттың һүҙен берәй яуыз телебеҙҙән йолҡоп ҡараһын.

- Авторҙың Салауаттың һүҙен телебеҙҙән йолҡоп алыусыларға хөкөмө ҡаты. Ни өсөн? Был юлдарҙың мәғәнәһе нимәлә? Шағир беҙҙе нимәгә саҡыра?

11. Шиғырҙың тел-һүрәтләү саралары өҫтөндә эш.

- Шағир ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланған?

- Эпитеттар-

- Йәнләндереүҙәр-

- Сағыштырыуҙар-

Уҡыусылар төркөмдәргә бүленеп эшләй.

Һығымталар яһау.

Шағир нимә әйтергә теләй?

Шиғыр нимәгә оҡшаған? Шағир уйланамы? Борсоламы? Ғорурланамы? шатланамы?

Был шиғыр – күпер тигән инек? Ниндәй күпер була ала ул?

Салауаттың ҡылысы беҙгә бөгөн нимә һөйләй?

Ни өсөн Рауил Бикбаев шиғырына нәҡ шундай исем бирҙе икән? Шиғырҙың исеме нимә аңлата?

Яуаптарҙан алгоритм төҙөү.

Ҡылыс

Иҫтәлек

Хәтирә

Ир-егеттең ҡоралы

Яу символы

Күпер – үткәндәргә күпер

Хәтер – мәңгелек

Мөғжизәне үҙебеҙ тыуҙырайыҡ, тигән инек дәрес башында. Был дәрестә ниндәй мөғжизә күрҙек һуң? Вәғәҙә ителгән мөғжизә нимәлә? /барыһы ла үҙебеҙҙән тора, беҙ – хәтер/.

- Салауаттың йыл һайын июнь айҙарында тыуған төйәгебеҙгә әйләнеп ҡайтыуы мөғжизә түгелме?

- Нисә йөҙ йыл үтһә лә, башҡортомдоң хәтерендә, һаман телендә булыуы мөғжизә түгелме?

- Тарихсылар һаман һорауҙарына яуап эҙләй, һәр шағир, һәр яҙыусы, драматург, рәссам Салауатты үҙенсә күрә, шул мөғжизә түгелме?

Һуңғы көндәрҙә ауылдашыбыҙ Зәйтүнә Әйленең Салауат үткән юлдарҙан үтеп яҙылған “Теле булһа икән таштарҙың” тигән китап-сәйәхәтнамәһе баҫылып сығыуы үҙе мөғжизә түгелме?

Шулай итеп, Салауат һәр саҡ беҙҙең менән.

Йомғаҡлау. Һеҙҙеңсә, халыҡ үҙ улдарын иҫләргә тейешме? Был ни өсөн кәрәк? Ниндәй һығымта яһайбыҙ? Дәрестә нимә белдек? Быуаттар төпкөлөнән Салауат беҙгә, бөгөнгө йәштәргә, нимә тип өндәшер ине? Ни өсөн?

Һеҙ киләсәк быуынға Салауатты еткерергә тейешһегеҙ. Киләсәк һеҙҙең ҡулда. Бөгөнгө менән иртәгә араһында күпер – һеҙ.

Баһалау. Өйгә эш.

1. Шиғырҙы тасуири уҡырға.

2. ң строфаһын ятларға.

3. ”Салауат ҡылысы миңә нимә һөйләй?” темаһына инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «УРАЛЫМА», «САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ» ШИҒЫРҘАРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Саматова Айһылыу Иштимер ҡыҙы,
Салауат районы Ахун урта мәктәбе

Тема: Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың «Уралыма», «Салауат ҡылысы» шиғырҙарын өйрәнеү.

Маҡсат:

1) Рауил Бикбаевтың «Уралыма», «Салауат ҡылысы» шиғырҙары менән танышыу; шиғырҙарының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү;

2) шиғри телмәргә анализ биреү күнекмәләрен нығытыу, тасуири уҡыу һәләттәрен үҫтереү;

3) батырҙар менән ғорурланыу тойғоһо, илһөйәрлек хисе тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, китаптар күргәҙмәһе, методик папка, компьютер презентацияһы, электрон дәреслек, аңлатмалы һүҙлектәр.

Дәрес барышы:

I. Инеш әңгәмә.

- Һаумыһығыҙ, ултырығыҙ! Бер-беребеҙгә ҡараштыҡ, йылмайҙыҡ. Дәрес башланды.

- Уҡыусылар, иғтибарығыҙҙы тағтаға йүнәлтегеҙ. Һеҙ унда нимә күрәһегеҙ? /Слайд №1 - ҡылыс һүрәте/

- Нимә ул ҡылыс? /Аңлатмалы һүҙлектән табып уҡыу/

-Ҡылыс менән бәйле ниндәй әҫәр уҡығайныҡ? /М. Кәрим «Өс таған», Ҡылыс - йән ҡыйыусы ҡорал, шуға ла бәһлеүән гөрһөлдәп ергә ауған урында һыуыҡ күл - Ҡылыскүл барлыҡҡа килгән/.

- Ҡылыс ҡында торһа нимәне аңлата? /Уҡыусылар яуабы/

- Бына был һәйкәлдә Салауат Юлаевтың ҡылысы ҡайҙа тора? /Слайд №2 - ҡынында/

- Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? /Салауат Юлаев азат, бәхетле тормош яҡлы булғаны өсөн ҡылысы ҡынында/.

- Афарин. /Слайд №3/. (Был һүрәт тураһында нимә әйтергегеҙ? Ни өсөн Урал тауҙары һүрәте күрһәтелгән?) /Урал тауҙары - Башҡортостаныбыҙ, Салауат районы Тәкәй ауылы батырҙың тыуған төйәге символы, ә Салауат батыр иленең, халҡының азатлығы өсөн көрәшкән/.

- Шулай итеп, был дәрестә беҙ нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

- Эйе, тыуған төйәгебеҙ һәм Салауат ҡылысы тураһында. Һәр кем өсөн изге булған ошо образдарҙы Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Рауил Бикбаев үҙенең шиғырҙарында нисек һынландыра, ни өсөн,- бына ошо турала һөйләшербеҙ.

II. Тема, маҡсатты билдәләү.

– Дәрестең эпиграфына иғтибар итегеҙ. /Слайд №4/

Батырҙарҙы яуҙа күп күрҙек,

Салауаттай батыр юҡ икән. (Халыҡ йырынан.)

– Дәрес ниндәй темаға арнала?

Эпиграфтан сығып билдәләйбеҙ. /Яуаптар/

– Эйе, был дәрестә батырҙар тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Иң күренекле, иң билдәле батырыбыҙ, милли геройыбыҙ Салауат Юлаев тураһында һөйләшербеҙ. Шулай уҡ ике шиғырға ла уртаҡ булған образға иғтибар итербеҙ, ни өсөн ошо образ алыныуын иҫбатларбыҙ.

III. Дәфтәрҙәрҙә эш.

– Бөгөнгө числоны, теманы яҙабыҙ. /Слайд №5/

– Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың «Салауат ҡылысы» һәм «Уралыма» шиғырҙары.

– Уҡыусылар, мин һеҙгә хәҙер Рауил Бикбаев тураһында белешмәләр таратам, һеҙ иғтибар менән уҡығыҙ һәм «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслегенең эш дәфтәренән 20-се биттәге таблицаны тултырығыҙ.

1. Рауил Бикбаев ҡасан һәм ҡайҙа тыуған.	Рауил Төхфәт улы 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған.
2. Тәүге шиғырҙар йыйынтығы ни өсөн «Дала офоҡтары» тип атала?	1964 йылда «Дала офоҡтары» китабы сыға. Ул - дала малайы, һуғыш осоро балаһы. Үҙенең әсәһен, апаларын, тыуған яғын һағына. Шуға ла хәтирәләр формаһында «Дала офоҡтары» тип атай тәүге китабын.
3. Рауил Бикбаев ниндәй маҡтаулы исемдәргә лайыҡ?	Ғәлимов Сәләм, Салауат Юлаев, Рәми Ғарипов исемендәге премия-ларға, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республи-каһының атҡаҙанған фән эшмәкәре исемдәренә лайыҡ булған.
4. Рауил Бикбаевтың ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?	

Йомғаҡлау. /Уҡыусыларҙың яуаптарын төҙәтеү, тулыландырыу/

- (Хәҙер беҙ һеҙҙең менән «Уралым» шиғырын өйрәнербеҙ.

IV. «Уралым» шиғыры өҫтөндә эш.

а). Уҡытыусының тасуири уҡыуы.

- Уҡыусылар, шиғырҙы иғтибар менән тыңлағыҙ, ниндәй һүҙҙәр аңлашылмай, ҡәләм менән билдәләп барығыҙ.

V. Һүҙлек эше.

/Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, аңлатыу, һөйләмдәр төҙөү/ Слайдтан ҡарау.

Аңлатмалы һүҙлектәрҙе ҡулланырға мөмкин.

VI. Сылбырлы уҡыу.

- Иғтибар менән уҡығыҙ һәм шиғырҙың асылына төшөнөргә тырышығыҙ.

- Нимә тураһында әйтелә был шиғырҙа?

- Уралдың үткәнен автор нисек һүрәтләй? /1,2 строфаны яңынан уҡып үҙ һүҙҙәре менән һөйләйҙәр/

- Авторға нимә йәшәү көсө бирә? /3-сө строфанан яуап табалар./

- Уның күңеле ни өсөн тыныс? /4-се строфа./

- Һеҙ Урал тураһында тағы нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ? /Боронғо башҡорттар өсөн Тыуған ил һәм Урал төшөнсәһе айырылғыһыҙ булған. Башҡорттарҙың иң изге уйҙары, йырҙары, көйҙәре, легендалары, ҡобайырҙары Уралға арналған. Сөнки Уралда беҙҙең тыуған төйәгебеҙ ята, тыуған ер һәр кеше өсөн берҙән-бере һәм иң ҡәҙерлеһе. Тыуған ил, тыуған ер,туған тел, тыуған халҡыбыҙ - донъялағы иң изге төшөнсәләр. Беҙҙең илебеҙҙең тәбиғәте бик бай һәм ғәжәп матур ул. Башҡортостандың һәр мөйөшө ҡарап туйғыһыҙ. Бына шуға ла тыуған ил темаһына мөрәжәғәт итә автор./

VII. Парлап эшләү

Шиғырҙы эстән уҡып барабыҙ, эштәрен үтәп барабыҙ.
1-се пар: Метафора табырға.
2-се пар: Өндәш һүҙ.
3-сө пар: Нығынған һүҙбәйләнештәр.
4-се пар: Йәнләндереү.
5-се пар: Сағыштырыу.
Тикшереү. Шағирҙың тел байлығына иғтибарҙарын йүнәлтеү.

VIII. Йомғаҡлау. – Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән Рауил Төхфәт улының «Уралыма» шиғыры менән таныштыҡ, исеменән үк күренеп тора, Урал шағир өсөн яҡын һәм ҡәҙерле. Ул үҙенең «Дала офоҡтары» исемле тәүге китабын да ошо шиғыры менән башлай, һәм ошо тема уның бөтә ижад юлында дауам итә. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ? Әйҙәгеҙ, шиғырҙан уның беҙгә әйтәһе һүҙҙәрен билдәләйек. Төп идея ҡайһы юлдарҙа сағыла? /Слайд № 7/

Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та,
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

– Дөрөҫ, бына ошо юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
– Эйе, һәр кемдең Тыуған ере, ғәзиз халҡы була. Беҙҙең дә Башҡортостан тигән гүзәл илебеҙ, туған телебеҙ, башҡорт милләтебеҙ бар. Беҙ бай тарихлы оло Урал илендә йәшәйбеҙ, дәүләтебеҙ ышаныслы ҡулдарҙа, хәҙер ҙә Рауил Төхфәт улы кеүек ҡыйыу фекерле, кешелекле шәхестәребеҙ бар икән, - беҙҙең ҡындарҙа һынмаҫ ҡылыс, быны оноторға ярамай.
– Ял минуттары.
IX. «Салауат ҡылысы» шиғыры өҫтөндә эш.
– Ә бына икенсе шиғырында һүҙ нимә тураһында бара икән? /Электрон дәреслектән «Салауат ҡылысы» шиғырын тыңлау/.
– Был шиғырҙа һүҙ нимә тураһында бара?
– Салауат Юлаевтың ҡылысы тураһында нимәләр беләһегеҙ? /һүрәтен күрһәтеү/ Слайд № 8.
– Ул ҡайҙа һаҡлана? Касан әйләнеп ҡайтҡан? Шиғырҙа был турала нимә әйтелә? /табып уҡыу/
– Тарихи сығанаҡтарға әйләнеп ҡайтайыҡ. Әйҙәгеҙ, Салауат ҡылысы нисек итеп Өфөнөң Милли музейына әйләнеп ҡайтыуын тыңлап китәйек. /Алдан әҙерләнгән уҡыусы сығышы/.
– Афарин. Хәҙер шиғырҙы строфалап уҡыйбыҙ, нисек аңлағанығыҙҙы тикшерәйек.
– План буйынса шиғырға ҡыҫҡаса анализ яһайыҡ. /Пландар уҡыусыларҙың алдында ята/.
1. Әҫәрҙең исеменең мәғәнәһен нисек аңлайым?
2. Жанры.
3. Темаһы.
4. Идеяһы.
5. Проблемаһы.
– Шул план буйынса яҡынса тикшереү үткәрелә, йомғаҡ яһала.

X. Йомғаҡлау.

– Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән Рауил Бикбаевтың ниндәй әҫәрҙәрен ҡараныҡ?
– Шиғырҙарында авторҙы ниндәй мәсьәләләр борсой?
– Ике шиғырҙа ла ниндәй уртаҡ образ бар? Ни өсөн? Ҡылыс образына ниндәй мәғәнә һалынған?
– Рауил Бикбаев ике шиғырында ла тыуған илдең ирке, азатлығы өсөн көрәш идеяһын сағылдыра. Урал образы – Тыуған ил образы, ә илде һаҡлаусы, ил батыры Тыуған ил төшөнсәһенән айырылғыһыҙ. Юҡҡамы ни: «Иле бар батыр хур булмаҫ», тип әйтәләр. Урал тигән ғорур башҡорт иленең һәр саҡта ла Салауаттай батырҙары булған, һәм уларҙың ҡулында алмас ҡылыс – ил һаҡлаусы ҡорал булған. Ҡорал ҡулда булһа, һәр килмешәк шул ҡоралдан ауған туралып. Тарихыбыҙҙы, хәҙергебеҙҙе йәнәш ҡуйып, күренекле дәүләт эшмәкәре, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев беҙҙе лә тыуған илде һөйөргә, илде, телде һаҡларға, үткәндәрҙе онотмаҫҡа өндәй, уның шиғыры беҙҙең өсөн оран булып яңғырай. Шулай булғас, һеҙ ни эшләргә тейешһегеҙ?

X. Ижади эш.

– Балалар, әгәр һеҙгә тау, ҡылыс, Салауат батырҙы берләштереп һүрәт төшөрөргә ҡушһалар, һеҙ ниндәйерәк һүрәт яһар инегеҙ? Ни өсөн? /Тау башында Салауат батыр баҫып тора, ҡулында ҡурайы, ә ҡылысы ҡынында итеп эшләр инем. Сөнки беҙ тыныс тормош яҡлы, беҙгә һуғыш кәрәкмәй. Ә тирә-яғыбыҙ сәскәгә күмелеп ултырһын, башҡорт халҡының мәшһүр ҡурай моңо тынмаһын/.
– Афарин, шулай булһын! Ул ваҡытта беҙ бәхетле булырбыҙ! Слайд № 9

XI. Өйгә эш.

1. «Мин – Урал улы» /Егеттәргә инша яҙырға/.
2. «Салауат ҡылысы» һәм «Уралыма» шиғырҙарында ҡылысты тасуирлаусы урындарҙы яҙып алырға һәм сағыштырырға. /Ҡыҙҙарға/.
3. Тасуири уҡырға. /бөтә уҡыусыларға/.

XI. Яуаптарҙы баһалау.

“БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА” ШИҒЫРЫ

Бәҙретдинова Алһыу Марсель ҡыҙы,
Салауат районы Ахъя төп белем биреү мәктәбе

Тема: “Башҡортостан бында башлана”

Маҡсат: 1. Күренекле шағирҙың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү.

2. “Башҡортостан бында башлана” шиғырын тасури уҡыу, анализлау.

3. Уҡыусыларҙа ижадҡа ынтылыш уятыу, рухи донъяларын байытыу, тыуған илгә, туған телгә һөйөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, китаптар күргәҙмәһе, шағирға бағышланған стена гәзите, магнитофон, яҙыусының тормош юлы буйынса презентация, медиапроектор, экран, таҡтала эпиграф итеп алынған һүҙҙәр.

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу.

Бер уҡыусы Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана“ шиғырынан өҙөк яттан һөйләй. (Шағирҙың тыуған яғының күренештәре төшөрөлгән слайдтар проектрҙан күрһәтелә)

Эпиграф уҡыла.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек.
Минең кеүек - Башҡортостан кеүек-
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Уҡытыусы. Тыуған ер, тыуған яҡ , тәбиғәт... Һәр кем өсөн изге, ҡәҙерле ул. Яҙыусылар, шағирҙар өсөн дә мәңгелек тема, яҡты образ булып ижадының буйынан-буйына һуҙылып бара.

2. Уҡыу маҡсаты.

Был дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры, республикабыҙҙың Салауат Юлаев һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялары лауреаты Рауил Бикбаевтың тыуған ер, халҡыбыҙ яҙмышына бағышланған шиғырҙарын өйрәнербеҙ, уға эйәреп үҙебеҙ ҙә шиғыр яҙып ҡарарбыҙ, өйҙә эшләп килгән ижади эштәрегеҙ менән танышырбыҙ.

3. Уҡыу маҡсатын сисеү.

Уҡытыусы. Һеҙ өйҙә яҙыусының тормош юлы һәм ижады менән танышып килдегеҙ. Хәҙер бер нисә һорауға яуап бирәйек. (Проекторҙа яҙылған һорауҙар буйынса схема төҙөү)

1. Р. Бикбаев нисәнсе йылда һәм ҡайҙа тыуған? (Ҡунаҡбай ауылында)

2. Ҡайһы ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған? (Ғәбдрәфиҡ ауылында)

3. Ҡайһы уҡыу йортонда белем ала? (Экранда Башҡорт дәүләт университетының фотоһы күрһәтелә)

4. Р.Бикбаевтың яҡташ яҙыусыларынан кемдәрҙе беләһегеҙ? (Д. Юлтый, М. Буранғол, С. Ағиш, F. Амантай)

5. Шиғырҙар яҙыуына, шиғриәт донъяһына инеп китеүгә уны нимә рухландыра? (Йыр-моңға бай кешеләр араһында үҫеүе, оләсәһе һөйләгән бәйеттәр)

6. Кем ул Рауил Бикбаев?

Экранда: Рауил Бикбаев - шағир, ғалим, философия фәндәре докторы.

7. Рауил Бикбаев ниндәй премияға лайыҡ булған?

Экранда: Рауил Бикбаев - Салауат Юлаев һәм Ғәлимов Сәләм премиялары лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев ордены кавалеры.

8. Хәҙерге ваҡытта Рауил Бикбаев кем булараҡ билдәле?

Экранда: Р. Бикбаевтың фотоһы. Яҙыу: “Рауил Бикбаев – Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе”

Уҡытыусы: Быйылғы уҡыу йылында беҙ билдәле шағирҙың, ғалимдың ижадын тағы ла тәрәнерәк өйрәнәбеҙ, китаптары менән танышабыҙ.

Экранда – китаптары:

“Дала офоҡтары”-1964
“Ҡош юлы” Шиғырҙар. 1967
“Автобиография” 1969
Лирика. Шиғырҙар. 1979
“Ерем балҡышы” Шиғырҙар. 1979
“Яҙмышым” Шиғырҙар. Поэмалар. 1988
“Бураҙналар” Шиғырҙар, хикәйәттәр 1985
“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ! Поэма, шиғырҙар 1985
“Шағир уйы – шағир намыҫы” 1997

Уҡытыусы: Рауил Бикбаевтың поэзияһы - хәҙерге заман тураһында, туған халҡының данлы тарихы, бөгөнгө хәле тураһында тәрән уйланыуҙар менән һуғарылған ижад.

Шағирҙың “Башҡортостан бында башлана“ тигән шиғырына күҙ һалайыҡ. Таҡтала ошо шиғырҙан ҡайһы бер һүҙҙәргә аңлатма бирелгән

Һүҙлек:

Дарья – икһеҙ- сикһеҙ һыу
Тараф – яҡ
Баҡтым – ҡараным

Ҡарыш – үлсәү берәмеге

Яралдым –тыуҙым

Уҡытыусы. Күренекле шағирҙың фоноҙмаһын тыңлап китәбеҙ, китаптарын ҡарап барығыҙ. (Экранда һәр строфа баҫылып бара.)

Һорау.

Шиғырҙа кемдәр тураһында һүҙ бара? (Яуап)

1-4 строфаларҙы бер уҡыусы уҡып ишеттерә

Уҡытыусы.

Һорау: Уҡыусылар, һеҙ Башҡортостандан ситкә сығып китһәгеҙ, ниндәй хистәр кисерәһегеҙ? (Яуап)

Эйе, шағир ҙа һеҙҙең кеүек тыуған яғын, республикаһын һағынып, талпынып ҡайта. Шуға күрә лә ул тәүге 4 строфаһында тыуған илен, Башҡортостанын данлай.

5- 7 строфаны уҡытыусы үҙе уҡый

Экран: Яйыҡ (Урал) йылғаһы ярҙарынса, көньяҡтан Юшатыр буйҙарынан төньяҡтағы Әй буйҙарынаса йәйрәп ятҡан киң Башҡортостандың географик күренеше асыла.

Һуңғы 4 строфаны икенсе уҡыусы уҡый

Уҡытыусы:

Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.

Йөҙөгөҙ аҡ булһын,

Минең кеүек,

Минең кеүек - Башҡортостан кеүек -

Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Һорау:

Ни өсөн шулай ти шағир? (Яуап)

Эш төрө:

Ә беҙ үҙебеҙҙең, яҡындарыбыҙҙың, Башҡортостаныбыҙҙың алдында йөҙөбөҙ аҡ булһын өсөн ниҙәр эшләй алабыҙ, шул турала һәр кемдең парта алдында ятҡан һүрәттәге ромашка таждарына һүҙҙәр яҙабыҙ. (һәр уҡыусы эшен уҡып таҡталағы Башҡортостан картаһына элә бара)

Уҡытыусы: Шулай итеп, Башҡортостан кемдән башлана? (Яуап)

Дөйөмләштереү.

Уҡытыусы: Эйе, шағир тыуған илен, Башҡортостанын маҡтап, данлап ҡына ҡалмай, ә ошо ерҙә йәшәгән халҡына матур йәшәргә, илен, телен яратырға, һаҡларға мөрәжәғәт итә.

Төркөмдәр менән эш. (Класс 3 төркөмгә бүленә.)

Уҡытыусы: Был шиғырҙа йәнләндереү, сағыштырыу, фразеологизмдар бик күп.

1-се төркөм сағыштырыуҙар, 2-се төркөм йәнләндереү, 3-сө төркөм фразеологизмдар табып (ваҡытҡа) яҙа.

Дәресте йомғаҡлау.

Уҡытыусы:

Дәресебеҙҙе Р. Бикбаев юлдары менән тамамлағы килә.

“Тупрағым...
Тайған саҡта таянысым булыр
Был тупраҡтан ҡалҡҡан
Һәр ҡыяҡ.
Тупрағымдан ҡыяҡ ҡалҡҡан кеүек
Йөрәгемдә яңы йыр тоям.

Күреүебеҙсә, шағир ер, ил, шағир төшөнсәһен бергә бәйләй. Бөтә ғүмере буйы ул халҡына тоғро хеҙмәт итергә бар көсөн һала. Беҙ ҙә уның шиғырҙарынан дәрт, илһам алып, тыуған илебеҙгә лайыҡлы кешеләр булып үҫәрбеҙ тип ышанам.

Баһалар ҡуйыу.

Өйгә эш. Бер нисә вариант буйынса шиғыр яҙып килергә.

1.) _____күп: 2.) _____талдар,
_____иңе _____Туҡсоранға.
_____күк _____улар
_____ялҡыны. _____йылғабыҙға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУһАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИЯ ПРОБЛЕМАҺЫ

Хизәева Лилиә Йәмил ҡыҙы,
Мишкә районыТатарбай урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, хәүефләндергән иҡтисади, экологик мәсьәләләрҙе асыҡлау; уҡыусыларҙа тыуған тәбиғәттең матурлығын, байлығын һаҡлау, уға һөйөү тәрбиәләү; дәрестә күтәрелгән проблемаларға ҡарата үҙ фекерҙәрен асыҡ сағылдырырға өйрәтеү.

Йыһаз: мультимедиапроектор, ҡурай моңдары яҙылған компҡтдиск, компьютер, Р.Бикбаевтың “Һыуһаным- һыуҙар биреегеҙ!” поэмаһы, Р. Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары”поэмалары.

Төйәгемә күҙ ташлаһам,

Хәүефтәрем ҡуҙғала,
Зифа ҡамышын һарғайтып,
Һыуҙар кәмей йылғала,
Эсер һыуҙар ҙа ҡороһа,
Донъябыҙҙан ни ҡала?

А. Игебаев.

I. Ойоштороу моменты.

II. Инеш әңгәмә. Тема, маҡсат менән таныштырыу (тема, эпиграф мультимедиа проекторҙа күрһәтелә).

- Дәрестең эпиграфы итепалынған шиғыр юлдары нимә тураһында?

- Эйе, уҡыусылар был шиғыр юлдарында шағир, хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, хәүефләндергән иҡтисади, экологик мәсьәләләр хаҡында яҙған.

- Ә нимә һуң ул экология, экологик проблема төшөнсәһе? Шуны асыҡлап үтәйек. Һеҙ уны нисек аңлайһығыҙ? (Уҡыусылар яуабы).

- Был теманы асыҡлаған тағы ниндәй әҫәрҙәр һәм шиғырҙар беләһегеҙ? (Уҡыусылар яуабы).

Р. Ниғмәти поэмаһынан өҙөктө бер уҡыусыуҡый.

Ағиҙелкәй!
Һинең буйҙарыңда
Нисә быуын ғүмер кисергән,
Үҙең кеүектәрән,
Үҙеңдәй киң
Күпме йыр бар һинең исемгә!

- Был поэманың авторы кем? (Р.Ниғмәтигә арналған презентация күрһәтелә).

- Был поэманы нисәнсе йылда яҙған? (1938 йылда)

- Был ваҡытта халыҡтың Ағиҙелгә мөнәсәбәте нисек, һыуы ниндәй булған?

- Тимәк, был ваҡытта Ағиҙел көмөштәй саф һыулы, кешенең азат, ирекле тормошҡа сығыуына, илдәге үҙгәрештәргә, үҫештәргә ҡыуаныусы булып күҙ алдына баҫа. Ул һәр саҡ кешегә ярҙам итеүсе лә.

- Әйҙәгеҙ, хәҙер Р.Бикбаев менән оҙон юлға, сәфәргә сығайыҡ. (Р.Бикбаевҡа арналған презентация күрһәтелә).

- “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы нисәнсе йылдарҙа яҙыла? (1987-1988 йылдарҙа).

- Был ике поэма араһында ярты быуат ғүмер ята. Заманалар үтә тора, Ағиҙел ошо сафлығы менән беҙҙең көндәргә килеп етә алғанмы? Ошо һорауға яуапты поэманан эҙләйек. Шағир менән сәфәребеҙҙе башлап ебәрәйек.

(Бер уҡыусы поэманан өҙөктө яттан һөйләй).

(Уралҡайым! Үҙәнеңә төшәм,…
Аҡ сәфәргә әйҙә, Ағиҙел. – тигән урынға тиклем.

Ә был ваҡытта Ирәмәл картинаһы күрһәтелә, аҫтына поэманан өҙөк яҙыла:

Был төйәктә һәр бер тау ҡуйыны
Ил һуғарыр изге ер мәллә?
Бар яҡтарға һуҙылып һыуҙар аға,
Ҡайҙа ҡараһамда, Ирәмәл.

- Шулай тип әйтә шағир Ирәмәлдән иртәгәгә баҡҡанда, Иҙелбашынан илен байҡағанда. Шулай итеп, Иҙелбашынан, Ирәмәл итәктәренән кескәй шишмәләрҙән һыуалған, йырғанаҡтан йылғаға әйләнгән Ағиҙел буйлап оҙон сәфәр башланып китә.

Бергә оҙон юлға сыҡҡас, сәфәр башлығы шағир һүҙҙәрен, күҙәтеүҙәрен тыңлап, Ағиҙел буйы йәмдәренә һәм байлыҡтарына бергәләп ҡыуанырбыҙ, тәбиғәтен, урман-туғайҙарын самаһыҙ тәләф итеп, ҡырып-емереп бөткән яҡтарын күреп хәүефләнербеҙ, йөрәктәребеҙ әрнер әле.

Сәфәр башы: Ағиҙел менән шағир сәфәргә сыға, тип экранға яҙыла.

- Шағир ҡыуанып, шатланып килгәндә нимәгә осрай? (Белорет тураһындағы урындарҙы табып уҡыйҙар).

1-се туҡталыш: Белорет ҡалаһы (һәр туҡталыш экранда күрһәтелә бара).

Ағыуланған завод быуаһында сәсәй-сәсәй быуылалар, үткенселәр балыҡ шартлата, бала-саға ҡырсынташ менән уйнай.

- Һәм юлын дауам итеп ҡайһы районға барып сыға, был районында Ағиҙел ниндәй афәттәргә шаһит була? Бөрйән районыны, “Шүлгән” ҡурсаулығы, ҡарағай урманы күрһәтелә. Аҫтына шиғыр юлдары яҙыла:

Ҡарағайҙар,
Солоҡ ҡына тотор ҡарағайҙар!
Улар менән бергә ерегеп үҫкән
Халыҡтың да
Ай-вайына ҡарамайҙар,
Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар,
Әйтерһең дә ҡырағайҙар!

- Шағирҙың урманға мөрәжәғәтенә иғтибар итәйек. (Урман!... тип башланған урынды табып уҡыйҙар).

2-се туҡталыш: Бөрйән районы.

Ҡарағай урманы юҡҡа сыға, солоҡсолоҡ онотолған, һал ағыҙыр өсөн йылғаларҙы төҙәйтәләр, шаршыларҙы киптерәләр.

- Был вәхшилекте кем ойоштора һуң?

- Артабанғы сәфәребеҙҙең киләһе нөктәһе ҡайҙа булыр тип уйлайһығыҙ?

Шүлгән мәмерйәһе күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Шүлгән! Иң боронғо храм булып,

Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

3-сө туҡталыш: Шүлгән мәмерйәһе.

Шүлгән һүрәттәре емерелгән, сувенир тип, ватып алынып бөткән.

- Шүлгән мәмерйәһенә башҡорт бөгөн үҙе хужа түгел . Мәмерйәбеҙ Мәскәү ҡулында.

- Был туҡталышында автор ниндәй мөһим проблема тураһында фекер йөрөтә, кемдәр хаҡында уйлана? М. Аҡмулла, Ш. Бабич, Д. Юлтый портреттары күрһәтелә. Аҫтына шиғыр юлдары яҙыла:

Аҡмулланың аҡ йөҙөнә
Ҡара яғылды,
Бер сабылған башы Бабичтың
Яңынан сабылды,
Таңға юл ярыусы Юлтыйҙар
Төрмәгә ябылды.
Бөркөттәрҙең ҡанатына
Герҙәр аҫылды.
Йәннәт булыр ил ҡуйынына
Гүрҙәр асылды…
Меңдәр аҫылды, меңдәр атылды…

- Сәйәхәт эстафетаһын Шүлгәндән һуң Иштуған ҡабул итә. Лирик геройҙы айырыуса ниндәй проблема борсой?

4-се туҡталыш: Иштуған һыуһаҡлағысы.

Ауылдар, зыяраттар һыу аҫтында ҡала. Тарих онотола.

- 50 йыл элек, беҙгә яҡын Иштуған һыуһаҡлағысынан да ҡеүәтлерәк һыуһаҡлағыс төҙөлә. Йәгеҙ әле иҫкә төшөрөп китәйек. (Павловка һыуһаҡлағысы).

- Был һыуһаҡлағысты төҙөгәндән һуң, күрше районда, Ҡариҙел районында, бик күп ауылдар юҡҡа сыға, тарихын юғалта. Һәм Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөүҙә лә ошо хәлдәр ҡабатлана түгелме? Ошо урындарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ.

- Шағир үҙенең юлын дауам итә һәм сәфәренең артабанғы туҡталышы ҡайҙа була? (Шаһтау). Торатау күрһәтелә,өҙөк яҙыла:

Елкендерә тағы бейеклектәр,
Күңелемдә тағы тыуа таң.
Иркен түбән түшәлеп тә ятҡан
Ҡәтфә үлән икән, Торатау.
Йөрәк тау күрһәтелә, өҙөк яҙыла:
Торатауҙар ғына
Иҫләй күккә ашҡан саҡтарын.
Тағы шартлау.
Ҡора заман, Шаһтау,
Тамырыңа хатта ауҙарын.
Был йылдарҙың ҡоластары хәтәр:
Ниндәй даръяларҙы һемереп бөттө,
Ниндәй ҡаяларҙыауҙарҙы,
Кимереп бөттө ниндәй тауҙарҙы!

- Ерҙә кешеләрҙең китеүе – ул тәбиғәт һәм тормош законы, ә тауҙарҙың юғалыуы сәбәбе нимәлә икән?

5-се туҡталыш: (Стәрлетамаҡ шихандары тураһында белгәндәрен һорау, өҫтәмә белешмә биреү).

Шаһтауҙың нигеҙе емерелә, тау шиңә.

- Ошоға оҡшаш хәл-ваҡиғалар беҙҙең яҡта ла күҙәтеләме?

- Юлыбыҙҙы ары дауам итәйек. Шағир менән Торатау түбәһенә менеп ҡарайыҡ. Һәм ҡайҙан килә был ағыулы һөрөмдөң болот-томандары? Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы завод мөрйәләре күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Хәүеф-һорауҙарҙың өнөн тыҡтыҡ:
-Бындай ҡеүәт Европала юҡтыр!
Барыһы һәйбәт! Һис бер бәлә юҡ!
Стәрленән төтөн, йылға булып,
Туғайыңа һылаша, һеләүек!
Баллы йүкәләргә ағыу һибеп,
Алыҫ армыттарға ҡағыла.
Сал Уралдың сабыр йөҙкәйенә
Ағыу яуа, һөрөм яғыла.

6-сы туҡталыш: Стәрле ҡалаһы.

Һөрөм аша ҡала күренмәй, ә алыҫта үле даръя ялтырап ята. Күк һөрөмлө, һыуы ыулы. Стәрленән ағыу яуа, һөрөм яғыла.

- Был сәфәрҙә нисәмә ҡат баҫты
Күҙ алдыма РәшитНиғмәти.
Урал менәнАғиҙелде данлап,
Бындай һүҙҙе тағы кем әйтер?

- Был юлдарҙы Р. Бикбаевтың үҙ әҫәрендә иҫкә төшөрөүелә һис осраҡлы түгел. Ул өлкән шағир тасуирлаған Ағиҙел, уның заманы менән хәҙер һүрәтләр Ағиҙелде, бөгөнгө заманды сағыштырып ҡарай. Һәм ниндәй үҙгәрештәр күрә?

- Эйе, оло халыҡ шағиры Ағиҙел тураһында ғорурланып йырлаһа, ә Р. Бикбаев бөгөн уның фажиғәле яҙмышын күреп әсенә.

- Ағиҙел, Шаһтау, Стәрле яҙмыштарының ошо хәлгә төшөүендә кем ғәйепле? Был һорауға яуапты беҙ әҫәрҙең алдағы бүлектәренән табырбыҙ.

- Ул - беҙҙең ғәмһеҙлек (ошоурынды әҫәрҙәнтабыпуҡыйҙар).

- Әлбиттә, тәбиғәт, автор һымаҡ, ҡысҡырып яуап бирә алмай. Әммә уның яуабын һәм хөкөмөн һәр кем тоя: көнкүрештә, эштә, һаулыҡтың торошонда. Тәбиғәт законын боҙған кешене ул бер ваҡытта ла ғәфү итмәй.

- Лирик герой сәфәре Өфөгә килеп еткән. Ул, Ағиҙел тулҡынына ятып, Өфөнө күҙәтә. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә Ағиҙел төбөнә иғтибар менән ҡарайыҡ, нимәләр күрербеҙ икән?

Өфөнөң Салауат Юлаев һәйкәле янындағы күренеше, Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күпер күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Өфөм, Өфөм!
Һәр биҙәгеңде
Ниндәй оҫта ҡулдар уйған ырып?
Ағиҙелең, Ҡариҙелең, Димең -
Һыуһылыуҡай кеүек һылыу һыу.
Өфөм, Өфөм! Иҫ китерлек кистә
Йүкәләрҙең балы һығылһын.

7-се туҡталыш: Өфө ҡалаһы.

Ҡара мазут, бысраҡ, ағыулы ләм йылғаның төбөн ҡаплап ята. Ҡариҙел һәм Дим кеүек йылғалар ҙа саф көйө килеп етә алмайҙар.

- Элекке көмөштәй саф йылғалар Ҡариҙел , Дим һәм Ағиҙелдең һөйләшеүенә лә ҡолаҡ һалайыҡ әле.

- Бына сәйәхәтебеҙҙең һуңғы туҡталышында килеп еттек. Ағиҙел тамағында ниндәй ҙур төҙөлөш тураһында һүҙ бара һәм шағиргә был ниңә кире тәьҫир яһай.

8-се туҡталыш: Ағиҙел ҡалаһы.

Тамырлана БашҡортАЭС-ы. Был АЭС Чернобелдән ҡеүәтлерәк буласаҡ. (Чернобель аварияһытураһында һөйләп үтеү).

- Сәфәребеҙгә сығыр алдынан ҡуйған һорауыбыҙға кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Ярты быуат элек булған сафлығы беҙҙең көндәргә килеп етә алғанмы?

- Бөгөнгө көндә тәбиғәтте һаҡлау буйынса ниҙәр эшләнә һуң? (Уҡыусылар яуабы.)

- Ә беҙ үҙебеҙ ниҙәр эшләй алабыҙ?

- Шишмә, инештәрҙе, кескәй йылғаларҙытаҙарта алабыҙ.

- Экологик өмәләрҙә ҡатнаша алабыҙ һ.б.

- Поэманың төрөн билдәләйек.

- Лиро-эпик поэма.

- Ә бына әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Мостай Кәрим был поэманы лирик-трагик поэма тип атай. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ.

- Сөнки был поэмала Ағиҙел йылғаһының фажиғәле яҙмышы көслө трагизм енән һуғарылған.

Р. Бикбаев поэмаһында халыҡ ижады алымдарын уышлы файҙалана, уларҙы шиғыр туҡымаһына тәбиғи үреп ебәрә. Поэманан ошо алымды табып уҡып күрһәтегеҙ.

- Ҡобайыр алымы.

Р. Бикбаевтың поэмаһы һүрәтләү сараларына ла бик бай.

Эпитет, метафора, метонимия, йәнләндереү, сағыштырыу, фразиологик берәмектәрҙе табып уҡып күрһәтәләр.

III. Йомғаҡлау.

- Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнө - илдең көнө. Ағиҙелдең йөҙө - илйөҙө” үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй, ил-йорттарың да шундай. Шуның өсөн тыуған тәбиғәтебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны һаҡлайыҡ. Ул беҙҙе туйындырыусы ла, кейендереүсе лә. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә ниндәй хәлдә бүләк итеп ҡалдырған, беҙ уны шул килеш килер быуындарға тапшырырға тейешбеҙ.

IV. Өйгә эш: Тыуған еребеҙҙе, эсер һыуҙарыбыҙҙы һаҡлауға өндәгән мөрәжәғәт йә шиғыр яҙып килергә.

V. Баһалау.

ШАҒИР ҺҮҘЕ – ШАҒИР НАМЫҪЫ

Фәттәхова Рәзилә Рәис ҡыҙы,
Шаран районы Алексей Кондратьев исемендәге
Дүртөйлө урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: «Шағир һүҙе – шағир намыҫы».

Маҡсат: 1. Р. Бикбаевтың тормош юлы менән таныштырыу.

2. Талантлы шағир, публицист, тәнҡитсе булараҡ уның ижадына байҡау яһау.

3. Шағирҙың шиғриәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү. Туған илде, туған ерҙе, туған телде яратыу хисе тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Шағирҙың портреты, проекцион экран, мультимедиапроектор, ноутбук, шағирҙың китаптары күргәҙмәһе.

Ил алдына сыҡһаң, мин тынысмын –
Һөйләмәҫһең ваҡты, яманды,
Изгеләрҙе яуыз яһамаҫһың,

Хаҡҡа сығармаҫһың ялғанды.

Мостай Кәрим.

Дәрес барышы:

Уҡытыусы.

– Уҡыусылар, бөгөн беҙ башҡорт халҡының танылған шағиры һәм ғалимы Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышырбыҙ, уның шиғырҙарын уҡырбыҙ. Дәрестең темаһы: «Шағир һүҙе – шағир намыҫы». Дәреҫтең эпиграфы итеп мин Мостай Кәримдең Рауил Бикбаевҡа арнап яҙған шиғыр юлдарын алдым.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Фәбдрәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә. Аспирантурала уҡый. 1965 йылдан Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй. Кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертацияларын яҡлай. 1995 йылдан – Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы сәркәтибе.

Халыҡ моңона, йырына бай кешеләр араһында үҫеү, туған моң, туған тел серҙәре, йәмдәре менән һуғарылыу Рауил Бикбаевты шиғыр яҙырға, шиғриәт донъяһына инеп китергә рухландыра.

Рауил Бикбаевтың ныҡлабыраҡ яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы баҫылып сыға. 1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән беренсе китабы донъя күрә. Унан һуң баҫылған “Ҡош юлы”, “Автобиография”, “Ғүмер уртаһы”, “Ерем балҡышы”, “Яҙмышым”, “Ай күргәндәй, ҡояш алғандай” һ.б. китаптары башҡорт шиғриәтенең үҫешенә ҙур өлөш индерҙе. Бигерәк тә замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған “Халҡыма хат”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ”, “Система”, “Баҙар балтаһы”, “Башһыҙ һыбайлы”, “Барокамера” тигән поэмалары киң танылыу алды.

Алтмышынсы йылдар башынан уҡ Рауил Бикбаев шиғри ижадты төплө фәнни тикшеренеүҙәр менән бергә алып бара. Ул Ш.Бабич, Р. Ғарипов әсәрҙәрен ентекле өйрәнеүгә һәм халыҡҡа еткеҙеүгә күп көс һалды, Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙҙы, башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын баҫтырып сығарыуға күп көс һалды.

Рауил Бикбаевтың Өфөлә, Мәскәүҙә, Ҡазанда башҡорт, урыҫ, татар телдәрендә өс тиҫтәгә яҡын китабы баҫылды.

Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевка 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелде.

Рауил Бикбаев хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең танылған шағиры һәм ғалимы. Ул республикабыҙҙың Салауат Юлаев, Ғәлимов Сәләм һәм Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты.

Рауил Бикбаев - йәмәғәт эшмәкәре булараҡ та күренекле шәхес. Башҡортостан хөкүмәте етәкселәренең республикабыҙ күләмендәге әҙәбиәт, мәҙәниәт мәсәләләрен тикшереүҙәрендә актив ҡатнаша. Филология фәндәре докторы, профессор. Бер үк ваҡытта ялҡынлы публицист та, тәнҡитсе лә.

“Рауил Бикбаев үҙенең йәше буйынса ла, ижадының етлеккәнлеге менән дә башҡорт халҡының әйҙәп барыусы шағирҙарынан. Уның ижады, уның әҫәрҙәре, уның китаптары башҡорт халҡы тарихының, башҡорт йәненең айырылмаҫ бер өлөшө булып етеште. Башҡорт халҡы үҙенең бай, үҙенсәлекле тарихы, рухи байлығы, мәҙәни үҫеше менән Рауил Бикбаев тигән шағирҙы тыуҙырған, үҫтергән, күтәргән булһа, бөгөн инде Башҡортостан да Рауил Бикбаев кеүек шағиры булыу менән бәхетле“, – тип яҙҙы Гәрәй Рәхим.

- Уҡыусылар, һеҙҙең Рауил Бикбаевтың ниндәй шиғырҙарын уҡығанығыҙ бар? (Уҡыусыларҙың яуаптары тыңлана).

Уҡытыусы.

- Шағирҙың тормош юлы, яҙмышы шиғырҙарында, тиҙәр.

Рауил Бикбаев шиғриәте – етди уйланыуҙар, ҡатмарлы кисерештәр доньяһы. Бындай шағирҙың әҫәрен уҡып, хозурлыҡ доньяһында ғына йөҙмәй, киреһенсә, борсолоулы уйҙар ҡосағына сумаһың.

Туғанынан яҙған – ярты йәтим,

Туған теленән яҙған – мең йәтим.

Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән

Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем, - тип яҙҙы ул 1989 йылда «Халҡыма хат» поэмаһында. (Уҡыусылар «Халҡыма хат» поэмаһын уҡыйҙар).

Уҡытыусы.

- Уҡыусылар, был поэмала шағир ниндәй проблеманы күтәреп сыға?

Уҡыусылар.

- Шағир кешене вайымһыҙлыҡтан уянырға, тел яҙмышына битараф булмаҫҡа, уны ҡәҙерләргә, һаҡларға саҡыра.

Уҡытыусы.

- Бер генә шағир ҙа үҙенең шиғырҙарында тыуған илен, тыуған яғын данламый ҡалмайҙыр, минеңсә. Рауил Бикбаев та тыуған ауылын, Башҡортостанды данлап матур шиғырҙар ижад иткән. Шуларҙың береһе «Башҡортостан бында башлана» тип атала.

(Уҡыусылар был шиғырҙы тасуири уҡып сығалар).

- ШиғырҙаБашҡортостан нисек тасуирлана? Текстан миҫалдар килтереп һөйләгеҙ.

- Башҡортостан исеменән әйтелгән

«Мин бит башланамын һинән, унан,

Кешеләрем һеҙҙән башланам!» - тигән шиғыр юлдарының мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?

Уҡыусылар.

- Һәр яҡты, һәр республиканы уның халҡы, кешеләре данлай.

Уҡытыусы.

- «Барып етһен ине хаттарым» шиғырын Р. Бикбаев 1990 йылда яҙған. Бында ул ниндәй проблеманы күтәрә?

(Уҡыусылар шиғырҙы уҡыйҙар).

Уҡытыусы.

- Шағир халҡына ни өсөн йыр менән хат яҙырға була? Уны нимә борсой?

- Башҡортостан «ҡуйынында үҫеп сыҡҡан» ниндәй «аждаһалар» тураһында һүҙ бара? (Уҡыусыларҙың яуаптары тыңлана).

Уҡытыусы.

- Эйе, балалар, Рауил Бикбаев йәнә бер тапҡыр поэтик тел менән халҡына өндәшә. Үҙ халҡының тоғро улы, үҙ еренең ысын патриоты, һүҙ остаһы хәтеребеҙҙе лә яңырта, һағалап торған хәүефтән лә иҫкәртә, киләсәктә уяу булырға ла саҡыра.

- «Күңелемдә тынмаҫ һуғыш бара» шиғырында лирик герой был күренештәрҙең ҡайһыныһына ҡаршы һәм ни өсөн көрәшә? Ә ҡайһы һүҙҙәрҙе ни өсөн таяныс итеп ала? (Уҡыусылар шиғырҙы уҡыйҙар).

- Мәкер, ваҡлыҡ, ялған, хыянат, нәфес, һөмһеҙлөк, әрһеҙлек, бушбоғаҙ, һағыш, яһалмалыҡ, йәһил, тәккәберлек, ирлек, намыҫ, туралыҡ, һаран, ихласлыҡ, дауа, илгәҙәк, нур, мәрхәмәт, өмөт, ҡанатланыу, ғәҙеллек…

Был һүҙҙәрҙе ыңғай һәм тиҫкәре сифаттарға айырып яҙырға кәрәк.

(Уҡыусылар яҙалар).

- Хәҙер яҙғанды тикшерәбеҙ, һәр һүҙҙең мәғәнәһен асыҡлайбыҙ.

Шиғырҙың һуңғы дүрт юллығын тикшерәбеҙ.

Уҡытыусы.

- Был шиғыры менән Рауил Бикбаев үҙ күңелендә булған ытылышын әйтеп бирә. Лирик герой бары тик яҡшылыҡҡа, иҙгелеккә ынтыла.

- Уҡыусылар, Рауил Бикбаев 2001 йылда ғәйәт яуаплы һәм оло эшкә – Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең изге хәҙистәрен шиғри юлдарға һалыу эшенә тотона. Хәҙер уның «Йөҙ ҙә бер хәҙис» тип аталған өс китабы баҫылып сыҡты.

- Нимә ул хәҙис?

- Хәҙис – ул тоғро юлды күрһәтеүсе иҙге маяҡ. Кешелек донъяһына рәхмәт һәм күркәм әхлаҡ һәм тәрбиәнең өлгөһө итеп ебәрелгән пәйғәмбәребеҙҙең иҙге һүҙҙәре.

Ислам динен үҙ ихтыярҙары менән ҡабул иткән ваҡыттан бирле халҡыбыҙ ҙур ихтирам менән пәйғәмбәребеҙҙең хәҙистәрен өйрәнгән һәм хәҙис китаптары һәр өйҙең китап кәштәһендә хөрмәтле урын алған.

- Рауил Бикбаевтың йөҙ ҙә бер хәҙистең башҡортсаға шиғри тәржемәһе халҡыбыҙҙың рухи тормошонда баһалап бөткөһөҙ ҡимммәтле ҡулланма буласаҡ.

- Хәҙер «Йөҙ ҙә бер хәҙис» китабынан ҡайһы берҙәрен уҡып китербеҙ.

(Уҡыусылар хәҙистәрҙе уҡыйҙар).

Уҡытыусы.

- Изге мөғжизә булған хәҙис шәриф һәр ваҡыт изгелеккә, гүзәл әхлаҡ һәм тәрбиәгә, милләт-ара татыулыҡҡа, күркәм кешелек мөнәсәбәттәренә, илде, телде, милләтте, иманды, ватанды һөйөүгә, ғилемгә һәм мәғрифәткә беҙҙе мәңге әйҙәйәсәк һәм илаһи нур булып яҡты юл күрһәтәсәк.

Йомғаҡлау.

- Рауил Бикбаевтың шиғриәте тураһында нимә әйтергә була? (Уҡыусыларҙың яуаптары тыңлана).

Уҡытыусы.

- Рауил Бикбаевтың шиғриәте төплө, кеше аңының бөтә тәрәнлегенә үтеп инә. Уның ил һәм заман хаҡындағы фекерҙәре кешелек тураһындағы уйланыуҙарға ҡушылып китә. Һоҡланыуға ҡарағанда борсолоуҙар, уйланыуҙар, икеләнеүҙәр, хәүеф-шөбһәләр күберәк уның хәҙерге поэзияһында.

- Дәрес башында беҙ «Шағирҙың тормош юлы, яҙмышы шиғырҙарында»,- тигән фекер әйткән инек. «Шағирҙың күңел донъяһы, бар булмышы шиғырҙарында», - тиһәк тә хата булмаҫ. Бөгөн беҙ Рауил Бикбаевтың бер нисә шиғырын уҡып, уның бөйөк Кеше икәнлегенә тағы бер ҡат инандыҡ.

Рауил Бикбаев үҙенең «Шағир һүҙе – шағир намыҫы…» китабында былай тип яҙа: «Шағир һүҙе – шағир намыҫы… Ғүмерем буйы шул һүҙгә хеҙмәт иттем, шул намыҫҡа тоғро булырға тырышып йәшәнем. Киләсәктә лә яҙмыш ошо изге таяныстарымдан – шағир һүҙенән, шағир намыҫынан айырмаһын».

Быйыл Рауил Бикбаевҡа 75 йәш тула. Артабан да үҙ милләте өсөн янған ялҡынлы шағир, рух һаҡсыһы булһын. Беҙ уға ныҡлы һаулыҡ, ижади үрҙәр теләйбеҙ.

Өй эше. «Йөҙ ҙә бер хәҙис» китабынан күңелегеҙгә ятҡан ун хәҙисте дәфтәрегеҙгә яҙып килергә.

РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫНДА БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ЕТЕ МӨҒЖИЗӘҺЕ

Сәләхова Гөлнара Рубис ҡыҙы,
Бүздәк районы Бүздәк 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Рауил Бикбаев ижадында Башҡортостандың ете мөғжизәһе.

Маҡсат: 1) Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады менән таныштырыу, уның шиғырҙарынан Башҡортостандың ете мөғжизәһен табыу, улар менән яҡындан таныштырыу;

2) Улар менән ғорурланыу тойғоһо уятыу һәм уларға һаҡсыл мөнәсәбәт тәрбиәләү;

3) Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, телмәрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Башҡортостандың физик картаһы, слайдтар, мөғжизәләрҙең фотоһүрәттәре, мультимедиа проектор, компьютер, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, Башҡортостан энциклопедияһы.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу мәле. Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!

Хәйерле иртә!

Дәрес алды шиғыры. Сәләмләйбеҙ һауаны
Именлек булһын өсөн,
Сәләмләйбеҙ Ер-әсәне
Беҙҙе туйҙырған өсөн,
Сәләмләйбеҙ дуҫтарҙы
Гел дуҫлыҡ булһын өсөн!

- Уҡыусыларҙың кәйефтәрен һорау.

2. Инеш өлөш.

Уҡытыусы. «Доньяла төрлө илдәр бар. Бер ил – үҙенен тауҙары, икенсеһе далалары, өсөнсөһө – һыуҙары, дүртенсеһе - урмандары менән дан тота. Ә беҙҙең Башҡортостаныбыҙ шуларҙың барыһы менән дә мәшһүр». Халыҡ шағиры Мостай Кәрим юҡҡа ғына ошо юлдарҙы яҙмағандыр, моғайын. Башҡортостан! Был бер һүҙҙе әйтеү менән, шунда уҡ күҙ алдына Урал тауҙары, икһеҙ-сикһеҙ урмандар, борғаланып-борғаланып аҡҡан саф йылғалар, башҡорт тоҡомло аттар һәм, әлбиттә, хуш еҫле сәскәләрҙән һут йыйып йөрөгән нәҙеккәй билле, эшһөйәр бал ҡорттары килеп баҫа. Сөнки тыуған яғыбыҙ инде элек-электән матур тәбиғәте, сыҙамлы һәм көслө башҡорт тоҡомло аттары, тәмле буҙаһы, ҡымыҙы, балы менән бар донъяла дан алған. Уларһыҙ Башҡортостанды күҙ алдына ла килтереп булмай кеүек.

Башҡортостаныбыҙҙың гербына һәм флагына ла ҡағылып китәйек. 1993 йылдың 12 октябрендә Башҡортостан гербы һәм гимны ҡабул ителгән.

- Нимә ул гимн? (Гимн – илдең суверенлығын, унын халыҡтары берҙәмлеген һәм дуҫлығын кәүҙәләндереүсе символ).

- Уның авторҙары кем? (Гимндың авторҙары Фәрит Фәтих улы Иҙрисов һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев). *1-се слайдта Рауил Бикбаев портреты.*

- Бөгөнгө дәрестә беҙ ҡайһы шағирҙың ижады тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (Р. Бикбаев)

- Р. Бикбаевтың тыуған еребеҙҙе данлаған шиғырҙарын иҫкә төшөрөп үтәйек әле. (“Башҡортостан бында башлана”, ”Уралыма”, ”Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”) .Башҡортостан тураһында шағирҙар тарафынан шиғырҙар бик күп язылған. Һәр шағир республиканың матурлығын, байлығын, халҡының киң күңеллелеген һәм дуҫ йәшәүен ҙур оҫталыҡ менән һүрәтләй. Башҡортостан - мөғжизәләр иле тиергә була. 2009 йылда республикабыҙҙың тәбиғәт мөғжизәләрен билдәләүҙә бик күп халыҡ ҡатнашып, үҙ тауыштарын биргәндәр. Исемлектә бөтәһе 200-ләп “мөғжизә” булһа, шуларҙан тик етәүһе генә еңеп сыға. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә Рауил Бикбаев ижадынан Башҡортостандың ете мөғжизәһен эҙләп ҡарайыҡ.

Уҡытыусы. Эшебеҙҙе башлар алдынан, әйҙәгеҙ, осраясаҡ яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр менән танышайыҡ.

3. Һүҙлек эше: слайд

Мөғжизә - чудо
Сәйәхәт итеү- путешествовать
Һәйкәл – памятник
Шифахана – санаторий
Мәмерйә- пещера
Йылылық – теплота
Минерал һыуҙар – минеральные воды

- Уҡыусылар, һеҙгә ниндәй һүҙҙәр таныш?
- Был һүҙҙәр менән һүҙбәләнештәр, һөйләмдәр төҙөп ҡарау.
- Дәфтәрҙәргә бөгөнгө числоны, көн исемен, теманы яҙып ҡуйыу.

4. Төп өлөш.

Уҡытыусы. Ә хәҙер ручкаларҙы һалып торайыҡ та, иғтибарыбыҙҙы экранға йүнәлтәйек. Уҡыусылар, нимә күренә унда? (*алда Салауат Юлаев һәйкәле күренә*). Был ни мөғжизә?

Уҡыусылар яуап бирә: был Салауат Юлаев һәйкәле.

- Бер уҡыусы үҙенең белгәндәре тураһында һөйләп бирә.

1- се мөғжизә - Салауат Юлаев һәйкәле – Рәсәйҙә ат һынындағы иң ҙур һәйкәл, бейеклеге – 9,8 метр, ауырлығы – 40 тонна. Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Салауат Юлаевҡа ҡуйылған һәйкәлдең скульпторы – Сосланбек Тавасиев. Салауат Юлаев һәйкәленә ҙурлығы буйынса Европала уға тиңләшеүсе һыбайлы һәйкәле юҡ. Ә торған урыны нисек уңышлы һайланған! Юҡҡа ғына йәштәрҙең яратҡан урынына, халҡыбыҙҙың мәккәһенә, берҙәмлек символына әүерелмәгән ул! Бында иһә 30 йыл ғүмерен ошо һәйкәлде эшләүгә биргән, уны ҡала уртаһына түгел, ә тап Ағиҙел ярына ҡуйҙырыу өсөн тырышҡан Төньяҡ Осетия скульпторы Сосланбек Тавасиевтың хеҙмәте.

Рауил Бикбаевтың Салауат Юлаевҡа арналған “Салауат ҡылысы” шиғырын уҡыныҡ. Башҡорт халҡы, Рауил Бикбаев шиғырындағыса Салауат Юлаевтың яҡты образын йөрәгендә ҡәҙерләп һаҡлай. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт гербының үҙәгендә Салауат һынының тороуы, яугир шағирға бағышлап энциклопедия нәшер ителеүе был шәхестең масштабын, юғарылығын күрһәтә. Телебеҙҙә йәшәгән «Халыҡ хәтере» тигән оло һәм изге төшөнсә, быуаттарҙы быуаттарға тоташтырып, бер быуындың аманатын икенсеһенә еткереп, хәҙергегә һәм киләсәккә хеҙмәт итә.

Уҡытыусы һығымта яһап ҡуя: Скульптор С.Д. Тавасиев ижад иткән был һәйкәл (архитекторы И.С. Ғәйнетдинов) баш ҡалабыҙҙың символы. Ул Ырымбур юлы менән машинала үткәндә лә, самолеттан да бик һәйбәт күренә. Уны ижад иткәне өсөн Сосланбек Дафаевич Тавасиевҡа 1970 йылда СССР-ҙың Дәүләт премияһы бирелә.

Бына беренсе мөғжизәне лә таптыҡ. Дәфтәребеҙгә яҙып ҡуяйыҡ. *Беренсе мөғжизә – Салауат Юлаев һәйкәле.*

Слайдтарҙа сәскәле ялан. Диалог төҙөү.

Тирә-яғыбыҙ сәскәләргә күмелгән болон. Болон буйлап атлайыҡ. Бәлки, сәскәләр араһында яталыр беҙҙең мөғжизә? (*Бал ҡорттарының гөжләүе ишетелә).*

Уҡыусылар, был ниндәй тауыш?

Уҡыусылар: Был бал ҡорттарының гөжләүе.

Уҡытыусы. Улар нимә эшләй? Ни өсөн сәскәләргә ҡунғандар?

Уҡыусылар: Улар сәскәләрҙән бал йыя.

Тимәк, беҙҙең икенсе мөғжизәбеҙ табылдымы инде?

- Эйе.
- Нимә инде ул?
- Башҡорт балы.
- Нимә ул бал?
- Бал үҙенең составы һәм дауалау көсө буйынса һирәк осрай торған уникаль продукт.
- Ә балды бал ҡорттары нимәнән йыя?
- Сәскәләрҙән.
- Ниндәй балдар була?

Йүкә, ҡарабойҙай, сәскә балдары.

2-се мөғжизә - Башҡорт балы – донъяла иң шифалы, иң файҙалы бал иҫәпләнә.Бал – халҡыбыҙҙың милли аҙығы. Ул – тәбиғи яҡтан таҙа, шифалы, тәмле, сифатлы ризыҡ. Донъяла башҡорт балына еткән бер бал да юҡ. Умарталарҙан бал менән бергә инә һөтө, бал ҡорто ағыуы һәм елеме алына. Улар ҙа кеше һаулығы өсөн бик файҙалы, медицинала ла элек-электән киң ҡулланыла. Умартасылыҡ менән шөғөлләнеү – бик ауыр һәм яуаплы эш, ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс кәсеп. Бал ҡортоноң тормошон аңлаған кеше ғүмер буйы унан айырылмай һәм уның файҙаһын күрә. Көтмәгәндә умартасы булып киткән кешеләрҙең ҡылыҡтары үҙгәрә, фекерләү кимәле арта һәм ҡайһы берәүҙәре ғүмер буйы яфаланған ауырыуҙарынан арына. Шулай итеп, умартасылыҡ ҙур әһәмиәткә эйә. Минең олатайым, олатайымдың әсәһе – беҙҙең өләсәйебеҙ ҙә умартасылыҡ менән шөғөлләнгән. Хәҙер уларҙың эшен атайым дауам итә. Умартасылыҡ – киң таралған шөғөл. Йылҡысылыҡ кеүек үк, ул да Башҡортостандың ғорурлығы һәм сағыу биҙәге булып һанала. «Башҡортостанда мөғжизәләр күп, әммә башҡорт балы – мөғжизәләрҙең дә мөғжизәһе», – ти Башҡортостандың ауыл хужалығы министры урынбаҫары Раил Афзалов. Хатта Америка белгестәре лә башҡорт балының сифатына иң юғары баһа бирә. Үҙҙәрендәге бал беҙҙекенән күпкә ҡалыша икән. Ул – үҙенең тәме менән дә, шифаһы менән дә, үҙенсәлеге менән дә дан алған башҡорт балы.

Р. Бикбаевтың “Йүкәләрҙән бал тамғанда” шиғыры Башҡортостан тәбиғәтенә ода булып яңғырай. Тыуған ерҙең күркәм тәбиғәте – баллы йүкәләре, сәскәле туғайҙары, еләкле битләүҙәре, шифалы йәйҙәре – шағир “йөрәгенең бар яраһын йыуа”, “һүнгән хыялдарын кире терелтә”, ”яңы йыр тыуҙыра”. Шуға ла шағир әҫәрен:

Талпынғанда йырым,
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды.
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон,
Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын, - тип тамамлай.

Тимәк, шағирҙың тыуған ере - илһам һәм ижад сығанағы, йыр-моң төйәге. Был төйәкте һаҡларға ла һаҡларға кәрәк.

Бына икенсе мөғжизәне лә таптыҡ. Дәфтәребеҙгә яҙып ҡуяйыҡ. 2-се мөғжизә - Башҡорт балы.

3-сө мөғжизә. (Ҡурай моңо яңғырай).

Уҡытыусы. Балалар, арып та киттек, буғай. Ниндәй илаһи моң ағыла? Ҡайҙан сыға ул моң?

Уҡыусылар: Был – ҡурай моңо.

Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы ҡурайҙы ла хаҡлы рәүештә «Башҡортостан мөғжизәһе» тип атайбыҙ. Ҡурай – сатыр сәскәләр ғаиләһенә ҡараған күп йыллыҡ үҫемлек. Уның бейеклеге 120 -170 см. Ҡурай ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында үҫә. Ҡурай – ул башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.

Уҡытыусы. Уҡыусылар һеҙ уны тағы ла ҡайҙа күргәнегеҙ бар?

Уҡыусылар яуабы. Ҡурай үләне башҡорт халҡының символы. Уның ете тажы, берләшкән ете ырыуҙы символлаштыра. Башҡортостандың флагында ла, гербында ла ҡурайҙың ете тажы һүрәтләнгән. Башҡорт халҡының милли ҡоралында йәше лә, ҡарты ла уйнай. Уйнай белмәгәне өйрәнергә тырыша. Ҡурайҙа моң һыҙҙыра алмаған башҡорт юҡтыр, моғайын. Ҡурай. Быуаттар буйына һаҡланып, быуындан-быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, изге аманат, ҡәҙерле мираҫ һәм хәтер. Илерткес ҡурай моңо аша ата-бабаларыбыҙҙың аҡылы, аҡ инәйҙәрҙең фәһемле кәңәштәре, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең изге уйҙары, ынтылыштары, батырҙарыбыҙҙың көс-ғәйрәте тарих төпкөлөнән бөгөнгө көнгә ынтыла төҫлө...

Рауил Бикбаев “Халҡыма хат”, ”Башҡортостан бында башлана” шиғырҙарында ҡурай образына мөрәжәғәт итә, уға булған һөйөү хистәрен шағир түбәндәге юлдарҙа әйтеп бирә:

Башҡорт моңо, башҡорт ҡурайына
Алҡышламай бөгөн ҡай тараф?
Бейегәндә тәнъяҡ амурҙары,
Донъя сәхнәләре сайҡала. (”Халҡыма хат”)

Уҡытыусы. Алда ниндәйҙер тауҙар күренә. Был ниндәй тауҙар икән? Слайдтар.

Уҡыусылар. Урал тауҙары. (*Картала урыны күрһәтелә*).

4-се мәғлүмәт. Халҡыбыҙ борон-борондан Урал тауҙары, йылғалары буйында йәшәгән. Ошондағы матур тәбиғәткә һоҡланып “Урал батыр”, “Аҡбуҙат“ эпостарын, бик күп йырҙар ижад иткән. Боронғо тарихты ла, йәшәү мәғәнәһен дә, тормошто ла сағылдырған халҡыбыҙҙың бөйөк төбәге - Урал тауҙары ла Башҡортостандың мәғлүмәтле булыуға лайыҡ.

*Уҡытыусы.*Тауҙың нимәһе мәғлүмәт булырлыҡ икән?

Урал - Башҡортостандағы бейек тауҙарҙың береһе, иң бейек тау массивы - Ямантау. Белорет районының Оло һәм Кесе Инйәр йылғаларының араһында ята, уның киңлеге 3, оҙонлоғо 5 саҡрым. Оло һәм Кесе Инйәр ҙәндәренән 800-900 метр юғары күтәрелеп тора. Иң бейек нөктәһе - Оло Ямантау түбәһе. Уның диңгеҙ кимәленән бейеклеге -1640 метр. (Башҡортостан энциклопедияһынан).

Урал образы фольклорҙа ла, яҙыусылар ижадында ла төп урындарҙың береһен алып тора. Р. Бикбаевтың “Уралыма” шиғыры ла тыуған ерҙең ирке, азатлығы өсөн көрәш идеяһын сағылдыра. Әҫәр ҙур түгел, әммә шағир ҙтемле поэтик деталдәр аша Урал образын шаҡтай тулы күҙ алдына баҫтыра. Ҡайҙа Урал, Ағиҙел, азатлыҡ темалары күтәрелә, унда мотлаҡ батыр ир-егет, уның аҡбуҙаты һәм булат ҡылысы һүрәтләнә.

Тыуған төйәге Уралға һөйөү хистәрен шағир түбәндәге юлдар аша бирә:

Донъя бигерәк сәйер,
Мин дә бына
Әйләнермен бер саҡ туҙанға
Әллә ниңә оҙаҡ ҡарап торҙом
Елдәр туҙан йотоп уҙғанға.
Елдәр!
Һеҙгә минең үтенесем бар,
Тыңламайса уны үтмәгеҙ:
Мине,зинһар, туҙан көйөнсә лә
Уралымдан алып китмәгеҙ. (”Уралыма” шиғырынан).

5-се мәғлүмәт. Башҡортостан – башҡорт иле, тигән һүҙ. Халҡыбыҙ борон – борондан Урал тауҙары, Ағиҙел йылғаһы буйында йәшәгән. Ошондағы матур тәбиғәткә һоҡланып әҫәрҙәр, бик күп йырҙар ижад иткән. Беҙ бына ниндәй хатта дауаһы ла үҙендә булған бай һәм һоҡланғыс төбәктә йәшәйбеҙ! Шуға күрә 5-се мәғлүмәт - Ағиҙел йылғаһы тип икеләнмәйенсә әйтә алабыҙ.

Уҡыусылар яуабы. Ағиҙел - Башҡортостандағы иң ҙур йылға һәм төп һыу юлы. Кама йылғаһының һул яҡ ҡушылдығы. Уралтау итәгенән башлана. Оҙонлоғо – 1430 км, бассейнының майҙаны — 141900 км2. Көмөштәй аҡ был йылға Ирәмәлтау тирәһенән баш ала. Үрендә һаҙамыҡлы үҙәндәрҙән үтә, Тирлән ҡасабаһынан түбәндәрәк ҡырҡа тарая, иңкеүҙәре текәрә. Белорет, Бөрйән ерҙәренән Урал тауҙары, ҡаялар араһынан аға. Уң ҡушылдығы Нөгөштө юлдаш итеп китә биргәс, иркен туғайлыҡтарға барып сығыр ерҙәрҙә үҙәне яйлап киңәйә. Ҡариҙел ҡушылғандан һуң Ағиҙел тигеҙлектәрҙән йәйрәп аға, иркен туғайҙарҙа ағымында боролмалар, бөгөлдәр яһап, тармаҡланып та киткеләй. Башҡорт халыҡ ижадында һәм йәнле һөйләштә Ағиҙел Иҙел тип тә йөрөтөлә. «Урал батыр»ҡобайырында «Көмөштәй бер аҡ йылға», «Иҙел батыр таҡҡан, ай, Аҡ йылғаһы» тигән юлдар бар. Боронғо төрки халыҡтарында Иҙел «һыу, йылға» тигәнде аңлата. Ағиҙелдең русса «Белая» тигән аты башҡортсанан тура күсермә.

Икенсе уҡыусы. Рауил Бикбаевтың 1991 йылда яҙылған «Һыуһаным һыуҙар биреген!» поэмаһы шағирҙың үҙ ижады өсөн генә түгел, бәлки бөтә башҡорт әҙәбиәтендә яңы кимәл, мөһим этап тип баһаланырға хаҡлы. Шағир был ҙур күләмле, сәнғәтсә оҫта яҙылған поэмаһында үҙ ижадының төп асылын, бар булмышын тәшкил иткән иң мөһим мәсьәләләрҙе – Ер, һыу, тел, тәбиғәт, халыҡ яҙмышын һаҡлау проблемаларын күтәрә.

Заман һулышын һиҙгер тойған шағирҙың был поэмаһында ил яҙмышындағы ҡаршылыҡтарҙы, хата-хәүефтәрҙе, законһыҙлыҡ күренештәрен, экологик катастрофаны көҙгәләге кеүек күрәһең. Поэманың ер-һыуҙың, тәбиғәттең бысраныуы, һыуҙарҙың һайығыуы, ҡороуы ғына түгел, бәлки кеше рухының, кеше күңеленең һайығыуы, түбәнәйә барыуы хаҡында йәки моңло, һағышлы тауыш менән йәки янып, ярһып халыҡҡа мөрәжәғәт иткән, үҙенең гражданлыҡ бурысын юғары тоткан шағир образы күҙ алдына килеп баҫа.

Ағиҙелдең ниндәй саф, ниндәй матур, көмөш һыулы таҙа йылға булыуын «Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға һалҡын терегөмөш шикелле» тигән юлдарын иҫкә төшөрә. Шағир «башҡаса шул заман хәле, башҡаса шул шағир уйҙары», тип Ағиҙелдең бөгөнгө яҙмышы өсөн хафалы, борсоулы уйҙарын белдереп, «Йәмләнерме тағы Аҡ йылға, тәмләнерме тағы Аҡ йылға», тип һорау ҡуйып, «Ҡотҡарырға ерҙе, матурлыҡты һуң түгелдер әле, һуң түгел... сафланырмы был күңел» тип киләсәккә өмөт, ышаныс менән ҡарай. Ҡобайыр формаһында яҙылған бүлегендә шағир халыҡ өсөн, ил өсөн «берҙән-берең ергенең емерелһә, ике ҡулың ҡаушырып, алан-йолан ҡаранып ҡарап торһаң, шул яман» тип халыҡты уяулыҡҡа саҡыра. Ул артабан нәфсенең шашыныуын, намыҫтың юҡҡа сығыуын, кеҫә ҡалынайтыусыларҙың күбәйеүен, рухтың ҡото китеүен яман йола тип фашлай. Ағиҙел яҙмышында бөтә Башҡортостан яҙмышы хаҡындағы уйҙарын Р. Бикбаев: «Ағиҙелем! Ерҙең тәнендә һин леп-леп типкән тере бер тамыр. Ағыуланһа кескәй тамырҙары, оло йөрәк тә бит туҡталыр», тип иҫкәртә. Шағир ер шарында айырым ил яҙмышы юҡ, айырым тел яҙмышы юҡ - барыһы бергә бәйләнгән, ти. «Сарсаһаҡ та, шартлаһаҡ та - беҙгә барыһын бергә күрергә, ҡан тамырым ил тамыры менән. Ағиҙелем менән үрелгән. Йәмле Ағиҙелем буйҙарына ярҙарынан ашып ҡот тулһын», – тип поэманы шундай изге һүҙҙәр менән тамамлай. Күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған, социаль, әхлаҡи-әҙәп, экологик мәсьәләләрҙе яҡтыртҡан поэма башҡорт әҙәбиәтендә күренекле роль уйнай.

6-сы мәғлүмәт. Герб, гимн, флаг – хоҡуки дәүләтселек билдәһе. Ул закон нигеҙендә ҡабул ителгән. Гимндың һүҙҙәрен билдәле шағирҙарыбыҙ Рауил Бикбаев менән Рәшит Шәкүр ижад итеүе осраҡлы хәл түгел. Минең уйлауымса, мәртәбәле, тантаналы шиғырҙы тыуған еренең киләсәгенә битараф булмаған, уны ысын күңелдән яратҡан кеше генә ижад ала. Гимндың һүҙҙәренә ҙур мәғәнә һалынған. Шуға күрә мин - республикабыҙҙың гимнын 6-сы мәғлүмәт тип атар инем. Алтынсы мәғлүмәтбеҙ - гимн. *(республика гимны яңғырай, гимнды тыңлау). Дәфтәрҙәргә яҙып ҡуйыу.*

Уҡытыусы. 7-се мөғжизәне билдәләгәнсе Р. Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырынан ошо өҙөктө тыңлағыҙ әле.

Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым.

– Тимәк, Башҡортостан кемдән башлана? (Ошонда йәшәүсе кешеләрҙән башлана).

– Эйе. Башҡортостанды ошонда йәшәүсе кешеләр данлай, сөнки уның төп байлығы, төп мөғжизәһе - халҡым тип уйлайым мин дә. Республикала йәшәүсе төрлө милләт кешеләренең дуҫлығы, берҙәмлеге менән матур ул минең Башҡортостаным. Башҡортостан даны бөтә Рәсәйгә, бөтә донъяға үҙенең ҙурлығы, байлығы, матурлығы менән таралған. Уның экономик үҫеүәте, мәшһүр артистары һәм яҙыусылары, танылған ғалимдары сит ҡитғаларға киң билдәле. Күп милләтле республика, үҙаллылыҡ яулап, Президентын һайлап, һыйышып тыныс һәм дуҫ йәшәүҙең аҫыл бер үрнәге булып тора.

Ә Башҡортостандың кешеләргә теләк һүҙе Рауил Бикбаев ижадында түбәндәгесә яңғырай:

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек — Башҡортостан кеүек,
Был донъяға тура ҡарарлыҡ. (“Башҡортостан бында башлана”).

7-се мөғжизә- Башҡортостан халҡы.

Шулай итеп, ете мөғжизә лә билдәле. Халҡыбыҙ фекеренсә, тап улар – Башҡортостандың иң аҫыл ҡомартҡылары.

5. Ҡабатлау. Шулай итеп, беҙ һеҙҙең менән Рауил Бикбаев ижадынан Башҡортостандың ете мөғжизәһе булырҙай төшөнсәләрҙе, күренештәрҙе табып бөттөк. Ҡабатлап үтәйек. Схема буйынса әйтеп үтеү.

6. Тәрбиәүи момент: Эйе, беҙ Башҡортостандың ете мөғжизәһен дә таптыҡ, улар менән яҡындан таныштыҡ. Ләкин беҙҙең иң ҙур бурысыбыҙ ҡалған бит. Ул ниндәй бурыс?

Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау һәм һығымта яһау: Иң мөһиме - беҙ Башҡортостандың мөғжизәләрен һаҡлай белергә, үҙ республика-быҙҙы һөйөргә һәм уның менән ғорурланырға тейешбеҙ.

Нығытыу. Уҡыусылар беҙ бөгөн күп кенә мәғлүмәттәр менән таныштыҡ, яңы һүҙҙәр үҙләштерҙек. Ә хәҙер уларҙы онотмаҫ өсөн нығытыу күнегеүҙәрҙе эшләп алайыҡ.

Терәк текст. Дәфтәрҙәрҙә эш.

Башҡортостан байлығы (үҙ-аллы эш).

Башҡортостан - иҫ киткес ғәжәп ил. Ул---------- ---------- , ----------,---------- ---------- менән дан тота.

Минең уйлауымса, Башҡортостандағы иң ғәжәп урын ---------- ----------. Ул үҙенең ---------- менән билдәле.

8. Дәресте йомғаҡлау:

Шулай итеп, беҙ бөгөн Рауил Бикбаев ижадынан Башҡортостан мөғжизәләрен эҙләп сәйәхәт ҡылдыҡ. Бик күп мәғлүмәттәр алдыҡ, үҙебеҙҙең белгәндәр менән дә уртаҡлаштыҡ. Әлбиттә, Башҡортос-таныбыҙҙа мөғжизә булырҙай тағы ла әллә күпме тәбиғәт һәйкәлдәре, ҡомартҡылары бар. Мөғжизәләр күпме генә булмаһын, беҙ уларҙы киләсәк быуынға ла ҡомартҡы итеп алып барып еткерергә тейешбеҙ. Уларға ҡарата ғорурланыу тойғоһо һәм һаҡсыл мөнәсәбәт булдырырға бурыслыбыҙ. Рауил аға Бикбаев кеүек ысын илһөйәрҙәр булып үҫәргә тырышайыҡ.

Өй эше: Бөгөнгө дәрес буйынса викторина һорауҙары әҙерләп килергә

Р. БИКБАЕВ „САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ”. ЯҢҒЫҘЛЫҠ ҺӘМ УРТАҠЛЫҠ ИСЕМДӘР

Баймөхәмәтова Лариса Арыҫлан ҡыҙы,
Бүздәк районы Иҫке Боғаҙы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Р. Бикбаев „Салауат ҡылысы”. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр.

Маҡсат: уҡыусыларҙы Р.Бикбаевтың „Салауат ҡылысы” исемле шиғыры менән таныштырыу, яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәргә аңлатма биреү, С. Юлаев тураһында алған белемдәрҙе системалаштырыу, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: компьютер,китаптарҡүргәҙмәһе, презентация, китап.

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу. Әйҙәгеҙ әле тиҙ генә башҡорт өндәрен иҫкә төшөрөп бер нисә тел көрмәлдергес әйтеп алайыҡ.

Мәсьәләләрҙе сисешмәҫһегеҙме?
Һоҫҡоларыңа һоҫон ҡорамағанһың

2. Өй эшен тикшереү. Һорауҙарға яуап биреү.

- Кем ул С.Юлаев?
- Ул ҡасан һәм ҡайҙа тыуған?

- Пугачевҡа ни өсөн ҡушылған?
- Уны ҡасан һәм ҡайҙа тоталар?
- С.Юлаев ҡайҙа һәм ҡасан үлә?
- Уның тураһында ниндәй әҫәрҙәр ижад ителгән? (Күргәҙмәләге китаптарҙы ҡарау)

3. Дәрестең темаһын, маҡсатын әйтеү.

Бөгөнгө дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры ижады менән танышабыҙ. Ә кем ижады икәнен белеү өсөн ошо кроссвордты сисергә кәрәк, уның баш хәрефтәренән шағирҙың исем, фамилияһын белербеҙ.

Һорауҙар:

1. Йыһанға уға ултырып осалар (Ракета).
2. Башҡортостандың иң ҙур йылғаһы (Ағизел).
3. Тауҙар теҙмәһе (Урал).
4. Белорет районында аҡҡан йылға (Инйәр).
5. Вулкандан нимә атыла (Лава).
6. Беҙ йәшәгән республика нисек атала (Башҡортостан).
7. Яҙыусы әҫәрен ни эшләй? (Ижад).
8. Һыуҙа нимә ултырып йөҙәләр? (Кәмә).
9. Башҡортостандағы ҡала (Бәләбәй).
10. Төҫ (Аҡ).
11. Йәй көнө бешә, силәкләп йыялар (Еләк).
12. Тыуған ил һүҙенең синонимы (Ватан).

Класҡа һорау: - Шулай итеп кемдең ижады менән танышабыҙ инде бөгөн? (Хор менән яуапты уҡыу). Дөрөҫ, бөгөн беҙ Р. Бикбаевтың „Салауат ҡылысы” исемле шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

4. Шиғыр өҫтөндә эш.
- Автор тураһында презентация ҡарау;
- шиғырҙы тасуири уҡыу, анализлау;
- аңлашылмаған һүҙҙәргә аңлатма биреү, һүҙлек дәфтәренә яҙыу.

5.Тест. (С. Юлаев тормошо буйынса)

1. СалауатЮлаев йәшәгән йылдарҙы билдәләгеҙ
а) 1754 -1800
б) 1700 -1854
в) 1812-1861
2. СалауатЮлаевтың атаһы кем?
а) Кинйә Арыҫланов
б) ЮлайАҙналин
в) Батырша
3. Салауат Юлаевтың яуҙашы, рус яугиры
а) Емельян Пугачев
б) Әхмәтзәки Вәлиди Туған
в) Муса Гәрәев
4. Салауат Юлаевты ҡайҙа каторгаға ебәрәләр?
а) Рогервик ҡәлғәһенә
б) Троицк төрмәһенә
в) Мәскәү төрмәһенә
5. “Салауат ҡылысы” шиғырын кем яҙған?
а) Зәйнәб Биишева
б) Рауил Бикбаев
в) Степан Злобин
6. Ял итеү минуты. Карауанһарай группаһының “Салауат батыр” йырын тыңлау
7. Грамматик теманы аңлатыу.

Уҡыусылар, миңә ошо шиғырҙан исемдәр эҙләп табығыҙ әле. (Салауат, ҡылыс, Рәсәй, Урал, нәфрәт һ.б.). Эйе, бик яҡшы. Ә хәҙер ошо исемдәргә ҡарайыҡ та, уларҙа ниндәй айырма күрербеҙ икән, шуны әйтеп ҡарайыҡ (Яуаптар). Дөрөҫ, ҡайһыһылыр ҙур хәрефтән, ә ҡайһыһылыр бәләкәйҙән яҙылған. Һеҙ быны нисек аңлатыр инегеҙ? (Яуаптар). Бына беҙ ҡағиҙә лә сығарҙыҡ. Шулай итеп, кешенең исеме, фамилияһы, географик объекттар, гәзит-журнал исемдәре яңғыҙлыҡ исемдәргә инәләр һәм һәр саҡ ҙур хәреф менән яҙылалар, ә ҡалған исемдәр уртаҡлыҡ исемдәр тип атала, улар бәләкәй хәрефтән башланып яҙыла. (Ҡағиҙәне уҡыу).

8. Теманы күнегеүҙәр менән нығытыу. 15-се, 16-сы күнегеүҙәрҙе телдән.

9. Һүҙлек менән эшләү (Урыҫса-башҡортса һүҙлек. З.Ғ. Ураҡсин).

9-сы күнегеү эшләү өсөн 5 командаға бүленәбеҙ. Һәр бағанала 5 һүҙ бирелгән. Һәр команда һәр бағананан берәр һүҙ тәржемә итә. Мәҫәлән:

1-се команда липа, крапива, волк, жук, щука һүҙҙәренә тәржемә бирә. Һәр командала һүҙлектәр бирелгән.

10.Йомғаҡлау

– Был дәрестә С. Юлаев тураһында ниндәй яңы мәғлүмәттәр белдегеҙ? Эйе, ул батыр, үҙ иле, ере, халҡы өсөн ғүмерен бирергә лә әҙер батыр булған. Йылдар дауамында уның ижады, тормошо менән ҡыҙыҡһыныусылар күп булған. Китаптар күргәҙмәһе, бөгөнгө әҫәр быға ҙур миҫал булып тора. Киләсәктә һеҙ ҙә ил батырҙары кеүек үҙ Ватанығыҙҙы һаҡларҙай,яҡларҙай шәхестәр булып үҫеүегеҙҙе теләйем.

11. Өй эше: шиғырҙан өҙөктө ятлап килергә

12. Баһалау.

РАУИЛ БИКБАЕВ “УРАЛЫМА”.
Һөйләмдең әйәрсән киҫәктәре

Батыргәрәева Әлминә Әнғәм ҡыҙы,
Бүздәк ауылы һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Рауил Бикбаев “Уралыма”. Һөйләмдең әйәрсән киҫәктәре.

Белем биреү маҡсаттары:

1. Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу.
2. Шиғырҙарҙы анализларға өйрәтеү.
3. Һөйләмдең әйәрсән киҫәктәре тураһында мәғлүмәт биреү.

Үҫтереүсе маҡсаттар:

1. Уҡыусыларҙың образлы фекер йөрөтөү һәләттәрен үҫтереү.
2. һөйләү телмәрен үҫтереү.

Тәрбиәүи маҡсаттар:

1. Туған әҙәбиәткә һөйөү тәрбиәләү.
2. Урал тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу.

Йыһазландырыу:

- Медиапроектор, компьютер, диск «Презентация Р. Бикбаев».
- Китаптар, шиғырҙар йыйынтыҡтары.
- Кроссворд.

Дәрес төрө: яңы теманы өйрәнеү. Предмет ара бәйләнеш: Башҡорт мәҙәниәте, тарих, психология, география.

Эш төрҙәре, методтары, формалары: Күргәҙмә, ярым-эҙләнеү эше. Индивидуаль эшләү. Әңгәмә, шиғырҙарға анализ, һорауҙарға яуаптар, тасуири уҡыу, үҙаллы эш.

Дәрес оҙонлоғо: 45 минут.

Дәрес барышы:

I. Иҫәнләшеү.

II. Артикуляцион күнегеүҙәр. 2 слайд

РӘ-РӘ-РӘ – урман буйлап йүгерә,
РА-РА-РА – ҡулын болғап саҡыра.
РӨ-РӨ-РӨ – япраҡ ярған бөрө,
РӨ-РӨ-РӨ – урманда тыныс йөрө.

III. Дәрес темаһы менән таныштырыу.

3 слайд.– Уҡыусылар, дәресебеҙҙең эпиграфына иғтибар итәйек:

Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең.

- Был эпиграфтан нимә аңларға була? (Яуаптар)
- Ә хәҙер эпиграфыбыҙҙың авторын белеү өсөн кроссворд сисеп алайыҡ. 4-6 слайд

1. Милли музыка ҡоралы. 2. Эйәрсән киҫәк, ниндәй? ҡайһы? һорауҙарына яуап бирә. 3. Милли гимн? 4. 1-се зат алмашы. 5. Платье һүҙенең тәржемәһе? 6. Ҡыйыу һүҙенә синоним? 7. Белем шишмәһе? 8. Белем усағы? 9. Әкиәттәр нисек башлана? (... заманда) 10. Башҡорт халҡының милли батыры? 11. һәр кем яратып уҡыған журнал? 12. Туған ил һүҙенең синонимы? 6 слайд

Шулай итеп, уҡыусылар, бөгөн дәресебеҙҙә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың “Уралыма” шиғырын уҡып үтәрбеҙ. Был шиғыры менән автор үҙенең уҡыусыларына нимә әйтергә теләгәнен асыҡларбыҙ.

IV. Яңы тема.

1. Дәфтәрҙә числоны, теманы яҙыу.
2. Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышыу. 7-11 слайд
3. “Уралыма” шиғыры өҫтөндә эш:

а) шиғырҙы үҙ аллы уҡыу;

б) һүҙлек эше: һын – стан, ҡын – ножны, килмешәк – переселенец, баҡһам – посмотрю, иңдәрендә – на плечах.

в) шиғырҙы тасуири уҡыу (уҡытыусының уҡыуы);

г) рус теленә тәржемә итеү;

ғ) һорауҙар буйынса әңгәмә:

- Уралдың үткәнен автор нисек һүрәтләй? (1,2-се строфаларҙан яуап табыу)
- Авторға нимә йәшәү көсө бирә? (3-сө строфаны уҡыу, яуап табыу)
- Уның күңеле ни өсөн тыныс? (4-се строфаны анализлау)
- Урал тураһында нимәләр беләһегеҙ? 12 слайд.

(Боронғо башҡорттар Тыуған ил һәм Урал төшөнсәһен бер бөтөн итеп ҡарағандар. Башҡорт халҡының иң матур уйҙары, йырҙары, легендалары Уралға арналған булған. Ысынлап та, беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәте һоҡланғыс бит).

д) сылбырлап уҡыу.

4. Шиғыр буйынса һығымта яһау.

- Шулай итеп, шағир үҙенең шиғырында илебеҙҙең үткәне менән ғорурлана. Ысынлап та, күпме дошман беҙҙең илебеҙҙе баҫып алмаҡ булған, ләкин булдыра алмаған. Тағы ла шағир иленең бөгөнгөһөн ярата, уның менән ғорурлана, уның киләсәге матур һәм тыныс булырына ышана.

5. Ә хәҙер Тыуған ил турындағы мәкәлдәрҙе иҫкә төшөрөп китәйек әле**:** (экранда мәкәлдәр, уларҙың башы бар, тик аҙағын иҫкә төшөрөргә кәрәк).

13 слайд

Ватанһыҙ кеше - .... (урманһыҙ һандуғас).

Иле бар батыр хур булмаҫ, батыры бар ... ... (ил хур булмаҫ).

Иле юҡтың - .... (көнө юҡ).

6. Грамматик тема. Дәфтәрҙә эш.

Үтелгәндәрҙе ҡабатлау өсөн 285–се күнегеүҙе эшләү, эйәрсән киҫәктәрҙең аҫтына һыҙырға.

V. Дәресте йомғаҡлау**.**

- Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?

- Кем ул Рауил Бикбаев? 14 слайд

Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа 2013 йылдың 12 декабрендә 75 йәш тула. Уның халҡына, иленә ҡарата мөхәббәте шиғырҙарында һәм көндәлек эшмәкәрлегендә сағыла. Мин дә һеҙҙең Ватанығыҙҙы, телегеҙҙе яратыуығыҙҙы, яҡшы уҡыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы һәм ысын кеше булыуығыҙҙы теләр инем.

VI. Өйгә эш.

1. Шиғырҙы тасуири уҡырға;
2. “Тыуған яҡ тәбиғәте” тигән темаға бәләкәй генә хикәйә төҙөп яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «УРАЛЫМА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Мөхәмәҙиева Дилә Вафир ҡыҙы,
Ишембай ҡалаһы 2-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

- Р.Бикбаевтың ҡыҫҡаса биографияһын иҫкә төшөрөү һәм нығытыу;
- «Уралыма» шиғырының идея- тематик йөкмәткеһен асыу ;
- халҡыбыҙҙың үткән тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу;
- Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, китаптары күргәҙмәһе, рәссам А.О. Орловскийҙың «Башкир в бою» картинаһы, таратма карточкалар, компьютер, экран, проектор.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.

Уҡыусыларҙы дәрескә әҙерләү.

Синыфта ыңғай мөнәсәбәт булдырыу.

Һаумыһығыҙ, тырыш уҡыусыларым!

Һаумыһығыҙ, талапсан уҡытыусым!

Һаумы, йомарт ҡояшым,

Һаумы, илаһи күгем,

Хәйерле көн, илкәйем,

Ғәзиз йәнтәйәккәйем.

II. Инеш өлөш.

1.Фонетик- артикуляцион күнегеү.

1-се слайд.

Ил яҙмышы – ир ҡулында,

Ир яҙмышы – ил ҡулында.

Халыҡ мәкәле.

(Халыҡ мәкәлен проекторҙан хор менән уҡыу.)

2. Мәкәлдән сығып проблемалы һорау ҡуяйыҡ. Ил менән ир яҙмышының айырылғыһыҙ булыуы нимәлә? Ошо һорауға дәрес аҙағында әйләнеп ҡайтырбыҙ.

3. Дәрестең темаһын һәм маҡсатын әйтеү. 2-се слайд. (Шағирҙың портреты).

Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың «Салауат ҡылысы» шиғыры менән йыл башында танышҡан инегеҙ. Бөгөн беҙ уның биографияһын иҫкә төшөрөп үтербеҙһәм «Уралым» шиғырын анализларбыҙ.

II. Яңы теманы аңлатыу, нығытыу.

1. Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың биографияһын нығытыу маҡсатында карточкалар менән эшләйбеҙ. Бирелгән һорау-яуаптарҙы файҙаланып, тәүҙә үҙегеҙҙе тикшерәһегеҙ, унан бер-берегеҙҙең яуаптарын тыңлайһығыҙ, баһалайһығыҙ. (Бер төркөмдә 4 бала эшләй.)



Иҫкәрмә: АСО методын яңы материалды нығытыу этабында ҡулланырға мөмкин. Был методтың урыҫ мәктәптәрендәәһәмиәте ҙур. Түбәндәге маҡсаттарҙы үтәргә булышлыҡ итә.

1. Һөйләү телмәре байытыла.
2. Монологик телмәр үҫтерелә.
3. Логик фекерләү, үҙ-үҙен тикшереүһәм йәнәшәләге иптәштәре контроле аҫтында ла камиллаштырыла.

Карточка №1

Кем ул Рауил Бикбаев?

Башҡортостандың халыҡ шағиры,Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, ғалим, йәмәғәт эшмәкәре.

Карточка №2

Рауил Бикбаев ҡасан тыуған?

1938 йылда тыуған.

Карточка №3

Рауил Бикбаев ҡайҙа тыуған?

Ырымбур өлкәһе Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған.

Карточка №4

«Салауат ҡылысы» шиғырында нимә тураһында һүҙ бара?

Салауаттың азатлыҡ өсөн көрәше һүрәтләнә.

2. (Уҡыусыларҙың баһаларын тыңлау.)
3. Дәфтәрҙәренә бөгөнгө датаны һәм теманы яҙып ҡуйыу.

Уҡытыусы һүҙе.

Эйе, уҡыусылар, һеҙҙең яуаптарығыҙҙы тулыландырып, уның һорау-яуап алымындағы тәрән мәғәнәле шиғыр юлдарын уҡып китмәксемен:

- Тыуған йылың ҡайһы?
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған юлың ҡайһы?
- Халҡым ҡыуған юл.
- «...Бындай ҡыйыу яуапты донъяла, тарихта һәм тормошта үҙ урынын аңлаған шәхес кенәәйтә алыр ул,» тип яҙҙы мәшһүр әҙәбиәт белгесе Әнүр Вахитов.

4. Шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү.

Әҙиптең ижады уның фамилияһына торошло бик бай. Һәр әҫәре уйландыра, рухи булмышыбыҙға көс һәм көҙрәт бирә.

Китаптың 97-се битен асабыҙ, «Уралыма» шиғырын мин уҡыйым, ә һеҙ күҙәтеп ултырығыҙ, аңлашылмаған һүҙҙәрҙең аҫтына ҡәләм менән билдә ҡуябыҙ, анализлау барышында үҙләштерербеҙ. (Уҡытыусы тасуири уҡый).

Һүҙлек эше :

Һын -фигура

баҡһам- ҡараһам

күҙем тала белмәй- арымай

килмешәк- здесь: завоеватель

иңдәрендә –на плечах

гүйә – словно

Иҫкәрмә: Һүҙлек эшен түбәндәгесә үткәрәм: таҡталағы һүҙҙәрҙе хор менән уҡыйбыҙ, һүҙҙең нисә ижектән тороуына ҡарап, уҡыусылар бер хәрефкәкалғансы уҡыйҙар,ә уҡытыусы юя бара – был алым уҡыусыларҙың иғтибарын туплай һәм һүҙҙәрҙе тиҙ арала ятлап алырға ярҙам итә.

Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау һәм баһалау.

5. Шиғырға комментарийлы – строфалы анализ.

(Һәр строфаны уҡығанда уҡыусыларҙың белем кимәлен иҫәпкә алып, рус теленә тәржемә итәбеҙ).

- Беренсе строфала нимә тураһында һүҙ бара?
- Шағир Уралды ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа оҡшата.
- Ҡындағы ҡылыс. Мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ?
- Был ҡылыс – тыныс ҡылыс, һуғыш теләмәй.
- Уҡыусылар, ниңә дошман Уралды баҫып алырға теләгән?

- Уралдың тәбиғәте матур, йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа, ҡаҙылма байлыҡтарға бай илаһи ер.

- Икенсе строфалағы ҡылыс ниндәй?

- Был ҡылыстан һәр килмешәк һәләк булған, беҙҙең ата- бабаларыбыҙ ерҙәрен һаҡлап яуға күтәрелгәндәр.

- Тимәк, ҡылыс дошмандан һаҡланыу өсөн һуғыш ҡоралы булып хеҙмәт иткән. 3-сө слайд.

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың ҡаһарманлығын, ҡылыс менән оҫта эш итеүҙәрен күҙ алдына килтерер өсөн рәссам А.О. Орловскийҙың «Башҡорт яугиры алышта» картинаһын ҡарап үтәйек. (Проектор аша күрһәтеү).

- Был һүрәттә алыш барышында яугир үҙен нисек тота?

- Ҡурҡыу белмәй, көслө, иптәштәрен алышҡа өндәй.

- Көн торошо ниндәй? Яугирҙың кәйефенә тура киләме?

- Болоттар бер-береһенә ябырыла, йәшен йәшнәр кеүек.

- Тимәк, яугир ҙа дошманға йәшен булып ябырыла.

- Икенсе строфалағы юлдарҙан шағирҙың Урал менән һоҡланыуын табып уҡығыҙ.

...Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.

4-се слайд. (Башҡортостан тәбиғәтен һүрәтләгән слайдтарҙы күрһәтеү).

- Эйе, Урал – ата-бабаларыбыҙҙың беҙгә мираҫ итеп ҡалдырған тәйәге. Был йәнтәйәк шағир өсөн изге.Уны ошо тәйәк илһамландырған, аҡылына көс-көҙрәт биргән. Шуға ла шағир Уралға ҡарап һоҡлана.

- Өсөнсө строфала авторға нимә йәшәү көсөн бирә? Шиғырҙан шул урынды табып уҡығыҙ.

...Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр...

Сылтырап аҡҡан шишмәләр уға илһам бирә, сөнки һыу – йәшәү сығанағы. Бында шишмә образы шағирҙы ҡәүҙәләндерә. Уның уйы ла, һүҙе лә, эше лә хәрәкәттә, ул тынғы белмәй.

- Һуңғы строфаны уҡыйбыҙ:

Һиңә бағһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та,тыныс та,
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

- Һуңғы строфаның мәғәнәһен нисек аңлайһығыҙ? Шағирҙың ни өсөн күңеле тыныс?

- Илдең Урал тигән һынмаҫ ҡылысы бар.

- «Илдең Урал тигән һынмаҫ ҡылысы» һүҙбәйләнеше күсмә мәғәнәлә бирелгән. Был һүҙбәйләнеште «Несгибаемая духовная сила башкирского народа» тип аңларға кәрәк тип уйлайым. Ғөмүмән, ҡылыс – азатлыҡөсөн көрәш символы. Ул башҡорттоң рухи көсө лә, ҡөҙрәте лә. Был көс хәтерҙә тере сатҡы булып уяулыҡҡа,һиҙгерлеккә сақыра, шуға күрә шағирҙың күңеле тыныс.

IV. Дәресте йомғаҡлау. Шулай итеп, дәрес башында ҡуйылған һорауға әйләнеп ҡайтайыҡ : ил менән ир яҙмышының айырылғыһыҙ булыуы нимәлә?

Бер уҡыусы халыҡ мәҡәлен тасуири уҡый.

Ил яҙмышы – ир ҡулында,
Ир яҙмышы – ил ҡулында.(Халыҡ мәҡәле.)

Халыҡ ижадында, Рауил Бикбаев әҫәрҙәрендә ил менән ир яҙмышы бер бөтөн. Беҙҙең ни рәүешле йәшәүебеҙ ирҙәр иңендә. Әгәр улар ҡыйыу, абруйлы, рухлы булһалар, ил ғәме менән йәшәһәләр, киләсәгебеҙ шат та, тыныс та булыр. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев беҙҙе тап ошо сифаттарға эйә булырға өндәй.

V. Баһа ҡуйыу.

VI. Өйгә эш.(Өйгә эш биргәндә дифференциациялы уҡытыу алымын ҡулланам. Уның отошло яғы шунда: уҡыусыларҙың йәш, психологик, материалды аңлау үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, балаларға төрлө ауырлыҡтағы,төрлө формалағы эштәрҙе тәҡдим итергә мөмкинлек бирә.)

1. «Уралым» шиғырын тасуири уҡырға.
2. «Уралым » шиғырыныңһуңғы строфаһын ятларға.
3. «Тыуған ил» тураһында 5-7 мәҡәл табып ятлап килергә.

Р. БИКБАЕВТЫҢ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!» ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИК ҺӘМ РУХ ПРОБЛЕМАҺЫ

Сәфәрова Рәсимә Хәлил ҡыҙы,
Стәрлетамаҡ ҡалаһы,
Жәлил Кейекбаев исемендәге 3- сө гимназия

Тема: Р. Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар биреГеҙ!» поэмаһында экологик һәм рух проблемаһы

Маҡсат: Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән танышыуҙы дауам итергә, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу, актуаллеген билдәләү; уҡыусыларҙың үҙ аллы эҙләнеү күнекмәләрен, һөйләү телмәрен үҫтереү; матурлыҡҡа һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү, экологик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: яҙыусының портреты, китаптарынан күргәҙмә, 2013 - Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылының девизы һәм эмблемаһы төшөрөлгән плакаттар, мультимедиа проекторы.

Дәрестең эпиграфы: Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел…

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу мәле.

2. Белемде актуалләштереү.

Инеш әңгәмә. 2013 йыл Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Был йыл ниндәй девиз аҫтында үтә? (1- се слайд).

- «Иртәгәһе көнөбөҙҙө һаҡлайыҡ!» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ? (2- се слайд)

- Ни өсөн символы итеп аҡ бөркөт һайланған? (сөнки был ҡоштар йәшәү урыны итеп экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙе генә һайлай). (3-сө слайд)

- Ни өсөн был тема бөгөнгө көн өсөн актуаль булып тора?

Башҡортостан ҙәненең ҡабатланмаҫ тәбиғәте менән күптәрҙе һоҡландыра. Был гүзәллекте һаҡлау – һәр беребеҙҙең изге бурысы. Һуңғы йылдарҙа тәбиғәтте һаҡлау, экологик хәлде яҡшыртыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла, ләкин эшләнәһе эштәр күп әле. Тәбиғәтте һаҡлау темаһына йәмәғәтселек кенә түгел, беҙҙең шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ ҙа мөрәжәғәт итә. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар?

Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев ижадында ла күтәрелә ул экологик проблема. Иҫкә төшөрәйек әле, уның ижадының төп темаһы ниндәй? (Тыуған ер, туған тел, тыуған тупраҡ, Тыуған ил, халыҡ яҙмышы).(4-се слайд)

3. Уңыш ситуацияһын тыуҙырыу.

- Шағир ижадының аҫыл ташы булған «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында шағир беҙҙе нимәгә өндәй икән? Дәрестең темаһына иғтибар итегеҙ әле, нимәләр тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (5 - се слайд)

Лирик герой гүзәл Ағиҙелебеҙҙе маҡтарға, данларға, һоҡланырға юлға сыға. Ә ни өсөн Ағиҙел буйлап? (Сөнки башҡорт халҡының бөтә тормошо Урал тауҙарында, Ағиҙел буйында үткән. Был йылғаның матурлығы, һыуының таҙалығы, балыҡҡа, йәнлеккә бай булыуы борон-борондан йырҙарҙа, легендаларҙа, ҡобайырҙарҙа данланған. (6-сы слайд)

Ағиҙел йырсыһы Рәшит Ниғмәти маҡтап яҙған уны шиғырҙарында, Максим Горький «Там, на Белой, места такой красоты – ахнешь, сто раз ахнешь»... тип һоҡланған). (7-8-се слайдтар)

4. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. Ниндәй ул бөгөн беҙҙең Ағиҙелебеҙ, нисек йәшәй ул, нисек көн күрә? Шағир әҫәренә ни өсөн шундай исем һайлаған? Экологик һәм рух проблемаһы нисек бәйләнгәндәр? Әйҙәгеҙ әле ошо һорауҙарға яуап эҙләп юлға сығайыҡ!

5. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.

Был сәйәхәттә ниндәй туҡталыштарҙы билдәләйбеҙ?

- Иҙел башы.
- Бөрйән.
- Шүлгән.
- Иштуған һыуһаҡлағысы.
- Эстәрле.
- Өфө.
- Кама.

– Шағирҙы нимә борсой? Поэманан юлдар менән иҫбатлағыҙ (төркөмдәрҙә эшләү).

1-се төркөм: Иҙел башында уҡ ағыуланған быуа, «матурлыҡтан тел шартлатыр саҡта» йылғала балыҡ шартлатҡандарын, шул тауыштан ҡоштар, кейектәр ҡурҡыуын күреп, һағаябыҙ, «Ағиҙелдең көнө - илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө - ил йөҙө» тип, уйға ҡалабыҙ. (9-сы слайд)

2-се төркөм: икенсе туҡталыш – Бөрйән. Бында ла күңел китерлек күренеш: Ағиҙел буйындағы солоҡло, ҡарағайлы урмандар ҡырҡыла, уларҙы кешеләр «йолҡҡолайҙар, талайҙар». Кешенең тәбиғәткә, үҙенә ҡарата ҡылған яуызлыҡтары тураһында уйланып, киләсәк хаҡында борсолоп, шағир менән артабан атлайбыҙ. Алда Ағиҙел, бәлки, Горький һоҡланғанса, Ниғмәти маҡтағанса һаҡланғандыр? Юҡ, хәлдәр маҡтарлыҡ түгел: йылға төбөн аҡтаралар, унда һуңғы ҡабат балыҡ уйнай, бүрәнә ағыҙалар. (10-сы слайд)

3-сө төркөм: «таш өй» – Шүлгәнгә етәбеҙ. Бөтә донъяға билдәле мәмерйәлә лә ҡара шом, ҡара моң, аҡ таштарҙа «ҡара дегет менән ҡара исемдәр яҙылған», таш һындар ватып алынып бөткән, емерелгән. Былар ҙа бит таш бәғер кешеләр эше! Боронғо ҡомартҡыларҙы юҡ итергә кемдең ҡулы барған?! (11-12-се слайдтар)

4-се төркөм: Иштуған һыуһаҡлағысы - «Урал күкрәгендә тағы ла бер шеш», бында һыу аҫтында ҡалған ауылдар, ҡәберлектәр, яҙмыштар. (13-сө слайд)

5-се төркөм: поэмала беҙҙең тыуған ҡалабыҙ Эстәрлегә, шихандарыбыҙға ҙур урын бирелгән. Хәтфә түбәле Торатау башынан күҙәтмәксе була уны шағир. Тик унан ҡала күренмәй! Төтөн, һөрөм, ҡором аҫтында ҡалған ул. Шаһтауҙың (Шәкетау) юҡҡа сығыуын, Ағиҙелдең, һәләүектең бысраныуын, Торатауҙан ҡаланың төтөн эсендә ултырыуын күреп борсола шағир. Ә Шаһтау, тотош бер тау, Ер йөҙөнән ғәйеп булған! Беҙгә, ошо ҡалала тыуып үҫкән кешеләргә, ошо юлдарҙы уҡыу бигерәк тә оят, ҡурҡыныс, аяныс булды. Легендар, уникаль шихандар тибеҙ, Ер йөҙөндә башҡа ундай тауҙар юҡ тибеҙ, маҡтанабыҙ. Нимә һуң ул шихандар, улар ҡайҙан килеп сыҡҡан?

- Сәнәғәт өсөн кәрәк тип кенә тау тиклем тауҙың юҡҡа сығыуын киләсәк быуынға нисек аңлатырбыҙ? Бөтә кешелек алдында оло енәйәт бит был! Нимә тип яуап бирербеҙ беҙ балаларыбыҙға? Беҙҙең ҡала - нефть ҡалаһы, ҙур сәнәғәт үҙәге, шуға тауҙы аҡтарҙыҡ, Ағиҙелебеҙҙе бысраттыҡ, Һәләүектe бөтөрҙөк, ҡаланы ҡара һөрөмгә батырҙыҡ, ләкин план үтәнек тиһәк, аңлармы улар беҙҙе, ғәфү итерме? (14-19-сы слайдтар)

- Тәбиғәт гүзәллеген тергеҙеп булмау тураһында Рауил Бикбаев бик фәһемле итеп ниндәй юлдар менән әйтеп бирә?

- *Ситтән күсерә торған шишмә булмай,*

Ситтән килтереҙәй тау булмай.

- Эйе, тауҙы ситтән килтереп ултыртып булмай. Ер йөҙөндә тиңе булмаған, Бөтә донъя тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау ойошмаһының исемлегенә ингән изге тау – Торатау яҙмышына ҡул һуҙырға маташҡан «Сода» берекмәһе етәкселәре ни уйлай икән был турала? Был турала нимәләр беләһегеҙ?

- Алдашыуға барып, вәғәҙәләргә ышандырып, киләсәк быуын хаҡын хаҡын уйламайынса улар халыҡтан имза йыя. Торатауҙы һәм Йөрәктауҙы бай сәнәғәтселәргә бирep, һауабыҙҙы, ер-һыуыбыҙҙы бысратҡан,

балаларыбыҙҙың сәләмәтлегенә зыян килтергән өсөн республикабыҙға, ҡалабыҙға аҙмы-күпме ярҙам иткәс, ни ҡыланһаҡ та хаҡлыбыҙ, тип уйлайҙар, күрәһең. Ҡала гәзите «Ашҡаҙарҙың» һуңғы һандарында «Сода»лар ризаһыҙлыҡ белдерә», «Ымһынмағыҙ Торатауға!» тигән мәҡәләләр баҫылды.

- Тәбиғәтте һаҡлау йылында был көрәшкә нөктә ҡуйылып, изге тауҙарыбыҙ тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын юғалтмай, һаҡланып ҡалырға тейеш. Йөрәктауыбыҙға ла, Торатауыбыҙға ла бер кем дә ҡул һонмаҫ тип өмөтләнәйек, көрәшәйек. Изге тауҙарыбыҙ киләсәк быуын өсөн кәрәк.

- Борсоулы уйҙар, мең төрлө һорау менән ары китә лирик герой, уларҙан башы сатнай, тамаҡ кибә. Ҡайҙа һыу, бер йотом һыу? Ағиҙел һыуын уртлап булмай, ул бысраҡ, ағыулы. Сарсап, өмөт-ышаныс менән баш ҡалабыҙ Өфөгә лә килеп еттек, бында хәлдәр нисек? (20-се слайд)

6-сы төркөм: ләкин бында ла бер йотом һыу табып булманы, сөнки ул мазутлы, хатта йылға өҫтөндә ыуылдырыҡ ағыуланып ята. Ҡала туҙан, ҡором эсендә ултыра. Өс һыуһылыу - өс ҙур йылға- Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим бер–береһенә ah-зар һөйләй, кеше ҡылыҡтары өсөн ояла, ҙҙәренең булмыштарынан ҙҙәре ояла. (21-се слайд)

7-се төркөм: Камаға еттек, сәйәхәт тамам. Нефть вышкалары ер бысрата, ҡырҙар ҡутара, йәйләүҙәр тарая, уларҙы ағыулы ямғырҙар һуғара. (22-се слайд)

- Поэманың һуңғы биттәрен уҡығанда нимәләр кисерҙегеҙ? (Үҙебеҙҙе кешелектең бер тамсыһы итеп тойоп, тәбиғәткә вәхшиҙәрсә ҡараштан оялыу кисерҙек, ғәйепле икәнебеҙҙе таныныҡ).

5. Нығытыу. Ағиҙелебеҙҙе мактарға юлға сыҡтыҡ, әммә йырыбыҙ үтә лә моңһоу, хәүефле булды. Кем ғәйепле? (Кеше ғәмһеҙлеге, аңһыҙлығы, ил дәүләте артһын тип тырышыуы).

- Тәбиғәткә был ҡырағайҙарса ҡарашты тамырынан ҡоротоп, йәнтөйәгебеҙҙең ниндәй көнгә төшкәнен аңларға ваҡыт икәне шағир ниндәй һүҙҙәр менән аңлата?

(Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит,

Үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ).

- Ниндәй хәүеф алдында торғаныбыҙға саң һуғып, беҙҙең аҡылға нимә тип өндәшә ул?

Беҙ бит кеше!

Беҙ бит түгел

Донъя ҡоротор ер ҡорто! (23-сө слайд)

- Ни өсөн поэманың исеме «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» тип атала? (Беҙ Иҙел буйында йәшәйбеҙ, ләкин уның һыуын эсә алмайбыҙ, унда хатта һыу инеүе лә ҡурҡыныс була башланы. Сөнки бөтә нефть-химия гиганттары шул мәшһүр йылға буйында урынлашҡан һәм, бер-береһе менән ярышып, уны ағыулай. Бер Ағиҙел генә ошо хәлдә түгел бит әлеге заманда. Бына ни өсөн Рауил Бикбаев үҙенең поэмаһын «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» тип атаған һәм тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡарашта булырға саҡыра.)

6. Йомғаҡлау.

– Был поэма беҙҙе ниндәй уйҙарға һалды? (Был поэманы уҡыҫас, һәр кеше киләсәк өсөн ниндәй тәбиғәт ҡалдырабыҙ тип уйланырға тейеш. Беҙҙең балаларыбыҙ Ағиҙел буйлап «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» тип, бер йотом һыу эҙләп йөрөрлөк булмаһын. Ғәмһеҙ булмайыҡ, сөнки, шағир әйтмешләй:

Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты

Һуң түгелдер әле, һуң түгел… (24-се слайд)

- Бер-береһе менән экологик һәм рух проблемаһы нисек бәйләнгәндәр? (Тәбиғәттә, тәбиғәт менән бергә кешенең үҙен дә һаҡлап ҡалырға саҡыра шағир, кешенең аҡылына өндәшә).

7. Яуаптарҙы баһалау. Һәр бер төркөм үҙенең һәм башҡаларҙың эшен баһалай.

8. Өй эше. Матбуғат баҫмаларында (Ҡ.Булат. Ымһынмағыҙ Торатауға! // Ашҡаҙар, 2012, № 93. «Сода»лар ризаһыҙлыҡ белдерә // Ашҡаҙар, 2013, № 5) һәм Интернет селтәрендә шихандарҙы яҡлап барған көрәш тураһында сығыштар әҙерләргә.

ОРАНЫНДА БӨРКӨТ САҢҠЫУЫ БАР,
ҠЫЛЫСТАРҘЫҢ УНДА БАР СЫҢЫ

Мәхәмәтова Рәйсә Миниғәли ҡыҙы,
Волга буйы федераль округы Башҡорт кадет корпусы

Маҡсат: Р. Бикбаев тормошо һәм ижады тураһындағы белемдәрҙе тәрәнәйтеү, системаға һалыу, шағир шәхесенә, ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу аша уҡыусыларҙың үҙ аллы белем алыу, эҙләнеү, хеҙмәттәшлек эшен ойоштороу.

Йыһазлау: Шағирҙың портреты, китаптар күргәҙмәһе, компьютер, слайдтар.

Эпиграф: - Тыуған йылын ҡайһы?
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған йылын ҡайһы?
- Халҡым ҡыуған юл.

Р.Бикбаев.

Дәрес барышы:

Уҡытыусы. Уҡыусылар, эпиграфты иғтибар менән уҡып сығығыҙ. Һеҙ был юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Ниндәй кеше ошолай тип әйтә ала? (уҡыусыларҙы уйландырыу)

Уҡыусылар. Халҡым тип янып йәшәгән, уның яҙмышы, йәшәйеше, киләсәге өсөн борсолған, халҡына яҡшылыҡтар, изгелектәр ҡылыусы, уның булмышына битараф булмағандар ғына шулай тип әйтә ала.

Уҡытыусы. Кемдәрҙе миҫалға килтерер инегеҙ?

Уҡыусылар. Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Шәйехзада Бабич, Әхмәтзәки Вәлиди, Муса Мортазин кеүек күренекле шәхестәрҙе һанайҙар.

Уҡытыусы. Дөрөҫ, уҡыусылар. Һәр замандың үҙ иле, тыуған халҡы, уның тарихи үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге,теле, мәҙәниәте, сәнғәтте проблемалары менән янып йәшәгән шәхестәре була. Бөгөнгө башҡорт шиғриәте күгенең сағыу йондоҙо, аҫыл һүҙ оҫтаһы Рауил Бикбаев тап шундай шәхестәрҙең береһе.

Бөгөнгө дәресебеҙ халҡым, милләтем, телем тип янған шағирыбыҙҙың тормош юлын, ижадын, фәнни һәм йәмғәт эшмәкәрлеген өйрәнеүгә арнала.

I. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

1-се слайд.

Шағирҙың портреты, төрлө йылдарҙа төшкән фотолары.

Рауил Бикбаев - Башҡортостандың халыҡ шағиры. Республикабыҙ-ҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр, Зәйнәб Биишева һәм Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты, йәмғәт эшмәкәре.

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев, уның ижады тураһында нимәләр беләһегеҙ?

Уҡыусылар шағирҙың “Башҡортостан бында башлана”, “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”, “Дауыл”, “Барып етһен ине хаттарым”, “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта” шиғырҙарын иҫкә төшөрәләр. Шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе яттан һөйләйҙәр. (Алдан ҡабатларға эш бирелгән була).

II. Яңы тема.

Уҡытыусы. Уҡыусылар, бөгөнгө инеш дәрестә халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы, ижады, фәнни хеҙмәттәре һәм йәмғәт эшмәкәрлеге тураһында тулыраҡ мәғлүмәтте һеҙҙең алдағы китаптар,интернет селтәре бирер.

2-се слайд. Был слайдта яңы тема буйынса схема бирелгән. Уҡыусыларға төркөмләп эш бирелә.

1-се төркөм - Рауил Бикбаевтың биографияһы һәм шәжәрәһе тураһында мәғлүмәт әҙерләй.

2-се төркөм-шағирҙың әҙәби ижады буйынса сығыш әҙерләй.

3-сө төркөм - Р.Бикбаев – ғалим. Уның фәнни-тикшеренеү хеҙмәттәренә байҡау.

4-се төркөм - Р.Бикбаевтың публицистик мәҡәләләре, унда күтәрелгән мөһим проблемалар.

Уҡыусыларға шағир ижадының томлыҡтары, “Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады”, “Замандың шиғри йылъяҙмаһы”, “Шағир һүҙе - шағир намыҫы”, “Рәми”, “Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙән” китаптары таратып бирелә һәм схема эшләргә ҡушыла.

1-се төркөм уҡыусыларына һүҙ бирелә. Бер уҡыусы дәреслектә бирелгән биографик материал буйынса сығыш яһай. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрәфик тигән ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған, унан Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡыған. Өфөгә килеп Башҡортостан дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған, аспирантурала уҡыған. Кандитатлыҡ диссертацияһын яҡлап, ғалим дәрәжәһе алған. Хәҙерге көндә филология фәндәре докторы.

2-се уҡыусы Рауил Бикбаевтың “Һайланма әҫәрҙәр”енең бишенсе томынан “Академик Ғайса Хөсәйеновтың һорауҙарына яуаптар”ынан шағирҙың биографияһына өҫтәмәләр индерә.

3-сө уҡыусы шағирҙың нәҫел шәжәрәһе тураһында һөйләй. шағирҙың ете быуын шәжәрәһе ошолай: Аҫылгәрәй – Бикбай Ҡотлаҳмәт – Хәсән – Мөхәмәтша – Шәрәфетдин – Төхвәтулла – Рауил. “Алыҫ олатайыбыҙ Аҫылгәрәй егетлеге менән Соранда ғына түгел, Туҡ буйҙарында ла дан тотҡан. Ул XVIII быуат урталарында йәшәгән булырға тейеш. Тимәк, Кинйә Арыҫланов менән ырыуҙаш ҡына түгел, көрәштәш булыуы ла бик ихтимал”, - ти Р.Бикбаев үҙенең Ғ. Хөсәйеновҡа яуаптарында. Өләсәһе Мәүлетбикә бик ҡунаҡсыл, алсаҡ кеше булған. Сәсән һүҙле булған, ауылдағы төрлө хәлдәр тураһындағы таҡмаҡтары халыҡ араһында таралған. Иң бәләкәй улы Ғизитдин Алыҫ Көнсығышта 1940 йылда һалдат хеҙмәтендә вафат булғас, сығарған бәйеттең күсермәһе шағирға килеп эләгә. Өләсәһе һүрәт төшөрөргә лә маһир була.

4-се уҡыусы шағирҙың Ҡунаҡбайҙа, Ғәбдрәфиҡта, Аҡбулаҡ педучилищеһында уҡыу йылдарының шағирҙың рухи үҫешендә тәрән эҙ ҡалдырыуы тураһында һөйләй (“Һайланма әҫәрҙәр”,5-се том ,404-411-се биттәр).

3-сө слайд асыла. 2-се төркөм уҡыусыларына һүҙ бирелә.

1-се уҡыусы. Рауил Бикбаев шиғырҙарҙы алтынсы-етенсе кластарҙа яҙа башлай. Бында бабаһы (шул йылдаҙағы мәктәп директоры) Рәкип Вахитовтың йоғонтоһо ла булғандыр, сөнки ул фронтта күргәндәрен бәйет итеп һөйләй, мәктәп стена гәзиттәрендә шиғырҙарын да баҫтыра торған булған. Уның уҡыусыларының да, шул иҫәптән Р. Бикбаевтың, шиғырҙары ла мәктәп стена гәзиттәрендә баҫыла башлай. Тимәк, бәләкәй генә ете йыллыҡ мәктәптә үҙенсә әҙәби мөхит булған.

2-се уҡыусы. “Был мөхиттең тағы ла мөһимерәге, нығыраҡ арбаусаны, бәлки, шул осорҙа беҙҙең яҡтарҙа ныҡ һаҡланып ҡалған, телдән-телгә күсеп йәшәгән фольклор традицияларының, бай ауыҙ-тел ижады булғандыр. Ни тиклем тылсымлы һүҙ балҡыштары стихияһында үҫкәнебеҙҙе мин йылдар үткән һайын нығыраҡ баһалай барам, нығыраҡ һағынам. Беҙ бәләкәй саҡта кем күпме әкиәт, күпме таҡмаҡ белә тип ярыша торғайныҡ. Йомаҡ ҡойоу ғәҙәти хәл ине. Ауылыбыҙҙа Нәзифә Байтимерова тигән һуҡыр әбей торғаны әкиәт хазинаһы ине. Уны әкиәт һөйләтер өсөн ауылда өйҙән өйгә ҡундырып йөрөтөрҙәр ине, уны ҡундырыр көндә балалар байрам һымаҡ көтөп ала торғайны. Ҡайһы бер әкиәттәр бер көндә генә бөтмәй, дауамы икенсе көн һөйләнелә ине. Беҙҙең бала саҡтың сериалдары…”, тип хәтерләй шағир үҙ ижадының шишмә башын.

3-сө уҡыусы. Р. Бикбаев Аҡбулаҡ педучилищеһында дүрт йыл белем ала. “Дүрт йылым бында аҡ икмәк ашап, ҡара һыу эсеп, китап уҡып үтте… Бик күп ваҡытым педучилищеның бай китапханаһынан алынған китаптарҙы уҡып үтте.

Педучилищела уҡыған йылдар минең ижад юлымда эҙ ҡалдырманы тиерлек. Ләкин был өйрәнсек дәүерен үтмәй мөмкин түгел ине. Был дүрт йыл миңә төплө белем бирҙе”, - тип хәтерләй шағир. Уның ижад менән ныҡлап шөғөлләнә башлауы Башҡорт дәүләт унивеситетында уҡыған йылдарына тура килә. Бында “Йәш көстәр” альманахында “Йәшәртелгән дала” шиғри шәлкеменең баҫылыуы әҙәбиәткә юл фатихаһы була. Университеттың һуңғы курсында уҡығанда баҫылған “Вокзал” исемле поэмаһы уны ауылы, иле, быуыны күргән-ишеткәнде үҙенекеләй кисереүсе шәхес итеп таныта. Студент йылдарында яҙылған шығырҙары 1964 йылда донъя күргән “Дала офоҡтары” исемле тәүге шиғырҙар йыйынтығына туплана.

4-се уҡыусы. Р.Бикбаев лирикаһы донъя именлеге, гражданлыҡ бурысына яуаплылыҡ, тәбиғәтте һаҡлау, дуҫлыҡ һәм туғанлыҡ, шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ хаҡында борсолоп уйланыуҙарҙан ярала. Ул “Ҡош юлы”, “Автобиография”, “Лирика”, “Ғүмер уртаһы”, “Ерем балҡышы”, “Бураҙналар”, “Ай күргәндәй- ҡояш алғандай”, “Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны” китаптары менән башҡорт әҙәбиәтенә тос өлөш индерә.

5-се уҡыусы. Р. Бикбаев – барыһынан да элек заман шағиры, бөгөнгө тормош йырсыһы, даулы һәм ҡатмарлы хәҙерге донъябыҙ, милли рухыбыҙ рәссамы. Лирика менән пафос бергә ҡушылған “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”, “Халҡыма хат”, “Баҙар балтаһы”, “Күк әрем”, “Ностальгия”, “Хазина” әҫәрҙәре киң билдәлелек яуланы. Улар үҙгәртеп ҡороу заманының берәгәйле шифры йылъяҙмаһын тәшкил итә.

Бөгөнгө көндә бөтәбеҙҙе лә борсоған тәбиғәт, экология проблемалары күтәрелә “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында. Поэмала тәбиғәт-кеше-производство тураһында һүҙ бара. Әҫәрҙә шулай уҡ халыҡ һәм тел яҙмышы мәсьәләләре киҫкен ҡуйыла. Шағир власть, фән, әҙәбиәт, мәҙәниәт проблемаларын да урап үтмәй. Улар барыһы ла ҙур поэтик оҫталыҡ, публицистик үткерлек менән асылған. Барыбыҙға яҡшы таныш “Халҡыма хат” поэмаһында әле һаман бөтә йәмғәтселектә борсоған, хафаларға һалған тел һәм милләт яҙмышы, уның киләсәге проблемалары күтәрелә.

Туғанынан яҙған- ярты йәтим,
Туған теленән яҙған- мең йәтим,
Телде йоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, уян, милләтем!

Был юлдарҙа шағирҙың милләте, теле өсөн тәрән борсолоуын күрәбеҙ. Ул халҡын ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, моңһоҙлоҡтан уянырға саҡыра. Ләкин был ғәмһеҙлек әле һаман дауам итә. Шағирҙың “Теле бөткәндең бит көнө бөтә, иле бөтә теле бөткәндең”, - тип асырғаныуҙары, оран һалыуы бөгөнгө көндә лә бик актуаль.

2009 йылда ижад ителгән “Хазина” поэмаһы һәр беребеҙҙе уйландырырлыҡ, хәүефләндерерлек мәсьәләләрҙе күтәрә. Поэмала әсе хәҡиҡәт ярылып ята: тормошобоҙҙа баш-баштаҡлыҡ хөкөм һөрә, берәүҙәр шашып байыһа, икенселәр көндән-көн бөлгөнлөк һаҙлығына бата. Шағир шул ғәҙелһеҙлектәрҙең асылына төшөнөргә тырыша, ғәйеплеләрҙе эҙләй. Шуға ла “Ни өсөн?”, ”Ниңә?”, “Кем тыйыр?” кеүек һорауҙар бирелә. Был һорауҙар бер кемде лә битараф ҡалдырмай, һәр кемде бөгөнгөбеҙ һәм киләсәгеҙ тураһында уйланырға саҡыра. Р. Бикбаев йәнә бер тапҡыр поэтик тел менән халҡына өндәшә, һағалап торған хәүефтәрҙән иҫкәртә, уяулыҡҡа саҡыра.

Был донъяның иркә улы булып,
Йәшәүҙәр юҡ беҙгә кинәнеп.
Һиндә - Салауаттың яралары,
Миндә - һыҙланыуы Кинйәнең, - тип яҙа Р. Бикбаев Рәми Ғариповҡа арналған шиғырында. Был буш һүҙҙәр түгел. Халҡы, иле яҙмышы, уның бөгөнгөһө, киләсәге өсөн һыҙланыуҙары шағир йөрәге аша үтеп, халҡына оран булып барып етә.

1-се уҡыусы Рауил Бикбаевтың шифри таланты тураһындағы Ирек Кинйәбулатовтың “Ҡуш Йөрәкле ҡоштоң осҡаны” шиғырын уҡый.

Һин яҙаһың йөрәгеңдән алып
Бөтә һыҙланыуын замандың,
Яҡшылығын күреп яҡшыларҙың,
Яуызлығын күреп яманды ң.

4-се слайд. Рауил Бикбаев - ғалим, филология фәндәре докторы. Шағирҙың ғилми хеҙмәттәре күрһәтелә.

1-се уҡыусы. Рауил Бикбаев шиғыр оҫтаһы ғына түгел, ул күренекле ғалим, филолог та. Башҡорт әҙәбиәте, уның бөгөнгө торошо, киләсәге тураһында тиҫтәләгән китаптар авторы. Ҡәләмдәштәре тураһындағы тәнҡит мәҡәләре яҙыусы ла. Ул, Шәйехзада Бабич ижады әле тыйылған ваҡытта, уның ижадын ентекләп өйрәнеп, халыҡҡа, китап һөйөүселәргә шағир мираҫын еткереүсе ғалимдарҙың береһе лә. Шағирҙың Рәми Ғарипов тураһындағы бик күп мәҡәләләре “Ағиҙел” журналдарында донъя күргән, һәм, ниһайәт, “Рәми” исемле йөрәк һүҙе беҙгә, уҡыусыларға, ҙур бүләк булды.

2-се уҡыусы. Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙыусы, башҡорт әҙбиәтенең алты томлыҡ тарихын, башҡорт шиғриәте антологияһын баҫтырып сығарыуға көс һалыусы ла ул. “Шағирҙар, яҙыусылар бер-береһен бик һирәк уҡый йәки бөтөнләй тиерлек уҡымай, - тип яҙа Р.Бикбаев “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” китабының баш һүҙендә. - Ә мин ҡәләмдәштәремде һәр ваҡыт уҡып барҙым: шиғриәтебеҙҙең барлыҡ яҡтарын да күреп-белеп, уңыштарыбыҙ өсөн ҡыуанып, уңышһыҙлыҡтарыбыҙ өсөн һыҙланып, шуларҙың барыһы хаҡында ла уҡыусыларға уй-фекерҙәремде еткереп йәшәнем”,- ти ул үҙенең ижад офоҡтарының киңлеген билдәләп. Был һүҙҙәрҙә беҙ шағирҙың башҡорт әҙәбиәте һәм ҡәләмдәштәре хаҡындағы борсолоуҙарын да, хәстәрлеген дә күрәбеҙ. Рауил Бикбаев - поэтик ижадын төплө, фәнни тикшеренеүҙәр менән бергә алып барған киң эрудициялы шәхес.

5-се слайд. Р. Бикбаевтың төрлө йылдарҙа гәзит-журналдарҙа донъя күргән мәҡәләләре күргәҙмәһе, “Һайланма әҫәрҙәр”, 5-се том. Интернет селтәре мәғлүмәттәре.

Уҡытыусы. Р.Бикбаев бик күп йылдар Башҡортостан яҙыусылар союзы рәйесе вазифаһын башҡара. Был үтә яуаплы эш: үҙ ижадын өсөн генә түгел, ә республикабыҙҙың күп милләтле халыҡтар әҙәбиәте үҫеше, уның әҙәби мираҫын киләсәк быуындарға ҡалдырыу, әҙәби дуҫлыҡ, берҙәмлек, әҙәби асыш кеүек мөһим мәсьәләләр өсөн дә ҙур яуаплылыҡ тойоу. Бөгөнгө әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе талантлы шағир халҡыбыҙға, йәштәргә рухи-әхлаҡи тәрбиә биреүгә, милләтебеҙҙең бәҫен күтәреүгә тос өлөш индерҙе. Халҡыбыҙ иле, милләте, теле тип янған улына ҙур ышаныс күрһәтте: 2008 йылда Рауил Төхвәт улы Башҡортостан Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтай депутаты итеп һайланды. Фән, мәғариф, сәнғәт буйынса комитетты етәкләү бурысы йөкмәтелде.

1-се уҡыусы. Заман хәстәрҙәре менән янып йәшәүсе, тыуған Башҡортостанының яҡты киләсәге хаҡына фиҙакәр хеҙмәт итеүсе оло әҙип, ғалим, дәүләт һәм йәмғәт эшмәкәре Р. Бикбаев халыҡ менән осрашырға, йыйылыштарҙа, съезд, Ҡоролтайҙарҙа, уҡытыусыларҙың август кәңәшмәләрендә рухи байлыҡ һәм әҙәбиәт,

милләт һәм тел мәсьәләләре, мәктәп һәм тәрбиә, милли нәшриәт һәм матбуғат, электрон китаптар нәшер итеү кеүек мөһим проблемалар буйынса йөкмәткеле сығыштар яһарға ла өлгөрә.

2-се уҡыусы. Р.Бикбаевтыңң “Рухи берҙәмлек шәжәрәһе” мәҡәләһе буйынса сығыш яһай. Күршеләр менән татыу донъя көтөү, башҡалар менән тыныс аралашыу һәр халыҡтың йәшәйешенең нигеҙен тәшкил итә. Кешеләр ҙә, халыҡтар ҙа башҡалар менән аралашыуҙа, бәйләнештә генә яңы көс туплай, шунһыҙ үҫеш юҡ. Башҡорттар ғүмер-ғүмергә күршеләр менән татыу йәшәгән, башҡаларҙың ерҙәрен баҫып алмаған. Иленә ябырылған яуҙарҙы кире ҡыуған, сараһыҙҙан тыуған төйәктәренән яҙғандарҙы үҙенә һыйындырған.

Башҡортостаныбыҙҙа бик күп милләт дуҫ, татыу ғүмер һөрә. Шуныһы ҡыуаныслы: тамырҙарҙы барлауға, тарихи хәтерҙе яңыртыуға Башҡортостанда һәр милләт кешеләренең иғтибары арта. Шәжәрә тигәндән элек һүҙ күберәк башҡорт шәжәрәләре тураһында ғына булған. Хәҙер республикала рустар ҙа, татарҙар ҙа үҙҙәренең шәжәрәһен, был ерҙәргә ҡасан, ҡайҙан килгәндәрен, бында нисек ғүмер һөргәндәрен ҡыҙыҡһынып өйрәнә башланы. Йәш быуында тыуған ергә һөйөү, ололарға ихтирам, Ватанды хәстәрләү тәрбиәләүҙә, Башҡортостандың халҡын берләштереүҙә был эштәрҙең баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтен билдәләй Р. Бикбаев үҙ сығышында.

3-сө уҡыусы Р. Бикбаевтың уҡытыусыларҙың август кәңәшмәлә-рендә туған тел уҡытыу һәм тәрбиә биреү мәсьәләләре буйынса фекерҙәре тураһында һөйләй.

4-се уҡыусы шағирҙың Өсөнсө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтай-ындағы “Һин телеңде һаҡлаһаң, телең дә һине һаҡлар” сығышында күтәрелгән мәсьәләләргә күҙәтеү яһай.

5-се уҡыусы Р. Бикбаевтың Башҡортостан Яҙыусылар союзының XV съезына әҙерлеге тураһында Лариса Абдуллинаға “Ҡарашыбыҙ киләсәккә төбәлгән” тип аталған интервью буйынса сығыш яһай. Яҙыусыларҙың XIV-XV съезд араһында башҡарған эштәре байтаҡ. Биш йыл эсендә эшләгән эштәре тураһындағы мәғлүмәт ҡалын бер китап булып тупланған. Биш йыл эсендә Зәйнәб Биишева исемендәге “Китап” нәшриәтендә һәм башҡа баҫмаларҙа әҙиптәрҙең 600-ләп китабы донъя күргән. Ошо ике съезд араһында Н. Асанбаевҡа, Ғайса Хөсәйеновҡа, Талха Ғиниәтуллинға Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Абдулхаҡ Игебаевҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән оло исем бирелгән. Таңсулпан Ғарипова, Ирек Кинйәбулатов, Ринат Ҡамал Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы бирелгән.

Рауил Бикбаев 2007 һәм 2009 йылдарҙа Рәсәй яҙыусылар сюзы секретариатының ике ултырышында хәҙерге башҡорт әҙбиәтенең үҫеше, ижади бәйләнештәр хаҡында фекер алышыу буласаҡ. Әҙәбиәттәге быуындар бәйләнеше, рухи күсәгилешлек, китап сығарыу, электрон китаптар мәсьәләләре ҡараласағы тураһында бәйән итә.

III. Йомғаҡлау**.** Уҡытыусы. Уҡыусылар, таҡталағы үҙегеҙ тултырған схемаға ҡарағыҙ әле. Ни тиклем хеҙмәт атамары яҙылған. Шул тиклем әҫәр ижад итер, фәнни һәм көнүҙәк проблемаларға арналған публицистик мәҡәләр яҙыр, халҡына еткерер өсөн күпме ваҡыт,көс,илһам кәрәк?! Ижад - тынғыһыҙ, үтә яуаплы эш. Рауил Бикбаев бөгөнгө көндә лә заман хәстәрҙәре менән янып йәшәй, ҡомарланып ижад итә. Йәмғәт эштәрендә ҡайнай, йәш ҡәләмдәштәре менән әңгәмәләшергә лә форсат таба.

Тимер Йосоповтың Рауил Бикбаевҡа арналған “Бөркөт саңҡыуы” шиғырында шағирҙың ижад асылы бар дөрөҫләгәндә асып бирелгән:

Оранында бөркөт саңҡыуы бар,
Ҡылыстарҙың унда бар сыңы,
Сәсәндәрҙең алыҫ һин- бер осо,
Ғәйәр Кинйәләрҙең ярсығы.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ЙӘНШИШМӘБЕҘ ОШО ТУПРАҠТА “ ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ғәлиуллина Әлимә Ибраһим ҡыҙы,
Бөрйән районы Иҫке Собханғол урта
дөйөм белем биреү мәктәбенең Яңы Собханғол филиалы

Маҡсат: шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу, шиғырҙың актуаллеген күрһәтеү, уҡыусыларҙың үҙаллы фекерләүҙәрен, фекерҙәрен дәлилләй белергә өйрәтеү, тасуири уҡыу һәм һөйләү күнекмәләрен үҫтереү, еребеҙ, халҡыбыҙ яҙмышы тураһында уйланыу, тыуған ергә һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, китаптары, компьютер, презентация.

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу

Ситуация тыуҙырыу

Башҡортостан ерен ботарларға
Күпме уҡталдылар ят ҡулдар.
Барыһы ла ерҙең хәтерендә,
Яралары һаман һулҡылдай.

Шиғыр юлдарын уҡыйбыҙ. Һеҙҙе ниндәй уйҙар солғап алды? (Башҡортостанымдың үткәне,ерҙәре,еребеҙҙе баҫып алырға теләүсе дошмандар).

- Ни өсөн ерҙең яралары һаман һулҡылдай? (яуабыңды дәлиллә).

Эйе, Р. Бикбаевтың шиғырҙарын уҡып, уйланыуҙарға, кисерештәргә батаһың, борсолоулы уйҙар ҡосағына сумаһың. Бөгөн беҙ Тыуған иленә, еренә, теленә, үҙ быуынын, үҙ заманын ҡайғыртҡан шағирҙарыбыҙҙың береһе Рауил Бикбаевтың ”Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта” шиғырын өйрәнәсәкбеҙ.

Шиғырға иғтибар итһәк, Шиғырҙың исеме нимә тураһында һөйләй? Йәншишмә һүҙен ҡайҙа осраттығыҙ? (яуап)

Презентация Йәншишмә - тыуған еребеҙ, тыуған илебеҙ, ата-бабалар рухы символы.

Уҡытыусы ҡобайыр өҙөгөн яттан һөйләй.

Ай тыуған ер, тыуған ер
Олатайҙар торған ер
Атам кейәү булған ер ,
Әсәм килен булған ер,
Кендегемде киҫкән ер,
Тәмле һыуын эскән ер!

Тимәк, беҙ бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (яуаптар)

2. Маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу .

Презентация а) һүҙлек эше: дарья – йылға, ҙур һыу, төйәк - тыуған ил , мөртәт - йүнһеҙ, ғәйрәт - көс, харам – ярамаған.

б) Бөгөнгө көндә ошо һүҙҙәрҙең телмәрҙә ҡулланылышы, миҫалдар килтереү;

в) уҡытыусының шиғырҙы тасуири уҡыуы;

г) уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы;

3. Шиғырҙың йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

Автор был шиғырҙа ниндәй проблемалар күтәреп сыға? (Тыуған ер һәм халыҡ яҙмышы, еребеҙҙең үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге).

Шиғырҙа ниндәй образдар бар? (Ер, халыҡ, ир-егеттәр, Урал, Бабич, Вәлиди, Йәншишмә, балта, ят ҡулдар, ҡурай, Ер-әсә).

Автор был образдар аша нимә әйтергә теләй? (еребеҙҙең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге тураһындағы уйланыуҙарын еткерә, тарих биттәрен аса һ.б.).

Шағирҙың теле бик бай, күтәрелгән проблеманы асыуҙа ҙур ярҙам итә. Шиғырҙа ҡулланылған ҡылым формаларына иғтибар итһәк, ниндәй ваҡиғалар күҙ алдығыҙға баҫа? Ни өсөн шағир һорау, өндәү һөйләмдәр ҡулланған? (яуап)

Авторҙың ер һатыуға мөнәсәбәте нисек? Ниндәй һүҙҙәр аша үҙенең еренә булған ҡарашын белдерә?

4. Нығытыу.

Шиғырҙы тасуири уҡыу. Шиғырҙа тыуған ер идеяһы нимәлә сағыла? Был шиғыр аша автор нимә әйтергә теләй? (еребеҙ, байлығыбыҙ сит-яттарҙы ҡыҙыҡһындырған. Әммә беҙҙең батырҙарыбыҙ, башҡорттоң аҫыл ирҙәре,халҡын көрәшкә саҡырған, яуға күтәргән. Халҡыбыҙ үҙ ерен бер ваҡытта ла дошманға бирмәгән. Ер өсөн көрәш – беҙҙең тарихыбыҙ. Беҙҙең төп бурысыбыҙ - еребеҙҙе һаҡлау.

Шиғырҙың әһәмиәте нимә менән билдәләнә?

Презентация. Бәхет, өмөт-ырыҫ, моң-ғәм, нур-йәм сығанағы булған ереңде юғалтыу – илеңде, үҙеңдең халҡыңды юғалтыу менән бер.

5. Төркөмдәр менән эш.

1-се төркөм ер образына ҡылыҡһырлама;

2-се төркөм халыҡ образына ҡылыҡһырлама;

3-сө төркөм ер һатыу мәсьәләһенә нисек ҡарайһығыҙ? (фекереңде иҫбатла).

6. Йомғаҡлау .

Үҙ халҡының тоғро улы, үҙ еренең ысын патриоты, һүҙ оҫтаһы Рауил Бикбаевтың шиғырында күтәрелгән ер мәсьәләһе беҙҙең көндәрҙә лә сағылышын таба. Халыҡты ашатҡан, туйындырған, йәшәткән ерҙе ҡәҙерләй, тәрбиәләй, һаҡлай белеү бөгөн дә мөһим. Беҙ тыуған еребеҙгә хәстәрлекле булырға, гәзиз Ер-әсәне, үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡларға тейешбеҙ.

Һеҙҙең бөгөнгө дәрестә өйрәнгәндәрегеҙ киләсәктә кәрәк буласаҡмы? (уҡыусылар дәрескә баһа ҡуя, дәрес менән килешеү- килешмәүҙәрен әйтәләр һәм яуаптары менән иҫбатлайҙар, уҡыусы-ларҙың эшмәкәрлегенә баһа ҡуйыла).

Өйгә эш.

1-се төркөм Тыуған ерем презентация төҙөй.

2-се төркөм Проект төҙөй.

3-сө төркөм Бәләкәй күләмле инша, йә шиғыр.

БАРЫҺЫ ЛА БЕҘҘЕҢ НАМЫҪТА

Ноғманова Люция Рабил ҡыҙы,
Оло Баҙраҡ дөйөм урта белем биреү мәктәбе

Тема: «Барыһы ла беҙҙең намыҫта». (Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһын өйрәнеү).

Маҡсат: 1. Шағирҙың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү. 2. Телмәр үҫтереү. Тасуири уҡыу күнекмәләре биреү.

Йыһазландырыу: дәрестең эпиграфы яҙылған плакат, Р. Бикбаевтың портреты, китаптары, «Ағиҙел» журналдары, проектор, слайдтар.

Дәрес барышы.

I. Ҡабатлау.

Башҡорт яҙыусыларының туған тел яҙмышы тураһындағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? (Б. Бикбай, Р. Ғарипов, З. Биишева, Ә. Әхмәт-Хужа, Рәшит Шәкүр һ.б. шиғырҙарын һанайҙар).

Был шиғырҙарҙың йөкмәткеһендә ниндәй уртаҡлыҡ күрәһегеҙ? (Туған телде данлау, уның нескәлеген, яңғырашын күрһәтеү, хаҡлыҡ теле булыуын билдәләү, тере шишмә менән сағыштырыу һ.б.).

- Дөрөҫ, Р. Бикбай туған телде тере шишмәгә тиңләй. Быуынды быуынға ялғаған, халыҡты милләт

итеп һаҡлаған, ойошторған тел бит ул. (Р. Бикбаевтың портреты, китаптары күрһәтелә - слайд №1)

Бер уҡыусы плакатҡа яҙылған эпиграфты тасуири уҡый:

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тоткан телем, һүҙем бар.

Был шиғыр юлдары ниндәй әҫәрҙән? *(Яуаптар).*

Дөрөҫ, был юлдар Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәренән. Был ниндәй әҫәр? Ни өсөн автор уны шулай атаған?

II. Инеш һүҙ. Халыҡ тормошоноң хәл иткесмәлдәрендә сәсәндәр, яҙыусылар, халыҡҡамөрәжәғәт итеп, уның яҙмышына йоғонто яһаған мәсьәләләрҙе аңлата һәм уны хәл итергә саҡыра. Мәҫәлән, С. Юлаев яуҙаштарын дошманға ҡаршы көрәшкә әйҙәгән, Аҡмулла иһә халҡын белемгә, ғилемгә эйә булырға өндәгән. Ш. Бабич «Башҡорт халҡына көйлө хитап» әҫәрендә туған халҡына 3. Вәлиди сәйәсәтен аңлата, ә М. Кәрим «Башхорт халҡына яуап хаты» шиғырында Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында халыҡты ил басҡынсыларына ҡаршы көрәшкә әйҙәй. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп яҙылған әҫәрҙәр бөгөн дә тыуа. Шуларҙың иң күренеклеһе — Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһы.

(Р. Бикбаевтың портреты, китаптары күрһәтелә - слайд №1)

III. Поэманың йөкмәткеһен үҙләштереү.

1. Алдан әҙерләнгән уҡыусы поэманың яҙылыу тарихын һөйләй.

Икенсе уҡыусы ҡыҙҙың хатын тасуири итеп уҡып сыға.

Был поэма, 1989 йылда яҙылһа ла, үҙенең актуаллеген бөгөн дә юғалтмаған.

2. Һүҙлек эше:

Слайд №2

оран — яуға саҡырған ауаз;
маһир — оҫта (талантлы);
кәр — сәм, ныҡышмалылыҡ.

Уҡытыусының поэманы уҡыуы.

Әңгәмә:

Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

Поэманың инешен нисек аңлайһығыҙ? Шағир ни өсөн «Тамырыңды уйлап ғорурланам, Бөгөнгөңдө күреп хурланам» ти? (Яуаптар)

- Поэмала телен, милләт азатлығын, Уралын һаҡлап яуға күтәрелгән халыҡ хаҡында ҡайһы юлдарҙа әйтелә? (Яуаптар)
- Ирек даулап, телдәре киҫелгән башҡорттоң бөгөнгөһө нисек һүрәтләнә? (Яуаптар)
- Ә ни өсөн шағирҙы бөтә донъяла танылыу алған, донъя сәхнәләрен сайҡалдырған мәҙәниәте булған милләттең хәле, яҙмышы борсолдора? (Яуаптар)
- «Сабыйының телен киҫкәндәр» тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ? (Яуаптар)
- Дөрөҫ, ата-әсә балаһын көсләп теленән яҙҙыра, «сит телгә балам маһир, тиеп» «ғорурлана», һөҙөмтәлә, бала үҙ милләтенән ояла. Слайд №3

Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый алһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан,
Сыуаш булыуынан,
Мари булыуынан оялһа.

- Шундай «телһеҙ кешеләр» үҫеп сығыуында автор кемдәрҙе ғәйепләй? (Яуаптар)

Телдең бөтөүе нимәгә килтереүе мөмкин? (Яуаптар)

- Шағир киләсәк быуынға ниндәй өмөт бағлай? (Яуаптар)

5. Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» мөрәжәғәт хаты ысын мәғәнәһендә халыҡты уята, бер кемде лә битараф ҡалдырмай, «телһеҙ» башҡорттарҙа туған теленә ихтирам, уны өйрәнеү теләге уятһа, үҙ теле өсөн көрәшкән кешеләргә рух ныҡлығы һәм көс бирә.

Ә поэмала күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн республикабыҙҙа ниҙәр эшләнә?

Слайд №4

Ни мәғәнә батшаларҙың исемен,
Сит ил тарихтарын ятлауҙан,
Ил тарихы илгә бикле булһа,
Намыҫыбыҙҙы туҙан ҡаплаһа? –

тигән юлдар бөгөнгө көнгө тап киләме?

(Хәҙерге көндә хәлдең үҙгәреүе, суверенитет, телдәр тураһында закон ҡабул ителеүе, мәктәптәрҙә туған телде өйрәнеү хаҡында уҡыусыларҙың яуаптары.)

IV. Йомғаҡлау.

Шулай итеп, Р. Бикбаев «Халҡыма хат» әҫәрендә туған телебеҙҙең ҡороп барыуы хаҡында хафаланып уйлана, башҡорт балаларының, үҙ телдәренән яҙып, әсә телен белмәй үҫеүенә борсола. Телдең бөтөүе халыҡтың бөтөүе булыуын әрнеп иҫкәртә. Туған халҡын, ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, моңһоҙлоҡтан, ялҡаулыҡтан ҡотолоп, уянырға саҡыра.

Слайд № 5

Туғанынан яҙған ярты йәтим,

Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҫаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Уҡыусылар, дәрестe йомғаҡлап, Р.Бикбаевтың үҙ һүҙҙәре менән һеҙгә шуны әйтәһем килә:

Слайд № 6

Барыһы ла беҙҙең уяулыҡта, беҙҙең эштә, беҙҙең намыҫта.

- Эйе, туған илдең, туған телдең киләсәге беҙҙең ҡулдарҙа, беҙҙең намыҫта. Беҙ быны һәрсаҡ күнелдәребеҙҙә һаҡларға тейешбеҙ.

V. Өйгә эш. “Туғанынан яҙған - ярты йәтим, туған теленән яҙған - мең йәтим” темаһына инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫ

Зәйнетдинова Рәсимә Дамир ҡыҙы,
Сакмағош районы Аблай урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнеү.

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев тураһында заманса технологиялар ярҙамында биографик белешмә биреү; поэманың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау; поэмаға бәйләп, “Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы”на арнап әңгәмә ҡороу; бәйләнешле һөйләү телмәрен үҫтереү, башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен дөрөҫ әйтеүҙе автоматлаштырыу; тыуған яҡтың тәбиғәтенә ҡарата һаҡсыл ҡараш, бөйөк шәхестең ижадына һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Мультимедиа проекторы, интерактив таҡта, электрон дәреслек, презентация, интернет селтәре, китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу моменты.

- Уҡыусылар! Башҡорт теле дәресен бөгөнгө матур көндө, тирә-яҡты, бер-беребеҙҙе сәләмләүҙән башлайыҡ. 1-се слайд.

Башланып китте дәрес
Беҙ матур ултырабыҙ.
“4”ле, “5”ле билдәләрен
Көн һайын арттырабыҙ.

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

Тиҙәйткесте уҡыу.

2-се слайд.

Һалҡын һыулы һаҡмарҙа һайрай һары һандуғас.

III. Түбәндәге шиғыр юлдарының авторы кем ?

3-сө слайд.

Туғанынан яҙған – ярты йәтим.
Туған теленән яҙған – мең йәтим!
Телде тоҫаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал милләтем!
(Рауил Бикбаев).

Шулай итеп, бөгөн дәрестә кем тураһында һөйләшәсәкбеҙ ?

4-се слайд. Рауил Бикбаев портреты.

- Кем ул Рауил Бикбаев? Һеҙ уның тураһында ниләр беләһегеҙ?
- Уның ниндәй шиғырҙарын уҡығанығыҙ, ятлағанығыҙ бар? Был һорауҙарға яуап бирер өсөн түбәндәге схема беҙгә ярҙам итер.

5-се слайд.

Кем? Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы.

Ҡайҙа? Ырымбур өлкәһе, Покровка районы, Үрге Ҡунаҡбай ауылында.

Ҡасан? 1938 йылдың 12 декабрендә.

Ниндәй? Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры.

(Электрон дәреслек ярҙамында биографик белешмә биреү, видеотаҫманан өҙөк ҡарау).

III. Яңы тема буйынса эш.

1. Уҡытыусының инеш һүҙе.

Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы Рауил Бикбаев үҙенең күркәм юбилейын ҡаршылай. Быйыл уға 75 йәш тула.

6-сы слайд.

“2013 йыл - тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы!” эмблемаһы.

Мәғлүм булыуынса, президентыбыҙ тарафынын быйылғы йыл “Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы” тип иғлан ителде. Р. Бикбаев та тыуған яҡ тәбиғәте, уның киләсәге өсөн борсола. Бөгөн дәрестә беҙ уның шундай тәрән мәғәнәле булған “Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!” исемле поэмаһынан бирелгән өҙөк менән танышырбыҙ.

7-се слайд. “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһынан өҙөк.

2. Электрон дәреслектән поэманан бирелгән өҙөктө тыңлау.

Экранда Урал тауы, Ағиҙел йылғаһының рәсеме.

3. 8-се слайд. Һүҙлек эше. Мәғрур, аһ-зар, арғымаҡ, кереш тигән һүҙҙәрҙең мәғәнәһен асыҡлайҙар, улар менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөйҙәр

4. Поэманың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау:

а) Тема һәм проблеманы билдәләү; (Тәбиғәт, экология проблемаһы);

б) Әҫәр кем йәки нимә тураһында? (Йәмле Ағиҙелебеҙгә, уның үткәненә һәм хәҙергеһенә,киләсәк яҙмышына бағышланған);

в) Ул ни өсөн шулай тип атала?

г) Уҡыу барышында ниндәй фекерҙәр (һорауҙар) тыуҙы?

5. Поэманың композицияһы:

а) Поэманы нисә өлөшкә бүлергә була? Ни өсөн?

б) Һәр бүлектә нимә һүрәтләнә?

в) Бүлектәргә ниндәй исем бирергә мөмкин?

6. Поэманың идеяһы:

а) Әҫәрҙең төп фекере ниндәй?

б) Автор был поэма аша нимә әйтергә телегән?

IV. Шиғриәт минуттарында ял итеү. (Аудиотаҫманан шағирҙың үҙ тауышы менән шиғыр уҡыуын тыңлау).

V. Төркөмдәр менән эш.

1. Һәр төркөмгә эш биреү. (Үҙаллы эш).

I төркөм. Поэманан йыр алымдарын табырға. Экология мәсьәләһенең поэтик тасуирланышын билдәләргә.

II төркөм. Поэманан ҡобайыр алымдарын табырға. Терәк һүҙҙәр ҡулланып, хат-мөрәжәғәт яҙыу. Автор уҡыусылырға нимә әйтергә теләгән?

III төркөм. Поэманан мәкәл, әйтем алымдарын, табырға. Географик атамаларҙы билдәләргә.

2. Төркөмдәрҙең сығышы.

V. Рефлексия. Интерактив таҡтала: Әҙәбиәттә әленән-әле Ағиҙел йылғаһына, Урал тауҙарына, тәбиғәткә бағышлап әҫәрҙәр ижад ителә. Тәбиғәт проблемаһы берәүҙе лә битараф ҡалдырмайҙыр. Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным - һыуҙар биреген!” поэмаһы хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль, иҡтисади, экологик һәм әхлаҡи-әҙәп мәсьәләләрен тура һәм үткер ҡуйыуы, заманса яңғырашы менән әһәмиәтле. Ул шағир ижадының поэма жанры өлкәһендәге ҙур уңышы булып тора. Тәбиғәт – беҙҙең уртаҡ өйөбөҙ. Беҙ – тәбиғәт балаһы. Уны һаҡлайыҡ. Сөнки ул яҡлауға һәм һаҡлауға мохтаж. Әгәр беҙ уға ҡарата рәхимһеҙ булһаҡ, килер быуындарға ни ҡалыр? Тәбиғәткә сәйәхәткә сыҡҡанда ла, урманда еләк-емеш йыйғанда ла, йылға-күл буйҙарында ла тирә-йүнгә иғтибарлыраҡ булһаҡ ине. Тәбиғәтте бергәләп һаҡлайыҡ, уҡыусылыр!

VI. Йомғаҡлау.

9-сы слайд.

Өйгә эш. 1) Поэманы тасуири уҡырға өйрәнергә; 2) “Таҙа экология – сәләмәт быуын” темаһына мини – инша яҙырға.

10-сы слайд. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт!

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУһАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Мәфтәхова Фәнзилә Хәниф ҡыҙы,
Дәүләкән районы 4-се һанлы лицейы

Тема: Рауил Бикбаевтың “ Һыуһаным, һыуҙар биреген!” поэмаһы

Маҡсат:

1) әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү;

2) уҡыусыларҙың эҙмә-эҙлекле фекерләү, уйлау һәләтен һәм иғтибарын үҫтереү;

3) тыуған төйәгебеҙгә, тәбиғәтебеҙгә һөйөү, халҡыбыҙ яҙмышына, киләсәгебеҙгә ҡарата хәстәрлекле ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, мультимедиа проекторы, уҡыусыларҙың шағирҙың тормошо һәм ижадына арналған ижади эштәре (презентациялар), интерактив таҡта.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу өлөшө (уҡыусылар менән иҫәнләшеү).

II. Фонетик-орфографик күнегеү (экранда):

Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел...
Р.Бикбаев.

(Слайдта тәбиғәт күренеше)

III. Дәрестең төп өлөшө:

1. Фонетик күнегеү өҫтөндә эш.

2.Эпиграфтан сығып, уҡыусылар менән берлектә дәрестең темаһын, маҡсаттарын билдәләү, дәфтәрҙәргә яҙыу.

3. Инеш һүҙ (уҡытыусы һүҙе, экранда слайдтар күрһәтелә).

- Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Аҡбулаҡ педучилищеһында уҡый. Һуңынан Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.

Рауил Бикбаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры (1992), филология фәндәре докторы (1996), профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре (1992), Өфө ҡалаһының Почетлы гражданины (1999),

Башҡортостан Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты (2009), Башҡортостан Республикаһы гимны авторҙарының береһе.

Рауил Төхвәт улы ижад менән студент йылдарында уҡ шөғөлләнә башлай. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы баҫылып сыға. Ул 30-ҙан артыҡ йыйынтыҡ авторы. Ижадының төп темаһы булып халыҡ яҙмышы, туған теленең киләсәге, тирә-яҡ мөхиттең проблемалары тора.

IV. Яңы дәрес материалын үҙләштереү:

- Бөгөнгө темаға ҡарата һеҙҙә ниндәй фекер тыуа, нимәләргә иғтибар бүлеү дәрестә көнүҙәк тема булыр? (Уҡыусыларҙың фекерҙәрен тыңлау).

а) уҡытыусының һүҙе:

- Хөрмәтле уҡыусылар, һеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе йомғаҡлап, шуны өҫтәргә теләйем: халыҡ шағиры исемен йөрөткән һәр кем тыуған ерен, халҡын, уның телен, киләсәген ҡурсаламай булдыра алмаҫ ине. Шағир теле менән әйтһәк,

Тарих ҡына түгел, күҙ алдында
Яҙмышыбыҙ күпме өйрәтте:
Ил йөрәге һау-сәләмәт тибәр,
Булған саҡта ирҙәр йөрәкле. (“Йөрәк”. Р. Б.).

Р. Бикбаевтың 1989 йылда Салауат Юлаев премияһына лайыҡ булған “Һыуһаным, һыуҙар биреген!” поэмаһының төп темаһы булып илдәге ҡайһы бер түрәләрҙең баш-баштаҡһыҙлыҡтары арҡаһында килеп тыуған экологик һәм рухи көрсөктөң проблемаларын фашлау тора. Аҡса, байлыҡ артынан ҡыуып, тыуған йорт нигеҙҙәрен емереүселәр киләсәк быуынға бары тик юҡҡа сыҡҡан ауылдар, бысраныуҙан “сәсәүсе” ҡалалар, таҙа һыуҙан, һауанан мәхрүм ителгән зәғиф балалар ғына ҡалдырасаҡтар түгелме?! Ошо һорауҙарға яуап эҙләй шағир йөрәге. (Поэманың өҙөгөн уҡыусы уҡый).

б) әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһе өҫтөндә эш:

- Шағир Р. Бикбаев ниндәй яза тураһында әйтергә теләй? (Яуап).

- Рәшит Нигмәтиҙең шиғри юлдарын ҡабатлап, ул тағы нимәләр тураһында уйлана? (Яуап).

- Тәбиғәттең көстәренә ҡаршы барып булмағандай, килеп тыуған проблемаларҙы сисеү ҙә аңһат эш түгел. Кеше иң элек үҙенең күңелен таҙартырға бурыслы. Тик ниңә һуң күңел сафлығы, намыҫ сафлығы тигән төшөнсәләр бик әкрен үтеп инә беҙҙең тормошобоҙға? Әле һаман да ҡайһы бер түрәләр байлыҡ туплау маҡсатында илде талайҙар, тәбиғәт байлыҡтары менән уңға-һулға һатыу итәләр, тирә-яҡ мөхиткә зыян килтереүсе ҡеүәтле заводтар, фабрикалар төҙөйҙәр. Миҫал өсөн, Өфө аръяғындағы Шаҡша биҫтәһендә төҙөлөп ятҡан Австрияның “Кроношпан”, 2015 йылда ҡулланыуға тапшырыласаҡ Салауат ҡалаһындағы Акрил кислотаһы етештереүсе Япония заводын атап үтергә мөмкин. Урындағы халыҡтың мәнфәғәттәрен яҡлаусылар табылырмы, чиновниктарыбыҙ сәләмәт киләсәк тураһында ҡасан хәстәрлек күрә башлар икән, тигән һорауҙар тыуа. (Слайдтар.)

в) сәхнә күренеше (Шағир Ағиҙелгә эйелә, эсер өсөн һыуын “һирпеп” ебәрә һәм усына һыу алған ҡиәфәттә):

- Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыуланыуын күрһә Нигмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?

Башҡаса шул хәҙер заман еле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?
Ағиҙел (ауыр итеп һулағандан һуң):
-Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел...
Сафланырмы тағы кеше күңеле,
Сафланырмы тағы был күңел?..

Уҡытыусы:

- Уҡыусылар, ысынлап та, уйланырға урын бар был турала. Эсер һыуҙарыбыҙ, һулар һауабыҙ, ял итер өсөн матур тәбиғәт ҡосағыбыҙ ҡалмаһа, киләсәгебеҙ ниндәй булыр һуң?.. Ошо турала уйланғанығыҙ булдымы? Хоҙай бүләге булған Ер-Әсәне алда нимәләр көтә?.. Бик ауыр һәм етди һорауҙар тыуа. Был турала күптән уйланырға һәм катастрофаны булдырмаҫ өсөн тирә-яҡ мөхиткә ярҙам ҡулы һуҙырға кәрәк. Һәм был эште бөгөндән үк башларға кәрәк. Нисек уйлайһығыҙ, һеҙ нимәләр эшләй алыр инегеҙ? (Яуаптар.)

г) поэмалағы төп алымды асыҡлау (уҡыусы поэма өҙөгөн уҡый):

Атылыр йондоҙҙо атылдырмай булмай,
Атылыр кешене аттырмай була...
Асылыр һауаны астырмай булмай,
Аҫылыр кешене аҫтырмай була.
Ҡыҙыр зилзиләне ҡыҙҙырмай булмай,
Ҡырылыр урманды ҡырҙырмай була.
Көйҙөрөр елдәрҙе көйҙертмәй булмай,
Өҙөлөр моңдарҙы өҙҙөртмәй була.

Йырылыр йырынды йырҙыртмай була,
Быуылыр намыҫты быуҙыртмай була.
Биҙер ихласлыҡты биҙҙертмәй була,
Эйелер башты эйҙертмәй була.
Тик ниңә һуң булдырмайбыҙ?
Ҡырҙырабыҙ,
Йырҙырабыҙ,
Быуҙырабыҙ?
Өҙҙөрәбеҙ,
Биҙҙерәбеҙ,
Эйҙерәбеҙ?

- Иғтибар итеүегеҙсә, был юлдарҙа шағир ниндәй алымды ҡулланған? Ни өсөн шулай тип уйлайһығыҙ? (Яуаптар.)

д) уҡытыусының йомғаҡлауы:

- Дөрөҫ, был шиғри юлдар ҡобайыр стилендә яҙылған. Һәм улар шағир теленең халыҡсан тел икәнлеген тағы ла бер тапҡыр иҫбатлай.

V. Рефлексив анализ.(Интерактив тақтала эш.)

- Уҡыусылар, бөгөнгө дәресебеҙҙе йомғаҡлау маҡсатында һеҙгә кроссворд тәҡдим ителә. Тақтаға ҡарайыҡ (тақтала буш шаҡмаҡтар бирелә, һуңынан уҡыусылар бергәләп яуаптарҙы яҙалар):

1. Был сәфәрҙә нисәмә ҡат баҫты
Күҙ алдыма ... Ниғмәти.
2. Йәмләнерме тағы Аҡ ... ,
Тәмләнерме тағы Аҡ ... ?
3. Монарлана ҡояш сығышында
Армыт – армыт ... һырттары.
4. Йәмлеме ... буйҙары,
Тәмлеме ... һыуҙары?
5. Торатауға менеп ҡараһам да,
Табалмайым һине, ... !
6. Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине ... нимә тип?
7. 1994 йылда Р.Бикбаевҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары ... бирелә.
8. Бер кинәнеп ошо киңлектәргә
Ҡарар саҡта ... һыҡтаны.
9. Көйҙөрөр елдәрҙе көйҙөртмәй булмай,
Өҙөлөр моңдарҙы өҙҙөртмәй ... .
10. Урал!
Үҙе боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона ... .
11. ... түгелме иң ҙур гиганттарҙы
Төҙөйбөҙ тип бында маҡтанған?
12. Күпме ... , күпме зиһен китә
Кисәгенең төҙәтеп хатаһын.

(Уҡыусылар бер-бер артлы тақтаға сығып, яуаптарҙы тултыралар.)

VI. Баһалау.

VII. Өй эше: 1. Поэманың тулы вариантын табып уҡырға.
2. Шағир һәм уның ижады тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт алып килергә.

Р. БИКБАЕВ „САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ”

Бакирова Лилиә Хисмәтулла ҡыҙы,
Благовещен районы Ильино-Поляна
И.Я. Нелюбин исемендәге мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙы Р. Бикбаевтың „Салауат ҡылысы” исемле шиғыры менән таныштырыу, интернет селтәре ярҙамында белемдәрҙе тәрәнәйтеү, С. Юлаев тураһында алған белемдәрҙе системалаштырыу, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: компьютер, интернет селтәре, локаль селтәр, китаптар күргәҙмәһе, презентация, китап.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

II. Дәрестең темаһын, маҡсатын әйтеү.

Бөгөнгө дәрестә беҙ Салауат Юлаев тураһында һөйләшеүҙе дауам итербеҙ, Р. Бикбаевтың „Салауат ҡылысы” исемле шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

III. Өй эшен тикшереү.

Бер нисә уқыусы Салауат Юлаев тураһында үҙҙәре һайлаған шиғырҙы яттан һөйләй.

IV. Ҡабатлау.
- Кем ул С. Юлаев?
- Ул ҡасан һәм ҡайҙа тыуған?
- Уның атаһы кем?
- Атаһы уны нисек тәрбиәләгән?
- Пугачевҡа ни өсөн ҡушылған?
- Уны ҡасан һәм ҡайҙа тоталар?

Салауатты һәм уның атаһын язалау тураһында Әбей батша сығарған указ менән „Салауат йыйыны”нда яҙылып алынған материал аша танышабыҙ. (Приложение1).
- С. Юлаев ҡайҙа һәм ҡасан үлә?
- Уның тураһында ниндәй әҫәрҙәр ижад ителгән? (Күргәҙмә)
- Уның исемен мәңгеләштерелгән ниндәй урындар бар? (Приложение 2)

V. Интернет-кафе.
- Яндекстағы Салауат Юлаев сайтына керәбеҙ һәм өҫтәлмә материал эҙләйбеҙ. Рус теленән башҡорт теленә тәржемә итәбеҙ.
- „С. Юлаев – национальный герой” сайтына кереп „Иллюстрациялар” бүлеген ҡарайбыҙ.
- Ҡылыс менән эйәр һүрәтен ҙурайтығыҙ.
- Ҡылыс тураһында мәғлүмәт табабыҙ һәм Салауат ҡылысы тураһындағы мәғлүмәт менән танышабыҙ.

VI. Ял итеү минуты. А. Биксурин башҡарыуында ҡурай моңон тыңлау „Салауат”. (Приложение 3)

VII. Шиғыр өҫтөндә эш.
- Автор тураһында иҫкә төшөрөү, портретын күрһәтеү.
- Электрон китаптан шиғырҙы тыңлау. (Башҡорт әҙәбиәте: 5-9 – сы синыфтар өсөн әҙәбиәт буйынса электрон ҡулланма) (Приложение 4)
- Шиғырға анализ яһау
- Лирик тонын билдәләү
- Шиғырҙың эске структураһы
- Тел саралары
- Тәрбиәүи маҡсатты хәл итеү

VIII. Локаль селтәр менән эш. Бәйләнешле текст килеп сыҡһын өсөн һөйләмдәрҙе урынына ҡуйырға һәм дауам итеп яҙырға.

1. Салауат көс, ғәйрәт эйәһе генә түгел, заманына күрә уҡымышлы һәм талантлы кеше лә булған.
2. Йәберләнгән туған халҡының ауыр яҙмышы Салауатта иҙеүселәргә ҡарата ҡаты асыу һәм нәфрәт тойғолары уятҡан.
3. Салауат Юлаев 1754 йылда Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙәй волосының Тәкәй ауылында хәҙерге Башҡортостандың Салауат районында тыуған.
4. Юлай Аҙналин улында батырлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттары тәрбиәләргә тырышҡан.
5. Салауат үҙе лә йәштән үк батыр булған, һыбай йөрөргә, ҡорал менән оҫта эш итергә өйрәнгән.

Эштәрҙе локаль селтәр аша тикшереү
- Салауат Юлаев һәр ваҡыт беҙҙең арала. Ул быуаттар аша әйләнеп ҡайтты. (Приложение 5)

IX. Тест.
1. Салауат Юлаев йәшәгән йылдар
а) 1754 – 1800
б) 1700 – 1854
2. Салауат Юлаевтың атаһы
а) Емельян Пугачев
б) Юлай Аҙналин
3. Салауатты ҡайҙа каторгаға ебәрәләр?
а) Рогервик ҡәлғәһенә
б) Мәскәү төрмәһенә
4. „Салауат Юлаев” романын кем яҙған?
а) Мостай Кәрим
б) Степан Злобин
5. Салауаттың яуҙашы
а) Александр Матросов
б) Наполеон
в) Емельян Пугачев

Эштәрҙе тикшереү һәм баһалау.

XI. Йомғаҡлау һәм өй эше биреү.
- Был дәрестә С. Юлаев тураһында ниндәй яңы мәғлүмәттәр белдегеҙ?
- Өй эше: шиғырҙан өҙөк ятларға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Фәтхетдинова Вилена Фәүҙәт ҡыҙы,
Асҡын районы Асҡын 2-се урта мәктәбе

Тема: Р. Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”.

Дәрестең маҡсаты:

1) Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү, “Башҡортостан бында башлана” шиғырының йөкмәткеһен өйрәнеү;

2) мәҡәлдәр, шиғырҙар ярҙамында уҡыусыларҙың бәйләнешле телмәрен, фекерләүен һәм тасуири уҡыу кеүәһен үҫтереү;

3) уҡыусыларҙа илһөйәрлек хистәре тәрбиәләү, Р. Бикбаев ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевҡа арналған күргәҙмә, интерактив таҡта, мәҡәлдәр,презентациялар, Башҡортостан картаһы.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле уҡыусылар. Ултырығыҙ. Бөтәбеҙгә лә яҡшы кәйеф, уңышлы көн теләп, башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәресен башлайбыҙ. Дәрестә бик әүҙем булһағыҙ, яҡшы билдәләр алырһығыҙ.

II. Инеш өлөш. Теманы һәм маҡсатты үҙ аллы билдәләү өсөн уҡыусыларға Башҡортостан картаһы, тәбиғәте һәм Р. Бикбаев портреты һүрәтләнгән слайдтар ҡарарға тәҡдим ителә (1-5-се слайдтар):

- Уҡыусылар, дәресебеҙҙең темаһын нисек атар инегеҙ ? (Рауил Бикбаевтың Башҡортостан тураһындағы шиғыры).
- Слайдтарҙы ҡарағас, үҙегеҙгә ниндәй маҡсаттар ҡуйҙығыҙ?

(Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән танышырға; шағир тураһында презентациялар ҡарарға; Башҡортостан тураһында һөйләшергә; телмәрҙе үҫтерергә, байытырға).

- Мин һеҙгә уңыштар теләйем. Дәфтәрҙәргә числоны, дәрестең темаһын яҙып ҡуяйыҡ. (Р. Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”, 6-сы слайд).

III. Яңы теманы өйрәнеү. 1) Р. Бикбаевтың биографияһы менән танышыу.

- Ә кем һуң ул Р. Бикбаев?

1-се уҡыусы шағирҙың тормошо тураһында ҡыҫҡаса белешмә бирә (Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Фәбдерәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Артабан белем алыуын Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында дауам итә. Юғары белемгә эйә булыу маҡсаты менән Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Уны тамамлағас, СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тариҡ, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. Күп йылдар ошо институтта ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1995 йылда Р. Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайланыла).

2-се уҡыусы шағирҙың ижады тураһында һөйләй. (Рауил Бикбаевтың ныҡлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Бында ул әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәктәрендә ҡатнаша. Р. Бикбаев бик күп шиғырҙар, поэмалар ижад итә. “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы “Ағиҙел” журналында баҫыла. Ике йылдан һуң, “Дала офоҡтары “тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға”. Р. Бикбаев - бик күп китаптар авторы). 7-се слайд:

Китаптары
“Дала офоҡтары”
“Ҡош юлы”
“Автобиография”
“Ғүмер уртаһы”
“Замандың шиғри йылъяҙмаһы” һ. б.

3-сө уҡыусы Р. Бикбаевтың наградалары тураһында белеп килә (Р. Бикбаев - филология фәндәре докторы. Уға Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелгән).

4-се уҡыусы Р. Бикбаев тураһында презентацияһын күрһәтә.

5-се уҡыусы шағир тураһында китаптар күргәҙмәһе ойоштора. (Мәктәп китапханаһында булған йыйынтыҡтары менән таныштыра).

- 2013 йылдың 15 декабрендә шағирға нисә йәш була? (Билдәле шағирға 75 йәш тула).

2) Р. Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү.

- Хәҙер шағирҙың “Башҡортостан бында башлана” шиғырына күсәйек.

а) һүҙлек эше (8-се слайд)

- Шиғырҙы уҡыр алдынан ошо һүҙҙәргә иғтибар итәбеҙ.

офоҡ – горизонт
тараф – сторона, направление
ҡан тибеше – биение крови
туғай – луг
тулай –зд.: метается
ҡабырға –зд.: склон
һырт – хребет
ҡарыш – пядь (мера длины)

һуҡмаҡ - тропа
булмыш – существование
улан – дитя
ғәрлек - позор

- Был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе һеҙгә аңлашыламы? (Таҡтала һүҙҙәр сыға, слайд).

Һүҙҙәрҙе төркөмләп уҡыу, уларҙы ҡулланып һөйләмдәр төҙөү.

б) Шиғырҙы тасуири уҡыу алдынан проблемалы һорау ҡуйыу:

- Был шиғырҙа шағир нимә әйтергә теләгән? Иғтибар менән тыңлап ултырһағыҙ, яуап бирә алырһығыҙ.

в) тасуири уҡыу,

г) һорауҙарға яуап:

- Шиғыр нимә тураһында?
- Шағир нимә әйтергә теләгән?
- Шағир уйлауынса, Башҡортостан ҡайҙа башлана?
- Шиғырҙа Башҡортостан нисек тасуирлана? Текстан миҫалдар килтереп һөйләгеҙ.

Эйе, уҡыусылар, һәр кемгә тыуған яғы – иң яҡын төйәк. Кеше ҡайҙа ғына китһә лә, тыуған ерен онотмай. Донъяла ниндәй генә гүзәл ил булмаһын, үҙ илеңдән дә яҡыны юҡ. Сөнки тыуған ереңдең йырлап аҡҡан шишмәләре, таҙа һыулы йылғалары, мәғрур тауҙары, ҡош-ҡортҡа бай урмандары, сәскәләрҙең хуш еҫе аңҡыған аҡландары – һәммәһе үҙенә әйҙәп тора. Башҡортостанға булған һөйөү, уның менән ғорурланыу хистәре күренекле шағирыбыҙҙа бик матур шиғри юлдар тыуҙыра.

Шиғырҙа “Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем һеҙҙән башланам!” - тигән юлдар бар.

Был юлдар шиғырҙа кем исеменән әйтелә? Ошо һорауға яуапты шиғырҙан уҡып күрһәтегеҙ.

Илде тәбиғәткә ҡарап ҡына билдәләп булмай. Һәр кемгә үҙ тыуған төйәге матур, ҡәҙерле. Ә илгә исемде халҡы, милләте, теле бирә. Ил тураһында иң беренсе сиратта халҡының үҙ-үҙен тотошона, намыҫлы булыуына ҡарап фекер йөрөтәләр. Шиғырҙың ҡайһы юлдары ошо идеяны асыҡ сағылдыра?

Шулай итеп, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев тыуып-үҫкән яҡтарының тәбиғәт йәме менән бергә халҡының күңел күркен, уның ихласлығын да тасуирлай. Һәр илдең байлығы -уның халҡында, мәҙәниәтендә. Милләт йәшәһә, ил дә, тел дә йәшәй тигән һүҙ.

д) шиғырҙан һүрәтләү сараларын табыу:

- Әйҙәгеҙ, һүрәтләү сараларын табайыҡ. (Һәр рәткә үҙ аллы эш бүленеп бирелә: 1-се рәт уҡыусылары– сағыштырыуҙар, 2-се рәт уҡыусылары - йәнләндереү, 3-сө рәт уҡыусылары ҡабатлауҙарҙы таба, шиғырҙа осраған эпитеттарҙы бергәләп билдәләйбеҙ. Эште сағыштырыу- 9-сы слайд, дәфтәрҙәргә яҙып ҡуйыу.)

Сағыштырыу:
Аҡ нур яғыла кеүек(һәр ҡайындан)
Һабан турғайындай(күңелем тулай)
Ҡояш кеүек ҡарай(Башҡортостан)
Йәнләндереү:
Башҡортостан ҡаршы ала
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй(Башҡортостан)
Ҡабатлауҙар:
Башҡортостан бында башлана!
Эпитет :
яҡты(донъя)
ҡарайыр (йөҙөм)
аҡ(йөҙөгөҙ)

- Башҡортостан тураһында тағы ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ? (Уҡыусылар түбән кластарҙа ятлаған шиғырҙарын иҫкә төшөрөп һөйләйҙәр).
- Уҡыусылар, һеҙ Тыуған илде нисек тасуирлап һөйләр инегеҙ? Һеҙгә Башҡортостандың картаһы ярҙамға килер. (Бер уҡыусы таҡтаға эленгән Башҡортостан картаһына ҡарап һөйләй).
- Ә хәҙер экрандағы мәҡәлдәргә иғтибар итәбеҙ. Бында бирелгән мәҡәлдәрҙең икенсе яртыһын табып уҡыйбыҙ һәм мәғәнәләрен аңлатабыҙ. (Экранда мәҡәлдәр сыға, 10-сы слайд).

Ил ҡәҙерен белмәгән – … ,
Ер ҡәҙерен белмәгән – … .
Алтын-көмөш яуған ерҙән …
Кәңәшле ил … .

- Ата-бабаларыбыҙҙың был фәһемле һүҙҙәре лә беҙҙе нимәгә өндәй?(Тыуған илдең ҡәҙерен белергә, уны яратырға саҡырған, сөнки ул алтын-көмөштән дә артығыраҡ).

IV. Дәрестә йомғаҡлау.

Шулай итеп, бөгөн дәрестә ниндәй шиғыр менән таныштыҡ?
Уның авторы кем?
Р. Бикбаев тураһында нимәләр иҫегеҙҙә ҡалды ?

- Дәрес алдынан ҡуйған маҡсаттарығыҙға ирештегеҙме?
- Дәрес һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар уятты?

Ҡәҙерле уҡыусылар! Ошондай бай тәбиғәтле, гүзәл ерҙә тыуыуыбыҙ, йәшәүебеҙ менән беҙ ҙә ғорурланайыҡ. Илебеҙгә, халҡыбыҙға тоғро ҡалып, файҙалы эштәр ҡылайыҡ.

Өй эше: шиғырҙы хис-тойғолар, интонация менән тасуири уҡырға, Башҡортостан тураһында шиғыр яҙып ҡарарға тәҡдим ителә.

Баһалау.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “АТАЙҘАР ҺӘМ УЛДАР” ШИҒЫРЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕҺЕН АСЫУ

Ҡәйниева Фәниә Әхмәҙей ҡыҙы,
Әбйәлил районы Т. Кусимов исемендәге Асҡар гимназияһы

Дәрес барышы

Дәрестең девизы: Атанан күргән – уҡ юнған,
Әсәнән күргән – тун бескән.

Дәрестең маҡсаты: шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһе аша унда күтәрелгән проблемаларҙы асыу, образдарҙың характерҙарын күҙаллау, атайҙарға оло хөрмәт тәрбиәләү, уларҙың ҡәҙерен белергә, һаҡларға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, проектор, шағир хаҡында төрлө матбуғатта баҫылған мәҡәләләр.

I. Инеш өлөш.

Бер уҡыусы Динә Талхинаның шиғырынан өҙөк һөйләй

Ир ҡәҙерһеҙ йортҡа, балам,
Бер ҡасан да ҡот ҡунмаҫ.
Ата һүҙен тотмағандың
Юлы һис ҡасан уңмаҫ.

Уҡытыусы. Бөгөн Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың “Атайҙар һәм улдар” шиғыры аша донъяла һәр кем өсөн иң ҡәҙерле, иң яҡын, иң изге кешеләр – атайҙар, әсәйҙәр икәненә тағы ла инанайыҡ. Уларҙың барлығына ҡыуанып, улар алдында баш эйәйек.

II. Төп өлөш.

Ни өсөн шағир шиғырын үкенестән башлаған?

Атай мине атҡа мендермәне,
Үҙем һикереп мендем йәш тайға,
Шатлығымдан шул саҡ шартлай яҙып
Бер ҡарағым килде атайға.

Эйе, был шиғыр үкенестәрҙән тора. Шағир атайҙан йәшләй етем ҡала. Был хаҡта ул әрнеп:

Аһ, шул саҡта атай торор ерҙә
Тойғандарым бары буш урын...
Донъяларым нурға ҡойонғанда,
Ул буш урын һаман буш булыр.

Йылдар үткән һайын шағир яңы үрҙәр, бейеклектәр яулап, донъяһы нурлы, етеш булһа ла, уға атаһы етмәй. Ә кем, нимә ғәйепле һуң атайһыҙ тормошҡа?

Үҫкәнгәме әллә атай төҫөн
Күрмәйенсә ярты ил менән
Атайҙар һәм улдар тигән бәхәс
Сәйерерәк миңә гел генә.

Рус классигы И.С. Тургеневттың “Отцы и дети” әҫәрендәге бәхәсте телгә алһаҡ, шағир былай ти:

Атайҙар һәм улдар... Бындай бәхәс
Тыумағандыр, бәлки, һис тиктән.
Тик һуң ниңә уны ҡабартырға,
Булғанғамы меңдән бер тинтәк.
Шағир был бәхәс менән килешмәй.
Бәхәс түгел, теләктәрем телдә
Атайҙар һәм улдар тигәндә
Атайҙары ҡарап тора алһын,
Малайҙары атҡа менгәндә
Атай йәшен үттем
Ҡайсаҡ һағыш
Ҡайнай донъяларым тултырып.
Шул саҡтарҙа бел һөйләшке килә,
Атай, ҡара – ҡаршы ултырып.

Был шиғри юлдар менән шағир атайҙар һәм улдар араһында бәхәс булмаһын, тип әйтергә теләй. Улдар атайҙары менән күҙгә ҡарап һөйләшһен, кәңәшләшһен тигән теләгән еткерә. Халҡыбыҙҙың: Ата һүҙе – аҡылдың үҙе, тигән тапҡыр әйтеме бар. Ғаиләлә атай һүҙе, кәңәше, абруйы булырға тейеш. Мәшһүр “Урал батыр” эпосында ла бит Урал ата һүҙен алға ҡуя:

Атам һүҙен тотамын,
Мин ул ҡанды йотмамын, - ти.

Экранда яҙылған атай тураһындағы мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрҙе уҡып китәйек:

- Атың барға ҡыуанма, атаң барға ҡыуан.
- - Атың барҙа ер таны, атайың барҙа ил таны.
- Ата - алтын һаҙаҡ, инә – алтын ҡанат.
- Ата булмай атайың ҡәҙерен белмәҫһең,
- Әсә булмай әсәйең ҡәҙерен белмәҫһең.
- Ата хаҡы – Тәңре хаҡы.
- Аталы бала – арҡалы, инәле бала – иркәле.

- Ата-инәһенә изгелек күрһәтмәгән үҙе лә изгелек күрмәҫ.

III. Йомғаҡлау.

Уҡытыусы: Мәҡәл, әйтемдәрҙән күренеүенсә, атайлы тормош, әлбиттә, еңелерәк. Шағир үҙе атайһыҙ үҫкәнгә лә:

Йөрәгемә һеңгән башҡа хәсрәт:
Етем ҡалғандары улдарҙың,
Атайҙарҙың яратҡанын көтөп,
Ҡалтыранды иңе уларҙың –

тигән юлдар йөрәген ярып сыҡҡандыр ҙа. Шағир был шиғыры менән нимә әйтергә теләгән? Уҡыусылар менән әңгәмә ойоштороу, уларҙың фекерҙәрен тыңлау.

- Ә бөгөн тормошта нисек һуң?

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, йәмғиәтебеҙҙә кире күренештәр ҙә осрап ҡуя.

Шағирҙы һуғыш атайһыҙ итһә, бөгөн тормошта ҡайһы бер ата-әсәләр үҙ балаларынан баш тарта, социаль етемдәр артҡандан арта.

Бала тәрбиәне ғаиләнән ала. Уның кем булып үҫеүе лә ата-әсә тәрбиәһенән тора. Шуға ла халҡыбыҙ:

Атанан күреп ул үҫер,
Әсәнән күреп ҡыҙ үҫер,
Ағаһын күреп ҡусты үҫер,
Апаһын күреп һеңле үҫер,
Атай-әсәй яҡшылығы
Балаларына күсер, - тигән.

Киләсәктә яҡшы атай-әсәйҙәр булып, тәрбиәле балалар үҫтерәйек. Милләт киләсәге беҙҙең ҡулда икәнен онотмайыҡ!

IV. Өйгә эш: “Минең ҡәҙерлеләрем” тигән инша яҙып килергә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ” ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Нигмәтуллина Нурсилә Минислам ҡыҙы,
Дәүләкән ҡалаһының 4-се лицейы

Тема: Рауил Бикбаевтың “һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһынан өҙөктө өйрәнеү.

Маҡсат: Әҫәрҙең идея-йөкмәткеһен асыу; тасуири уҡыу күнекмә-ләре ойоштороу; тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү; тәбиғәтте һаҡлау сараларын табырға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, китаптары, мультимедиа проекторы, компьютер, Башҡортостан картаһы, Дәүләкән районының картаһы.

Дәрескә эпиграф: …һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ,
Үҙем һыу буйҙарында… (Башҡорт халыҡ йырынан)

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты**.** Һаумыһығыҙ, балалар! Ултырығыҙ.

II. Үтелгән теманы иҫкә төшөрөү**.** Башҡортостан йылғалары тураһындағы белешмәне иҫкә төшөрөү. Башҡорт халыҡ йыры: Йәмле Ағиҙел буйҙары.

- Башҡортостандағы иң оҙон йылғаны картанан табып күрһәтеү. (Ағиҙел, 1430км.)
- Ағиҙел ниндәй ҡалалар аша үтә? (Белорет, Мәләүез, Салауат, Ишембай, Стәрлетамаҡ, Өфө, Благовещен, Бөрө, Дүртөйлө, Ағиҙел)
- Ағиҙелдең иң ҙур ҡушылдығы? (Ҡариҙел, 918 км)
- Беҙҙең яҡтың (Дәүләкән районының) йылғаларын һанап сығыу. (Дим, Өршәк, Бәләкәй Өйҙөрәк; бик бәләкәй йылғаларҙан: Мораҙым, Ҡарамалы, Суғарыш,Ҡамсалҡа,Ташлыбуй, Айырҡул - ҡайһылары бөгөнгө көнгә ҡороған).
- Ә ни өсөн ҡороно икән улар? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (Яуаптар).

III. Төп өлөш. Темаға инеш:

1. Эпиграфты уҡыу**.** Ни өсөн һыу буйында һыуһағандар икән? Был һорауға яуапты, бәлки поэманан өҙөктө уҡығас табырбыҙ, уҡыусылар, шулай бит.

Проекторҙан Рауил Бикбаевтың портреты күрһәтелә.

- Был кеше һеҙгә танышмы?
- Ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? (Яуаптар: “Уралыма” шиғыры, “Халҡыма хат” поэмаһы).

Рауил Бикбаев тураһында ҡыҫҡаса белешмәне проекторҙан күрһәтеп китеү.

Тыуған көнө: 12 декабрь 1938 йыл.

Тыуған урыны: Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында.

Эшмәкәрлеге: шағир, яҙыусы.

Ижад йылдары: 1957 йылдан.

Жанр: шиғырҙар.

Премиялары: F. Сәләм исемендәге премия (1970), С. Юлаев исемендәге премия (1989), Р. Ғарипов исемендәге премия (1994), З. Биишева исемендәге премия (2003, Орден «За заслуги перед Республикой Башкортостан» (2009)).

Эшмәкәрлеге: 1962 йыл — Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.

1965 йылдан башлап — Рәсәй Федерацияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре булып эшләй.

1995 - 2011 йылдар — Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе.

2011 йылдан - Башҡортостан Республикаһы Ҡоролтай Йыйылышы-ның белем биреү, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе.

Маҡтаулы исемдәре:

1989 йыл — Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты.

1993 йылдан — Башҡортостандың халыҡ шағиры.

1996 йылдан — Филология фәндәре докторы.

1992 йылдан — Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре.

Әҫәрҙәре:

1967 йыл: Ҡош юлы: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1967.

1976 йыл: Ғүмер уртаһы: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1976.

1985 йыл:

Бураҙналар: Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1985.

Звездный дом: Стихи. (рус) Мәскәү, 1985.

1986 йыл:

Поющие скалы: Стихи. (рус) Мәскәү, 1986.

Время. Поэт. Народ. (рус) Мәскәү, 1986.

1991 йыл: Эволюция современной башкирской поэзии. Москва, 1991.

1995 йыл: Шайехзада Бабич: Жизнь и творчество. Литературове-дение. (рус) Өфө, 1995.

2. Һүҙлек өҫтөндә эш

Хафа – беспокойство

Шеш – опухоль

Бушбоғаҙ – горлопан

Һөрән – ҡысҡырыу, призыв

Ҡыуғын – сплав

Ҡырғын – мор

Ылымыҡ – ил, водоросль

Оран һалыу, саң ҡағыу, төрән һуғыу – бить в набат

Элмәк – болғалаҡ; петля

Һүҙлек һүҙҙәрен ҡулланып бер нисә һөйләм төҙөү. Таҡтала һәм дәфтәрҙә яҙыу.

3. Уҡытыусы: - Ә хәҙер өҙөктө иғтибар менән тыңлағыҙ. (Ул тексты тасуири уҡый, уҡыусылар үҙ аллы уҡып сыға).

Уҡыусылар өҙөктө уҡый.

4. Уҡыусылар һорауҙарға яуап бирә.

- Өҙөктө Башҡортостандағы ниндәй һыуһаҡлағыстар телгә алына? (Уларҙы картанан табып күрһәтеү).
- Автор ни өсөн бындай һыуһаҡлағыстар төҙөүгә ҡаршы сыға?
- Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?
- Рауил Бикбаев Ағиҙел йылғаһын Рәшит Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһындағы элекке Ағиҙелде хәҙергеһе менән сағыштырып ҡарай. Шул урынды табып уҡып күрһәтегеҙ әле.

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары?
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

V. Уҡытыусы һүҙе. Бына шундай ҙа һорау ҡуя автор. Йәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел буйҙары, тәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел һыуҙары, тигән хәүеф-хафалы уйҙарын тағата шағир. Уның өсөн “Ағиҙелдең көнө – илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө – ил йөҙө” үлсәмендә. Диңгеҙ яһайбыҙ тип, оло йылғаларҙы быуҙыҡ, йылғаларҙы киреге ағыҙырға йыйындыҡ, тауҙарҙы емерергә, күсерергә тотондоҡ. Күпме матур туғайҙарыбыҙ, ауылдарыбыҙ һыу аҫтында ҡалып юҡҡа сыҡты, балыҡтар тонсоҡто, һыуҙар ағыуланды. Рауил Бикбаев әлеге поэмаһында әйткәнсә, “яңы һыуһаҡлағыс төҙөйбөҙ тип, төҙөйбөҙ бит ағыу һаҡлағыс”, “Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит, үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ”.

Бөтә Ер шарында эсәр һыу етешмәй. Рәсәй буйлап ҡоҙоҡтарҙың һыуы кибә. Күп кенә өлкәләрҙә кешеләр бысраҡ һыу эсергә мәжбүр. Әҙәм балаһы ризыҡһыҙ ай самаһы йәшәй ала, тиҙәр, ә бына һыуһыҙ ул бер-ике көнгә генә сыҙай.

- Беҙ йәшәгән ҡала янында ниндәй йылғалар бар икәнен ҡарап киткәйнек инде дәрес башында. Йылғалар, күлдәр ҡоромаһын өсөн һеҙ нимәләр эшләйһегеҙ? (Ағастар ултыртабыҙ, йылға-күл буйҙарындағы сүп-сарҙы таҙартырға ярҙам итәбеҙ).
- Быйыл беҙҙең республикала ниндәй йыл иғлан ителде? (Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы.)
- Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылында ғына беҙ тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш булдырырға тейешбеҙме?
- Ә быйылғы йылдың эмблемаһы ниндәй икәнен беләһегеҙме, балалар?

Тәбиғәтте һаҡлау йылының эмблемаһы итеп Аҡ бөркөт төшөрөлгән һүрәт һайланды. Был юҡҡа түгел, уҡыусылар, сөнки бөркөттәр йәшәү урыны итеп экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙе генә һайлай.

V. Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе. Дәресебеҙҙең эпиграфына әйләнеп ҡайтайыҡ әле, уҡыусылар:

…һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ,
Үҙем һыу буйҙарында…

Поэманың исеме лә оло мәғәнәғә эйә. Рауил Бикбаев - заман ағышына, кешеләр яҙмышына һиҙгер ҡолаҡ һалыр шағир. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған, хәүефләндергән мәсьәләләр, төрлө һорауҙар асыҡтан-асыҡ һәм бик үткер итеп ҡуйыла. Илебеҙҙең үткәненә лә, бик үк төҫмөрләнмәгән киләсәгебеҙгә лә ҡараш ташлана; ебәрелгән хаталар, ғәмһеҙлектәр, ғәҙелһеҙлектәр, битараф-лыҡтар уйландыра; тәбиғәттең ярлыланыуы, экологик хәүефтәр, кеше күңеленең ҡорғаҡһыуы, әҙәп-әхлаҡтың ҡаҡшауы борсой. “Йорттоң ҡото китеү бер яман, рухтых ҡото китеү ун яман”, - ти шағир.

Был һүҙҙәр аңлашылдымы инде? Таҙа, эсәр һыуыбыҙҙы һаҡлайыҡ, рухыбыҙҙы юғалтмайыҡ!

Йылға буйында йөрөп тә эсергә һыу тапмаһаҡ, тәбиғәтебеҙ, киләсәк беҙҙе ғәфү итмәҫ. Тирә – яҡ мөхитте һаҡлау йылының иң яҡшы девизы: “Иртәгәһе көнөбөҙҙө һаҡлайыҡ!”

Ә мин һеҙгә, уҡыусылар, “Бөркөттәр еребеҙҙе ташламаһын!” – тип әйтер инем.

VI. Баһалау.

VI. Өйгә эш. Башҡортостан йылғаларының исемдәренән кроссворд төҙөргә.

ГРАЖДАНЛЫҠ ЯУАПЛЫЛЫҒЫ МЕНӘН КӨСЛӨ…
(Р. БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН АНАЛИЗЛАУ)

Дәүләтбаева Гөлнара Фридрих ҡыҙы,
Благовещен ҡалаһы М.А. Киняшов исемендәге
6-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Гражданлыҡ яуаплылығы менән көслө…

Маҡсат: Р. Бикбаев «Башҡортостан бында башлана» шиғырын анализлау, уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү, өндәш һүҙҙәр темаһын ҡабатлап, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү, ижади һәләттәрҙе үҫтереү, уҡыусыларҙа илһөйәрлек, гражданлыҡ яуаплылыҡ тойғоларын тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: дәреслек, компьютер, проектор һәм экран, аудио, төҫлө карточкалар, Башҡортостан темаһын сағылдырыусы фотооткрыт-калар һәм китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ. Уҡыусылар, һеҙгә бер хикмәтле хикәйәт һөйләп киткем килә. (1 – се слайд)

Борон-борон заманда бер кеше йәшәгән. Ул етеш тормошта, яҡшы өйөндә татыу ғаиләһе менән йәшәгән. Был кеше төрлө сәйәхәтселәрҙең һөйләгәндәрен тыңларға яратҡан, алыҫ илдәрҙә кешеләр бәхетлерәк йәшәйҙер тип уйлаған. Хыяллана торғас, ул бәхет илен эҙләп табырға булған.

Бер көн йыйынып юлға сыҡҡан, ти был. Көнө буйы барған, төнгә ҡарай арып асыҡ һауала ятып йоҡлаған. Бәхет иленә йүнәлеште юғалтмаҫ өсөн башы менән шул яҡҡа ҡарап ятҡан. Борсолоуҙан төндә тулғанып сыҡҡан һәм борғолана торғас, үҙе лә һиҙмәйенсә, башы менән килгән яғына ҡарай әйләнеп ятҡан.

Иртән сәйәхәтсе юлын дауам иткән. Кискә матур бер ҡала күренгән. Үҙе элек йәшәгән ергә нык оҡшаған ҡалаға аптырап оҙаҡ йөрөгән. Үҙ өйө һымаҡ йортто күргән. Үҙенең ҡатынына, балаларына оҡшаған кешеләрҙе күргән. Уны яҡшылап ҡаршы алғандар. Был кеше ошо бәхет илендә ҡалырға булған.

Оҙаҡ һәм бәхетле ғүмер кисергән ул. Тик ғүмере буйы ҡайҙалыр ҡалған тип уйлаған тыуған ерен һағынып йәшәгән, ти ул.

Уҡытыусы:

- Уҡыусылар, бында ниндәй кинәйә ята? Әкиәткә лә тартым был хикәйәт нимәгә ишаралай? (Уҡыусыларҙың яуаптары тыңлана)

Уҡытыусы:

- Бына шулай, уҡыусылар, тыуған ергә бер ни етмәйҙер ул. (2– се слайд) (Ни өсөн кеше үҙ тыуған ерен һағына икән? Беҙ тыуған еребеҙ, республикабыҙ менән ғорурланабыҙмы? Үҙебеҙҙе илһөйәрҙәр тип әйтә алабыҙмы? Илгә булған яратыу хисен нисек булдырырға? Ошо тойғо беҙгә хасмы? Уйлап, кәңәшләшеп алайыҡ. Ошо һорауҙарға яуаптарҙы бергәләп эҙләп ҡарайыҡ, дәрес аҙағында фекерҙәр менән бүлешербеҙ.

2. Дәрестең маҡсатын һәм бурыстарын билдәләү.

Бөгөн дәресебеҙҙе ябай түгел, ә дәрес-короллтай итеп үткәрергә тәҡдим итәм.

- Уҡыусылар, ә нимә һуң ул ҡоролтай?

- Эйе, ҡоролтай ул икенсе төрлө әйткәндә йыйылыш. Башҡорттар элек-электән төрлө мәсьәләләрҙе бергә йыйылып ҡоролтайҙа хәл иткәндәр. Рауил Бикбаевтың «Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!» тигән шиғырында шундай юлдар бар: (3– сө слайд)

Ил тупланды бөгөн оло ҡоролтайға,
Был байрамда бер туғандай гөрләшәйек.
Байраҡ булып ҡалҡһын оло маҡсатыбыҙ,
Бөтә донъя башҡорттары, берләшәйек!..

Беҙ ҙә бөгөн бәләкәй ҡоролтай үткәрәбеҙ. «Белгән өйрәтә, белмәгән өйрәнә», ти халыҡ. Бергәләп кәңәшләшеп һөйләшеп алырбыҙ. Белемдәребеҙҙе күрһәтергә, белмәгәнде белергә әҙер булығыҙ

Ҡоролтайҙа төрлө секциялар буйынса эшләйҙәр. Беҙ «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» секцияһында үҙебеҙҙең эште күрһәтәйек.

Ә хәҙер ҡоролтайҙың тәртибе менән танышайыҡ. (Экранда 4 – се слайд).

1. Башҡортостан. (Республика тураһында белешмә).
2. Рауил Бикбаев. «Башҡортостан бында башлана»
3. «Өндәш һүҙҙәр» темаһын ҡабатлау.
4. Башҡортостан тураһында шағирҙар. (Карточкалар менән эш).
5. Ижад минуттары.

6. Ҡарарҙар.

3. Логик-мәғәнәүи модель буйынса эш. Иң беренсе Башҡортостан тураһында ҡыҫҡаса белешмә бирep китәйек. Был эштә һеҙгә үткән дәрестә төҙөгән модель ярҙам итер. (5-се слайд)

Һәр координата буйынса бер уҡыусы һөйләй:

- Башҡортостандың административ бүленеше.
- Дәүләт ҡоролошо.
- Халҡы.
- Иҡтисади-географик хәле.
- Ер-һыуы.
- Тере тәбиғәте.
- Ресурстары
- Тәбиғәтте һаҡлау

4. Уҡытыусы һүҙе.

Башҡортостан – бай, гүзәл республика. Халҡыбыҙ борон-борондан Урал тауҙары, йылғалары буйында йәшәгән. Ошондағы матур тәбиғәткә һоҡланып бик күп йырҙар, эпостар ижад иткән. Хәҙерге көндә лә бик күп шағирҙар Башҡортостанды данлап, мактап әҫәрҙәр яҙа.

Бөгөн беҙ Р. Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғыры менән танышырбыҙ.(әйҙәгеҙ, иҫкә төшөрөп китәйек:

- Кем ул Р. Бикбаев? (6 – сы слайд)

(Бер уҡыусынан һөйләтеү).

5. Һүҙлек эше. Шиғыр менән танышыр алдынан ауыр һүҙҙәрҙе ҡарап китәйек. (7– се слайд)

Офоҡ - горизонт
Тараф - сторона
ҡан тибеше - биение
Туғай - луг
Тулай - метаться,биться
Ҡабырға - зд.склон
Һырт – хребет
ҡарыш - пядь
һуҡмаҡ - тропа
булмыш - зд. характер
улан - дитя
кер - зд. плохая мысль
ғәрлек - позор, стыд.

6. Магнитофондан шиғырҙы тыңлау.

Шиғырҙы анализлау өсөн һорауҙар:

1. Шиғырҙы мәғәнәһе буйынса нисә өлөшкә бүлергә мөмкин? (Ике өлөшкә: лирик герой һәм Башҡортостан - әсә).

Дөрөҫ, ә хәҙер дәфтәр битен дә ике өлөшкә бүләйек һәм һәр образға хас ҡылыҡтарҙы яҙып барайыҡ. (8–се слайд)

Лирик герой	Башҡортостан-Әсә
Шатлана һоҡлана ғорурлана	ҙур (Яйыҡ туғайынан башлана, Сөнгә хәтлем һуҙыла, Юшатырҙан (Әйгә тиклем) ҡаршы ала, һыйындыра, үҙ балалары менән ғорурлана, улар өсөн борсола

2. Лирик герой ниндәй кәйефтә? Уға ниндәй хистәр хас? Быны ниндәй юлдарҙа күрәһегеҙ? (Шатлана, быны «Бар тарафта донъя ниндәй яҡты, ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты…» юлдарында күрергә була).

(һоҡлана- «Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай» тигән юлдар күрһәтә).

(Ғорурлана - «Башҡортостан мине ҡаршы ала,
Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап…» юлдары асыҡлай).

3. Башҡортостан нимә эшләй һәм нисек һүрәтләнгән? (Таблицаға яҙыу).

(Ҙур итеп - Яйыҡ туғайынан башлана, Сөнгә хәтлем һуҙыла, Юшатырҙан Әйгә тиклем).

(Ҡунаҡсыл ер итеп - Башҡортостан һәр ваҡыт ҡаршы ала йәғни ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй тип әйтергә була).

4. (бына «Тик Булмышым инде өр-яңы» юлын нисек аңлайһығыҙ?

(Республика йылдан-йыл матурая, үҫешә, байый бара).

5. Республика кешеләргә нимә тип өндәшә? Шул юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ һәм аңлатығыҙ.

(«Мин башланам һеҙҙән кешеләрем…» Намыҫлы, аҡ йөҙлө, тырыш булырға саҡыра).

6. «Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны», - тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

(Республика кешеләре ҡайҙа ғына булмай һәм Башҡортостан үҙ балалары арҡаһында бөтә илдәрҙе күргән).

7. Шулай булғас сит ерҙә үҙебеҙҙе нисек тотор инегеҙ?

8. Шулай итеп был шиғырҙың идеяһы нимәлә? Автор ни әйтергә теләгән?

(Беҙ Башкортостан кешеләре, шуға күрә бөтә ерҙә лә үҙенде лайыҡлы итеп тоторға, намыҫлы кеше булып, ата-әсәләр йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй йәшәргә тейешбеҙ).

6. Тәрбиәүи әңгәмә:

- Эйе, дөп-дөрөҫ һүҙҙәр. Сөнки кеше ғүмере буйы ата-әсәй ҡулында йәшәмәй, ә үҙ аллы тормош ҡора. Уға бөгөндән нигеҙ һала башларға кәрәк. (Нигеҙҙе нисек һалырға һуң? ҡайһылай эшләһәң, йәшәү маҡсатлыраҡ, күңеллерәк, ә иң мөһиме – мәғәнәлерәк булыр икән? Илеңә, халҡыңа, атай-әсәйеңә, туғандарыңа кәрәкле кеше булыу өсөн нимәләр эшләргә тейешһең? Һеҙҙең алдығыҙға ла бындай һорауҙар килеп баҫыр. Һәр йәш быуын өсөн хас ошондай тормош һорауҙарына яуаптар табыуҙа бөгөнгө һөйләшеү, шиғыр ярҙам итер тип ышанам. Мин һеҙҙең

лайыҡлы кешеләр булып үҫеүегеҙгә ышанам, сөнки хәҙерҙән үк тырышып уҡыйһығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙҙе, туғандарығыҙҙы, тыуған ерегеҙҙе яратаһағыҙ, туған телегеҙҙе өйрәнәһегеҙ. Һәр беребеҙ үҙ йөрәгендә Башҡортостандың бер киҫәген йөрөтә. Ҡайҙа ғына булһаҡ та, Башҡортостандан тип әйтһәк, республиканы күрһәтеүсе вәкил булып торабыҙ. Шиғырҙа әйтелгәнсә, Башҡортостан үҙ балалары арҡаһында бөтә донъяны «үтеп сыҡҡан». Әгәр республика кешеләренең йөҙө аҡ була икән, Башҡортостандың да башы юғары йәғни тыуған еребеҙ тағы ла үҫешә, матурлана, байый тигән һүҙ.

Уҡытыусы:

- Шиғыр оҡшанымы? Фәмүмән, Рауил Бикбаев - гражданлыҡ яуаплылығы менән бик көслө шағир. Ул Башҡортостан халҡы өсөн иң кәрәкле һүҙҙе тейешле ваҡытында әйтә белә. Юҡҡа ғына уға һәм Рәшит Шәкүргә республика гимны һүҙҙәрен яҙыу ышанып тапшырыла. Һеҙгә Башҡортостан республикаһы гимнынан өҙөк тыңларға тәҡдим итәм. Бөтәгеҙҙең дә баҫыуы һорала. (Башҡортостан республикаһы гимнынан өҙөк. (9–сы слайд)

7. Грамматик теманы ҡабатлау.

Рәхмәт, ултырығыҙ. Ошо күтәренке рухта дәресебеҙҙе дауам итәйек. Өндәш һүҙҙәр темаһын да ҡабатлап китәйек.

- Р. Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғырында өндәш һүҙҙәр бармы? Уҡып китегеҙ.

Әйтеп киткәнемсә, шағирҙар Башҡортостан темаһын ситләп уҙмай. (хәҙер уларҙың шиғырҙарынан өҙөктөрҙе тасуири итеп уҡып өндәш һүҙҙәрҙе табайыҡ).

(Уҡыусыларға ос төҫтәге карточкалар өләшелә: ҡыҙыл - телде яҡшы белгән; йәшел - уртаса кимәлдә аралашҡан; һары - аңлаған, тик һөйләшә белмәгән балаларға).

- Шулай итеп, шағирҙар Башҡортостанға нимә тип өндәшәләр?

Йәшел һәм һары карточка алған уҡыусыларҙы тыңлау.

Шиғырҙарҙан өҙөктәр:

Республикам!

Минең тыуған йортом
Һәм тирбәлгән йылы бишегем.
Һинең тормоштоң астым ишеген. (Х.Кәрим)

Тыуған ерем – гөллө Башҡортостан,
Һиндә генә шундай матурлыҡ! (Д.Булгакова)

Башҡортостан – аҫыл ерем – хазиналар хазинаһы
Иңдәреңдә – асылғаны, ҡуйынында асылаһы. (Р.Хисаметдинова)

Нурлы күҙле башҡорт ерем!
Киң сәхрә – далаларың…
Һиндә тиңһеҙ бәхет төҙөй
Йөҙ милләт балалары! (Әсхәл Әхмәт-Хужа)

Ҡыҙыл карточка алған уҡыусыларға Р. Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар биреген!» поэмаһынан өҙөктәр бирелә һәм өндәш һүҙҙәрҙе табырға, уртаҡ теманы билдәләргә тәҡдим ителә.

Ағиҙелкәй!
Уфтаныуҙар менән
Юйылырмы ҡара таңдарың?

_____
Яраларың, йылғам, ҡанай,
Шат шаршынан ҡалды канал.

_____
Ҡариҙел, Димем!
Тау-таш ярып,
Һеҙҙе күргә тип талпынам мин,
Ҡағылырға һеҙгә тартынам.

_____
Стәрленән төтөн, йылға булып,
Туғайыңа һылыша, Һәләүек!

_____
Торатауға менеп ҡараһам да,
Табалмайым һине, Стәрле!

Уҡытыусы:

- Бөтә был өҙөктәрҙә ниндәй проблема хаҡында һүҙ бара?

- (Экология проблемаһы)

- Эйе, Рауил Бикбаевтың тәбиғәтте һаҡлау проблемаһын күтәргән әҫәрҙәре күп. Шуларҙың береһе «Һыуһаным, һыуҙар биреген!» поэмаһы менән һеҙ 11–се синыфта яҡындан танышырһығыҙ. Әлегә килтерелгән өҙөктәрҙән дә шағирҙың тыуған ерҙең тәбиғәте өсөн ни тиклем өҙгәләнеүен күрәбеҙ.

- Уҡыусылар, быйыл республикабыҙҙа ниндәй йыл иғлан ителде?

- (Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы»).

Эйе, дәүләт кимәлендә был өлкәлә күп саралар уҙғарыла. Ләкин киләсәктә тирә-яҡ мөхитте сафландырыуҙа эшләйһе эштәр байтаҡ. Тик тыуған еребеҙҙең гүзәллеген һаҡлау ул һинең дә, минең дә, уның да уртаҡ бурысы. Шулай бит?!

Һеҙҙең иғтибарға Башҡортостан тәбиғәтенең гүзәл мөйөштәрен сағылдырған фотоһүрәттәр ҡарарға тәҡдим итәм. (ғ0–сы слайд). Ошо һүрәттәр буйынса өндәш һүҙҙәр ҡулланып һөйләмдәр төҙөгеҙ.Һөйләмдәрҙе тыңлау.

8. Ижад минуттары.

Ә һеҙ үҙегеҙ шағир булып ҡарағыҙ киләме? Синквейн алымын ҡулланып Башҡортостанға шиғыр-өндәшеү яҙып ҡарағыҙ. Тәүҙә синквейн яҙыу схемаһын иҫегеҙгә төшөрөп китәм.

1- се юл. Тема – бер һүҙ

2- се юл. Тема буйынса ике сифат.

3- сө юл. Өс ҡылым.

4- се юл. Шәхси фекер, мөнәсәбәтегеҙ.

5- се юл. Һығымта, йомғаҡлау һүҙе.

Шиғырҙарҙы тыңлау.

9. Йомғаҡлау. Ҡарарҙар сығарыу.

Һәр ҡоролтай эш аҙағында ҡарарҙар ҡабул итә. Дәресебеҙҙе йомғаҡлап, беҙ ҙә үҙебеҙҙең ҡарарҙарыбыҙҙы сығарайыҡ.

- Уҡыусылар, шиғырҙарҙы тематикаһы буйынса төрлө төркөмдәргә бүлеп йөрөтәләр. Таҡталағы плакатҡа ҡарап әйтегеҙ әле: Р. Бикбаевтың был шиғыры ҡайһы төркөмгә ҡарай. (Гражданлыҡ лирикаһы).

- Ни өсөн?

(Лирик герой үҙ халҡын, тыуған ерен-Башҡортостанды яратҡан кеше булараҡ сығыш яһай).

- Беҙ уны Башҡортостандың гражданины, патриоты тип әйтә алабыҙмы?

- Әлбиттә, Р.Бикбаев гражданлыҡ яуаплылығы менән көслө шағир. Уның ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә тора. Бына шул һүҙҙәренең тәьҫире көслө булғанға, ҡыйыу сығыштары өсөн Рауил Бикбаевҡа Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме бирелде.

- Һеҙ үҙегеҙ өсөн ниндәй ҡарар сығараһығыҙ? (Ҡайҙа ғына йәшәһәк тә үҙебеҙҙе матур тоторға, намыҫлы булырға, тыуған ерҙе, телде онотмаҫҡа кәрәк).

Дәрес башында ҡуйған һорауҙарға әйләнеп ҡайтайыҡ. Һорауҙарҙы яңынан биреү. (Уҡыусылар фекере тыңлана).

Уҡытыусы:

- Ил тойғоһо, тыуған ерҙе һағыныу хисе һәр кемгә тәбиғәт тарафынан һалынған. Ҡайһы берәүҙәр шуны аңламайынса яҡшы тормош эҙләп ерен, илен ташлап китәләр. Ләкин ҡасан булһа ла Ватандың ғәзизлеген әсе хәҡиҡәт аша танырға мәжбүр булалар.

Р. Бикбаевтың был шиғыры һеҙҙе уйландырмай ҡалмағандыр. Был әҫәрендә шағир үҙ иленең улы булараҡ, Башҡортостандың, башҡорт халҡының ғорур һынын кәүҙәләндерә. Һеҙҙә - шағир ғорурланған милләттең, илдең бер сатҡыһы бит. Уның өмөттәрен аҡлау – беҙҙең намыҫ эше.

10. Баһалау. Өй эше: төрлө кимәлдә бирелә, һайлап алыу мөмкинселеге әйтелә.

1) Башҡортостан тураһында һөйләмдәр төҙөргә.

2) шиғырҙан өҙөк ятларға.

3) өндәш һүҙҙәр ҡулланып Башҡортостанға мөрәжәғәтнамә яҙырға.

Методик күрһәтмәләр.

Шиғри әҫәрҙәрҙе анализлау уҡыусыларҙа ауырлыҡтар тыуҙыра. Айырыуса был рус мәктәбендә уҡыған башҡорт балалары өсөн еңел түгел. Бындай уҡыусы үҙ фекерен әйтеп бирергә, ауыр урындарҙы һорарға ҡыйынһына.

Тәнҡитле фекерләү технологияһының ҡайһы бер алымдарын ҡулланыу ошо ҡыйынлыҡтарҙы сисеүҙә ярҙам итә.Дәрес башында яңы теманы өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм проблемалы һорауҙар өҫтөндә уйландырыу өсөн хикмәтле хикәйәт тәҡдим ителә. Логик – мәғәнәүи модель ярҙамында уҡыусылар Башҡортостан тураһында ҡыҫҡаса белешмә биреп китә ала. Шиғыр менән танышыу барышында гражданлыҡ, патриотлыҡ кеүек тойғолар хаҡында уҡыусылар уйланмай ҡалмай. Тема менән берлектә өндәш һүҙҙәр ҙә ҡабатлап кителә.

МИН ЙЫһАНҒА ҒАШИҠ

Иҡбаева Ләлә Ғәлиәкбәр ҡыҙы,
Республика политехник лицей-интернаты

Маҡсат:

1) Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышыу, яҙыусы менән ғорурланыу тойғоһо уятыу;

2) шағирҙың уй-кисерештәрен ябай һүҙҙәр аша аңлай алыу һәләттәрен үҫтереү;

3) космос менән бәйле философик фекерләү ҡеүәһе сифатын тәрбиәләү, ер йөҙөндә кешенең бәйәкләргә һәм тирә-яҡ өсөн яуаплылығын тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: портреты, китаптар күргәҙмәһе, яҙыусының тормошон сағылдырған презентация.

(Уҡыусылар компьютерлы класта өс төркөмгә бүлеп ултыртыла, һәр төркөм алдында Р. Бикбаевтың “Ҡош юлы”китабы һәм шиғырҙар ята)

Эпиграфы:

“Ер шары бит, сабый бала кеүек,
Йөрәгемдә ята”

Дәрес барышы:

Уҡыусылар, бөгөнгө дәресебеҙ быйыл матур юбилейын билдәләүсе күренекле шағир, йәмәғәт эшмәкәре, башҡорт халҡының ҙур шәхесенә арналған.

Кем ул һәм ниндәй хеҙмәттәре менән билдәле? Ошо һорауҙарға яуап синыфташтарығыҙ әҙерләгән презентацияла күрһәтелгән. Иғтибар менән ҡарағыҙ, мөһим ваҡиғаларҙы хәтерегеҙҙә ҡалдырығыҙ. Дәрес аҙағында һеҙҙең барығыҙҙың да баһаһы бөтә төркөмдөң эшенән билдәләнә.

(Презентация күрһәтелә: 1 – 14 слайдтар)

Тимәк, кем тураһында һүҙ бара?

(Күренекле шағир, С. Юлаев премияһы лауреаты, Өфө ҡалаһының почетлы гражданины, Башҡортостан Гимны һүҙҙәре авторы, Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, башҡорт халыҡ шағиры Рауил Бикбаев)

Биографияһынан ниҙәр иҫегеҙҙә ҡалды?

(Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Йәшләй атаһыҙ ҡала һәм әсәһе тәрбиәһендә үҫә. Аҡбулаҡ педучилищеһында уҡый, шиғырҙар яҙа башлай, 1957 йылда Башҡорт Дәүләт университетында уҡый башлай.)

Шағир, яҙыусы тураһында презентация өсөн был ғына етәме? Ниндәй слайдтар өҫтәр инегеҙ? Ни өсөн?

Әлбиттә, һәр ҡәләм оҫтаһы тураһында һөйләгәндә, һис шикһеҙ, уның әҫәрҙәрен дә, китаптарын да билдәләп үтергә кәрәк. Рауил Бикбаевтың да ижад юлы китаптарында. Икенсе төркөм әҙерләгән презентация тап ошо турала. Шулай уҡ иғтибарлы булығыҙ, китаптарының исемдәрен яҙып алығыҙ, хәтерегеҙҙә нығыраҡ ҡалыр.

(Презентация күрһәтелә: 15-24 слайдтар)

(“Дала офоҡтары” - 1964, “Ҡош юлы” - 1967, “Автобиография” – 1969, “Лирика” – 1971, “Ғүмер уртаһы”- 1967, “Һөйөнсө” - 1979, “Ерем балҡышы” - 1982, “Бураҙналар” - 1985, “Яҙмышым” - 1988, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” – 1991, “Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны” һ.б.).

Хәҙер инде айырым китап һәм шиғырҙар өҫтөндә эшләйек. Бының өсөн “Нимә артыҡ” уйынын иҫкә төшөрәйек.

Алдығыҙҙа шиғырҙар ята, иғтибар менән уҡығыҙ ҙа артыҡ шиғырҙы билдәләп ҡарағыҙ. Бының өсөн шағир был әҫәрҙәрендә нимә тураһында йышыраҡ иҫкә алыуына, шиғырҙарҙың бер нисәһен ниндәй тема берләштереүен билдәләп ҡарағыҙ.

(“Уҡ”, “Йондоҙоң алдында баш эйәм”, “Ишек яңағында тамғалар”, ”Күҙ асып күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа…”, “Ҡош юлы” шиғырҙары өҫтөндә эш Вилдан Яруллин башҡарыуында Рәшит Назаров һүҙҙәренә “Йөрәк” йыры аҫтында башҡарыла).

Уҡтар атҡан халҡым йондоҙҙарға
Сойорғолта бөгөн ҡараптар.
…Төнгө күккә баҡһам, уйлап ҡуям:
Етегән йондоҙ-ете ырыуымдың
Күккә тишеп һалған тамғаһы.
Ишегебеҙ яңағына
Ҡупме ҡулдың эҙе төшкән.
Йылдарыбыҙ күккә илтер
Баҫҡыс булып теҙелешкән…
Күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа
Ғаләм өсөн ғүмере кешенең.
Тик шул ҡыҫҡа ғына ғүмерендә
Кеше уйы байҡай ғаләмде.
Мин йыһанға ғашиҡ.
Йыһандағы саң бөртөгө түгел,
Был йыһандың күҙе – кешеләр.
Ҡайһы шиғыр артыҡ һәм ни өсөн? …

“Ҡош юлы” шиғырына мөхәббәт темаһы яҡыныраҡ. Ә ҡалған шиғырҙар, ысынлап та, Йыһан, күк йөҙө, күк есемдәре менән берләшкән. Йондоҙло күк йөҙө күп йылдар элек үк әҙәм балаһын үҙенә тартҡан. Хатта тәү быуат кешеләре лә ҡая таштарында ҡалдырған һүрәттәрендә Ҡояш, Ай, Йондоҙҙарҙы һынландырған. Кеше әҙгә генә булһа ла ерҙән айырыла алырлыҡ осоу аппараттары уйлап сығарған. Ер шары космик планеталар сафына баҫыу менән ер цивилизацияһы бер үҙе генә түгеллегенә ышанған. Күптәрҙә Йыһанға осоу һәм йондоҙҙар менән һөйләшеү теләге уянған. Күп йылдар йыһан киңлектәре аҡыл эйәләрен генә түгел, рәссам, шағир, архитекторҙар күңелен арбаған, иғтибарын йәлеп иткән. Бигерәк тә үткән быуаттың 60-70 се йылдарында әҙәбиәттә лә күп әҫәрҙәр донъя күрә. Был ниндәй ваҡиға менән бәйле икәне билдәле, шулаймы? (Беренсе спутник һәм беренсе космик осош).

Рауил Бикбаев та, шиғырҙарынан күренеүенсә, был теманы ситләп үтмәй, йыш ҡына ҡош юлы, күк есемдәренә мөрәжәғәт итә. Исеменә күрә есеме: “Ҡош юлы йыйынтығына” ингән шиғырҙарының байтағы ирәбә образдар, космик образдар менән ҡылыҡһырлана. Китап исеме быға үҙе бер асҡыс булып тора.

Ә нимә ул Ҡош юлы? Астрономияла был термин юҡ бит. Башҡорт халыҡ ижадында легенда бына нисек аңлата.

(уҡыусы әҙерләгән сығыш)

Бик борон булған был хәл. Ул саҡта әле йондоҙҙар ҙа, Ҡош Юлы ла булмаған. Ҡайҙандыр алыҫтан, көньяҡтан, Уралға, Һаҡмар, Ағиҙел буйҙарына торналар килеп йәйләр булған. Элек уларҙы Һиндостан тигән ерҙән килә тип һөйләй торғайнылар. Бер йылды торналар теҙелешеп йылы яҡҡа осҡан мәлдә ел-дауыл күпҡан. Бала торналар аҙаша башлаған, ҡайһы берҙәре, арып, ергә төшөп ҡала барған. Шул саҡ оло торналар ҡалғандарына юл күрһәтеү өсөн ҡауырһындарын сәсеп киткәндәр. Был ҡауырһындар йондоҙға әйләнгән. Торналар осҡан юлда ана шулай йондоҙҙар хасил булған. Тороп ҡалған торналар ошо йондоҙҙарға ҡарап ҡайтыр булғандар. Ҡош Юлы тигәндәре ана шунан ҡалған ул.

Рауил Бикбаевтың ошо китабына ингән:

…Күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа
Ғаләм өсөн ғүмере кешенең.
Тик шул ҡыҫҡа ғына ғүмерендә
Кеше уйы байҡай ғаләмде.
Мин йыһанға ғашиҡ. Төндәрендә
Һоҡланамын утлы киңлеккә.

Тик барыбер йондоҙ тыуыуын мин
Кеше тыуыуына тиң итмәм.
Бөтә донъя бары кеше аша
Үҙен күреп, үҙен төшөнә.
Йыһандағы саң бөртөгө түгел,
Был йыһандың күҙе - кешеләр.

шиғырын бүлеп цитаталап та булмай, ул бер бөтөн көйө генә асыла. Йыһан ҡаршыһында кеше үҙе бер кескәй бөртөк кенә булһа ла, шағир өсөн Кеше беренсе урында, Йыһан мотивының йомғағын хәтерләтә. Шағир гүйә киң дала офоҡтарынан аша күккә – йыһан бейеклектәренә ашып китә. Әйҙәгеҙ ошо шиғырҙарҙы тағы бер тапҡыр ҡарап сығып, шағир һүҙҙәре менән темаһын билдәләйек.

“Мин йыһанға ғашиҡ” – темаһы бөтә шиғырҙарға ла уртаҡ тема. Күк йөҙө есемдәре менән бәйләп шағир үҙен уйландырған, ҡыуандырған, борсоған – ғөмүмән, бар уй-кисерештәрен уҡыусыға еткерә. Авторҙың һәр һүҙе, һәр тыныш билдәһе мөһим икәнлеген беләбеҙ. Шулай уҡ шиғри әҫәргә анализдың схемаһы барығыҙға ла билдәле. Яҙыусының ни әйтергә теләгәне, уның уй-кисерештәре күк есемдәре менән нисек бәйләнгән? Әйҙәгеҙ, “ …Күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа” шиғырын ошо йәһәттән тикшереп ҡарайыҡ.

“Асҡыс һүҙҙәр”:

Күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа (кеше ғүмере йыһан киңлеге өсөн бер бөртөк кенә, бик аҙ һәм мәғәнәһеҙ төҫлө).

Кеше уйы байҡай ғәләмде – (үҙе оса алмаһа ла, әҙәм балаһы үҙенә әйҙәп торған серле донъяны танып – белергә тырыша, үҙенсә хыяллана, уҡтала).

Мин йыһанға ғашиҡ – (зәңгәр күк йөҙө көндөҙ сағыу ҡояшы, төрлө һүрәттргә инеп аҡҡан болоттары, төнөн матур йондоҙҙары менән һоҡландыра, ымһындыра).

Йондоҙ тыуыуын мин кеше тыуыуына тиң итмәм – ерҙә кеше тыуһа, күк йөҙөндә яңы йондоҙ ҡабына тиҙәр. Шағир өсөн буй етмәҫлек күк йөҙөндә тыуған йондоҙға ҡарағанда ергә килгән яңы кеше мөһимерәк, тик әҙәм балаһының аҡылы, белеме менән генә донъя танып – беленә, ғаләм серҙәре асыла.

Йыһандағы саң бөртөгө түгел, был йыһандың күҙе – кешеләр – шиғырҙың иң төп асылын еткерә: саң бөртөгөндәй йондоҙҙар ни тиклем матур, серле булһа ла, был донъяны гөл дә, көл дә иткән кеше, тап ул ни теләһә шуны булдыра, шуны таба һәм донъяны үҙенсә үҙгәртә, матурлай, байыта, төрлө төҫтәргә буяй. Тик ерҙә йәшәүсе генә ғаләм киңлегендә үҙ ҡанундарын индерә ала.

Синонимдар: йыһан. утлы киңлек, ғаләм, күк йөҙө.

Йондоҙҙар, саң бөртөгө, метеор.

Сағыштырыу: күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа, утлы киңлек, саң бөртөгө, йыһан күҙе.

Һығымта: Тимәк, был шиғыры менән әҙип кешегә дан йырлай, кеше аҡылы, белеме, йәшәйеше менән бар ғаләм өсөн мөһим һәм бурыслы. Йыһан киңлектәрендә бәләкәй бөртөк булһа ла, уның эштәрендә, ҡылыҡтарында - бөтә донъя асылы, әҙәм балаһының аҡылы, белеме менән генә донъя танып – беленә, ғаләм серҙәре асыла.

Өй эше: Р. Бикбаевтың бер шиғырына анализ яһарға йәки презентацияға өҫтәрлек слайдтар әҙерләргә.

* * *

Күҙ асып, күҙ йомоуҙан да ҡыҫҡа
Ғаләм өсөн ғүмере кешенең.
Тик шул ҡыҫҡа ғына ғүмерендә
Кеше уйы байҡай ғаләмде.
Мин йыһанға ғашиҡ. Төндәрендә
Һоҡланамын утлы киңлеккә.
Тик барыбер йондоҙ тыуыуын мин
Кеше тыуыуына тиң итмәм.
Бөтә донъя бары кеше аша
Үҙен күреп, үҙен төшөнә.
Йыһандағы саң бөртөгө түгел,
Был йыһандың күҙе - кешеләр.

Уҡ

… Ә бабайҙар һөйләр ине беҙгә
Алыҫ, серле Париж ҡалаһын,
Шул ҡаланың көмөш көмбәҙендә
Башҡорт уғы ҡунып ҡалғанын.
…Париждарға еткән янды тартыу
Килмәҫтер, ҙә, бәлки көсөмдән.
Тик һаман да минең йәйә тартҡым килә,
Кирелеп китеп уҡтар атҡым килә
Яҙҙың яңғырап торған кисендә.
Был дәрттәрем, сәйер теләктәрем
Ятыраҡмы беҙҙең талапҡа?
Уҡтар атҡан халҡым йондоҙҙарға
Сойорғолта бөгөн караптар.
Сабый саҡтың ихлас инаныуы,
Мин туҙһам да, булмаҫ туҙанда.
Боронғонан алыҫлашҡан һайын,
Яҡыныраҡ миңә уҙғандар.
Йөрәгемә күскән бар йылыһы
Күптн инде һүнгән уттарҙың.

Айҙа табыр төҫлө космонавт
Олатайҙар атҡан уҡтарҙы.
Күсенһә улар дала буйлап,
Булмаған һис дала ҡамғағы.
Төнгө күккә баҡһам, уйлап ҡуям:
Етегән йондоҙ-ете ырыуымдың
Күккә тишеп һалған тамғаһы.

* * *

Йондоҙоң алдында баш эйәм,
Ҡояшың алдында теҙләнәм,
Эй, Йыһан, мәңгелек тәнеңдә
Мин тетрәп торған күҙәнәк.
Ай тартһа, диңгеҙҙәр артылып,
Ярҙарҙа ҡаялар ишелә.
Ҡояштың иң ярһыу йылында
Йышыраҡ йығыла кешеләр.
Кешенең йөрәген шартлата
Ҡояштың тынғыһыҙ тулауы.
Тик бөгөн аяҙ күк аҫтында
Башҡаны борсолоп уйлауым.
Күк аяҙ, уйҙарым –болотло,
Һағалай кешене мең бәлә.
Алыҫта сайрала йондоҙҙар,
Ә ерҙә ярыла бомбалар.
Баҡһам да, тәндәрем сымырҙап,
Ғәләмдең ғәләмәт эшенә;
Ҡуркмайым һоҡланғыс йыһандан,
Һоҡланам һәм ҡурҡам кешенән.
Кеше өсөн ҡурҡам мин. Был ерҙә
Хаҡлыҡтан хәйләкәр хәрәм бар.
Илдәрҙе һаман да һуялар
Донъяға һыймаған әҙәмдәр.
Ҡурҡамын кеше өсөн. Тик кешем
Түгел дә йыуаштан, ҡурҡаҡтан:
Ҡурсалап яҙмышын, ағыулы
Өйөрмә өҫтөнә ҡороҡ тартҡан.
Юлында быуылып муйыны,
Тонсоғор килмешәк ҡойоно.
… Ә күккә ҡараһаң, был донъя
Йәшәрлек тик нурға ҡойоноп.
Йондоҙҙан йондоҙға ҡаҡлығып,
Атылып еремә етте йыр:
Дуҫтарҙың сәләме шикелле,
Һибелә, һибелә метеор…
Ишек яңағындағы тамғалар
Ишек моңло бер йыр йырлай
Сабый саҡтар тураһында.
Балалыҡтың тамғалары
Рәт-рәт булып тора бында.
Ҙурайырға талпынышып,
Үлсәр инек буйыбыҙҙы,
Былтыр һалған билдәләрҙе
Ҡалай уҙҙыҡ, ҡалай уҙҙыҡ!
Ишегебеҙ яңағына
Күпме ҡулдың эҙе төшкән.
Йылдарыбыҙ күккә илтер
Баҫҡыс булып теҙелешкән…

Йөрәк

Рәшит Назаров

Йыртып астым күкрәгемде,
Йолҡоп алдым йөрәгемде.
Һәм, йомарлап устарыма,
Илттем уны дуҫтарыма,
Илттем уны һиңә, йәнем,
Тик күрмәнең ниңә, йәнем?
Хурланып мин шул саҡ бик тә,
Йөрәгемде аттым күккә,

Осто йөрәк, осто йөрәк
Йондоҙҙарҙан бейегерәк.
Йәнем! әгәр сыҡһаң тышҡа
Таңын, ҡара көнсығышҡа-
Бер йондоҙ унда нур һипһә,
Һәм хистәреңдөрләп китһә,
Бел: был йондоҙ- минең йөрәк,
Тик инде ул бейегерәк.

ТУҒАН ТЕЛЕМ ТЫУҒАН ЕРЕМДӘ ЯҢҒЫРАҺЫН МӘҢГЕ ЙЫР БУЛЫП

Дәүләтшина Гөлсәсәк Марат ҡыҙы,
Сакмағош ауылы гимназияһы

Маҡсат:

1) Уҡыусылрҙың уҡыу һәм һөйләү телмәрен, фекер йөртөү һәләттәрен үҫтереү, ижади һәләттәрен үҫтереүгә ярҙам итеү;

2) Рауил Бикбаевтың ижады, шиғырҙарының йөкмәткеһе менән таныштырыу, шиғырҙарҙы тасуири уҡыу күнекмәләрен, Рауил Бикбаев тураһында белгән белемдәрен нығытыу;

3) бөйөк әҙиптең үҙенә һәм ижадына ҡарата хөрмәт тәрбиәләү; уҡыусыларҙа шиғриәт донъяһына, сәнғәткә, гүзәллеккә, камиллеккә, ынтылыш уятыу; рухи донъяларын байытыу; туған телгә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: электрон дәреслек, Рауил Бикбаевтың портреты, дәрестең темаһы яҙылған плакат, ребус төшөрөлгән плакат, таждарына биремдәр яҙылған сәскә, нурҙарына Рауил Бикбаев тураһында мәғлүмәттәр яҙылған ҡояш, шиғырҙар, магнитофон, аудиояҙма.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу моменты

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар, ултырығыҙ! Бөгөн беҙҙә башҡорт теле дәресе. Йәгеҙ әле, дәрес башланыр алдынан күмәкләп үҙебеҙ яратқан шиғыр юлдарын иҫкә төшөрөп китәйек.

(уҡыусылар хор менән әйтәләр)

Бөгөн беҙҙә башҡорт теле,
Яратам һине телем
Рәхмәт һиңә, һинең аша
Алам мин яҡшы белем.

II. Дәрестең темаһын һәм маҡсатын асыҡлау.

- Балалар таҡтаға ҡарағыҙ әле, беҙ бөгөн дәрестә кем тураһында һөйләшербеҙ?
- …
- (кем һуң ул Рауил Бикбаев ?
- …
- Рауил Бикбаев ҡайҙа тыуған?
- …
-Шағирҙың тыуған көнө ҡасан?
- …
- Рауил Бикбаевҡа нисә йәш тула?
- …

-Дәресебеҙ Рауил Бикбаевтың 75 йыллығына бағышлана. Бөгөн беҙ дәрестә Рауил Бикбаев шиғырҙәренең эстәлеген тәрәнерәк өйрәнергә тырышып, сәйәхәткә сығарбыҙ. Рауил ағағыҙҙың шиғырҙарынан фәһем, нур, моң алырбыҙ, үҙ ҡараштарыбыҙҙы, уй-фекерҙәребеҙҙе әйтербеҙ; үҙебеҙгә баһалама бирербеҙ.

III. Төп өлөш

1. Инеш әңгәмә

- Сәйәхәтебеҙҙе Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары менән башлап китәрбеҙ. (плакатты таҡтаға элеү)

Туған телем минең! Күпме һүҙең Йондоҙ кеүек йым- йым нурлана.

- Йәгеҙ әле, уҡыусылар, уҡып сығайыҡ. (уҡыусыларҙың уҡыуы). Был шиғыр юлдары сәйәхәтебеҙҙең темаһы һәм девизы.

2. Өйгә эште тикшереү.

Беренсе тукталышыбыҙ (слайд №1)

«Башҡортостан тәбиғәте.»

- Рауил Бикбаев Башҡортостан тәбиғәтенең байлығына, тыуған төйәгенең матурлығына һоҡлана, уның менән ғорурлана. Был хистәре уның шиғыр юлдарында бик асыҡ сағыла. Уҡыусылар, хәҙер өйҙә ятларға бирелгән шиғыр юлдарын һөйләп үтербеҙ. Беренсе группа уҡыусыларына һүҙ бирәм.

1. Тәбиғәттең теле асылған саҡ.
Шыйыҡ ҡына йәшкелт буяҡта,
Өйрәнәләр тәүге һүҙ әйтергә
Тәүге япраҡ, тәүге ҡыяҡтар.
(«Тәбиғәттең теле асылған саҡ»)

2. Ҡолон кеүек, ямғыр йүгереп үтте,
Туп-туп баҫып көмөш тояғын.
Тояғына уралыпмы килде
Ялан еҫе, үлән ҡыяғы.
(«Ҡолон кеүек»)
3. Сәскәләрен һыпырып сәйгә һалам –
Шау бал булып аңҡый сәйҙәрем.
Йөрәгемдең бар яфаһын йыуа
Уралымдың шифа йәйҙәре.
4. Битләүҙәрҙә тулышып еләк бешә,
Устарыма төшә тирелеп.
Бынау аҡландарға тик бер ҡаплан –
Һүнгән хыял кире терелер.
(«Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда»)

- Иҫ киткес тә матур шиғырҙар яҙған үҙенең туған яҡтары, Башҡортостан тәбиғәте тураһында Рауил Бикбаев.

3. Яңы тема өҫтөндә эш.

Икенсе туҡталышыбыҙ (слайд №2)

«Халҡым теле – хаҡлыҡ теле»

- Был туҡталышта Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» тигән шиғырының өҙөгөнә туҡталып китәйек. Алдарығыҙҙға таратылған, хәҙер беҙ уны һеҙҙең менән уҡып китербеҙ.

а) «Халҡыма хат» тексты менән танышыу: үҙ аллы уҡыу; сылбырлы уҡыу, тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү.

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хаты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.
Шул тел менән халҡым үҙ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған…

б) һүҙлек эше (слайд №3). Һүҙҙәрҙе тәржемәһе менән уҡыу, аңлатыу, һүҙлек дәфтәренә яҙыу (бәғер - душа, золом - яуызлыҡ, биҙҙереү - отучать, яҙҙырыу - лишать, ҡуйын - пазуха, ҡый - сорняк, һәләт - способность, тиҫтер - сверстник, даръя - большая река, ырыуҙаш - сородич, алҡым - горло, тоҙаҡ - петля).

в) һорауҙарға яуап биреү:

- «Ҡулындағы ҡанлы бығауҙарын өҙҙө халҡым»,тип автор нимә әйтергә теләгән?
- Шағир йөрәгендән кем яҙмышы менән янып йөрөй?
- …
- Ул турала шиғыр юлдары ни әйтә?
- …

4. Теманы нығытыу.

Сираттағы туҡталышыбыҙ (слайд №4)

Нур һәм моң

Күңелле, йылы һүҙ әйтәм
Олоға, кеселәргә
Яратам, һөйөнселәргә

Йән атам кешеләргә, - тип нәҡ Рауил Бикбаев тураһында әйтелгән. Рауил Бикбаевтың йөрәк сәскәһендә тағы ла ниндәй серҙәр яҙылған икән? (таҡтала сәскә йыһаҙы беркетелгән, сәскә таждары артына Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары яҙылған).

- Сәскә таждарын алып, ундағы шиғыр юлдарын уҡырһығыҙ. Шағир нимә әйтергә теләгәнен группала кәңәшләшеп уйлап әйтерһегеҙ. Һәр бер группа берәр таж алығыҙ һәм яуап бирергә әҙерләнегеҙ.

1. Талпынғанда йырым
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон

Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын…
(«Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда»)
2. Эй еркәйем, һинең яларға
Йәншишмәнән һыуҙар бөркәйем.
Халҡым үҙе тураҡланып бөтөр
Тураҡланһа бөгөн еркәйем.
(«Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта»)
3. Минбашланам һеҙҙән, кешеләрем
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.
(«Башҡортостан бында башлана»).

- Ошо шиғыр юлдары менән шағир нимә әйтергә теләгән?

- Донъяға маңлай күҙе менән генә түгел, күңел күҙе менән ҡарарға, ер шарының йөрәк тибешенә һиҙгер ҡолаҡ һалырға күнекҡән шағир улРауил Бикбаев. Кешеләрҙең бар һөйөнөсө һәм көйөнөсө, донъяның бар шатлығы һәм фажиғәһе, халыҡ,ил яҙмышы шағир йөрәге аша үтә. Шулар йөрәк түренән сыҡҡан уй һәм тойғолар булып, шиғыр булып аҡ ҡағыҙға төшә, күңелдәрҙән күңелдәргә күсә.

- Ә хәҙер, Илнара башҡарыуында йыр тыңларһығыҙ. (йыр башҡарыла).

- Йәгеҙ әле уҡыусылар ребус сишеп алайыҡ. Сәйәхәтебеҙҙең аҙаҡҡы туҡталышы нисек атала икән? (таҡтаға ребус төшөрөлгән плакат ҡуйыла).

- Аҙаҡҡы туҡталышыбыҙ нисек атала ?

(слайд №5)

Бәхет

- Уҡыусылар, нимә һуң ул бәхет? Ниндәй кешегә беҙ был кеше бәхетле тип әйтәбеҙ?

- …

- Рауил Бикбаевтың бәхет нурҙары таҡталағы ҡояшыбыҙ нурҙарында сағыла. Шағирҙың шиғыр юлдары күктәге ҡояш нурҙары кеүек беҙҙең күңелдәребеҙҙе яҡтырта, байыта. (таҡтала ҡояш йыһаҙы беркетелгән, ҡояш нурҙары артына Рауил Бикбаевтураһында мәғлүмәттәр яҙылған).

- Икенсе группалағы уҡыусылар ошо нурҙарҙа яҙылғандарҙы уҡып күрһәтерҙәр. (уҡыусылар ҡояш нурҙарын алып, артына яҙылғанды уҡып күрһәтәләр).

1. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың !.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы лауреаты.
2. Рауил Бикбаев Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты.
3. 1992 йылда Рауил Бикбаевҡа Башҡортостандың халыҡ шағире тигән юғары исем бирелде.
4. Ә иң мөһиме, Рауил Бикбаев шиғырҙары - халыҡ телендә, беҙҙең телдә.

IV. Дәрестe йомғаҡлау.

- Сәйәхәтебеҙҙе матур шиғыр юлдары менән тәмамлаһым килә
Барлыҡ ҡыуанысым шиғырҙарҙа
Бар бәхетем халҡым телендә
Халҡым ҡалһа әле мин ҡалырмын
Һүҙем йәшәр әле илемдә.

- Сәйәхәтебеҙ ошоноң менән тәмам. Һеҙгә сәйәхәт оҡшанымы?
- …
- Бигерәк тә һеҙгә ниндәй туҡталыш оҡшаны? Ни өсөн?
- …
- Дәрестә һеҙ нимә аңланығыҙ?
- …
- Дәрестә барығыҙ ҙа бик актив булдығыҙ, тулы яуаптар бирҙегеҙ. Бөгөн барығыҙға ла бишле. Баҫығыҙ. Дәрес бөттө. Һау булығыҙ!

ЙӨРӘГЕНДӘ МИЛЛӘТ ҺАҒЫШЫ

Ишкинина Фәүзиә Ғирфан ҡыҙы,
Республика политехник лицей интернаты

- Тыуған йылың ҡайһы?
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған йылың ҡайһы?
- Халҡым ҡыуған йыл.
Яҙмышынан уның уҙмышым юҡ,
Ярам-яралары
Күҙе менән күреп айырам ерҙең
Ағын-ҡараларын.

Маҡсат.

1. Уҡыусыларҙы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың һуңғы йылдарҙың көслө ауазы булып яңғыраған ер, ил, тел тураһындағы әҫәрҙәре менән таныштырыу. Идея-художество яғынан анализ биреү.

2. Р. Бикбаевтың “Әсәй, мине таңда уят әле” (Ә.Бикташева көйө) йыры менән таныштырыу.

3. Уҡыусыларҙан шағир шәхесенең төп сифаттарын билдәләтеү аша тыуған ергә, тыуған илгә, туған телгә мөхәббәт тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. Р. Бикбаевтың стенды, портреты, китаптарынан күргәҙмә; Р.Бикбаев менән лицейҙа булған осрашыу кисәләренән (1997, 2007 йылдар) презентация.

Дәрес барышы.

Ойоштороу моменты.

Программала XI класта Рауил Бикбаевтың “Халҡыма хат” әҫәрен өйрәнеүгә бәйләп, “Хазина” поэмаһы кластан тыш уҡыуға тәҡдим ителә. Әҫәр тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биргәндән һуң уны өйҙә үҙ аллы уҡырға ҡушыла. Поэманың проблемаларына һәм образдарына бәйле һорауҙар алдан уҡ бирелә: шағирҙың был әҫәре халыҡ яҙмышы тураһында яҙылған башҡа әҫәрҙәренән ни яғы менән айырыла? Яҙыусыны ниндәй проблемалар борсой? Кем ул Юлдаш? Уның биографияһына бәйле ниндәй мәғлүмәттәр бирелә? Ейәне Азат тураһында нимә белдек? Тәүге башҡорт менән һуңғы башҡорт тураһында әйтелгән урынды табығыҙ. “Әбйәлил” әкиәте әҫәрҙә ниндәй урын алып тора? Ни өсөн ваҡиғалар Әбйәлил ерендә бара? Ҡарасҡы кем ул? Уның үлемендә кем ғәйепле? Нимә ул гибрид шәжәрә? Поэманың ҡайһы урындары һеҙҙе айырыуса тетрәндерҙе? Аҙаҡҡы строфаларҙы нисек аңланығыҙ? Поэманың художество эшләнешенә, тел-стиль сараларына ниндәй үҙенсәлектәр хас? Ни өсөн Р. Бикбаев халыҡ-ара терминдарҙы, рус лексикаһын файҙалана?

1. Инеш өлөш.

Р. Бикбаев һүҙҙәренә “Әсәй, мине таңда уят әле” (Ә. Бикташева көйө) йыры яңғырай.

Уҡытыусы. Ваҡыт минең арттан ҡыуып килһә,

Мин йүгерһәм ваҡыт артынан,
Хәлһеҙләнеп, тағы хәл алырға
Ергә ятһам, киске һалҡында.
Донъям теүәл…

Беҙҙең халыҡта “Иртә торһаң , уңырһың, һуңға ҡалһаң, туңырһың” тигән әйтем бар. Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаев “Йәшлек” гәзитенә биргән интервьюһында “Таң һарыһынан алда аяғөҫтөмөн. Әгәр эшкә сығып китерҙән алда ике-өс сәғәт яҙыу өҫтәле артында ултырмаһам, ул көнөм елгә осҡандай”, ти. Беҙҙе лә бәләкәй саҡта әсәйем: ”Тороғоҙ, балаҡайҙар, иртә торғандарға хоҙай бабай бәхет өләшә, йоҡлап ҡалып ҡуймағыҙ”, - тип иртүк уята торғайны. Беҙҙең яратҡан шағирыбыҙ Р. Бикбаевҡа ла Хоҙай тәғәлә бәхетте тоҡлап-тоҡлап биргәндер. (Китаптары тураһында әңгәмә ойоштороу). Уҡытыусы. (презентация күрһәтелә). Р. Бикбаев беҙҙең лицейҙа ике мәртәбә булды. Беренсеһе - 1997 йылда Башҡортостандың көньяҡ регионы егеттәре өсөн техник йүнәлештәге Республика политехник лицей-интернаты асылған көндәрҙә беҙҙең уҡыу йорто етәкселеге тарафынан ҡунаҡ сифатында саҡырылғайны. Онотолмаҫ осрашыу булды ул. Икенсе осрашыуға ла ул 2002 йылда үткәрелгән “Башҡортостан Республикаһы – Ырымбур өлкәһе” мәҙәни-мәғрифәти форумында ҡатнашыр өсөн саҡырыуыбыҙҙы ихлас ҡабул итеп, шатланып килде. Лицейҙың тамаша залында уҡыусылар рәхәтләнеп Башҡортостандың халыҡ шағирының сығышын тыңлағайнылар. Шул осрашыуҙарҙа күренекле шәхестең беҙҙең лицейҙа тәрбиәсе булып эшләүсе Рифат Рәкип улы Вахитов (“Әсәй, мине таңда уят әле” йырын башҡарыусы) менән ике туғандар икәнен белдек. Рауил Бикбаевтың әсәһе Вахитовтар нәҫеленән.

Бөгөнгө дәрестә Күмертау ҡалаһының Кинйә Арыҫланов исемендәге фольклор төркөмө йырсыһы, элекке тәрбиәсебеҙ Рифат Рәкип улы Вахитов беҙҙә ҡунаҡта. Ул да Туҡсоран буйҙарынан Ғабдрафиҡ ауылынан. (Бикбаевтар һәм Вахитовтар шәжәрәһе тураһында ҡунаҡтың сығышын тыңлау).

Уҡыусы. Яратҡан шағирыбыҙҙың ғаилә шәжәрәһе менән таныштырған өсөн ҙур рәхмәт һеҙгә, Рифат Рәкип улы.

Шәжәрә – ырыу ағасы. Шәжәрә – ул башҡорт ырыуҙарының һәм нәҫелдәренең генеологик йылъяҙмаһы, эпохаль документ. Үҙен ысын башҡорт тип һанаған һәр кеше ата-бабаларының тарихын, йәғни үҙенең нәҫел тамырҙарын белергә тейеш. Шул саҡта ғына ул үҙ нәҫелен лайыҡлы дауам итеүсе, туғандары, ауылдаштары, ырыуҙаштары, халыҡ алдында үҙенең башҡарған эштәре өсөн яуаплы буласаҡ. Белеүебеҙсә, 2007 йылда Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте республикабыҙҙа «Шәжәрә байрамы» үткәреү тураһында ҡарар ҡабулитә. Шәжәрә байрамын үткәреүҙең маҡсаты - быуындар бәйләнешен һаҡлау, миллийолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр нигеҙендә ғаилә һәм туғанлыҡ ептәрен нығытыу, үҫеп килеүсе быуынды, үҙ ырыуын, халҡын, тыуған яғының тарихын өйрәнеүгә ылыҡтырыу; ғаилә ижадын үҫтереү, уның йәшбыуынды әхлаҡи һәм рухи тәрбиәләүҙәге ролен арттырыу. Һуңғы йылдарҙа шәжәрәгә иғтибар бермә-бер артты. Шәжәрәләрҙе барлау кешеләрҙе бергә туплаусы, яҡшы эштәргә рухландырыусы, йәш быуынды тәрбиәләүсе көскә әйләнде.

Уҡытыусы. Ә бына башҡорт шиғриәтендә шәжәрәләргә бағышланған ҙур күләмле поэтик әҫәрҙең – поэма һынлы поэманың булғаны юҡ ине әле. Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың “Хазина” поэмаһы – милләт яҙмышы өсөн йөрәктәргә ут һалыр, тетрәндерер һәм уйландырыр оран булып яңғыраны.

Уҡыусы. Хазина, хазина…Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ошондай исем менән аталған поэмаһын уҡып сыҡҡас, шул һүҙ мейемде сүкеп кенә тик тора: хазина, хазина…

Ниндәй хазина, байлыҡ тураһында һүҙ алып бара һуң оло шәхес? Поэманың башы Өфөнөң баҡсалары ап-аҡ сәскәгә төрөнгән матур яҙғы иртәләрҙе тасуирләүҙән башланып китә. Майҙандағы бейек сәғәттең Дәүләт гимнын башҡарыуы, мәсеттең аҙан моңо, селтәрле, семәрле тәҙрә-кәрниздәр… Күңелдәрҙе елкендерерлек йәмле иртәлә поэманың төп геройы - оло быуын вәкиле Юлдаш менән танышабыҙ. Ул ғына ла түгел, поэманың нигеҙ ташы итеп быуындарҙы бәйләп тороусы шәжәрә һалынған. Бер нәҫел шәжәрәһе аша башҡорт тарихы тураһында әсенеп тә, һыҙланып та, яһып та, уйланып та һөйләй автор.

Уҡытыусы. Шағирҙың был әҫәре халыҡ яҙмышы тураһында яҙылған башҡа әҫәрҙәренән ни яғы менән айырыла? Яҙыусыны ниндәй проблемалар борсой?

Уҡыусы. Беҙ танышҡан әҫәрҙәрендә шағир яңы тарихи шарттарҙа халҡы яҙмышы, Башҡортостанының киләсәге өсөн тәрән борсола, “йоҡлар йоҡоһонан яҙһын кеше, яҙмаһын тик еренән, иркенән” тип уяу торорға, иң кәҙерле ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалырға, күңел паклығына тап төшөрмәҫкә өндәй. “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында кешелекте борсоған глобаль проблемалар, тәү сиратта, тәбиғәттең йырҡыстарса таланыуына, рәхимһеҙ ағыуланыуына бәйле экологик катастрофа һәм кеше күңеленең ярлыланыуы, әҙәп-әхлаҡтың ҡаҡшауына бәйле рухтың ҡото китеүе, заманың үтә киҫкен мәсьәләләре Башҡортостан тәбиғәте һәм халыҡтары яҙмышына бәйле асыла. “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында күтәрелгән мөһим проблемаларҙы шағир артабан “Халҡыма хат” шиғырында дауам итә. Ер-һыу, тәбиғәт короуҙан күргән зыян ни дәрәжәлә оло булһа, туған телебеҙҙең ҡороп барыуы ла шул тиклем үк ҙур юғалтыу, халыҡтың киләсәгенә янаусы, милләт булып йәшәүен һәләкәт аҫтына ҡуйыусы күренеш тип һыҙыҡ өҫтөнә ала. Беренсе булып 2009 йылдың октябрь һанында “Ағиҙел” журналында донъя күргән “Хазина” поэмаһында шағир үҙенең халыҡсанлығын, ил ғәмдәре менән, милләтебеҙҙең киләсәк яҙмышын ҡайғыртып йәшәүен ырыу шәжәрәһен һаҡлау зарурлығы өлгөһөндә беренсе булып оран һала. Поэма уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятып ҡына ҡалмай, ә күптәрҙе үҙ яҙмышы хаҡында уйланырға мәжбүр итә.

Уҡытыусы. Кем ул Юлдаш? Уның биографияһына бәйле ниндәй мәғлүмәттәр бирелә?

Уҡыусы. Р. Бикбаев халҡыбыҙ тормошон һүрәтләгәндә уның йөрәкте һыҙлатырлыҡ яҡтарын да урап үтмәгән. Илдең аҫыл ире Фәҙел Аҡъюлов тарихтың ҡара йот йылы утыҙ етелә башҡа “халыҡ дошмандары” башынан кисергәнде кисерә - атып үлтерелә. Утыҙ һигеҙҙең йәйендә вариҫ булып тыуған Юлдаш улын да хәсрәтле әсе яҙмыш урап үтмәй. Аҡыл-зиһене мираҫ булып атаһынан күскән бала үҙе теләгән һөнәргә өйрәнергә уҡый алмай – баҡһаң, “халыҡ дошманы”ның улына тарихсы булырға ярамай. Дөрөҫлөк ҡасан да булһа, өҫкә сыға. Юлдаштың атаһы Фәҙел Аҡъюлов та партияның XX съезынан һуң ғәйебе булмау сәбәпле аҡлана. Атай йортона ҡайтыу ғаилә өсөн ҡыуаныслы лы, ҡыҙғаныс та ваҡиға. Тормош һәм шәжәрә дауам итә. Улы Азамат менән килене өйгә ҡот өҫтәй. Ҡартатай ҡаҡҡан дүңгәләккә ейәненең бишеге эленә. Ләкин йорт хужаһының ныҡлығын һынау һаман дауам итә. Йәш ғаилә юлда һәләк була.

Уҡытыусы. Ейәне Азат тураһында нимә белдек? Тәүге башҡорт менән һуңғы башҡорт тураһында әйтелгән урынды табығыҙ.

Уҡыусы. Азат олатаһы тәрбиәһендә әҙәпле, рухлы булып үҫеп килә.

Тарихыбыҙ меңәр йыллыҡ тиеп,
Бәғзе берәү күңел йыуатмаҡ.
Ни мәғәнә уҙған мең йыллыҡта
Ялғанмаһа яңы быуаттар?
Боронғо моң менән бергә үрелеп,
Тулһын йортҡа яңы шатлыҡтар.
Тәүге башҡорттарҙы юллау кәрәк -
Тиҡ булмаһын һуңғы башҡорттар! – ти Юлдаш ҡарттың ейәне Азат. Тимәк, ер йөҙөндә кәмеүгә бармайыҡ, һәм бер ҡасан да һуңғы башҡортҡа тороп ҡалмайыҡ! Был фекер уҙған XX быуат башында ”һуңғы башҡорт ҡәбере өҫтөндә һуңғы башҡорт ҡурайын” ишетер көндө көткәндәргә лә яуап булып яңғырай, һәм был фекерҙе тап йәш быуын вәкиленә – үҙ ырыуы шәжәрәһен төҙөүсе Юлдаштың ейәне Азаттан әйттереүе – авторҙың көслө аргументы: шәжәрә (ырыу ағасы) менән оло быуындан бигерәк йәштәр ҡыҙыҡһынһын, йәштәр күңеленә һеңдерелһен был идея, милли идея! Уҡытыусы. Шәжәрә ағасын ер менән, тыуған ер менән бәйләйбеҙ. Ағас тыуған еренә тамырҙарын нык ебәрһә генә көслө һәм мәңге йәшел була. Кеше үҙе лә бары тыуған ерендә генә көслө, нәҫел-нәсәпле, юғалтыуҙарға бирешмәй йәшәй, йәш быуынды үҫтерә. Ә ерһеҙ кем ул кеше?

Уҡыусы. Бер кем дә түгел, ни бары ҡамғаҡ ҡына.
Һатмайыҡ тип ерҙе,
Оран һалдым
Яҙған саҡта “Баҙар балтаһын”.
Киҫәткәйнем егерме йыл элек…
Кем уйлаған башын юйған башҡорт
Был тиклем дә ерҙе һатаһын?!
…Күпме яуҙы еңеп, һаҡлап ҡалған
Еребеҙҙе һаҡлап ҡалмаһаҡ,
Иген сәсер, урыр – баҫыр түгел,
Баҫып торор ерең ҡалмаһа,
Ни мәғәнә беҙҙең орандарҙан,
Ҡулдан китһә изге хоҡуҡтар?
Ер булмаһа, юлың булырмы ни?
Көнөң бөтөр барыр юл юҡта. .

Уҡытыусы. “Әбйәлил” әкиәте әҫәрҙә ниндәй урын алып тора? Ни өсөн ваҡиғалар Әбйәлил ерендә бара?

Уҡыусы. Поэманы уҡығанда үҙенән-үҙе “Әбйәлил еренә бәйлелек ҡайҙан?” тигән һорау тыуа. Ундағы ваҡиғалар ниңә шағирыбыҙҙың тыуған яҡтары, әйтәйек, Туҡ-Соран буйҙарында бармай? Был яҙыусының ижад фантазияһы, әммә улай ғына ла түгел. Шағир үҙенең төп геройына:”Юлдаш дуҫ”, ”Юлдаш фекерҙәш”, ”Юлдаш ҡорҙаш” тип өндәшә һәм уның атаһының Бошман-Ҡыпсаҡ ырыуынан, ә әсәһенең Тамъян ырыуынан булыуын әйтә. Рауил Бикбаев тыуып-үҫкән Туҡсоран буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылы ҡыпсаҡ ырыуы нигеҙләгән боронғо ауылдарынан һанала.

Әкиәттәргә һеңеп ҡалған тарих телгә алына (“Әбйәлил” әкиәте) – Әбйәлил ерлеге, күлдәр иле, бөгөнгө болғауыр заманыбыҙҙа ер һатыу, еребеҙҙе яттарҙан талатыуҙың иң ҡырҡыу төбәге – Әбйәлил. Беҙҙең яратҡан шағирыбыҙ Әбйәлил районынан Дәүләт Йыйылышы депутаты итеп һайланған һәм бығаса күргән-кисергәндәре

шағир йөрәгенә йыйылған бар һағыш,әрнеүҙәрҙе, ере-иле өсөн булған моң-зарҙы йәнә сәсәндәрҙән Әбйәлилдә ишетә йөрөй ул.

Уҡытыусы. Поэманың ҡайһы урындары һеҙҙе айырыуса тетрәндерҙе?

Уҡыусы. Оло шәхес Рауил Бикбаев “Хазина” поэмаһында бер ғаилә тормошон ғына һүрәтләп ҡалмай, йәмғиәт ҡоролошоноң ҡырҡа үҙгәргән осоронда яҙылғанға күрә шағир үҙ осороноң киҫкен проблемаларына мөрәжәғәт итә. “Ни арала ҡалҡа тауҙай йорттар – һаман торлаҡ етмәй халыҡҡа”, ”Үҫмер саҡтан ил тип билен бөккән ҡартлығында асҡа ҡаҡлана. Кемдәр йәшәй икән был йорттарҙа, ала икән ниндәй аҡсаға?” ,”Шаҡ ҡатырлыҡ торлаҡ хаҡтарына!.. Ниндәй хаҡтар!.. Башбаштаҡлыҡ шаша…”, ”Ғүмерендә бында фатир алмаҫ хәләл эш хаҡына тир түккән”, ”Миллиондарҙың хәләл хеҙмәтенән тупланған бит илдең көс-ҡеүәте…Нисә йылдар ҡотора маскарад!

Шул байлыҡты урлап, Рәсәй буйлап миллиардерҙар үрсей!”, ”Бармы беҙҙең һымаҡ таланған ил?-ботарлайҙар бөйөк Ватанды”, ”Ер сигенән килеп, байып ята еребеҙҙә күпме килмешәк”, ”Батша һарайындай был йортоңдоң нигеҙенән түбәһенә тиклем урланған мал – иҫтәр китерлек!”, “Үгеҙҙәй һөҙә һөмһеҙҙәр, ҡанундарҙан ҡапҡа ҡороп, халыҡтың байлығын һөҙә”. Поэма авторҙың ғына түгел, халҡыбыҙҙың йөрәк иңрәүе булып яңғырай. Унда халҡыбыҙ көнкүрешенән алынған дөрөҫлөк ярылып ята.

Тауҙар бейек тә ул –
Кешеләр түбән.
йәки
Күпме бисара әҙәмдең
Төнө бар ҙа көнө юҡ,
Өнө бар ҙа көйө юҡ,
Усағы бар – уты юҡ.
Мәктәп бар ҙа ул –
Балалар юҡ.
Мәсет бар ҙа ул –
Бабайҙар юҡ.

Уҡытыусы. Поэманың художество эшләнешенә, тел-стиль сараларына ниндәй үҙенсәлектәр хас? Ни өсөн Р.Бикбаев халыҡ-ара терминдарҙы, урыҫ лексикаһын файҙалана?

Уҡыусы. Әҙәби әҫәрҙәрҙе уҡығанда йүнләп сит-ят һүҙҙәрҙе осратмайбыҙ тиерлек. Ә “Хазина” поэмаһында бөтөнләй икенсе күренеш. Шағир үҙ фекерен уҡыусыға аныҡ, теүәл еткереү маҡсатында халыҡ-ара терминдарҙы ла, урыҫ лексикаһын да киң файҙалана: миллиардер, доллар, пиар, маскарад, лимузин,супермен, меценат, хрущевка, цитата, закон, гибрид, манзара, кабала, ям һ.б. Был сит телдән ингән һүҙҙәрҙең күбеһен шағир контекста фекерҙе көсәйтеү өсөн ҡуллана. Икенсенән, әҫәрҙең сюжет ағышы, йәғни бөгөнгө тормошобоҙ тәртиптәре хаҡында һүҙ барғанда, Рәсәй мөхитендә йәшәгәндә был терминдарҙан ҡотолоу йәки уларҙы башҡорт һүҙҙәре менән алмаштырыу мөмкин дә түгелдер.

Уҡытыусы. Ҡарайым да күпме милләттәшкә
Күҙем түгел, күңелем шәмәрә.
Һөйләшәләр йәштәр гибрид телдә,
Күпме ырыуҙың зат ағасына
Ялғана бит гибрид шәжәрә.

- Нимә ул гибрид шәжәрә?

Уҡыусы. Гибрид шәжәрә – йәғни яһалма (искусственный), барлыҡҡа килтерелгән, өҫтәп, ялғап, ҡушып ебәрелгән ят бауыр. Борондарҙан килгән башҡорттоң саф генофондында, йәғни зат-ырыу ағасына күпме ят ботаҡтар ялғап, өҫтәп ҡуйыла! Гибрид шәжәрә барлыҡҡа килә. Шағирҙың әсенеп әйткән һүҙҙәре беҙгә, бөгөнгө йәштәргә, аҡыллыға ишара тигән кеүек яңғырай.

Уҡытыусы. Поэманың ҡайһы ерен генә асып уҡыһаң да, һәр һүҙе, һәр һөйләме дөрөҫлөктө ярып-бәреп әйтеп тора. Гибрид шәжәрә тураһында булһынмы, тәүге башҡорт һәм һуңғы башҡорт тураһындамы – ғөмүмән, был поэма һәр башҡорттоң йөрәгендә йөрөргә тейеш. Халыҡ шағирының халыҡ тураһында йөрәк ҡаны менән яҙылған улар. Автор ил, ер-һыу байлыҡтарының таланғанын күреп: “Уян, халҡым!” –тип оран һала. ”Илде талағандың бәгере таш, уғры байҙан сыҡмаҫ меценат” тигән юлдары менән ситтәрҙән өмөт юҡ икәнен иҫкәртә.

Уҡытыусы. Ырыу шәжәрәһендә теркәлгән улы менән киленен юғалтҡан, аҙаҡ ейәненән дә яҙған Юлдаш ҡарт бер үҙе тороп ҡалғас,һуңғы ҡыпсаҡ – һуңғы башҡортҡа ишара түгелме поэманың аҙағы?

Уҡыусы.

Йәшен һөртөп,
Абайланы Юлдаш:
Баҡса тулып алма тумалған.
Был юлдары менән яҙыусы беҙҙе күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәй генә уйланырға саҡыра.

Уҡытыусы. 2010 йылдың май айында Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры артистары менән берлектә З.Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһының I курс студенттары Рауил Бикбаевтың “Хазина” поэмаһы буйынса сәхнәләштерелгән шиғри спектаклде сәхнәгә сығарҙы. Был әҫәр тамашасыны тетрәндерҙе,милләтебеҙҙең үткән һәм киләсәк яҙмышы тураһында уйланырға мәжбүр итте.

Рауил Бикбаевтың һүҙҙәре менән әйткәндә: ”Тормош туҡтауһыҙ яңырған, ҡараштар үҙгәргән, яңы дәүләт закондары барлыҡҡа килгән хәлдә лә, һәр милләттең быуаттар буйы һаҡлана килгән рухи ҡануниәте - әхлаҡ кодексы бар. Фәҙеллек, тоғролоҡ, ярҙамсыллыҡ, быуындар араһындағы бәйләнеш, ғаилә татыулығы, ғәзиз ил-еребеҙҙең берҙәмлеге һәм именлеге өсөн ҡаһарманлыҡ ҡылыу – милләттең мәңгелек рухи ҡиммәттәре һәм төп таяныстары”.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ниндәй генә әҫәренә мөрәжәғәт итһәң дә, уның шиғриәте – тыуған ергә, туған телгә, милләт яҙмышына тоғролоҡ тәрбиәләүсе шиғриәт.

Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

Билдәләр ҡуйыу.

Өйгә эш биреү.

“Ғаиләм шәжәрәһе – ил тарихында” темаһына инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!» ПОЭМАҺЫ

Ғабдулбасырова Гөлназ Зәфир ҡыҙы,
Сақмағош районы Сақмағош гимназияһы

Тема: Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы буйынса дәрес-конференция.

Маҡсат:

1) Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһындағы белемдәрен тәрәнәйтеү;

2) поэмала автор тарафынан күтәрелгән экологик проблемаларҙы асыҡлау;

3) уҡыусыларҙа тыуған илгә ҡарата һоҡланыу, ғорурланыу тойғолары уятыу.

Йыһазландырыу: Электрон дәреслек, презентация, китаптар күргәҙмәһе, шағирҙың ижады буйынса эшләнгән рефераттар, аудиотаҫма.

Дәрес барышы.

I . Уҡытыусының инеш һүҙе.

Дәрестең эпиграфын уҡыу.

I слайд

«Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк – кешелектең ике ҡанаты».

Рауил Бикбаев ошо программаһына тоғро булараҡ, шағир уйҙары халҡының алыҫ үткәндәренә барып әйләнә, киләсәген уйлап хәүефләнә. Шағирҙың тормош юлы, яҙмышы шиғырҙарында, тиҙәр. Ошо һүҙҙәр, минеңсә, нәҡ Рауил Бикбаевҡа ҡарата әйтелгән.

II слайд

«Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы буйынса дәрес-конференциябыҙҙы башлайбыҙ. Һүҙ экскурсоводтарға бирелә.

1–се экскурсовод. (Рауил Бикбаевтың тормош юлы тураһындағы сығыш).

III–IV слайдтар

Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрәфиҡ тигән ауылдаете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған, унан Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡыған. Өфөгә килеп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған, аспирантурала уҡыған. Кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлап, ғалим дәрәжәһе алған. Хәҙерге көндә филология фәндәре докторы, Башҡортостандың яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең танылған шағиры һәм ғалимы. Ул республикабыҙҙың Салауат Юлаев һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялары лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры.

2–се экскурсовод. (Рауил Бикбаев ижадына байҡау яһауы. V – VII слайдтар

Иртәрәк тә түгел, һуңыраҡ та

Тыуҙырған бит заман һине белеп.

Һинең хис һәм аҡыл ҡушылғанға

Һин йәшәгән заман үҙе бөйөк, - тип, яҙғайны Факиһа Туғыҙбаева, Рауил Бикбаевтың ижадын юғары баһалап. Үҙенсәлекле талант эйәһе Рауил Бикбаев әҙәбиәткә ҡыйыу, ышаныслы аҙымдар менән килеп инде. Уның йәш яҙыусы булып йөрөү осоро булманы тиерлек. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә тәүге әҫәрҙәре менән уҡыусыларҙа бик тиҙ танылыу тапты, хөрмәт ҡаҙанды. Шағирҙың ун ике шиғыр китабы бер-бер артлы донъя күрҙе. «Дала офоҡтары» тигән тәүге китабы 1964 йылда, унан «Ҡош юлы», «Автобиография», «Лирика», «Ғүмер уртаһы», «Һөйөнсө», «Ерем балҡышы», «Бураҙналар», «Яҙмышым», «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!», «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай», «Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны» китаптары нәшер ителде. Шағирҙың бер китабынан икенсеһенә күскән һайын, уның ижад офоҡтары киңәйә, тематикаһы төрләнә, йөкмәткеһе тәрәнәйә, байый бара. «Дала офоҡтары»нан һуң яҙған «Ҡош юлы», «Автобиография» һ.б. китаптарында туғандаш милләттәр, бөтә ил, донъя, кешелек яҙмышы, заманалдынакилеп баҫҡан проблемалар, борсолоуҙар, хәүефтәр өҫтәлә.

3) Уҡытыусы һүҙе.

- Эйе, Рауил Бикбаев ижадында тыуған ер, Башҡортостан, Урал, халҡыбыҙҙың тарихи үткәне, хәрби традициялары, тәбиғәтте һаҡлау, туған телгә, тыуған илгә мөхәббәт темалары киң сағылыш таба.

VIII слайд

1–се экскурсовод. Картаға күҙ һалайыҡ әле. Ағиҙел йылғаһының юлын карта ярҙамында күрһәтеү.

2-се экскурсовод. Башҡортостан тәбиғәтенең, саф, көмөш һыулы иң матур Ағиҙелдең Ирәмәлдән Кама һыуына тиклем алға тәгәрәгән юлы буйлапРауил Бикбаев менән бергә сәйәхәткә сығабыҙ.

IX слайд

Аҡ сәфәргә әйҙә, Ағиҙел!
Уралҡайым! Үҙеңә төшәм,
Яңы һырттарыңа ашығам.
Иртәгәгә бағам Ирәмәлдән,
Ил байҡайым Иҙел башынан.

II .Төп өлөш.

Төркөмдәргә һүҙ бирелә. (План буйынса төркөмдәргә бүленгән уҡыусыларҙың сығыштары тыңлана, презентациялары ҡарала).

Беренсе төркөм

X слайд

Проблема. Башҡортостандың матурлыҡтарын, күренекле урындарын күрһәтеү. Уҡыусыларҙа тыуған илгә ҡарата һоҡланыу, ғорурланыу тойғолары уятыу.

Туҡталыш. «Башҡортостан – Рәсәйҙең ынйыһы».

(Уҡыусыларҙың сығышы. Улар үҙ фекерҙәрен поэма юлдары менән дәлилләй. (Был ваҡытта – 16 –сы слайдтар күрһәтелә)

XI слайд

Ағиҙел

…Юл күрһәтеп, алға тәгәрләне
Ағиҙелем – көмөш йомғағым,…
Бар киңлеген барыбер иңләй алмам,
Күпме юл гизһәм дә илемдә.
Һәр шишмәнән һыуҙар уртлайалмам,
Ҡойонаалмам барлыҡ күлендә.

Күпме бөгөлөңдә
Матурлыҡтан күҙем сағылды.
Ҡаяларҙың ап-аҡ таштарына
Йән серҙәшем күреп ҡағылдым.

Бер саҡ Максим Горький үҙе әйткән,
Ағиҙелгә һайран ҡалған килеш:
«Там на Белой, места такой красоты -
Ахнешь, сто раз ахнешь…»
Бөрйән.
Был яҡтарҙа тыуып үсмәһәм дә,
Күңелемә яҡын Бөрйәнем.
Тик күрергә өлгөрмәнең, тиҙәр,
Бөрйән ерҙәренең бар йәмен.
Шүлгән.
Һаумы, Шүлгән!
Тынлығыңды тағы
Бүләбеҙ бит, ғәфү ит инде.
Ҡуйыныңдан сыҡҡан көмөш һыуға
Сайҡайымсы тәүҙә битемде.

Инәйемсе яҡты йөҙөм менән
Инәйҙәр ут яҡҡан таш өйгә.
Таш ҡыуышта күпме йән ҡауышҡан,
Тормош барған.
Усаҡ дөрләгән.

Хайран итмәҫ кемдеташ күргәҙмә,
Ҡайҙарҙа бар бындайтамаша?
Ғәйәр мамонт, таш быуаттағы ат
Ҡарай миңә унбиш мең йылаша.

Шүлгән! Иң боронғо храм булып,
Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

Икенсе төркөм

XII слайд

Проблема. Поэмалағы күтәрелгән экологик проблемаларҙы асыҡлау. Ағиҙел, Шүлгән, Иштуған, Торатауҙың, Стәрле, Белорет ҡалаларының экологик һәләкәттәрен эҙмә-эҙлекле бирелешен һүрәтләү.

Икенсе туҡталыш. «Тәбиғәт тауышы».

XIII слайд

Ҡуйы томанына сумған кеүек

Һағышына ҡалдым сорналып.
Сырмалдылар сәсемә Белореттың
Сәстән нәҙек ҡорос сымдары.

Ағыуланған завод быуаһында
Сәсәй-сәсәй мин дә быуылдым.
Йылғам, йомғаҡ кеүек тағатылып,
Һаман алға әйҙәр юлбулды.

Тормош матурыраҡ булһын тиеп,

Күпме матурлыҡтар ҡырылған.
Ҡот -дәүләте илдең артһын тиеп,
Урман ауған, һыуҙар ҡороған.

Эй, боронғорәссам!
Буяуҙарҙы
Күҙ йәшендә әллә иҙҙеңме?
Һүрәттәрҙе алыҫ ейәндәрең
Мәсхәрәләр тиеп һиҙҙеңме?

Сувенир тип, ватылып алынып бөткән
Меңәр йылдар үҫкән таш һындар.
Ирек ҡуйһаң, улар Шүлгәнташтың
Һәр бер ташын өйгә ташырҙар.

Халыҡтың төрлө замандарҙа күргән бәләләрен иҫкә төшөрөп боҙоп күрһәтеү, халыҡ күңеле хазиналарын юҡҡа сығарыу кеүек күренештәрҙе тасуирлап, кешеләрҙе үткәндәргә вайымһыҙ булмаҫҡа саҡыра Рауил Бикбаев. Был уның гражданлыҡ һыҙаттарын яҡтырта.

- Һайығайып барған Ағиҙелде
Көслө ҡулдар беҙҙең быуасаҡ!
Юҡ бар диңгеҙеңдән былайраҡ
Һыу һаҡлағыс бында буласаҡ!
Юлы өҙөлөп тулай ҡыҙыл балыҡ.
Көнө киҫелеп илай аҡ балыҡ.
Уйламаныҡ быуа төптәренә
Ҡатлам -ҡатлам ағас ятҡанын.
Күпме төрлө ағыу – кислоталар-
Ағиҙелгә нимә тулмаған?!
Ер – һыуҙарға электулыу түгел,
Телдә лә бит улар булмаған

Шағир Ағиҙелдең үткәне менән бөгөнгөһөн сағыштырыу өсөн Р. Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары»на мөрәжәғәт итә.

Орлоҡ ҡына тамыр ергә
Ракеталар тамыр ебәрә.
Шартлауҙар ағыуланған көлдө
Донъя буйлап елдәр елгәрә.
Ағиҙелем! Ерҙең тәнендә һин
Леп-леп типкән теребертамыр.
Ағыуланһа кескәй тамырҙары,
Оло йөрәк тә бит туҡталыр.
Һыу төбөндә батҡан ағас –
Ағыулы бер мина һымаҡ -
Йылғалағы тереклекте
Шартлатасаҡ.

Урман яҙмышы өсөн ҡайғыра автор. Ул уның сәбәптәрен дә асып һала. Бар тәбиғәттең яҙмышын уйлаған һайын һағышлы, борсоулы уйҙар шағир башында ныҡыраҡ ҡайнай. Завод төтөндәре, йылғалағы балыҡтарҙы шартлатыуҙар тураһында уйлана автор. Алға барған һайын шағирҙың тәбиғәт тураһындағы борсолоуҙары көсәйгәндән-көсәйә.

Өсөнсө төркөм

XIV слайд

Проблема. Поэмала гражданлыҡ бурысын юғары тоткан шағир образын асыҡлау. Рауил Бикбаевтың поэма юлдары аша йәш быуынға, кешеләргә мөрәжәғәтен һүрәтләү.

Өсөнсө туҡталыш. «Республикабыҙҙың киләсәге үҙебеҙҙең ҡулда».

XV слайд

Иҙел менән бергә шаңҡыным мин,
Һағайҙылар ҡоштар, кейектәр,
Һарғайҙылар муйыл, еректәр…
Намыҫын юя бәндә нилектән?
Шулмы кәрәк һиңә, кеше?
Ошоғамы ирешер өсөн
Барлыҡ эшең?
Эй кешелек! Ниндәй мәл еткән…
Тау һынлы тау ғәйеп булған өсөн
Тыуыртарихкемде ғәйепләр?
Ниндәй көнгә килеп тарыныҡ беҙ,
Яҙмышыбыҙ, килсе иҫеңә!
Ил – йортоноң иртәгәһе ҡото
Түгелме ни ошо малайҙар?
Замандашым!
Шүлгән һүрәттәрен

Ярай әле күреп өлгөрҙөк.
Беҙҙең күҙ алдында күпмеләрен
Мәрхәмәтһеҙ ҡулдар емерҙе.
Тамсы - даръя яһай,
Иҙел – һылыу
Тамсы-тамсы сәселеп һулырмы?
Ағиҙелең – илең булмағанда,
Айың-көнөң имен булырмы?
Хаталарҙан хәҙер арынмаһаҡ,
Килер йылдар рәхмәт әйтмәҫтәр.

III. Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

XVI слайд

1) Һеҙ ошо проблемаларҙан ҡотолоу юлын нимәлә күрәһегеҙ?

2) Автор ошо афәттәрҙән ҡотолоу юлын нимәлә күрә?

3) Беҙ ҡарап үткән экологикпроблемалар башҡорт халҡына ғына хаспроблемалармы?

Шулай итеп, Рауил Бикбаевтың шиғриәте күп ҡырлы, төрлө йүнәлешле, тәрән мәғәнәле. Поэмала автор беҙгә нескә күңелле шағир-лирик та, киң эрудициялы шағир-философ та, ялҡынлы оран һүҙе менән йөрәктәрҙе елкендерер новатор итеп тә асыла.

IV. Дәрес-конференцияның резолюцияһын ҡабул итеү.

XVIIслайд

1. 5 –се кластар өсөн Рауил Бикбаев ижадына бағышланған монтаж әҙерләргә.
2. Газета һәм журналдарҙан шағир тураһында сыҡҡан материалдарҙы туплаппапка яһау, альбом сығарыу.

Ошо поэмаға ҡарашығыҙ тураһында Рауил Бикбаевҡа хат яҙыу.

БАШҠОРТОСТАНДЫҢ ХАЛЫҠ ШАҒИРЫ РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ТОРМОШО ҺӘМ ИЖАДЫ

Хажиәхмәтова Рифа Тимерйән ҡыҙы,
Дүртөйлө ҡалаһының 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1) Рауил Бикбаевтың тормош юлы менән таныштырырға;

2) уҡыусыларҙың ижади һәләтен асырға, әҫәрҙәрҙә күтәрелгән темалар, проблемаларҙы асып бирергә өйрәтергә, шағирҙы ҡижадына ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт уятырға;

3) юғары әхлаҡ сифаттары, миллирух, тыуған ергә, илгә, туған әҙәбиәткә һөйөүтәр биәләргә.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты йә ижады тураһында плакат, әсәһенең , туғандарының, шағирҙың ижад таш дуҫтары менән төшкән фотографияларҙан уҡыусыларҙың Р.Бикбаев әҫәрҙәре буйынса төшөрөлгән һүрәттәренән эшләнгән стенд (коллаж), шағирҙың китаптары күргәҙмәһе, проектор, экран, плакаттар:

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Ҡүңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек,
Был донъяға тура ҡарарлыҡ! (“Башҡортостан бында башлана”)

Юлдарыбыҙ, беләм, еңел булмаҫ,
Юлды быуыр ташҡын, булыр боҙ.
Юлыбыҙҙан барыбер тайпылмабыҙ,
Беҙ булғанбыҙ, барбыҙ, булырбыҙ!

Кисәгә әҙерлек.

Уҡыусыларҙы 4 төркөмгә бүлеп, Рауил Бикбаевтың 4 китабы буйынса үҙҙәренә оҡшаған әҫәргә ҡыҫҡаса анализ яһарға, иптәштәренә яттан тасуири һөйләргә, әҫәрҙәр буйынса һүрәттәр төшөрөргә тәҡдим итергә.

1. “Дала офоҡтары”, 1964
2. “Автобиография”, 1969
3. “Ерем балҡышы”, 1982
4. “Һыуһынам, һыуҙар бирегеҙ”, 1991

Һәр төркөм айырым өҫтәл артына ултыра. Өҫтәлдәрҙә Р. Бикбаевтың китаптары. Китаптағы әҫәрҙәр буйынса төшөрөлгән һүрәттәр.

Китаптарҙы төркөмдәргә бүлеп өйрәнергә бирелгәндән һуң бераҙ ваҡыт үткәс һәр төркөм менән айырым осрашып, уҡыусыларға кәңәштәр, яҡынса йүнәлеш бирелә. Әҙәби кисәлә һәр уҡыусы ҡатнашырға йәки кисәне ошторорға, үткәрергә ярҙам итергә тейеш. Берәүҙәр шиғыр, поэмаларҙан өҙөк ятлай, кемдәрҙер һүрәт төшөрә, кемдәрҙер стенд әҙерләй, презентация эшләргә ярҙам итә.

Кисә барышы.

Уҡытыусы: Хәйерле кис, хөрмәтле коллегалар, ҡунаҡтар, уҡыусылар! Бөгөнгө кисәлә Башҡортостандың халыҡ шағиры, Республиканың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт, Ғ.Сәләм һәм Р.Ғарипов исемендәге премиялары лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры, филологияфәндәредокторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, яҙыусылар союзыидараһы рәйесе Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың тормошо һәм ижадына байҡау яһаясаҡбыҙ.

Алып барыусы ҡыҙ. (шағирҙың биографияһын һөйләгән дәпроекторҙа параллель рәүештә фото һүрәттәр күрһәтелә бара)

Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. 1953 йылда Ғәбдрафиҡ ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Аҡ-Булаҡта педучилищела, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетын һәм аспирантура тамамлай. Башҡорт поэзияһының эволюцияһы буйынса кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертацияларын яҡлай.

1995 йылдан алып Башҡортостан яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бер нисә орден- миҙалдар кавалеры.

Экранда

Рауил Бикбаевтын фотоһүрәте	Бала-сағы, үҫмер, йәшлек йылдары. Тыуған ере-Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылы
Ҡайҙа уҡыған Ғәбдрафиҡ ауылы мәктәбе Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһы (1953-1956) БДУ, филология факультеты (1957-1962) Аспирантура (1962-1965)	Китаптары Дала офоҡтары (1964) Ҡош юлы (1967) Автобиография (1969) Лирика (1971) Ғүмер уртаһы (1976) Һөйөнсө (1979) Ерем балҡышы (1982) Бураҙналар (1985) Яҙмышым (1988) Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ(1991) Барыһы ла беҙҙең намыҫта. Халҡыма хат (1991) Ай күргәндәй, ҡояш алғандай (1998) Башҡорт шиғриәте антологияһы (2001) Йөҙ ҙә бер хәҙис, өс китапта (2001-2003) Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны (2003) Рәми. Шағир тураһында китап (2007)
Наградалары: Башҡортостан комсомолының Ғәлимов Сәләм исеменә лайыҡ (1970) Республиканың С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы (1989) Республиканың Рәми Ғарипов, Зәйнәп Биишева исемендәге премиялар лауреаты, Халыҡтар дуҫлығы, С. Юлаев, Башҡортостан республикаһы алдында баһалы хеҙмәт ордендары, Башҡортостандың халыҡ шағиры (1992)	

Алып барыусы ҡыҙ. Рауил Бикбаев тыуған ауылы яҙмышы тураһында бына нимә тип яҙа (экранда Ырым бурдалалары...)

Егет. “Мин Ырым бур өлкәһе Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуҙым. Ауылым оло һуғыш йылдарында ҡара ҡағыҙҙар алып бик миктәп, етемһерәп ҡалды. 1945 йылдың майында атайым үлеп ҡалды. Биш бала менән утыҙ өс йәшлек әсәйем ҡартатайымдың кәңәше һәм ярҙамы буйынса ауылдағы ҡуш өйҙөң яртыһын ҡутарып алып, үҙенең тыуған ауылы күрше Ғабдрафиҡҡа күсереп һалдыртырға мәжбүр булды.

Миңә, һигеҙ йәшлек балаға, тыуған ауылымды, уйнаған тиҫтерҙәремде ташлап икенсе ауылға күсеүҙәре еңел булманы. Эсем бошҡанда һағынып тыуған ауылымды, ете саҡрымға ялан тәпәй ҡасып ҡайтҡылаған саҡтарымда булды...”

Ҡыҙ. “Тыуған далаларымдағы киңлекте, һәр һыртҡа күтәрелгәс, бар тарафтарға саҡырып торған ҡабатланмаҫ офоҡтарҙы миңә башҡаса бер ҡайҙала күрергә тура килмәне. Бында ҡарашың бергенә ҡаршылыҡҡала барып төртөлмәй, сәхрә-яландарҙык инәнеп байҡай. Даламды һағынғанда мин барыһынан да бигерәк шул киңлектәрҙе һағынам. Ысынлапта, далаһыҙ күҙем тала. Елдәрҙә бит бында тау-таш ярығынан, ағас араһынан йәшенеп-босоноп өрмәй, иҫһә, бер юлы бардаланы тултырып, ҡоласын киреп иҫә, дауыл-бурандары килһә, бардаланы айҡап-иңләп килә.”

Р.Бикбаев һүҙҙәренә “Өфө-Ырымбур юлдары” йыры яңғырай. (Фән Вәлиәхмәтов башҡарыуында)

Өфө-Ырымбур юлдары,
Эй, йәшлегем йылдары,
Шул юлдарҙы үткән һайын
Бер ашҡынып, бер моңайып,
Сыңлай күңелем ҡылдары,
Сыңлай күңелем ҡылдары.

Ырымбур-Өфө араһы
Өс йөҙ етмеш саҡрым.
Шул юлдарҙың һәр саҡрымы
Тәүге һөйөү йыры кеүек
Гел-гел тора саҡырып,
Гел-гел тора саҡырып.

Алып барыусы ҡыҙ.

Ысынлап та, Рауил Бикбаевтың тәүге йыйынтығының “Дала офоҡтары” тип аталыуы юҡҡағына түгел.

Егет. Рауил Бикбаевтың әҫәрҙәрендә тыуған еребеҙ, илебеҙ, телебеҙ яҙмышы,

Халҡыбыҙҙың тарихы һәм иреклек өсөн көрәше быуындар бәйләнеше, Башҡортостандың кисәге, бөгөнгө тормошо, хәҙерге быуын кешеләренең уй-тойғолары сағылыш таба.

Алып барыусы ҡыҙ. Ә хәҙер һүҙ беренсе төркөмгә бирелә.

«Дала офоҡтары» төркөмө.

- Беҙҙең төркөм Рауил Бикбаевтың «Дала офоҡтары» китабын өйрәнде. 1964 йылда Башҡортостан китап нәшриәтендә сыҡҡан тәүге китабында шағирҙың бершәлкем шиғырҙары һәм «Вокзал» исемле поэмаһы ингән. Был китапты уҡығас, шағир тыуып үҫкән яҡтың яландар иркенлеген, һауаларының йәмен-тәмен тойорға мөмкин. Йыйынтыҡта әле 18-19 йәшен әсә тыуған ауылында үҫкән, ситкә уҡырға китһәлә йәйен, көҙөн ауылына йышҡайтҡан, кирелепбесәндәренсапҡан, баҫыуэштәрендәйөрөгән, Туҡ соран туғайҙарын ҡыҙырған сәктарын, әсәһен, тыуған-тыумасалары хаҡында уйланыуҙары, элекке сиҙәм ерҙәрҙе хәҙер иген баҫыуҙарына әйләндереүселәр хаҡында уйлана. Шағир яланда яҡҡан усаҡтар янында ҡалғаниләҫ йәшлеген, тәүге мөхәббәт хистәрен иҫенә төшөрә.

Миңә «Дала офоҡтары», «Әсәй, мине таңда уят әле», «Балтырған» шиғырҙары оҡшаны.

«Дала офоҡтары» шиғырын тасуири уҡыу

«Әсәй, мине таңда уят әле” шиғырын тасуири уҡыу

«Балтырған»шиғырын тасуири уҡыу

Шиғри йыйынтыҡта шулай уҡ шағирҙың беренсе поэмаһы “Вокзал” урын алған. Шағир вокзал образы аша йәмғиәтебеҙҙең, кешеләрҙең үткәнен һәм бөгөнгөһөн күрһәтә.

“Вокзал” поэмаһынан өҙөк уҡыла.

Әҫәр буйынса әңгәмә, фекер алышыуҙар үткәрелә.

“Автобиография”төркөмө

1969 йылда баҫылып сыҡҡан “Автобиография” китабында шағирҙың шиғырҙары ғына тупланған. Баш һүҙендә былай тиелгән “Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш –иленең уҙғанына, уның бөгөнгө һөнә һәм тыуар киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк – кешелектең ике ҡанаты. Мин баш өҫтөмдәге ҡояшҡа ғына ҡыҙынып йәшәмәйем. Шәфәҡ моң һоулығыла,

Һыҙылып ҡына атҡан таңдың яҡтылығы ла миңә берҙәй ҡәҙерле” – тигән ул.

Шағир халыҡтың героик үткәне, бәхетле бөгөнгөһө, яҡты киләсәге менән бәйле халыҡ биографияһын, милләт яҙмышын күрһәтер өсөн, ғәҙәттә, үҙенең тормошона бәйле күренеште ала ла шуның нигеҙендә киң әҙәби – тарих дөйөмләштереүҙәргә ирешә. Әйтәйек, “Уҡ”, “Ҡурай”, “Үҙән буйында үлгән ҡоҙғон”, “Имән”, “Һиҙиәтбабай”, “Революция” һ.б. шиғырҙар аша шағир үҙенеңдә, тыуған халҡынында күңел биографияһы күҙ алдына килә, үҙе хаҡындағы һүҙ туған халҡы хаҡындағы һүҙгә күсеп китә.

Шағир ижадында Бөйөк Ватан темаһы ҙур урынды алып тора. Бала саҡ осоро һуғыш йылдарына тап килгән Рауилға атай йылыһы татырға тура килмәй. Ҡәһәрле һуғыш атаһын тартып ала. “Аҙашҡан бала саҡ”, “Апайҙарым”, “Сал сәс” шиғырҙарында Рауил Бикбаев үҙ быуынының һуғыш хәтирәләре менән иләҫләнгән күңел кисерештәрен сағылдыра. Был балалыҡтың вайымһыҙ сәктарын, мәҙәкле уйындарын һағыныу түгел, ә бала күңеленә һуғыш һалып киткән уңалмаҫ яраларҙан һыҙланыу, шағирҙың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә , “туптар тауышынан һиҫкәнеп ташлап киткән бала саҡты” юҡһыныу.

“Сал сәс” шиғырындағы яуҙан улын көтөп алйығаң әсәгә һоҡланмау мөмкин түгел (шиғыр тасуири уҡыла).

“Ерем балҡышы”төркөмө

1982 йылда сыҡҡан “Ерем балҡышы” китабы шиғырҙарҙан ғына төҙөлгән, уға бер поэма ла инмәгән.

Аҡ ҡағыҙ битенән...” тигән инеш шиғыр менән асыла китап

“Аҡ ҡағыҙ битенән элек

Аҡ ҡарға төшә йырым.

Аҡландарҙа еләк булып,

Һутланып бешә йырым.”

“Таҫтамал” шиғыры тасуири уҡыла

Әҫәрҙәрендә автор оло әһәмиәткә эйә булған көнүҙәк мәсьәләләр хаҡында тәрән фекер йөрөтә. Китапта шулай уҡ милли батырыбыҙ С.Юлаевҡа арналған “Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа”, “Мәмерйә”, “Ҡурай һәм ҡауырһын”, “Һаумы Салауат”, “Салауаттың эҙҙәренән”, “Салауаттың саңғы эҙҙәре”, “Йыр”, “Яралы Салауаттың яуҙан ҡайтҡан уйҙары” тигән шиғырҙары бар.

“Һаумы, Салауат!” шиғыры тасуири уҡыла

Халҡыбыҙ ниндәй генә ауыр ваҡыттарҙа йәшәүенә ҡарамай, ниҙәр генә кисереүенә ҡарамаҫтан, киләсәккә яҡты өмөттәр менән йәшәүе, уның ғорур, саф күңелле булып ҡала белеүе, рух ныҡлығын һаҡларға ынтылышы “Йондоҙло йорт”, “Туғыҙынсы май”, “Фронтовиктар табынында”, “Еңеү көндө тынлыҡ минутында” шиғырҙарында сағылыш тапҡан. Был шиғырҙар беҙҙең күңелдә һуғыш батырҙарының ҡаһарманлығы менән ғорурланыу хистәре уята.

“Йондоҙло йорт” шиғырында шағир үҙенең бала сағын иҫкә төшөрөп “һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар, эленеп торған һарғылт һүрәттәр беҙҙе сабырлыҡҡа өйрәттә” тип иҫкә ала. Йондоҙло өйҙәргә үҙенең ихтирамын, оло хөрмәтен белдереп, уның нигеҙенә баш эйә (шиғыр тасуири уҡыла).

“Туғыҙынсы май” шиғырында байрам шатлығынан бигерәк һуғыш күрһәткән ғазаптар, яуҙа башын һалған миллионлаған ҡорбандар, еңеүҙе яҡынлаштырыу өсөн көн-төн хеҙмәт иткән ҡарт-ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға яҙмышы күңелдә һыҙландыра.

“Туғыҙынсы май” шиғыры тасуири уҡыла

«Һыуһаным–һыуҙарбирегеҙ»төркөмө

- Беҙҙең төркөм «Һыуһаным–һыуҙар бирегеҙ» поэмаһын өйрәнде. Был әҫәр 1991 йылда баҫылып сыға. Шағир был зур күләмле поэмаһында иң мөһим мәсьәләләрҙе – Ер, һыу, тел, тәбиғәт, халыҡ яҙмышын һаҡлау проблемаларын күтәрә. Поэманың тәүге юлдарында Башҡортостан тәбиғәтенең, саф, көмөш һыулыиң матур Ағиҙелдең Ирәмәлдән Кама һыуына тиклем алға тәгәрәгән юлын тасуирлай. Улер матурлығынданлау менән генә сикләнмәй. Завод төтөндәре, йылғалағы балыҡтарҙы шартлатыуҙар, яр буйында уйнаған балалаларҙың киләсәк яҙмышы хаҡында уйланып, тәбиғәт алдында ғәфү үтенеү теләге тыуа. «Ағиҙелдең көнө–илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө–ил йөҙө», - тип һығымта яһай.

«Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ» поэмаһынан өҙөктәр уҡыла. (Экранда – Ағиҙел йылғаһы. Әҫәр буйынса әңгәмә, фикер алышыуҙар үткәрелә).

Алып барыусы ҡыҙ. Республикабыҙҙың халыҡ шағиры, атҡаҙанған фән эшмәкәре Р. Бикбаевтың күп жанрлы, теле-стиле, художестволы эшләнеше яғынан юғары кимәлдә яҙылған шиғырҙары, ғилми хеҙмәттәре, юл яҙмалары, интервью, публицистик мәҡәләләре, сығыштары әҙәбиәтебеҙҙең бай хазинаһын тәшкил итә.

Алып барыусы егет. Р. Бикбаев үҙенең «Яҙмышым» исемле йыйынтығында ижадына булған ҡарашын, Уның төп йүнәлешен, маҡсатын белдереп:

Төп-төҙ түгел юлым. Оҡшаған ул
Урау-урау аҡҡан йылға аға.
Әле тау-таш ярып күбекләнәм,
Әле далаларҙа тынағам,
Әле шаршы булып йырлап еләм,
Әле саҡ-саҡ кибеп бөтмәй бөләм,
Ярҙарыңдан әле артылам,
Тик барыбер үҙем булып ҡалам,
Кешеләрем, һеҙгә тартылам, -
Тип яҙғайны.

Алып барыусы ҡыҙ. Шағир халыҡтың тарихи үткәндәренә, бөгөнгөһенә тоғролоғон белдереп кенә ҡалмай, халыҡтың ихлас ҡарашын, илгәҙәк һүҙен үҙе өсөн дауа итеп ҡарай, киләсәккә ҡараш ташлап:

Үкенмәмен шул саҡ бар ғүмеремде
Бер таң итеп кенә аттырһам,
Ялғанлыҡты саҡ-саҡ кәметә алһам,
Хәҡиҡәтте саҡ-саҡ арттырһам,- тип яҙҙы. Шағирҙың илгә күрһәткән бөйөк хеҙмәте илдең бөйөк хөрмәте булып үҙенә ҡайта. Халыҡ бәхете, ил яҙмышы, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәр хаҡында изге эштәр һәм яҡты уйҙар менән янып-ярһып йәшәгән Рауил Бикбаев шәхесе һәр яҡлап оло ихтирамға лайыҡ.

Әҙәбиәте беҙҙе юғары кимәлгә күтәргән шағирыбыҙҙың талантын юғары баһалап, Фаҡиһа Туғыҙбаева Рауилгә бағышланған шиғырында:

Егет. Иртәрәктә түгел, һуңғаракта, -
Тыуҙырған бит заман һине белеп,
Һинең хис һәм аҡыл ҡушылғанға
Һин йәшәгән заман үҙе бөйөк.
Иртәрәк тә түгел, һуңғарақ та, -
Һин еңеүсе көрәш майҙанында,
Һиңә ҡарап илде таныйҙар бит,
Йөрөһең дә, шағир, ҡайҙағына.
Берсә балдар, берсә ҡандар тама
Остарынан осло ҡәләмдең,
Иртәрәк тә түгел, һуңғарақ та
Шағир булып мәңге ҡала белдең.
Иртәрәк тә түгел, һуңғарақ та, -
Ҡаһарман ир илгә бөгөн кәрәк.
Һинең хисең, һинең аҡыл менән
Бөйөк халҡым тағы бөйөгөрәк.

1-се плакат һүҙҙәренә иғтибар итеү.

Кисәлә шиғырҙар араһында Р. Бикбаев һүҙҙәренә йырҙар тыңлана.

Алып барыусы ҡыҙ. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижадына арналған кисәбеҙ тамам. Һау булығыҙ!

РАУИЛ БИКБАЕВ “ДАЛАМДЫ ҺАҒЫНҒАНДА”

Фаршатова Әлфиә Әнүәр ҡыҙы,
Яңауыл ҡалаһы И.Ш. Мәксинов исемендәге гимназия

Тема: Кластан тыш уҡыу дәресе. Рауил Бикбаев “Даламды һағынғанда”

Уҡытыусы эшмәкәрлегенең маҡсаты: уҡыусыларҙы башҡорт телендә аралашырға, белем алырға, үтелгәндәргә таянып Ватан төшөнсәһе, уны яҡлау, һаҡлау кәрәклеген уҡыусыларға төшөндөрөү;

Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының ижады менән ҡыҙыҡһыныу уятыу; интеллектуаль шәхес булып үҫеүен тәьмин итеү.

Дәрес тибы: бәйләнешле телмәр үҫтереү дәресе.

Көтөлгән шәхси, метапредмет һәм предмет һөҙөмтәләре:

Шәхси үҫеш кимәле: белем алыу өсөн төрлө сығанаҡтар ҡулланыу;

ижади-эҙләнеү эше менән шөғөлләнеү;

телмәр мәҙәниәтен камиллаштырыуға ынтылышты үҫтереү.

Метапредмет кимәле: төрлө формала бирелгән мәғлүмәтте ҡуллана белеү, алған белемде системалаштырыу;

башҡаларҙы тыңлау, үҙ фекереңде яҡлай белеү;

башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары һәм ҡыҙҙары тураһында белемде тулыландырыу;

үҙ-үҙеңә баһа биреүҙе тормошҡа ашырыуҙы дауам итеү.

Предмет үҙләштереү кимәле: тасуири, етеҙ, шыма уҡыуға өлгәшеү;

текст, китап менән эш итеү алымдарын өйрәнеүҙе дауам итеү, кәрәкле материал туплау; бәйләнешле телмәр үҫтереү; үтелгән орфограмма ҡағиҙәләрен ҡабатлау.

Тема	Кластан тыш уҡыу. Рауил Бикбаев “Даламды һағынғанда”	
Маҡсат	Р.Бикбаевтың ижады менән ҡыҫҡаса таныштырыу. Тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү. Һөйләм телмәрен, фекерләү һәләтен, анализлау, синтезлау күнекмәләрен үҫтереү. Баланы шәхес итеп үҫтереү, кешелек сифаттары тәрбиәләү. Тыуған ергә мөхәббәт тәрбиәләү. Тыуған ерҙең ҡәҙерен белергә,уның менән ғорурлана белеү хистәрен тәрбиәләү.	
Планлаштырыл-ған һөҙөмтә	Шиғырҙың йөкмәткеһен аңлау, үҙ телеңде һәм илеңде хөрмәт итеү,аралашыуҙы мәҙәниәттең әһәмиәтле бер өлөшө итеп таныу	
Предмет-ара бәйләнеш	Рус теле, Башҡортостан географияһы	
Ресурстар: - төп - өҫтәмә	Хажин В.И., Вилданов Ә.Х. 5-се класс өсөн дәреслек Компьютер, экран, презентация, Р.Бикбаев портреты, “Даламды һағынғанда “ шиғыры	
Эште ойоштороу төрҙәре	Фронталь, индивидуаль, парлапэшләү.	
Үткәреү технологияһы	һәр этаптың өйрәтеү һәм үҫтереү биремдәре. Уҡытыусы эшмәкәрлеге.	Уҡыусылар эшмәкәрлеге
I этап. Ойоштороу. Маҡсат: белем алыуҙы мотивлаштырыу.	I этап. Ойоштороу. 2-се слайд а) -Хәйерле көн,алһыу таңдарға! Хәйерле көн, һайрар ҡоштарға! Хәйерле көн, зәңгәр күктәргә! Хәйерле көн, яҡын дуҫтарға! б)һәр әҙәби уҡыу дәресендә ҡуллана торған ҡағиҙәләрҙе иҫкә төшөрөгөҙ әле.	I этап. Ойоштороу. 1. Тулы һөйләмдәр менән дөрөҫ итеп яуап бир! 2. Иғтибар менән тыңла! 3. Кеше фекерен ҡабатлама, үҙ фекереңде әйт!
IIэтап. Актуалләштереү. Маҡсат: алдағы дәрестә алған белемдәрҙе иҫкә төшөрөү	II этап. Актуалләштереү. Н. Әминеваның “Тыуған ер” шиғырының ике юлын уҡытыусы яттан һөйләй. - Балалар, был шиғыр юлдары һеҙгә танышмы? Кем дауам итә ала?	II этап. Актуалләштереү. - Беҙ был шиғырҙы үткән дәрестә өйрәнгәйнек. (Уҡыусылар шиғырҙы һөйләгәндә слайдта Башҡортостан тәбиғәте тураһында рәсемдәр күрһәтелә.) 3-8-се слайдтар -Тасуири уҡыу күнегеүҙәре. *(Шәхси, рефлексив, универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу). Үҙбаһа.*
III этап. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.	III этап. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу. 1. - Балалар, һеҙ тыуған ил тигән төшөнсәне нисек аңлайһығыҙ? - Әйтегеҙ әле, тыуған ил ҡайҙан башлана? “Фекерҙәр кәрзине” алымы -Уҡыусылар,тыуған ил темаһына ҡараған һүҙҙәрҙе ошо кәрзингә йыяйыҡ. 2. – Һеҙгә атай-әсәйегеҙ, туғандарығыҙ ҡәҙерлеме? 3. Шулай булғас, тыуған илебеҙ, еребеҙ ҙә ҡәҙерле, сөнки беҙ шунда тыуғанбыҙ, беҙҙең ата-әсәйҙәребеҙ, олатай-өләсәйҙәребеҙ ҙә шунда тыуған. Шуға күрә беҙ балалар, тыуған ерҙең ышаныслы улдары, ҡыҙҙары булып үҫергә тейеш. Тыуған илдең, тыуған ерҙең ҡәҙерен белеп, уға кәрәкле кешеләр булып үҫегеҙ.	III этап. 1.– Дөрөҫ, балалар. Тыуған ил ул-тыуған өй, тыуған мәктәп, тыуған ҡала, һин беренсе тәпәй баҫып атлап киткән ер ул. Бына шунан башлана тыуған ил. “Фекерҙәр кәрзине” алымы Таҡтаға кәрзин рәсеме эленә. Һәр бер уҡыусы сығып был темаға ярашлы һүҙҙәр яҙа. 2. Уҡыусыларҙың ике-өсө туғандары тураһында һөйләй. 4. Үтелгәндәргә таянып уҡыусылар менән әңгәмәләшеү. 5. Бер уҡыусы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштыра. (10-11-се слайд)

	4.-Халҡыбыҙҙың данлыҡлы улдары күп. Һеҙ арҙаҡлы шәхестәрҙән кемдәрҙе беләһегеҙ? 5.Шуларҙың береһе-Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа быйыл - 75 йәш.	
	-Ә хәҙер экрандағы танышасаҡ шиғырҙың исеменә иғтибар итегеҙ. Нисек уйлайһығыҙ: ул нимә тураһында икән? Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы. Даламды һағынғанда. Һауаһынан бер һуларға ине, Һыуҙарынан бер уртларға ине, Туғайында бер туларға ине, Ергә ятып бер иларға ине. Еләген бер өҙөп ҡабырға ла, Саптарында тик бер сабырға ла, Йәйрәп ятҡан далам ҡуйынына Таңғы ысыҡ булып тамырға ла, Бер моң булып уйылып ҡалырға.	- Был шиғыр тыуған ер тураһында булырға тейеш. (Танып-белеү универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу).
IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. Маҡсат: таныш булмаған яңы һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен иҫтә ҡалдырыу.	IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. Уйылып ҡалырға-хәтерҙә ҡалырға,остаться в памяти Саптар-ат Туларға-метаться,брыкаться, бросаться Ошо һүҙҙәрҙе һеҙ телмәрегеҙҙә ҡулланаһығызмы? Дәфтәрҙәрҙә эш. 1) Число,теманы яҙыу. 2) Ауыр орфограммалы һүҙҙәрҙе табыу.	IV этап. Һүҙлек өҫтөндә эш. 1. Һүҙҙәрҙе уҡыу. Һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен тормош менән бәйләп асыҡлау. (Танып-белеү универсальуҡытыуэшсәнлеген формалаштырыу). 2)Һауаһын,ергә, еләген, йәйрәп, ҡуйынына, уйылып. Был һүҙҙәрҙең өн моделен һыҙыу. (14-се слайд) Үҙбаһа. “Райтинг” алымы. (Уҡыусы үҙенең эшенә баһа ҡуя.Уҡытыусы кәсер һаны аша үҙ баһаһын ҡуя.) (Үҙ хеҙмәтеңде баһаларға өйрәнеү)
Физминут	Физминут Беҙҙең Башҡортостанда бына ошондай тауҙар, бына ошондай урмандар, бына ошондай йылғалар, бына ошондай ҡырҙар, ҡырҙарында сәскәләр барыһы ла матурҙар.	Физминут
V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу. Маҡсат: уҡыу күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалаштырыу.	V этап. Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу.	V этап.Уҡыу мәсьәләһен этаплап сисеү: шиғырҙы уҡыу. Балалар гөжләп уҡыйҙар. Айырым балаларҙан уҡытыу. Шиғырҙың иң оҡшаған ерен генә уҡыу. “Мимика гимнастикаһы” алымы. (15-се слайд) Төрлө кәйеф менән уҡыу.

		 (уҡыуҙың төрлө төрҙәрен ҡулланырға мөмкин) (Коммуникатив, шәхси универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу.)
VI этап. Әҫәрҙе аңлауҙарын тикшереү. Маҡсат: телмәр күнекмәләрен үҫтереү өҫтөндә эшләүҙе формалаштырыу.	VII этап.Әҫәргә анализ яһау. Әҫәрҙәге төп ҡатнашыусыны табығыҙ. -Шиғырҙың 1-се строфаһын уҡығыҙ. - Ни өсөн автор бер иларға ине тип яҙа?	VII этап.Әҫәргә анализ яһау. - Автор,лирик герой.
	Был юлдарҙы 1 һөйләм менән нисек әйтеп була? Шиғырҙың һуңғы строфаларын шул тәртиптә анализлау. (Парҙарҙа эш)	-Тыуған яғына ҡайтыу –шикһеҙ шатлыҡ килтерә.
	Халыҡта “Тыуған ерҙең әреме лә хуш еҫлө” тигән мәҡәл йөрөй. (Мәҡәлде эш дәфтәренә яҙыу) Ошо беҙ уҡыған шиғыр менән был әйтемде бәйләп буламы ?	- Була. Һәр кемгә үҙ тыуған яғы ғәзиз. Өйҙә әҙерләп килгән мәҡәлдәрен уҡып ишеттерәләр. (15-16-сы слайдтар) Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ер артыҡ. Үҙ илем-алтын бишек. Иленән айырылған-ҡанаты ҡайырылған. Тыуған ерҙәй ер булмаҫ, тыуған илдәй ил булмаҫ. Илһеҙ кеше-йырһыҙ һандуғас. (Коммуникатив, ижади эҙләнеү,танып-белеү универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу.)
	Уҡыусылар,теләүселәргә презентация эшләп килергә ҡушылғайны. Хәҙер Никитаның “Башҡортостан – тыуған ерем” тип исемләнгән презентацияһын ҡарарбыҙ.	1) Презентация ҡарау. 2) Һөйләмдәрҙе рус теленә тәржемә итеү.(17-се слайд) Башҡортостан! Һин икмәкле тупраҡ, Йәшел урман,болон, тау,дала. Йәнһеҙгә–йән, йәмһеҙгә-йәм биргән, Һин ут һәм һыу, һауа һәм дауа. (Н.Нәжми) (Предмет-ара бәйләнеш) (Коммуникатив универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу.)
Йомғаҡлау	Шиғырҙан өҙөктө хор менән уҡыу. Күсереп яҙыу. (18-се слайд) Тыуған илдә- барыбыҙ бер туған, Бик ҡәҙерле беҙгә ул шуға. Тыуған ил ул була бер генә, Тыуған илдең ҡәҙерен бел генә. (З.Туфайлова)	Мин нимә белдем? Нисек белдем? “Телеграмма”алымы. Парҙар менән эш. Ҡыҫҡа һөйләм менән иптәшеңә темаға ярашлы теләк яҙыу.
X этап. Өйгә эш биреү.	X этап. Өйгә эш биреү.	X этап. Үҙбаһа. Кемдәр был дәрестә “5”гә яуап бирҙем тип уйлай? Кем бер аҙ тырышырға кәрәк тип уйлай?

	- Һеҙ өйҙә ниндәй эш эшләрһегеҙ?	Өйгә эш биреү. 1. Шиғырҙы тасуири уҡырға. 2. “Нимә ул Ватан?” тигән темаға проект эше башларға мөмкин. 3. Тыуған яҡ тураһында һүрәт төшөрөргә мөмкин. 4. Бүтән шағирҙарҙың тыуған яҡ тураһында шиғырҙары бармы икән? Шуларҙы табып алып килергә. (Рефлексив, шәхси универсаль уҡытыу эшсәнлеген формалаштырыу.)

УЯН, ХАЛҠЫМ, ҠУҘҒАЛ МИЛЛӘТЕМ

(Рауил Бикбаев ижадына, тыуған көнөнә арналған кисә сценарийы)

Кәримова Альмира Зәкәриә ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Октябрь районының 155-се лицейы

Сәхнә матур итеп биҙәлгән. Уртала Р.Бикбаев портреты. Шығырҙарынан өҙөктәр яҙылған плакаттар портреттың уң һәм һул яҡтарына симметрик рәүештә эленә. Һул яҡ мөйөштә – китаптар күргәҙмәһе. Уңда – Рауил Бикбаевтыңтормош һәм ижад юлына бағышланған стена гәзите.

Әкрен генә ҡурай моңо ишетелә башлай.

Алып барыусы.

Хәйерле көн, хөрмәтле ҡунаҡтар, ҡәҙерле уҡытыусыларыбыҙ, дуҫтарыбыҙ. Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бөтәбеҙҙең дә яратҡан шағирыбыҙ Рауил ағай Бикбаевтың тыуған көнөнә арналған кисәне асырға рөхсәт итегеҙ.

Беренсе уҡыусы

– Тыуған йылың ҡайһы?
- Халҡым тыуған йыл.
- Ҡыуған юлың ҡайһы?
- Халҡым ҡыуған юл.
Яҙмышынан уның уҙмышым юҡ,
Ярам-яралары.
Күҙе менән күреп, айырам ерҙең
Ағын-ҡараларын.

Икенсе уҡыусы шиғырҙың тәржемәһен рус телендә уҡый.

- Когда родился ты?
- Когда родился мой народ.
- Какою дорогою идешь?
- Какой идет народ.
Встречаю ль новую зарю.
Иду ль полями и лесами.
На мир сверкающий смотрю -
Твоими ясными глазами.

Алып барыусы. Ә хәҙер һеҙҙең иғтибарығыҙға Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижадюлына арналған викторина һорауҙары тәҡдим итәбеҙ.

- Рауил Бикбаев ҡасан һәм ҡайҙа тыуған? (Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған).

- Рауил ағай ҡайҙа ете йыллыҡ һәм урта белем ала? (Күрше Ғәбдрәфиҡ ауылындаете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған, аҙаҡ Аҡбулаҡ педучилищеһында белем ала).

- Р. Бикбаевтың тәүге йыйынтығы нисәнсе йылда донъя күрә һәм нисек атала? («Дала офоҡтары» 1964 йыл). Шиғырҙан өҙөк уҡыла. Слайд. Тәбиғәт күренештәре. Дала.

Умырзаялар уяна,
Сайҡалып ҡына елгә.
Күктә – һабан турғайҙары,
Киләләр ҡапыл телгә.
Йондоҙҙарын сүпләй-сүпләй,
ҡайһылай киңәйеп китте
Даламдың офоҡтары…

Алып барыусы. Тәүге йыйынтығы «Дала офоҡтары» тип аталыуы юҡҡа ғына түгел. Унда тыуып үҫкән яҡтың яландар иркен леген, һауаларының йәмен-тәмен тойорға мөмкин. Аралаш әскелтем әрем еҫтәре лә, дала ҡырыҫлығы ла ҡағылып китә. Йәш шағир, тәбиғи рәүештә, үҙе һәм тиҫтерҙәре хаҡында, ҡарт даланы, элекке сиҙәм ерҙәрҙе хәҙер иген баҫыуҙарына әйләндереүселәр хаҡында уйлана. Киләһе һорауҙы ихтибар менән тыңлағыҙ.

- Шағирҙың икенсе китабының исеме һәм нисәнсе йылда донъя күрә? («Ҡош юлы» 1967 йылда донъя күрә). Бер уҡыусы шиғырҙан өҙөк уҡый.

Таңда йондоҙҙар иләүен

Яңы моң яңғыратты.
Ҡош юлы буйлап теҙелеп,
Илгә аҡҡоштар ҡайтты.
Ҡыл булып тартылған сафтың
Ҡойолдо моңо сыңлап.
Сафлыҡтың серенадаһын
Өн-тынһыҙ торҙоҡ тыңлап…

Алып барыусы. «Ҡош юлы» йыйынтығында Р. Бикбаевтың шиғри таланты нығына, фекер даирәһе фәлсәфәгә табан киңәйә барҙы. Әҫәрҙәрендәге лирик герой тарих төпкөлдәренә бағып, күп һорауҙарға яуап эҙләй, хыялдары менән изгелек донъяһын иңләй, ҡош юлы буйлап тормош юлдарын барлай.

Кеше ерҙән биҙер өсөн түгел,
Биҙәр өсөн тыуа был ерҙе,- тип кешенең йәшәүенең төп маҡсатын уйлап ҡына ҡалмай,
Бер уйлаһаң ғүмер -
Боҙ өҫтөндәге усаҡ,- тип фекерҙәрҙе тәрәнәйтә.

- Ниндәй осор ваҡиғаларын автор ҡоҙғон образы менән бәйләй? - тигән һорауға нисек яуап бирерһегеҙ. (Батырша, Юлай, Салауат йәшәгән осорҙоң трагик ваҡиғалары ҡоҙғон образы менән бәйләй). Бер уҡыусы шиғырҙан өҙөк уҡый.

Ҡанаттары ергә саҡ –саҡ һуғылып,
Тыпырсына ҡоҙғон аҡ ҡомда.
Ҡапыл шунда хәтеремә килде:
«Өсәр йөҙ йыл йәшәй ҡоҙғондар»…
Алып китҡән саҡта Салауатты,
Һыҡтағанда бөтә ил туҙғып,
Бығауҙарҙан һарҡып ҡалған ҡанды
Еҫкәп барған булыр был ҡоҙғон. (үҙән буйында үлгән ҡоҙғон).

- Авторҙың «Болғар шиғырҙарынан» шиғырҙары циклында ниндәй образ асыҡланыла? («Болғар шиғырҙарынан» шиғырҙары циклында уртаҡ яҙмышлы Еребеҙ образы һәр яҡлап асыҡланып килә).

- Рауил Бикбаевтың тағы ла ниндәй йыйынтыҡтарын беләһегеҙ? («Ғүмер уртаһы», «Һөйөнсө», «Ерем балҡышы», «Бураҙналар», «Яҙмышым»).Шығыр уҡыла.

Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
Һөҙөп ташлапшау-шыу туртаһын,
Юлдарымахафа менән бағам,
Еткән саҡта ғүмерем уртаһы.
Эй, ҡорҙашым. Төҫмө ир-егеткә
Сәбәләнеп юҡҡа ваҡланыу?
Ғүмеребеҙ уртаһына баҫтыҡ,
Тормош үҙәгенә атланыҡ.
Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип,
Ҡарай бөгөн беҙгә ил күҙе. «Ғүмер уртаһы.»

- Р. Бикбаев шиғриәтендә тарихи шәхестәргә арналған әҫәрҙәрҙе һанап үтегеҙ. (Салауат батырға арналған «Ер һәм диңгеҙ балладаһы», «Мәмерйә», «Һаумы,Салауат!», «Салауаттың саңғы эҙҙәре» һ.б.).

Сәхнә артынан ҡурай моңо ағыла. Экранда милли батырға арналған слайдтар күрһәтелә.

«Салауаттың саңғы эҙҙәре» шиғырынан өҙөк тәҡдим ителә.

Ҡайҙа ҡалды яуға ташланғанда
Ат тояғы ташты иҙгәне!
Урман ярып, эй, уҡталған уҡтай
Салауаттың саңғы эҙҙәре.
Уҡ башағы кеүек ҡыҙған батыр,
Тик дуҫтарҙың иҫән ҡалмауы…
Ҡарҙа һуңғы азат аҙымдары,
Тирә- яҡта –дошман ҡамауы.
Салауаттыңһуңғы саңғы эҙе!
Йөрәгемә ул эҙ уйылған…
Ҡарҙар яуа – күмелмәй ул яра,
Ләйсән ҡоя – эҙҙәр юйылмай. (Ҡурай моңо алыҫлаша бара һәм тынлыҡ урынлаша).

Алып барыусы.

Рауил Бикбаев Б. Бикбай, Д. Юлтый, С.Кулибай, Н. Нәжми, Ә. Вәхитов, Р. Ғарипов, М. Кәрим, Ғ. Хөсәйенов, М. Басыровҡа арнауҙарында шәхестәрҙең ҡабатлағыһыҙ һыҙаттарын, шәхес образдарын алға ҡуя.

- Киләһе викторина һорауын тыңлап үтегеҙ. Башҡорт халҡының яҙмышы, уның иң актуаль проблемалары күтәрелгән әҫәрҙе атап үтегеҙ. «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ».

Алып барыусы. – Эйе, йылғаның матурлығы, һыуының таҙалығы, балыҡтарға, йәнлектәргә бай булыуы борон-борондан йырҙарҙа, легеналарҙа һәм ҡобайырҙарҙа данланған. Әммә бөгөн уның хәле бик мөшкөл. Үҙебеҙ Иҙел буйында йәшәйбеҙ, әммә уның һыуын эсә алмайбыҙ. Сөнки бөтә нефть-химия гиганттары шул мәшһүр йылға буйында урынлашҡан һәм, бер-береһе менән ярышып, уны ағыулай.

Поэманан өҙөк уҡыла (уҡытыусы ҡарамағына).

Алып барыусы.

- Күреүегеҙсә Рауил Бикбаев тапҡыр фекерле уйсан шағир. «Уны Мифтахетдин Аҡмулла, Шәйехзада Бабичтарҙан килгән көслө поэтик традицияларҙы, беҙҙең заманда уларҙы артабан үҫтереп һәм байытып ебәргән Мостай Кәрим, Рәми Ғариповтарҙың шиғри мәктәптәрен лайыҡлы дауам иткән халыҡ шағирҙарыбыҙҙың күренекле һәм итеп күрәм»,- тип яҙҙы академик Ғайса Хөсәйенов.

Алып барыусы.

- Рауил Бикбаев ысын мәғәнәһендә көслө ижтимағи эшмәкәр, аҡыл эйәһе, трибун шағир. Был йәһәттән ул яҙыусыларыбыҙға ғына түгел, республика интеллигенция вәкилдәренә лә олобер үрнәк. Ул публицистикала үҙе бер телмәр оҫтаһы. Күп тармаҡлы, юғары сифатлы, тәрән тамырлы ижады менән Рауил Бикбаев башҡорт әҙәбиәте үҫешенә, Башҡортостандың рухи тормошона үҙенең ҙур өлөшөн индерә.

Уҙған көндәр уйға батырғанда,
Ярһытҡанда тыуыр көнөгөҙ.
Бөгөнгөнө, дуҫтар, онотмағыҙ,
Хәҙергенең ҡәҙерен белегеҙ!
Уҙған тере тик хәҙерге аша,
Шунда киләсәктең ерлеге.
Бөгөнгөлә, бары бөгөнгөлә
Һынала бит ирҙең ирлеге…(Шиғыр тулыһынса уҡыла).

Алып барыусылар. Бөгөнгө кисәбеҙ ахырына ла яҡынлашты. Беҙ бай телле, кешеләрҙе, тәбиғәтте ярата белгән, тормош проблемаларын күтәреп сыҡҡан шағир Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижадының бер өлөшөнә генә туҡталып үттек.Уның һәр шиғыры тәрән йөкмәткеле, бай тарихлы. Шағир артабан да беҙҙе үҙенең ижад емештәре менән ҡыуандырып торһон. Ихтибарығыҙ өсөн бөтәгеҙгә лә ҙур рәхмәт. Киләһе осрашҡанға тиклем һау булығыҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ”

Садыкова Рәилә Наил ҡыҙы,
Октябрьский ҡалаһы 17-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

Тема: Рауил Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнеү.

Маҡсат:

1. Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады буйынса ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү; «Башҡортостан бында башлана» шиғырының идея-тематикаһын, поэтик үҙенсәлектәрен асыҡлау;

2. Тасуири уҡыу күнекмәләре үткәреү; телмәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;

3. Тыуған ергә һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; гражданлыҡ позицияһы булдырыу; Башҡортостандың үткәндәре тураһында фекер алышыу; киләсәге хаҡында әңгәмәләшеү.

Күргәҙмәлелек, йыһазландырыу: компьютер, проектор, экран, магнитофон, аудиокассета, Башҡортостандың физик картаһы, ҡурай тажҙары, китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле. *(1 слайд -тема)*

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Хәйерле көн!

II. Инеш. Тема һәм маҡсатҡа сығыу.

- Туған тел дәресен башлайбыҙ. Ҡәҙерле балалар, иҫкә төшөрәйек, беҙ һәр бер туған тел дәресендә Башҡортостан, уның халҡы, теле, әҙәбиәте, мәҙәниәте, ғөрөф-ғәҙәттәре, бөйөк шәхестәре тураһында күп кенә мәғлүмәттәр алдыҡ, байтаҡ нәмәләр белдек. Хәҙер ошолар тураһында бер шиғырҙы тыңлап китәйек:

(алдан әҙерләнгән уҡыусы ҡурай музыкаһы аҫтында һөйләй) (2 слайд - шиғыр)

Һорағалар ситтә, һин ҡайҙан тип,
Ғорур ғына ҡарап торам да,
Ирәйеп тә, берсә кинәнеп тә,
Башҡортостандан, тим, Уралдан!
Күккә ашҡан уның күк тауҙары,
Былбыл ҡунған муйыл, талына.
Алтын, көмөшкә бай, бай нефткә,
Еләк-емеш, ҡымыҙ, балына…

(Ф.Рәхимғолова)

- Ысынлап та, беҙҙең туған еребеҙ шундай наҙлы, моңло, йырлы. Бөгөнгө дәрестә беҙ тағы ла уның матурлығын иҫбат итәсәкбеҙ һәм һөйләшәсәк һүҙебеҙ телен, илен, халҡын һөйгән шағир, уның ижады тураһында барасаҡ.

Дәрестең девизы итеп мин Р. Ғариповтың “Туған тел” шиғырынан өҙөктө тәҡдим итәм *(3 слайд шағирҙың портреты, эргәһендә эпиграф) :*

Шағирҙарҙы ситтән килтермәйҙәр,
Моңо менән тулышып халҡының,
Ер ҡуйынынан сыҡҡан шишмә кеүек,
Ил күңеленән сыға талпынып.

(Рауил Бикбаев)

Тема һәм маҡсатты әйтеү. *(4 слайд - тема*)

Уҡытыусы: Бөгөн дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев тормошо һәм ижады менән танышыуыбыҙҙы дауам итербеҙ. Дәрес барышында телебеҙҙе байытырбыҙ, моңло-йырлы икәнен иҫбат итербеҙ.

Дәфтәргә датаны, теманы яҙып ҡуйығыҙ.

III. Төп өлөш.

1. Рауил Бикбаев тормошо һәм ижады менән танышыу. (Логик-мәғәнәүи модель буйынса алдан әҙерләнгән уҡыусы һөйләй).

1 уҡ. Р. Бикбаевтың тормош юлы. *(5 слайд)*

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1962 йылда Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. 1965 йылдан алып РФ ФА Өфө ҒҮ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре. 1995 йылдан башлап БР Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе.

2 уҡ. Р.Бикбаевтың китаптары**.** *(6-сы слайд)*

Дала офоҡтары. Шиғырҙар. Өфө, 1964.
Ҡош юлы. Шиғырҙар, поэма. Өфө, 1967.
Автобиография. Өфө, 1969.
Лирика. Шиғырҙар, поэма. Өфө, 1979.
Һөйөнсө. Шиғырҙар. Өфө, 1979.
Ерем балҡышы. Шиғырҙар. Өфө, 1982.
Бураҙналар. Шиғырҙар, хикәйәт, баллада, поэмалар. Өфө, 1985.
Яҙмышым. Шиғырҙар. Поэмалар. Өфө,1988.
Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады. Өфө, 1989.
Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ! Поэма, шиғырҙар. Өфө, 1991.
Шағир һүҙе – шағир намыҫы. Ижади портреттар, рецензиялар, сығыштар, интервью, мәҡәләләр. Өфө, 1997.
Ай күргәндәй, ҡояш алғандай. Һайланма әҫәрҙәр. Өфө, 1998.

3 уҡ. Р.Бикбаевтың эшмәкәрлеге. *(7 слайд)*

1993йылда Башҡортостандың башҡорт халыҡ шағиры исеме бирелә. 1996 йылда – Филология фәндәре докторы. 1957 йылдан алып баҫыла. 1992й. Башҡ-ндың атҡаҙанған фәндәр эшмәкәре.

4 уҡ. Р.Бикбаевтың премиялары. *(8 слайд)*

1970 й. “Автобиография” китабы өсөн Ғ.Сәләм исемендәге премия бирелә.
Салауат Юлаев ис. Премияһы лауреаты (1989й.) (уҡыусылар дәфтәрҙәренә ҡыҫҡаса яҙа).

2. “Башҡортостан бында башлана” шиғыры өҫтөндә эш.

Һеҙгә өйгә эш итеп Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана”шиғырын уҡып килеү бирелгәйне.

1) Һүҙлек эше.

Әҫәрҙә бер нисә аңлашылмаған һүҙ бар. Уларҙың аңлатмалары тағтала бирелгән. *(9 слайд)*

- *Даръя* – ҙур һыу
- *Тараф* – яҡ
- *Баҡтым* – ҡараным
- *Ҡарыш* – үлсәү берәмеге
- *Ҡитға* – материк
- *Яралдым* – тыуҙым

Уҡыусылар һүҙҙәрҙе уҡып үтә.

2) Әлегә шиғырҙың аудиояҙмаһын тыңлап үтәбеҙ. Ҡарап барығыҙ. (*Фонояҙманы тыңлау. Экранда һәр строфа күренә бара).*

Башҡортостан бында башлана.

Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя – баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:
- Башҡортостан бында башлана! *(10 слайд)*

Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктәтулай,
Яҙ айында һабан турғайындай:
- Башҡортостан бында башлана! *(11 слайд)*

Башҡортостан мине ҡаршы ала,
Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап,
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,
Ҡояш кеүек ҡарай туп – тура. *(12 слайд)*

- Республикам, бына башландың! – тип
Әйткәнемдә ергә ҡапланып,
Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын: *(13 слайд)*

- Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,

Юшатырҙан Әйгәкәҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңелеңә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарышы, беләм, ҡәҙерле. *(14 слайд)*

Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә,
Берсә көләп, берсә уйланып.
Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым. *(15 слайд)*

Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!
Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,
Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай… *(16 слайд)*

Ә мин мәңге бында – Уралымда,
Тик булмышым инде өр – яңы:
Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны. *(17 слайд)*

Моң – шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙен тиңәйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп. *(18 слайд)*

”Башҡортостан!” – тиеп, улдарыма
Алыҫҡитғаларҙа ҡарай ер.
Кешем намыҫында кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр. *(19 слайд)*

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Ҡүңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек
Был донъяға тура ҡараргыҡ. *(20 слайд)*

Һорау:

- Шиғырҙы иғтибар менән тыңланығыҙ. Әйтегеҙ әле, ни өсөн Рауил Бикбаев уны “Башҡортостан бында башлана” тип атаған? */Яуаптар/*

- Шиғырҙың төп темаһы нимәлә? */Яуаптар/*

- Шиғырҙа кемдәр араһында диалог бара? */Яуаптар/*

3) Әҫәр буйынса эш.

а) 1 – 4 строфаларҙы уҡытыусы уҡып ишеттерә.

Һорауҙарға яуап бирегеҙ:

- Уҡыусылар, һеҙҙең Өфөнән йәки Башҡортостандан ситкә сыҡҡанығыҙ бармы? */Яуаптар/*

- Шул ваҡытта һеҙ ниндәй хис-тойғолар кисерәһегеҙ? */Яуаптар/*

- Һағынып ҡайтып килгәндә республика ниндәй булып күренә? */Яуаптар/*

- Шулай уҡ шағир ҙа, йәғни лирик геройҙа үҙенең тыуған яғын һағынып ҡайта.

- Ә һағынып ҡайтып килгән шағир ниндәй хис – тойғолар кисерә һуң? */Яуаптар/*

- Тимәк, тәүге дүрт строфала шағир Башҡортостанды данлай.

б) Һуңғы 4 строфаны икенсе уҡыусы уҡый:

Ә мин мәңге бында – Уралымда,
Тик булмышым инде өр – яңы:
Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.

Моң – шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙен тиңәйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп.

”Башҡортостан!” – тиеп, улдарыма
Алыҫҡитғаларҙа ҡарай ер.
Кешем намыҫында кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Ҡүңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,

Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам! –
Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Һорауҙарға яуап биреү:

- «Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым»…- ни өсөн шулай ти икән шағир *? /Яуаптар/*
- Һеҙ Башҡортостанды яратаһығыҙмы? */Яуаптар/*
- Тимәк, һеҙҙең күңелегеҙҙә Башҡортостан йәшәй, ул һеҙҙең йөрөгегеҙҙә, күңелегеҙҙә яралған…
- Ә Башҡортостан алдында *йөҙөбөҙ аҡ булһын өсөн*беҙ нимәләр эшләй алабыҙ һуң? */Яуаптар/*
- Шиғырҙың тел-һүрәтләү сараларынан нимәләр ҡулланылған? (Йәнләндереүҙәр, сағыштырыуҙар, метафора, фразеологик берәмектәр).

IV. Ныҡытыу

1) Тест һорауҙары:

1. «күңелем тулай»һүҙбәйләнеше ниндәй һүрәтләү сараһы булып килә?
а) сағыштырыу
б) метафора
в) йәнләндереү (21 слайд)
2. «ҡояш кеүек» - был ниндәй һүрәтләү сараһы?
а) сағыштырыу
б) метафора
в) йәнләндереү (22 слайд)
3. Түбәндәге һүҙбәйләнештәр араһында фразеологизмдарҙы табығыҙ:
а) «аҡ нур»
б) «һыуҙар кисеп ҡайтһам»
в) «Башҡортостан ҡаршы ала» (23 слайд)
4. «ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты»һүҙбәйләнеше ниндәй һүрәтләү сараһы булып килә?
а) сағыштырыу
б) метафора
в) йәнләндереү (24 слайд)
5. «һабан турғайындай» - был ниндәй һүрәтләү сараһы?
а) сағыштырыу
б) метафора
в) йәнләндереү (25 слайд)

/Яуаптарҙың дөрөҫлөгөн уҡыусылар экрандан үҙ аллы тикшерәләр/ 26 слайд

1 – В
2 – А
3 – Б
4 – В
5 – А

IV. Йомғаҡлау

- Шулай итеп, уҡыусылар, беҙ бөгөнгө дәрестә ниҙәр тураһында һөйләштек? /Яуаптар/

Уҡыусылар яуап бирәләр һәм бер-бер артлы «БАШҠОРТОСТАН» һүҙенә ҡурай тажы рәүешендә яуаптар сығарып эләләр.

Өйгә эш: “Башҡортостан” темаһы буйынса кескәй хикәйә төҙөргә. (27 слайд)

Баһалау.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ» ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ БУЙЫНСА ПРОЕКТТАР ЯҠЛАУ ДӘРЕСЕ

Сәхибгәрәева Гүзәл Мөхлис ҡыҙы,
Күгәрсен районы Мораҡ 1-се һанлы урта мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” поэмаһының йөкмәткеһен үҙләштереү, дөйөмләштереп анализларға өйрәтеү;

Проектлау алымын үҙләштереү: автор һәм уның поэмаһы тураһында мәғлүмәттәр йыйыу, йыйғандарын системаға килтереү, аналитик фекерләү һәләттәрен үҫтереү; Уҡыусыларҙың дөрөҫ һәм эҙмә -эҙлекле һөйләү, фекерҙәрен иҫбатлай белеү күнекмәләрен нығытыу;

Проект эшмәкәрлеге нигеҙендә ижади фекерләүсе уҡыусы тәрбиәләү, шағир Р. Бикбаев үрнәгендә һәм уның поэмаһы аша экологик, рухи тәрбиә биреү, тыуған яҡҡа, тәбиғәткә ихтирам тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Портреттар, китаптарынан күргәҙмә, интерактив таҡта, компьютер презентацияһы, уҡыусыларҙың ижади эш проекттары, һүрәттәр, карточкалар, дәрес өсөн һорауҙар.

Дәрестең формаһы: Проектты яҡлау дәресе.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

1. Һаулыҡ һорашыу.

2. Дәресте ыңғай мотив менән тәьмин итеү-мотивация булдырыу .

Дәрестең эпиграфы менән танышыу (Хор менән уҡыу):

“Тәбиғәтте яҡлау – Тыуған илде һаҡлау ул” (М. Пришвин).

- Нимә тураһында әйтелә? Тәбиғәт нимә ул һеҙҙең өсөн? Тыуған ил?

- Ни өсөн тәбиғәт менән Тыуған илде автор тиң күрә? Кешеләргә кәрәкме улар? (яуаптар төрләсә).

3. Проект яҡлау дәресенең маҡсат-бурыстарын билдәләү, уҡыусыларҙың белемдәрен актуалләштереү:

Уҡытыусы һүҙе:

- Таҡтала дәрестең темаһы яҙылған. Тема буйынса дәресебеҙгә ниндәй маҡсат ҡуябыҙ? (Яуаптар).

- Поэманы анализларбыҙ, проекттарҙы яҡларбыҙ, әңгәмәләшербеҙ, фекер алышырбыҙ. (Датаны,теманы дәфтәргә яҙып алыу).

Уҡытыусы һүҙе:

- Беҙ үткән дәрестә Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” поэмаһын уҡып сыҡтыҡ. Һеҙ поэма буйынса үҙ аллы проект эштәре башҡарҙығыҙ. Проектлау - ул үҙ эшеңде планлаштырыу, проблемаларҙы таба һәм хәл итә белеү, гипотезалар тәҡдим итеү, уларҙы дәлилләп, иҫбат итеү, киң информациялар майҙанын дөрөҫ файҙаланыу була. Фәмүмән, эҙләнеү һәм проектлау – ул кеше эшмәкәрлегенең бер үҙенсәлеге. Һәр кем үҙенең эшен матур итеп эшләр өсөн, тәүҙә ниндәйҙер кимәлдә эҙләнеү, планлаштырыу эшен үткәрә.

Кластағы уҡыусыларҙың һәр береһе темалар алды, шул темалар буйынса проект эше эшләне.

Яңы һүҙҙәрҙе үҙләштереү, мәғәнәләрен аңлатыу.

Сәфәр- путешествие

Фәмһеҙ - равнодушный

Оран һала – бросает клич

Ҡырғын – мор

II. Төп өлөш. Эҙләнеү, проект эштәрен яҡлау.

1. Дәрестең темаһы буйынса бирелгән һорауҙарҙы таҡтаға элеп ҡуйыу: Кем ул Рауил Бикбаев? Ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ? Наградалары?

2. “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” поэмаһының яҙылыу тарихы ниндәй?

3. Поэманың идея – тематик үҙенсәлектәре нимәлә?

4. Художестволы үҙенсәлектәре ниндәй?

1-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра (уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя):

Минең проект эшем Р. Бикбаевтың биографияһын өйрәнеү ине. Китаптар, Интернет селтәре ҡулланып, уның тормош юлына байҡау яһаным. Рауил Төхфәт улы Бикбаев — Башҡортостандың халыҡ шағиры, әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, профессор.Ул 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында ауылында тыуып үҫкән. Һуңыраҡ күрше Фәбдрәфиҡ ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, 1953-1956 йылдарҙа Аҡбулаҡ педагогия училищеһендә белем ала. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас та, буласаҡ шағир үҙенең уҡыуын аспирантурала дауам итә. Ул үҙенең әҙәби эшмәкәрлеген фән менән бәйләгән автор.

2-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра (уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя):

Минең проект эшмәкәрлеге Рауил Бикбаевтың ижади уңыштары тураһында. Уның шиғырҙары 1957 йылдан башлап республика матбуғаты биттәендә күренә башлай. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белде. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә. Быға миҫал итеп бик күп шиғырҙарҙы, «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!», «Халҡыма хат», «Баҙар балтаһы», «Система», «Барокамера»,«Хазина» һ.б. ҙур хеҙмәттәрен әйтергә була. Башҡортса һәм русса фундаменталь шиғри антологияларҙы уҡыусыларға еткереүгә лә ул күп көс һалды. 1997 йылда “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” тигән китабы уның фәнни эшмәкәрлегенең тос емеше була.

3-сө уҡыусы сығыш яһай, үҙенең проект эше менән таныштыра (уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя): - Мин Р. Бикбаевтың әҙәбиәт һәм фән өлкәһендәге ижади ҡаҙаныштары тураһында материал әҙерләнем. Ул Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 30 йыл (1965-1995) тирәһе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яклай. 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзының председателе була. Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бер нисә орден-миҙалдар кавалеры. 1972 йылда йәштәрҙең F. Сәләм премияһына, ә 1996 йылда Халыҡ шағиры тигән исемгә лайыҡ була. (Фекер алышыу, күргәҙмәлә ҡуйылған китаптарын ҡарау, нимә тураһында икәнен әйтеү.)

Уҡытыусы һүҙе: - Ә хәҙер беҙ Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” тигән поэмаһы буйынса проект эштәре тыңларбыҙ, фекерҙәр алышырбыҙ.

4-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра (уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя): Мин был поэманың идеяһына, темаһына, сюжет ҡоролошона иғтибар иттем, шул турала яҙҙым.

1989 йылда Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” тигән поэмаһы ижад ителә. Автор был әҫәрендә Ағиҙелдең башланған урынынан алып Кама йылғаһына ҡойған еренә тиклем сәйәхәт итә.Үҙенең күргән-белгәндәрен, лирик кисерештәрен беҙгә һөйләп бирә. Поэманың сюжеты ошо сәйәхәткә ҡорола. Ағиҙел буының матурлығы, байлығы, һыуының таҙа булыуы борон-борондан ҡобайырҙарҙа, легендаларҙа данланған. Ә бөгөн уның хәле нисек һуң? Беҙ уның һыуын эсә алабыҙмы? Унда ҡурҡмайынса һыу инеп буламы? Шундай

экологик проблемаларҙы күтәрә автор.Был экологик проблеманы автор рухи проблемалар менән бәйләй. Кешеләрҙең, бигерәк тә ғәмһеҙ түрәләрҙең үҙебеҙ йәшәгән тәбиғәткә һаҡһыҙ ҡарашы тураһында яҙа шағир. Сөнки Ағиҙел буйындағы ҡалаларҙа нефть –химия заводтары урынлашҡан. Улар ярышып –ярышып йылғаны ағыулайҙар. Уның һыуын эсергә ярамай, унда һыу инеүе ҡурҡыныс. Йылғала балыҡтар әҙәйеп бара. Ағиҙел буйында урмандар самаһыҙ ҡырыла, кейек –йәнлектәр юҡҡа сыға. Быларға кем ғәйепле? Кемдәр ойоштора ошондай вәхшилекте? “Урманды балта түгел, ҡәләм ҡыра,”-ти автор. Ғәмһеҙ түрәләр, ҡәләм тотҡан ғәмһеҙ әҙәмдәр Башҡортостан тәбиғәтен юҡҡа сығарыуына әрней шағир күңеле:

Ҡурҡ һин, урман,
Ағасыңдан яһалған ҡәләмдән.
Юҡ, ҡурма ҡәләмдән,
Ҡурҡ һин бөгөн ҡәләм тотҡан
Ғәмһеҙ әҙәмдән, - тип яҙа шағир борсолоп.

Поэма яҙылған осоронда ғына түгел, ә бөгөнгө көндә лә бик актуаль яңғырай. 2013 йыл Рәсәйҙә һәм беҙҙең Республикала “Тирә -яҡ мөхитте һаҡлау” йылы тигән исем аҫтында үтә. Тәбиғәтебеҙҙе һаҡлау – бөгөнгө көндең үҙәк проблемаларының береһе булып тора.

5-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра(уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя):

Минең проект эшемдә авторҙың сәйәхәте, поэманың сюжеты тураһында һүҙ бара. Лирик геройҙың юлы Бөрйән урмандары аша Шүлгәнташ мәмерйәһенә килә. Шүлгән – ул беҙҙең тере тарихыбыҙ, ата- бабаларыбыҙ йәшәгән таш йорт. Унда кешелек тарихының мәҙәниәте, сәнғәте барлыҡҡа килгән:

Шүлгән! Иң боронғо храм булып,
Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

Автор Шүлгәнташ мәмерйәһен һаҡлауторағында уйлана. Шуның менән бергә тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙы, телебеҙҙе, милләтебеҙҙе тергеҙеү кәрәклеге проблемаларын күтәрә. Репрессия йылдарында күпме әҙиптәребеҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ һәләк булды, уларҙың күпме әҫәрҙәре юҡҡа сыҡты, уттарҙа яндырылды. Күпме балалар туған телдәрен белмәй үҫте – ошо һорауҙар борсой шағир күңелен. Шағир борсола, ләкин төшөнкөлөккә бирелмәй, уның киләсәккә ышанысы ныҡ:

Мин ышанам, кеше матурлыҡты
Һәләкәттән барыбер ҡотҡарыр!

6-сы уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра(уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя): Шүлгәндән һуң лирик геройҙы Иштуған һыуһаҡлағысы ҡаршы ала. Ағиҙелде быуып, 5-6 башҡорт ауылын юҡҡа сығарып, ҙур һыуһаҡлағыс төҙөлөргә тейеш ине. Алдан ныҡлап уйланылмаған был гигант төҙөлөштә автор “Урал күкрәгендә тыуған яңы шеш” тип атаны. Сөнки ауылдар менән бергә ул ерҙәрҙә иҫтәлектәр, тарихи ҡомартҡылар, зыяраттар һыу аҫтында ҡала яҙҙы. “Күпме бөйөк төҙөлөштәр ҡаш төҙәтеп күҙ сығара”,- тип яҙа шул йылдарҙа шағир. Уның был әрнеү һүҙҙәре Әсә һүҙҙәренә барып тоташа:

“Ниңә үҙ ауылың һыуға күмәһең,
Нигеҙеңде аҡтараһың?”- был Әсә монологы Ер-әсәнең әрнеүе, һағышланыуы булып ҡабул ителә.

Авторҙың шундай саң ҡағыуы юҡҡа үтмәне: Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөлөшөн ваҡытлыса туҡтатып торҙолар һәм яңы проект буйынса 3 тапҡырға бәләкәйерәк итеп тҙөнөләр.

7-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра(уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя): Үҙенең сәйәхәтендә шағир артабан Стәрлетамаҡ, Өфө ҡалалары аша үтә. Ундағы гигант төҙөлөштәргә шағир күңеле берсә шатлана, берсә - үртәнә. Заводтарҙан сыҡҡан төтөн Стәрле ҡалаһын ҡара пәрҙә кеүек ҡаплап тора, шуға күрә Шихантауға менеп ҡараһа ла, автор ҡаланы күрә алмай. Ҡала төтөндә сарсай, унда ғәрип балалар тыуа. Заводтан бысраҡ һыуҙар йылғаға ағып төшә, йылғаны ағыулайҙар. Уның һыуы эсергә ярамай.

Хәүеф –хаталарҙы үлсәр өсөн
Күңегелгән хисап тар бында.
Эй сарсаным!
Ҡайҙа бер йотом һыу?

Үҙем Ағыҙелдең ярында, -тип автор йылғаны һаҡлап ҡалыу өсөн саң ҡаға. Әйтергә кәрәк, халыҡ шағирының был борслоуҙары эҙһеҙ үтмәй. Тәбиғәтебеҙҙе, телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн күп эштәр башҡарыла. Шуларҙың береһе - быйылғы 2013 йылдың Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип аталыуын әйтергә кәрәк. Был ҡағыҙҙа ғына яҙылған ҡоро һүҙ түгел. Тәбиғәтте ҡурсалау өсөн экологик субботниктар үткәрелә, төрлө ярыштар ойошторола. Беҙҙең мәктәп уҡыусылары ла ҡатнаша ундай сараларҙа.

8-се уҡыусы сығыш яһай, үҙенең прокт эше менән таныштыра(уҡый ҙа таҡтаға элеп ҡуя): - Поэманың художестволы үҙенсәлектәре тураһында минең проект эшем:

Сюжеты, композицион ҡоролошо үҙенсәлекле, сәйәхәт формаһында бирелә.

Автор – лирик герой үҙе поэмала сәйәхәт итә. Поэма үткер публицистик стиль менән яҙылған.

Лирик сигенеүҙәр, Диалогтар, монологтар.

Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары һөйләшә- йәнләндереү алымы.

Риторик һорауҙар, риторик өндәүҙәр.

Төрлө һүрәтләү саралары (эпитеттар, метафоралар, метонимиялар, сағыштырыуҙар һб)

III. Йомғаҡлау – рефлексия. Эҙләнеү эше буйынса һығымталар яһау. Карточкаларҙа һорауҙар бирелә, шул һорауҙарға ҡыҫҡа ғына яуаптар яҙырға:

1. Тема буйынса мин нимә белдем?	
2. Дәрестә миңә нимә нығыраҡ оҡшаны?	
3. Мин нимәгә хайран ҡалдым?	

Дәрестең маҡсатына иреште кме? (плюс- минус ҡуйырға)

1. Поэманы анализлау булдымы?	
2. проекттарҙы яҡлау?	
3. аңғәмәләшеү булдымы?	

IV. Баһалау.

Мин үҙемде нисек баһалайым? (үҙҙәре баһа ҡуялар)

Мине күршем нисек баһалай?

V. Өйгә эш.

“Р. Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” тигән поэмаһында тирә-яҡ мөхитте һаҡлау проблемаһының бирелеше” темаһына инша яҙырға.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИЯ ПРОБЛЕМАҺЫ

Ғимранова Рәсимә Факил ҡыҙы,
Күгәрсен районы Йомағужа 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, хәүефләндергән иҡтисади, экологик мәсьәләләрҙе асыҡлау, уҡыусыларға тыуған тәбиғәттең матурлығын, байлығын һаҡлау, уға һөйөү тәрбиәләү, дәрестә күтәрелгән проблемаларға ҡарата фекерҙәрен асыҡ сағылдырырға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: мультимедиа проекторы, компьютер, уҡыусылар әҙерләгән фотоһүрәттәр, карточкалар, ҡурай моңо яҙылған компакт диск, Р. Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”, Р .Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмалары.

Төйәгемә күҙ ташлаһам,
Хәүефтәрем ҡуҙғала.
Зифа ҡамышын һарғайтып,
Һыуҙар кәмей йылғала.
Эсер һыуҙар ҙа ҡороһа,
Донъябыҙҙан ни ҡала ?

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Мин һеҙҙе сәйәхәткә саҡырам.

II. Инеш әңгәмә.

Дәрестең темаһы, маҡсаты менән таныштырыу. (Эпиграф проектор аша күрһәтелә).

Төйәгемә күҙ ташлаһам,
Хәүефтәрем ҡуҙғала.
Зифа ҡамышын һарғайтып,
Һыуҙар кәмей йылғала.
Эсер һыуҙар ҙа ҡороһа,
Донъябыҙҙан ни ҡала ?

- Уҡыусылар! Беҙ бөгөн дәрестә хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған иҡтисади, экологик мәсьәләләрҙе асыҡларбыҙ, тыуған тәбиғәтебеҙҙең матурлығын, байлығын һаҡлау кәрәклеге хаҡында әңгәмәләшербеҙ.

1. Уҡыусылар! Бының өсөн тәүҙә экология, экологик проблема төшөнсәләрен асыҡлап үтәйек. Һеҙ уны нисек аңлайһығыҙ?

- Тәбиғәтте һаҡлау, тирә- йүнде бысратмау, таҙартыу.
- Дөрөҫ! Ә хәҙер “Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге”нә күҙ һалайыҡ.
- (мультимедиа проекторына ҡарау, уҡыу).

“Башҡорт теленең аңлатмалы ”һүҙлеге түбәндәге аңлатма бирә :

“Экология-биологияның тереклек һәм үҫемлектәр менән тирә- яҡ мөхит араһындағы бәйләнеште өйрәнә торған бүлеге”.

- Экологияның тамыры “эко” – “әй” һүҙенән алынғанын да онотмайыҡ!

Артабан уның мәғәнәһе кеше–йәмғәт-тәбиғәт төшөнсәләренең үҙ- ара мөнәсәбәте менән киңәйә барған.

Р. Бикбаевтың поэмаһы ана шуларҙы эсенә ала ла инде. Иленә ҡарап - халҡы, йәмғиәтенә ҡарап - тәбиғәте сағылдырыла.

2. – Ни өсөн экологик проблема бөгөнгө көндә лә актуаль булып тора ? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

- Сөнки әле лә урмандар киҫелә, һыуҙар бысрана, йылғалар ҡорой, шунлыҡтан йәнлектәр, ҡоштар ҡырыла, үҫемлектәр юғала...

3. Экологик темаға төшөрөлгән фотоһүрәттәр ҡарау. Цитаталарҙы уҡыу.

Был беҙҙең тормош девизыбыҙ булһын. Ошо һүҙҙәрҙе дәфтәрҙәребеҙгә теркәп ҡуяйыҡ.

4. Эпиграфты уҡыу.

- Эйе, кеше лә, тәбиғәт тә һыуһыҙ йәшәй алмай. Шуға күрә һыуҙы ҡәҙерләргә , һаҡларға кәрәк. Башҡортостанда йылғалар бик күп. Әйҙәгеҙ, беҙ уларҙың исемдәрен атап китәйек.

- Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Йүрүҙән, Сәрмәсән, Әй, Танып, Ашҡаҙар...

- Дөрөҫ, балалар. Был йылғалар бик матур, йәмле... Илдең иҡтисади үҫешен булдырыу төрлө производство, объект-торлаҡ төҙөүгә бәйләнгән, әлбиттә. Әммә беҙҙең илдә завод- фабрикалар тәүҙә беренсе

планға ҡуйылған, ә тәбиғәтте һәм кеше һаулығын һаҡлау бөтөнләй онотолдо тип әйтһәң дә була. Һөҙөмтәлә тәбиғәт ни эшләй?

- Тауҙар емерелә, йылғалар ағыулана, урмандар ҡырҡыла, кешеләр һаулығына зыян килтерелә. Бына ошо проблемаларҙы Рауил Бикбаев үҙенең “Һыуһаным,Һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында күтәреп сыға ла инде.

5. Хәҙер “Ағиҙел йылғаһы” картинаһын ҡарап үтәйек.

(Айбулат проекторҙағы картанан йылғаны табып күрһәтә, географик белешмә бирә).

- Сәфәребеҙгә юлланыр алдынан Ағиҙелдең үткәненә бағайыҡ. (Р.Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” әҫәренән өҙөк тыңлау).

6. Миләүшә ҡурай моңо аҫтында яттан поэманан өҙөк һөйләй, ә был ваҡытта пректор аша Фадеевтың “Йәмле Ағиҙел буйҙары” картинаһы күрһәтелә.

- Миләүшә һөйләп ишеттергән әҫәрҙең авторы кем, уның тураһында нимәләр беләһегеҙ? (уҡыусыларҙың яуаптары)

(мультимедиа проекторы аша Р.Ниғмәти тураһында презентация күрһәтелә).

- Был поэма нисәнсе йылда яҙылған? Был ваҡытта Ағиҙел ниндәй хәлдә булған тип уйлайһығыҙ?

(уҡыусыларҙың яуаптары.)

7. Әйҙәгеҙ, хәҙер Р.Бикбаев менән оҙон сәфәргә сығайыҡ.

(Р.Бикбаев тураһында презентация ҡарау).

- Уҡыусылар, “Һыуһаным,Һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы ҡасан яҙылған?

- Был әҫәрен ул 1987-1988 йылда яҙған.

III . - Был 2 әҫәр араһында ярты быуат ғүмер ята. Заманалар үтә тора, Ағиҙел ошо сафлығын һаҡлап ҡала алыр микән ? Ошо һорауға яуапты поэманан эҙләйек!

(ҡурай моңо яңғырай). (Лилиә өҙөк ятлай, ә был ваҡытта Ирәмәл картанан күрһәтелә, әҫәрҙән түбәндәге юлдар яҙыла)

Был төйәктә һәр бер тау ҡуйыны
Ил һуғарыр иҫке ер мәллә
Бар яҡтарға һуҙылып һыуҙар аға,
Ҡайҙа ҡараһам да – Ирәмәл.

- Шулай тип әйтә шағир Ирәмәлгә баҫҡанда , Иҙел башынан илен байҡағанда. Һәм ошо ерҙә беҙҙең сәфәребеҙ башланып китә.

Беҙгә оҙон юлға сыҡҡас, сәфәр башлығы шағир һүҙҙәрен тыңлап, Ағиҙел буйы йәмдәренә һәм байлыҡтарына бергәләп ҡыуанырбыҙ, тәбиғәтен, урмандары самаһыҙ ҡырҡылып бөткәнен күреп хәүефләнербеҙ. (проектор аша экранда яҙыу сыға)

Сәфәр башы: Ағиҙел менән шағир сәфәргә сыға .

Шағир ҡыуанып,шатланып килгәндә нимәгә осрай? (Уҡыусылар Белорет тураһындағы урындарҙы табып уҡыйҙар).

1-се туҡталыш : Белорет ҡалаһы. (һәр туҡталыш ммп аша күрһәтелеп бара).

Ағыуланған завод быуаһында сәсәй-сәсәй быуылалар, үткенселәр балыҡ шартлаталар, бала- саға ҡырсынташ менән уйнай.

- Артабан Ағиҙелдең юлы ҡайһы районға алып бара, йылға ниндәй афәттәргә шаһит була?

2-се туҡталыш : Бөрйән районы. (ммп аша Бөрйән районының Шүлгәнташ ҡурсаулығы, ҡарағайлыҡ күрһәтелә).

Ҡарағайҙар!
Солоҡ ҡына тотор ҡарағайҙар!
Улар менән бергә ерегеп үҫкән
Халыҡтың да
Ай-вайына ҡарамайҙар,
Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар,
Әйтерһең дә ҡырағайҙар!

- Шағирҙың урманға мөрәжәғәтенә иғтибар итәйек! (“Урман! ...” тип башланған урынды табып ҡысҡырып уҡыу). (Ммп аша Шүлгән ҡурсаулығы күрһәтелә).

Шүлгән! Иң боронғо храм булып,
Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

3-сө туҡталыш : Шүлгәнташ мәмерйәһе.

- Бөгөнгө көндә Шүлгәндең хәле? (яуаптар)

4- се туҡталыш : Иштуған һыуһаҡлағысы.

- Беҙ нимә күрәбеҙ?

- Ауылдар, зыяраттар һыу аҫтында ҡала. Тарих онотола.

- Дөрөҫ. Әйҙәгеҙ, ошо турала әҫәрҙән табып уҡыйыҡ.

5-се туҡталыш: Шахтау.

(Өҙөк яҙыла)

Торатауҙар һына
Иҫләй күккә ашҡан саҡтарын.
Тағы шартлау.

- Ә тауҙарҙың юғалыуына нимә сәбәп? (уҡыусыларҙың яуаптары).

6-сы туҡталыш: Стәрле ҡалаһы. (ммп аша өҙөк яҙыла).

Был сәфәрҙә нисәмә ҡат баҫты
Күҙ алдыма Рәшит Ниғмәти.

Урал менән Ағиҙел буйлап,
Бындай һүҙҙе тағы кем әйтер?

- Рәшит Ниғмәти әйткән һүҙҙәрҙе һәм Р. Бикбаев Ағиҙелдең фажиғәле яҙмышын күреп әсенгән юлдарҙы сағыштырайыҡ.
- Ағиҙел, Стәрле яҙмыштарының ошо хәлгә төшөүенә кем ғәйепле? (әҫәрҙән уҡып китеү).
- Лирик герой сәфәре Өфөгә килеп етте. Әйҙәгеҙ, беҙ нимә күрербеҙ икән? (слайдтар- Өфө ҡалаһы, С. Юлаев һәйкәле, өҙөк яҙыла).
-

Өфөм! Өфөм!
Һәр биҙәгеңде
Ниндәй оҫта ҡулдар уйған ырып?
Ағиҙелең, Ҡариҙелең, Димең -
Һыуһылыуҡай кеүек һылыу ҡыҙ.
Өфөм! Өфөм! Иҫ китерлек кистә
Йүкәләрҙән балың һығылһын.

7- се туҡталыш: Өфө ҡалаһы.

Ҡара мазут, бысраҡ, ләм йылғаның төбөн ҡаплап ята. Ҡариҙел һәм Дим йылғаһы сафлығын юғалтҡан. Ошо йылғаларҙың һөйләшеүенә ҡолаҡ һалайыҡ әле (уҡыусылар өҙөктө табып уҡыйҙар).

Һәм, ниһайәт, сәфәребеҙҙең һуңғы туҡталышына килеп еттек. Ағиҙел тамағында ниндәй ҙур төҙөлөш тураһында һүҙ бара ?

- Ағиҙел ҡалаһы.
- Эйе, был Ағиҙел ҡалаһы. Сәфәребеҙгә сығыр алдынан ҡуйылған һорауға яуап бирәйек. Ағиҙелдең ярты быуат элек булған сафлығы беҙҙең көнгә тиклем килем еткәнме ?

(уҡыусыларҙың яуаптары)

- Эйе, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Ағиҙелебеҙ таҙалығын һаҡлап ҡала алмаған. Бөгөнгө көндә тәбиғәтте һаҡлау буйынса ниҙәр эшләнелә?
- Заводтарҙа зарарлы цехтар ябыла.
- Һыуҙы, һауаны таҙартҡыс ҡоролмалар төҙөлә.
- Дөрөҫ. Ә һеҙ, уҡыусылар, был йәһәттән нимә эшләй алаһығыҙ?
- Шишмә, инештәрҙе таҙарта алабыҙ.
- Экологик өмәләрҙә, волонтёрлыҡта ҡатнаша алабыҙ!
- Афарин! Беҙ бергәләп тотонғанда ғына, тирә- яғыбыҙ таҙа, саф булыр!

IV. Дәрескә йомғаҡлау.

Тәүҙә уҡыусыларҙың фекерҙәре тыңланыла, һуңынан - уҡытыусыныҡы.

- Уҡыусылар! Быйылғы йыл беҙҙең хөкүмәт тарафынан ниндәй йыл тип иғлан ителгәйне әле ?
- Тирә - яҡ мөхитте һаҡлау һәм яҡлау йылы.
- Дөрөҫ! Шулай булғас, уҡыусылар , әйҙәгеҙ , бергәләп тыуған төйәгебеҙҙең тәбиғәтен һаҡлайыҡ, яҡлайыҡ, таҙартайыҡ, телен теләп өйрәнәйек һәм дә яратайыҡ!

V. Баһалау.

VI.Өй эше: тыуған ерҙе яҡлауға өндәгән мөрәжәғәтнамә яҙырға.

МИН БАШЛАНАМ ҺЕҘҘӘН, КЕШЕЛӘРЕМ!

Ҡотошова Лилиә Илдус ҡыҙы,
Ейәнсура районы Яңыбай урта мәктәбе

Маҡсат:

1. Уҡыусыларҙың эҙләнеү эшенә таянып шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу;
2. Уҡыусыларҙың тасуири уҡыу, шиғыр анализлау күнекмәләрен, бәйләнешле һөйләү телмәрен үҫтереү;
3. Шағир ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу,Тыуған илгә, телгә, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың китаптары күргәҙмәһе, презентация

Дәрес эшкәртмәһе

1. Психологик ыңғай хәл тыуҙырыу.

Хәйерле көн, уҡыусылар! Кәйефтәр нисек? Әйҙәгеҙ бер-беребеҙгә йылмайыу буләк итәйек! Рәхмәт!

Слайд 1. Иғтибар экранға: Башҡортостан картаһы күрһәтелә

- Уҡыусылар, беҙҙең республикабыҙ ниндәй өлкәләр менән сиктәш? (Силәбе,Свердловск,Пермь,Ырымбур).

Ырымбур өлкәһенә туҡталайыҡ. Белеүебеҙсә, Ырымбур яҡтары республикабыҙға күренекле дәүләт эшмәкәрҙәрен, хеҙмәт алдынғыларын, әҙәбиәтебеҙгә Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Сәғит Агиш кеүек атаҡлы яҙыусыларҙы биргән. Был рәтте тулыландырыу өсөн иғтибар экранға.

2. Уҡыу мәсьәләһен билдәләү. Слайд 2. Экранда шиғыр юлдары:

Өлгөрмәҫлек ташып бал ҡорттары
Йүкәләрҙән һығылып бал тама.
Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда
Нисек ҡулың барыр балтаға?

- Был шиғыр юлдары танышмы? Авторы кем? Һүҙ нимә тураһында бара?

(Яуап: Был шиғыр юлдары таныш. Шиғырҙа һүҙ йүкә ағасының шау сәскәгә төрөнөүе, шул мәлдә кешеләрҙең күпләп был баллы ағасты йәлләмәй ҡырҡыуы - йәғни тәбиғәт, уны һаҡлау тураһында һүҙ бара. Авторы - Р.Бикбаев). Слайд 3. Р.Бикбаев портреты

Дәрескә ниндәй уҡыу мәсьәләһе ҡуйырбыҙ? (Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән танышасаҡбыҙ).

3. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.

А) Р. Бикбаевтың тормош юлын өйрәнеү. (Уҡыусылар үҙаллы әҙерләнеп килеп сығыш яһайҙар. Экранда һәр сығышҡа әҙерләнгән слайдтар күрһәтелә).

1-се уҡыусы (Слайд 4-6). Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Ғәбдерәфиҡ ауылындағы туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-56 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. 1963-65 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый.

2-се уҡыусы (Слайд 7-8). Р. Бикбаев 1966 йылда «Хәҙерге башҡорт поэмаһы» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. 30 йылға яҡын Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Р.Бикбаевты Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлайҙар.Башҡорт әҙәбиәтен үстереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә.

3-сө уҡыусы (Слайд 9). Рауил Бикбаевтың ижад эше фәнни хеҙмәт менән тығыҙ урелеп бара: республикабыҙҙың йәмғәт эштәрендә ҡатнаша, матбуғатта көнүҙәк мәсьәләләр буйынса публицистик яҙмалар, әҙәбиәт, шиғриәт хаҡында мәҡәләләр менән сығыш яһай.Уның шиғыр китаптары, ғилми хеҙмәттәре Мәскәүҙә урыҫ телендә лә бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты.

4-се уҡыусы. 1997 йылда әҙәби-фәнни эшмәкәрлегенең тос емеше-«Шағир һүҙе-шағир намыҫы» тигән ижади портреттар, әҙәби мәҡәләләр, сығыштар йыйынтығы донъя күрҙе (китап күрһәтелә).

Слайд 9. (һүҙҙәрҙе уҡыу) - Миңә барлыҡ ижад юлымда шиғриәт менән фәнни эште бергә алып барырға тура килде, сөнки мин ғилем донъяһына осраҡлы килеп юлыҡтым, тип уйламайым, мин был ғәйәт оло һәм арбаусы мөхиткә асыҡ маҡсаттар ҡуйып, был хеҙмәттең ни тиклем ауыр һәм яуаплы икәнен аңлап килеп индем һәм ғүмерлеккә ҡалдым,- тип яҙҙы шағир үҙе.

5-се уҡыусы. Рауил Бикбаевтың нығлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Башҡорт дәүләт университетындағы ижади-ғилми мөхит, әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәгендә ҡатнашыу, йәш һәм оло ҡәләмдәштәре менән аралашыу ижад өсөн киң мөмкинлектәр аса.

6-сы уҡыусы. Слайд 11. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә.1962 йылда «Ағиҙел» журналында «Вокзал» исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. 1964 йылда «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға. Ижад емештәре артҡандан -арта бара:

1967 йыл-«Ҡош юлы»

1969- «Автобиография»

Китаптарын күрһәтеү: «Рәми»-2007, «Һайланма әҫәрҙәр»-2008

Б) Р.Бикбаев ижадына байҡау яһау. Төркөм менән эш (һәр төркөмгә шиғыр бирелә. Уҡыусылар шиғырҙы тасуири уҡый, «нимә?нисек? ни өсөн? схемаһы буйынса анализлай, терәк һүҙҙәрҙе таба).

1-се төркөм – «Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта»

(Һаҡлайыҡ беҙ ғәзиз Ер-Әсәне,

Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ!)

2-се төркөм- «Башҡортостан бында башлана»

(Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем,..)

В) Дәреслек менән эш. Уҡытыусы «Ғүмер уртаһы»шиғырын тасуири уҡый.

Г) Һүҙлек эше: хафа, хафаланыу- борсолоу,ҡайғырыу

Ғ) Сылбырлы уҡыу

Д) Һорауҙарға яуап: Слайд 12.

- Ғүмер уртаһы нисә йәш икән?(50)

- Шағир ни өсөн хафалана? (Үткәндәре шуҡлыҡ менән бушҡа үтмәгәнме, халыҡсан хаҡ һүҙҙәр әйтелмәй ҡалмағанмы икән, тип борсола).

- Ғүмер үртаһында шағир үҙен нисек тоя? (Үткәндәре хафаланырлыҡ түгел, шағир тормошто яҡшы аңлаған олпат шәхес. Шағир һүҙҙәре менән әйткәндә, «һәр тарафтан иҫкән елгә боролоп, һәр тауышҡа асылып, һәр ялтырауыҡҡа әүрәп бармай, ваҡланмай).

- Шиғырҙың һуңғы юлдары менән нимә әйтергә теләй? (Ир уртаһында ир һүҙенә тоғро ҡалырға, ил һәм халыҡ ышанысын аҡларға өндәй).

- Шиғырҙың төп мәғәнәһен асыҡлау. (Күберәк ир-егеттәргә мөрәжәғәт иткән кеүек, сөнки улар ил тотҡаһы, ил һаҡсыһы. Ил яҙмышы улар ҡулында...).

4. Рефлексия.

- Р. Бикбаев шиғырҙарында ниндәй мәсьәләләр күтәрә? (һәр уҡыусы һығымта сығара, дәфтәренә яҙып ҡуя, эштәр тикшерелә).

Уҡытыусы:

- Уҡыусылар, әйҙәгеҙ әле шағир исеменең хәрефтәренән башланған, шәхесенә тап килгән һыҙаттарҙы әйтәйек.

Р- рухлы

А- аҡыллы

У- уҡымышлы

И- илһөйәр (игелекле)

Л – лайыҡлы

Слайд 13.

- Ошо һүҙҙәрҙе ҡулланып шағирға рәхмәт (ҡотлау) һүҙҙәребеҙҙе әйтәйек!

Рухлы, уҡымышлы,илһөйәр шағырыбыҙ! Һеҙгә һаулыҡ, ижади уңыштар теләйбеҙ! Оло рәхмәтебеҙ һәм хөрмәтебеҙ һеҙгә! Һеҙ быға лайыҡлы!

Үҙбаһа. Бөгөнгө дәрестә нимәләр тураһында һөйләштек? Нисек уйлайһығыҙ, уҡыу мәсьәләһе сиселдеме? Эшмәкәрлегегеҙгә ниндәй баһа ҡуяһығыҙ?(Яуаптар: Шағирҙың тормошон, ижадын өйрәндек. Уҡыу мәсьәләһе сиселде тип уйлайым, сөнки шағир тәбиғәтте һаҡлау-яҡлау,үҙ ереңден ысын улы йәки ҡыҙы булыу проблемаларын күтәрә…

5. Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе. Слайд 14.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Дәүләт йыйылышы Ҡоролтай рәйесе Рауил Бикбаев сығышы менән Ырымбур яҡтарынан. Уның шиғыр-поэмаларында тыуып-үҫкән яғының тәбиғәт йәме, халҡының күңел күрке, тарихы, хәҙергеһе сағылыш таба. Шағир үҙ Ватанын, туған халҡын данлай, заман кешеһенең рухи донъяһын тасуирлай, көнүҙәк мәсьәләләрҙе ғорур күтәреп сыға.

Слайд 15. Уҡыусылар, 3-сө Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайында миңә Р.Бикбаев менән осрашырға, һөйләшергә насип булды. Ул шундай алсаҡ, ябай һәм бөйөк шәхес. Уның ижадын алдағы дәрестәрҙә дауам итәсәкбеҙ.

Баһалар ҡуйыла.

6. Өй эше**:**

1.Шағирҙың үҙегеҙгә оҡшаған шиғырын ятларға, анализларға.

2. Ижади эш: шағирға арнап шиғыр юлдары яҙырға.

3. Эҙләнеү эше: шағир һүҙҙәренә ниндәй йырҙар бар?

Һау булығыҙ!

БАРЫП ЕТһЕН ИНЕ ХАТТАРЫМ

(Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына арналған ижад кисәһе)

Муллахмәтова Альбина Ринат ҡыҙы,
Әбйәлил районы Таһир Кусимов исемендәге Асҡар гимназияһы

Ғәмәли төркөм:

Ер Ағиҙел

Бәләкәй Рауил Ҡариҙел

Ағинәй Дим

Студент Рауил Балалар

40 йәшлек Рауил Мулла

Алып барыусылар: Ил, Күк.

Уҡыусылар Әҙәбиәт аҡһаҡалы –Рауил Бикбаев

Шаршау асыла. Иҙрисов Ф. Башҡортостан Республикаһы гимны: «Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер...» / Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙ яңғырай. Сәхнә түрендә – Рауил Бикбаевтың портреты. Һулда - экран. Экранда – Ырымбур далалары тәбиғәте. Яҙыусының бала, үҫмер, йәш, хәҙерге ваҡытын сағылдырған документаль кадрҙар.

1-се алып барыусы.

Түҙемһеҙлек менән көтә һеҙҙе
Байрам күлдәк кейгән изге ер
Ҡунаҡ йыя Шағир тыуған ер,
Ил телендә – Шағир яҙған ер.

2-се алып барыусы.

Соран һыуы ҡайнайҙыр,
Һыуҙа сабаҡ уйнайҙыр,
Шағир ғүмерен уйлайҙыр,
Ҡунаҡтарҙы барлайҙыр.
Йырлы-моңло тыуған ер –
Шағир тыуып үҫкән ер.
Иманлы ер ошо бит,
Илһамлы ер ошо бит.
Тарихлы ер ошо бит,
Тамырлы ер ошо бит.
Эй, туғандар , рәхим ит!
Йүгерешеп балалар сыға.
Беҙ-беҙ беҙ кемдәр?
Йыһандағы йондоҙҙар!
Беҙ-беҙ беҙ кемдәр?
Тарихтағы батырҙар.
Беҙ-беҙ беҙ кемдәр?
Шәжәрәле тамырҙар!
Йондоҙҙо таны, шағирыңды бел, тамырҙы тот!
Табырһың ҡот,

Булырһың башҡорт!

Ағинәй.

- Һай, афарин, балалар!Ҡайһылай матур итеп уйнап йөрөйһөгөҙ.
- Һаумы, өләсәй!
- Хәлдәрең нисек?
- Аллаға шөкөр, балаҡайҙарым. Үҙегеҙ ни хәлдә?
- Уйнайбыҙ, йырлайбыҙ, күңел асабыҙ.
- Эй, бала саҡта уйнап туйып булмай шул, әйҙә, уйнағыҙ, күңел асығыҙ. Донъялар ғына имен торһон!
- Ә һеҙ,балалар, ниндәй ырыуҙан икәнегеҙҙе беләһегеҙме?
- Беләбеҙ.

Балалар.

Элек олатайҙарым әйтер булғандар былай:
Ырыуыбыҙ – ҡыпсаҡ,
Ағасыбыҙ – ҡарағай,
Тәңре – ораныбыҙ,
Ә тамғабыҙ – даға.
Шундайын яҡты күгем
Һәм мин әйтәмен бөгөн:
Ораныбыҙ – дөрөҫлөк,
Ҡошобоҙ – аҡ күгәрсен,
Тамғабыҙ – ураҡ-сүкеш.
(“Автобиография” шиғырҙар йыйынтығынан.)

Ағинәй: - Шәһегеҙ ҙә инде ,балаҡайҙарым. Бына шулай боронғо Яйыҡ, Туҡ-Соран буйҙары, Ырымбур далалары – башҡорттарҙың борон-борондан йәшәгән ерҙәре булған.Күпте күргән, күпте кисергән ул беҙҙең яҡтар. Ата - бабаларыбыҙ, илен, ерен һаҡлап, монгол-татар яуҙарына ҡаршы һуғышҡан. Үҙ иркен яҡлап батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәргән, әллә күпме ир-егеттәребеҙ яуҙарҙа баштарын һалған. Ә инде революция йылдарында, башҡорттар беҙҙең Ырымбур яҡтарында хөкүмәт төҙөгән.

Шул нәҫелдән 75 йыл элек, Соран йылғаһы буйында, Үрге Ҡунаҡбай ауылында, ата-әсәһен, нәҫел-нәсәбен ҡыуандырып, бөтә ерҙе йәмләп, баһадир кәүҙәле , сәсән телле бер ир бала донъяға килә.

Балалар һәм ағинәй.(Аҙан тауышы аҫтында һамаҡлайҙар)

Ҡотоң менән тыу, бала,
Бәхетең менән тыу бала.
Әсәйеңә иш бул,
Атайыңа ҡуш бул.
Берәү булһаң,берәгәй бул,
Устан ашып, алға тул.
Һылыу булһаң, тыйыу бул,
Мырҙа булһаң, ҡыйыу бул.
Батыр бул, шағир бул,
Мөғәллим бул,йырсы бул,
Аҡыллы бул, зирәк бул,
Мөхәббәтле йөрәк бул!

Мулла.

Уң ҡолағына йүргәк исемең - …….

Һул ҡолағына ысын исемең- Рауил,- тип исем ҡысҡыртҡандар.

*Теләктәр теләү.*Кеше артты донъяла, ризығың менән, төклө аяғың менән. Бәхетле, сәләмәт бул, тәүфиғең, аҡылың үҙеңдә булһын, әсәйеңә ярҙамсы, атайыңа иш бул, уҡып ҙур кеше бул, кешеләргә изгелекле, игелекле бул.

1-се алып барыусы.
Үҫеп буйға етәр ул.
Шағир булып китәр ул,
Үҙенең тыуған иленә
Тырышып хеҙмәт итәр ул, - тип теләк теләгәндәр.
Ил. Ана, ҡалҡты ҡояш, тыуҙы шағир,
Сыңлап китте бер моң, бер яҡты йыр.
Тыуҙы бер ир Ырымбур далаһында…
Мөлдөрәмә тулы йөрәгендә.
Күк. Мөхәббәтле бала.Азат бала
Сәскәләрҙә аунап үҫкән.
Сәскәләрҙән аунар саҡтан
Ил аҡылын аңлап үҫкән.

Икенсе бүлек

Бәләкәй Рауил. Ҡыҙҙар, малайҙар, әйҙә уйнап алайыҡ!

Балалар. Әйҙә һуң!

- Осто-осто, бөркөттәр осто! (Балалар ҡулдарын күтәреп яуап бирәләр)
- Осто-осто, торналар осто!
- Осто-осто, дөйәләр осто!
- Дөйә ocha, Рауил телгә оҫта!
- Әйҙә, Рауил, һин ҡалдың. Һин шиғыр яҙырға һәм һөйләргә маһирһың, һөйлә берәй шиғырыңды.

- Әйе, әйҙә!

Бәләкәй Рауил.

Йондоҙҙармы миңә шиғыр һөйләй -
Төштәремә керә шиғырҙар.
Таңда мине елдәр уяталар,
Ҡолағыма шиғыр шыбырҙап.
Тик күҙемде асһам, шиғыр ҡасҡан.
Үрелһәм дә етмәй ҡулдарым.
Йөрәгемдең ҡапҡаларын асып.
Кәртәләйем уның юлдарын.
("Ҡош юлы" китабынан)

*Балалар.*һай, афарин,Рауил! Оҫта теллеһең дә инде. Ҙурайғас шағир булырһың ул.
Өсөнсө бүлек.

2-се алып барыусы. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Фәбдерәфиҡ ауылына тыуғандарына күсеп килә.Ошо ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамалай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый.

Йәш Рауил.

Аҡ – Булағым минең. Эй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.
Һин өйрәттең һис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ.
Ғүмеремдең йылтыр инеш булып
Сылтыраған сағы – Аҡ-Булаҡ!
Йәшлегемдең керһеҙ тулҡындары
Йөрәгемә һуғыла һаҡ ҡына.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев 1957 йылда Өфөгә юллана. Ул Башҡорт дәүләт филология факультетына уҡырға инә.

Студент Рауил.

Дөрөҫ аңла, ҡала! Рәхмәтем ҙур:
Астың миңә сере ғилемдең.
Өйрәттең һин нығыраҡ һағынырға,
Нығыраҡ яратырға телемде.
Ауыл малайына яҡын иттең
Ҡабалан һәм ярһыу тормошто.
Тиндең генә түгел,минуттарҙың
Ҡәҙерен аңлатырға тырыштың.("Автобиография" китабынан "Ҡала" шиғырынан өҙөк.)

2-се алып барыусы.

Университетты тамалағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел, һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый, 1966 йылда "Хәҙерге башҡорт поэмаһы" тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.Утыҙ йылҡа яҡын ошо Тарих, тел һәм әҙбиәт инстиутында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

40 йәшлек Рауил.

Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
Һөҙөп ташлап шау-шыу туртаһын,
Юлдарыма хафа менән бағам.
Еткән саҡта ғүмер уртаһы
Эй,ҡорҙашым!
Төҫмө ир-егеткә
Сәбәләнеп юҡҡа ваҡланыу?
Ғүмеребеҙҙең уртаһына баҫтыҡ.
Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип,
Ҡарай беҙгә ил күҙе.("Ғүмер уртаһы" китабынан)

1-се алып барыусы.

1995 йылда яҙыусылар Союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Бик күп шиғырҙар йыйынтыҡтары донъя күрә. Шағирҙың һәр яңы йыйынтығы уның ғүмер юлының бер киҫәге, яҙмышындағы ҡабатланмаҫ бер миҙгелдең сағылышы, шул йылдарҙа кисергән-күргәндәре.Бына улар: "Дала офоҡтары"(1964),"Ҡош юлы" (1967), "Автобиография" (1969), "Лирика" (1971), "Ғүмер уртаһы"(1967), "Һөйөнсө"(1979), "Ерем балҡышы"(1982), "Бураҙналар"(1985), "Яҙмышым"(1988), "Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!"(1991),"Ай күргәндәй,ҡояш алғандай" (1998).

Дүртенсе бүлек

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев – замана ағышына, кешеләр яҙмышына һүҙгер ҡолаҡ һалыр шағир.Илебеҙҙең үткәненә лә, бик үк төҫмөрләнгән киләсәгебеҙгә лә ҡараш ташлана."Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!" поэмаһы бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр. Хәҙерге заманда күптәребеҙҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль, иҡтисади, экологик

һәм әхлаҡи-әҙәп мәсьәләләрен тура һәм үткер ҡуя. Ағиҙел, Ҡариҙел, Димдең һөйләшеүҙәре.(Йылға тауыштары сығa).

Ҡариҙел: һаумы, Ағиҙелкәй!
Алыҫтарҙан һағыныуым мине әйҙәне.
Ҡуйыныма алдым шишмәләрҙе,
Йор Йүрүҙән, йәмле Әйҙәрҙе.
Ҡара тиһәләр ҙә күңелем саф,
Һыуым таҙа, йөҙөм аҡ,
Йөҙҙәремә хәҙер ни яҡмайҙар,
Киләлманым һиңә пак көйө.
Ҡариҙел һәм Дим.
Һыйынырға һиңә үҙәнеңдән
Тиҙерәк урын бирсе, Ағиҙел!
Саф ҡуйыныңда таплы йөҙөбөҙҙө
Сайҡай ғына күрсе, Ағиҙел!

1-се алып барыусы. Халыҡ шағиры тыуған еребеҙ, тәбиғәтебеҙ кеүек үк туған телебеҙҙең ҡороп барыуы хаҡында хафаланып уйлана.

Туғанынан яҙған – ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал милләтем! (“Халҡыма хат” поэмаһынан өҙөк).

2-се алып барыусы. Рауил Бикбаев яҙыусылыҡты ғилем эше менән ҡушарлап алып барған яҙыусы. Үҙен уйландырған һәм борсоған мәсьәләләрҙе Рауил Бикбаев публицистик һәм әҙәби тәнҡит мәҡәләләрендә ҡыйыу күтәреп сыға.

1-се алып барыусы. Байтаҡ ғилми китаптары, монографиялары баҫылып сыҡты.”Шағир һүҙе-шағир намыҫы” йыйынтығында төрлө быуын шағир һәм яҙыусыларының ижади портреттары, сығыштар, тәнҡит мәҡәләләре тупланған. *Әҙәбиәт аҡһаҡалы- Рауил Бикбаев.*

Йырҙар яҙам. Халҡым түгел наҙан,
Барып етер, тимен хаттарым.
Барып етер шифырым-хатымдағы
Өмөт-хыялдарым, аһтарым.
Йоҡлар йоҡоһонан яҙһын кеше,
Яҙмаһын тик еренән, иркенән.

1- *се алып барыусы.* Республикабыҙҙың Ғәлимов Сәләм исемендәге(1992)
2-се алып барыусы. Рәми Ғарипов исемендәге.
*1-се алып барыусы***.** Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева исемендәге.
2-се алып барыусы. Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премиялары лауреаты.

1-се алып барыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре Рауил Бикбаевтың ырыҫлы ижады Башҡортостан әҙәбиәте һәм тарихында мәңге ҡаласаҡ! Әҙәбиәт аҡһаҡалы- Рауил Бикбаев.

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар! (“Халҡыма хат” шиғри-хатынан).

1 – се уҡыусы. Бөтә башҡорт халҡы ил ағаһы Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейын туйлай. Уның ижады – рухи һәм тарихи байлығыбыҙ, алтындарға алмаштырғыһыҙ хазинабыҙ!

Ирмен тигән ирме олтан булыр?
Сит илдәрҙә солтан булғансы ир,
Үҙ илендә олтан булғансы ир,
Ил күкрәген һаҡлар ҡалҡан булыр.(“Сит илдәрҙә солтан булмам” шиғырынан)

2 – се уҡыусы.

Ил ағаһы илдә иман һаҡлай,
Рухынан ҡасыр ил яманы.
Рауил Бикбаев , тигән йондоҙ
Меңәр йыл яҡтыртыр донъя!
Тақмаҡтар. Соран буйы ҡурайҙарын,
Уйнап ебәрһәң ине.
Ҡаяларҙы яңғыратып,
Йырлап ебәрһәң ине!
Баҫма һалдым тар ергә,
Тал тамыры бар ергә.
Башҡортостан сәскә ата,
Рауил Бикбаев бар ерҙә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ” ШИҒЫРЫ. ЯҢҒЫҘЛЫҠ ИСЕМДӘРҘЕҢ ДӨРӨҪ ЯҘЫЛЫШЫ

Нурмөхәмәтова Физәлиә Кинйәғәли ҡыҙы
Күгәрсен районы Мораҡ ауылы башҡорт гимназияһы

Маҡсат:

1) Грамматика буйынса яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы;
2) Рауил Бикбаевтың “Салауат ҡылысы” шиғырын өйрәнеү;
3) бөйөк шәхестәребеҙ менән ғорурланыу тойғоһо, ихтирам, илһөйәрлек тәрбиәләү.

Йыһазландырыу:

1) Мультимедиа проекторы
2) Рауил Бикбаевҡа арналған плакат.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу.

Хәйерле иртә, уҡыусылар, кәйефтәрегеҙ нисек? Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә ҡарап йылмаяйыҡ, сәләм бирәйек.

Башланып китте дәрес,
Беҙ матур ултырабыҙ.
Дүртле, бишле билдәләрен,
Көн һайын арттырабыҙ.

2. Төп өлөш. Проекторҙа һүҙҙәр бирелә. Фонетик күнегеү. Үҙенсәлекле өндәре булған һүҙҙәрҙе генә уҡырға: таҫма, баҫма, өкө, класс, киң, мин, һин, ҡар, көҙ, Нәсимә, Ағиҙел, Кинйә, “Аҡбуҙат”, Ирәмәл, Күгәрсен.

Уҡыусылар, һеҙ иғтибар иткәнһегеҙҙер, ҡайһы бер һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙылғайны. Улар ниндәй һүҙҙәр? Яңғыҙлыҡ исемдәр.

Уҡыусылар үҙҙәре миҫалдар килтерә. Бергәләп ҡағиҙә сығарабыҙ: башҡорт телендә лә, рус телендәге кеүек, яңғыҙлыҡ исемдәр (собственные имена существительные) һәм уртаҡлыҡ исемдәр (нарицательные имена существительные) бар. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙе ҙур хәреф менән яҙабыҙ.

3. Теманы әйтер алдынан түбәндәге даталар теҙмәһе күрһәтелә (проектор) 1752 – 1800 – 1938 – 2013 – 75.

Класҡа һорау: был даталар бер-береһенә нисек бәйләнгән? Яуаптар төрлө: бергәләп һығымта яһар алдынан проекторҙа күрһәтелгән Салауат Юлаев һәйкәле һүрәтен, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев портретын, Малаяҙ ауылындағы Салауат музейы экспонаттарын ҡарайыҡ һәм теманы билдәләйек. Ошо ике бөйөк шәхесте һәм экспонаттарҙы (ҡылыс, эйәр) нимә берләштерә?

Һығымта яһау: 1752-1800 – Салауат Юлаев йәшәгән йылдар. 1938 й. – Рауил Бикбаевтың тыуған йылы. 2013 йылда шағирға 75 йәш тула (12 декабрь).

4. Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры быйыл декабрь айында 75 йәшлек юбилейын билдәләйәсәк. Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың “Салауат ҡылысы” шиғырын өйрәнәбеҙ. Дәфтәргә темалар яҙыу. Шиғыр буйынса һүҙлек эше үткәрәү:

ырыҫ – бәхет, счастье
нәфрәт – ненависть
аманат – изге ҡомартҡы
һатлыҡ йән – предатель

Шиғырҙы уҡытыусы уҡып ишеттерә. Грамматик темаға бәйле булған һүҙҙәрҙе билдәләп, дәфтәргә яҙабыҙ: Салауат, Урал, Рәсәй.

Шиғырҙы сылбырлап уҡыу, һәр строфоға аңлатма биреү.

Салауат ҡылысы батыр ҡулында бар Рәсәйҙе дер һелкеткән. Тарих менән бәйләү, проекторҙа күрһәтелгән датаны дәфтәргә лә яҙыу. 1773-1775 й. – Рәсәйҙә Крәҫтиәндәр һуғышы булған. Етәкселәре Емельян Пугачев һәм Салауат Юлаев.

Рауил Бикбаев Салауат ҡылысының яҙмышын һөйләй.

Телгә килһә ни һөйләмәҫ ине
Устарымда ятҡан ҡомартҡы.

Класҡа һорау: Уҡыусылар, әгәр Салауат ҡылысы телгә килһә, ул нимәләр һөйләр ине икән?

Яуаптарҙы тыңлау, һығымта сығарыу.

Эйе, был ҡылыс бик күп ваҡиғалар тураһында һөйләр ине. Йәш Салауат көслө, аҡыллы, ҡыйыу, көслө рухлы шәхес булған.

Экранда Салауат ҡылысы күрһәтелә, уның тураһында мәғлүмәт дәфтәрҙәргә яҙыла: ҡылыс әлеге көндә Салауаттың музейында һаҡлана. Оҙонлоғо 96 см, киңлеге 3 см. Тотҡаһы һары металдан эшләнгән, ул арыҫлан башы һүрәте һәм ваҡ таштар менән биҙәлгән. Ҡылысҡа ғәрәп хәрефтәре менән нимәләр яҙылған.

Класс менән әңгәмә.

“Исемен әйтһәң, телде киҫкәндәр”, тип шағир ни әйтергә теләгән? Яуаптар тыңлау һығымта. – Оҙаҡ йылдар Салауат Юлаев исемен телгә алырға ярамаған. Хатта яңы тыуған сабыйҙарға Салауат тигән исемде ҡушырға тыйғандар. Батыр исемен халыҡ хәтеренән алып ташларға уйлағандар. Ләкин Салауат исеме быуаттар буйы халыҡ хәтерендә һаҡланған. Бөгөнгө көндә Башҡортостанда батыр исемен күп ерҙәрҙә осратырға мөмкин. Беҙҙең Мораҡ ауылында ла герой исемен йөрөткән урам бар.

Йомғаҡлау өлөшө.

Шулай итеп, уҡыусылар, бөгөн беҙ халҡыбыҙ тарихына сәйәхәт яһаныҡ. Легендар герой, шағир – импровизатор Салауат Юлаев тураһында һөйләштек. Башҡортостандың халыҡ шағиры БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың шиғырын өйрәндек.

һеҙҙ ҙә батырыбыҙ кеүек ҡыйыу, йор һүҙле, аҡыллы булып үҫегеҙ. Дәрестә әүҙем ҡатнашҡан уҡыусыларға баһалар ҡуйыу.

Өй эше: шиғырҙан өҙөк ятларға.

Дәресте йомғаҡлау.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Таһыҡҡужина Әнисә Зәбихулла ҡыҙы,
Ейәнсура районы Иҫәнғол ауылы 1-се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу.

2. Башҡортостан тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәк тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу, уҡыусыларҙа илһөйәрлек тәрбиәләү.

3. Уҡыусыларҙың һөйләү күнекмәләрен үҫтереү, һүҙлек байлығын арттырыу.

Йыһазландырыу:

1). Р. Бикбаевтың портреты.

2). Шағирҙың китаптары.

3). Марат Түләбаевтың «Үҫәргәндәр ере – Ейәнсура» китабы.

Башҡортостан картаһы, һүрәттәр, ребус, мультимедиа, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, компьютер.

4. Күренекле шәхестәрҙең портреттары.

5. Һүрәтләү сараларына таблица.

Дәрес барышы

I. Ойоштороу мәле.

Ҡурай моңо аҫтында уҡытыусы ҡобайыр һөйләй.

Был донъянан ни ҡалыр?
Кем ҡалыр ҙа ни ҡалыр?
Шағирҙан аҫыл һүҙ ҡалыр
Йырсынан аҫыл йыр ҡалыр,
Атанан аҫыл ул ҡалыр
Әсәнән аҫыл ҡыҙ ҡалыр
Сәсәндәрҙән тел ҡалыр
Батырҙан дан ҡалыр.
Тарих тип өҙөлгән,
Бар ғүмерен шуға биргән
Ғалимдарҙан ни ҡалыр?
Халҡым тарихы байҡалыр,
Халҡым теле һаҡланыр,
Мираҫыбыҙ барланыр,
Бары бергә тупланып
Аҫыл ҡомартҡы ҡалыр,
Аҫыл ҡомартҡы ҡалыр.

- Был ҡобайырҙа нимә хаҡында һүҙ бара?

- Күренекле шағирҙан кемдәрҙе беләһегеҙ? (Иле, ере, милләте, теле өсөн көрәшеүсе, милләттәрҙең йөҙөн билдәләүсе шәхестәр хаҡында әңгәмә).

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн, кем хаҡында һүҙ бара икәнен белер өсөн кроссворд сисергә кәрәк.

Экранда күрһәтелә.



1. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.
2. Ағиҙел йылғаһы башланған тау. Башҡортостандың иң бейек тауы.
3. Башҡорт халҡының милли гимны.
4. Белем шишмәһе.

5. Башҡортостандың иң ҙур күле.
6. Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы.
7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға.
8. З. Биишева тыуған район
9. Төрки халыҡтарының ҡыллы музыка ҡоралы.
10. Башҡорт халҡының милли батыры.
11. Республикалағы газета.
12. Тыуған ил.

Кем ул Рауил Бикбаев?

(экранда таблица)

(экранда Р. Бикбаевтың портреты һәм тормош юлындағы мөһим ваҡиғаларҙы күрһәткән даталар бирелгән).

Бөгөнгө дәрестә шағирҙың «Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнәбеҙ.

Һүҙлек эше.

1. «Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнер алдынан республика тураһындағы:

1) шиғырҙарҙы ятлау,

2) Тыуған илдең матур тәбиғәтен тасуирлаған һүрәттәрен күрһәтеү.

3) М. Түләбаев китабынан Ейәнсура еренең матур тәбиғәтен тасуирлаған һүрәттәрҙе күрһәтеү.

4) Халыҡ йырҙарын тыңлатыу.

2. Шиғырҙы тасуири уҡыу.

3. Шиғыр буйынса эш.

1) Шиғырҙың тәүге дүрт куплетын уҡыу һәм Башҡортостандың ҙурлығы, киңлеге, байлығын тасуирлау (экранда Башҡортостан картаһы), тасуирлағанда шиғыр юлдары ҡулланыла.

2) Һуңғы строфаларҙа Башҡортостандың киңлеге, байлығы ғына түгел, кешеләренең республика алдындағы яуаплылығы хаҡында ла әйтелә.

Башҡортостанда ғына түгел, ә бөтә донъяға даны таралған шәхестәр тураһында һөйләргә, портреттарын (экранда) күрһәтергә. (С. Юлаев, Р. Нуриев, Р. Зарипов, М. Кәрим, З. Вәлиди, Р. Хәмитов һ.б. фотолары).

3) Башҡортостан исеменән әйтелгән «Мин бит башланамын һинән, унан, кешеләрем, һеҙҙән башланам» тигән шиғыр юлдарының мәғәнәүи төшөнсәһен аңлатып бирергә.

Башҡортостан исеменән бөтә донъяны урап сыҡҡан улдарының уның йөҙөн ҡыҙартмаҫлыҡ, һәр саҡ яҡты, асыҡ, уның ғорурлығын арттырырлыҡ булырға тейешлеге һөйләнелә. Шиғыр шағирҙың ил улдарын кешеләргә тура ҡарарлыҡ яҡты йөҙлө булырға саҡырыуы менән тамамлана.

Гүзәл тәбиғәткә булған шағирҙың сикһеҙ мөхәббәте ошо ерҙән, ошо йылғаларҙан башланғандыр. Һыу, ер – бөтә башланғыстың башы бит ул. Уларҙан башҡа кеше үҙе лә юҡтыр. Шулай булғас, беҙ уларҙы һаҡларға бурыслыбыҙ.

Уҡыусылар, шағир ошо тәбиғәттең матур сифаттарын, уларға булған яратыу хистәрен ниндәй һүрәтләү саралары ярҙамында еткерә?

Йәнләндереү сараһы. Миҫалға шиғыр юлдарын уҡыйҙар:

1. Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым.
2. Ишетәмен ер ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын.

Сағыштырыу.

1. Минең кеүек – Башҡортостан кеүек.
2. Яҙ айында һабан турғайындай

Метафора.

1. Талпына күңел.
2. Күңел күктә тулай.

Эпитет.

1. Йөҙөгөҙ аҡ булһын.
2. Сабыр тауыш.

Р. Бикбаев һүрәтләү сараларын һөйләмдәргә матурлыҡ биреү өсөн, әҫәрҙең төп идеяһын асыу өсөн ҡуллана.

Шиғырҙы йомғаҡлау.

1) Һеҙ Башҡортостан тураһында тағы нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?

2) Ни өсөн шағир тыуған ерен, илен ташламай?

3) Ребус сисеү: Үҙ илең – (6н 5ек)

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы, аң-белемгә ынтылыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала.

Ейәнсура районының тәбиғәте буйынса һорауҙар:

1) Ейәнсура районындағы иң бейек тау нисек атала?
2) Иң оҙон йылға һәм уның тураһында яҙған яҙыусының исеме (Эйек, З. Биишева)
3) Үҫкәлек йылғаһы тураһында йырлаған Башҡортостандың халыҡ йырсыһының исеме (М. Ғәлиева)
4) Сыуалташ ҡайһы ауыл эргәһендә урынлашҡан? (Самаҙы)
5) Башҡортостандың атҡаҙанған артисы С. Абдуллин ниндәй йылға тураһында йырлай? (Ҡаҫмарт).

Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы уның шиғырҙарында сағыла.

2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевҡа 75 йәш тула.

IV Өйгә эш.

1. Шиғырҙы тасуири уҡырға.
2. Башҡортостан, уның тәбиғәте тураһында һөйләргә әҙерләнергә.

БАШҠОРТСТАННЫҢ ХАЛЫҠ ШАГЫЙРЕ РАУИЛ БИКБАЕВНЫҢ “САЛАВАТНЫҢ ЧАҢГЫ ӘЗЛӘРЕ” ШИҒЫРЕ БУЕНЧА ДӘРЕС-ӘҢГӘМӘ

Руфиева Филюза Борисовна,
Салават районы Таймый мәктәбе

Тема: Класстан тыш уку. Равил Бикбаевның «Салаватның чаңгы әзләре” шигыре буенча фикер алышу дәресе.

Максат:

1. Тугандаш башкорт халык шагыйре Равил Бикбаевның тормыш һәм иҗат юлы белән танышу. С. Юлаев турында белемнәрне актуальләштерү.

2. Укылган әсәр буенча фикер йөртергә һәм бәйләнешле сөйләм үстерүне камилләштерү, алган белемнәрне гамәлдә куллана алу күнекмәләрен үстерү

3. Юбиляр шагыйрьгә һәм милли батырга карата хөрмәт тәрбияләү.

Дәрес тибы: уку мәсьәләсен кую һәм чишү.

Дәрес төре: Дәрес – әңгәмә.

Предметара бәйләнеш: тарих һәм әдәбият.

Ҡулланылған әҙәбиәт: Башкортстандагы татар мәктәпләренең 8 сыйныфы өчен сыйныфтан тыш уку китабы. Ә.З.Әхәтов – Уфа: Башкортстан “Китап” нәшрияты, 2003, компьютер, презентация, интернет челтәре, карточкалар, Р. Бикбаев, С. Юлаев портретлары, Р. Бикбаевның җыентыкларыннан китап күргәзмәсе.

Дәрес барышы:

I. Мотивлаштыру – ориентлашу.

2. а) Психологик уңай халәт тудыру. Слайд №1.

Мин иртә белән мәктәпкә киләм,
Зур теләк белән класска керәм.
Иптәшләремнең хәлләрен беләм:
Исәнме, Азат, исәнме, Ислам,
Сезгә, дусларым, иртәнге сәлам!
Кәефләр ничек, чирләмисезме?
Сәлам, дусларым, сәлам, сәлам, сәлам!

б)Үткән класстан тыш уку дәресендә нинди уку мәсьәләсен чишкән идек?

Көтелгән җавап: - Ш. Бабич шигырьләре белән танышкан идек.

Үзбәя.

3. Уку мәсьәләсен кую ситуациясе.

“Адашкан иҗекләр” ике төркемгә таратылып бирелә. Беренчесе − шагыйрьнең исем фамилиясен, икенчесе – шигырь исемен төзи.

Көтелгән җавап: − Равил Бикбаев һәм Салаватның чаңгы әзләре.

Укытучы: Димәк, бүген дәрестә нинди сөйләшү булачак дип уйлыйсыз?

Көтелгән җавап: − Равил Бикбаевның “Салаватның чаңгы әзләре” әсәрен укыйбыз.

Укытучы: − Дөрес. Дәрескә нинди максат куяр идегез?

Көтелгән җавап: − Р. Бикбаевның тормыш һәм иҗат юлы белән танышырга.

“Салаватның чаңгы әзләре” исемле шигырен өйрәнәбез.

Укытучы: − Яхшы. Без башкорт халык шагыйре – юбиляр Равил Бикбаевның тормыш һәм иҗат юлы белән танышып, аның “Салаватның чаңгы әзләре” исемле шигыре буенча фикер йөртербез. (Дәфтәрләргә датаны һәм теманы язып куябыз). Слайд №2.

II. Уку мәсьәләсен адымлап чишү.

Укытучы: − Сыйныфтан тыш уку китабыннан укып килгән шигырьләр нинди темага һәм кемгә атап язылуын аңладыгыз?

Көтелгән җавап: − Сыйныфтан тыш уку китабында Р.Бикбаевка атап язган шигырьләр укыдым.

− Аның курай, Башкортстан, Урал, күршеләр, мәхәббәт, намус, яшәү турында шигырьләре белән таныштым.

Укытучы: − Шигырьләреннән аның нинди кеше икәнен чамалап белеп була?

Көтелгән җавап: − Ул чая, гадел, курку белмәс, җиңүче, бөек, каһарман.

Укытучы: − Бик дөрес. Игътибарны экранга юнәлтүегезне сорыйм. Слайд№3 (портрет). Шагыйрьнең портретын язарга тәкъдим итәм.

Модельләштерү.

Көтелгән җавап: − Минем игътибарны аның кап-кара бөдрә чәчләре тарта, сакал – мыеклы йөз, рәхимле, акыллы күзләр, киң маңгай, кара кашлар.

− Олпат гәүдәле кеше икәнен чамаларга була, чөнки киң кулбашлар шуның турында сөйли.

− Ул - интеллегент.

− Портретына карап мин аны бик акыллы, гадел, рәхимле кеше дип уйлыйм.

− Ул ягымлы, тәҗрибәле, таләпчән, җитдидер, минемчә.

Укытучы: Әйе, мин дә сезнең белән тулысынча килешәм. Слайд №4. Шундый акыллы, гадел, белемле, тәҗрибәле, җитди кешене нинди бәрәкәтле җир тудырды? Ул кайда укыды? Кайларда эшли дигән сораулар туа. (Укытучының слайдлар буенча чыгышы).

Слайд №5. Равил Төхфәт улы Бикбаев 1938 елның 12 декабрендә Ырынбур өлкәсенең Покров (хәзерге Переволокий) районында Югары Кунакбай авылында туа. Хәрмәтле шәхескә тиздән 75 яшь тулачак.

Слайд №6. Ул 1953-1956 елларда Акбулак педагогия училищесендә укый. 1957 елда Уфага килеп Башкорт дәүләт университетының филология факультетына укырга керә. Университетны уңышлы тамамлагач, 1962-1965 елларда СССР Фәннәр академиясенең Уфадагы Тарих, тел һәм әдәбият институты аспирантурасында укый. 1966 елда кандидатлык һәм докторлык диссертациясен яклый.

Слайд №7. Равил Бикбаевның ныклап языша башлавы университетта укыган елларына туры килә. Шигырьләре республика матбугатында 1957 елдан бирле басылып килә. 1962 елда «Агыйдел» журналында «Вокзал» исемле тәүге поэмасы басылып чыкты. 1964 елда «Дала офыклары» дигән беренче китабы дөнья күрде. Р. Бикбаев хәзер дистәдән артык китап авторы.

Слайд №8. Аңа «Автобиография» дигән китабы өчен 1970 елда республика комсомолының Г.Сәләм исемендәге премиясе бирелде. Равил Бикбаев шагыйрьлек эшен әдәбият гыйлеме белән тыгыз бәйләп алып бара. Аның Ш.Бабич тормышына һәм иҗатына арналган монографиясе, «Заманыбызның поэтик елъязмасы» дигән хезмәтләре хәзерге көндә башкорт поэзиясенең теоретик мәсьәләләрен өйрәнү белән мәшгуль. Р.Гарипов әсәрләрен җентекле өйрәнү һәм халыкка җиткерүгә күп көч салды. М. Кәрим, Б. Бикбай, Р. Нигъмәти һәм башка бик күп шагыйрьләрнең иҗади портретларын язды, башкорт әдәбиятының алты томлык тарихын бастырып чыгаруга бик күп көч салды.

Фәннәр академиясенең Уфадагы Тарих, тел һәм әдәбият институтында озак еллар әдәбият секторында өлкән гыйльми сотрудник булып эшли.

Р. Бикбаев тәрҗемә өлкәсендә дә актив, матбугатта публицистик мәкаләләр белән еш чыгыш ясый.

Слайд №9. 1989 елда Р. Бикбаевка «Язмышым» китабы һәм «Сусадым − сулар бирегез!» поэмасы өчен республиканың Салават Юлаев исемендәге премия бирелде.

Слайд №10 Ул Башкортстан Язучылар союзы идарәсе рәисе һәм Русия язучылар союзы идарәсе сәркәтибе булып тора.

Слайд №11 1964 елда Равил Бикбаевның «Дала офыклары» исемле тәүге шигъри җыентыгы чыга. Аннан соң дөнья күргән «Кош юлы», «Автобиография», «Гомер уртасы», «Җирем балкышы», «Язмышым», «Ай күргәндәй, кояш алгандай» һ.б. китаплары башкорт шигъриятенең үсешенә зур өлеш кертте. Бигрәк тә заманның иң кискен һәм борчулы хәлләре хакында язылган «Халкыма хат», «Сусадым, сулар бирегез!», «Система», «Базар балтасы», «Башсыз сыбайлы», «Барокамера» дигән поэмалары киң билдәлелек алды.

Слайд №12. Уфада, Казанда, Мәскәүдә башкорт, татар, урыс телләрендә җыентыклары басылды; чуаш, алтай, казак, украин, төрек, якут, немец телләренә тәрҗемә ителде.

Слайд №13. Галимов Сәләм исемендәге яшьләр премиясе (1970), Башкортстанның Салават Юлаев исемендәге дәүләт премиясе (1989), Башкортстанның халык шагыйре (1993), Башкортстанның атказанган фән эшлеклесе, Рәми Гарипов исемендәге премия лауреаты (1994), Дуслык ордены (2000), БР Салават Юлаев ордены (2000), Зәйнәп Биишева исемендәге премия (2003).

Слайд №14. Ул – шагыйрь, публицист, филология фәннәре докторы, профессор һәм җәмәгать эшлеклесе.

Физкультминут.

Дәреслек белән эш. Укытучының “Салаватның чаңгы эзләре” шигырен сәнгатьле укуы.

Шигырьне укучылардан укыту.

Үзбәя.

Укытучы: Алсу, Азат, Фәдис, Камилның укуы бик ошады. Айдар, Тимур, Регина сезгә ашыкмыйчарак укуыгызны сорыйм. Мансур, Айнурга сәнгатьлелек өстендә эшне дәвам итәргә киңәш итәм.

Шигырь ошадымы? Сүз кем һәм нәрсә турында барганын әйтеп карагыз.

Көтелгән җавап: − Шигырь ошады. Сүз С.Юлаевның үлемсезлеге турында бара.

Укытучы: Димәк, шигырь нинди темага язылган?

Көтелгән җавап: Салават Юлаевның үлемсезлеге. (Шигырьнең темасын укучылар дәфтәргә язып куя).

Аның турында кем нәрсә белә, чиратлашып әйтә баруыгызны сорыйм.

Көтелгән җаваплар: − С.Юлаев башкорт халкының легендар милли батыры.

- ✓ Ул Тәкәй авылында туган.
- ✓ С.Юлаев шигырьләр иҗат иткән һәм бик оста сөйләгән.
- ✓ Безнең районыбыз, Башкортостанда шәһәр, күп оешмалар, урамнар, парклар, хоккей командасы аның исемен йөретә.
- ✓ Башкалабызда һәйкәл бар.
- ✓ Малоязда музей эшли.
- ✓

Укытучы: Җаваплар белән канәгатьмен, рәхмәт. Р.Бикбаев шигырендә нәрсә әйтергә теләгәнен билгеләп карыйк.

Көтелгән җавап: − Беренче строфада сорау куела һәм җавап бирелә. Минемчә, Салават эзләре күренә икән, димәк, ул онытылмаган.

Укытучы: − Бик дөрес уйлыйсың, рәхмәт. Дәвам итик.

Көтелгән җавап: − Икенче строфада ялкынлы юлбашчы Салават Юлаев ирекле, бәхетле тормыш өчен көрәшкә күтәрелүе, күпләрнең ятып калуы һәм милли батырның да әсир булуы турында язылган.

Укытучы: − Өченче строфада турында нәрсә белдегез?

Көтелгән җавап: - С. Юлаев башлаган эшләрне дәвам иткәннәр һәм гаделлек җиңеп чыккан.

Укытучы: − Дүртенче, бишенче строфалар буенча нәрсә әйтә аласыз?

Көтелгән җавап: − Күпме еллар үтсә дә батыр онытылмый, ул – үлемсез. Аның исемен мәңгеләштерү буенча бик күп эшләр башкарыла. Шулай булмыйча мөмкин түгел. Һәр кеше аның исемен күңелендә йөретергә тиеш, чөнки ул безнең бәхетле тормыш өчен гомерен дә кызганмаган.

Укытучы: Рәхмәт җавапларыгыз өчен. Фикерләрегез бик матур булды. Хәзер дәфтәрләрегезгә шагыйрь әйтәсе килгән идеяне язып куюыгызны сорыйм. Рәхим итегез.

Көтелгән җавап: С.Юлаев эшләгән батырлыклар онытылмый.

Үзбәя.

Индивидуаль эш. (Укытучы урындыгы белән бер укучы янына күчеп утырып, бергә эшлиләр – индивидуаль эш. Калган укучыларның эшен йөреп тикшереп чыга, нәтиҗә ясый).

Үзбәя.

Укытучы: Укучылар, сез шигырь ошады дидегез. Шигырь сезгә ничек тәэсир итте?

Көтелгән җавап: Горурландым.

- С.Юлаев темасы бер әдипкә дә битараф булмаганына шатландым.
- С. Юлаевны кызгандым.
-

Укытучы: - Җавапларыгыздан мин бик канәгатьмен. Әдәби әсәрне аңлауда әдипнең теле дә искиткеч роль уйный. Бу шигырьдә дә идеяне җиткерүдә сурәтләү чаралары ярдәм итә. Ике төркемгә бүленеп сурәтләү чараларын табуыгызны һәм дәфтәрләргә язуыгызны сорыйм.

Көтелгән җавап: Кайда калды яуга ташланганда Ат тоягы ташны изгәне?! (риторик сорау); омтылган уктай, тышауланган кырыкмыштай, ук башагы кебек (чагыштыру); Салаватның соңгы чаңгы эзе (кабатлау); кызган батыр, азат адымнары, богау бугач, әз уелган, күмелми ул яра, эзләр юылмый (метафора); ак карларга батыр каны агар, ак карларны ябар кара таң, котырыныр шул таң Каратау (җанландыру).

Үзбәя.

Нәтиҗә ясала.

III. Рефлексия, бәяләү.

Укытучы: Дәрескә нинди максат куйган идек? Нәрсә белә идек? Нәрсә белдек? Ничек белдек? Алган белемнәр ни өчен кирәк? Кайда куллана алабыз?

2. Укучыларның эшмәкәрлеген укытучының бәяләве. Дәрескә гомуми бәя кую. Йомгаклау.

Слайд № 15

Өй эше: 1. Шигырь эчтәлеге буенча изложение язарга.

2. Шигырьне сәнгатьле уку күнекмәләрен камилләштерергә.

3. Методик папкага материал җыюны дәвам итәргә.

ТАСТЫМАЛ-СӨЛГЕЛӘРНЕҢ СЕРЛЕ БИЗӘКЛӘРЕ... (БАШКОРТОСТАННЫҢ ХАЛЫҚ ШАГЫЙРЕ РАВИЛ БИКБАЕВНЫҢ “ТАСТАМАЛ” һӘМ ТАТАРСТАННЫҢ ХАЛЫҚ ШАГЫЙРЕ РЕНАТ ХАРИСНЫҢ “АҚ СӨЛГЕ” ШИГЫРЕ БУЕНЧА АЧЫҚ ДӘРЕС ҮРНӘГЕ)

Әхмәдиева Нәзимә Фатих кызы,
Шаран районы Чалмалы урта мәктәбе

Максат:

1) Укучыларда татар, башкорт халкының йолаларына, көнкүреш әйберләренә карата ихтирам хисләре тәрбияләү.
2) Башкортстанның халык шагыйре Равил Бикбаевның “Тастамал” шигырен өйрәнү.
3) Татарстанның халык шагыйре Ренат Харисның “Ак сөлге” шигыре белән чагыштырып өйрәнү.

Җиһазлау: Р.Бикбаевның һәм Р.Харисның портретлары, китапларыннан күргәзмә. “Халкыбызның күңел бизәкләре: тастымал-сөлгеләр” дигән темага презентация.

Дәрес планы.

1) Сөлге-тастымал турында кыскача белешмә.
2) Авторлар турында кыскача белешмә.
3) “Ак сөлге”, “Тастамал”шигырьләре белән танышу, сәнгатьле уку.
4) Текстлар өстендә эш.
5) Йомгаклау.

Дәрес барышы.

Татар милли киемендәге һәм башкорт милли киемендәге кызлар чыга, аларның кулларында сөлгеләр.

Татар кызы:

Әй, сөлге-сөлгекәй, гомер юлдашым минем, әйдә әле, сөйләшик, тавыш-өнсез генә бер серләшик. Үпкәләмә инде миңа, сабантуй колгасына яшь килен бүләге итеп сине элмәдем мин, бәйгедә җиңгән атларның ялларына да сине бәйләмәдем. Матуррак сөлгеләрем бар иде шул...Матурлык китә икән ул, сөлгеләр булып тарала икән. Әй, сөлге-сөлгекәй, гомер юлларын бергә кичтек, шатлыкны да, авырлыкны да бергә кичердек. Сугыш елларында, балаларым ачтан үлмәсен дип, бар буган мал-мөлкәтне ризыкка алыштырганда да мин сине бирмәдем, балаларым кебек кадерле булгансың, ахры... Әй, сөлге-сөлгекәй, ап-агым минем, сине гомер буе каралтмый сакладым мин. Баксам, син минем йөз аклыгымны саклагансың икән...Әй, сөлге-сөлгекәй, инде менә саубуллашыр вакыт та җитә бугай. Чү, җилфердәмә, тавышсыз-өнсез генә саубуллашыйк. Кешеләргә йөз аклыгымны илт син, сөмсере коелганнарның да йөзләрен яктырт. Сабантуй колгасына да, ат ялына да элмәдем – менә хәзер кешеләрнең күңеленә сине күбәләкләтеп бәйләп куям...

Башкорт кызы:

Әле түр башында элеүле торган кызыл осло тастамал Сатра йылгаһы буйындагы басыуза үскән киндерзән һугылган. Уны әсәйем, үз кулдары менән йолкоп, талкыган, тукыган. Ул гына ла түгел, йөрәк йылыһын кушып, миңә багышлап, һуккан.(Г.Аллаяров.” Тастамал”).

(Экранда “Халкыбызның күңел бизәкләре: тастымал-сөлгеләр” дигән темага презентация бара.)

Укытучы:

Кадерле укучыларым, аңлавыгызча, без бүген сезнең белән сөлге- тастымаллар турында сөйләшәчәкбез. Башкортстанның халык шагыйре Равил Бикбаевның “Тастамал” һәм Татарстанның халык шагыйре Ренат Харисның “Ак сөлге” шигырьләрен чагыштырып өйрәнәчәкбез. Хәзер бу авторлар турында мәгълүмат тыңлап китик.

Беренче укучы:

Рауил Бикбаев 1938 елдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәсе Покров районы Кунакбай ауылында туган.

Рауил Бикбаев ижады башкорт укучыларына 60-сы йылдар башынан билдәле. Шагыйрьнең лирик шигырьләре, поэтик циклларе, “Вокзал”, “Ҡаруанһарай”, “Йырлы Заялар”, “Мәсәл ярым ғүмер”, “Күк әрем” исемле поэмалары тупланған “Дала офоктары”,”Автобиография”, “Ҡош Юлы”, “Лирика”, “Ғүмер уртаһы”, “Һөйөнсө” китаптары әдәбият сөючеләргә зур кызыксыну уятты. Бөгөнге көндә Рауил Бикбаев - Башкортостанның халык шагире, аңа 75 йәш тула.

Икенче укучы:

Татарстанның халык шагыйре Ренат Харис 1941 елда Ульянов өлкәсенең Богдашкино районы Зирекле Күл авылында туган. Р. Харис – әдәбият мәйданына 60-нчы еллар башында килә. “Җир һәм кеше”, “Кайтаваз”,”Замана әзләре”, “Ант суы”, “Хәбәр”, “Көзге мәхәббәт”,”Хәл-әхвәл” исемле китаплары яратылып укыла.Аның әсәрләре заманча үткен яңгырашы, гуманистик рухы, кыю метафоралары һәм чагыштырулары белән җәлеп итә. Татарстанның халык шагыйре 1968 елдан язучылар берлеге әгъзасы.

Текстлар өстендә эш.

(Ике төркемгә бүленеп эшлиләр).

“Тастамал”шигыре буенча бирем:

1. Тастымалның кеше тормышындагы роле нинди? (Җаваплар: кызлар бизәк чиккән;кунак каршылый; һәркемнең йортында саклана.)

2. Ике шигыръдә дә нинди уртак сүзләр бар? (Җаваплар: шатлык, кайгы, халкым, кунак, пакълек, илем).

3. Сурәтләү чараларын билгеләгез (Җаваплар: чагыштырулар – таулар әйтерһең дә халҡым ҡулы сиккән таҫтамал; килгән ҡунаҡтарға һуҙған кеүек; ҡыҙҙар ҡулы сиккән таҫтамалдай балҡый Урал; бешкән еләк кеүек аллана;кәрәҙ кеүек баллана.)

“Ак сөлге” шигыре буенча бирем:

1) Сөлгенең кеше тормышындагы роле нинди? (Җаваплар: кунак каршылый; сабантуйда көрәшче билендә; кунак озата; туйда җилферди;женазада кирәк).

2) Ике шигыръдә дә нинди уртак сүзләр бар? (Җаваплар: шатлык,кайгы,халкым,кунак,пакълек, илем).

3) Сурәтләү чараларын билгеләгез (Җаваплар:сынландырулар – сөлге кунак каршылый; сөлге гаделләрнең канын сөртә; көрәштә билгә ята; көрәшләргә озата; гүр иясен озата).

4) Шигыръләрдән охшаш строфаларны билгеләгез (Җаваплар:

5) Шигыръләрдән охшаш строфаларны билгеләгез (Җаваплар):

1. Һеңгән уға быуын-быуын буйы
Күҙ нурҙары илдең, моң-йыры.
Шуға ла бит леп-леп тибеп тора
Һәр семәре уның, һәр һыры

2. Кичрешләрнең таныш сиңа
Һәркайсысы,
илемнең һәрбер шатлыгы,
Һәр кайгысы.

2. Улар шулай тере килеш сыҡҡан
Күпме уттан, күпме ҡайғынан.
Аҡҡан ҡандар үҙ эҙҙәрен һалған,
Үҙ төҫтәрен ҡайғы ҡайыған.

2. И ак сөлге, беркайчан да
Пычранмадың-
Күпме сөрттең гаделләрнең
Хәләл канын.

3. Ҡундырмайса халҡым бөртөк туҙан
Һаҡлай белгән уның паклығын,
Йортондағы изге таҫтамалын
Намыҫы менән йыуып һаҡлаған.

3. Син бит үзең дә халкымның
Күңеле төсле -
Сөттән сеңгән зур пакълекнең
Бер көзгесе.

4. Килгән ҡунаҡтарға һуҙған кеүек,
Тоткан уны ниндәй юғары.
Таҫтамалдың ҡайҙа төҫ ташлауы,
Сағыулана ғына ни бары!

4. Ихтирамымны белгертим
Хак сүз белән:
Кунак килсә, каршыладың
Ак йөз белән.

Йомгаклау.

Ике автор да сөлге – тастымалларны халыкның аерылмас юлдашы, кайгыда да, шатлыкта да озата баручы образ – символ дәрәҗәсенә күтәреп сурәтләгән. Чынлап та, сөлге һәм тастымал пакълек, чисталык билгесе. Көнкүрештә көн дә кулланыла торган гадәти кирәк- ярак әйберләре генә түгел икән алар! Халыкның матурлыкка, аклыкка-сафлыкка табынуыдыр ул! Шулай булмаса, тастымал- сөлгеләргә шундый нурлы бизәкләр чигәрләр идемени?!

Укучыларга билгеләр кую.

Өйгә эш: Башкортстанның халык шагыйре Р.Бикбаев иҗатына багышлап, буклет һәм кроссворд эшләргә.

Р.БИКБАЕВТЫҢ “ЕТЕ БЫУЫН” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Мирхәйзәрова Гөлнара Рифкәт ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Октябрь районының 155 – се лицейы

Маҡсат: Илебеҙҙең күренекле шағирҙарының береһе, ғалимы, филология фәндәре докторы, профессоры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижади эшмәкәрлеге менән таныштырыу; уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен һәм фекерләү кимәлен үҫтереү; арҙаҡлы шәхестәребеҙгә, уларҙың эштәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу; Тыуған илгә, ата-бабалар ҡалдырған тарихыбыҙға һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, шағир тураһында уҡыусыларҙың ижади эштәре йыйылған альбом, китаптар күргәҙмәһе, видеояҙма, таблицалар, слайдтар, тәбиғәт һүрәтләнгән картиналар.

Эпиграф:

Эҙләмәйем мәғжизәләр
Мин көндәрем эсенән.
Башланһындар улар бары
Хәләл аштан,
Тоғро эштән,
Ҡояштан, һөйөнсөнән.

Дәрес барышы:

1.Ойоштороу моменты.

2. Яңы тема.

- Беҙ барыбыҙ ҙа (карта һүрәтенә күрһәтеп) ошо бейек бер ағастың йәшел генә, бәләкәй генә япрағына оҡшап торған Башҡортостандың матур бер тәбиғәт ҡосағында тыуып үҫкәнбеҙ. Беҙ үҙебеҙҙең тыуған яғыбыҙҙың матурлығын ижад иткән арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең ижады менән танышырға хоҡуҡлыбыҙ. (Таҡтала слайдтан шағирҙың портреты күрһәтелә.)

-Кемдең портреты, ул һеҙгә танышмы?

(Яуаптар тыңлана.)

- Эйе, бөгөн беҙ дәрестә халҡыбыҙҙың яратып уҡыған бөйөк шағирҙарының береһе, күренекле ғалим, профессор, әҙәбиәтсе Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһында һүҙ алып барасаҡбыҙ.

(Шағир тураһында мәғлүмәт бирәү.)

– Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙер Переволоцкий) районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәғрифәтенә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Агиш, ауылдашы Ғабдулла Амантай, нәҫелдәштәре Сәғит Мерәсов, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ арҙаҡлы шәхестәрҙе биргән Туҡсоран ерендә Рауил бәләкәстән йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә. Ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Ҡаҙағстан менән Ырымбур сигендәге Аҡбулаҡ педагогия училищеһында, Башҡорт дәүләт университетында, аспирантурала уҡый. 1965 йылдан Өфө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында эшләй. Кандидатлыҡ һәм докторлыҡ диссертацияларын яҡлай. 1995 йылдан — Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе, Рәсәй Яҙыусылар союзы идараһы секретары.

Р.Бикбаевты шәхес булараҡ әҙәбиәттә үҙен күрһәткән ҡаҙаныштарын схема ярҙамында атап китәйек.

(Интерактив таҡтанан күрһәтеү.) Звания (рус телендә аңлатыу)



- Народный поэт Башкортостана (1992 год)
- Доктор филологических наук (1996 год)
- Профессор
- Заслуженный деятель науки Республики Башкортостан (1992 год)
- Заслуженный работник культуры Чувашской Республики
- Почётный гражданин города Уфы (1999 год)
- Член-корреспондент Академии наук Республики Башкортостан (2009 год)

- Эйе, Р. Бикбаев - халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының береһе, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенә бик күп яҡлы хеҙмәттәре менән килеп инде. Үҙенең бай йөкмәткеле поэмалары һәм шиғырҙары менән генә туҡтап ҡалманы, әҙәби ғилем һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә лә күп эшләне. Уның күп кенә әҫәрҙәре Мәскәүҙә рус телендә баҫылып сыҡты. Матбуғат биттәрендә лә эшләүе менән танылыу алды. Һәр ҡайһыһы заманына күрә, үҙ осоро өсөн ҡаҙаныш та, яңылыҡ та, тос өлөш тә булды. Башҡортостандың бөтә төбәктәрендә генә йөрөп ҡалманы, Украинала, Саха- Якутияла, Ҡаҙағстанда, Татарстанда, Санкт-Петербургта, Сыуашстанда, Германияла һ.б.

илдәрҙә сәйәхәт итеп ҡайтты. Был шағир ижадының офоғон киңәйтте, заманса булыуын тәьмин итте. Уның наградалары менән дә танышып китәйек.

(Башта уҡыусылар үҙҙәре атап үтә. Уҡытыусы уларҙың ни өсөн һәм ҡасан бирелгәне хаҡында һөйләй.)

- Ә хәҙер әҙәби әҫәрҙәренә лә байҡау яһайыҡ. Уҡыусылар, һеҙ уның ниндәй әҫәрҙәрен йә китаптарын беләһегеҙ?

(Яуаптар тыңлана. Уҡытыусы слайд һәм күргәҙмәләге китаптарын күрһәтә.)

Дала офоҡтары.1964.
Ҡош юлы.1976.
Лирика. 1971.
Ғүмер уртаһы1976.
Поющие скалы. 1978.
Һөйөнсө. 1979.
Шәйехзада Бабич.1981.
Ерем балҡышы1982.
Заря. 1982.
Бураҙналар. 1985.
Звездный дом.1985.
Яҙмышым. 1988.
Барыһы ла беҙҙең намыҫта. Халҡыма хат. 1991.
Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ.1991
Шағир һүҙе – шағир намыҫы. 1997.
Ай күргәндәй – ҡояш алғандай. 1997.
Йөҙ ҙә бер хәҙис.
Беренсе китап. 2001.
Икенсе китап. 2002.
Өсөнсө китап. 2006.
Рәми. 2007.

3. Р. Бикбаевтың “Ете быуын” тигән шиғыры менән таныштырыу.

а.Һүҙлек эше.(Интерактив таҡтала күрһәтелә.)

Ете быуын- семь поколений
Намаҙ – молитва
Намыҫ –совесть
Ант- клятва
Гүр- могила
Йәннәт - рай
Һөргөн - ссылка, изгнание
Бәғер-сердце, душа
Имгәтеү - калечить
Абайыраҡ - осторожно
Бөрө - почка
Олон - ствол

б.Шиғырҙы тасуири уҡып күрһәтеү.

в. Шиғырҙы сылбыр менән куплеттарға бүлеп уҡытып тәржемә итеү.

(Слайдта шиғырҙың тәржемәһе күрһәтелә.)

Ошибка поколенья одного
Страшна ценою рода своего.
И может враз она перечеркнуть
Семи достойных поколений путь.
Довольно ошибаться! Хватит их,
На древе жизни веточек сухих.
Мы живы тем, что корень наш глубок,
А общий ствол раскидист и высок.

Я – ветка в кроне рода моего.
Веками наше связано родство.
И кто меня безродным назовёт,
Когда вокруг мой край и мой народ?

Когда из всех слоёв земли
Семь родников мне в душу потекли,
Когда в семь глаз взирает Етеген
На мой народ, на семь его колен?

«Да, это так», - кивают не спеша
Тухват, Шараф, Хасан, Мухаметша.
И вторят им из памяти моей
Кутлуахмет, Бикбай, Асылгарей.
«Да будет так!» - я приобщаюсь к ним
Как равный, с поколением восьмым.

г. Шиғырҙа ниндәй тарихи шәхестәр иҫкә алына? Улар тураһында нимә беләһегеҙ?

(Яуаптар тыңлана. С.Юлаев, Тәфтиләү, Буранбай һ.б. хаҡында бер нисә һүҙ әйтелә.)

д. Ниндәй аманат тураһында һүҙ бара?

(Яуаптар тыңлана.)

4. Теманы нығытыу.

- Уҡыусылар, әйҙәгеҙ әле шиғырҙың эстәлегенә әйләнеп ҡайтайыҡ, ни өсөн ул “Ете быуын” тип атала? *(Яуаптар тыңлана.)*

- Эйе, башҡорт халҡы үҙенең 7 быуынын мотлаҡ рәүештә белергә бурыслы булған. Ул ете быуын тарихын, ата-бабаларының йолаларын, тарихын лайыҡлы өйрәнеп, киләсәк быуынға алып барып еткерергә бурыслы булған.

5. Йомғаҡлау.

Бөгөн беҙ бай телле, кешеләрҙе, тәбиғәтте, тарихты яратҡан, ауыр тормош проблемаларын күтәреп сыҡҡан шағир Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштыҡ. Уның һәр шиғыры тәрән йөкмәткеле, бай тарихлы. Быйыл шағирға 75 йәш тула. Ул артабан да беҙҙе үҙенең ижади емештәре менән ҡыуандырып торһон.

6. Баһалау.Өй эше. Үҙегеҙҙең шәжәрәгеҙҙе эшләргә һәм “Ете быуын” шиғырын тасуири уҡырға өйрәнеп килергә.

ШАҒИР КҮҢЕЛЕНДӘ – ИЛ ЯҘМЫШЫ

Шәйәхмәтова Рушания Вәкил ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Октябрь районының 155 – се лицейы

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән таныштырыу; яҙыусы ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү; уның ижады йоғонтоһонда уҡыусыларҙа аң-белемгә ынтылыш, ғәҙеллек, юғары әхлаҡ нормалары, сафлыҡ тәрбиәләү, иман нурҙарына күндереү; шиғырҙарының идея- тематик йөкмәткеһен асыу, телен өйрәнеү; телгә, бөйөк шәхестәргә,Тыуған илгә һөйөү, ихтирам тойғоһо, патриотизм тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, уның тураһында альбом материалдары, тормошон һәм ижадын яҡтыртҡан матбуғат баҫмалары, китаптар күргәҙмәһе, Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедияһы, фотоһүрәттәр, компьютер, проектор.

Киҫәнең барышы. (Тамаша залы байрамса биҙәлгән, Башҡортостан гимны яңғырай, слайдта шағирҙың портреты.)

1-се алып барыусы.
Башҡортостан!
Яҙмышыңды тағы
Аҫтын-өҫкә бутап болғайҙар,
Ҡыл өҫтөндә илебеҙ иртәгәһе
Быумаҡ беҙҙе яңы бығауҙар.
2-се алып барыусы.
Күндәм генә шулай бирербеҙме
Тир,ҡан түгеп яулап алғанды!
Башҡортостан!

Юха, яуыздарҙан
Нисәнсе ҡат инде алдандың?

1-се алып барыусы.

- Эйе, туған халҡы, теле өсөн янып-көйөп йәшәгән көслө рухлы кешеләр араһында Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев айырым бер урын биләй. Һәләтле, тапҡыр фекерле, уйсан шағир. М.Аҡмулла, Ш.Бабичтарҙың традицияларын дауам иткән, М.Кәрим, Р.Ғариповтарҙың шиғри мәктәптәрен артабан байытып, үҫтереп ебәреүсе оло шәхес.

2-се алып барыусы.

Шағир йөрәк түрендә йәшәү дәрте балҡытып, янып-ялҡынланып ижад итә. Ул башҡорт шиғриәтенә яңы бураҙналар һала, күңеленең илаһи моң орлоҡтарын халыҡҡа бүләк итергә ашҡына.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев әҫәрҙәрен уҡыусылар берсә рухланып, берсә уйланып, берсә моңланып ҡулына ала. Быйыл беҙ шағирҙың 75 йыллыҡ юбилейын билдәләйбеҙ.

2-се алып барыусы.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур_өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафиҡ ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. 1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды.

2-се алып барыусы.

Бөтә эште ҙур дәрт һәм теләк менән башҡарыу, егәрлелек һәм тынғыһыҙлыҡ кеүек сифаттар уның тормошона һәр ваҡыт юлдаш. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек,

Был донъяға тура ҡарарлыҡ, - тип юҡҡа ғына өндәшмәй шағир “Башҡортостан бында башлана” шиғырында.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Зәйнәб Биишева исемендәге премия лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт йыйылышы-Ҡоролтай депутаты.

2-се алып барыусы.

Тормош юлдары ҡайһы тарафтарға ғына алып барһа ла, һәр ваҡыт йөрәк түрендә тыуған ерең, туған телең булырға тейеш. Ҡайҙа ғына йәшәһәк тә, ғәзиз еребеҙ, Уралыбыҙ, йәмле Ағиҙелебеҙ изге булып ҡала. Был һүҙҙәр Рауил Бикбаев шиғриәтендә айырыуса ҙур урын алып тора.Әйҙәгеҙ, уның шиғырҙары менән дә танышып үтәйек. (Уҡыусылар шиғыр һөйләй.)

Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны.
Нисәмә ҡат уйҙарыма сумып,
Булды минең ҡарап ҡалғаным
Ҡараш иңләмәҫлек күк йөҙөндә
Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны.

Аҙашыпмы ҡалған дуҫтарынан,
Ҡанаттары әллә арыған
Дөрөҫмө һуң юлы?
Эй яңғыҙ ҡош?
Бәләләргә генә тарыма!

Минме инде һине аңламаҫ йән,
Һинең хәлдә аҙмы ҡалғаным…
Бар ғүмерем ҡуныр урын тапмай
Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны.
* * *
Бынан күпме яу үткәндер –
Тауы ҡалҡан, күле ҡалҡан.
Ябырылған ҡара яуҙар,
Илен һаҡлап ирҙәр ҡалҡҡан.

Ирҙәр ҡалҡан булып ҡалҡҡан,
Табынында, Учалыла.

Йорт-бәләне кире ҡаҡҡан
Ошо ергә инеп ятҡан йыуашы ла, уҫалы ла.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә.

2-се алып барыусы.

Быға миҫал итеп һуңғы йылдарҙа яҙылған «Хазина» поэмаһын әйтергә мөмкин. Был тәңгәлдә лә халыҡ шағиры үҙенең халыҡсанлығын ил ғәмдәре менән милләтебеҙҙең киләсәк яҙмышын ҡайғыртып йәшәүен ырыу шәжәрәһе аша беренсе булып оран һалды. Поэма ырыу шәжәрәһе аша башҡорт тарихын бәйән итеүгә ҡайтып ҡала. Шәжәрә тирәһендә фекер төйнәп, шағир йәшәйешебеҙ, тыуған еребеҙ, бөгөнгө хәлебеҙ хаҡында әсенеп тә, һыҙланып та, ярһып уйланып та һүҙ йөрөтә.

Уҡыусы “Хазина” поэмаһынан өҙөк һөйләй.

1-сеалып барыусы.

«Хазина» – ул күңел, рух, хыял, зиһен хазинаһы. Шағир юғары даирәләрҙә яуаплы бурыстар атҡара, Яҙыусылар союзына етәкселек итә, өҙлөкһөҙ тиерлек публицистик мәҡәләләре менән дә сығыш яһай. Бына шундай тығыҙ, яуаплы эшмәкәрлек өҫтөнә ошондай бәҫле, заманса, күләмле поэманы яҙыуы – үҙе бер ҡаһарманлыҡ.

2-се алып барыусы.

Тормошҡа сикһеҙ ғашиҡ, йәшәүҙе һөйгән, халыҡҡа хеҙмәт күрһәтеү уйы менән янып йәшәгән шағирға ижади үрҙәр, һаулыҡ һәм бәхет теләйһе генә ҡала.

(Әҙәби кисә Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары менән тамамлана.)

Был донъяның иркә улы булып
Йәшәүҙәр юҡ беҙгә кинәнеп.
Һиндә – Салауаттың яралары,
Миндә – һыҙланыуы Кинйәнең.

Ҡайҙа барһам, әсе моңдай сыңлап,
Йөрәгемдә бергә килерҙәр
Шәһиттәрҙең ҡаны аҡҡан боҙҙар,
Зөбәйҙәрҙән ҡалған күмерҙәр.

Көнөн-төнөн көйрәп, күңелдәрҙә
Атайҙарҙан ҡалған уй ята.
Донда ҡорбан булған Дим улдары
Ыңғырашып таңда уята.

Ете-ятҡа төшкән йот-ҡайғыға
Күҙебеҙҙән сыға йәш бәреп.
Ҡатын ҡосағында йәшәмәнек,
Халыҡ ҡосағында йәшәнек.

Һалайыҡсы иңгә донъя йөгөн,
Көтмәйенсә көсләп еккәнде.
Бәхет беҙҙең менән, халыҡ тыны
Ҡағып торһа ғына елкәңде.

ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – ИЛЕ БАР,
ИЛЕ БАРҘЫҢ – КӨНӨ БАР

Исламғәлиева Рәмзилә Рауил ҡыҙы,
Сәкмәғош районы Сәкмәғош ауылы 1-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат.

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры хаҡында белешмә алыу, шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү;

2. Халыҡ ижадына нигеҙләнеп, уҡыусыларҙың үҙ аллы фекерләүҙәрен, танып белеү эшмәкәрлеген, тасуири уҡыу, һөйләү һәм яҙма телмәрҙәрен үҫтереү, үҙ-ара тикшереү һәм баһалау, үҙ фекереңде аныҡ әйтә һәм яҡлай белергә өйрәтеү;

3. Туған телен ҡәҙерләүсе, уның киләсәген ҡайғыртыусы, илен, ерен, халҡын яҡларҙай шәхес – Башҡортостандың ышаныслы киләсәген тәрбиәләү, шағир ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевҡа арналған ҡурай-схема, индивидуаль китапсыҡтар, йомаҡ, мәҡәл, әйтемдәр, күрмә диктант, мультимедиа проекторы – дәрес презентацияһы.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

1. Психологик инеш.

Ҡыңғырау шылтыраны,
Беҙ йыйылдыҡ дәрескә.
Матур итеп ултырҙыҡ
“4”-“5”-тәрҙе алырға.

- Тик бишлеләрҙе алыу өсөн кәйефтәрегеҙ яҡшымы, балалар?

2. Уңыш ситуацияһын тыуҙырыу.

1-се слайд – “Китап – белем шишмәһе” тукталышы.

- Балалар, ҡарағыҙ әле, беҙ бөгөн нимә эшләйәсәкбеҙ? (сәйәхәт итәсәкбеҙ)
- Тимәк, беҙҙең ниндәй дәрес буласаҡ?(дәрес-сәйәхәт)
-Сәйәхәтебеҙҙе ниндәй тукталыштан башлайбыҙ икән?
-Мин һеҙгә ошондай китапсыҡтар таратам, бышылдап уҡығыҙ ҙа йөкмәткеһен асыҡығыҙ.

Бышылдап уҡыу минуты – индивидуаль китапсыҡтар буйынса:

I төркөм-“Туған тел”, II төркөм-“Мәңгелеккә әйләнһен!”, III төркөм-“Ҡышҡы көн”.

3. Интеллектуаль ҡаршылыҡ ситуацияһын тыуҙырыу.

- Һәр төркөм нимә хаҡында уҡыны?

I төркөм етәксеһе – “Туған тел хаҡында.”

- Балалар, бөгөн ниндәй көн?
- Эйе, 21 февраль – Халыҡ-ара Туған тел Көнө. Был йәһәттән мәктәбебеҙҙә ниндәй эштәр башҡарыла?

II төркөм етәксеһе – “Тәбиғәтте һаҡлау тураһында.”

- Балалар, 2013 йыл Башҡортостанда ниндәй йыл тип иғлан ителде?
- Эйе, Президентыбыҙ Рөстәм Зәки улы Хәмитов 2013 йылды Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип белдерҙе. Һеҙ тәбиғәтебеҙҙе һаҡлауға ниндәй өлөш индерҙегеҙ?

III төркөм етәксеһе - “Ҡыш хаҡында уҡыныҡ”.

- Тышта ниндәй миҙгел бара? Ә февраль - ниндәй ай? Ҡыш бөткәнсе нимә эшләп ҡалырға кәрәк?

4. Теманы билдәләү.

2-се слайд – “Халыҡ ижады” тукталышы.

- Беҙҙе ниндәй тукталыш көтә?

3-сө слайд – йомаҡ.

- Балалар, уҡып ҡарайыҡ әле, нимә икән?
- Әйҙәгеҙ, был йомаҡты сисеп, дәрестең темаһын билдәләйек.
- Нимә хаҡында һөйләшәбеҙ икән?

4-се слайд – тема.

- Эйе, балалар, бөгөнгө темабыҙ мәҡәл менән яңғырай:

Теле барҙың – иле бар,
Иле барҙың – көнө бар.

5-се слайд – “Шиғырҙар илендә” тукталышы.

II.Маҡсат ҡуйыу.

- Артабанғы тукталышыбыҙ ниндәй?
- Беҙ уны бөйөк халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың шиғыр юлдары менән башлайбыҙ, бергәләп уҡыйыҡ:

Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ.

- Был дәресебеҙҙең эпиграфы булып тора. Ошо юлдарҙан сығып әйтегеҙ әле, нимә эшләйәсәкбеҙ икән?

III.Маҡсатты хәл итеү. (таҡтала – ҡурай-схема)

1. Һорауҙар.

- Балалар, ҡарағыҙ, был нимә?
- Ҡурай-схеманың уртаһында кемдең портретын күрәһегеҙ?
- Рауил Бикбаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ә кем ул шағир?
- Ул беҙгә бик күп фәһемле шиғырҙар, тәрбиәүи әҫәрҙәр яҙа.
- Халыҡ шағиры ҡайҙа тыуған? (ҡурайҙың 1-се тажын асам)
- Ә ҡасан тыуған? (2-се тажды асам)
- Ниндәй темаларға яҙа һуң? (3-7-се таждарҙы берәмләп аса барам, балалар ҡысҡырып уҡый бара.)

6-сы слайд – һүҙлек эше.

- Экранда нимәләр бирелгән?
- Уларҙы ҡысҡырып уҡыйбыҙ.
- Хәҙер ошо һүҙҙәрҙе ҡулланып бәләкәй генә һөйләмдәр төҙөйөк.

2. “Туған тел” шиғыры өҫтөндә эш.

а) Шиғырҙы тыңлау – уҡытыусының өлгөлө уҡыуы.

б) Үҙ аллы уҡыу.

в) Сылбырлап уҡыу.

г) Йөкмәткеһе өҫтөндә эш:

- Шиғыр нимә тураһында?

3. Һайланма уҡыу.

- Туған телгә булған һөйөүҙе ҡайһы юлдарҙан аңлайбыҙ?
- Тыуған ил, туған тел, халыҡ, әсәй һүҙҙәрен автор ни өсөн “аҫыл һүҙҙәр” тип атай?
- Был һүҙҙәр, балалар, бер бөтөндө тәшкил итә. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн?

- Эйе, улар үҙ-ара бик тығыҙ бәйләнгән. Уларҙы бер-береһенән башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Был бер бөтөнгә мин КИЛӘСӘК исемен бирер инем. Сөнки тема мәҡәленән күренеүенсә,

Теле барҙың ғына иле бар
Иле барҙың ғына көнө бар.

- “Көнө бар” тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
- Дөрөҫ, балалар, “йәшәй, киләсәге өмөтлө” тигәнде аңлата. Һеҙ илебеҙ киләсәге. Башҡорт телен яратып өйрәнәһегеҙ, тырышып уҡыйһығыҙ. Тимәк, илебеҙ киләсәге өмөтлө тибеҙ.
- Был шиғыр беҙҙе нимәгә өйрәтә?
- Балалар, беҙ ҡайҙа йәшәйбеҙ?
- Ул ҡайҙа урынлашҡан?
- Эйе, Саҡмағош районы - Башҡортостан Республикаһының бер өлөшө. Саҡмағошта 13 милләт халҡы дуҫ йәшәй. Һәр милләт илебеҙҙең “Башҡортостан халыҡтарының телдәре тураһында”ғы Законы нигеҙендә үҙ туған – башҡорт, урыҫ, татар телдәрен өйрәнә.

4. Ял минуты.

7-се слайд – “Музыкаль тәнәфес” туҡталышы.

- Балалар, ҡайҙа килеп еттек?
- Ҡыш хаҡындағы яратҡан йырыбыҙҙы йырлап-бейеп, ял итеп алайыҡ.

8-се слайд – “Эшсән төркөмдәр” туҡталышы.

5. Өй эшен тикшереү.

I төркөм-туған тел хаҡындағы мәҡәлдәрҙе уҡып, мәғәнәһен асыу.

II төркөм-тел менән бәйле йомаҡтарҙы сисеү.

III төркөм – туған телгә арналған йыр (бер генә куплетын) тыңлап, төп фекерҙе билдәләү.

- Афарин, балалар! Өй эше биремдәре беҙҙе нимәгә өндәй?
- Эйе, туған телен белеү менән һәр кем ғорурланырға тейеш. Бөгөн ниндәй көн, тинек әле?

6. Күрмә диктант яҙыу (һәр төркөмгә бер мәҡәл).

Дәфтәргә дата яҙыла.

9-сы слайд –Телгә арналған әйтемдәр.

- Таҡтала яҙылғанды эстән генә уҡығыҙ, төркөмдәргә нимәләр бирелгән?
- Ниндәй эш башҡарасаҡбыҙ?
- Балалар, әйтемдәрҙе ятлай башланыҡ.

10-сы слайд –буш.

- Дәфтәргә яҙабыҙ. Кем таҡтаға яҙырға теләй? (һәр төркөмдән берәр уҡыусы)

11-се слайд –Телгә арналған әйтемдәр.

7. Парҙар менән эшләү.

- Эштәрҙе иптәштәрегеҙ менән алмашынып, уҡытыусылы уйнап алабыҙ. (Таҡталағы эштәрҙе үҙем тикшерәм. Һөҙөмтәләр буйынса төркөм етәкселәре “Уҡыу алдынғылары”н билдәләй.)
- Был әйтемдәр беҙҙе нимәгә өйрәтә?
-

IV. Нығытыу. Йомғаҡлау.

12-се слайд – “Тел һөйөүселәр” туҡталышы.

- Бөгөнгө сәйәхәтебеҙҙе ниндәй туҡталыш менән тамамлайбыҙ?
- Бөгөн ниндәй шиғыр менән таныштыҡ?
- Уның авторы кем?
- Р. Бикбаев был шиғыры менән беҙгә нимә әйтергә теләгән?
- Балалар, телебеҙҙе яҡлағыҙ, илебеҙҙе һаҡлағыҙ! Эпиграфта әйтелгәнсә, “Иле юҡтың – теле юҡ”. Ә беҙҙең илебеҙ бар. Тимәк, телебеҙ ҙә йәшәйәсәк һәм үҫәсәк!
-
- V. Рефлексия.
- Дәрестә ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ?
- Үҙегеҙгә ниндәй фәһем алдығыҙ?
- Уларҙы киләсәктә ҡулланырһығыҙмы?
- Һеҙгә дәрес оҡшанымы?
- Нимәһе менән оҡшаны?

Уҡыусылар ҡыҙыл, һары, зәңгәр түңәрәктәр ярҙамында дәрескә баһалар ҡуялар. Ошо уҡ түңәрәктәр ярҙамында үҙҙәренең дәрестә эшләүҙәрен баһалайҙар. Төркөм етәкселәре “Тел һөйөүселәр” номинацияһында еңеүселәрҙе билдәләй һәм дипломдар менән бүләкләй.

VI. Өйгә эш. 13-сө слайд.

I төркөм – туған телгә арналған хикәйә (инша) төҙөргә,

II төркөм – “Туған тел” шиғырын тасуири уҡырға, ятларға,

III төркөм – тел тураһында кескәй шиғыр ижад итеп ҡарарға.

“ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – ИЛЕ БАР”

Хәмиҙуллина Флүрә Риф ҡыҙы,
Әлшәй районы Раевка 2-се дәйәм белем биреү мәктәбе

Дәрестең маҡсаты: Р.Бикбаевтың ижад юлын өйрәнеү, “Халҡыма хат” шиғырындағы пролемаларҙы бөгөнгө тормош менән бәйләү; башҡорт теленең һаҡлауға, яҡлауға, үҫтереүгә мохтажлығын раҫлау; башҡорт теленең тарихы менән бәйләп киләсәген күҙаллау; уҡыусыларҙа телмәр мәҙәниәтен формалаштырыу, үҙ аллы фекер йөрөтөргә өйрәтеү; төрлө милләт балалары араһында дуҫлыҡ-туғанлыҡ хистәре уятыу, толерантлыҡ мөнәсәбәттәре үҫтереү, халҡын яҡларҙай яңы йәш быуынды тәрбиәләү.

Дәрестә йыһазландырыу: «Башҡорт әҙәбиәте» электрон дәреслеге, 11 класс.” (М.Ғималова, Ғ.Хөсәйенов. А.Байғарин, 2003й.) нигеҙендә төҙөлгән.(Дәреслек биш бүлектән тора: дәреслек, яҙыусылар, һүҙлек, тикшереү эше, ярҙам. Проект етәксеһе, авторы Сиражетдинов З.Ә), презентация, Башҡортостан картаһы, стендтар, шағирҙың портреты, уның китаптары, һүҙлектәр, интерактив таҡта, өҫтәлмә әҙәбиәт, компьютерҙар, проектор.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу. (1-се слайд)

II. Дәрестең эпиграфы

Иле барҙың-теле бар
(халыҡ мәҡәле).

III. Өйгә эште тикшереү. (2-се слайд)

Уҡытыусы. Р. Бикбаев – заман пульсын тоя белеүсе, халыҡты борсоған социаль, иҡтисади һәм моральэтик мәсьәләләрҙе ваҡытында күтәрә белеүсе олпат шағир. Уҡыусылар, һеҙ Р.Бикбаевтың биографияһын һәм ижад юлын, өйҙә интернетҡа кереп, Рауил Бикбаев сайтын асып, өҫтәлмә материалдар эҙләп табып, биографияһын ентекле өйрәнергә һәм шул белемдәрегеҙҙе *логик мәғәнә моделендә, кодлаштырылған конспектта* күрһәтергә тейеш инегеҙ. (3-сө слайд)

Белемегеҙҙе тикшереү өсөн һеҙгә *блиц-турнир* тәҡдим итәм.(4-се слайд)

-Р.Бикбай тыуған өлкә *(Ырымбур)*

-Район *(Покровка)*

-Ауыл *(Үрге Ҡунаҡбай)*

-Тыуған көнө*(12.01.1938)*

-Ниндәй уҡыу йорттарын тамамлай? *(Ғәбдрафик ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын)*

-Р.Бикбаев ҡасан яҙыша башлай? *(университетта уҡыған йылдарында)*

-Беренсе шиғырҙар йыйынтығы нисек атала? *("Дала офоҡтары")*

-Уның ниндәй әҫәрҙәре бар? *("Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар биреген!" поэмаларында, "Халҡыма хат", һ.б.)*

-Хәҙерге көндә Р.Бикбаев ҡайҙа эшләй? *(БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың мәғариф, мәҙәниәт, фән, спорт һәм йәштәр эше буйынса комитет рәйесе)*

Турнир тамам. Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы буйынса мин әҙерләгән ЛММ-ды экранда ҡарағыҙ, үҙегеҙҙең проекттарығыҙ менән сағыштырығыҙ, һығымта яһағыҙ. Кемдә ниндәй етешһеҙлектәр бар, төҙәтегеҙ, улар миндә лә булырға мөмкин, бергәләп был эштең аҙағына нөктә ҡуяйыҡ, формаларҙың тап килеү-килмәүе мөһим түгел. Хеҙмәтебеҙ һеҙгә киләсәктә лә ярҙам итерлек булһын. (*ЛММ* менән үҙ аллы эшләйҙәр)(5,6-сы слайдтар).

Баһалау. Һәр кем үҙ белеменә үҙе баһа ҡуйһын.

III. Төп өлөш. Дәрестең маҡсатына сығыу.

Интерактив таҡталағы Ғәзим Шафиҡовтың шағир тураһындағы һүҙҙәрен уҡып үтәйек.(7-се слайд)

“Рауил Бикбаев– барыһынан да элек заман шағиры, бөгөнгө тормошобоҙ йырсыһы, даулы һәм ҡатмарлы хәҙерге донъябыҙ, милли рухыбыҙ рәссамы…” Ғ. Шафиҡов

Рауил Бикбай – заманалар елен, үҙгәрештәр дауылын алдан һиҙгән аҡыл эйәһе. Ул тәүгеләрҙән булып йәмғиәтебеҙҙе тетрәндерәсәк һәм зиһенде бығаулаясаҡ ваҡиғаларҙы алдан күрә, алдан иҫкәртә, дөрөҫлөккә-хаҡлыҡҡа ҡурҡмайынса әйҙәй. Ысын шағир өсөн үҙ милләтеңде яратыу, уның өсөн яныу, киләсәге тип йәнеңде биреү генә әҙ әле, ә башҡа йөрәктәр ҙә үҙҙәрендә шул мөхәббәтте йә шул әрнеүҙе тойорлоҡ итеп күңелдәген сығара, милләттең һәр вәкиленә еткерә белеү тағы ла ҡатмарлыраҡ. Шундай таланттарҙың береһе - Р.Бикбаев.

(“Халҡыма хат” шиғырының яҙылыу тарихы.(8-се слайд)

1989 йылдың йәмле йәй уртаһында Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле янында, шиғыр байрамында бер йәш ҡыҙ, сит телдәрҙе өйрәнеп, ә үҙенең туған телен белмәүенә әсенеп хат тапшыра. Шағирҙың күңеле тулып, шиғри хат менән халҡына өндәшергә була. Беҙ бөгөн Рауил Бикбаевтың “Халҡыма хат” шиғырынан өҙөктәр уҡыясаҡбыҙ.

IV. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау. (9-сы слайд)

-Белеүебеҙсә, башҡорт халҡында халыҡҡа мөрәжәғәт итеү йолаһы борондан килә, миҫалдар килтерегеҙ. (Сәсәндәр, борон илгә яу килгәндә йәки ил-йорт эсендә ниндәйҙер мөһим мәсьәләләр тыуғанда, шиғри һүҙ, ҡобайыр менән йыйындарҙа халыҡҡа мөрәжәғәт итер булғандар. Салауат Юлаевтың “Салауат телмәре йәки Бүгәсәүгә ҡушылып…“ тигән ҡобайыры, Байыҡ сәсәндең халыҡты француз илбаҫарҙарына ҡаршы яуға сығырға саҡырып әйткән ҡобайыры, Мифтахетдин Аҡмулла “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк” тип һүҙ асҡан, Мәжит Ғафури халыҡты уҡыу, ғилемгә өндәп шиғырҙар яҙған, Шәйехзада Бабич “Башҡорт халҡына көйлө хитап” менән мөрәжәғәт иткән һ.б.)

-Ниндәй осраҡтарҙа арҙаҡлы шәхестәребеҙ ҡулдарына ҡәләм алып, халыҡҡа хат менән мөрәжәғәт иткәндәр? (заманаларҙың, йәмғиәт тормошоноң ауыр йәки хәл иткес саҡтарында)

-Тимәк, “Халҡыма хат” поэмаһы - заман ораны, традициялар дауамы.

V. Яңы тема өҫтөндә эш.

Һүҙлек эше.

Оран –яуға саҡырған ауаз

Маһир- оҫта

Кәр-сәм, ныҡышмалылыҡ

Проблемалы һорау биреү.(10-сы слайд) Бөгөнгө көндә беҙҙең телебеҙ бөтөнләй юғалыу хәүефе янаймы икән? Уны һаҡлау ысулдары бар микән? Ошо һорауҙарға дәрес барышында яуап эҙләйек.

Шиғыр өҫтөндә эш.(11-се слайд)

Уҡытыусының инеш һүҙе. Р.Бикбаевтың “Халҡыма хат” шиғыры башҡорт телендә һәм рус теленә тәржемә айырым брошюра-хат рәүешендә баҫылып таратылғас, республика башлыҡтары, Яҙыусылар союзы һәм автор исеменә бик күп хаттар килә. Уларҙа милли рух уяныуы асыҡ сағыла.

1)*шиғырҙың 1–се булеген фоноҙманан тыңлау (*«Башҡорт әҙәбиәте» электрон дәреслеге, 11 класс. Дәреслек, яҙыусылар бүлеге)

2)*Шиғырҙы сылбырлап комментарийлы уҡыу.*

3)*Шиғырҙың йөкмәткеһе буйынса эш.*

а)*Йөкмәткке буйынса һорауҙарға яуаптар биреү.(*12-се слайд)

-“Халҡыма хат” шиғыры ниндәй алымда яҙылған? (монолог)

-Төп темаһын билдәләгеҙ. (тел һәм милләт яҙмышы)

-Әҫәрҙең идеяһын текстағы юлдар менән әйтегеҙ.

(Теле бөткәндең бит көнө бөтә, Иле бөтә теле бөткәндең.)

(Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!)

-Тәүге строфала шағир туған телен нимә менән сағыштыра?

-Шағир тарихи ваҡиғаларҙы бөгөнгө көн менән нисек бәйләй?

б) *Статистик парҙар менән эш.*(13-сө слайд)

1-се карточка.

Сабыйҙарҙың теленә ғәмһеҙ ҡарап,
Упҡын ситтәренә еткәнбеҙ.
Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең.

Ошо өҙөктөң асылын аңлатығыҙ.

2-се карточка

Шиғырҙан һүрәтләү сараларын (сағыштырыу, йәнләндереүҙәрҙе) табығыҙ.

(Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана
Хаҡ яҙмышын даулай.)

3- сө карточка.

“Аҫыл” эпитетының мәғәнә биҙәген асығыҙ.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.)

4-се карточка

Башҡорт илен тотош утҡа солғап,
Тәфтиләүҙәр ниҙәр ҡылмаған.
Тик батшалар телен киҫкәндә лә,
Башҡортом бит телһеҙ булмаған!

Миҫалдар менән ошо шиғыр юлдарының мәғәнәһен аңлатырға. (Тыуған илен, Уралын, азатлығын, ерен, көнөн һаҡлап, күпме ир-егет ҡан түккән, ғәзиз башын һалған. Ирке, азат иле, теле өсөн баш күтәргән башҡорттарҙы аҡ батша йәлләттәре телдәрен, ҡолаҡ-танауҙарын киҫеп, дарҙарға аҫып язалаған.”Капитан ҡыҙы” повесында һүрәтләнгәнсә, А.Пушкин күргән телен ҡырҡып язаланған башҡорттар телһеҙ көйө лә яңынан яуға сапҡан.)

- Телебеҙгә хәҙерге көндә хәүеф янаймы, нисек аңлайһығыҙ?(янай)

Ошо проблеманың сәбәптәрен эҙләп табайыҡ.

Ял минуты.

“Карауанһарай” фольклор-эстрада төркөмөнөң “Ҡайт илеңә осоп, башҡортом” йыры тыңланыла.

Проблемалы һорауға яуап алыу.

Проект эше. (14, 15-се слайдтар)

Уҡыусылар ике төркөмгә бүленәләр.

Проект эшенең темаһы- Бөгөнгө көндә туған телдәрҙең хәле, хәл ителеше.

1-се төркөм республикабыҙҙағы телде тергеҙеү буйынса күҙәтелгән ыңғай күренештәрҙе,

2- се төркөм - кире күренештәрҙе билдәләйҙәр.

Уҡыусылар үҙ эштәрен яҡлай. Балаларҙы тыңлау, эштәрен *проекторҙағы минең төҙөгән эш* менән сағыштырыу. (16-сы слайд)

Ыңғай күренештәр:

-Халҡыбыҙ республикаға үҙаллылыҡ алды;

-Башҡортостанда йәшәүсе халыҡтарҙың телдәре тураһында закон ҡабул ителде;

-Башҡорт теле дәүләт статусын алды;

-Телдәр фестивале барлыҡҡа килде (2010 йыл);

-1995 йылдан алып ҡоролтайҙар үткәрелә;

-21 Февраль - Халыҡ-ара туған тел көнө һ.б.

Кире күренештәр:

-Телде белмәүҙең төп сығанағы - ғаилә, ғаиләләрҙә башҡортса һирәк һөйләшәләр; ассимиляция (беҙҙең кеүек аҙ һанлы халыҡтарға ҡурҡыныс нәмә). Ҡыҙҙар икенсе милләт кешеһенә кейәүгә сығалар, йәки егеттәр өйләнһә, үҙ телдәрен оноталар һ.б.

-әсә телен белмәүсе кеше үҙенең тамырҙарын онота;

-башҡорттарҙың күбеһе Рәсәйҙең төрлө төбәктәренә сәселгән һ.б.)

Уҡыусылар, географтар ярҙамында һеҙгә ярҙамға таблица әҙерләп алып килдем, иғтибар итегеҙ.(17-се слайд)

Проекторҙа “Башҡорттарҙың төрлө төбәктәрҙә урынлашыуы” таблицаһына күҙәтеү яһау.

Проект эштәребеҙҙе йомғаҡлап, таблицаны анализлап, тыуған фекерҙәребеҙҙе дөйөмләштерәйек.

Телебеҙгә хәҙерге көндә хәүеф янаймы? (янай)

1-2 уҡыусы сығып яуап бирәләр.

Уҡытыусы. (18-се слайд) Байлығыбыҙҙы, хазинабыҙҙы һаҡларға кәрәк, телде үҫтерер- илде үҫтерер, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Әсә теле аша халҡындың рухи хазинаһына эйә булаһың, уның тарихын, фольклорын, әҙәбиәтен беләһең һ.б. Дәрестең эпиграфын дауам итеп, халҡыбыҙҙың тағы бер мәҡәлен иҫкә төшөрәйек - *теле юҡтың иле юҡ*. Телде, тимәк, халыҡты һаҡлап ҡалыуҙа һеҙ ҙә яуаплы, уҡыусылар.

Р.Солтангәрәеваның ” Илем бар” ҡобайырын фоноҙманан тыңлау.

Үтелгәндәрҙе нығытыу.

Текст буйынса грамматик эштәр (индивидуаль эш).

Яуаптарҙы компьютерҙа билдәләү, 2-3 минут ваҡыт бирелә.

Тест һорауҙары(19-сы слайд)

1) Алмаштарҙы табып, затын билдәләргә:

Туған телем минең! Күпме һүҙем
йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.

а) 3-сө зат, күплектә; б) 2-се зат, берлектә; в) 1-се зат, берлектә.

2) *Исемдәрҙең ниндәй килештә, һанда килеүен билдәләргә:*

Ни үтмәгән башҡорт баштарынан,
Дусар булған шундай язалауға.

а)урын-ваҡыт килеш, күплектә; б)сығанаҡ килеш, күплектә;

в)төбәү килеш, берлектә.

3*) Сифаттарҙы билдәләргә:*

Ҡулындағы ҡанлы бығауҙарын
Өҙҙө халҡым, ғәҙел юл табып

а) ҡулындағы, ғәҙел; б) ҡанлы, ғәҙел; в) бығауҙарын, ҡанлы.

4) *Төбәү килештәге исемде билдәләргә:*

Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

а) быуындарға; б) илде; в) телем.

5) *Һандар табып, төркөмсәһен билдәләргә:*

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.

а) йыйыу; б) төп; в) рәт.

Баһалау. Бер-берегеҙҙең эштәрегеҙҙе тикшереп,билдәләр ҡуйығыҙ.

Дәфтәрҙә эш.

Интерактив таҡтала шифыр юлдары бирелгән. (20-се слайд)

Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый алһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан, Сыуаш булыуынан,
Мари булыуынан оялһа?
Ни мәғәнә батшаларҙың исемен,
Сит ил тарихтарын ятлауҙан,
Ил тарихы илгә бикле булһа,
Намыҫыбыҙҙы туҙан ҡаплаһа?

Эштәр:

1)өҙөктө күсереп яҙырға,

2)исемдәрҙең килештәрен билдәләргә,

3)сифаттарҙың аҫтына һыҙырға,

4)яман һүҙенә антонимдар табырға.

Рефлексия. (21-се слайд):

- һәр башҡорт үҙ телендә һөйләшһен, уҡыһын, яҙа белһен;
-телде үҫтереүгә иғтибарҙы тағы ла көсәйтергә кәрәк;
-үҙ теленән оялырға түгел, ә уның менән ғорурланырға кәрәк;
-насар ғәҙәттәрҙе бөтөрөргә, кесе йәштән үҙеңдә милли рух тәрбиәләргә;
- бөтә көстө халҡыбыҙҙы йәшәтеү өсөн бирергә.

Йомғаҡлау (22-се слайд). Бөгөнгө көндә республикала белем биреү алты телдә алып барыла, ә ун биш милләт вәкилдәре мәктәптәрҙә үҙ телдәрен өйрәнә. Был һәйбәт, әлбиттә, һәр милләт хаҡында ҡайғыртып, уларҙың һәр береһенә үҙ милләтен һаҡлауға, үҫтереүгә ярҙам ҡулы һуҙыла.

БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, сәйәсмән Рауил Бикбаевтың:

«Тарихыбыҙ ғорур, бөйөк,
Күпме яҙма, күпме әйтмә, –
Башҡортостан!
Һин – ҡәғбәмде,
Һин – ҡәлғәмде
ҡаҡшатмаһын
Ил тарҡатыр сәйәсәттәр!» – тип борсолоп та, саҡырып та өндәшеүе урынлы...

Телебеҙҙе һаҡлауҙа һеҙгә өмөтөм ҙур, уҡыусылар. Йәштәргә юл асыр халҡыбыҙҙың шундай көслө рухлы кешеләре булғанда телебеҙ йәшәйәсәк, тип уйлайым.

Өйгә эш. (23-сө слайд)Уҡыусылар! Бөгөнгө дәрес һеҙҙе уйландырыр, тиеп уйлайым. Үҙегеҙҙең тәьҫораттарығыҙҙы йомғаҡлап, теләгән теманы һайлап, ижади эш (презентация, фильм, миниатюр инша, хат, шиғыр) яҙығыҙ.

Ижади эш темалары:

1.Р.Бикбаев- халыҡ яҙмышын ҡайғыртыусы “боҙватҡыс”.

2.Мин-туған телемдең яҡсыһы.

3. Туған халҡыма асыҡ хатым.

Һөйләшегеҙ туған телдә,
Туйғансы һөйләшегеҙ
Тел тыуҙырған шатлыҡтарҙы
Кешегә өләшегеҙ.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!”

Сәлихова Гөлназ Салауат ҡыҙы,
Күгәрсен районы Тәүәкән ауылының
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: поэманың йөкмәткеһен үҙләштереү, анализ яһау, тасуири уҡыу; күнекмәһен, фекерләү ҡеүәһен, телмәрҙе, зиһенде, иғтибарҙы үҫтереү; һүҙлек байлығын арттырыу; тирә-яҡ мөхиткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағир тауышы яҙылған аудиояҙма, магнитофон, мультимедиа проекторы, презентациялар, портрет, плакат, тәбиғәт күренештәре һүрәттәре, 2013 йыл эмблемаһы, әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге.

Эпиграф: Үҙ хәстәре ерҙең ярҙан ашҡан,
Ер уйҙары ерҙе ярырҙай. (Р.Бикбаев)

Проблемалы һорау: Тәбиғәткә ярҙам итеүҙә беҙ ниндәй өлөш индерә алабыҙ?

Алдан әҙерлек: Ағиҙел ҡалаһы, шиһандар, Чернобыль тураһында уҡыусыларҙың интернеттан йәки гәзит-журналдарҙан алған мәғлүмәттәре.

Уҡыусыларҙы парталарға түңәрәк формаһында ултыртырға, алдарына “эколог”, “уҡытыусы”, “хакимиәт башлығы”, “ферма мөдире”, “президент”, “уҡыусы”, “табип”, “ҡала мэры” кеүек яҙыуҙар ҡуйырға.

Дәрес барышы:

1.Ойоштороу (сәләмләү, барлау, ыңғай эмоциялар тыуҙырыу).

2.Үткән дәрестең темаһын ҡабатлау (өй эшен тикшереү):

- Рауил Бикбаевтың тормош юлын иҫкә төшөрөү;
- Бирелгән даталарға яраҡлы биографик мәғлүмәт биреү.

1938, 12 (тыуған йылы, айы)
1953-1956 (Аҡбулаҡ педучилищеһы)
1957 (БДУ)
1962-1965 (аспирантура)
1966 (диссертация)
1995 (Яҙыусылар союзы рәйесе)

Р.Бикбаевтың Тәүәкән мәктәбендә лә булыуы тураһында мәғлүмәт биреү, фотоны күрһәтеү.

2. Инеш: “Һыуһаным, һыуҙар биреге҆ҙ!” поэмаһы.

Был поэма бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр, моғайын. Бер ҡараһаң, ул йәмле Ағиҙелебеҙгә, уның үткәненә һәм хәҙергеһенә бағышланған әҫәр кеүек. Халыҡ шағиры Рәшит Нигмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһын хәтерләгеҙ. Уралды, Ағиҙелде данлап ниндәй гүзәл шиғри юлдар менән башлана ул:

Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.

Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар биреге҆ҙ!” поэмаһының үҙәгендә лә Ағиҙел йылғаһы, Урал тауҙары. Бөтә Башҡортостанды Урал ҡуйынынан, Ирәмәл тауҙары итәгенән башлап иңләп-буйлап йәйрәп аҡҡан Ағиҙелдең тамағына, Кама йылғаһына ҡойғансы бар юлын шағир уй-күңеле менән сәйәхәт ҡыла.

Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә Ағиҙел менән аҡ сәфәргә сығайыҡ. Шулай итеп, дәфтәргә числоны һәм теманы яҙабыҙ. Эпиграфҡа иғтибар итәйек. Р.Бикбаевтың был һүҙҙәре нимә тураһында? Эпиграфтан сығып, дәрескә маҡсат ҡуяйыҡ (үҙ аллы).

3.Поэманың йөкмәткеһе буйынса эш.

1) Ағиҙел буйында мәғрур ҡаялар ҙа, матур ауылдар, ҡалалар ҙа, фермалар ҙа, заводтар ҙа, һыуһаҡлағыстар ҙа бар. Поэма ла ошо йылға буйындағы матур бер тау тураһында бәйән итеү менән башлана. Ниндәй тау ул? (Торатау). Уны нисек йөрөтәләр? (шихан). Нимә ул шихан? (Аңлатмалы һүҙлек, 2-се том, 661-се бит)

Тасуири уҡыу (хрестоматия, 135-се бит, 5 куплет)

Елкендерә тағы бейеклектәр,
Күңелемдә тағы тыуа таң.
Иркен түбән түшәлеп тә ятҡан
Хәтфә үлән икән, Торатау.
Монарлана ҡояш сығышында
Армыт-армыт Урал һырттары.
Бер кинәнеп ошо киңлектәргә
Ҡарар саҡта күңел һыҡтаны.
Тағы шартлау.
Тағы тертләй Шаһтау.
Умырыла нигеҙе Шаһтауҙың.
Бөтә был тау…
Торатауҙар ғына
Иҫләй күккә ашҡан саҡтарын.
Тағы шартлау.
Ҡора заман, Шаһтау,
Тамырыңа хатта ауҙарын.
Был йылдарҙың ҡоластары хәтәр:
Ниндәй даръяларҙы һемереп бөттө,
Ниндәй ҡаяларҙы ауҙарҙы,
Кимереп бөттө ниндәй тауҙарҙы!

– Торатауға ниндәй хәүеф янай?

(Бер уҡыусы Торатау , уның әүлиәләр ерләнгән изге тау булыуы, яҡлау акцияһы тураһында һөйләй . Сығыш презентация менән байытыла).

Уҡыусылар үҙҙәренең роленә кереп фекерҙәрен әйтәләр, бәхәсләшәләр.

2) Ағиҙел буйында ниндәй ҡалалар урынлашҡан?

Стәрле тураһында уҡыйбыҙ (хрестоматия, 135-се бит)

Торатауҙың түбәләре хәтфә,
Ташҡайҙары һырлы, селтәрле.
Торатауға менеп ҡараһам да,
Табалмайым һине, Стәрле!
Көн яҡтыһын йотор ниндәй пәрҙә
Өҫтәреңә һинең ҡапланған?
Беҙ түгелме иң ҙур гиганттарҙы
Төҙөйбөҙ тип бында маҡтанған?
Һин Стәрле менән
Ниндәй ҡала
Шундай һауам бар тип ярышыр?
Сәсәгәндә таңғы төштәреңдә,
Беҙгә төшөр инде ҡарғышың?

– Ҡала нимәһе менән ҡурҡыныс? (ағыулы һауа, ыу, һөрөм, үле даръя)

Ыу һүҙе нимәне аңлата? (Аңлатмалы һүҙлек, 702-се бит)

Уҡыусылар үҙҙәренең роленә кереп фекерҙәрен әйтәләр, бәхәсләшәләр. Тәүҙә ҡала мэрына һүҙ бирелә.

3) Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Нигмәти ҙә Ағиҙелде данлап шиғыр яҙыуы тураһында әйтеп үткәйнек инде (7 класта өйрәнгән “Йәмле Ағиҙел буйҙары” шиғырын иҫкә төшөрөү.) Тасуири уҡыйбыҙ (136-сы бит , 2 куплет).

Урал!

Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.
Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға,
Һалҡын терегөмөш шикелле.

Шулай уҡ Бикбаевтың поэмаһынан өҙөк уҡыйбыҙ (136-сы бит ,2 куплет)

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Нигмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,

Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

Ысынлап та, Ниғмәтиҙең күҙҙәренә нисек ҡарар инек беҙ? (фекер алышыу) Уҡыусылар үҙҙәренең роленә кереп фекерҙәрен әйтәләр, бәхәсләшәләр.

4) Башҡортостан үҫә, ҙурая, яңы ҡалалар һалына. Шундай йәш ҡалаларҙың береһе - Ағиҙел ҡалаһы. Уның тураһында ла уҡып китәйек әле. (хрестоматия, 137-се бит)

Ағиҙел!
Йыр кеүек исемеңде
Йәп-йәш ҡала хәҙер йөрәтә.
Рәхмәт төшһөн,
Кем теленә килгән
Бындай матур, нурға бай исем.
Ағиҙел!
Моң һеңгән ярҙарыңа
Тамырлана
Башҡорт АЭС-ы.
Аҡтарылған тупраҡ.
Машиналар
Үкереп үтә.
Туҙан болото.
Күрһәттеләр:
Бына ошо ерҙә
Атом реакторы булыр тип.
Төҙөләсәк АЭС
Чернобылдән
Ҡеүәтлерәк була, тинеләр.

(Ағиҙел ҡалаһы тураһында бер уҡыусы һөйләй, презентация күрһәтелә)

Уҡыусылар үҙҙәренең роленә кереп фекерҙәрен әйтәләр, бәхәсләшәләр.

5) Ә АЭС-тар тик файҙаға ғынамы икән, әллә зыяны ла бармы? Ниндәй фажиғә булырға мөмкин? Украиналағы Чернобыль фажиғәһен дә урап үтмәй шағир. (138-се биттән уҡыйбыҙ.)

Припятта кешеһеҙ ҡалған йортта
Һыуға сарсап көйгән нурлы гөл…
Миндә йөрәгем менән бергә тыныр
Чернобыль…
Черная быль…
Черная боль…

(Чернобыль тураһында бер уҡыусы һөйләй. Презентация күрһәтелә)

Уҡыусылар үҙҙәренең роленә кереп фекерҙәрен әйтәләр, бәхәсләшәләр.

4. Анализ.

1) Лирик геройҙың автор биографияһы менән бәйләнеше (XXI быуатта һуғыштар булмаһа ла, тәбиғәткә ҡаршы кеше һуғыш асҡан кеүек. Автор бөтәһен дә үҙ йөрәге аша үткәрә);

2)Тема;

3) Идея;

4) Жанр;

5) Эмоциональ биҙәктәре (ниндәй тойғолар өҫтөнлөк итә);

6) Композицияһы;

7) Һүрәтләү саралары (парлап эш: сағыштырыу – 135-се биттән, йәнләндереү- 136-сы биттән, эпитет- 135-се биттән, метафора-137-се биттән). Үҙ аллы табалар, дәфтәргә яҙалар, ҡысҡырып уҡыйҙар;

8) Телмәр үҙенсәлектәре (ҡабатлауҙар -136-сы биттән, риторик һорау һәм риторик өндәү- 136-сы биттән, инверсия, русса һүҙҙәр). Ни өсөн уларҙы ҡулланған?

5. Эпиграфты аңлатабыҙ.

6.Проблемалы һорауға яуап бирәбеҙ. Тәбиғәткә ярҙам итеүҙә беҙ ниндәй өлөш индерә алабыҙ?

7.2013 йыл ниндәй йыл тип иғлан ителде? Эмблемаһын аңлатығыҙ.

8. Йомғаҡлау.

Р. Бикбаев был поэмала халыҡ ижадының ҡобайыр жанрын да ҡуллана. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә уға эйәреп дәресте ҡобайыр менән тамамлайыҡ.

Бер тигәс тә ни яман?
Ике тигәс тә ни яман? һ.б.

Эйе, Рауил Бикбаев һүҙҙәре менән әйткәндә, ”Вайымһыҙҙы тарих ғәфү итмәй”. Шуның өсөн дә тирә-яғыбыҙға һаҡсыл ҡарашта булайыҡ, үҙ табағыбыҙға үҙебеҙ төкөрмәйек, үҙебеҙ ултырған ағастың ботағын сапмайыҡ. Киләсәк - һеҙҙең ҡулда. Гөл итһәгеҙ ҙә, көл итһәгеҙ ҙә - үҙегеҙҙән тора.

9. Дәрестә алдыбыҙға ҡуйған маҡсаттарға ирештекме? Бер-берегеҙгә ниндәй баһалар ҡуйыр инегеҙ?

10. Өй эше.

Ошо поэманың йөкмәткеһенә ярашлы киносценарий яҙырға.

“Тәбиғәт беҙҙең ҡулда” темаһына инша яҙырға. (һайлап эшләргә мөмкин)

11. һаубуллашыу. Дәресте шағирҙың тауышы яҙылған аудиояҙманы тыңлау менән тамамлайбыҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВ “ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ”

Фәйзуллина Гөлшат Йәмил ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Октябрь районының 155-се лицейы

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың ижад юлы, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу; тыуған тәбиғәттең матурлығын күрһәтеү, уны һаҡлай белеү кәрәклеген аңлатыу; һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты; уның тураһында альбом материалдары; тормошон һәм ижадын яҡтыртҡан матбуғат баҫмалары; китаптар күргәҙмәһе, Башҡортостандың ҡыҫҡа энциклопедияһы, стенд, фотоһүрәттәр, компьютер, экран, проектор.

Дәрес барышы. 1. Ойоштороу.

Бөгөн беҙҙә башҡорт теле,
Яратам һине телем.
Рәхмәт һиңә! Һинең аша
Алам мин яҡшы белем.

2. Тын алыу күнекмәләре. Уҡытыусы. Тышта ниндәй саф һауа! Әйҙәгеҙ, ошо таҙа яҙғы һауаны танау менән тәрән һулап сығарабыҙ. Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ әле.

«Биш»ле билдә, «биш»ле билдә,
«Биш»ле билдә бик шәп шул !
«Биш»кә уҡып, гел тырышып,
«Биш»ле генә алам шул.

3. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

– Дәресебеҙҙең темаһын асыҡлар өсөн беҙгә бирелгән кроссвордты сисергә кәрәк.

1. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.
2. Европа менән Азияны бүлгән тау.
3. Ҡурай сәскәһе нимәнең символы?
4. Башҡорттар йәшәгән йорт.
5. Башҡортостандың милли геройы.
6. Башҡорт халҡының милли итле ашы.
7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға.
8. Белем шишмәһе.
9. Башҡорт халҡының спорт ярыштары ярҙамында үткән милли байрамы.
10. Бейеү йыры.
11. Республика флагындағы ерҙе, иректе аңлатҡан төҫ.
12. Тыуған ил.

Бөгөн дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шулай уҡ “Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғырын уҡырбыҙ.

4. Яңы тема өҫтөндә эш.

Уҡытыусы Р.Бикбаевтың биографияһы, китап күргәҙмәһе менән таныштыра. Слайдтар ҡарау.

”Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғыры буйынса эш.

Һүҙлек эше (уҡыусылар хор менән уҡытыусы артынан һүҙҙәрҙе уҡый, тәржемә итә, һүҙлектәренә яҙып ала);

шыйыҡ - жидкий
һығыу - выжимать
һарылып - прильнув

Уҡытыусы шиғырҙы уҡый.

Уҡыусылар уны рус теленә тәржемә итә һәм үҙ аллы уҡый.

5. Ял минуты. Слайд. Талғын музыка уйнай.

Беҙҙең Башҡортостанда
Шулай бөгөлә талдар,
Ошондай бейек тауҙар,
Шулай ҡағына ҡаҙҙар.
Шулай бейей балалар,
Шулай ырғып алалар,
Шунан шым ғына ултырып,

Тағы белем алалар.

(Шиғырҙың һәр бер һөйләменә ярашлы хәрәкәтләнеү)

Һорауҙарға яуаптар:

Тәбиғәттә япраҡ яҙын үҙен нисек һиҙә? Шиғырҙан ошо юлдарҙы ҡабат уҡып күрһәтегеҙ.

Тәбиғәт менән кешегә яҙ миҙгеле нимә алып килгән? Автор был турала нисек әйтә? Табып уҡығыҙ.

Теле асыла, сабый япраҡ, ярһып шыбырлай, тел осо, тел осонда талпына, ялғанға юлыҡмам һүҙбәйләнештәрен нисек аңлайһығыҙ?

Уҡыусылар шиғырҙы ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

6. Дәрестe йомғаҡлау. Баһалау.

Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?

Кем ул Рауил Бикбаев?

Уҡыусылар, Р.Бикбаевтың үҙ Ватанының тәбиғәтен, халҡын яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла. 2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевҡа 75 йәш тула. Әлеге көндә хөрмәтле шәхесебеҙ Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың Мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитетын етәкләй.

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, тәбиғәтенә һаҡсыл булыуығыҙҙы, аң-белемгә ынтылыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала. Уңыштар.

Уҡыусылар, дәрестә бөтәгеҙ ҙә яҡшы эшләнегеҙ, һеҙгә ҙур рәхмәт.

7. Өйгә эш.

Шиғырҙы тасуири уҡырға.

КҮКРӘГӘНДӘ КҮҢЕЛ КҮКТӘРЕ

Мөхәрәмова Розалия Талип ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы 15 - се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән таныштырыу

Ҡурай тауышы ишетелә.

1а.б. Шағирым,
Һин үләндән түбән.
И, шағирым!
Тауҙан олоһоң.
Заманаңдың зирәк хакимы һин,
Заманыңдың һуҡыр ҡоло һин.
Замана,
Тыуған балаңмын мин,
И, донъяҡай, етем кешеңмен.
Ғүмер аҡшамына еткән саҡта
Ошо дөрөҫлөктө төшөндөм.
2а.б. Поэт, ты выше гор,
Поэт, ты ниже трав,
Медлителен и скор –
Во всем всегда ты прав…
Ты времени прорыв,
Приторможен слегка,
Покорен и строптив,
Владыка и слуга…
…о время, я дитя
Твое – и сирота.
Встревожен не шутя
И плачу неспроста:
Заключены во мне
Весь мир и каждый миг.
В закатной тишине
Я истину постиг.

1а.б. Равиль Бикбаев. Это имя известно далеко за пределами Башкортостана. О нем говорят, пишут и еще будет сказано за пределами Башкортостана. Равиль Бикбаев – это тот прекрасный, чистый родник, из которого берет начало полноводная река современной башкирской поэзии. В 2013 году народному поэту Башкортостана Равилю Бикбаеву исполнится 75 лет!

2а.б. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙер Переволоцкий) районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәғрифәтенә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Агиш, ауылдашы Ғабдулла Амантай, нәҫелдәштәре Сәғит Мерәсов, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ арҙаҡлы шәхестәрҙе биргән Туҡсоран ерендә Рауил бәләкәстән йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә. Ете йыллыҡ мәктәптән һуң Рауил Аҡбулаҡ педагогия училищеһында дүрт йыл уҡыған. Рухи, сәйәси һабаҡтар шунда төпләнгән. Икенсенән, яуҙа ятып ҡалған атаһы, һуғыштан һуңғы тормош, ауыр көн итмештәр... Ул йылдарҙа нужа, ҡайғы-хәсрәт бер кемде лә ситләп үтмәгән. Ауыр хеҙмәт тә. Ләкин күңеленә шиғри осҡон, һүҙ ҡеүәһе һалынған йәш кеше өсөн былар — үҙе бер мәктәп. Мең михнәттәр кискән

әсәһенә табыныулы ҡәҙер-хөрмәт тә ана шунан килә. Ул, оло йөрәкле әсә, балаларын кеше итә, күңелдәренә ҡанат ҡуя.

1а.б. Творческой деятельностью Равиль Тухватович начал заниматься в студенческие годы. Печатается с 1957 года. В 1962 году в журнале «Агидель» вышла его первая поэма «Вокзал», в которой он заявил о себе как о зрелом, самобытном, талантливом поэте лирико-философского мироощущения и склада. В образе вокзала олицетворена и судьба страны, и судьба малой родины — деревни, родного очага, соседей, поколения, вынесшего все тяготы военного времени. Отражается и судьба женщины, проводившей с этого вокзала мужа на войну, а теперь сына в армию. Тема войны, поставленная впервые в поэме «Вокзал», осталась одной из главных в творчестве Равиля Бикбаева. В 1964 году вышла в свет первая поэтическая книга «Степные дали», за которой последовали другие, принесшие ему заслуженное признание, как в мире поэзии, так и в мире науки.

2а.б. 1964 йылда Рауил Бикбаевтың “Дала офоҡтары” исемле тәүге шиғри йыйынтығы сыға. Унан һуң донъя күргән “Ҡош юлы”, “Автобиография”, “Ғүмер уртаһы”, “Ерем балҡышы”, “Яҙмышым”, “Ай күргәндәй, ҡояш алғандай” һ. б. китаптары башҡорт шиғриәтенең үҫешенә тос өлөш индерҙе. Бигерәк тә замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған “Халҡыма хат”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”, “Система”, “Баҙар балтаһы”, “Башһыҙ һыбайлы”, “Барокамера” тигән поэмалары киң билдәлелек алды.

Йырҙар яҙам. Халҡым түгел наҙан,
Барып етер тимен хаттарым.
Барып етер шиғырым — хатымдағы
Өмөт-хыялдарым, аһтарым.
Йырҙар яҙам. Халҡым түгел наҙан,
Ҡайҙа уҡып ҡайтмай ҡыҙ-улы...
Тик һуң ниңә һаман йоҡлай халҡым,
Баш аҫтына һалып дипломын!

1а.б. Равиль Бикбаев всегда благоразумный, внимательный, проницательный, мудрый, мужественный, осмотрительный, прямодушный. Его человеческая натура возвышается над обязанностями и должностями. У него огромный запас духовности, он с каждым творческим успехом и научным исследованием сам растет и демонстрирует все больше достоинств. Может гордиться тем, что он больше человек, нежели председатель Союза писателей, депутат, общественный деятель, ученый, публицист или поэт.

2а.б. Алтмышынсы йылдар башынан уҡ Рауил Бикбаев шиғри ижадты төплө, фәнни тикшеренеүҙәр менән бергә алып бара. Ул Шәйехзада Бабич, Рәми Ғарипов әҫәрҙәрен ентекле өйрәнеүгә һәм халыҡҡа еткереүгә күп көс һалды, Мостай Кәрим, Баязит Бикбай, Рәшит Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙҙы, башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын баҫтырып сығарыуға күп көс һалды. Рауил Бикбаевтың Өфөлә, Мәскәүҙә, Ҡазанда башҡорт, рус, татар телдәрендә егерменән ашыу китабы баҫылды.

1а.б. Человек без памяти о прошлом, поставленный перед необходимостью заново определить свое место в мире, оказывается вне исторической перспективы и способен жить только сегодняшним мигом. Равиль Тухватович помогает нам возвращать нашу историческую память, и в этом видит одно из проявлений развития нового самосознания возрожденных народов многонациональной России. Не случайно все его произведения проникнуты историзмом и философичностью, осмыслением сегодняшней действительности с позиции преемственности нравственности былых героических времен.

2а.б. Равиль Бикбаев дает читателям своеобразные уроки становления духа. Он прекрасно понимает, что мы живем в противоречивом мире, в котором жизнь катастрофически обесценилась. Люди стали жестокими, коварными. В такой атмосфере можно ли сделать так, чтобы все прислушались к мнению одного?

Пускай опорочат,
Но знаю: с годами
Очистится правда
От грязи и смрада...
Толпа бесновалась,
Швыряла камнями,
Но в слове Пророка
Звучала лишь правда...
Что с нашею жизнью
Сегодня вершится?
Сочит скрытой злобою
Каждое слово.
Один человек
Себе ангелом мнится
И дьяволом метит
При этом другого.

1а.б. Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башкортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелде. Ул — Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты. 1966 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.

Исемең матур һинең,
Эй, френд-дуҫ,
Йырҙай һарылып тора ҡолаҡҡа.
Тик һуң ниңә, этлегенә барып,
Ташландың һин китер ҡунаҡҡа.

2а.б. Поэт знает, что у каждого свои симпатии. Но может ли быть так, чтобы всем нравилось то, что нравится одному? В данной ситуации Равиль Бикбаев обращается к природе, которая помогает найти ответы на эти сложные вопросы:

Все в природе степенно, достойно,
Вот, к примеру, простейший урок:
Не гоняясь за солнцем, спокойно
Зреют дыни с арбузами в срок.
Человек ради теплого места
И родне своей спуску не даст,
Рвет и мечет, доходит до зверства,
А коль надо, и душу продаст.

1а.б. Лирика менән пафос бергә ҡушылған “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”, “Халҡыма хат”, “Баҙар балтаһы”, шулай уҡ “Күк әрем”, “Ностальгия” һәм башҡа әҫәрҙәре менән шағир шифриәтебеҙҙең ҙур һулышлы, киң ҡарашлы, милли традициялы тормошон юғарылыҡта тотор өсөн күп көс һалды Рауил Бикбаев. Тап бына бөгөнгөбөҙгә, заман талабына арналған, ил, ер, тәбиғәт хәстәре менән һуғарылған “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы һәм аҫыл шиғырҙары ингән китабы өсөн ул Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһын алды.

Йәмле Ағиҙел буйҙарына
Ярҙарынан ашып ҡот тулһын.
Тамаҡтарым сатнай,
Һыу бирегеҙ!
Бер йотом һыу!
Бары йотом һыу!

2а.б. Равиль Тухватович Бикбаев принимает активное участие в культурной и общественной жизни Республики Башкортостан, постоянно выступает в печати с острыми публицистическими и критическими статьями.

В книге публицистики «Год человека», куда вошли статьи, выступления и интервью Равиля Тухватовича Бикбаева, нашли отражение и духовный облик обновляющегося Башкортостана, и сложные духовные искания наших современников, и актуальные проблемы нашей жизни, неразрывно сплетающиеся в диалектическом единстве и борьбе во второй половине двадцатого века и в начале нового тысячелетия.

В 1990—2000 годы Равиль Бикбаев много путешествовал, представляя башкирскую литературу в США, Франции, Турции, Южной Корее, Германии, в странах СНГ. Поездки поэта нашли отражение в путевых заметках, которые составили книгу путешествий «На заре выезжаю в путь» — новый жанр для башкирской литературы.

1а.б. Равиль Тухватович Бикбаев удостоен Республиканской премии имени Салавата Юлаева и Республиканской премии имени Галима Саляма, премии имени Рами Гарипова, Зайнаб Биишевой. Награждён орденами Дружбы, Салавата Юлаева. В июне 1999 года присвоено звание «Почётный гражданин города Уфы». В 2007 году назначен членом Президентского Совета Республики Башкортостан. 2 марта 2008 года Равиль Тухватович Бикбаев избран депутатом Государственного Собрания — Курултая Республики Башкортостан четвёртого созыва по единому республиканскому округу, от Всероссийской политической партии «ЕДИНАЯ РОССИЯ».

Бикбаев Равиль Тухватович является Председателем Комитета по образованию, науке, культуре, спорту и делам молодежи Государственного Собрания — Курултая Республики Башкортостан.

2а.б. Шағир ғүмер ҡәҙерен белә. Зиһендән, күңелдән үткәндәр ҡәҙерен. Шуға ла унда үткәндәргә, тарихыбыҙға арналған әҫәрҙәр ярайһы күп кенә. Уларҙа кисәге көн, бөгөнгөһө менән, киләсәк менән аралашып, уҡмашып, йәйәгә һалынған уҡ хәлендә йәшәй. Уҙғандар хаҡында онотһам, киләсәгемә юлдар ябыҡ, ти шағир. Шулай ҙа Рауил Бикбаев — барыһынан да элек заман шағиры, бөгөнгө тормош йырсыһы, даулы һәм ҡатмарлы хәҙерге донъябыҙ, милли рухыбыҙ рәссамы. Баштан, тәү баштан уҡ шулай булды һәм шулай ҡала.

Йоҡлар йоҡоһонан яҙһын кеше,
Яҙмаһын тик еренән, иркенән,
Башҡортостан сәсәй.
Үҙ ҡуйынында
Үҫеп сыҡҡан күпме аждаһалар,
Ағыу сәсеп,
Битенә төкөрә.

РАУИЛ БИКБАЕВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ТӘБИҒӘТ ТЕМАҺЫ

Вәхитова Рима Әхмир ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы 15-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат һәм бурыстар:

- Рауил Бикбаев шиғриәтендәге тәбиғәтте һүрәтләү алымдарын табырға өйрәтеү һәм уларҙың матурлыҡ тыуҙырыуҙағы ролен билдәләү;
- яңы технологиялар ҡулланып, тәбиғәт күренештәрен анализлауҙың яңы алымдары тураһында мәғлүмәт биреү;
- шағирыбыҙ әҫәрҙәре аша тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, уның гүзәллеге менән һоҡланыу хистәре уятыу.

Йыһазлау: проектор, экран, презентация, картина, башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге, Р.Бикбаев шиғырҙары.

Дәрес барышы:

Уҡытыусы. - һаумыһығыҙ! Хәйерле көн! Кәйефтәрегеҙ нисек? Билдәле булыуынса, әҙәбиәттә матурлыҡ тураһында яҙмаған, сихри пейзаждар, урман–кырҙар, йылға-күлдәр, күркәм образдар тыуҙырмаған шағирҙар, яҙыусылар юҡтыр, моғайын. Шуға ла әҙәбиәт - үҙе матурлыҡ ул, шуға ла әҙәбиәт матур ул. Ләкин һәр яҙыусының, шағирҙың матурлыҡҡа үҙ ҡарашы, үҙ фекере бар. Бөгөн беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижадына мөрәжәғәт итеп, уның шиғриәтенең үҙенсәлектәрен асып ҡарайыҡ.

- Рауил Бикбаевтың поэзияһы ярҙамында баланың эске донъяһын байытыуҙың ниндәй ябай, ҡулай, тиҙ башҡарыла торған ысул-алымдары бар? Бөгөн шул һорауҙарға бергәләп яуап эҙләп ҡарайыҡ.

Эмоциональ тәьҫир итеү алымы.

“Тыуған ауыл” йыры тыңлана.

Уҡытыусы. Йырҙы тыңлағанда һеҙҙең күңелдә нимә тыуҙы?

Көтөлгән яуап: хис.

1. Нимә ул хис? Хис – донъя ваҡиғаларына күңел менән баһа биреү. “Башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге”нән хис төшөнсәһенең мәғәнәһе уҡыла. (слайдта яктыртыла)

2. Хис тыуыу өсөн ниндәй сәбәп шарттар кәрәк. Хисте тыуҙырыусы сәбәп – хистең йөкмәткеһе була.

3. Хистең ниндәй сифаттары бар? Хистең дәрәжәһе була, шулай уҡ йыуаныу ҙа хистең бер сифаты.

4. Ниндәй хистәр була? Ҡайғы, шатлыҡ, яратыу, нәфрәт, ғорурлыҡ, кәмһенеү, һоҡланыу, мөхәббәт хистәре.

Ә был йырҙа ниндәй хистәр сағылыш таба? Һәр уҡыусы күңелендә тыуған хистәрҙе әйтә. *(Тыуған яҡ матурлығы менән һоҡланыу, ғорурланыу, шатланыу, тарихыбыҙ менән ҡыҙыҡһыныу хистәре, тарих күҙ алдынан уҙа).*

Беҙ матурлыҡты нисек итеп тоябыҙ? (Слайд)

Йәйге тәбиғәт күренеше һүрәтләнгән картина тәҡдим ителә. Беренсе ҡарашҡа рәсемгә ҡарауға уҡыусыларҙа ниндәй хистәр тыуҙы? Картинала нимәләргә һоҡландыҡ?

Яуаптар тыңлана.

(Көтөлгән яуап: Беҙ рәсемгә ҡарап, ундағы матурлыҡҡа һоҡландыҡ. Сихри күлгә, аллы – гөллө сәскәләргә, бейек тауҙарға, саф һауаға, аҡ болоттарға, ҡойоп яуған ямғырға).

Тимәк, матурлыҡ ул һоҡланыу хисе тыуҙыра. Кеше йәне һәр ваҡыт матурлыҡҡа һыуһап йәшәй. Уға яңынан - яңы тәьҫирҙәр, һоҡланыуҙар кәрәк, ә һоҡланыу күңел юшҡындарын йыуа. (Слайд)

Уҡытыусы. Һеҙҙең ҡаршығыҙҙа тәбиғәт тураһында шиғырҙар ята. Һеҙ шулар араһынан Рауил Бикбаев шиғырҙарынан килтерелгән юлдарҙа картинала сағылыш тапҡандарын эҙләп табып, уҡып күрһәтегеҙ. (Уҡыусылар шул шиғырҙарҙы табып уҡыйҙар).

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев тыуҙырған тәбиғәттең сихри көсө-һүрәт- биҙәктәрҙән торған матурлыҡ донъяһы. Әйҙәгеҙ әле, үҙегеҙҙе эҙләнеүселәр итеп күҙ алдына килтерегеҙ. *(Ике төркөмгә эш бирелә. Беренсе төркөм алда ятҡан шиғырҙарҙан сағыштырыуҙарҙы, икенсе төркөм эпитеттарҙы эҙләй.)*

Эш алдынан һәр һүҙгә аңлатма бирелә. Сағыштырыу - бер предметты йәки күренеште икенсе предметҡа һәм күренешкә оҡшатып әйтеүҙе белдерә.

Эпитет - күренеш һәм предметтың сифатын, айырым билдәләрен белдереүсе һүҙ. Ул һөйләмде айырыуса биҙәп тора һәм уны табыуы ла еңел.

Сағыштырыуҙар.

Сылбыр булып, был сабырһыҙ ҡоштар
Сығып китте донъя ырарға.
(Миңә гел-гел әллә нимә етмәй...)

Ҡолон кеүек ямғыр йүгереп үтте,
Туп-туп баҫып көмөш тояғын.
Тояғына уралыпмы килде
Ялан еҫе, үлән ҡыяғы.
(Ҡолон кеүек ямғыр йүгереп үтте...)

Елбер-елбер зәңгәр яулыҡмы ни
Яландарҙың зәңгәр һағымы.
Яҙғы күктең сәскәләре булып,
Ҡоштар ҡайта илде һағынып.
(Ағиҙелдә сайҡалышып аға...)

Бәҫ ҡаплаған урман тынған белеп бәҫен,
Ҡырауланған һәр бер ҡыуаҡ – серле сатыр.
(Айлы төн)

Төн тағы ла зәңгәр буяуына
Манып ҡуйҙы ялан, урманды,
Меңәрләгән йомаҡ һымаҡ йондоҙ итеп
Баш өҫтөмә элде йыһанды. (Тәүлек)

Барған һайын сәхрәләрҙең
Яңы биҙәген асам.

Ә офоҡ, шаян ҡыҙ һымаҡ,
Үҙенә ымлап ҡаса. (Дала офоҡтары)

Аҡ ҡайындар яҡты маяҡ булып
Юлдарыма минең теҙелгән.
Тупрағымдан сыҡҡан был нурҙарға
Баш эймәйсә нисек түҙергә? (Аҡ ҡайындар)

Ынйылай балҡыған ҡарҙарҙы
Дауылдар алыҫҡа һиптеләр. (Ҡарһылыу)
Яңы тәпәй баҫҡан сабый һымаҡ,
Ерҙән ҡарай миңә күк үлән. (Ағиҙелдә сайҡалышып аға...)

Эпитеттар.

Алһыу болоттарҙан арҡан ишеп,
Таңда ергә төштөк. (Йәшлек)

Офоҡ буйлап Урал тауы яна,
Моңһоу шәфәҡ, алсаҡ таң яна.
Шәфәҡтәргә ҡарап моңһоуланам
Тын таңдарға ҡарап тын ҡалам. (Ҡайтҡан саҡта ҡояш сығышынан...)

Ҡурайҙарҙың моңон йотоп,
Сулпыларҙың сыңын отоп,
Сәскә еҫле елдәр иҫә,
Иҫә Иҙел туғайынан. (Йәйрәп ятҡан Уралымда...)

Тәү ҡат табан тейгән тупрағымдың
Ғәзиз миңә һәр бер ҡарышы.
Йылы саңдарында аунап үҫтем,
Көнбағыштар менән ярышып. (Тәү ҡат табан тейгән тупрағымдың...)

Беҙгә ниндәй алсаҡ ҡарҙар яуҙы,
Ҡойҙо ниндәй ярһыу ямғырҙар,
Баҡты ниндәй күҙ сағылыр таңдар,
Ҡалҡты ниндәй ҡыйғас йәйғорҙар! (Ниндәй)
Таш ҡаланың тынсыу һауалары
Тынын бөрккән саҡта кис ергә
Тарта күңел шәфәҡ һыу ҡойонған
Йылы йылғаларҙы кисергә. (Таш ҡаланың тынсыу һауалары…)

Сылтыр-сылтыр аҡҡан йылтыр шишмә
Һис хәйләһеҙ көнгә ҡараны… (Дала шишмәһе)

Уҡытыусы. Һеҙ Рауил Бикбаевтың ҡайһы бер шиғырҙары менән таныштығыҙ, художестволы алымдарҙы билдәләнәгеҙ. Улар һеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

Көтөлгән яуаптар.

- Рауил Бикбаевтың шиғриәтендә һүрәтләнгән тәбиғәт күренештәре ер йөҙөнөң башҡа урынында юҡ һымаҡ.

- Уның шиғырҙары беҙҙе тәбиғәтте яратырға, уны һаҡларға, ерҙәге матурлыҡты күрә белергә өндәй.

Релаксация. (музыка ҡуйыла)

- Әйҙәгеҙ, күҙҙәрҙе йомабыҙ ҙа үҙебеҙҙе Шағирыбыҙ тасуирлаған урмандарҙа, ялан-ҡырҙарҙа итеп күҙ алдына килтерәбеҙ. Тәрән итеп саф һауа һулайбыҙ. Еләкле аҡланға килеп сығабыҙ. Силәктәрҙе тултырып, ял итергә ултырҙыҡ. Унан йәшел хәтфә үләнгә ятып, икһеҙ-сикһеҙ зәңгәр күккә төбәләбеҙ. Унда ап-аҡ, йомшаҡ болоттар йөҙә. Йәнәшәлә генә урман шаулауы, япраҡтар ишетелә. Сәскәләр, ер еләктәре, төрлө үлән еҫенән баштарыбыҙ әйләнеп киткәндәй була. Күңелдәргә шундай рәхәт... Әкрен генә күҙҙәрҙе асабыҙ.

Уҡытыусы. Хәҙер һеҙҙең менән ижади эш башҡарасаҡбыҙ. Әйҙәгеҙ, иҫкә төшөрәйек әле, гәзит сығарыу өсөн беҙгә кемдәр кәрәк буласаҡ? (мөхәррир, журналист, рәссам, корректор). Һеҙгә, Рауил Бикбаевтың шиғырҙарынан һәм үҙ күҙәтеүсәнлелегеҙҙән сығып, «Тәбиғәт һәм беҙ» исемле гәзит сығарырға тәҡдим итәм. Ваҡытты күҙәтеп тороусы ролен үҙем алам. Эште ике төркөм башҡара. Ҡыҫҡаһы, үҙегеҙҙең фантазияны эшкә егергә кәрәк буласаҡ.

Эш барышында журналист башҡалар янына килеп интервью алып йөрөй.

Уҡытыусы. Хәҙер эштең һуңғы этабына - үҙ анализға күсәбеҙ.Әйтегеҙ әле, эш төрөн башҡарғанда һеҙ ниндәй ҡыйынлыҡтарға осранығыҙ? Эшегеҙҙе үҙгәртә алһағыҙ, ҡайһы урынын яңынан эшләр инегеҙ?

Һүҙҙе редакторҙарға бирәбеҙ.

Редактор. Минең уйлауымса, газета түбәндәге талаптарға тура килергә тейеш:

-газетаның исеме;

-сығарған органы;

-редколлегия;

-йөкмәтке.

Ошо талаптарға тура килгәндә генә гәзит уҡыусылар күңеленә хуш килер.

Уҡытыусы. Гәзиттәребеҙҙең икеһе лә маҡтауға лайыҡ.

Музыка яңғырай.

Уҡытыусы. Бөгөн беҙ күренекле шағирыбыҙ Рауил Бикбаевтың шиғриәтенә бер ни тиклем байҡау яһаныҡ. Ысынлап та, Рауил Төхфәт улы тәбиғәтте үҙенсәлекле, уға ғына хас алымдар менән халыҡсан итеп һүрәтләй алған. Уның тәбиғәтте һүрәтләгән һәр алымы кеше яҙмышына барып тоташа. Шағир тәбиғәт менән кешенең бер-береһенә үрелеп, бер-береһен тулыландырып, байытып йәшәүен билдәләй. Ул тыуған яғына, тыуған тупрағына булған һөйөүен шиғриәтендә тулыһынса бирә алған. Юҡҡа ғына Бикбай үҙ ижадында тыуған яҡ тәбиғәтен шулай һүрәтләмәгән! Сөнки Шағир үҙ яҙмышын да тыуған тәбиғәтенән башҡа күҙ алдына ла килтерә алмай.

Рауил Бикбаев беҙҙе ҡулға ҡәләм алырға саҡыра. Беҙ уға ҡарата күңелдәребеҙҙә булған изге хистәребеҙҙе , саф тойғоларыбыҙҙы шиғырға күсерәбеҙ. Шуға күрә өй эше итеп тәбиғәт тураһында шиғыр яҙып килеүҙе бирәм.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ТОРМОШ ҺӘМ ИЖАД ЮЛЫ

Камалова Эльвира Ғилман ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы 1-се гимназияһы

Маҡсат: Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән таныштырыуҙы дауам итеү, алған белемдәрҙе системаға килтереү, үҙ аллы эшмәкәрлекте, тасуири уҡыу, һөйләү һәм фекер йөрөтөү һәләтен үҫтереү, яҙыусының ижадына, мираҫына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың китаптары, интерактив таҡта, карточкалар.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

II. Артикуляцион күнегеү. (Слайд)

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам. Р. Бикбаев

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә тора. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә.

III. Инеш әңгәмә. Уҡыусыларҙы Р. Бикбаевтың биографияһы менән таныштырыуҙы дауам итеү.

1) Логик-мәғәнәүи модель өҫтөндә эш. (Координатаның һәр уғы буйынса уҡыусылар ҡыҫҡаса һөйләй, тултыра бара.)

2) Р. Бикбаевтың тормошона ҡағылышлы мөһим даталар теҙмәһе.

Һорауҙар:

а) Р. Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуған? (1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында.)

б) Ниндәй уҡыу йорттарын тамамлай? (Күрше ауылдағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетын.)

в) 1995 йылдан ниндәй вазифа башҡара башлай? (Яҙыусылар союзының идара рәйесе.)

г) Тәүге шиғырҙар йыйынтығы нисек атала һәм нисәнсе йылда донъя күрә? (“Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә.)

ғ) Шағир поэзияһында ниндәй проблемалар күтәрелә? (Халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә.)

д) Билдәле шиғырҙарын, поэмаларын атағыҙ. (“Халҡыма хат” шиғыры, “Карауанһарай”, “Баҙар балтаһы”, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” поэмалары.)

е) Маҡтаулы исемдәре, наградалары (республикабыҙҙың F.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры.)

Презентация (шағирҙың фотоларын күрһәтеү), китаптарын күрһәтеү.

3) Р. Бикбаевтың “Яңғыҙлыҡ” шиғыры менән таныштырыу.

а) шиғырҙы тасуири уҡыу;

б) һүҙлек эше

йыһан – космос
яҙмыш – судьба
ҡайғы – горе
йәшәү һуланы – жизнь потеряла смысл

в) бер нисә уҡыусының тасуири уҡыуы;

г) шиғырҙың төп темаһын билдәләү;

ғ) шағирҙың яңғыҙ булмауын нисек аңлайһығыҙ? (уҡыусыларҙың фекерҙәрен тыңлау);

IV. Нығытыу. Диалогты дауам итегеҙ.

- Айгөл, бөгөн китапханаға барабыҙмы? Миңә Рауил Бикбаевтың шиғырҙар йыйынтығын алырға кәрәк. (Материалды үҙләштереү кимәлен тикшерү өсөн тестар бирелә. Дәфтәрҙәр алмашына һәм экрандағы яуаптар менән сағыштырыла.)

1. Р. Бикбаев ҡасан тыуған?

а) 1928 йыл;

б) 1938 йыл;
в) 1942 йыл;
2. Р. Бикбаев ҡайҙа тыуған?
а) Салауат районы Арҡауыл ауылында;
б) Күгәрсен районы Туйымбәт ауылында;
в) Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында;
3. Шағирҙың тәүге китабы нисек атала?
А) “Дала офоҡтары”
б) “Халҡыма хат”
в) “Башҡорт теле”
4. Р. Бикбаевтың шиғыры:
а) “Ҡайын япрағы тураһында”
б) “Бир ҡулыңды”
в) “Халҡыма хат”
5. 1993 йылда Р. Бикбаевҡаниндәй маҡтаулы исем бирелә?
а) Башҡортостандың халыҡ уҡытыусыһы;
б) Башҡортостандың халыҡ шағиры;
в) Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты;
V. Дәресте йомғаҡлау, уҡыусыларҙың яуаптарын баһалау.
VI. Өйгә эш. Башватҡысты сисһәгеҙ, Р. Бикбаевтың тел тураһындағы шиғырын уҡырһығыҙ. Уҡыусыларға карточкалар таратылып бирелә.

34, 27, 16 / 26, 8, 16 /17, 8, 18, 40, 18 / 30, 1, 16, 15, 37, 17/ 30, 1, 15, / 42, 7, 17, 37, 34, 37, 18,/ 15, 1, 13, 31, 37/ 2, 37, 27, 1, 27, 26, 26, 1, 23, 5, 1/ 42, 7, 17, 1, 5, 1, 18./ 14, 28, 22, 17, 8 / 1, 25, 37, 16 / 12, 23, 7, 40, 23, 8, 18, 40, 18 / 42, 7, 5, 1, 18,/ 14, 28, 22, 17, 8 / 1, 25, 37, 16 / 8, 23, 7, 40, 23, 8, 18, 40, 18 / 42, 7, 5, 1, 18,/ 14, 28, 22, 17, 8 / 1, 25, 37, 16 / 13, 37, 23, 7 ,1 , 23, 37, 18, 1, 18 / 42, 7, 5, 1, 18,/ 26, 12, 14 / 17, 20, 19, 20, 18, 1, 18 / 26, 8, 16, 8, 18, 40, 18 / 42, 7, 17, 1, 5, 1, 18./

Башватҡыстың яуабы

Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған. (Р. Бикбаев.)

РАУИЛ БИКБАЕВ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!»

Хафизова Фәнзилә Мәхмүт ҡыҙы,
Бәләбәй районы 7-се һанлы
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1. Р.Бикбаевтың биографияһын хәтергә төшөрөү нигеҙендә, уның әҫәренең әһәмиәтен, йөкмәткеһен үҙләштереү.

2. Тасуири уҡыу, һүҙлек өҫтөндә эшләү, һорауҙарға яуаптар алыу; уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү, эҙләнеү күнекмәләрен үҫтереү.

3. Тыуған яҡ тәбиғәтенә һөйөү һәм һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһаҙландырыу: дәреслек, электрон дәреслек, Р.Бикбаевтың портреты, китаптарынан күргәҙмә, компьютер, мультимедиа проекторы, экран.

Дәрестең төрө: яңы материал үҙләштереү дәресе

Дәрестең тибы: дәрес-эҙләнеү

I.Ойоштороу.

1. -дәрескә әҙерлекте тикшереү;

-дәрестең маҡсатын әйтеү.

2. Ыңғай психологик атмосфера тыуҙырыу.

- тылсымлы һүҙҙәрҙе иҫкә төшөрөү (рәхмәт, һаумыһығыҙ, һау булығыҙ, рәхим итегеҙ һ.б.)

3. Фонетик, артикуляцион күнегеү.

1) электрон дәреслек буйынса башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау.

2) слайд буйынса (2-се слайд) «һ» өнөнөң дөрөҫ әйтелешен ҡабатлау.

һ-ha-hә-ho-hө-hy-hү—hы–hи-he;

Ah-әh-oh-өh-yh-үh-ыh-иh-эh.

һең-hең-hең-ҡайҙан ҡайтып киләһең,

Һыуҙан ҡайтып киләмен.

II.Төп өлөш.

1.“Тылсымлы сәскә” уйыны.(3-4 се слайдтар)

Сәскәнең таждарын ҡаплаған ҡағыҙҙарҙы алып дәрестең темаһына, маҡсатына килеү.

1 таж:Башҡортостан менән сиктәш өлкә?(Ырымбур)

2 таж :Яҙыусының тыуған ауылы?(Ҡунаҡбай)

3 таж: Тыуған йылы?(1938йыл, 12 декабрь)

4 таж:Бала сағы һүрәтләнгән әҫәрҙең исеме?(Балтырған)

5 таж: Был шиғырҙың исеме ?(Уралыма)

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын

Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа.

6 таж:Ижадының төп сифаты?(Халыҡсанлыҡ)

7 таж (уртала):Башҡортостандың халыҡ шағиры?(Рауил Бикбаев)

Һығымта: Эйе, уҡыусылар,бөгөнгө дәрес- эҙләнеүҙә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры, атҡаҙанған фән эшмәкәре, Республиканың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр, Зәйнәп Биишева һәм Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты Рауил Бикбаев (5-се слайд) ижады менән танышасаҡбыҙ, уның «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ» поэмаһынан өҙөк уҡырбыҙ. Ә хәҙер яҙыусының видео һәм фотоальбомдарын ҡарап китәбеҙ, тауышын тыңларбыҙ (электрон дәреслек буйынса ҡарау һәм тыңлау).

III. Уҡыусылар алдына проблемалы һорау ҡуйыу .

- Шағир был әҫәрҙә нимәгә борсола?

IV. Поэманың йөкмәткеһен үҙләштереү.

1. Инеш һүҙ.

Рауил Бикбаев –заман шағиры.Ул үҙ осороноң һәр һулыш-хәрәкәтен асыҡ тоя.Уның замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған «Һыуһаным,һыуҙар бирегеҙ!», «Халҡыма хат», «Система» һәм башҡа әҫәрҙәре киң билдәлелек алды.Улар үҙгәртеп ҡороу дәүерендә яҙылһа ла әле лә бик актуаль булып ҡала.

2. Һүҙлек эше(6-сы слайд)

хафа- беспокойство

шеш-опухоль

бушбоғаҙ- горлопан

һөрән-призыв

ҡыуғын-сплав

ҡырғын-мор

ылымыҡ-ил,водоросль

оран һалыу- бить в набат

элмәк-петля

3. Һәйбәт уҡыған уҡыусыларҙың поэманан өҙөктө уҡып сығыуҙары.

4. Әңгәмә :

- Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьсир ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

-Шағир ни өсөн «һауаларҙан ергә төш,туған!

Урал күкрәгендә бер шеш тыуа-

Һыҙлана бит бөгөн Иштуған»- ти?(Яуаптар)

-Поэмала тәбиғәтте, йылғаларҙың таҙалығын һаҡлау тураһында ҡайһы юлдарҙа әйтелә?

-Шағир Ағиҙелде быуыуҙы кемгә элмәк һалыу менән тиңләй?

-Ә ни өсөн шағирҙы Ағиҙелдә һыуһаҡлағыс төҙөү борсой ?

-Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, һыуһаҡлағыстарҙы төҙөү тәбиғәткә файҙа килтерәме? Ниндәй ыңғай һәм кире яҡтарын әйтә алаһығыҙ? (поэманан табыу, үҙ һүҙҙәре менән әйтеү)

5. Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы, ысын мәғәнәһендә, халыҡты тәбиғәтте һаҡларға саҡыра, бер кемде лә битараф ҡалдырмай, тыуған яҡ тәбиғәтенең киләсәк быуындар өсөн дә кәрәк буласағын онотмаҫҡа ҡуша.

-Ә поэмала күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн республикала, ҡалала нимәләр эшләнә тигән һорауға беҙ «Кластер » (материалды график ысул ярҙамында ойоштороу) ярҙамында яуап бирербеҙ.

1. Таҡта уртаһына тема йәки төп һүҙҙе, һөйләмде яҙыу.

2. Төп һүҙ тирәләй идеяны, факттарҙы, образдарҙы асыҡлай торған һүҙҙәрҙе яҙыу. (Схема «планета һәм уның юлдаштары» моделенә оҡшарға тейеш.)

Кластер(7-се слайд)

V. Йомғаҡлау.

-Уҡыусылар , беҙ дәрес башында ҡуйылған һорауға яуап таптыҡмы? Шағир был әҫәрҙә нимәгә борсола?(яуаптарҙы тыңлау)

-Һеҙ үҙегеҙ өсөн ниндәй асыштар яһанығыҙ?

1. Ниндәй фәндәр менән бәйләнеш булды?

2. Кластер төҙөү ярҙамында киләсәк быуындарға ла тәбиғәтте һаҡлауҙың әһәмиәте тураһында еткереү.

VI. Өйгә эш (8-се слайд) Поэманан өҙөктө тасуири уҡырға өйрәнеү, Башҡортостан йылғаларының исемдәренән кроссворд төҙөү.

“ҮÇһЕН ШӘЖӘРӘБЕҘ – БЕҘҘЕҢ ХАЗИНАБЫҘ!”

(уҡыусылар ҡоро)

Иманғолова Гөлназ Радик ҡыҙы ,
Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернаты

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың “Хазина” поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһе менән таныштырыу; поэмала һәм бөгөнгө көндә халыҡты борсоған проблемаларҙы күтәреп сығыу; үҙаллылыҡ сифаттарын үҫтереү, Р.Бикбаев ижадына ҡарата ихтирам һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу; туған телде, тарихты, мәҙәниәтте, шәжәрәне ҡәҙерләүсе, уның киләсәген ҡайғыртыусы, аңлы, белемле, илен, ерен, халҡын яҡларҙай әүҙем йәш быуынды тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, шағир ижадына бағышланған күргәҙмә, презентация, тирмә, эпиграф:

Теҙләнәбеҙ ергә,
Хаҡҡа табынабыҙ.
Үçһен шәжәрәбеҙ-
Бөйөк хазинабыҙ!

Ҡор үткәрелгән урын башҡорт йәйләүе кеүек әҙерләнгән, тирмә лә биҙәлгән, шәжәрәләр ҡуйылған. Алып барыусылар һәм ете ырыу вәкилдәре милли кейемдәрҙә. Алып барыусы –Айҙар сәсән, Сәсәниә.

Саранының барышы. (Ҡурай моңо тауышы)

Айҙар сәсән.

Хәйерле көн, ҡорҙаштар! Бөгөн беҙ Башҡорт ҡоролтайының сираттағы ҡорона Башҡорт поэзияһының аҡһаҡалы, тиҫтәләгән поэмалар авторы Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың “Хазина” поэмаһында күтәрелгән проблемаларҙы уртаға һалып һөйләшергә йыйылдыҡ. Кәңәшле ил тарҡалмаҫ, тигән боронғолар. Йыйында ете ырыу вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Һәр ырыуға алдан эштәр ҡушылғайны: поэма менән танышырға, презентация әҙерләргә, ҡор аҙағында сығарыр өсөн тәҡдимдәр индерергә.

Сәсәниә. Хәйерле көн, ҡорҙа ҡатнашыусылар! Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Рауил Бикбаев тыумышы менән Ырымбур далаларынан, йәмле Туҡ-Соран буйынан. Ул шиғырҙарында, поэмаларында тыуып-үҫкән яҡтарының тәбиғәт йәмен, халҡының күңел күркен, тарихын, хәҙергеһен һүрәтләй. Рауил Бикбаев үҙен поэмалар оҫтаһы итеп таныттты. Тәүге “Вокзал” исемле поэмаһы 1962 йылда “Ағиҙел” журналында баҫылып сыға. “Мәсәл ярым ғүмер”, “Ностальгия”, ”Күк әрем”, ”Бураҙна”, ”Эҙләйем”, ”Система”, ”Барокамера”, ”Тамғалы уҡ”, “Йыр”, ”һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ”, ”Баҙар балтаһы”, “Мәңгелек мәл” поэмаларында көнүҙәк проблемаларҙы күтәреп сыға. 2009 йылда “Ағиҙел” журналында “Хазина” поэмаһы баҫыла.

“Хазина” лиро-эпик поэмаһында ваҡиғалар бөгөнгө көндә бара.Төп герой – Юлдаш, ул Өфө ҡалаһында йәшәй. Уның атаһы Фәҙел Аҡъюлов заманының уҡымышлы кешеһе була. Ул халыҡ дошманы тип 1938 йылдың йәйендә атыла, шул көндө уның улы Юлдаш тыуа. ”Халыҡ дошманының улы” на күп ишектәр бикле була. Тарихсы булырға теләһә лә, вуз-ға уҡырға алмайҙар. Ғүмер буйы заводта эшләй. Йылдар үткәс, атаһы Фәҙелде аҡлайҙар. Уларға үҙҙәренең йорттарына ҡайтып йәшәргә рөхсәт бирелә.Улы Азамат өйләнә, бәпестәре тыуа. Ләкин бәхет оҙаҡҡа һуҙылмай. Улы һәм килене аварияға осрап фажиғәле үлеп ҡалалар. Юлдаш ейәнен үҙе үҫтерә. Һуңғы йылдарҙа шәжәрәһен төҙөү менән шөғөлләнә. Ғүмере буйы Юлдаштың алдында кәртәләр осрап ҡына тора, ул баҙап ҡалмай, бирешмәй, үҙен ғорур тота. Әҫәрҙең аҙағында ла яҙмыш уны тағы бер тапҡыр һынай. Яңы бина төҙөтөр өсөн байҙар уның йортона берәҙәктән ут төрттөрә. Яратҡан ейәне ут ялҡынында һәләк була.

Айҙар сәсән. Юлдаш проблемаһы – ул беҙҙең халҡыбыҙҙың, тыуған еребеҙҙең аяныслы хәле. Быға күҙ йомоп ҡарарға ярамай. Рауил Төхфәт улы беҙҙе уяулыҡҡа саҡыра. Хөрмәтле йәмәғәт! Хәҙер һәр бер ырыу вәкиле үҙе борсоған мәсьәләләрҙе әйтһен. Кәңәшләшәйек, бер ҡарарға киләйек. Ҡорҙоң икенсе өлөшөндә ырыуҙарҙың шәжәрәләре менән танышырбыҙ.

Үçәргән ырыуы сығышы. (Презентация күрһәтелә, һәр ырыу вәкиле әйтелгәндәргә үҙ фекерҙәрен дә өҫтәп әйтә.) Бикбау бей-ырыу башлығы.

Йәмәғәт! Һеҙгә өндәшәм!
Ҡуҙғалырға ваҡыт
Был эш менән
Ҡайҙа ғына Юлдаш барманы.
Ул төҙөгән шәжәрәнең бөгөн
Ялғанмаҡсы яңы тармағы.
Матурая Өфө.
Балҡып тора
Яңы театрҙар, банктар.
Ни арала ҡалҡа тауҙай йорттар-
Һаман торлаҡ етмәй халыҡҡа.
Үçмер саҡтан ил тип билен бөккән
Ҡартлығында асҡа ҡаклана.
Кемдәр йәшәй икән был йорттарҙа,
Ала икән ниндәй аҡсаға?
Шаҡ ҡатырлыҡ торлаҡ хаҡтарына !..
Ниндәй хаҡтар!..
Башбаштаҡлыҡ шаша,
Кем һуң тыйыр?
Хөкөм юҡ микән?
Ғүмерендә бында фатир алмаҫ

Хәләл эш хаҡына тир түккән…
Миллиондарҙың хәләл хеҙмәтенән
Тупланғанмы илдең көс-ҡеүәте…
Нисә йылдар ҡотора маскарад!
Шул байлыҡты урлап,Рәсәй буйлап
Миллиардерҙар үрсей!
Мәсхәрә!
Байлыҡ сумырып,
Сымылдыҡҡа сумып
Йәшәүҙәре һиңә бик шәптер –
Был бит тирен түккән,билен бөккән
Бер ҡарт ята торған түшәктер.
Тик хаҡ хөкөм телһеҙ нишләптер.
Инде нисәмә ҡат иномарка
Яңыртаһың, һайлап иң шәптән.
Ғәйрәттәрен һәр бер машинаңдың
Ат көстәре менән һанама һин,
Кеше көсө менән иҫәплә:
Һөйрәп йөрөтә һинең лимузинды
Ыҙа сиккән күпме сабыйҙар.
Йыуа уны нахаҡ күҙ йәштәре,
Әллә ҡайҙан шулай таныйҙар.
Юрматы ырыуы Тәтегәс бей:
Халҡым! Айыҡ тормош башлайыҡ!
Илде ҡотҡарайыҡ, байҙар артһын,
Илде байыҡтырып байыҡһын.
Үрнәк алһын унан йәш уңғандар,
Иҫерек ауыл тиҙерәк айыҡһын.
Шәжәрә шау тарих ҡына түгел,
Шәжәрә гел алға саҡыра.
Атай булыр күпме ир йорат
Аяғында баҫып саҡ тора.
Шешәһенә йәбешеп ауғандарҙы
Тиҙ ҡаптырыр әжәл ҡармағы.
Үрелеп үҫкән бөйөк шәжәрәнең
Өҙөлә, ҡорой күпме тармағы.

Ҡыпсаҡ ырыуы Ҡарағужаҡ батыр: Мине бәрәкәтле башҡорт ерҙәренең сит ҡулдарға китеүе борсой, йәмәғәт. Беҙҙең балаларыбыҙ ситтән килгән килмешәк байҙарға, яңы урыҫтарға үҙ ерендә бил бөгәсәкме?

Яңы урыҫ илде талай,
Аҡса һуға яңы татар,
Иҫке башҡорт ҡурай тарта,
Йырлай, бейей, моң тарата.
Иҫке башҡорт иҫереп ята,
Яңы башҡорт ерен һата…
Ер-әсәне һатып ебәрергә
Бирелмәгән хоҡуҡ бер кемгә.
Түрә һата.
Шул түрәне һүккән
Кеше үҙе һата, күрәләтә
Балаһының киләсәген һата.
Байып ҡалайым тип бер көнгә.

Меңле ырыуы Ҡәнзәфәр бей: Дәүләт тарафынан демографик хәлде яҡшыртыу өсөн үткәрелгән саралар –бик ҡыуаныс, әлбиттә. Тик һуңғы йылдарҙа милли мәктәптәрҙе ябыу нимәгә килтерҙе. Йөрәк әрней, нисек түҙергә һуң!

Урман өҫкә ауып бара-
Өй һалырға ағас юҡ.
Йорттар өҫкә ауып бара-
Торорлоҡ аласыҡ юҡ.
Йән эйәләре бар ҙа ул-
Аҙ шул аҡыл эйәләре.
Ауылдарҙың һура ҡала
Ҡайнар ҡаны,
Елеген,
Йәнен.
Күпме бисара әҙәмдең
Төнө бар ҙа, көнө юҡ,
Өнө бар ҙа, көйө юҡ,
Усағы бар-уты юҡ.
Күпме өйҙәр етемһерәй,

Тәҙрәһенән ут күренмәй,
Ишегенән кеше кермәй.
Мәктәп бар ҙа ул-
Балалар юҡ.
Мәсет бар ҙа ул-
Бабайҙар юҡ.
Өйҙә бишек элер сәйҙәң
Кәрәге ҡалмай.
Мәктәптәрҙе шатландырыр
Сабыйҙар ҡалмай.
Атҡа менер ирҙәр ҡалмай,
Ир атланыр аттар ҡалмай.
Ҡурҡытмаһын ҡарттар йорто,
Унда барыр ҡарттар ҡалмай.

Бөрйән ырыуы Иҫке бей: Тел мәсьәләһе –төп проблемаларҙың береһе булып ҡала. Үҙәктәргә үткән Үҙәк онота

Кисә яман хәлдәр булғанын.
Төҙөгән юлыбыҙҙы кәртәләйҙәр,
Тоҙаҡлайҙар телде, ил аңын…

Әйле ырыуы Ишмөхәмәт батыр: Ҡала урамдарында береҙәктәрҙең күбәйеүе көндән –көн күҙгә ташлана.

Ҡайтып етһә, тағы шул күренеш:
Шул Күренгес янда урала.
Ауыҙынан аға һеләгәйе ,
Ҡулы ҡутыр, бите төләгән.
Заманында ниндәй егет ине,
Ниндәй ярһыу, ниндәй ҡанатлы!
Әйләнде лә бөттө Күренгескә,
Ҡалды Шәүлә, ҡалды Ҡарасҡы.
Азаматтар менән бергә үҫте,
Афғандарға яҙмыш ташланы,
Ут эсенән иҫән йөрөп ҡайтты,
Йәне генә иҫән ҡайтманы.
Йәне һынып, рухы һүнеп ҡайтты,
Төштәренә инә мәхшәрҙәр.
Ата-әсәһенең бөгөлгәне,
Үҙенең янып көйгәне…
Ҡартатайҙың исеме-тамғаташта,
Нисек ҡараймайҙыр ул аҡ ташта,
Күреп ошо хәлдә ейәнен…

Тамъяндан Шәғәли Шаҡман: Башҡортостандан ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙ ситтә интегә.

Әле ҡасан ғына күпме башҡорт
Олаҡҡайны йылы тарафтарға…
Эй, яҙмыштар!
Донъя ҡуласа.
Хәҙер шул яҡтарҙан бисаралар,
Беҙгә килеп, хәйер һораша.
Ә һуң күпме башҡорт ситтә зарыға,
Башҡортостан –гөлбостанға
Ҡайтырмынмы, тип бер көн.
Ҡайтыр башҡортҡа урын тар,
Ҡасаҡтарға юл иркен.
Ҡасаҡ битлеге ябынған
Ҡараҡтар ҡосаҡта.
Үҙ балаң ҡаңғыра
Сит яҡта.

Айҙар сәсән. Эйе, милләттәштәр, тыуған илем бөгөн ярҙам һорай. Ошо бөгөнгө йыйындың ҡарарын уҡып ишеттерәйек, Ҡоролтайҙа ултырған ағайҙарыбыҙға еткерәйек. Шәжәрәләребеҙҙе өйрәнәйек. (Ҡорҙа ҡатнашыусы сәркәтип ҡорҙоң ҡарарын уҡып ишеттерә. Ҡарарҙан һуң ырыуҙар шәжәрәләре менән таныштыралар. Шәжәрәләр авторҙарын мактау ҡағыҙы менән бүләкләү.)

Сәсәниә.

Тыуған ерем, берҙән-берем,
Ҡәғбәм дә һин,
Ҡәлғәм дә һин,
Сәждәм дә һин,сәм,ғәм дә һин,
Тәғәм дә һин, йәм, тәм дә һин,-
Башҡортостан!
Тарихыбыҙ ғорур, бөйөк,
Күпме яҙма, күпме әйтмә,-
Башҡортостан!

Һин – ҡәғбәмде,
Һин- ҡәлғәмде ҡаҡшатмаһын
Ил тарҡатыр сәйәсәттәр.

Айҙар сәсән. Бөгөнгө һөйләшеүҙе йомғаҡлап, йәмәғәт, һүҙҙе киләсәк быуын вәкиле – Уралға бирәм. Йыйын дауам итә, уйындарҙа ҡатнашырға саҡырабыҙ.

(Милли костюмдағы уҡыусы һәм ҡурайсы сыға. “Ете ҡурай” моңо аҫтында Урал йомғаҡлау һүҙен әйтә. Ҡорҙа ҡатнашыусылар баҫып тыңлай.)

Аҡсалар гел алмашыр ул,
Баҙарҙар гел алдашыр ул,
Батшалар гел талашыр ул,
Аҡылыбыҙ алмашмаһын,
Рухыбыҙ алдашмаһын.
Мин мәңгегә һеҙҙең менән,
Киләсәкте уйым урай.
Нигеҙебеҙ булһын Урал,
Ҡулыбыҙҙа булһын ҡурай.
Хоҙайҙан фатиха алмаҫ,
Ҡурай моңона янар бәлә,
Уралға үрелер ҡорал.
Башҡортостан һаман балҡыр-
Беҙҙең менән Урал батыр!
Яҡты ниәттәрҙе
Маҡсат итеп алһаҡ,
Көсөбөҙ аҙ түгел-
Беҙҙең менән Аллаһ!
Яҡшылыҡты яҡлап,
Яман хәлдә ҡалһаҡ,
Яңғыҙ булмабыҙ бит-
Беҙҙең менән Аллаһ!
Илдең ғәм-хәстәрен
Иңебеҙгә һалһаҡ,
Өҙөлмәһен өмөт-
Беҙҙең менән Аллаһ!
Теҙләнәбеҙ ергә,
Хаҡҡа табынабыҙ.
Үçһен шәжәрәбеҙ-
Беҙҙең шәжәрәбеҙ

“УЯН, ХАЛҠЫМ, ҠУҘҒАЛ, МИЛЛӘТЕМ!”

Мәүлиева Тәнзилә Ғәйсәр ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия-интернаты

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың шиғырҙарына байҡау яһау; башҡорт поэзияһының йөҙөк ҡашы булған шағир тураһында мәғлүмәттәрҙе байытыу; шиғырҙары нигеҙендә уҡыусыларҙа милли үҙаң, халҡыбыҙға ҡарата ғорурлыҡ, тәбиғәтебеҙҙең бөгөнгө һәм киләсәге тураһында хәстәрлек тойғоһо тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: китаптар күргәҙмәһе, шағирҙың тормошо һәм ижады тураһында презентация, йыл эмблемаһы, “Тәбиғәт- төп йортобоҙ” тип аталған репортаж.

Дәрес барышы:

Ойоштороу. Уҡытыусының инеш һүҙе.

- Илдең, милләттең рухи көсөн, ҡеүәһен, кешелек донъяһында тотҡан урынын иң элек уның бөйөк кешеләре, оло аҡыл эйәләре, илем, халҡым тип йәшәгән ҡаһарман рухлы заттары билдәләй. (Экранда шағирҙың тормошонан фотоһүрәттәр яҡтыртыла.
- Башҡорт шиғриәтенең йөҙөн билдәләрҙәй һәләтле шағирҙарыбыҙ араһында Ер шарының һәр тарафынан иҫкән төрлө елдәрҙе, тетрәнеүҙәрҙе йәһәт тоя белеүе, шатлыҡлы һәм хәүефле өн-тауыштарҙы сос ишетеүе, хәл-ваҡиғаларҙы зирәк күреүе менән айырылып тороусы Р. Бикбаев та бар.

Талатлы шағир, күренекле ғалим, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре Рауил Бикбаев бөгөнгө башҡорт шиғриәтенә һәм әҙәбиәт ғилеменә индергән тос поэтик ижады, һәлмәк ғилми хеҙмәттәре менән шундай юғарылыҡҡа күтәрелә, шағирҙың уйҙары, тауҙарҙан ашып, ҡымыҙҙай ташып тора, эш бүлмәһе - Башҡортостан, өҫтәле - Урал ташы.

Ижад - ул диңгеҙ кеүек: уның арыҫландай ажғырып, ярһып, ярҙарынан ашҡан хәтәр сағтары ла, иҙрәп кенә йоҡлап ятҡан сабый бала һымаҡ тынып ҡалған мәлдәре лә була. Шағирҙың да һәр яңы йыйынтығы уның ғүмер юлының бер киҫәге, бер миҙгелдең сағылышы, шул йылдарҙа кисергән-күргәндәре, бәхеттәре-бәхетһеҙлектәре...

Уҡыусылар сығышы.

1-се уҡыусы:

Шағирҙың биографияһы- уның шиғырҙарында тигән тапҡыр һүҙ ҙә бар. Был байрам кисәһендә шағирҙың биографияһын һөйләүҙән мин азат: уның зирәк зиһене менән яҙылған ”Автобиография” (1969) тигән киң билдәле китабы бар. (күргәҙмәне күрһәтеү) Унда Р. Бикбаев үҙенең кемлеген сәсән теле менән әйтеп биргән:

-Тыуған йылың ҡайһы?
-Халҡым тыуған ер.
Ҡыуған юлың ҡайһы?
-Халҡым ҡыуған юл.

Талантының көс-ҡөүәте етерҙәй шағир ғына үҙенең тыуған йылын халҡының тыуған йылы менән тиң күрергә баҙнат итәлер һәм үҙе теләп алған ошо оло бурыс-йөктө йөрәк моңо, күңел ярһыуы. Барлыҡ ижад ғүмере менән иҫбатларға, аҡларға ынтылалыр. Һәм бөгөн беҙ, уның күп һанлы талапсан уҡыусылары, был тантаналы минуттарҙа Р.Бикбаевтың ижады менән сикһеҙ ғорурланабыҙ һәм рәхмәт әйтәбеҙ.

2-се уҡыусы:

Ә иң мөһиме: шағир күкрәгендә Әсә һөтө менән ингән, сәңгелдәк йыры менән бирелгән, тыуған тупрағы-атайсалы менән ҡөҙрәтләнгән, заман елдәренә дөрләп асыла барған талант уты бар. ” Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш, - тип аса ул үҙенең “Автобиография” китабын, –иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнә һәм тыуыр киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк- кешелектең ике ҡанаты. Мин баш өҫтөмдәге ҡояшҡа ғына ҡыҙынып йәшәмәйем. Шәфәҡ моңһоулығы ла, һыҙылып ҡына атҡан таңдың яҡтылығы ла миңә берҙәй ҡәҙерле”. Ошо программаһына тоғро булараҡ, шағир уйҙары халҡының алыҫ үткәненә барып әйләнә, бөгөнгө космик осорон байҡай, киләсәген уйлап хәүефләнә.

Йөрәгемә күскән бар йылыһы
Күптән инде һүнгән уттарҙың.
Айҙа табыр төҫлө космонавт
Олатайҙарым атҡан уҡтарҙы.

3-сө уҡыусы:

Р.Бикбаев - нескә күңелле шағир-лирик та, киң эрудициялы шағир- философ та, ялҡынлы оран һүҙе менән йөрәктәрҙе елкендерер шағир-трибун да. Уның шиғриәте күп ҡырлы, төрлө йүнәлешле, тәрән мәғәнәле.

Мин ашыҡтым. Ерҙең барлыҡ йәмен
Мин күрмәксе булдым. Йөрәгемә
Бөтөрмәксе булдым һыйҙырып.
Ярыр бураҙнаны ашығыуҙан
Үткеләнем бары сыйҙырып.

Уҡытыусы. Кеше тормошо өсөн бик күп әйберҙәр кәрәк. Йәшәү өсөн - йорт, кейеү өсөн - кейем, ашар өсөн - ризыҡ, эсер өсөн - һыу, һулар өсөн - саф һауа. Алыҫ булмаған ергә бер кемдең дә йәйәү сыҡҡыһы килмәй - һыу, һауа, ер өҫтө транспортының бик күп төрҙәре ярҙамға әҙер. Юл йөрөгәндә ныҡ һелкетмәҫкә тигеҙ асфальт, бетон, тимер юлдар кәрәк. Кешенең йәшәгән, йоҡлаған, ашаған, эшләгән, ял иткән урынына һис тә йәйен- эҫе лә, ҡышын һыуыҡ та булырға тейеш түгел. Ошо өҫтән генә һанап киткән тормошто көткәндә һәр ваҡыт күп әйберҙәрҙе булдырыр өсөн кеше тәбиғәткә генә мөрәжәғәт итә ала. Ул быуаттар дауамында тәбиғәт балаһы булған.

4-се уҡыусы:

“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” йыйынтығында Р.Бикбаевтың иң сағыу, иң матур шиғри гәүһәрҙәре тупланған. Йылғаның матурлығы, һыуының таҙалығы, балыҡтарға, йәнлектәргә бай булыуы борон-борондан йырҙарҙа, ҡобайырҙарҙа данланған. Әммә бөгөн уның хәле бик мөшкөл. Үҙебеҙ йылға буйында йәшәйбеҙ, ләкин уның һыуын эсә алмайбыҙ, унда хатта һыу инеүе лә ҡурҡыныс була бара. Р.Бикбаев поэмаһында тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡарашта булырға саҡыра:

Тормош матурыраҡ булһын тиеп,
Күпме матурлыҡтар ҡырылған.
Ҡот-дәүләте илдең артһын тиеп,
Урман ауған, һыуҙар ҡороған.

5-се уҡыусы: Тәбиғәткә ҡырағайҙарса ҡараған халыҡ үҙе нисек, ҡайҙа йәшәй һуң? Шағир Торатау башынан ҡомға, һөрөмгә күмелгән Стәрлетамаҡҡа ҡарай, ләкин уны күрә алмай:

Торатауҙың түбәләре хәтфә,
Ташҡайҙары ҡырлы, селтәрле.
Торатауға менеп ҡараһам да
Табалманым һине, Стәрле!
Ҡаланың ошо көнгә төшөүен шағир кешеләрҙән күрә:
Һин Стәрле менән
Ниндәй ҡала
Шундай һауам бар, тип ярышыр?
Сәсәгәндә таңғы төштәреңдә,
Беҙгә төшөр ине ҡарғышың.

Тәбиғәтте, тәбиғәт менән бергә кешенең үҙен дә һаҡлап ҡалырға саҡыра шағир:

Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ.
Кешенең аҡылына өндәшеп:
Беҙ бит кеше!
Беҙ бит түгел
Донъя ҡоротор ер ҡорто,- ти ул.
Ете уйлап, бер ҡат киҫер саҡта,
Бер ҡат уйлап, ете киҫеүҙәр....-

Ҡаш төҙәтеп, күҙ сығарыуҙарҙы туҡтатырға саҡыра Р.Бикбаев. (Р. Бикбаев һүҙҙәренә Ф. Бикбулатов яҙған ”Һинең менән” йыры башҡарыла)

6-сы уҡыусы: Шулай итеп, Иҙел башынан тамағына тиклем матур-матур йырҙар йырлап үтәһе урынға шағир моңһоу уйҙарға бирелә.

Ер йөҙөнән тауҙар ғәйеп була,
Эй, кешелек! Ниндәй мәл еткән...
Тау һынлы тау ғәйеп булған өсөн
Тыуыр тарих кемде ғәйепләр?- тип һорай.
Мин аунап үҫкән ҡырҙарҙың
Ҡылғандары аҡтарылған,
Сәскәләре һөрөлгән.
Мин ғашиҡ булған ҡыҙҙарҙың
Икенән үргән сәстәре
Ҡалған берҙән үрергә.

7-се уҡыусы:

Ниҙәр булған бөгөн ер-һыуҙарға?
Бер ашҡынып ҡуя, бер тынып.
Эй, кешеләр, һаҡ булайыҡ, зинһар,
Тәбиғәттең теле асыла.

8-се уҡыусы:

“SOS” был! Сос бул, кеше!
Күҙҙәреңде
Асыбыраҡ ҡара ер-һыуға.
Меңәр ҡоштар, күк ҡабағын ҡағып,
Ярҙам һорап, был мәл саң һуға.
Ел ярылыр һыуыҡтарҙа кейек,
Тояҡтары сатнап өшөгәс,
Һыйынырға ҡояш эҙләгәндәй,
Өмөт менән килә кешегә.

9-сы уҡыусы:

Әйтерһең дә, күңел, туғай кеүек,
Төптән һыҙырып сабып алынған.
Ҡайтыр ҡоштар ҡойонор шишмә тынған,
Һайрар ҡоштар ҡуныр тал һынған.
Өлгөрмәҫтән атып, сәскә шиңә,
Өлгөрмәҫтән атып, таң һулый.

10-сы уҡыусы:

Ҡайҙа китте ҡапыл донъя ҡото,
Барыһы ла шундай ялҡытты.
Бикләнергә ине берәй ергә,
Бикләнгәндәй ҡышҡа бал ҡорто.
Ояламайҙар аҡҡоштар,
Биҙгән бынан торналар.
Көнөн-төнөн, йәйен-ҡышын
Качалкалар- тимер ҡоштар
Ерҙең майын һуралар.
Ҡайҙа барма - шул күренеш,
Моңайып китә күңел.
Ә качалкалар әйткәндәй...
- Беҙ ҙә мәңгелек түгел.

Уҡытыусы: Фәмүмән, Р.Бикбаев үҙ яҙмышын тыуған еренең һәр күренеше, тәбиғәттәге илаһи мәлдәре, имәндең тәрән тамырҙары, йылғыр юртаҡ ҡарсығаһы, атылып сыҡҡан аҫыл шишмәләре менән йәнәш күрә, тыуған ерҙән илһам, көс ала.

11-се уҡыусы:

Күҙ асып, күҙ йомған ара ғына,
Бер мәл генә- бәндә ғүмере.
Был мәл йәки йәшел олон булып,
Мәңгелектең тамырынан үрелер,
Йәки тамырына уның шартлатыр-
Харабаға донъя күмелер.
Берәр генә ағас ултыртҡанда
Һәр беребеҙ -
Баҡса булыр ине еребеҙ.
Ихлас көлөп тик бер ҡарағанда
Бер-беребеҙгә һәр беребеҙ-
Нурға ҡойонор ине еребеҙ.

12- се уҡыусы: Шағир күңеле тыныс түгел: уны тәбиғәт һәм экология, тел мәсьәләләре генә борсоп ҡалмай; йәмғиәттә көндән-көн ишәйә, кешене аҙҙыра барған ваҡлыҡ, ялағайлыҡ, хыянат, һөмһеҙлөк, мәкер кеүек яман сирҙәр һөжүме һағайта, хатта ҡурҡыта. Күп ҡырлы, күп ҡыллы, моңло, рухлы, тәрән һәм яҡты ижадың менән

һөйөндәр халҡыңды, Рауил Төхвәт улы, башҡорт әҙәбиәтен күп милләтле Рәсәй әҙәбиәте ҡатарында яңы бейеклектәргә үрел.

(Р. Бикбаев һүҙҙәренә Н.Сабитов яҙған “Елдәр” йыры менән тамамлана).

ЙӨРӘГЕНДӘ ИКЕ УТ

(әҙәби кисә)

Борисова Айгөл Шифа ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы Башҡорт гимназия–интернаты

Маҡсат: Башҡорт халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән таныштырыу; уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен, һөйләү телмәрен үҫтереү; шағир ижадын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Сәхнәнең артҡы стенаһында – Р.Бикбаевтың ҙур портреты. Аҫтараҡ эре итеп 75 йәш тип билдәләп ҡуйылған. Сәхнәнең алғы өлөшөндә – һулда “Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев”, ә уңда:

“Ант итәм:
Ерҙә тоғролоҡ
Ирлек менән бәрәбәр.
Хаҡ һүҙҙе, телде өтә, тип
Әйтмәй ҡалмам барыбер.”-
тигән шиғри юлдар менән планшеттар эленгән.

Сәхнәнең һул яғына бәләкәй тәпәш өҫтәл, ике ултырғыс ҡуйылған. Өҫтәлдә – сәскәләр. Кисәне егет менән ҡыҙ алып бара. Улар шағирҙың тормош һәм ижад юлы хаҡында һөйләй. Шиғырҙарҙы, сәхнәләштереүҙе башҡа уҡыусылар башҡара.

Сәхнә артынан талғын көй аҫтында Рауил Бикбаевтың “Сит бер кеше һымаҡ тыныс ҡына” шиғыры уҡыла.

Сит бер кеше һымаҡ тыныс ҡына
Мөмкин микән ҡарау Уралға?
Мин, тауҙарҙы ҡәрбә ташы итеп,
Табынырға әҙер уларға.

Уларҙың бит тамсы эс кере юҡ,
Аралайҙар улар ҡайғыңдан.
Ерҙән бәреп сыҡҡан нурҙар кеүек,
Арҡаларҙа балҡый ҡайындар.

Аҡ ҡайындар, яҡты маяҡ булып,
Юлдарыма минең теҙелгән.
Тупрағымдан сыҡҡан был нурҙарға
Баш эймәйсә нисек түҙергә?

Ерҙең йәме ниндәй кәмер ине,
Был нурҙары уның булмаһа,
Улар мәңге хыянатлыҡ ҡылмаҫ,
Үҙең хыянатлыҡ ҡылмаһаң.

Уйсан саҡтарымды күрһәң әгәр,
Әйтмә, ҡайғыра, тип, был бәндә,
Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел,
Үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә.

Сәхнәгә кисәне алып барыусы егет менән ҡыҙ сыға.

Егет. Тыуған илгә сикһеҙ һөйөү хисе менән һуғарылған был юлдарҙың авторы – үҙ әҫәрҙәре менән башҡорт әҙәбиәте үҫешенә ҙур өлөш индергән һәм яратҡан шағирҙарыбыҙҙың береһе Рауил Бикбаев.

Ҡыҙ. Ошо көндәрҙә Башҡортостандың халыҡ шағиры, Республиканың С.Юлаев исемендәге дәүләт, Ғ.Сәләм премиялары лауреаты, С.Юлаев ордены кавалеры, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе талантлы әҙип һәм күренекле йәмәғәт эшмәкәре Рауил Бикбаевтың тыуыуына 75 йыл тула. Бөгөнгө кисәбеҙҙе уға арнайбыҙ.

(Ырымбур яҡтарында киң таралған “Зөбәйҙә” йыры башҡарыла).

Егет. Ырымбур яҡтары… Туҡ-Соран буйҙары… Ҡунаҡбай ауылы. Шағирҙың тыуған яғы.

Ҡыҙ. Ҡунаҡбайҙа тыуған Рауилдың бала сағы еңел булмай.

“Аслыҡ мине ҡаҡлап киптергәндә,
Урмандарҙа ҡабыҡ кимерҙем.
Тәбиғәткә ҡарап ялбарҙым мин,
Тәбиғәткә ҡарап тилмерҙем.
Тыным туҡтап ғәрәсәтле утта,
Хәтәр ҡуйынында ҡойондоҡ,
Ялбарыуҙар менән күккә ҡарап.
Ергә һаман нығырақ һыйындым,” - тигән шиғыр юлдарынан күренеүенсә, мәктәп йәшенә лә етмәгән бала күңелендә нисек кенә ауыр булмаһын, тәбиғәткә булған мөнәсәбәт унан көс, ғәйрәт алып, артабан тормош һуҡмаҡтары, ижад юлдары буйлап күтәрелә барыуы тасуирлана. Бала саҡ

йылдары бөтә илде дәррәү аяҡҡа баҫтырған ҡот осҡос, аяуһыҙ емергес Бөйөк Ватан һуғышы йылдары була улар. Һуғышҡа шағирҙың үҙ ҡарашы: "Почтальон малай" шиғырында ҡыҫҡаса түбәндәгеләр бәйән ителә: үҫмер малай почта бүлегенән ҡайтып килә. Ә үҙе, сумкаһында йылан ятҡандай, хаттарына тотонорға ҡурҡа. Үлем ҡағыҙҙары шулай йылан булып әсәләрҙең йөрәген саға. Малай бөгөн ике өйгә инеп сыҡты, гүйә, ул был ғаиләләрҙең ғүмергә шәмдәрен һүндерҙе. Үҫмер бала! Ә ниндәй яуаплылыҡ һинең иңдәреңдә!? Һуғыш бирәүҙе лә аяманы шул.

Ул үҙенә үҙе *һорау бирә:*
Был ҡайғыны нисек еңеләйтергә?
Донъя! Ҡыйын һине аңлауы.

Хаттар барыһына ла тапшырылған. Тик бер генә хатты бирмәйенсә, ул яланға сығып олаға. Тамағына төйөр тығылһа ла, бахыр бала иламай. Инде:

Таң һарғая. Малай һаман йөрөй,
Сәскәләрҙән ысыҡ тамыҙып,
Сумкаһында йылан һымаҡ ята,
Сумкаһында бер ай инде ята
Атаһының үлем ҡағыҙы.

Һуғыш бөтөүгә инде байтаҡ ваҡыт уҙған. Ә шулай ҙа был шиғырҙы уҡыу менән күҙҙәргә йәштәр эркелә, күңел әрней. Дошманға нәфрәт уяна. Унда-бында сығып торған һуғыштар ҙа аяуһыҙ, һаман тынғылыҡ юҡ. Уның арҡаһында бер ғәйепһеҙ ҡатындар, бала-сағалар, тотош ил ҡайғы күрә.

Егет. 1945 йылда Рауил Бикбаевтың атаһы үлеп китә, Рауил күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына туғандарына күсеп китә, ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. (Бер уҡыусы “Аҡ – Булаҡ” шиғырын һөйләй)

АҠ-БУЛАҠ

Аҡ-Булағым минең, эй, аң шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.

Һин өйрәттең һис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ.

Бер-беребеҙҙең йырын отоп алдыҡ,
Уҡыуҙарҙан бушап ҡалғанда.
Халыҡтарҙың күңелендәге нурҙы
Нығыраҡ тойҙом ошо яланда.

...Азатлыҡ тип атҡа атланғанда,
Ауылдарҙы туптар аҡтарғас,
Ҡанһыраған Урал егеттәре
Ышыҡ тапҡан ошо яҡтарҙа.

Был тупраҡта күпме башҡорт ире
Ятып ҡалған, килеп әрмегә.
Моң-һағышы иҫән ҡалғандарҙың
Һарҡып һеңгән әсе әремгә.

Килгәнем юҡ бында ышыҡ эҙләп.
Һағынғанда тыуған төйәкте,
Ҡаҙаҡ ҡарты, сиртеп думбыраһын,
Миңә дала көйөн өйрәтте.

Улар шупдай таныш, яҡын ине:
Күҙ йәшемдән ҡалдым еңелеп.
Бер әсәнең йырынан яралғанмы
Ҡаҙаҡ менән башҡорт күңеле?

Тик юҡһынмай булмай батырҙарың
Убаларҙа ятҡан яғыңды.
Ҡаҙаҡ моңо һеңгән сал далала,
Алыҫ Ағиҙелде һағындым.

Ғүмеремдең йылтыр инеш булып
Сылтыраған сағы — Аҡ-Булаҡ!
Йәшлегемдең керһеҙ тулҡындары
Йөрәгемә һуғыла һаҡ ҡына.

Иләк ярындағы ап-аҡ ҡомдо
Һағынамын арып-талғанда.

Был ярҙарҙың ҡуҙҙай ҡыҙыулығын
Йөрәтәмен әле табанда.

Сыңлап китһә думбыраның ҡылы,
Ҡырыҫ күҙҙәремде иретә.
К үк даланың умырзая еҫен
Ҡулдарымда һаман йөрәтәм.

Иләк аръяғында, дала иңләп,
Тулҡынлана микән ҡылғандар
Аҡ-Булагым минең, эй, аҡ шишмәм,
Ағиҙелдең алыҫ туғаны.

Ҡыҙ. Рауил Бикбаевтың ысын яҡты тормош юлына сығыу, төплө белем алыу һәм ижад итеү эшенә керешеүенең ынтылышлы йылдары, ныҡлап яҙыша башлауы Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡыу дәүеренә тура килә.

Егет. Ижади-ғилми мөхит, әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәгендә ҡатнашыу, йәш һәм оло ҡәләмдәштәре менән аралашыу ижад өсөн киң мөмкинлектәр аса.

Ҡыҙ. 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә, 1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға.

Егет. Университетты тамамлағас, Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый, диссертация яҡлай, утыҙ йылға яҡын ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә.

Ҡыҙ. “Миңә барлыҡ ижад юлымда шиғриәт менән фәнни эште бергә алып барырға тура килде, сөнки мин ғилем донъяһына осраҡлы килеп эләктем, тип уйламайым, мин был ғәйәт оло һәм арбаусы мөхиткә асыҡ маҡсаттар ҡуйып, был хеҙмәттең ни тиклем яуаплы һәм ауыр икәнен аңлап килеп индем һәм унда ғүмерлеккә ҡалдым”,- тип яҙҙы Р.Бикбаев үҙе.

Егет. Шуғалыр ҙа Р. Бикбаев – заман ағышына, кешеләр яҙмышына һиҙгер ҡолаҡ һалыр шағир. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған, хәүефләндергән мәсьәләләр, төрлө һорауҙар асыҡтан- асыҡ һәм бик ҙуткер итеп ҡуйыла.

Ҡыҙ. Ошо йәһәттән шағир тормошонан бер күренеш. (Талғын көй аҫтында сәхнәгә Р. Бикбаев образын уйнаусы уҡыусы сыға)

Йәмле июнь уртаһында Өфөлә, Салауат һәйкәле янында, халҡыбыҙҙың легендар батырына арналған йыр-моң, шиғриәт байрамы гөрләп торғанда миңә бер егет хат килтереп бирҙе. Байрам тамашаһы менән булып, мин ул егеттең төҫ-һынын нығытып хәтерләп тә ҡала алманым. Ләкин ошо хат бына күпме ваҡыт миңә тынғы бирмәй. Уны яҙған һеңлекәште борсоған уйҙар, күңеленә тынғы бирмәгән һорауҙар миңә генә түгел, һәр беребеҙгә төбәлгән һымаҡ. Мин уны нисек яҙылған булһа шул көйө, бер урынын да үҙгәртмәйенсә һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәм. Бына ул хат.

(Сәхнәнән Р. Бикбаев ролен уйнаған уҡыусы сығып китә, ә сәхнә артынан хат уҡыла)

Здравствуйте, Равиль Тухватович!

Боюсь показаться Вам навязчивой и неинтересной, надо исповедоваться перед Вами. Я уверена, что Вы должны меня понять. Возможно, все то, о чем я хочу написать, покажется Вам несущественным, но это моя беда, и это беда очень многих людей нашей республики. Просто, может быть, не все это осознали. Вот я - башкирка, а не умею писать письмо по-башкирски. Родным считать башкирский я не перестаю, хотя уже много лет говорю, думаю на русском. Но я все равно башкирка, и никто не сможет переубедить меня. Все началось еще в детстве. Мои родители башкиры. И они оба сделали тот шаг, о котором жалеют. Но тогда было не престижно учиться родному языку. Они записали меня в русский класс. Тогда я по-русски ничего не знала.Со мной говорили всегда по-башкирски. Помню недоумение, детский ужас, когда я попала в некомфортную обстановку. Я помню свое отчаяние на уроках от того, что я ничего не понимаю. Я отупела вдруг, я не могла решать задачи, примеры, не могла пересказывать рассказы, на переменах я ни с кем не разговаривала. Я не хотела ходить в школу. Произошло насилие над детской душой. Я не обвиняю в этом родителей. Это было такое время, такая политика, и конечно надо было быть очень мудрым и дальновидным, чтобы понять, что это будет ошибкой. Они искренне хотели дать мне полноценное образование. Постепенно я научилась русскому: детская душа восприимчива. Школу я закончила хорошо, бойко писала сочинения, очень много читала, но только по-русски. А дома было много книг на башкирском, но это было мне не надо. Но наконец я поняла: и поняла я это гораздо раньше, чем начала бить тревогу наша творческая интеллигенция, что я - «ничто», и что хотя и имею диплом о высшем образовании и я знаю два иностранных языка, а своего родного-то я не знаю. Я не знаю ни истории народа, ни литературы, ни религии, я не знаю культуру своего народа. Вот тогда, когда я вроде бы уже сформировалась, многого достигла, оказывается, во мне нет главного стержня, на котором держится личность.

Конечно, я сейчас наверстываю упущенное, часто хожу в филармонию, читаю стихи башкирских поэтов в оригинале и, слава богу, кое-что понимаю, если и не знаю значения слов, я интуитивно догадываюсь по *смыслу.*

Но все равно я чужая вам всем и, может быть, и смогу быть своей в своей республике, и в этом весьужас. Я чувствую себя ущербной, обделенной чем-то очень большим, чем-то очень важным.

Я рассказала Вам о трагедии моей жизни, немно стало легче. Помогите мне советом.

Егет. Күпме кешеләрҙең һыҙланыуҙары әйтелгән был хатта. Ә һуң туған теленән айырылып та, был фажиғәне аңламағандары, был юғалтыуҙы кисерә белмәгәндәре күпме! Уларҙың йөрәген дә әлеге һеңлекәште һыҙландырған ошо һыҙланыу өтәп алһын ине!

Салауат һәйкәле янында ҡулына килеп еткән хат шағирҙың күңелендә күптән тулышып йөрөгән бер шиғырҙың яҙылыуына сәбәп булған. (Бер-ике уҡыусы “Халҡыма хат” әҫәренән өҙөк уҡый).

ХАЛҠЫМА ХАТ

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.
Еркәйемдең тарих һөйләмәгән
Юҡ һүҡмағы, һыуы, юҡ тауы.
Ишетәмен әле ҡылыс сыңын,
Әле һылыу ҡыҙҙың һыҡтауын.
Күпме моң бар еләҫ аҡландарҙа,
Күпме наҙ бар дала елендә.
Ҡарай улар ғәзиз әсәм булып,
Һөйләшәләр башҡорт телендә.
Башҡорт балаһы мин, Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған әҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Ҡыҙ. Бындай көслө аһаңле юлдарҙы бары ысын шағирҙар, ил ғәме өсөн йәшәүселәр генә яҙалыр. Үҙенең тамырҙарын уйлап ғорурланған автор бөгөнгөһөн күреп хурлана. Хаҡ һүҙҙәр. Йөрәктәрҙе әйләндереп-тулғандырырлыҡ һүҙҙәр.

Егет. Заман һулышын һиҙгер тойған шағирҙың ил яҙмышындағы ҡаршылыҡтарҙы, хаталарҙы, бөгөнгө көндә бигерәк тә актуаль экологик катасрофаны “Һыуһаным - һыуҙар биреген!” поэмаһында көҙгөләге кеүек күрәһең.(Поэманан өҙөктө бер-ике уҡыусы башҡара).

ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!

(Поэманан өҙөк)

Елкендерә тағы бейеклектәр,
Күңелемдә тағы тыуа таң.
Иркен түбән түшәлеп тә ятҡан
Хәтфә үлән икән, Торатау.
Монарлана ҡояш сығышында
Армыт-армыт Урал һырттары.
Бер кинәнеп ошо киңлектәргә
Ҡарар саҡта күңел һыҡтаны.
Тағы шартлау. Тағы тертләй Шаһтау.
Умырыла нигеҙе Шаһтауҙың.
Бөтә был тау...
Торатауҙар ғына иҫләй күккә ашҡан саҡтарын.
Тағы шартлау.
Ҡора заман, Шаһтау,
Тамырыңа хатта ауҙарын.
Был йылдарҙың ҡоластары хәтәр:
Ниндәй даръяларҙы һемереп бөттө,
Ниндәй ҡаяларҙы ауҙарҙы,
Кимереп бөттө ниндәй тауҙарҙы!
Ергә тыуған барыбер ерҙән китә,
Берәү — һуңлап, берәү — иртәрәк.
Беҙҙең генә китеү китеүме ни —
Ер йөҙөнән тауҙар китәләр!
Ер йөҙөнән тауҙар ғәйеп була...
Эй, кешелек! Ниндәй мәл еткән...
Тау һынлы тау ғәйеп булған өсөн
Тыуыр тарих кемде ғәйепләр?

Ҡыҙ. Кешенең хәҙер саф таҙа һыу, һауаларға сарсауы менән бергә ысын азатлыҡҡа, рухи сафлыҡҡа, кешелеккә, юғары әҙәп-әхлаҡ сифатына һыуһауын сағылдыра был поэма.

Егет. Рауил Бикбаев – яҙыусылыҡты ғилем эше менән ҡушарлап алып барған ижадсы. Уның тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялары матбуғат биттәрендә йыш осрай. Бигерәк тә поэзиябыҙҙағы яңылыҡтарға, ҡәләмдәштәренең ижадына баһа бирә бара. Әҙәбиәт ғилеме өлкәһендә лә күп хеҙмәттәр күрһәтте: “Замандың шиғри йылъяҙмаһы”, “Шағир һүҙе – шағир намыҫы”, “Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады” һ.б. ҙур монографиялар яҙҙы.

Ҡыҙ. Рауил Бикбаевтың ғилми-тикшеренеү эштәре мәғлүмәттәргә бай булыуы, фәнни нигеҙләнгәнлеге, төплө фекерҙәре менән айырылып тора. Шуның өсөн дә ул “ике ут минең йөрәгемдә, зиһенемдә һәр саҡ бергә булды, әле лә шулай”,- тип әйтеүе менән биҡ хаҡлы.

Егет. Халыҡ бәхете, ил яҙмышы, кешеләр араһындағы саф мөнәсәбәттәр хаҡында изге эштәр һәм яҡты уйҙар менән янып-ярһып йәшәгән Рауил Биҡбаев шәхесе һәр яҡлап оло ихтирамға лайыҡ. Уның ижады Мостай

Кәрим, Рәми Ғарипов, Назар Нәжми һымаҡ Башҡортостандың халыҡ шағирҙары әҫәрҙәре менән бергә киң донъяға сығып, туғандаш халыҡтар әҙәбиәттәрендә лә ихтирам яуланы. Бөгөнгө республикабыҙҙың рухи үҫешенә ҙур өлөш индереүе менән Рауил Бикбаевтың шиғырҙары һәм поэмалары, ғилми хеҙмәттәре һәм публицистик сығыштары, иҗтимағи эшмәкәрлеге айырыуса ҡиммәтле.

Ҡыҙ. Йылдар үтер, күп һыуҙар ағыр, яңы күп шиғырҙар тыуыр, ләкин Рауил Бикбаевтың ҡабатланмаҫ әҫәрҙәре беҙгә һаман йәшәргә, көрәшергә булышлыҡ итер, рухландырыр.

ЗАМАНДАШ-ШАҒИР
(АРҘАҠЛЫ ШАҒИР РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫ БУЙЫНСА ӘҘӘБИ КИСӘ СЦЕНАРИЙЫ)

Бикҡужина Зоя Миңлеәхмәт ҡыҙы,
Бәләбәй районы Баженов ауылының
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: шағир Рауил Бикбаевтың тормош юлы менән таныштырыу; ижадының төп идеяларын асыҡлау; сәнғәтле уҡыу күнекмәләрен нығытыу; Тыуған еребеҙгә, туған телебеҙгә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, китаптарынан күргәҙмә, магнитофон, мультимедиа проекторы.

Экранда Рауил Бикбаевтың портреты.

Мультимедиа проекторы аша эпиграф итеп алынған шиғыр юлдары:

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Уҡытыусы. Ҡәҙерле уҡыусылар! Бөгөн Башкортостандың халыҡ шағиры, Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Уның ижады республикала киң билдәле һәм китап һөйөүселәр тарафынан бик юғары баһалана.

1-се уҡыусы. Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районында Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған.

2-се уҡыусы. Эйе, Тыуған ер, тыуған яҡ. Һәр кем өсөн ҡәҙерле улар. Рауил Бикбаев беренсе аҙымдарын тыуған нигеҙендә яһай, беренсе шиғырҙарын тыуған ергә бағышлай.

Тыуған ерем! Мин тетрәргә әҙер,
Тертләмәһен, тиеп, күкрәгең
Һиҫкәндерһен һине ҡойон ғына
Йәшен генә күктә күкрәһен.

Ә тыуған яҡ тәбиғәте буласаҡ шағирҙың күңелендә матур хистәр уята.

…Далалағы алһыу таң атыуын
Тағы килә минең күрәһем.
Уйнаҡлашып йөрөгән тайҡайҙарҙың
Ялҡайҙарын килә үрәһем.

3-сө уҡыусы. Тауҙары ҡыйылыҡҡа, йүгерек йылғалары, борғаланып аҡҡан шишмәләре йөрәгенә ынтылыш бирә, әйтерһең, донъя серен аса.

…Эҙләмәйем мөғжизәләр
Мин көндәрем эсенән.
Башланһындар улар бары
Хәләл аштан,
Тоғро эштән,
Ҡояштан,
Һөйөнсөнән.

(Башҡорт халыҡ йыры “ Һалҡын шишмә”).

Рауил Бикбаев күрше ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай һәм Аҡ Болаҡ педагогия училищеһында уҡый.

Аҡ-Булағым минең, эй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.

Һин өйрәттең һис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ...

4-се уҡыусы. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тиғән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. Ә 1995 йылда Рауил Бикбаев

Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана һәм башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә.

Уҡытыусы. Рус яҙыусыһы Л. Н. Толстой: “Тәбиғәт ҡосағында йәшәү, уны күреп тороу, уның менән һөйләшеү – бәхет”,- тип яҙа. Был бәхетте Рауил Бикбаев үҙенсә аңлай. Шағирыбыҙҙың ҡайһы ғына шиғырҙарын алһаҡ та, мәҫәлән, “Уралыма”, “Балтырған”, “Һаҡла”, “Яландарҙан йылы ямғыр үткәс…” , “Ҡар”, “Аҡҡоштар ҡайтҡан саҡта” барыһы ла Тыуған яҡ, Тыуған ер, Тыуған илдең үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге тураһында, уның ғәзизлеге хаҡында.

5-се уҡыусы. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында уҡ яҙыша башлай. Башҡорт дәүләт университетындағы ижади-ғилми мөхит, әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәгендә ҡатнашыу, йәш һәм оло кәләмдәштәре менән аралашыу ижад өсөн киң мөмкинлектәр аса. Уның шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда «Ағиҙел» журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. Ә “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә.

6-сы уҡыусы. Замандаш шағирҙың “Ҡош юлы” тигән икенсе китабында поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә барыуын күрһәтте.

Заман! Бирсе пульсыңды.
Ниндәй ярһып һуға тамырың!

Шағир уй-хыялдары менән нисек кенә күктәргә, йыһандарға ашмаһын, ул барыбер бар хәстәре, булмышы менән ер улы, туған халҡының балаһы.

... һеҙ – замана балалары, тиҙәр,
Юҡ, мин үҙем – һеҙҙең балағыҙ.
Бар яҙмышым – һеҙҙең ҡулығыҙҙа.
Хафаланып быуат хаҡында,
Онотмағыҙ минут тураһында :
Бер минутта тыуа ялҡындар.
Быуаттарҙы быуаттарға бәйләй
Бер минут.
Быуаттарҙы юҡ итергә мөмкин
Бер минут!

7-се уҡыусы. “Автобиография” китабының баш һүҙендә автор ошоларҙы раҫлағандай былай ти : “Кеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнә һәм тыуыр киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк - кешелектең ике ҡанаты”. Ул халҡының данлы үткәне, бөгөнгө хәле тураһында уйлана.

Уҡытыусы. Эйе, Рауил Бикбаев шиғриәте – етди уйланыуҙар, ҡатмарлы кисерештәр донъяһы. Уның төплө шиғриәтендә кешелек тураһында уйланыуҙар, ил һәм заман тураһында борсолоуҙар асыҡ сағыла. Бигерәк тә туған теле өсөн шағир тәнен – йәнен фиҙа ҡылырға әҙер:

Туған телем өсөн кәрәк икән -
Бер бәхетем әйҙә юҡ булһын,
Туған телем өсөн кәрәк икән -
Ауыҙымдағы телем ҡырҡылһын!

“Халҡыма хат” шиғыры фәһемле сағыу һүҙҙәре менән тамамлана:

Туғанынан яҙған - ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Шағир әйтеүенсә, халҡыбыҙ үҙенең аманатын беҙгә Урал күкрәгендә тыуған аҡыл йырҙар итеп тә еткерә. (Башҡорт халыҡ йыры “Арғужа”).

Уҡытыусы. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаев халыҡтың теле, яҙмышы, уның барлығы, намыҫы хаҡындағы борсолоулы уйҙарын “Хазина” исемле поэмаһында яҙҙы. Һәр кешене тетрәндерерлек, уйландырырлыҡ, хәүефләндерерлек мәсьәләләрҙе күтәреүе менән дә бик ваҡытлы шағирҙың был әҫәре.

Уҡыусылар, тимәк, шағирҙың поэмаларында заманабыҙҙың ҡырҡыу проблемалары сағыла. Туған тел, халыҡтың мәҙәниәте һәм тарихи яҙмышы темалары төп урынды алып тора.

8-се уҡыусы. Рауил Төхфәт улы шиғри ижадты ғилми эш менән бергә алып бара. Ул әҙәби тәнҡитсе сифатында тәнҡит мәҡәләләре, рецензиялар менән матбуғат биттәрендә йыш сығыш яһай.Уның әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, ғилми-тикшеренеү эштәре мәғлүмәттәргә байлығы, фәнни нигеҙләнгәнлеге, ышандырыу көсө һәм шағирҙарса ялҡынлы һүҙҙәре менән айырылып тора. Шуның өсөн ул «мин шиғриәт ялҡынының һәм ғилем утының уртаһында йәшәгән һымаҡ булһам да, асылда был ике ут минең йөрәгемдә, зиһенемдә һәр саҡ бергә булды, әле лә шулай”,- тип әйтеүе менән бик хаҡлы.

Уҡытыусы. Эйе, Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Уның “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” китабында Тыуған ерҙең матурлығы, кешенең һәм милләттең күңел хазинаһы сикһеҙ булған кеүек, шағирҙарҙың шул хаҡтағы һүҙҙәрендә лә әллә күпме төҫ-буяуҙар нурлана, әллә күпме моң-ауаздар ишетелә, әллә күпме тәрән фекерҙәр уйға һала.

“…Бигерәк тә ҡала кешеләренә беҙҙең ҡыштың ошондай бер күренеше яҡшы таныштыр. Ҡышҡы һыуыҡтарҙа автобустар, трамвайҙарҙың тәҙрәләре ҡырауланып ап-аҡ булып туңа – транспортта барғанда урамда бер ни күрерлек түгел. Тәҙрә янында ултырған ҡайһы бер кешеләр, быяланы тыны менән иретеп булһа ла, урамда ни барғанын самаларға тырыша. Ә тәҙрәнән ситтә баҫып торғандар бынһын да эшләй алмай, рулдәге кешенең туҡталыштарҙы әйтеп барыуын һорап ҡаңғыра.

Мин илдең торғонлоҡ осорондағы ижтимағи хәлен ҡышҡы һыуыҡта шыҡырлап туңған транспортта барыу менән сағыштырырға йыйынмайым. Шулай ҙа үҙ-ара мөнәсәбәттәребеҙҙә нисә йылдар буйы аяҙ ихласлыҡ етмәне, үҙ-ара аралашыуҙа элекке йылылыҡ, берҙәмлек нык кәмене, офоҡтарыбыҙ болотло, ҡарлы-боҙло булды. Аҙыҡ, әйбер дефицитына саф тойғолар дефициты ҡушылды. Демократияның ҡыҫырыҡланыуы күп нәмәләрҙе

күрергә һәм аңларға мөмкинлек бирмәне, шәхестең күп яҡлы, гармониялы үсешен сикләне. Берҙе һөйләп, икенсене эшләү күптәрҙең, бигерәк тә яңы үсеп килгән быуындың, күңелен имгәтте. Үҙҙәренең ҡайнар тыны менән ялғанлыҡ боҙон иретеп, хәҡиҡәттең күҙенә тура ҡарап һүҙ әйтеүсе үткер фекерле, ҡыйыу йөрәкле аҙмы кешеләрҙең яҙмышы ауыр, йыш ҡына фажиғәле булды.

…Нисә йылдар буйы тормошобоҙға тамырланған ҡуҡырлыҡты, ялағайлыҡты, алдашыуҙы, ялҡаулыҡты, ғәмһеҙлекте эйәрҙән бәреп төшөрөргә кәрәк. Кешеләрҙә быуылып ятҡан ижад дәртенә, үсешкә юл асырға кәрәк”.

Эйе, был талап шағир һүҙенең яуаплылығын тағы ла нығырак арттыра.

Йомғаҡлау. Замандаш шағирҙың ижады беҙҙе Тыуған еребеҙҙе яратырға, туған телебеҙҙе хөрмәт итергә, игелекле, изгелекле булырға өйрәтә.

Заман! Бирсе пульсыңды,
Шатмын, тамырың ярһып типкәндә.
Ышанамын һиңә:
Күкрәгеңдә
Беҙҙең йөрәк тибә икән дә.

Еребеҙҙә мәңге тыныслыҡ, дуҫлыҡ, туғанлыҡ булһын!
(Йыр “Һәр ваҡыт булһын ҡояш!”)

«АҠ ТИРМӘ»ЛӘ ҠУНАҠТА

Хәсәнова Нәркизә Робес ҡыҙы,
Учалы ҡалаһы 5- се урта
дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:Шағирҙың ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу һәм хөрмәт тәрбиәләү , телмәр үҫтереү.

Йыһазландырыу: Слайдтар , Р. Бикбаевтың китаптарының күргәҙмәһе.

Уйын барышы.

1. Уҡытыусының инеш һүҙе. (1-се слайд)

Һәр дәүерҙең үҙ иле, тыуған халҡы өсөн янып- көйөп йәшәгән ҡаһарман рухлы шәхестәре була. Бөгөнгө башҡорт шиғриәтенең ғорурлығы – мәһшүр һүҙ оҫтаһы Рауил Бикбаев нәҡ ошондай баһаға эйә. Уның исеме республикабыҙҙа ғына түгел, илебеҙҙең башҡа тарафтарында ла киң билдәле.

2. Алып барыусы уҡыусыларҙың дауам итеп һөйләүе.

1-се алып барыусы. Ырымбур далаһы. Туҡсоран буйҙары. Заманында ошо ерҙәрҙә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдары М. Буранғолов, Д. Юлтый, Ғ. Амантай донъяға килгән. Яҙыусы Р. Бикбаев та шулар иҫәбендә. Буласаҡ шағирға тормоштоң әсе-сөсөһөн иртә йәштән татырға тура килә. Дәһшәтле яуҙа атаһы һәләк була. Тик заманалар ни тиклем генә ауыр булмаһын, Рауил көслө рухлы, сабыр холоҡло әсәһе тәрбиәһендә зирәк, отҡор, йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә.

2-се алып барыусы. Р.Бикбаевтың тәү башлап ҡәләм тибрәтеүе студент йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика гәзиттәрендә, “Йәш көстәр” альманахында донъя күрә. Р.Бикбаев ижады үҙәгендә - тыуған еребеҙ Башҡортостан, уның тарихи үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге. (2- се слайд.)

1-се алып барыусы. Р. Бикбаев – заман шағиры. Ул үҙ осороноң һәр һулыш-хәрәкәтен һиҙгер тоя. Уның заманының иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған әҫәрҙәре киң билдәлелек яуланы. Алтмышынсы йылдар башынан уҡ Р. Бикбаев поэтик ижадын төплө фәнни тикшеренеүҙәр менән бергә алып бара. Ул Ш. Бабич, Р. Ғарипов әҫәрҙәрен өйрәнеүгә һәм халыҡҡа еткереүгә күп көс һалды. (3-сө слайд)

2-се алып барыусы. М. Кәрим, Б. Бикбай, Р.Ниғмәти һәм башҡа бик күп шағирҙарҙың ижади портреттарын яҙҙы, башҡорт әҙәбиәтенең алты томлыҡ тарихын, башҡорт шиғриәте антологияһын баҫтырып сығарыуға күп көс һалды. (4-се слайд)

1-се алып барыусы. Ул шулай уҡ матбуғатта әҙәби тәнҡит, публицистик мәҡәләләр, докладтар менән сығыш яһай. Р.Бикбаевҡа 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

2- се алып барыусы. Ул – Республикабыҙҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, С.Юлаев исемендәге Дәүләт, Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр, З. Биишева һәм Р. Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты.

1- се алып барыусы. Р. Бикбаев бөгөнгө көндә лә ең һыҙғанып ижад итә. Шул уҡ ваҡытта йәш ҡәләмдәштәре менән әңгәмәләшергә лә форсат таба. Ғөмүмән, бар булмышы менән иле, халҡы, теле, заманы өсөн янып –көйгән шәхес ул - Р.Бикбаев. (5 -се слайд)

3. Төп өлөш.

Уҡытыусы: Бөгөн уҡыусылар беҙ яҙыусының ижады менән ҡыҙыҡһыныуыбыҙҙы, ул күтәргән проблемаларға битараф түгеллегебеҙҙе тағы ла бер тапҡыр иҫбатларға йыйылғанбыҙ. Әҙәби уйыныбыҙҙа командалар һәр береһе үҙенең төплө белемен күрһәтә алыр тип ышанам.

Иң тәүҙә жюри ағзалары менән таныштырып китәм.

Ә хәҙер уйыныбыҙҙы башлайбыҙ. Һәр ярыш төрөнән һуң, жюри ағзалары, командаларҙың яуабына ҡыҫҡаса ғына анализ бирергә әҙерләнеп ултырығыҙ.

1-се алып барыусы. Һәр команда Р. Бикбаев ижадына бәйләп үҙенә исем, девиз уйлай һәм үҙе менән таныштырып китә. (Был эш өсөн 5-10 минут ваҡыт тәҡдим ителә)

(Командалар үҙҙәре менән таныштыра.)

1- се алып барыусы. Командалар менән таныштыҡ, ә хәҙер һүҙҙе жюриға бирәбеҙ. Рәхим итегеҙ.

2- се алып барыусы. Хәҙер һәр командаға « Бөрйән ҡарағайы» шиғырының һүҙҙәрен таратып бирәм. 3 минут ваҡыт эсендә һеҙ һүҙҙәрҙе дөрөҫ тәртиптә ҡуйып, шиғырҙы йыйырға тейешһегеҙ. Ваҡыт сыҡҡас, һәр команда үҙе йыйған шиғырҙы уҡып ишеттерә.

(Уҡыусылар үҙҙәре йыйған шиғырҙы уҡығанда, жюри, проектор таҡталағы шиғыр менән сағыштырып, дөрөҫләгән тикшереп ултыра.) (6- сы слайд)

Китеп бара Бөрйән ҡарағайы,
Еркәйендә ҡалған тамыры.
Китеп бара Бөрйән ҡарағайы,
Сайыр йәшен юлға тамыҙып.
Барып етер Бөрйән ҡарағайы,
Күпме генә йәшен ағыҙма –
Иҫән сығыуҙар юҡ был цехтарҙан
Әйләнер ул ап-аҡ ҡағыҙға.
Кире ҡайта Бөрйән ҡарағайы,
Әйләнер ҙә ап- аҡ ҡағыҙға.
Ул ҡағыҙҙа Бөрйән урмандарын
Нығырақ ҡырырға тип яҙылған.

Уҡытыусы. Уҡыусылар, әйҙәгеҙ, бергәләп шиғырҙа күтәрелгән төп проблеманы билдәләйек. (Тәбиғәтте, урмандарыбыҙҙы һаҡлау, уларға ысын хужа булыу проблемалары күтәрелгән). Быйыл беҙҙә тирә- яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип бушҡа ғына иғлан ителмәне. Һеҙ, уҡыусылар, киләсәк быуын вәкилдәре, ата-бабаларҙан ҡалған хозур тәбиғәтебеҙҙе күҙ ҡараһылай һаҡларһығыҙ, сит-яттарҙан тапатмаҫһығыҙ, тип ышанам мин.

2-се алып барыусы. Жюри ағзалары, әйҙәгеҙ, был ярышҡа ла үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдереп үтегеҙ.

1-се алып барыусы. Ярышыбыҙҙың өсөнсө өлөшө: шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе. Һәр командандан бер уҡыусы алдан ятлап килгән шиғырын һөйләй. Бында инде тәү сиратта тасуири һөйләүгә, дөрөҫ әйтелешкә, һөйләүсенең сәхнәлә үҙен тотошона иғтибар итәбеҙ.Бәйгебеҙҙе башлайбыҙ.

(Уҡыусылар шиғыр һөйләйҙәр)

2-се алып барыусы. һүҙ - жюри ағзаларына. Шиғырҙарҙы тыңлағандан һуң уҡыусыларға әйтер теләктәрегеҙ.

2-се алып барыусы. Өйгә эш итеп һәр командаға Р.Бикбаевтың бер шиғырын анализларға бирелгән ине. Өй эшен тикшерергә лә ваҡыт етте. Иң тәүҙә шиғырҙы ҡысҡырып уҡыйһығыҙ ҙа шунан анализ бирәһегеҙ. Командалар, рәхим итегеҙ.

(Командалар алдан әҙерләп килгән шиғырға анализ бирәләр. Проекторҙа ла күрһәтергә мөмкин)

1-се алып барыусы. Хөрмәтле жюри! Өйгә эшкә ҡарата ла үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдереп үтһәгеҙсе.

1-се алып барыусы. Уйыныбыҙҙың артабанғы төрө - яҙыусының тормошо һәм ижады буйынса викторина. Командаларға 5-әр һорау таратып бирелә. Һорауҙар бер төрлө. Яуаптарығыҙҙы ҡағыҙға яҙаһығыҙ ҙа, мин йыйып алам һәм һәр командаңың яуабын ҡысҡырып уҡыйым. 5 минут ваҡыт бирелә. Яуаптарҙы проекторҙағы дөрөҫ яуаптар менән сағыштырып, баһаларығыҙҙы ҡуйып ултырығыҙ, хөрмәтле жюри ағзалары.

(Һорауҙар проекторҙа сыға. 7-се слайд.)

1. “Халҡыма хат” поэмаһын яҙыуға нимә сәбәпсе була?

1989 йылда Салауат һәйкәле янында уҙған шиғыр байрамында Р.Бикбаевҡа башҡортса белмәгән ҡыҙҙың хатын тапшыралар. Ошо хат поэманы яҙыуға сәбәпсе була.

2. Үҙенең аяныслы бала сағын ниндәй әҫәрендә һүрәтләй?

«Балтырған» әҫәрендә.

3. Яҙыусының фәнни хеҙмәттәре нисек атала?

Хәҙерге башҡорт поэзияһының философик лирикаһы.

Ш. Бабич. Тормошо һәм ижады.

Замандың шиғри йылъяҙмаһы.

Время. Поэт. Народ.

Эволюция современной башкирской поэзии.

Ш. Бабич. Жизнь и творчество.

4. “Вокзал” поэмаһы ҡайҙа һәм нисәнсе йылда баҫыла?

“Ағиҙел” журналында, 1962 йылда.

5. 1967, 1969, 1971, 1976, 1979 йылдарҙа нәшер ителгән поэтик әҫәрҙәр йыйынтыҡтары нисек атала?

Ҡош юлы.

Автобиография.

Лирика.

Ғүмер уртаһы.

Һөйөнсө.

2-се алып барыусы. Шағирҙың ижадына арналған викторинаны нисек башҡарып сыҡтылар икән командалар. Жюри ағзалары, һеҙҙең фекерегеҙ.

2-се алып барыусы.Ярышыбыҙҙың аҙағына ла яҡынлашабыҙ. Инде бәйгегә капитандарҙы саҡырабыҙ. Һәр капитан һорау әҙерләп килгән.

Бер капитан һорауын әйтә. Ҡалғандарының ҡайһыһының яуабы әҙер, тиҙ генә карточкаһын күтәрә. Әгәр яуап дөрөҫ икән, артабан дауам итәбеҙ Дөрөҫ булмаһа, башҡа яуаптарҙы тыңлайбыҙ. Бөтөнләй дөрөҫ яуап булмаһа, һорау биргән капитан яуабын да үҙе әйтә инде. Әйҙәгеҙ, капитандар, башлайбыҙ ярышты.

(капитандар бер- береһенә һорау бирә)

1- се алып барыусы. Һуңғы төр ярышты баһалау өсөн һүҙҙе жюри ағзаларына бирәбеҙ.

4. Йомғаҡлау .

Уҡытыусы: Шулай итеп, уҡыусылар, уйыныбыҙ аҙағына ла яҡынлашты. Ярыш булғас, еңеүсеһе лә, еңелеүсеһе лә була. Тик бөгөн мин ысын мәғәнәһендә дуҫлыҡ еңде тип әйтә алам. Сөнки бөгөнгө әҙәби уйыныбыҙҙа ҡатнашҡан уҡыусыларҙың береһе лә үҙ халҡының үткәненә, бөгөнгөһөнә һәм киләсәгенә битараф түгелдер, ә инде халыҡсанлыҡ, тормошсанлыҡ, оҫталыҡ менән һуғарылған Р. Бикбаев ижады беҙҙе берҙәм булырға саҡыра, һәр саҡ телем, илем тип янып йәшәргә көс бирә.

1-се алып барыусы. Дәйәм һөҙөмтәләрҙе билдәләү өсөн һүҙҙе жюри рәйесенә бирәбеҙ. (Һөҙөмтәләрҙе билдәләү һәм бүләктәр тапшырыу.)

2-се алып барыусы. – Тыуған йылың ҡайһы?

1-се алып барыусы. – Халҡым тыуған йыл.

2-се алып барыусы.- Ҡыуған юлың ҡайһы?

1- се алып барыусы. – Халҡым ҡыуған юл.

1-се алып барыусы. Р. Бикбаев үҙенең тыуған йылын да, ҡыуған юлын да туған халҡына бәйләй. Беҙ ҙә унан үрнәк алып, илебеҙҙе, телебеҙҙе һөйгән шәхестәр булып үҫәйек, башҡортобоҙҙоң арҙаҡлы улдарына лайыҡлы алмаш булайыҡ. «Аҡ тирмә»лә киләһе осрашҡанға тиклем һау булығыҙ!

УРАЛЫП ЯТҠАН УРАЛТАУ

Ғайсина Мәнсиә Мәхәмәт ҡыҙы,
Учалы ҡалаһы 5-се һанлы урта мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһында мәғлүмәт биреү; ”Уралыма” шиғырының идея-тематикаһын асыҡлау; телмәр байлығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү; Тыуған ергә, Уралға һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: проектор, экран, магнитофон, Рәсәй картаһы, Башҡортостан картаһы, карточкалар.

Дәрес барышы:

1.Ойоштороу.

2. Эпиграф.(Слайд №1).

Күгәрепкәй ятҡан Урал тауы-
Атай-олатайҙарҙың да төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.
«Урал» йыры.

-Был йырҙа нимә тураһында һүҙ бара?

География менән бәйләү.

-Нимә ул Урал ? (Урал тауҙар теҙмәһе). (Слайд №2,3).

Рәсәй картаһынан Уралды табып күрһәтеү.

Дәрестең маҡсатын билдәләү.

- Балалар бөгөн беҙ нимә тураһында һөйләшәбеҙ?

- Балалар яуабын тыңлау.

Уҡытыусы: Урал тураһында, Уралдың башҡорт халҡы өсөн ҡәҙерле булыуын белербеҙ һәм Уралға арналған шиғыр менән танышырбыҙ.

Тыуған ер менән бәйләү:

-Беҙҙең Учалы районында Урал менән бәйләнгән нимәләр бар?

- “Урал” колхозы, кинотеатры, ауылы, йылғаһы бар.

-Урал йылғаһын икенсе төрлө нисек атайҙар? (Яйыҡ).

Уҡытыусы:

Крәҫтиәндәр һуғышы тамамланғас, Екатерина II халыҡ был һуғышты тиҙерәк онотһон тип, Яйыҡ йылғаһының исемен Уралға үҙгәртергә ҡуша.

- Ә хәҙер Урал тауының килеп сығыу легендаһы менән танышайыҡ. (Балалар һөйләй).

Уҡытыусы: Эйе, легенда буйынса Алпамыша билбауын һуҙып Урал тауҙар теҙмәһе барлыҡҡа килгән. Ә “Урал батыр” әкиәте һәм эпосында Урал батыр Тереһыуҙы йән-яҡҡа һибә һәм былай тип әйтә: (Слайд №4).

- Мин – бер кеше, һеҙ- күп кеше: мин түгел, ер-һыу үлемһеҙ булһын: быуынға быуын бәйләнһен, әҙәм заты ишәйһен, бар тереклек йәшәһен, -тип әйтә.

Уҡытыусы:

Урал һүҙе «ура” формаһындағы тамыр ҡылымдан һәм боронғо –л ялғауынан тора.(Р.Шәкүр).

Ҡобайырҙа әйтелгәнсә, армыт-армыт булып уралып ятҡан Урал ул.

“Урал һүҙе боронғо төрки теле менән бәйләнгән. Үр-бейеклек, ҡалҡыулыҡ тигәнде аңлата.

- Ә хәҙер тарихҡа мөрәжәғәт итәйек:

Беҙҙең эраға тиклем 2 быуатта йәшәгән тарихсы Птолемей төҙөгән картала Урал тауҙары Рифей тауҙары тип аталған.

Икенсе бер тарихсы Дамаст Сигейский һәр ваҡыт һыуыҡ төньяҡ елдәре иҫеп торған Риппей тауҙары тураһында яҙып ҡалдырған.

Боронғо рус сәйәхәтселәре Урал тауҙарын “Каменный пояс” тип атағандар.

- Әйҙәгеҙ, “Урал” йырының килеп сығышы менән танышайыҡ. Сәхнәләштереү. (Уҡыусылар сығып теҙелешеп торалар, баштарына һәр ырыуҙың тамғаһы йәбештерелгән башлыҡ кейәләр.)

Бер бала:

- Мин - имән. Имәнтауҙа үҫкән йөҙйәшәр имән. 1220 йылда Батый ханға ҡаршы тороу өсөн Уралда йәшәүсе башҡорт ырыуҙарының ил ағалары ҡоролтайға йыйылды. Шунда мин башҡорт еренең батырҙарын күрҙем. Ҡоролтай күмәкләп ант итеү менән тамамланды. Минең тәнемә һәр ырыу үҙ тамғаһын һалды.

1-се уҡыусы: Беҙ- үҫәргәндәр. Ҡошобоҙ - торна, тамғабыҙ - әүернә, ағасыбыҙ - миләш, ораныбыҙ - Туҡсоба. Дуҫлыҡҡа мәңге тоғролоҡ һаҡларға ант итәбеҙ.

2-се уҡыусы: Беҙ - бөрйәндәр. Ҡошобоҙ - ҡарсыға, ағасыбыҙ - ҡарағас, тамғабыҙ - сүкеш, ораныбыҙ - Тарауыл. Илде дошмандан бергәләп һаҡларға ант итәбеҙ.

3-сө уҡыусы: Беҙ - сәңкем ҡыпсаҡтар, тамғабыҙ - тараҡ, ағасыбыҙ - ҡарама, ҡошобоҙ - бөркөт, ораныбыҙ - Туҡсоба. Башҡорт илен һаҡларға ант итәбеҙ.

4-се уҡыусы: Беҙ - ҡара ҡыпсаҡтар, ҡошобоҙ - ҡарағош, ағасыбыҙ - мышар, тамғабыҙ - ҡабырға, ораныбыҙ - Туҡсоба. Ете ырыуға тоғро булырға ант итәбеҙ.

5-се уҡыусы: Беҙ - ҡыпсаҡтар, ағасыбыҙ - мышар, ҡошобоҙ - шоңҡар, тамғабыҙ - һәнәк, ораныбыҙ - уран. Башҡорт ерендәге йәшәү ҡанундарын боҙмаҫҡа ант итәбеҙ!

6-сы уҡыусы: Беҙ - түңгәүерҙәр. Ҡошобоҙ - һайыҫҡан, ағасыбыҙ - мышар, тамғабыҙ - яғалбай, ораныбыҙ - Туҡсоба! Башҡорт илен яуҙарҙан һаҡларға ант итәбеҙ!

7-се уҡыусы: Беҙ - тамъяндар. Тамғабыҙ - ирәк, ҡошобоҙ - ҡарсыға, ағасыбыҙ - ҡарағай, ораныбыҙ - Тутыя. Тыуған илде бергәләп һаҡларға ант итәбеҙ!

Имән: Ете ҡорбан салынды, уларҙың боҫрап торған ал ҡаны минең тирә-яғымдағы тупраҡты һуғарҙы. Оҫта ҡурайсылар, йырсылар йыйын ҡомартҡыһы итеп “ Ете ырыу” - “ Урал” йырын сығарҙы.

Уҡытыусы: Бына шулай итеп башҡорт халҡының гимны булған “Урал” йыры килеп сыҡҡан. Ә хәҙер йырҙан өҙөк тыңлап үтәйек.

Уҡытыусы:

Тимәк, Урал - ул тыуған төйәгебеҙ. Беҙ һеҙҙең менән Уралда йәшәйбеҙ. Боронғо башҡорттар өсөн тыуған ил һәм Урал төшөнсәһе айырылғыһыҙ булған. Башҡорттарҙың иң изге уйҙары, йырҙары, көйҙәре, легендалары Уралға арналған. Беҙҙең яҙыусыларыбыҙ, шағирҙарыбыҙ ҙа Уралды маҡтау-данлауҙан туҡтамай. Урал улар өсөн мәңгелек тема.

3. Бына шуларҙың береһе Рауил Бикбаев.

- Кем ул Р.Бикбаев? (бер уҡыусы ҡыҫҡаса биографияһын һөйләй).(Слайд №5,6,7).

Китаптар күргәҙмәһе эшләү, таныштырыу.

Р.Бикбаев Башҡортостандың киләсәге өсөн борсола һәм бер шиғырында(Слайд №8).

“Йоҡлар йоҡоһонан яҙһын кеше, яҙмаһын тик еренән, иркенән”,- ти.

Уҡытыусы:

Р.Бикбаевты Башҡортостандың киләсәге борсой, балаларҙың үҙ телен белеп, Тыуған ерҙәрен, тәбиғәтен һаҡлап үҫеүен теләй. Ул филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, Ҡоролтай депутаты, Өфө ҡалаһының Почетлы гражданины, Салауат Юлаев ордены һәм премияһы лауреаты. Оҙаҡламай үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләй.

4.”Уралыма” шиғыры өҫтөндә эш.

Һүҙлек эше.(Слайд №9).

Һын - кәүҙә, буй, фигура,

Ҡын - билгә тағып йөрөй торған ҡоралдың һауыты,

Ил баҫырға - илбаҫар, захватчик,

Ҡилмешәк - сит яҡ кешеһе, переселенец,

Йәшәү илтәләр - йәшәргә көс бирәләр,

Баҡһам - ҡараһам,

Иңдәреңдә - на плечах.

5.Һүҙбәйләнеш, һөйләмдәр төҙөү.

6.Шиғырҙы тасиури итеп уҡыу, төрлө уҡыу күнекмәләре башҡарыу.

7.Экранда 1,2-се куплет сыға.(Слайд №10)

-Шағир Уралды нимә менән сағыштыра?

-Ә нимә ул ҡылыс?

-Ә был ҡылыс килмешәктәргә ни өсөн кәрәк?

Уҡытыусы:

Ҡылыс- яу ҡоралы. Һәр яугирҙың үҙ ҡылысы булған. Уны тик ысын батырҙарға ғына бүләк итер булғандар, бүләк атаһынан улына йә олатаһынан-ейәненә ҡомартҡы кеүек күсә килгән. Мәҫәлән, “Урал батыр” әкиәтендә Тереһыу шишмәһен, әжәлде эҙләп юлға сыҡҡан Уралға атаһы Йәнбирҙе ҡарт ҡылыс бүләк итә.

8. Экранда 3-сө куплет шиғыр сыға.(Слайд №11).

-Ни өсөн автор шишмәләр йәшәү илтәләр,ти?

Шишмә, һыу - ул йәшәү сығанағы, тереклек өсөн бик кәрәк. Шишмә ерҙәге бар тереклекте, тәбиғәтте йәшәтеүсе көс.

9.Экранда 4-се куплет.(Слайд №12).

- Ни өсөн шағир шат, тыныс, күңеле күтәреңке? (Уралы - тыуған ере, Урал шишмәләре, туған халҡы бар)

-Ә һеҙгә тыуған ерегеҙ кәҙерлеме?

-Әлбиттә, беҙҙең һәр беребеҙгә үҙ ере, үҙ иле бик кәҙерле. Сөнки тыуған ер - алтын бишек.

10. Ә һеҙ тыуған ер тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ? Уҡыусылар мәҡәлдәр әйтә. Экранда өҫтәмә мәҡәлдәр бирелә. (Слайд №13).

Ә бына киләсәгебеҙ тыныс, матур булһын өсөн беҙ ни эшләй алабыҙ? Экранда- илемдең киләсәге тыныс, матур булһын өсөн мин… (Иң тәүҙә уҡытыусы, һуңынан балалар һәр береһе үҙенең фекерен әйтә.) (Слайд №14).

Уҡытыусы: Мин илемдең киләсәге матур булһын өсөн тырышып һеҙҙең кеүек аҡыллы, тәртипле балаларға үҙ телдәрен өйрәтәм, улар Тыуған илдәрен, атай-әсәйҙәрен яратып, илебеҙҙең киләсәген яҡларлыҡ, үҙ телебеҙҙе һаҡларлыҡ балалар булып үҫеүҙәрен теләйем.

11. Һығымта эшләү.

Уҡытыусы «Ҡыуандым”, “Һөйөндөм”, “Риза булманым”, “Өйрәндем” тигән карточкалар күрһәтә, ә уҡыусылар дәрестә нимә өйрәнеүҙәрен, нимәгә ҡыуаныуҙарын, нимәгә һөйөнөүҙәрен, нимә менән риза булмауҙарын әйтә.

12. Өйгә эш.(Слайд №15).

Илемдең киләсәге матур булһын өсөн мин… (балалар үҙ фекерҙәрен бер нисә һөйләм менән яҙып киләләр).

«ХАЗИНА» ИНТЕЛЛЕКТУАЛЬ УЙЫНЫ

Айбатова Л.В.,
Учалы ҡалаһы 10-сы мәктәбе

Маҡсат. Рауил Бикбаевтың тормош юлын һәм ижадын төплө өйрәнеү, халҡыбыҙҙың арҙаҡлы шәхестәренә ҡарата хөрмәт, уларҙың ижадына һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. Рауил Бикбаев ижады буйынса плакаттар, китаптар күргәҙмәһе, шағир ижады буйынса презентация.

Уйын тарихы

Донъяның күп илдәрендә халыҡ иғтибарын йәлеп иткән был уйын иң беренсе Англия телевидениеһы аша 2010 йылда күрһәтелә. Тапшырыуҙың атамаһы төрлө тарафтарҙа төрлөсә яңғырай. Беҙҙә «Рәсәй 1» каналында күрһәтелгән «10 миллион» исеме аша билдәле.

Уйын ҡағиҙәләре

Түбәндә тәҡдим ителгән сараны ошо тапшырыу ҡалыбында үткәреү отошло. Ҡатнашыусыларға 8 һорау биреү ҡаралған. Уйындың һәр этабында үҙҙәренә оҡшаған 2 теманың береһен һайлап алыу хоҡуғы бирелә. Тәүге 4 һорауға яуаптар һаны дүртәү булһа, 5-7 һорауҙарға-3, ә һуңғыһына 2 яуап тәҡдим ителә. Еңеүсе 8 һорауға ла дөрөҫ яуап бирергә тейеш.

Уйынға әҙерлек

Аҡсалар урынына Башҡортостан ере төрлө хазиналарға бай булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алып, берәй металдың (алтын, көмөш, баҡыр) төҫөнә яраҡлаштырып тәңкәләр эшләнелә.

Был уйынды кластан тыш сара итеп тә, дәрестең бер өлөшө итеп тә үткәрергә була. Юғары класс уҡыусылары өсөн тәғәйенләнә.

Тәржемәи хәле

Талант балҡышы

Рауил Бикбаев ниндәй ауылда тыуған?
Үрге Ҡунаҡбай
Яңы Байрамғол
Үрге Ҡыйғы
Иҫке Балтас

Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме әҙипкә ҡасан бирелә?
1989
1992
1993
1996

Эшмәкәрлеге

Ҡәләмдәштәре

Башҡортостан Яҙыусылар идараһы рәйесе булып әҙип нисәнсе йылдарҙа эшләй?
1995—2011
2011-2011
1995-2012
2012 йылда һайлана

Р. Бикбаев тураһында кем «Үҙе-баҫыу, үҙе-һабансы» тип яҙған?
Ғайса Хөсәйенов
Ирек Кинйәбулатов
Рәми Ғарипов
Мостай Кәрим

Ижады

Цитаталар

Рауил Бикбаевтың тәүге китабы нисек атала?
«Автобиография»
«Һөйөнсө»
«Дала офоҡтары»
«Ҡош юлы»

«Илемдә илемде һағынам...» Ҡайһы әҫәрҙең геройы тураһында һүҙ бара?
«Каруанһарай»
«Ностальгия»

«Уралыма»
«Система»

Башҡортостан

Ырымбур

Р. Шәкүр менән берлектә ижад ителгән Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны һүҙҙәре нисәнсе яҙылған?

1993
2000
2008
2009

Рауил Бикбаев мәктәптән һуң ниндәй педучилищены тамамлай?

Аҡбулаҡ
Ҡандыболаҡ
Ырымбур
Туҡ

Ғилми эшмәкәрлеге

«Шағир һүҙе-шағир намыҫы»

Р. Бикбаев ниндәй шағирҙың тормошон һәм ижадын тәү башлап өйрәнеүсе һәм уҡыусыға уның әҙәби мираҫын еткереүсе ғалимдарҙың береһе?

Салауат Юлаев
Шәйехзада Бабич
Мифтахетдин Аҡмулла

Ниндәй әҫәрҙә яугир,шағир һәм импровизатор Салауат батыр образы төп урынды биләй?

«Уралыма»
«Донъя бигерәк сәйе»
«Ҡурай һәм ҡауырһын»

«Һыуһаным-һыуҙар биреген!»

Хаттар,хаттар...

Был поэмала ниндәй халыҡ шағирының әҫәренән өҙөктәр алынған?

Р. Ниғмәти
Н. Нәжми
М. Кәрим

Шағир ниндәй шиғри әҫәренә эпиграф итеп Б. Вәлидтең «Йырҙар яҙам,ләкин халҡым наҙан» тигән юлдарын алған?

«Барып етһен ине хаттарым»
«Халҡыма хат»
«Йыр»

Поэмалары

Халҡым

Авторҙың ниндәй поэмаһы буйынса театрлаштырылған спектакль ҡуйылған?

«Баҙар балтаһы»
«Хазина»
«Халҡыма хат»
«-Тыуған йылың ҡайһы?
-Халҡым тыуған йыл.
-Ҡыуған юлың ҡайһы?
-Халҡым ҡыуған юл.»

Был өҙөк шағирҙың ниндәй шиғри әҫәренән алынған?

«Бураҙналар»
«Мәңгелек мәл»
«Автобиография»

Сәфәрҙәргә сығам...

Китаптары

Рауил Бикбаевтың «Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙән» китабы башҡорт әҙәбиәтендә ниндәй жанрҙы өр-яңы баҫҡыҫҡа күтәрҙе?

Сәйәхәтнамә
Хитапнамә

Ниндәй китабына шағир ошондай баһа бирә: «Ошо китапҡа берләм һүкмактарым да, оло юлдарым да, яҡын һәм алыҫ офоҡтарым да килеп тоташҡан. Ошо китапҡа шатланып ҡанат ҡағыштарым да, бойоғоу-һағыштарым да, йәйҙәрем-ҡыштарым да, осоштарым-ҡыйралыштарым да, һүнеүҙәрем- балҡыштарым да тупланған».

«Ай күргәндәй-ҡояш алғандай»
«Яҙмышым»

”ҠОЛОН КЕҮЕК” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ибәтуллина Г.Ф.,
Учалы ҡалаһы 10-сы мәктәбе

Маҡсат: Р.Бикбаев ижады менән таныштырыу, һүҙлек запасын арттырыу; аңлы һәм бәйләнешле телмәр үҫтереү; тыуған тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: дәрескә слайдтар, Р.Бикбаевтың балалар өсөн яҙылған китаптары күргәҙмәһе.

Дәрес барышы. 1.- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙгә хәйерле көн теләп дәресебеҙҙе башлайыҡ. Бөгөнгө дәрестең девизы:

Бөгөн беҙҙә башҡорт теле
Яратам һине телем
Рәхмәт һиңә,һинең аша
Алам мин яҡшы белем.

2. Өйгә эш тикшереү. -Уҡыусылар, һеҙгә ниндәй өйгә эш бирелгәйне? (Беренсе слайд: тәбиғәт һүрәте).

-“Тәбиғәт” тигән темаға инша яҙырға(ике-өс уҡыусы уҡып ишеттерә).

-Иншағыҙҙан күреүемсә, һеҙ ҙә тәбиғәтебеҙҙе ныҡ яратаһығыҙ икән. Уны һаҡларға тырышаһығыҙ. Афарин.

3. Тема һәм маҡсатты әйтеү.

- Бөгөн беҙ һеҙҙең менән балаларҙың яратҡан яҙыусыһы Р.Бикбаев менән танышырбыҙ. Хәҙер 2-се слайдҡа иғтибар итегеҙ.

(Фотоһы, ижады, китаптар күргәҙмәһе.)

- Дәресебеҙҙең темаһы булып, ошо шағирҙың “Ҡолон кеүек” шиғыры менән танышыу.

- Дәфтәргә шағирҙың исемен, тыуған йылын яҙып ҡуйығыҙ.

4. - Минеңсә, һеҙ шиғырҙағы ҡайһы бер һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңламауығыҙ ҙа бар. 3-сө слайдҡа ҡарағыҙ:

Тояҡ - копыто
Еҫ - запах
Йәйғор - радуга
Ҡыяҡ - стебель
Әллә ниндәй - какой-то

5. Текст өҫтөндә эш.

- Мин шиғырҙы уҡып ишеттерәм, ә һеҙ авторҙың шиғыры ни өсөн “Ҡолон кеүек” тип аталауын уйлағыҙ.

- Мин уҡығанда ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ? Ни өсөн шиғыр шулай атала икән?(яуаптар)

6. Үҙ аллы уҡыу.

- Уҡыған саҡта, шиғырҙың мәғәнәһен аңларға тырышығыҙ. Нимә менән ғорурлана автор? Ни өсөн ямғырҙы ҡолонға оҡшата?(Яуаптар)

7. Тасуири уҡыу(ике-өс уҡыусы уҡып күрһәтә)

8. Ял минуты.

Ямғыр яуа һибәләп,
Төймә, төймә төймәләп.
Их, төймә,төймә, төймә,
Төймә була егерме;
Бергә эшләйек, бергә уйнайыҡ,
Бергә йәшәү күңелле.

9. 4-се слайд. *Исем.*

Кем? Нимә? Яңғыҙлыҡ, уртаҡлыҡ.

- Уҡыусылар, ошо шиғырҙан яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәргә миҫалдар табығыҙ (Дәфтәргә яҙыу).

10.-Ижади эш.(5-се слайд)

Ҡойҙо ҡайындар
Һап-һары ал...
Осто муйылдан
Ҡып-ҡыҙыл ял...

- Шиғыр юлдарын дауам итегеҙ.

11. Йомғаҡлау.

- Бөгөн дәрестә нимә тураһында һөйләштек? Маҡсатыбыҙға ирештекме? (Яуаптар)

12. Өйгә эш.

- Шиғырҙы уҡырға һәм йөкмәткеһе буйынса һүрәт төшөрөргә. Киләһе дәрескә һүрәттәр конкурсы иғлан ителә

13. Баһалау.

-Дәресебеҙҙе матур шиғыр юлдары менән бергәләп йомғаҡлайыҡ.

Тырышып уҡы һин,
Матур итеп яҙ,
Бөтә фәндән дә
“Биш“ билдәһе ал.
Гел “Биш”кә уҡыу -
Беҙҙең бурыс ул.
Иң яҡшы бүләк-
Илгә ана шул.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ "УРАЛЫМА" ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ялалова Әнисә Әүәл ҡыҙы,
Учалы ҡалаһы 3-сө лицей

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу; Урал тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәгә тураһында хәстәрлек күреү, уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу; уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, китаптары; мультимедиа; башҡорт халыҡ йыры "Урал" яҙылған диск, Урал тәбиғәтенә арналған репродукциялар, Башҡортостан картаһы, компьютер, Башҡортостан тәбиғәтенә арналған слайдтар.

Дәрес барышы:

I.Ойоштороу мәле (психологик ыңғай хәл тыуҙырыу).

Уҡытыусы.

Һаумыһығыҙ, һаумы әле,
Ниндәй йылы һүҙ икән!
Күңелдәрҙе иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән.
-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек!

Уҡыусылар.

Һаумы,ҡояш,
Һаумы, зәңгәр һауа!
Һаумыһығыҙ,уҡытыусым,
Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ әле.

1. Башҡорт телендәге өндәрҙе ҡабатлау: ә,ө,ҡ,ғ,ҙ,һ,ҫ,ү,ң.
2. Ижектәрҙе дөрөҫ әйтәйек: -мә, -нә, -тә, -кө, -рө, -ҫа, -ға, -ҡа, -ҙа.
3. Телтөҙәткес: дә-дә-дә- һөйләшәм башҡорт телендә,
дә-дә-дә- уҡыйым башҡорт телендә,
да-да-да- беҙ йәшәйбеҙ Башҡортостанда!

III. Ойоштороу мәле.

1. Ситуация тыуҙырыу. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.

(Экранда Башҡортостан тураһында видеофильм күрһәтелә, башҡорт халыҡ йыры "Урал "яңғырай. Уҡыусылар йырҙың исемен әйтә.)

Күгәреп ятҡан Урал тауы -
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

- Шиғыр оҡшанымы? Был шиғыр нимә тураһында?(Урал тауҙары, тыуған ер, ҡорбан булған батырҙар тураһында.) Эйе, ысынлап та, тыуған ер, тыуған ил, туған тел, Урал тауҙары айырылғыһыҙ төшөнсә. Башҡорт халҡының "Урал" йыры Тыуған илгә, уның бөйөк үткәненә, Уралға арналған. Башҡортостандың ғорурлығы - Урал тауы!

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә кроссворд та сисергә кәрәк булыр. Кроссвордты сискәндә, үткән дәрестә һәм Башҡортостан тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫләгеҙ.

1. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.
2. Ағиҙел башланған тау, Башҡортостандың иң бейек түбәһе.
3. Башҡорт халыҡ йыры.
4. Белем шишмәһе.
5. Башҡортостандың иң ҙур күле.
6. Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы.
7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға.
8. З.Биишева тыуған район.
9. Башҡорт һәм башҡа төрки халыҡтарының ҡыллы музыка ҡоралы.
10. Башҡорт халҡының милли батыры.
11. Республикалағы йәштәр гәзите.
12. Тыуған ил.

Тимәк, бөгөнгө дәрескә ниндәй уҡыу мәсьәләһе ҡуйырбыҙ? (Р.Бикбаевтың биографияһы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың "Уралыма" әҫәре менән нимәләр әйтергә теләгәнен, Уралдың үткәнен нисек һүрәтләүен күрербеҙ. Уның күңеле ни өсөн тыныс булыуын аңларбыҙ. Компьютерҙа шағирҙың портреты күрһәтелә.)

IV. Уҡыу мәсьәләһен сисеү. Эште планлаштырыу.

1) Р. Бикбаевтың тормош юлын өйрәнеү.(Алдан әҙерләнгән уҡыусыларға һүҙ бирелә. Экранда фотолар күрһәтелә бара.)

2) Һүҙлек эше: һын-стан, фигура; ҡын - ножны; килмешәк - переселенец; баҡһам - посмотрю; иңдәрендә - на плечах.

3) Яңы һүҙҙәрҙең үҙләштерелеүен тикшереп, уҡыусыларҙың бер-береһенә баһа ҡуйыуы;

4) Уҡытыусының шиғырҙы өлгөлө уҡыуы;

5) Уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы.

VI) Шиғырҙың йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

Һорауҙарға яуаптар:

Автор был әҫәрҙә ниндәй проблемалар күтәрә? (Шиғырҙа тыуған ерҙе һаҡлау, Ватанға һөйөү тәрбиәләү,тыныслыҡ темалары яҡтыртыла.)

Уралдың үткәнен автор нисек һүрәтләй?(1,2-се куплетты яңынан уҡып үҙ һүҙҙәре менән һөйләйҙәр.) Авторға нимә йәшәү көсө бирә? (3-сө куплетта яуап табалар.) Уның күңеле ни өсөн тыныс? (4-се куплет). Һеҙ Урал тураһында тағы нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ? (Боронғо башҡорттар өсөн Тыуған ил һәм Урал төшөнсәһе айырылғыһыҙ булған. Башҡорттарҙың иң изге уйҙары, йырҙары, легендалары Уралға арналған. Беҙҙең илебеҙҙең тәбиғәте бик бай һәм ғәжәп матур ул. Башҡортостандағы ҡуйы урмандарға, аллы-гөллө сәскәләргә, йәм-йәшел үләндәргә, бейек тауҙарға һоҡланып туймаҫһың. Урмандарында кейектәр, һайрар ҡоштар, ағастар, емеш-еләктәр, үҫемлектәр донъяһы ла бик күп төрлө. Ҡаҙылма байлыҡтарға ла бай Башҡортостан. Беҙҙең илебеҙ тәбиғәте бик һоҡланғыс!

Уҡыусылар тексты ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

Шиғырҙы йомғаҡлау. Шағир илебеҙҙең үткәне менән ғорурлана: күпме дошман беҙҙең илде баҫып алырға теләгән, ләкин булдыра алмаған. Шағир Тыуған иленең бөгөнгөһөн ярата, уның менән һоҡлана һәм киләсәге тыныс булырына ышана. Был хис-тойғолар шиғырҙың ҡайһы юлдарында күренә? Автор Уралды нимәгә оҡшата? Ни өсөн уны ҡандан ҡынға кергән ҡылыс менән сағыштыра? (Ҡандан ҡынға кергән ҡылыс - ул тыныс һәм бәхетле тормош тигәнде аңлата. Тыныс тормош - беҙҙең ҡулыбыҙҙа. Беҙ тыныс тормоштоң ҡәҙерен белергә тейешбеҙ. Дуҫ булырға, тыныслыҡты һаҡлауҙа үҙ өлөшөбөҙҙө индерергә бурыслыбыҙ.

Башҡорттар борон замандарҙан уҡ дуҫ йәшәгән. Ауыр ваҡыттарҙа бер-береһенә ярҙам итеп, ҡыйынлыҡтарҙы бергә еңгәндәр. Был традициялар бөгөнгө көнгә ҡәҙәр һаҡланып килгән. Бына Башҡортостан менән күрше республика Татарстандың дуҫлығы йылдан-йыл нығый, улар араһында килешеүҙәр төҙөлә, аралар яҡыная. Улар беҙгә ҡунаҡҡа килә, беҙ уларға барабыҙ.

Ил өҫтөндә илле дуҫың булһын, ти башҡорт мәкәле. Башҡортостан башҡа бик күп туғандаш республикалар менән дә дуҫлыҡ килешеүҙәре төҙөй.

Тыуған яғым, Башҡортостан менән, мин сикһеҙ ғорурланам! Уның бай тарихы, өмөттәр тулы бөгөнгөһө, яҡты киләсәге хаҡында уйлайым да, үҙ илемдә йәшәү ниндәй ҙур бәхет тим.)

Тыуған ил тураһында мәкәлдәр.

Алфавиттағы хәрефтәрҙең тәртибе буйынса мәкәлде дөрөҫ итеп уҡығыҙ.

20,37,27,5,1,18 12,16,8,17 - 1,16,20,37,18 2,12,34,8,14.

Мәкәлде аңлатыу. Ни өсөн Тыуған ил алтын бишек менән сағыштырыла? Тағы ла ниндәй мәкәлдәр беләһегеҙ?(Илдең итәге киң. Иле барҙың теле бар, теле барҙың көнө бар.)

Дәфтәрҙә эш.

Үтелгәнде ҡабатлау өсөн 284-се күнегеүҙе эшләү.

VII) Рефлексия.

Һеҙгә бөгөнгө дәрес оҡшанымы? Нимәләр оҡшаны? Ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ? Нимәләргә өйрәндегеҙ? Улар һеҙгә киләсәктә кәрәк буласаҡмы? (Уҡыусылар дәрескә баһа ҡуя, үҙ эштәре менән ҡәнәғәт булыу-булмауын әйтә, яуаптарын дәлилләй. Баланың эшмәкәрлеге баһалана.)

VIII) Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

-Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла. Быйыл, 2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевҡа 75 йәш тула.

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала.

IX) Өйгә эш. Ҡыҙҙар "Бейек Урал тауҙары" исемле презентация төҙөй, ә малайҙар ошо уҡ темаға кескәй инша яҙа йә проект төҙөй.

Р. БИКБАЕВ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!”

Нотфуллина Гөлнур Римус ҡыҙы,
Учалы районыСәфәр урта мәктәбе Мансур филиалы

Маҡсат: - Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың тормошон һәм “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын үҙләштереү;

- Яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү, телмәр күнекмәләрен үҫтереү;
- Поэманы уҡып өйрәнеү процесында уҡыусыларға экологик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: карта, Р.Бикбаев портреты, уның ижадына бағышланған папка, ноутбук, мультимедиа проекторы.

Дәрес барышы:

I.1. Ойоштороу мәле .

1-се слайд.

Тел асҡысы – иман биргән
Һөйөклө туған телем.
Үҙ телемдә һеҙгә сәләм
Әссәләмәғәләйкүм

2. Фонетик- орфоэпик күнегеүҙәр.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, миҫалдар менән нығытыу.

2-се слайд
-Ә, Ө,Ү
-Ҡ,Ғ,Ҙ
-Ң,Ҫ,һ
II.
3-сө слайд.
Ағиҙелдең һыуы һалҡын
Ярҙары таш булғанға.
Ағиҙел кеүек саф йылға
Юҡтыр инде донъяла.
Р.Ниғмәти
Р.Ниғмәти шиғырын хор менән уҡыу.
- Уҡыусылар, ни өсөн беҙ бөгөнгө дәрескә ошо шиғырҙы эпиграф итеп алдыҡ икән?
- Уҡыусыларҙың яуаптары.
Башҡорт халыҡ йыры “Йәмле Ағиҙел буйҙары” йырын тыңлау.

III. Яңы тема буйынса эш.
1. Уҡыусылар, әйҙәгеҙ әле, таҡтаға күҙ һалайыҡ. Унда һеҙ кемдең портретын күрәһегеҙ?
-Уҡыусыларҙың яуабы.
Бер уҡыусы Р.Бикбаевтың тормош юлы, ижады менән таныштыра.
4-се слайд.
Рауил Тәхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған.Күрше Ғабдрахман ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй.1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының рәйесе вазифаһын башҡара.
Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. 1964 йылда уның “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, күренекле шағир булып танылды.
Р. Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. ”Каруанһарай”, “Баҙар балтаһы”, “Һыуһаным, һыуҙар биреген!” поэмаларында, “Халҡыма хат” шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.
Р. Бикбаев шулай уҡ әҙәбиәт ғалимы ла. Ул филология фәндәре докторы, профессор, Ш.Бабич ижадын өйрәнгән.
Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы лауреаты, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.
2. Дәфтәргә число, көн, тема исемен яҙыу.
3. Р. Бикбаев бик күп актуаль шиғырҙар, поэмалар ижад иткән. Шуларҙың иң әһәмәиәтлеләренең береһе – “Һыуһаным, һыуҙар биреген!” поэмаһы.
-Уҡыусылар, әйтегеҙ әле, ә нимә һуң ул поэма?
Поэма ул – шиғри хикәйәләү.
4.Һүҙлек эше:
5-се слайд.

Хафа – беспокойство	Ҡырғын – мор
Шеш – опухоль	Ылымыҡ – водоросль
Һөрән – призыв	Оран һалыу – бить в набат
Ҡыуғын – сплав	Элмәк - петля

Был һүҙҙәрҙе хор менән , аҙаҡ берәмләп уҡыу. Һүҙбәйләнештәр төҙөү.
5. Поэманы аңлатып уҡыусылар менән уҡыу һәм һорауҙарға яуап биреү:
- Әҫәрҙә ниндәй проблема күтәрелә?
- Ниндәй географик объекттар телгә алына? Шуларҙы картанан күрһәтеп китәйек.(Ағиҙел, Иштуған һыуһаклағысы, Нөгөш, Ҡариҙел, Урал)
- Р. Бикбаев был әҫәре менән нимәгә өндәй?
- Эйе, уҡыусылар. Әгәр ҙә Р. Ниғмәти Ағиҙел йылғаһы менән ғорурланһа,
(6-сы слайд.)
Ағиҙелдең һыуы һалҡын
Ярҙары таш булғанға.
Ағиҙел кеүек саф йылға
Юҡтыр инде донъяла.
Р. Ниғмәти
Р. Бикбаев уның менән хафалана. (7-се слайд)
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?
Р. Бикбаев.
6. Экология проблемаһы хәҙерге көндә аҙым һайын осрай тиерлек. Ни өсөн тигәндә, беҙ үҙебеҙ йәшәгән ауыл да ошо экологик проблеманың уртаһында. Тирә-яҡты уратып алған заводтарҙан килгән саң ауылыбыҙҙы

зарарлай, күп ауырыуҙарға дусар итә, ғәрип балаларҙың тыуыуы ла юҡ түгел. Ауыл халҡы был проблеманы күтәреп сыҡһа ла, аныҡ ҡына эштәр эшләнмәне. Экологик поблеманың нисек булһа, шулай ҡалыуына әсенеп, йәштәр күсеп китергә мәжбүр. Был экология поблемаһы беҙҙең ауылға ғына ҡарамай, тотош ил шуның менән яфалана. Йылғалар бысрана, урмандар киҫелә, тирә-яғыбыҙ аяныс хәлдә ҡала килә.

Ә бына һеҙ, киләсәк быуын вәкилдәре, ошондай проблеманы нисек хәл итер инегеҙ?

-Уҡыусыларҙың яуаптары.

IV. Йомғаҡлау. Быйылғы йыл бигерәк тә Тирә-яҡты һаҡлау йылы тип иғлан ителгән. Республика кимәлендә бик күп эштәр эшләнелде. Беҙ ҙә был эшкә ҡушылдыҡ. Ауылыбыҙ тирәһен таҙарттыҡ. Был эште йыл һайын дауам итергә кәрәктер, минеңсә. Ҡайҙа ғына барһағыҙ ҙа, сүп-сар ҡалдырмай тирә-яғыбыҙҙы ҡарап торорға кәрәк.

Уҡыусылар, Р. Бикбаев беҙҙең “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнәсәгебеҙҙе ишетеп беҙгә хат-мөрәжәғәт ебәргән. Әйҙәгеҙ тыңлап китәйек.

-Һаумыһығыҙ, VI класс уҡыусылары!

Киләсәк юлдарығыҙ яҡты булһын. Яҡшы уҡығыҙ, хеҙмәт һөйөгөҙ. Аҡыллы, уңған булып үҫегеҙ. Тыуған тәбиғәтебеҙҙең киләсәге – һеҙҙең ҡулда. Уны рәнйетергә юл ҡуймағыҙ, һаҡлағыҙ!

Иң изге теләктәр менән Р. Бикбаев.

Эйе, уҡыусылар, бөтә үҙебеҙҙән тора. Әгәр ҙә тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләһәк, һыуҙарыбыҙ ҙа таҙа, тирә-яғыбыҙ ҙа матур, йәшәүе лә күңелле булыр.

V.Өйгә эш. Дәрестә һөйләшкән һүҙҙәргә таянып, “Һаҡлайыҡ тыуған еребеҙҙе” темаһына инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ”УРАЛЫМА” ШИҒЫРЫ БУЙЫНСА ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ

Әминева Асия Әүбәкер ҡыҙы,
Учалы ҡалаһы 3-сө лицей

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышыу; уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү, һүҙлек байлығын арттырыу; Тыуған илдең үткәнен белеү, һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү.

Йыһазландырыу. Р.Бикбаевтың портреты, Башҡортостан картаһы, ”Урал” йыры яҙылған аудиотаҫма, мультимедиа.

1. Иҫәнләшеү. Артикуляцион күнегеү.

Тарих-беҙҙең таштарҙа, тигән тарихсы;
Тарих-беҙҙең баштарҙа, тигән әҙип.
Тарих-беҙҙең ҡобайырҙарҙа, тигән сәсән;
Тарих-беҙҙең моң, йырҙарҙа, тигән йыраусы.
Тарих-беҙҙең яҙмаларҙа, тигән ғалим;
Тарих-беҙҙең шиғырҙарҙа, тигән шағир.(Ғ.Хөсәйенов)

2. Күнегеүгә бәйләп, Рауил Бикбаевтың биографияһына күселә.

3. Рауил Бикбаевтың биографияһы, ижады менән уҡыусыларҙы таныштырыу.

”Уралыма” шиғырын үтер алдынан Урал тураһындағы әҫәрҙәрҙе иҫкә төшөрөү өсөн, әңгәмә алып барабыҙ.

”Урал” башҡорт халыҡ йыры (тыңлайбыҙ), ”Ай, Уралым,Уралым” ҡобайыры, Салауат Юлаевтың ”Уралыма” шиғырын иҫкә төшөрәбеҙ.

4. Һүҙлек эше.

Һын-фигура, стан
Ҡын-бысаҡ, ҡылыс һалыр өсөн һауыт; ножны
Килмешәк-ситтән килеүсе(кеше); переселенец
Баҡһам-карабам
Иңдәрендә-иңбашында; на плечах

5. Р. Бикбаевтың шиғырын тулыһынса уҡытыусы уҡый.

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа-
Ҡулдарына һине алмаҡ булып
Күпме дошман ерҙә тырышҡан.
Ил баҫырға килгән һәр килмешәк
Был ҡылыстан ауған туралып.
Күпме генә һиңә ҡарабам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.
Шишмәләреңминән йөрәк аша
Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә гүйә ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр.
Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та,
Сөнки беләм:

Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

6. Икенсе тапҡыр шиғыр өлөштәргә бүлеп уҡыла һәм уның темаһын асыу өсөн әңгәмә алып барыла.

- Урал тауҙары ҡайҙа урынлашҡан? (Картанан табыла)
- Уралдың таш һынын автор нимәгә оҡшата, ниндәй образ менән сағыштыра?
- Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
  Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа-
- Ҡылыс ниндәй ҡорал ул? Ул ҡорал башҡорт халҡына ни өсөн кәрәк булған?
- Ҡылыс менән башҡорттар һуғышҡан, үҙ илен яҡлаған.
- Ил баҫырға килгән һәр килмешәк
  Был ҡылыстан ауған туралып.
- Ниндәй дошмандар Уралды алмаҡ булып тырышҡан?

-Ирек һөйгән башҡорт халҡының быуаттар буйы кисергән фажиғәләре, азатлыҡ өсөн алып барылған ихтилалдары, уларҙың ҡан һәм ут менән баҫтырылыуы, 112-се башҡорт дивизияһының ҡылыс менән ҡораллы булыуы тураһында иҫкә төшөрөү.

Ил баҫырға килгән һәр килмешәк
Был ҡылыстан ауған туралып.

- Килмешәк, тип кемдәрҙе әйтәбеҙ? Ул килмешәктәр Уралды яулап ала алғандармы?

-Телдәрен, ҡолаҡтарын ҡырҡналар ҙа, ауылдары менән яндырһалар ҙа, алыҫ илдәргә һөргәнгә ебәрһәләр ҙә, башҡорт халҡы ҡурҡмаған. Үҙ илен, Башҡортостанын, Уралын бер кемгә лә бирмәгән. Килмешәктәр, башҡорт ерен баҫып алырға килеүселәр, Уралды ала алмағандар, ҡылыстан туралғандар.

-Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.

-Был өлөштә нимә тураһында һүҙ барҙы?

-Уралдың, Башҡортостандың матурлығы, байлыҡтары тураһында әңгәмә алып барыу.

- Шишмәләреңминән йөрәк аша
  Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
  Йөрәгемә гүйә ҡаным түгел,
  Шул шишмәләр йәшәү илтәләр.
- Башҡортостанда ниндәй шишмәләр, йылғалар бар?
- Башҡортостан йылғаларын һанау. Урал тауҙарынан башланған Ағиҙел йылғаһының беҙҙә, Учалы районында, башланыуын билдәләп, картала табыу. Кама йылғаһына тиклем аҡҡан юлын күрһәтеү. Һыуһыҙ кеше йәшәй алмай, тәбиғәтте һаҡлау кәрәклеген аңлатыу.
- Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
  Киләсәгем шат та, тыныс та,
  Сөнки беләм:
  Иңдәрендә илдең
  Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

-Был юлдарҙа шағир нимә әйтергә теләй?

- Шағир үҙенең Тыуған илен ярата. Киләсәгебеҙ тыныс, күңелле, шат буласағына ышана һәм уҡыусыларҙы ла ышандыра.
- Шиғырҙан сағыштырыуҙы табыу. Төрө буйынса лирик шиғыр икәнлеген, лирик герой образын асыҡлау.

7. Шиғырҙы йомғаҡлау.

8. Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр уҡыу.(Мәҡәлдәрҙең тәүге өлөшө бирелә, икенсе өлөшө алмаштырып яҙыла. Уҡыусылар икенсе өлөшөн табалар.)

1. Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған үҫкән ил артыҡ.
2. Астан үлһәң дә, тыуған илеңде ташлама.
3. Ат туйған ерендә, ир тыуған илендә.
4. Берҙә түгел, илдә көс.
5. Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән.
6. Кәңәшле ил тарҡалмаҫ.
7. Үҙ илең-алтын бишек.

Дәресте йомғаҡлау. Рефлексия яһау.Баһалау.

Өй эше. Шиғырҙы тасуири уҡырға; Урал,уның тәбиғәтен һаҡлау тураһында һөйләргә әҙерләнеп килергә.

РАУИЛ БИКБАЕВ “САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ”

Аҡмалова Луиза Рәшит ҡыҙы,
Краснокама районы Яңы Нуғай
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙы Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән тәрәндән таныштырыу, “Салауат ҡылысы” исемле шиғырын уҡыу, анализ эшләү, йөкмәткеһен үҙләштереү, интернет селтәре ярҙамында белемдәрҙе тәрәнәйтеү, С.Юлаев тураһында алған белемдәрҙе системалаштырыу; уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү; шиғырға анализ эшләү күнекмәләрен яҡшыртыу, телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу.

Йыһазландырыу: компьютер, интернет селтәре, китаптар күргәҙмәһе, презентация, китап, Рауил Бикбаев портреты.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

- Дәрестең темаһын, маҡсатын әйтеү.

II. Шиғриәт минуты.

Шағирҙарҙы ситтән килтермәйҙәр,
Моңо менән тулышып халҡының,
Ер ҡуйынынан сыҡҡан шишмә кеүек,
Ил күңеленән сыға талпынып.

- Был шиғыр юлдары нимә тураһында?
- Шиғриәт минуттарын беҙ ҡасан үткәрәбеҙ?
- Әйҙәгеҙ әле, уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын һанап китәйек.
- Был һүҙҙәрҙе шулар араһынан кем әйтте икән? «Халыҡ хәтерендә бер генә шиғыры ҡалһа ла, ул шағир бәхетле»

2. Маҡсатҡа килеү.

- Шулай итеп, беҙ бөгөн кемдең ижады менән танышасаҡбыҙ? Бөгөнгө дәрестә беҙ Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән тәрәндән танышырбыҙ, уның „Салауат ҡылысы" исемле шиғырын уҡырбыҙ, йөкмәткеһен үҙләштерербеҙ, Салауат Юлаев тураһында һөйләшеүҙе дауам итербеҙ.

III. Яңы тема өҫтөндә эш.

1. Рауил Бикбаевтың биографияһы менән танышыу. Әңгәмә барышында ошондай һорауҙарға яуап биреү.

- Рауил Бикбаев нисәнсе йылда һәм ҡайҙа тыуған?
- Ниндәй уҡыу йортонда белем алған?
- Кем ул?
- Рауил Бикбаев ниндәй премияларға лайыҡ булған?
- Хәҙерге ваҡытта кем булараҡ билдәле?
- Яҙған китаптары?

3. Шиғырҙың исемен прогнозлау.

- - Кем ул С.Юлаев? - Ул ҡасан һәм ҡайҙа тыуған? - Уның атаһы кем? - Атаһы уны нисек тәрбиәләгән? - Пугачевҡа ни өсөн ҡушылған? - Уны ҡасан һәм ҡайҙа тоталар? - С.Юлаев ҡайҙа һәм ҡасан үлә? - Уның тураһында ниндәй әҫәрҙәр ижад ителгән? (Күргәҙмә) - Уның исемен мәңгеләштерелгән ниндәй урындар бар?
- - Нимә ул ҡылыс?
  - Уны ҡайҙарҙа ҡулланалар?
  - Һеҙҙең ҡулда ҡылыс булһа, ни эшләр инегеҙ?

(Ҡылыс менән эйәр һүрәтен ҡарау).

4. Интернетҡа инеү һәм ҡылыс тураһында мәғлүмәт табыу. Салауат ҡылысы тураһындағы мәғлүмәт менән танышыу.

IV. Ял минуты. (Ҡурай моңон тыңлау).

V. Шиғыр өҫтөндә эш.

1. Электрон китаптан шиғырҙы тыңлау.
2. Шиғырҙы үҙ аллы уҡыу.
3. Шиғырҙы дүртьюллап уҡыу.
4. Шиғырға анализ яһау

* Лирик тонын билдәләү .

- "Салауат ҡылысы" ниндәй кәйеф менән яҙылған?

* Шиғырҙың эске структураһы
* Тел саралары
* Тәрбиәүи маҡсатты хәл итеү.

VI. Үтелгәндәрҙе нығытыу.

- Бәйләнешле текст килеп сыҡһын өсөн, һөйләмдәрҙе урынына ҡуйырға һәм дауам итеп яҙырға. 1. Салауат көс, ғәйрәт эйәһе генә түгел, заманына күрә уҡымышлы һәм талантлы кеше лә булған. 2. Йәберләнгән туған халҡының ауыр яҙмышы Салауатта иҙеүселәргә ҡарата ҡаты асыу һәм нәфрәт тойғолары уяткан. 3. Салауат Юлаев 1754 йылда Ырымбур губернаһы Өфө провинцияһы Шайтан-Көҙәй волосының Тәкәй ауылында хәҙерге Башҡортостандың Салауат районында тыуған. 4. Юлай Аҙналин улында батырлыҡ, ҡыйыулыҡ сифаттары тәрбиәләргә тырышҡан. 5. Салауат үҙе лә йәштән үк батыр булған, һыбай йөрөргә,ҡорал менән оҫта эш итергә өйрәнгән. - Салауат Юлаев һәр ваҡыт беҙҙең арала. Ул быуаттар аша әйләнеп ҡайтты.

* Тест үткәреү.

1. Салауат Юлаев йәшәгән йылдар
а) 1754 – 1800
б) 1700 – 1854
2. Салауат Юлаевтың атаһы
а) Емельян Пугачев
б) Юлай Аҙналин

3. Салауатты ҡайҙа каторгаға ебәрәләр?
а) Рогервик ҡәлғәһенә
б) Мәскәү төрмәһенә
4. „Салауат Юлаев” романын кем яҙған?
а) Мостай Кәрим
б) Степан Злобин
5. Салауаттың яуҙашы
а) Александр Матросов
б) Наполеон
в) Емельян Пугачев
Эштәрҙе тикшереү һәм баһалау.
XI. Йомғаҡлау һәм өй эше биреү.
- Был дәрестә С.Юлаев тураһында ниндәй яңы мәғлүмәттәр белдегеҙ?
- Кем ул Рауил Бикбаев?

Өй эше: 1.шиғырҙан өҙөк ятларға.
2. Шиғырҙың йөкмәткеһе буйынса һүрәт төшөрөргә.
3. Синквейн төҙөп ҡарарға.

РАУИЛ БИКБАЕВ “ТУҒАН ТЕЛ”

Миркамалова Альбина Рәүил ҡыҙы,
Николо-Березовка урта дөйөм белембиреү мәктәбе

Маҡсат: Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижад юлы менән таныштырыу; шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү; һығымта яһау; уҡыусыларға туған теленә ҡарата һөйөү уятыу; үҙ телеңдә һөйләшә белергә һәм башҡа телде хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу; һөйләү һәм яҙма телмәрҙе үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, китаптары күргәҙмәһе, тел тураһында шиғырҙар, мәҡәлдәр яҙылған плакаттар, мультимедиа проекторы, магнитофон.

1. Ойоштороу моменты.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек.

-Һаумы, ҡояш,
-Һаумы, зәңгәр һауа,
-Һаумыһығыҙ, уҡытыусым,
-Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!

- Балалар, беҙ бөгөн дәрестә яңы шағир һәм уның шиғыры менән танышырбыҙ, ә кем икәнен беҙ һуңыраҡ белербеҙ.

1. Артикуляцион күнегеүҙәр.
- өндәрҙе ҡабатлау: ә, ө, ҡ, ғ, ҫ, ҙ, һ, ү, ң
-һүҙҙәр уйлап әйтеү
- телтөҙәткес:
Тә-тә-тә - ултырабыҙ дәрестә,
Са-са-са- һөйләшәбеҙ башҡортса,
Ый-ый-ый- уҡыусы шиғыр уҡый
Ыш-ыш-ыш- беҙ шундай тырыш.
-уҡытыусы уҡый;
- эстән уҡыу;
- хор менән;
-тәржемә итеү,әңгәмәләшеү;
-предметты, кешене белдергән һүҙҙәрҙе табығыҙ;
- предметтың билдәһен белдергән һүҙҙәрҙе табығыҙ;
- предметтың эшен, хәрәкәтен белдергән һүҙҙәрҙе табығыҙ.

2. Яңы тема.

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә кроссворд сисергә кәрәк. Кроссвордты сискәндә, үткән дәрестәр темаларын һәм Башҡортостан тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫләгеҙ.

1. Башҡортостандың тәүге халыҡ яҙыусыһы.
2. Башҡортостандағы иң оҙон йылға.
3. З. Биишеваның тыуған районы
4. Был ырыуҙың ике батыры булған- Урал батыр һәм Арал батыр.
5. Башҡорт халҡының милли батыры.
6. Был ҡала элек Башҡортостан республикаһының баш ҡалаһы булған.
7. Тыуған ил.



- Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев, уның тормош юлы һәм “Туған тел ”шиғыры менән танышырбыҙ.

3. Дәфтәрҙә эш. (число, тема).

4. Шағирҙың тормош юлы менән танышыу.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Ул филология фәндәре докторы, профессор. 1992 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. 2013 йылдың 12 декабрендә уға 75 йәш тула.

- Слайд-шоу ҡарау һәм китаптары күргәҙмәһенә байҡау яһау.

- Ә һеҙ Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын беләһегеҙме? (иҫкә төшөрөү, портреттарын күрһәтеү)

М. Ғафури
Р. Нигмәти
М. Кәрим
Р. Ғарипов
Т. Йосопов
Р. Бикбаев
А. Филлипов
Ҡ. Аралбай
Ә. Атнабаев
С. Ҡудаш
М. Кәримов.
А. Игебаев
Н. Нәжми

5. Ял итеү минуты.

6. Шиғыр менән танышыу.

• һүҙлек эше (слайд) күмәкләп
аҫыл
теҙҙе
дан
һөйөклө
йәшәй алмай1. уҡыусылар тәржемәһен һүҙлектәрҙән табалар
2. һүҙлектәргә яҙыу
3.һөйләмдәр төҙөү

8. Шиғырҙы уҡыусы яттан һөйләй. (140-сы бит)

* эстән уҡыу;
* сылбырлап уҡыу, тәржемә итеү;
* һорауҙарға яуап биреү:

- Балалар ысынлап сәйәхәт итәләрме әллә уй менән генә?
- Р. Бикбаев ни өсөн тыуған илебеҙ нурлана ти?
- Автор ни өсөн үҙенең туған телендә аҫыл, матур һүҙҙәр бар тип әйтә?
- Балалар, улар ниндәй дәрестә ултыралар?
- Р. Бикбаев шиғырҙы нимәгә бағышлаған, был шиғыр аша нимә әйтергә теләгән?

- Үҙенең туған теленең матурлығын ниндәй һүҙҙәр менән еткерә?

Слайд: ТЫУҒАН ИЛ, ТУҒАН ТЕЛ, ӘСӘЙ, ӨФӨ һүҙҙәрен автор ни өсөн аҫыл матур һүҙҙәр тип әйтә?

- Донъяла һәр кемгә иң ҡәҙерлеһе үҙ туған теле. Әсә телендә кеше донъяны, донъя матурлығын аңлай башлай.

• шиғырҙы эхо менән уҡыу;
• ике бала матур итеп уҡып күрһәтә.

Плакат: «Тел ауылда ғына һаҡлана, ҡалала бөтә. Ә тел бөткәс, милләт бөтөүгә- бер аҙым.» Ә. Әминев.

- Уҡыусылар, был әйтемде нисек аңлайһығыҙ?

СЛАЙД: 21 февраль –Халыҡ-ара туған тел көнө.

- Ысынлап та, тел - ул аралашыу ҡоралы ғына түгел, ә кешенең күңел байлығын, аҡылын, рухи донъяһын сағылдырыусы ла. Үҙ илендә үҙ теленде белеп йәшәү – һәр беребеҙҙең изге бурысы!

- Туған телебеҙҙе онотмайыҡ, рус мәктәбендә уҡыһағыҙ ҙа башҡортса туған телдә һөйләшергә тырышығыҙ!

9.Йомғаҡлау. Баһалау.

- Ниндәй шағир менән таныштыҡ, уның ниндәй шиғырын уҡыныҡ?

- «Теле барҙың, иле бар» тигәнде нисек аңлайһығыҙ?

- Үҙ туған телендә һөйләшкән, тарихын белгән, моңон тойған халыҡ мәңге йәшәйәсәк. Халыҡ булһа, уның тыуған ере, Тыуған иле лә буласаҡ.

-Бөгөнгө дәресебеҙҙе «Башҡорт теле» йырынан ҡушымтаһы менән бөтөрәйек.

Өй эше. Шиғырҙы ятлап килергә.

ШАҒИР ҺҮҘЕ – ШАҒИР НАМЫҪЫ

Сәғитова Земфира Әфнән ҡыҙы,
Краснокама районы Ҡуян
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Әҙәби кисәнең барышы:

(Кисә барышында экранда Р. Бикбаев тормошонан слайдтар күрһәтелеп бара).

Талғын көй яңғырай. Сәхнәгә сиратлап берешәр малайҙар һәм ҡыҙҙар сыға. Улар бер-береһе менән әңгәмәләшәләр.

-Кеше тыуҙы, һөйөнсө!
-Тыуыуҙары ни өсөн?
-Аяғына баҫып илдән
Алыр өсөн һөйөнсө!
-Ҡоштар ҡайтты, һөйөнсө!
-Ҡайттылар һуң ни өсөн?
-Тыуған ерҙе, һөйөнсө, тип,
Ҡыуандырыр көй өсөн.
-Һөйөнсө! Бешкән иген!
-Һөйөнсө! Төшкән килен!
-Һөйөнсө! Яулаған ирек
Алыҫ ҡитғаның иле!

Талғын көй көсләрәк яңғырай.

Алып барыусылар сыға.

1-се алып барыусы:

-Һөйөнсө! 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы Бикбаев ғаиләһендә малай тыуа. Уға Рауил исеме ҡушалар. *(презентация)*

Эҙләмәйем мөғжизәләр
Мин көндәрем эсенән.
Башланһындар улар бары
Хәләл аштан,
Тоғро эштән,
Ҡояштан,
Һөйөнсөнән.

2-се алып барыусы:

- Рауил Бикбаевтың атаһы 1945 йылда үлеп киткәс, ул күрше ауылға туғандарына күсеп китә. 1953 йылда ошо ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, Аҡ-Булак педагогик училещеһына уҡырға инә. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетында уҡый башлай.

1-се алып барыусы:

-Рауил Бикбаевтың ныҡлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан баҫылып сыға.

1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый.

1-се алып барыусы:

1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға.

1-се уҡыусы.

Дала офоҡтары
Умырзаялар уяна,
Сайҡалып ҡына елгә.
Күктә – һабан турғайҙары,
Киләләр ҡапыл телгә.

Йондоҙҙарын сүпләй-сүпләй,
Төн китеп барҙы ары.
Ҡайһылай киңәйеп китте
Даламдың офоҡтары.

Тулҡынланып аға кеүек
Умырзаялы ялан.
Уның зәңгәр ситтәренә
Ҡараһаң, күҙең тала.

Ниндәй киңлек! Һайрай турғай
Шул киңлеккә шатланып.
Бында иркен тын алыу,
Еңелерәк атлауы.

Барған һайын сәхрәләрҙең
Яңы биҙәген асам.
Ә офоҡ, шаян ҡыҙ һымаҡ,
Үҙенә ымлап ҡаса.

Умырзаялы ҡырҙарға
Саҡыра мине тағы,
Бәүелтеп зәңгәр томанын,
Даламдың офоҡтары.

1-се алып барыусы:

Рауил Бикбаевтың 1967 йылда “Ҡош юлы” тигән икенсе китабы баҫылып сыға.

2-се алып барыусы:

1969 йылда шағирҙың “Автобиография” тигән китабы донъя күрә. Рауил Бикбаев “Автобиография” китабында шағир шәхесенең һәм туған халҡының күңел биографияһын һүрәтләүҙе маҡсат итә.

2-се уҡыусы:

Һаумыһығыҙ!
-Һаумыһығыҙ!-тип бүрек сөйҙөм
Тауҙарыма.
-Аһа-һа-һай!!!
Сәләмемде алды тауҙар:
-Һаубыҙ, һау, һау!
-Һау булығыҙ!-тип баш эйҙем
Тауҙарыма.
-Аһа-һа-һа!!!
Ҡул болғаны йәшел урман:
-Һау бул, һау, һау!
Килгән һайын һаулашабыҙ
Яңғыратып донъяларын.
Мәңге былай йөрөй алмам
Урмандарҙа донъя ярып.
Башҡа егет сәләм һалыр:
-Һаумыһығыҙ!
Аһа-һа-һай!!!
Тауҙар мәңге яуап бирер:
-Һаубыҙ, һау, һау!
Тауҙар шулай күпме көлгән,
Кеше көлгән.
Күпме сәләм бында һеңгән
Минең телдә.
Яңғыраһын был һаулашыу!
-Һаумыһығыҙ!
Аһа-һа-һай!!!
Ул өн тынһа,
Ҡаяларың тетрәр төҫлө,
Уралҡайым,
Һинең иңдә.

1-се алып барыусы:

Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. Ул йыш ҡына уҡыусының үҙенә, шиғриәт һөйөүсегә, уның зиһененә, намыҫына туранан-тура мөрәжәғәт рәүешендә асыҡтан-асыҡ һөйләшергә ярата.

3-сө уҡыусы.

“Халҡыма хат” шиғырынан өҙөк.

2-се алып барыусы:

Халыҡ ижадына хас булған поэтик диалог алымын ҡулланып, ул әйтәһе һүҙен үтемлерәк итеп еткереүгә өлгәшә.

Ваҡыт менән һөйләшеү *(2 уҡыусы диалог формаһында шиғыр уҡый.)*

-Эй һин, ваҡыт, аяу белмә ваҡыт,
Йән өрәһең, өрөп һүндерәһең,
Йәлләмәйһең ниндәй ҡарашты…
Табипмы һин әллә ҡатилмы һин,
Врачмы һин әлә палачмы?

-Мин врач та, мин палач та түгел,
Үҙең менән, кешем, бутама.
Яртың табип, яртың ҡатил итеп,
Һин үҙеңде ярҙың урталай.

-Бер ҡылыңда, ваҡыт, туй талпына,
Йыназа көйөн уйнай бер ҡылың.
Бер ҡулыңда сабый тирбәтәһең,
Табутҡа сәй ҡаға бер ҡулың.

-Ҡайһы саҡта ике ҡулымды ла
Үлем иңрәй, зиһенем тарҡала.
Ике ҡулым табутҡа сәй ҡаға,
Барыһы, кешем, һинең арҡала.

-Еткералмай һине өҙгөләнәм,
Үткәралмай китә иҫтәрем.
Ысҡынғандай бәйҙән берсә сабып,
Шып туҡтайһың берсә, тиҫкәре.

-Ваҡыт етмәй, ваҡыт үтмәй тиеп,
Зарланыуың, кешем, тик әрәм.
Берегеҙҙе лә әле юғалтҡан юҡ-
Ер йөҙөнән тигеҙ үткәрәм.

-Ҡырыҫ ваҡыт! Сәңгәлдәгем булдым,
Йөҙөк ҡашың, ҡәбер ташың булдым,
Ярһып әйткән һөйөү һүҙең булдым,
Эсеп сатнап барған башың булдым.

-Хәлең хәл өҫтөндә ҡалғанда ла
Аңла шуны, кешем, аңла шуны:
Иң ҡыйыны, бел һин-үҙең булыу,
Иң яманы, бел һин – алмашыныу.

2-се алып барыусы:

Рауил Бикбаев – заман ағышына, кешеләр яҙмышына һиҙгер ҡолаҡ һалыр шағир. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған, хәүефләндергән мәсьәләләр, төрлө һорауҙар асыҡтан-асыҡ һәм бик үткер итеп ҡуйыла. Ошо йәһәттән Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” тигән поэмаһы бигерәк тә көслө тәьҫирле әҫәр. Был поэма бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙар, моғайын.

6-сы уҡыусы.

Ҡарағайҙар,
Солоҡ ҡына тотор ҡарағайҙар!
Улар менән бергә ерегеп үҫкән
Халыҡтың да
Ай-вайына ҡарамайҙар,
Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар,
Әйтерһең дә, ҡырағайҙар!
План тыуҙырыусы
Йомро башлы ағайҙар,
Йәнтәслим итеп,
Шул планды тултырыусы
Ғәйрәтле ағайҙар,
Урмансылар ғына түгел,
Һәр колхозы,
Һәр совхозы,
Һәр икмәге,
Һәр тиңтәге-
Төрлө яҡтан
Йолҡҡолайҙар, талайҙар,
Әйтерһең дә, ҡырағайҙар –

Ҡыра ағайҙар.
Ҡырағай ҙа түгел ағайҙар-
Өҫтәгеләр план давайлай.
7-се, 8-се, 9-сы уҡыусы (диалог формаһында)
Ҡариҙел:
-Һаумы, Ағиҙелкәй!
Алыҫтарҙан
Һағыныуым һиңә әйҙәне.
Ҡуйыныма алдым шишмәләрҙе,
Йор Йүрүҙән, йәмле Әйҙәрҙе.
Ҡара тиһәләр ҙә, күңелем саф,
Һыуым таҙа, йөҙөм аҡ ине.
Һыуҙарыма хәҙер ни аҡмай ҙа,
Йөҙҙәремә хәҙер ни яҡмайҙар,
Киләлманым һиңә пак көйө.
Дим:
Күпме бысраҡ төшә аҙбарҙарҙан,
Күпме ағыу аға баҫыуҙан.
Шишмәләрем күмелә.
Туғайҙарым һөрөлә.
Таңғы төштәремдә баҫлығам.
Барыһынан ҡотолормон, тинем.
Далаларға йәйрәп ташҡанда.
Бер буялғас бысраҡ, еңел түгел
Өҫтәреңдән алып ташларға.

Ҡариҙел менән Дим:
Һыйынырға һиңә үҙәнеңдән
Тиҙерәк урын бирсе, Ағиҙел!
Саф ҡуйыныңда таплы йөҙөбөҙҙө
Сайҡай ғына күрсе, Ағиҙел.

Ағиҙел:
-Ҡариҙелем, Димем!
Тау-таш ярып,
Һеҙҙе күргә тип талпынам.
Тик бысранған тулҡындарым менән
Ҡағылырға һеҙгә тартынам…
Барыбыҙҙың алҡымынан алған
Бәләләрҙән нисек сығайым?
Яңынан таҙарынып ағыр өсөн
Ниндәй даръяларға сумайым?..

2-се алып барыусы:

Рауил Бикбаев утыҙ йылға яҡын Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

1996 йылда Рауил Бикбаев филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Рауил Бикбаев Башҡортостан яҙыусылар союзы рәйесе итеп һайлана. Башҡортостан әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә.

1-се алып барыусы:

Рауил Бикбаев республикабыҙҙың йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша, матбуғатта көнүҙәк мәсьәләләр буйынса публицистик яҙмалар, әҙәбиәт, шиғриәт хаҡында мәҡәләләр менән йыш сығыш яһай. Уның шиғыр китаптары, ғилми хеҙмәттәре Мәскәүҙә рус телендә лә бер нисә тапҡыр баҫылып сыға.

2-се алып барыусы:

1997 йылда әҙәби-фәнни эшмәкәрлегенең тос емеше – “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” тигән ижади портреттар, әҙәби мәҡәләләр, сығыштар йыйынтығы донъя күрҙе.

1-се алып барыусы:

Миңә барлыҡ ижад юлымда шиғриәт менән фәнни эште бергә алып барырға тура килде,- тип яҙа Р.Бикбаев үҙе.-Сөнки мин ғилем донъяһына осраҡлы ғына килеп юлыҡтым, тип уйламайым, мин был ғәйәт оло һәм арбаусы мөхиткә асыҡ маҡсаттар ҡуйып, был хеҙмәттең ни тиклем яуаплы һәм ауыр икәнен аңлап килеп индем һәм унда ғүмерлеккә ҡалдым.

Рауил Бикбаев – ысын мәғәнәһендә ҙур шәхес, атаҡлы кеше.

10-сы уҡыусы

Бер һүҙ беләм. Аҙашҡанда юлдарымды
Яҡтыртамын шул һүҙ менән.
Шул һүҙ менән, ауырҙы ла еңел күреп,
Мин тауҙарға елеп менәм.

Бер һүҙ беләм. Олатайҙар васыяты
Ошо һүҙгә һыйған һымаҡ.
Быуаттарҙың яҡты нурын, яҡшы йырын

Ул үҙенә йыйған һымаҡ.

Башҡа һүҙҙәр нур алырға йыйылғандар
Ошо һүҙҙең тирәһенә.
Оҡшатамын һәр саҡ уны телемдәге
Бар һүҙҙәрҙең йөрәгенә.

Нисәмә ҡат асылһа ла, атылһа ла,
Һатылмаған һис бер көскә.
Яу ҡупҡанда сафтар буйлап, юлбашсылай,
Остан оҫка
Был һүҙ оҫкан-
Башҡортостан!

Р. БИКБАЕВ ИЖАДЫ БУЙЫНСА БРЕЙН-РИНГ

Мәхәмәтдинова Рина Тәлғәт ҡыҙы,
Краснокама районы Шушнур
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Р. Бикбаев ижады буйынса алған белемдәрҙе системаға килтереү; уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү, эҙләнеү күнекмәләрен үҫтереү; шағирҙың ижадына хөрмәт тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: Р.Бикбаев китаптары күргәҙмәһе, плакат, стена газетаһы, презентациялар.
Сара барышы:
- Уҡыусылар сығышы.
“Башҡортостан бында башлана” шиғырын яттан уҡыу (Ҡурай моңо яңғырай)

1-се уҡыусы:
Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты,
- Башҡортостан бында башлана!
2- се уҡыусы:
- Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайындай:
- Башҡортостан бында башлана!
3-сө уҡыусы:
Башҡортостан мине ҡаршы ала,
Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап,
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,
Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.
4- се уҡыусы:
- Республикам, бында башландың!- тип
Әйткәнемдә ергә ҡапланып,
Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын:
- Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,
Юшатырҙан Әйгә ҡәҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңелендә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарышы, беләм, ҡәҙерле!
5-се уҡыусы: - Ҡайтҡан һайын һыйынаһың миңә,
Берсә көлөп, берсә уйланып.
Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым!
6- сы уҡыусы:
- Ә мин мәңге бында, Уралымда,
Тик булмышым инде өр-яңы:
Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.
7-се уҡыусы:
Моң-шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙең тиң әйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп.
8-се уҡыусы: Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!

Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек- Башҡортостан кеүек-
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

Алып барыусы: - Хәйерле көн, уҡыусылар! Беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевҡа етмеш биш йәш тулыу уңайы менән уҙғарылған кисәгә йыйылдыҡ.

- Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады бик бай һәм күп ҡырлы.

Бөгөн беҙ ошо оло шәхестең ижадына байҡау яһап, белемдәребеҙҙе әүҙемләштерербеҙ. Шулай уҡ шағир ижадын иң яҡшы белеүселәрҙе билдәләрбеҙ. Уйынды үткәрер өсөн, тәүҙә командаларға бүленергә кәрәк. Ә бының өсөн һеҙ һорауҙарға яуаптар бирерһегеҙ. *(Дөрөҫ яуаптар өсөн тәңкәләр бирелә)*

- Башҡортостанда нисә халыҡ шағиры бар?
- Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем иң беренсе кемгә бирелгән?
- Р. Бикбаев нисәнсе йылда тыуған?
- Ырымбур өлкәһенән тағы ниндәй яҙыусылар сыҡҡан?
- Карауанһарай ҡайһы ҡалала урынлашҡан?
- Уны кемдәр төҙөгән?
- Яҙыусылар союзын әлеге көндә кем етәкләй?
- Тәүге башҡорт романының авторы кем?
- Башҡорт телендә сыҡҡан әҙәби журналды атағыҙ.
- Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен йөрөткән рус телендә ижад итеүсе шағирҙы атағыҙ.

Алып барыусы:

- Бына беҙҙең командалар әҙер. Һеҙҙе өҫтәлдәр артында урын алыуығыҙҙы һорайым.

Алып барыусы: - Уйынды башлайыҡ. Беренсе турҙың шарты – командаларға бер минут эсендә Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына арналған һорауҙарға яуап бирергә кәрәк. Йәгеҙ әле, ҡайһы команда зирәгерәк икән? Һеҙҙең яуаптарығыҙҙы жюри ағзалары баһалар.

Һорауҙар:

- Р. Бикбаев ниндәй уҡыу йорттарын тамамлай?
- Р. Бикбаев хеҙмәт юлын ҡайҙа башлай?
- Ул ниндәй темаға кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай?
- Тәүге шиғырҙарын ҡасан яҙа башлай?
- Р. Бикбаевтың тәүге шиғырҙар йыйынтығы нисек атала?
- Р. Бикбаевтың Мәскәүҙә рус телендә сыҡҡан китабы нисек атала?
- Филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә Р. Бикбаев нисәнсе йылда лайыҡ була?
- Р. Бикбаевҡа ниндәй мактаулы исемдәр бирелгән?
- Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп Р. Бикбаев нисәнсе йылда һайлана?
- Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән мактаулы исем уға нисәнсе йылда бирелә?
- Ниндәй поэмала автор экология мәсьәләләрен күтәрә?
- Был юлдар ҡайһы шиғырҙан?

Салауат нисә йәшендә? –
Ил ҡайғыһы уның башында.
Әйләнеп тә ҡайтты ҡылысы
Ике йөҙ ҙә нисә йәшендә…

Алып барыусы:

- Афарин, уҡыусылар! Уйыныбыҙҙың икенсе турын башлайыҡ. Һеҙгә шиғыр юлдарында төшөп ҡалған һүҙҙәрҙе ҡуйырға кәрәк буласаҡ.

1- се командаға:

1) Әлгәрмәҫлек ташып бал ҡорттары-
Йүкәләрҙән һығылып бал тама!
Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда,
… барыр нисек балтаға?!
2) Эй, еркәйем! … үткән халҡым
Мәңгелеккә төйәк тапҡан ер.
Тынғы белмәҫ сиктәрендә һаҡлап,
Ир-егеттәр яуҙар сапҡан ер.

2-се командаға:

1) Ҡулға алдым Салауаттың … ,
Тутыҡмаған уның ҡоросо.
Ялтлаған ул күпме йәшен булып,
Даулап илдең бәхет-ырыҫын.
2) Йырҙар яҙам. … түгел наҙан.
Барып етер, тимен хаттарым.
Барып етер шиғырым-хатымдағы
Өмөт-хыялдарым, аһтарым.

Алып барыусы:

- Хәҙер өсөнсө тур - Р. Бикбаевҡа арналған кроссвордты сисергә кәрәк булыр. Йәгеҙ әле,ҡайһы команда отҡороҡаҡ икән?

Кроссворд:

1. Р. Бикбаев тыуған өлкә.

2. Ырымбур өлкәһендә тыуған башҡорт яҙыусыһы.
3. Р. Бикбаев тыуған район (Ырымбур өлкәһе)
4. Р. Бикбаевтың тыуған ауылының исеме.
5. Р. Бикбаевтың шиғыры.
6. Был юлдар кем тураһында?
Ил нәфрәте уны утта ҡойған,
Ил йәштәре уны һуғарған.
Ҡарарға ине батыр күҙҙәренә,
Ҡылысын ул ҡындан һурғанда.
7. Р. Бикбаевтың атаһының исеме.
Алып барыусы:
- Бына дүртенсе турға ла килеп еттек. Был турҙың биреме – Р. Бикбаев шиғырҙарының идеяһын, темаһын асыҡлау, һүрәтләү саралары табыу. Беренсе командаға – “Башҡортостан бында башлана”, икенсе командаға – “Салауат нисә йәшендә” шиғыры.
Командалар эшләгәндә инсценировкә ҡарау: Р. Бикбаев “Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе”
Алып барыусы:
- Хөрмәтле уҡыусылар, ошоноң менән беҙҙең уйныбыҙ ахырына яҡынлашты. Еңеүсе команданы билдәләү өсөн һүҙ жюри ағзаларына бирелә. *Сара һуңында Башҡортостан гимны башҡарыла.*

РАУИЛ БИКБАЕВ «ХАЛҠЫМА ХАТ»

Баймырҙина Ләлә Шәйхислам ҡыҙы,
И. Тасимов исемендәге Ақъяр тау колледжы

Дәрестең маҡсаты: шағирҙың тормош юлы, ижады менән таныштырыу; шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу; үҙ аллы эҙләнеү күнекмәләрен, һөйләү телмәрен үҫтереү; телде ҡәҙерләүсе, уның киләсәген ҡайғыртыусы, аңлы, белемле, илен, телен, халҡын һаҡларҙай яңы йәш быуынды тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, китаптар күргәҙмәһе, тел тураһындағы һүҙҙәр яҙылған слайдтар, компьютер, мультимедиа презентацияһы, видеоролик.
Дәрестең девизы: Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған- мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!
I. Ойоштороу мәле.
Дәрестең темаһын һәм маҡсатын асыҡлау. Студенттар дәрестең девизын уҡып, мәғәнәһен аңлата.
II. Яңы тема аңлатыу.
Гимн уйнай (2 минут баҫып тыңлайҙар)

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны

Рауил Бикбаев,
Рәшит Шәкүр һүҙҙәре
Фәрит Иҙрисов музыкаһы

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы

Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Башҡортостан, һин хөрмәтле
данлы ил,
Еңеү яулап алға бараһың.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.

Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ

Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан

- Һеҙ бөгөн гимнды һүҙҙәре менән тыңланығыҙ. Кемдәр яҙҙы уның һүҙҙәрен?
- Рауил Бикбаев һәм Рәшит Шәкүр.
- Бөгөн дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты, сәйәсмән Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышабыҙ.
(Экранда Р.Бикбаевтың портреты һәм һүҙҙәре)
“Миңә барлыҡ ижад юлымда шиғриәт менән фәнни эште бергә алып барырға тура килде. Мин шиғриәт ялҡынында һәм ғилем утының уртаһында йәшәгән һымаҡ булһам да, асылда, был ут минең йөрәгемдә, зиһенемдә һәр саҡ бергә янды.”
Студенттар сығышы: (экранда терәк – схема һәм слайдтар)
-Уҡытыусы һүҙе:

- Рауил Бикбаев - заманалар елен, үҙгәрештәр дауылын алдан һиҙгән аҡыл эйәһе. Ул тәүгеләрҙән булып йәмғиәтебеҙҙе тетрәндерәсәк һәм зиһенде быҒаулаясаҡ ваҡиҒаларҙы алдан күрә, алдан иҫкәртә, дөрөҫлөккә-хаҡлыҡҡа ҡурҡмайынса әйҙәй. Заманының пульсын тойоп, йөрәк тибешен алдан һиҙә. Ысын шағир өсөн үҙ милләтеңде яратыу,уның өсөн яныу, киләсәге тип йәнеңде биреү генә әҙ әле, ә башҡа йөрәктәр ҙә үҙҙәрендә шул мөхәббәтте йә шул әрнеүҙе тойорлоҡ итеп күңелдәген сыҒара, милләттең һәр вәкиленә еткерә белеү тағы ла ҡатмарлыраҡ. Шунда таланты, даланы, хатта ки мөкәддәс анты Шағирҙың. Бикбайҙы уҡыған һайын бәҒерең өҙөлөп киткәнде, йөрәгең дөп- дөп типкәнде тояһың.

Шаҡый белә йөрәк ҡапҡаларын шағир ҡәләме. Үҙ мәлендә, кәрәк сағында шаҡый, ойомайһығыҙмы әле, тип, нескә итеп, хәстәрлекле итеп туҡылдата, сараһыҙлыҡ икән, ҡапҡаларҙы емереҙәй булып дөмбөрләтә. Хоҡуғы бар уның, Хоҙай уға шундай бурыс- яҙмыш яҙҙырған.

“Халҡыма хат”, ”Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ”, ”Баҙар балтаһы”, ”Система”, ”Хазина”ларҙы йәмғиәт, милләте алдында яуаплы шәхес кенә ижад итә ала.

Видеоролик ҡарау (шағир телмәре). Китаптар күргәҙмәһенә байҡау.

- Тыуған ил, туған тел тураһында ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?(Яуаптар)

- Бөгөн беҙ дәрестә Р.Бикбаевтың “Халҡыма хат” әҫәре менән яҡындан танышабыҙ. Башҡорт әҙәбиәтендә бер матур традиция йәшәп килә. Ул- замандарҙың, йәмғиәт тормошоноң ауыр йәки хәл иткеһеҙ саҡтарында халыҡҡа шиғри хат менән мөрәжәғәт итеү йолаһы.

- Һеҙ хат стилендә яҙылған ниндәй әҫәрҙәрҙе беләһегеҙ? (Яуаптар.)

- Ә хәҙер Р.Бикбаевҡа яҙылған хаттың йөкмәткеһен уҡыйыҡ. (Хат экранда)

- «Халҡыма хат” әҫәренең яҙылыу тарихы тураһында сығыш тыңлау.

- Шиғырҙың йөкмәткеһен уҡыу. (Уҡытыусы)

III. Шиғырға лингвистик анализ. (поэтик әҫәрҙе анализлау схемаһы буйынса).

1. Әҫәрҙең жанры: Хат стилендә яҙылған шиғыр.

2. Тема: Телде һаҡлау, телде үҫтереү.

3. Идея: Телде тоҙаҡларлыҡ ҒәмһеҙлектәнУян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

4. Әҫәрҙең эмоциональ тоны. Авторҙы борсоған күп һорауҙар ҡуйыла. Ләкин йөрәге аша үткәреп, иң борсоғаны - туған тел яҙмышы-үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге. Беҙҙе лә битараф булмаҫҡа, уйлана белергә, был проблемаларҙы хәл итергә саҡыра.

5. Шиғырҙа ил – халыҡ-тел яҙмышы проблемалары яҡтыртыла.Был бәйләнештәрҙе күрһәтеү, идеяны асыу өсөн автор ниндәй шиғри саралар

ҡулланған? (һүҙҙәрҙең төрлөсә формалашыуы, һүрәтләү һәм морфологик саралар, фигуралар): *сағыштырыу:* йондоҙ кеүек йым-йым нурлана; *метафора:* йөрәк һағышы, утлы дауыл, сабый телен сапҡан балта; *эпитет:* сал тарих, хаҡ оран, баш йорт, аҫыл ирҙәр, аҫыл ерҙәр; синоним: халыҡ, милләт, башҡорттар; бәндә, кеше; сабый, бала; золом, йәбер; *антоним:* сабый-аҡһаҡал, бар-юҡ, үлә-йәшәй,яҡшы-яман; ғорурланам-хурланам; *йәнләндереү:* тарих уйлап үҙе һиҫкәнер! *риторик һорау, риторик өндәү һөйләмдәр:*

Йортобоҙҙа күпме ҡуштан-түрә

Хурламаны туған милләтен?

Тупланығыҙ,йәштәр,изге сафҡа,

Иртәгәһен илдең һаҡларлыҡ!

6. Шиғырҙа автор ниндәй морфологик саралар ҡулланған?(абстракт исемдәр, ҡылымдарҙың бойороҡ һөйкәлеше формаһы, өндәш һүҙҙәр)

7. Текстың төҙөлөшө ниндәй алымдарға нигеҙләнгән?(ҡапма-ҡаршы ҡуйыу, сағыштырыу).

8. Шиғырҙың башы һәм аҙағы бер-береһе менән ниндәй мәнәсәбәттә? (әйләнмә композиция).

Тимәк, был шиғыр халыҡсан аҡыллылығы, тос фекерҙәре, тапҡыр һүҙҙәре менән көслө әҫәр.

IV. Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» шиғырында иң актуаль проблемаларҙың береһе - телде һаҡлау. Хәҙерге көндә Башҡортостанда туған телдең яҙмышы нисек хәл ителә? Ошо һорауҙарға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы, фекерегеҙҙе әйтегеҙ. (һорауҙар таратып бирелә)

1. Шиғри хатты яҙыуға нимә сәбәпсе булған?

2. Телдең бөтөүе нимәгә килтерергә мөмкин?

3. Телде белмәү фажиғәһенең төп сығанағы нимәлә?

4. Ни өсөн телдәр юҡҡа сыға?

Беҙҙең телебеҙҙең юғалыуы ихтималмы?

5. Һуңғы ваҡытта телгә иғтибар көсәйҙе.

Был ниндәй эштәрҙә күренә?(закондар, статус)

6. Сит өлкәләрҙә йәшәгән башҡорттар үҙ телен беләме?

7. Үҙебеҙгә башҡорт телен үҫтереү өсөн нимә эшләргә кәрәк? Һеҙҙең тәкдимдәрегеҙ.

8. Тел тураһында ниндәй шиғырҙар, йырҙар, цитаталар беләһегеҙ?

Тел тураһында фәһемле фекерҙәр (слайдтар).

ОПИ 12 төркөмө студенты Әбүбәкерова Айгөл үҙе ижад иткән шиғырын һөйләй.

Һаҡларға кәрәк телде.
Башҡортостанда тыуҙым мин,
Милләтем минең башҡорт.
Илде, телде һаҡлау кәрәк,
Ярамай булыу маңҡорт.
Милли рухлы һәм белемле
Йәштәр килһендәр илгә,
Уның киләсәген уйлап,

Йәшәргә кәрәк беҙгә.
Бына шулай, милләттәштәр,
Һаҡларға кәрәк телде.
Әгәр телде һаҡламаһаҡ,
Һаҡлай алмабыҙ илде.

V. Яңы теманы нығытыу.
Бөгөнгө дәресте йомғаҡлап, тест һорауҙарына яуап бирәйек.
(«Туған тел» йыры яңғырай.)
VI. Тест эшләү.
1. Р. Бикбаев ҡайһы китабында тыуған тәбиғәтте һаҡлау, яҡлау мәсьәләһен күтәрә?
а) «Автобиография»
б) «Ғүмер уртаһы»
в) «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ»
2. Р. Бикбаев ҡайһы әҫәрендә туған тел, милләт мәсьәләһен күрһәтә?
а) «Автобиография»
б) «Ғүмер уртаһы»
в) «Ете быуыным»
г) «Халҡыма хат»
3. Р. Бикбаев ҡайһы ауылда тыуған?
а) Әсән
б) Хәсән
в) Ҡунаҡбай
г) Диңгеҙбай
4. Р. Бикбаев ҡайһы талантлы шағир ижады тураһында монографик хеҙмәт яҙа?
а) М. Кәрим
б) Н. Нәжми
в) Ш. Бабич
г) Б. Бикбай
5. Филология фәндәре докторы Р. Бикбаевҡа ниндәй премиялар, исемдәр бирелә?
а) Ғ.Сәләм исемендәге премия.
б) Салауат Юлаев исемендәге премия.
в) Халыҡ шағиры исеме.
г) Бөтәһе лә.
6. Туған телем минең
Ҡупме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым – йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам.
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Был юлдар Р. Бикбаевтың ҡайһы әҫәренән алынған?
а) «Система».
б) «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ».
в) «Халҡыма хат».
г) «Мәңгелек мәл».
VII. Тестты баһалау.Экранда асҡыстар.
VIII.Йомғаҡлау. (ҡурай моңо яңғырай)

Туған тел! Кеше тәү мәртәбә ошо телдә «әсәй», «атай» һүҙҙәрен әйтә. Туған тел кешене белемле, аҡыллы, йыйнаҡ фекерле, тотанаҡлы, ғилем донъяһына ынтылыусан итеп тәрбиәләй. Туған телдә иркен һөйләшә белеү үҙ аллы фекерләргә генә түгел, юғары мәҙәниәткә эйә булырға ярҙам итә.

“ ...Аҡсалар гел алмашыр ул,
Баҙарҙар гел алдашыр ул,
Батшалар гел талашыр ул,
Аҡылыбыҙ алмашмаһын,
Рухыбыҙ алдашмаһын.
Мин мәңгегә һеҙҙең менән,
Ҡиләсәкте уйым урай.
Нигеҙебеҙ булһын Урал
Ҡулыбыҙҙа булһын ҡурай.”
(“Хазина”поэмаһынан)

IX. Өйгә эш.
«Теле барҙың – иле бар» темаһына инша яҙырға. Дәрес тамам. Һау булығыҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИК ПРОБЛЕМАНЫҢ САҒЫЛЫШЫ

Насретдинова Көнһылыу Ғәйсәр ҡыҙы,
Илеш районы Үрге Йәркәй
4-се һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында күтәрелгән экологик проблемалар тураһында һөйләшеү; уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереүҙе дауам итеү, үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү; тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, уны һаҡлау бурысын ҡуйыу, үҙ еренең ысын хужаһы итеп тойорға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: М.Бураҡаева, Р.Бикбаев портреттары, Ағиҙел йылғаһы буйҙарында ултырған Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалалары төшөрөлгән слайдтар, Торатау, Йөрәктау, Шахтау шихандарының фотоһүрәттәре, видеояҙма, Ағиҙел йылғаһы тураһында яҙылған йырҙар дискы.

Дәрес барышы:

1. Ойоштороу моменты.

Уҡытыусы: Уҡыусылар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән дәрес-йыйын үткәрәбеҙ. Йыйын булғас, ошо ҡорҙо күтәрелгән проблемаларҙы уртаға һалып, хәл итергә тейешбеҙ, фәһемле ҡарар ҡабул итербеҙ, тип ышанам. Эште яҙып барып, ҡарарҙарҙы теркәр өсөн сәркәтип һайлайыҡ. Эштең нисек барасағын асыҡлайыҡ, йыйынды башлаһаҡ та була.

Борон-борондан йыйындарҙа ир узамандары, ил әсәләре һүҙ алыр булған. Бөгөн дә күренекле яҙыусы, ил инәһе Мәрйәм Бураҡаеваның тормош һабаҡтарына ҡолаҡ һалайыҡ.

(экранда М. Бураҡаева).

Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле уҡыусылар!

Башҡорт халҡы тәбиғәтте үҙ йорто тип ҡараған. Тәбиғәттәге һәр үҫемлек, һәр йән эйәһе, йылға-күле уның өсөн бик ҡәҙерле булған. Бала бәләкәйҙән уларҙың ҡәҙерен белһен, яҡын итһен, иғтибарлы булһын өсөн әкиәттәренә ҡушҡан, йырҙарға һалған, улар хаҡында матур легендалар сығарған. Баланың күҙ алдына һәр сәскә, һәр таш, ағас, йылға-күл тере йән булып баҫҡан. Уның тәбиғәтте бысратырға йәки йән эйәһен ҡыйырһытырға ҡулы күтәрелмәгән. *(Слайд.)*

Ата-бабаларыбыҙҙан аманат булып беҙгә бай һәм матур ерҙә йәшәйбеҙ. Үҙебеҙҙең тыуған яғыбыҙ булыуы менән генә түгел, ә тәбиғәтенең, үҫемлектәрҙең, ҡош-йәнлектәрҙең байлығы, күҙ яуын алырлыҡ сәскәләрҙең наҙы, йылға-күлдәрҙең күплеге, һыуҙарҙың муллығы һәм башҡа әллә күпме үҙенсәлектәре менән һоҡланғыс ул.

Тәбиғәтте һаҡлау тип әйтелһә лә, башҡорт халҡы телмәрендә ундай һүҙбәйләнеш булмаған. Кемдән һаҡлаһын тәбиғәтте? Халыҡ һыуҙы, шишмәне, һыу баштарын мәңгеләштергән, бысратмаған. Һыу ҡәҙере шишмә ҡороғас беленә, тигәндәр. Мин дә һеҙҙе ата-олатайҙарыбыҙҙың аманатына тоғро булып еребеҙҙе, һыуыбыҙҙы, һулар һауабыҙҙы һаҡларға саҡырам.

Уҡытыусы: Алдан әйтеп үтелеүенсә, был йыйында беҙ Р.Бикбаевтың “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында сағылған экологик проблемалар тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Хәҙер үҙебеҙҙе уҡыусылар итеп түгел, ә төрлө район вәкилдәре, экологтар, табибтар, урмансылар итеп күҙ алдына килтереп, һөйләшеү алып барырбыҙ.

-Уҡыусылар, нисек уйлайһығыҙ, был йыйынға ни өсөн Р.Бикбаевтың поэмаһын алғанбыҙ?

-Сөнки был поэмала бөгөнгө көн өсөн мөһим, үтә әһәмиәтле һәм актуаль проблемалар күтәрелә. Ул да булһа экологик проблема.

-Мөхитебеҙгә, ер-һыуыбыҙға ҡарата күрһәтелгән һаҡһыҙлыҡ, тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙы әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуйыу фактттары тәнҡит уты аҫтында алына.

Уҡытыусы: Эйе, дөрөҫ, уҡыусылар. Ә ни өсөн шағир поэмаһына бындай исем бирә?

-Поэманың исеме үк оло мәғәнәгә эйә. Һыу буйында һыуһыныңды ҡандыра алмау.

Эй сарсаным!

Ҡайҙа бер йотом һыу?

Үҙем Ағиҙел ярында.

Уҡытыусы:

Йырҙарҙа йырланған

Ҡасандыр алҡынын аҡҡан,

Яҙарыма һыймай ятҡан Ағиҙелдән ниңә һыу эсә алмай шағир?

Йәмлеме Ағиҙел буйҙары?

Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

Видеояҙма: Ағиҙел буйындағы сүп-сар...

Уҡытыусы: Ә ни өсөн геройыбыҙ әҫәрҙә күрһәтелгән маршрутты һайлай икән?

Яуап: «Сөнки “Ағиҙелдең көнө - илдең көнө

Ағиҙелдең йөҙө - илдең йөҙө”, - тип билдәләнә”.

-Бөтә Башҡортостанды Урал ҡуйыһына, Ирәмәл тауҙары итәгенән башлап, иңләп-буйлап йәйрәп аҡҡан Ағиҙелдең тамағына, Кама йылғаһына ҡойғансы бар юлын шағир уй-күңеле менән сәйәхәт ҡыла. “Аҡ сәфәргә әйҙә, Ағиҙел”, – тип юлға сыға.

Слайд. Ғәзим Шафиҡовтың һүҙҙәре.

*Уҡыусы.”*Юл күрһәтеп алға тәгәрләне

Ағиҙелем – көмөш йомғағым.

Ирәмәлдән Кама һыуына тиклем

Күп йотлоҡтом йырына йылғаның”.

– Әгәр Рәшит Ниғмәти “был сәфәрҙе йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһында утыҙынсы йылдар аҙағында социализм осоронда ҡылған булһа, Рауил Бикбаев туҡһанынсы йылдар алдында – капиталистик мөнәсәбәттәргә ҡайтыу заманында юллана.

Уҡытыусы: Туҡталыштар бик үҙенсәлекле. Улар һәр береһе үҙенә хас бер экологик теманы күтәреп сыға. Белорет яҡтарынан килгән вәкилгә һүҙ бирәйек.

Белорет вәкиле: Лирик геройҙың иғтибарын Белорет ҡорос сымдар заводы үҙенә йәлеп итә. Ул ошо уңай менән “сырмалдылар сәсмә Белореттың сәстән нәҙек ҡорос сымдары”, ти. Ә завод быуаһында һыу ингәндә сәсәк быуылыуы беҙҙе уйланырға мәжбүр итә. Тик Ағиҙел буйында ҡырсынташ йәйелтеп уйнаған малайҙарҙы күргәс кенә күңелдәге ауыр уй-тойғолар еңеләйгәндәй була.

Һаҡлай алырһыңмы, тигән һымаҡ
Матурлыҡтар тула тирәмә.
Тауҙар аша Урал батыр һымаҡ
Һынсыл ҡарай миңә Ирәмәл.

Экранда: М. Горькийҙың Ағиҙелгә хайран ҡалып: “Там, на Белой, места такой красоты – ахнешь, сто раз ахнешь” - тигән һүҙҙәре.

Бөрйән вәкиле: ”Бөрйән урмандары һирәгәйгән, урман-тауы, солоғо, ҡош-ҡорто, кейеге ҡырылған. Урмандары ҡырылыуҙан йылғалар һайыҡҡан, яланғас ярға, ҡаҡ ҡаяға әйләнеп ҡалған Ағиҙел буйҙарының ҡото киткән. Сөнки юғарыла ултырған түрәләр план тип, дан-исем алыр өсөн

“Халыҡтың да ай-вайына ҡарамайҙар,
Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар,
Әйтерһең дә, ҡырағайҙар!”.

-“Кемдәр генә һине ҡырманы, башҡорт урманы?!” – тип өҙгөләнә шағир. Сал Урал тәбиғәте, боронғо сәнғәт ҡомартҡыһы – Шүлгән мәмерйәһе яҙмышы ла борсолдора һәм уйландыра шағирҙы.

Хайран итмәҫ кемде таш күргәҙмә,
Ҡайҙарҙа бар бындай тамаша?
Ғәйәр момент, таш быуаттағы ат
Ҡарай миңә ун биш мең йыл аша.
Шүлгән! Иң боронғо храм булып,
Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

- Ләкин ошо матурлыҡҡа ҡул һуҙыусылар ҙа юҡ түгел, туристар, ял итеүселәр тирә-яҡты сүп-сарға батырып ҡына ҡалмайҙар. Шүлгән мәмерйәһенең һүрәттәрен боҙоп, уның урынына “ҡара дегет менән ҡара исемен аҡ таштарға яҙған” кешеләр ҡыраҡай булмай кем булһын?!

Уҡытыусы: Ә бөгөнгө көндә Шүлгәнташтың, башҡорт солоғоноң яҙмышы нисек һуң?

Бөрйән районының Шүлгәнташ ҡурсаулығы хеҙмәткәренең яуабы.

Слайдтар.

- Уҡыусылар, артабан геройҙың маршруты ҡайҙа туҡтала?

- Артабан Ағиҙел бөгөлдәре беҙҙе Иштуғанға – “Урал күкрәгендәге йәнә бер инеш” янына алып килә.

Барыбыҙ – заман улы,
Тик һәр кеше
Үҙ ғәйебен үҙен күтәрһен!

Шағир тыуған нигеҙҙәре Нөгөш диңгеҙе төбөндәге ҡалған 2 яҡташтың бәхәсе аша һыуһаҡлағыстың тәбиғәткә, халыҡҡа ҙур зыян килеүе тураһында.

Артабанғы маршрут:

“Ер йөҙөндә тауҙар ғәйеп була.
Эй, кешелек! Ниндәй мәл еткән?
Тау һынлы, тау ғәйеп булған өсөн
Тыуыр тарих кемде ғәйепләр?”

Был юлдар “Торатау” бүлегенән. Унда шағир Шахтау нигеҙен шартлатыуға шаһит булып, уны ауған һалдатҡа оҡшата. Шул уҡ тау башынан Стәрлене күрә алмауына ғазаплана. Сөнки ҡала өҫтөндә ағыулы төтөндәр йөҙә.

(Видеояҙма ҡарау)

Табип: Ағиҙел буйҙарында, туғайҙарында ултырған Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалалары өҫтөн ағыулы һөрөмдөң болот-томандары ҡаплаған, баш ҡалабыҙ Өфө лә һыу-һауа бысраныуҙан зыян күрә, кеше һаулығы насарая, ғүмерҙәре ҡыҫҡара. Һанап киткән ҡалаларҙа йәшәүсе халыҡтар араһында яман шеш сире айырыуса күп күҙәтелә.

Уҡытыусы: Бынан 30-40 йыл элек Шахтау түбәһендә йөрөгән БеЛаз машиналары шырпы ҡабы кеүек күренә, бөгөнгө көндә был Шихан тау ер менән тигеҙләнгән. Шахтауҙа төп аҡбур сығарыу урынында, запас 2017 йылға тиклем етәсәк, тиһәләр ҙә, сиратта – Торатау, уға ҡурҡыныс янай.

Кемдер көндән-көн илебеҙ байлыҡтарын һатып, май туплағанда, тәбиғәтебеҙҙе бәләкәй генә, ләкин беҙҙең өсөн ныҡ мөһим мөйөшөн һаҡлап ҡала алырбыҙмы, юҡмы?

Ишембай ҡалаһы вәкиле: Изге Торатауҙы һаҡлап сығыу – һәр милләттәшебеҙҙең оло бурысы, япондарҙы Фудзиямаһыҙ, швейцарҙарҙы Алыпһыҙ, гректарҙы Олимпһыҙ, әрмәндәрҙе Арараттһыҙ күҙ алдына килтереп булмаған кеүек, Торатау ҙа – беҙҙең милли символыбыҙ, изгелек сығанағы, йолаларыбыҙға тоғролоҡ билдәһе. Әйткәндәй, башҡорт ҡына түгел, бик күп башҡа милләт вәкилдәре лә шихандарҙы яҡлап сығырға бөгөндән үк әҙер. Телде һәм илде һаҡлау тураһында уйлап та бирмәгән, үҙ файҙаһын ғына ҡайғыртыусыларҙың арабыҙҙа ишәйеүе ҡыҙғаныс. Әгәр ҙә бөгөн Торатау икән, иртәгә сиратта үҙебеҙме? Йәнтөйәгем, халҡым, тип яңған йөрәктәргә ҡағыла был мөрәжәғәт: битараф булмайыҡ, күрәләтә изге тауҙы сығартыу һәләкәткә килтерәсәк бит.

Видеояҙма: ”Торатау” халыҡ-ара фестивале һәм балалар һабантуйынан өҙөк (25 август, 2013 йыл).

Баймаҡ районы вәкиле: Беҙҙең район урман, тау, йылғаға бик бай. Ләкин матур, таҙа һыуҙарыбыҙҙың береһе бысранып, ҡороп бөтөп бара – ул да булһа Таналыҡ йылғаһы. Экологик өмәләр ойоштороп йылға-һыу буйҙарын, урман-ҡырҙарҙы таҙартыу ҙур йолаға әйләнде.

Слайдтар.

Уҡытыусы: Рус яҙыусыһы Федор Достоевский: “Донъяны матурлыҡ ҡоткарыр”, - тигән. Ә Рауил Бикбаев: “Матурлыҡ үҙе лә яҡлауға мохтаж”, - ти. Һәм “Мин ышанам, кеше матурлыҡты һәләкәттән барыбер ҡоткарыр”, - тип өмөт менән ҡарай ул.

Эколог: “Еребеҙҙең күркен һаҡлайыҡ, уның йәмен тағы ла арттырайыҡ. Унда һәр ваҡыт туҡ башаҡтар тулҡынһын, урмандар шаулаһын, саф йылғалар аҡһын. Һеҙҙең балаларығыҙ ҙа, балаларығыҙҙың балалары ла тәбиғәт ҡосағында иртәнге саф һауаны кинәнгәнсе һулай алһын, һандуғастар моңо юлдаш булһын.

Уҡытыусы: Тәбиғәтте һаҡлауҙы үҙ ҡулыбыҙға алырға тейешбеҙ. Бының өсөн хәл иткес көрәш мәле етте. Уны һаҡлай алмаһаҡ, килер быуындарға бер нәмә лә ҡалмаясаҡ.

Ике уҡыусы ҡобайыр әйтешә:

- Бер тигәс тә ни яман?
- Берҙән-берең – Ергенән
  Емерелһә, шул яман!
- Илгә терәк көрәктә,
  Ике ҡулың ҡаушырып
  Ҡарап торһаң, шул яман!.. һ.б.

Уҡытыусы: Ярай, рәхмәт! Ә хәҙер, дәрес башында әйтеп китеүемсә, йыйында ҡаралған проблемаларға ҡарата ҡарар сығарырға тейешбеҙ.

- Хөкүмәткә хат яҙыу: Торатау, Йөрәктау шихандарын һаҡларға.
- Экологик проблемаларҙы гәзит-журналдарҙа яҡтыртыу.
- Кешеләргә бала сағынан уҡ еренә һәм үҙенә ҡарата экологик тәрбиә биреү.

Быйылғы 2013 йыл – тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылының девизы ла ”Иртәнге көнөңдө һаҡла” бит.

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында Башҡортостан халҡы өсөн генә түгел, ә ер йөҙөндә бар кеше өсөн дә фәһем алырлыҡ проблемалар күтәрелгән. Тәү ҡарашҡа, эсәр һыу запастары мәңге бөтмәҫ кеүек, ә Халыҡ-ара һыу ресурстары менән идара итеү институты фараздары һәр кемде уйландырырлыҡ. Сөсө һыу запасы ни бары 25 йылға етәсәк, тип күҙаллай институт белгестәре. Быны улар планета ла халыҡтың арта барыуы, һыуҙың күп тотолоуы менән аңлата. Һыу – тәбиғәттең иң ҡиммәтле байлығы икәнен онотмаһаҡ ине.

БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА. ӨНДӘШ ҺҮҘҘӘР

Гималетдинова Мәғәфиә Зәки ҡыҙы,
Кушнаренко районы Талбаҙы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен үҫтереү; шиғри әҫәрҙе анализларға, өндәш һүҙҙәр темаһын ҡабатлап, телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеү, ижади һәләттәрҙе үҫтереү, уҡыусыларҙа илһөйәрлек, патриотлыҡ тойғоларын тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: дәреслек, компьютер, проектор һәм экран, Башҡортостан темаһын сағылдырыусы фотооткрыткалар һәм китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы:

Инеш.

Шифриәт минуттары. Уҡыусылар әҙерләп килгән шиғырҙарын уҡый,

Әңгәмә ойошторола.

- Дәрестең маҡсатын һәм бурыстарын билдәләү.

Бөгөн дәресебеҙ ябай түгел, ә дәрес-ҡоролтай.

- Уҡыусылар, ә нимә һуң ул ҡоролтай?

- Эйе, ҡоролтай ул икенсе төрлө әйткәндә йыйылыш. Башҡорттар элек-электән төрлө мәсьәләләрҙе бергә йыйылып ҡоролтайҙа хәл иткәндәр. Беҙ ҙә бөгөн бәләкәй ҡоролтай үткәрәбеҙ. «Белгән өйрәтә, белмәгән өйрәнә» ти халыҡ. Бергәләп кәңәшләшеп һөйләшеп алырбыҙ. Белемдәребеҙҙе күрһәтергә, белмәгәнде белергә әҙер булығыҙ. Ҡоролтайҙа төрлө секциялар буйынса эшләйҙәр. Беҙ «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте» секцияһында үҙебеҙҙең эште күрһәтәйек.

(хәҙер ҡоролтайҙың тәртибе менән танышайыҡ. (Экранда беренсе слайд).

1. Башҡортостан. (Республика тураһында белешмә).
1. Рауил Бикбаев. «Башҡортостан бында башлана»
2. «Өндәш һүҙҙәр» темаһын ҡабатлау.
3. Башҡортостан тураһында шағирҙар.
4. Ижад минуттары.
5. ҡарарҙар.
6. Башҡортостан тураһында мәғлүмәт. Иң беренсе Башҡортостан тураһында ҡыҫҡаса белешмә бирәп китәйек.(Экранда икенсе слайд).

Башҡортоста́н Респу́бликаһы (Башҡортостан) – Рәсәй Федерацияһы субъекты. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияларына ярашлы, үҙаллы демократик дәүләт. Тик, Рәсәй Федерацияһы

Конституцион судының ҡарарына ярашлы, башҡаса аңлатыла. Иҙел буйы федераль округына һәм Урал иҡтисади районына ҡарай. Пермь крайы, Свердловск, Силәбе, Ырымбур өлкәләре, Татарстан һәм Удмурт республикалары менән сиктәш.

Уҡытыусы һүҙе.

Башҡортостан – бай, гүзәл республика. Халҡыбыҙ борон-борондан Урал тауҙары, йылғалары буйында йәшәгән. Ошондағы матур тәбиғәткә һоҡланып бик күп йырҙар, эпостар ижад иткән. Хәҙерге көндә лә бик күп шағирҙар Башҡортостанды данлап, мактап әҫәрҙәр яҙа.

Бөгөн беҙ Р. Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғыры менән танышырбыҙ. Әйҙәгеҙ иҫкә төшөрөп китәйек:

- Кем ул Р. Бикбаев?

(Күренекле шәхес тураһында әңгәмә).

Һүҙлек эше. Шиғыр менән танышыр алдынан ауыр һүҙҙәрҙе ҡарап китәйек.

Офоҡ-горизонт	ҡарыш-пядь
Тараф-сторона	һуҡмаҡ-тропа
ҡан тибеше- биение	булмыш-зд.характер
Туғай- луг	улан-дитя
Тулай- метаться,биться	кер-зд.плохая мысль
ҡабырға-зд.склон	ғәрлек-позор, стыд.
Һырт-хребет	

- Магнитофондан шиғырҙы тыңлау.

Шиғырҙы анализлау өсөн һорауҙар:

3. Шиғырҙы мәғәнәһе буйынса нисә өлөшкә бүлергә мөмкин? (Ике өлөшкә: лирик герой һәм Башҡортостан-әсә).

Дөрөҫ, ә хәҙер дәфтәр битен дә ике өлөшкә бүләйек һәм образға хас ҡылыҡтарҙы яҙып барайыҡ.

Лирик герой	Башҡортостан-Әсә
Шатлана,һоҡлана, ғорурлана.	ҡаршы ала, һыйындыра, үҙ балалары менән ғорурлана һәм улар өсөн борсола.

Лирик герой ниндәй кәйефтә? Уға ниндәй хистәр хас? Быны ниндәй юлдарҙа күрәһегеҙ? (Шатлана, быны «Бар тарафта донъя ниндәй яҡты, ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты…» юлдарында күргә була).

(Һоҡлана - «Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,

Талпына ла күңелем күктә тулай» тигән юлдар күрһәтә).

(Ғорурлана- «Башҡортостан мине ҡаршы ала, ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап…» юлдары асыҡлай).

3. Башҡортостан нимә эшләй һәм нисек һүрәтләнгән? (Таблицаға яҙыу). (ҙур итеп Яйыҡ туғайынан башлана, Сөнгә хәтлем һуҙыла, Юшатырҙан Әйгә тиклем).

(ҡунаҡсыл ер итеп-Башҡортостан һәр ваҡыт ҡаршы ала йәғни ҡунаҡсыл халыҡ йәшәй тип әйтергә була).

4. Ә бына «Тик Булмышым инде өр-яңы» юлын нисек аңлайһығыҙ?

(Республика йылдан-йыл матурая, үҫешә, байый бара).

5. Республика кешеләргә нимә тип өндәшә? Шул юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ һәм аңлатығыҙ.

(«Мин башланам һеҙҙән кешеләрем…» Намыҫлы, аҡ йөҙлө, тырыш булырға саҡыра).

6. «Минең янға донъя килмәһә лә, үтеп сыҡтым бөтә донъяны.» - тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? (Республика кешеләре ҡайҙа ғына булмай һәм Башҡортостан үҙ балалары арҡаһында бөтә илдәрҙе күргән).

7. Шулай булғас сит ерҙә үҙебеҙҙе нисек тотор инегеҙ?

8. Шулай итеп, был шиғырҙың идеяһы нимәлә? Автор ни әйтергә теләгән? (Беҙ Башҡортостан кешеләре, шуға күрә бөтә ерҙә лә үҙенде лайыҡлы итеп тоторға, намыҫлы кеше булып, ата-әсәләр йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәй йәшәргә тейешбеҙ).

9. Тәрбиәүи әңгәмә:

- Эйе, дөп-дөрөҫ һүҙҙәр. Мин һеҙҙең шундай кешеләр булып үҫеүегеҙгә ышанам, сөнки хәҙерҙән үк тырышып уҡыйһығыҙ, атай-әсәйҙәрегеҙҙе, туғандарығыҙҙы, тыуған ерегеҙҙе яратаһағыҙ, туған телегеҙҙе өйрәнәһегеҙ. Һәр беребеҙ үҙ йөрәгендә Башҡортостандың бер киҫәген йөрөтә. Ҡайҙа ғына булһаҡ та, Башҡортостан тип әйтһәк, республиканы күрһәтеүсе вәкил булып торабыҙ. Шиғырҙа әйтелгәнсә Башҡортостан үҙ балалары арҡаһында бөтә донъяны «үтеп сыҡҡан». Әгәр республика кешеләренең йөҙө аҡ була икән, Башҡортостандың да башы юғары йәғни тыуған еребеҙ тағы ла үҫешә, матурлана, байый тигән һүҙ.

- “Өндәш һүҙҙәр” темаһын да ҡабатлап китәйек.

-Был шиғырҙа өндәш һүҙҙәр бармы?Уҡып китегеҙ.

Шағирҙар Башҡортостан темаһын ситләп уҙмай. Һәр шағир үҙенсә ҡабатланмаҫ саралар менән тыуған республикабыҙҙы мактай, данлай. Ә хәҙер уларҙың шиғырҙарынан өҙөктәрҙе тасуири итеп уҡып өндәш һүҙҙәрҙе табайыҡ.

- Шулай итеп шағирҙар Башҡортостанға нимә тип өндәшәләр?

- “Башҡортостан бында башлана” шиғырынан өндәш һүҙҙәрҙе табыу һәм улар менән һөйләмдәр төҙөү.

- Ижад минуттары.

Ә һеҙ үҙегеҙ шағир булып ҡарағығыҙ киләме? Башҡортостанға бағышлап шиғыр яҙып ҡарағыҙ. Шиғырҙы тыңлау.

- Йомғаҡлау. Ҡарарҙар сығарыу.

Һәр ҡоролтай эш аҙағында ҡарарҙар ҡабул итә. Дәресебеҙҙе йомғаҡлап, беҙ ҙә үҙебеҙҙең ҡарарҙарыбыҙҙы сығарайыҡ.

- Уҡыусылар, шиғырҙарҙы тематикаһы буйынса төрлө төркөмдәргә бүлеп йөрөтәләр. Таҡталағы плакатҡа ҡарап әйтегеҙ әле: Р.Бикбаевтың был шиғыры ҡайһы төркөмгә ҡарай. (Гражданлыҡ лирикаһы).

- Ни өсөн?

(Лирик герой үҙ халҡын, тыуған ерен-Башҡортостанды яратҡан кеше булараҡ сығыш яһай). -Беҙ уны Башҡортостандың гражданины, патриоты тип әйтә алабыҙмы?

-Һеҙ үҙегеҙ өсөн ниндәй ҡарар сығараһығыҙ?

(ҡайҙа ғына йәшәһәк тә үҙебеҙҙе матур тоторға, намыҫлы булырға, тыуған ерҙе, телде онотмаҫҡа кәрәк).

- Баһалау. Өй эше: шиғырҙан өҙөк ятларға.

Р. БИКБАЕВ. “БӨТӘ ДОНЪЯ БАШҠОРТТАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!”

Ишемғужина Ләйсән Ғилман ҡыҙы,
Октябрьский ҡалаһы ҡала округының
«9-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе»

Предмет: Башҡорт теле һәм әҙәбиәте (рус мәктәптәрендә).

Дәрес төрө: Яңы теманы аңлатыу дәресе

Тема: Р. Бикбаев. Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!

Маҡсат: 1) Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу;

2) телмәрҙе, фекерләүҙе, хәтерҙе үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу, үҙ фекереңде иҫбатлау;

3) шағир ижадына ҡыҙыҡһыныу, тыуған илгә, милләткә ҡарата һөйөү тәрбиәләү, башҡортлоҡ хисен уятыу;

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, шағирға арналған күргәҙмә, фотолары, мультимедиа проекторы, видеояҙма, һүҙлектәр, интерактив таҡта.

Дәрес ваҡыты - 45 минут.

Класс – 8 класс

Технологиялар: компьютер технологияһы, интеграциялы уҡытыу, хеҙмәттәшлек технологияһы.

Дәрес барышы

Дәресте ойоштороу. Уҡыусыларҙың дәрескә әҙерлеген тикшереү, уҡыусыларға яҡшы кәйеф теләү; өй эшен тикшереү өсөн дәфтәрҙәр йыйып алына (икенсе дәфтәрҙәре таратыла).

Яңы темаға инеш.

– Әйҙәгеҙ, уҡыусылар, дәрес башында беҙ һеҙҙең менән үткәндәрҙе бөгөнгө көн менән бәйләгән, бөгөнгө көндө киләсәккә илткән ваҡыт тураһында әңгәмәләшеп алайыҡ.

– Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, нимә ул ваҡыт? Ваҡыт үткәне һиҙеләме? Үткәндәр тураһында беҙ ҡайҙан беләбеҙ? (тарихтан, әҙәби әҫәрҙәр аша беләбеҙ)

– Быуаттарҙан-быуаттарға ваҡыт даръяһы аға, ә быуаттар тарих төпкөлөндә ҡала. Тарихта ниндәй ваҡиғалар булған? Дәрестә беҙ үткәнебеҙгә байҡау яһарбыҙ, бөгөнгөнө барларбыҙ, киләсәккә күҙ һалырбыҙ.

– Быйыл, 2013 йылдың 8 сентябрендә, Башҡортостан тарихында ниндәй ваҡиға булып үтте? (Эйе, дөрөҫ, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайға депутаттар һайлау)

– Уҡыусылар, ҡоролтай һүҙен нисек аңлайһығыҙ? (ул дәүләт йыйылышы; һөйләшер, кәңәшләшер өсөн йыйылған йыйын)

– Эйе, тимәк, айырым бер төбәктә дәүләт күләмендә мөһим мәсьәләләрҙе хәл итергә йыйылған ҡор; ер, халыҡ, тел, дин яҙмышын уйлап, фекерҙәр туплай, ҡарарҙар ҡабул итә торған изге урын).

Һөйләгән ваҡытта ҡоролтай тураһында видео күрһәтелеп кителә.

– Ҡоролтайға кемдәр йыйылған? (бындай изге ҡорға һәр ырыуҙан иң хөрмәтле, арҙаҡлы, ил хәстәре менән йәшәгән аҡһаҡалдар ғына ебәрелгән)

– Ошо урында тарихҡа күҙ һалайыҡ. Тәүге халыҡ йыйылышы ҡасан булды икән? “Тарих ҡуласаһына” мөрәжәғәт итәйек.

Тарих ҡуласаһы әйләнә, 1220 йыл күренә.

– Был дата нимә тураһында һөйләй? Ҡоролтай ниндәй маҡсат менән йыйыла?

(1220 йыл – татар-монгол яуы баҫып алғас, уларға ҡаршы һуғыш башлау өсөн йыйылалар. Һәр ырыу дошманды артҡа сигендерергә ант бирә, үҙҙәренең ырыу ағасына тамға ҡуя.)

Тарих ҡуласаһы. 1553 йыл.

– Был һандар берәй нимә һөйләйме?

(1553 йылда башҡорт халҡының Рус дәүләтенә ҡушылыуы тураһында ҡарар ҡабул итәләр)

Тарих ҡуласаһы. 1812 йыл.

– Тарихҡа күҙ һалһаҡ, был дата нимәһе менән иҫтә ҡалған? (француздарҙан Ватанды һаҡлау өсөн йыйылалар)

Тарих ҡуласаһы. 1917 йыл.

– 1917 йылда 3 ҡоролтай үткәрелә. 3-сө Ҡоролтайҙа ниндәй мөһим мәсьәлә хәл ителә? (Башҡортостан Автономияһын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителә.)

– Был Автономияны төҙөүгә кем күп көс һалған? (Әхмәтзәки Вәлиди.)

– Башҡортостан Автономиялы Республикаһы ниндәй территорияны алып торған? (Ҡартанан күрһәтеү.)

Тарихи Башҡортостан. – Тарихи Башҡортостандың территорияһына тулыһынса хәҙерге Башҡортостан, Ырымбур, Силәбе өлкәләре, өлөшләтә Свердловск, Ҡурған, Һарытау, Һамар өлкәләре, Пермь крайы, Татарстан Республикаһы ингән. Был ерҙәрҙә тик башҡорттар ғына йәшәгән.

Слайдта. Башҡортостан халҡының милли составы.

Урыҫтар – 36,3%;
башҡорттар – 29,8%;
татарҙар – 24,1%.

– Ни өсөн башҡорттар һан яғынан кәмей? Ни өсөн башҡорттар төрлө төбәктәрҙә йәшәй. Ниндәй сәбәптәр менән сығып киткәндәр улар?

Слайд. “Ҡайҙа, күпме башҡорт йәшәй?”

Рәсәйҙә 1 673 389 башҡорт йәшәй. (һан яғынан башҡорттар рустар, татарҙар, украиндарҙан ҡала 4-се урында.)

Башҡортостанда – 1 221 302;
Силәбе өлкәһендә – 166 372;
Ырымбур өлкәһендә – 52 685;
Пермь крайында – 40 740;
Свердловск өлкәһендә – 37 296;
Ханты-Манси АО-да – 35 807;
Ҡурған өлкәһендә – 15 343;
Татарстанда – 14 911.

– Төрлө төбәктәргә һибелеп йәшәгән башҡорттарҙы бергә туплау, киләсәкте хәстәрләү, тергеҙеү маҡсатында оло йыйын үткәреү талабы тыуғас, 1995 йылдың 1-2 июнендә Бөтә донъя башҡорттары I Ҡоролтайға йыйылды. Ошо Ҡоролтайҙа илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә йәшәгән башҡорт халҡының мәҙәниәтен үҫтереү буйынса айырым программа төҙөлдө. Төрлө ойошмалар барлыҡҡа килде, байрамдар, һабантуйҙар үткәрелә башланы.

2002 йылдың июнендә II Бөтә Донъя башҡортттары ҡоролтайы уҙғарыла.

2010 йыл – июндә III Бөтә Донъя башҡортттары ҡоролтайын үткәрелә.

Һығымта: Тимәк, ҡоролтай башҡорт халҡының тарихында мөһим роль уйнаған. Ул ябай ғына йыйын түгел, мөһим ижтимағи-сәйәси мәсьәләләрҙе хәл иткән.

- Уҡыусылар, беҙ бөгөн ҡоролтай айҡанлы яҙылған әҫәрҙәрҙең береһе - Р. Бикбаевтың “Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!” шиғырына мөрәжәғәт итербеҙ. Тыуған төйәгенән ситтә йәшәгән милләттәштәребеҙҙең йәшәйеше, көнкүреше менән танышырбыҙ.

Датаны, теманы яҙып ҡуябыҙ.

Дата

Р. Бикбаев. Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!”

Яңы тема.

- Уҡыусылар, әйтегеҙ әле кем ул Рауил Бикбаев?

(уҡыусылар яуабы)

- Афарин, һеҙ Р.Бикбаев тураһында күпмелер белəһегеҙ. Белмәгәненә төшөнөрбөҙ, беҙҙең уның ижадын өйрәнəһебеҙ алда әле. Р.Бикбаев тураһындағы мәғлүмәтте уҡыйыҡ, иғтибарлы булығыҙ, ҡыҙыҡлы яңылыҡтар булыр, уларҙы билдәләп барырһығыҙ.

(Бер уҡыусы алдан мәғлүмәт әҙерләп килә)

“Инсерт” алымы.

- Һеҙгә мәғлүмәт билдәле булһа –“+”, яңылыҡ булһа – “–“ билдәһе ҡуйығыҙ. (Мәғлүмәт уҡығандан һуң таҡталағы таблица тултырыла, авторҙың китаптары тәҡдим ителә).

-

+ (миңә билдәле)	- (яңылыҡ)

Шиғыр йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

- Ил яҙмышы – ир иңендә, ти халыҡ. Рауил Бикбаев иңендә нимә ята икән? Башҡорт халҡын нимәгә өндәй икән шағир? Ошо һорауҙарға яуапты бөгөн үтеләсәк шиғырҙан табырбыҙ.

1) а) һүҙлек эше.

Шиғырҙы уҡыр алдынан һүҙлекте уҡып китәйек. Уҡытыусы уҡый, һуңынан 2-3 уҡыусы тулыһынса уҡый (экранда һүҙлек)

- Тупланыу – собираться, объединяться, сплачиваться
- Гөрләшеү – зд. жить радостно
- Серәшеү - упорствовать
- Ҡалҡыу – всходить, появляться
- Ваҡсыллыҡ – мелочный
- Иңгә -иң – выступить единодушно
- Фəмһеҙ – беспечный
- Таяныс – опора

б) һүҙҙәр дәфтәрҙәрҙә яҙыла.

в) 2 һүҙбәйләнеш төҙөп яҙырға.

2) а) Шиғырҙы уҡытыусының тасуири уҡыуы

б)Шиғырҙы үҙ аллы уҡыу

в) Сылбыр менән уҡыу.

г) Шиғырҙы тәржемә итеп китәйек (һәр рәт икешәр куплет тәржемә итә).

Шиғырҙың идея-тематикаһы өҫтөндә эшләү.

- Шиғырҙың төп темаһы ниндәй?(берҙәмлек)
- шағир ниндәй ваҡиғаларға мөрәжәғәт итә?
- Ни өсөн Бөтә донъя башҡорттары Ҡоролтайға йыйыла?

- Ҡоролтайҙа ниндәй мәсъәләләр хәл ителә?
- Лирик геройҙы ниндәй уйҙар борсой?
- Ҡайһы шиғыр юлдары һеҙҙе айырыуса уйландырҙы һәм ни өсөн?
- “Таяныстың иң нығлыһы – тоғролоҡта” тигәнде нисек аңлайһығыҙ?
- Кемгә йәки нимәгә тоғролоҡта?
- Һеҙҙең өсөн тоғролоҡ нимә ул?
- “Бәхет ҡояшы” ҡалҡһын өсөн нимәләр эшләр инегеҙ?
- Шағир нимәгә өндәй?
- Башҡорттарға берләшеү ниңә кәрәк?
- Халыҡты халыҡ итеүсе сифаттарҙың береһе ул – берҙәмлек. Тағы халыҡ ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш.

Кластер төҙөү (интерактив таҡтала эш) һүрәтләү сараларын табыу.

- Шағир ниндәй һүрәтләү сараларын ҡулланған? (сағыштырыу, ҡабатлау, өндәш һүҙ, йәнләндереү, эпитет).
- Ниндәй маҡсат менән? (Йөкмәткене байыта, һоҡланыу, ғорурланыу тойғоһон көсәйтә).

Шиғырға йомғаҡ яһау.

- Нимә әйтергә теләгән шағир?
- Шиғыр нисек яҙылған? Ниндәй һүҙҙәр күп ҡулланылған?
- Әгәр һеҙгә шиғырҙың төҫөн билдәләргә ҡушһалар, шиғырға ниндәй төҫ бирер инегеҙ? Ниңә?

Һығымта. Шулай итеп, ни өсөн беҙ был шиғырҙы өйрәнәбеҙ? Ул беҙҙе нимәгә өйрәтә? Бөтә әйткәндәребеҙҙе йомғаҡлап, дәфтәрҙәргә “Башҡорт халҡына” синквейн эшләп китәйек (слайдта эш).

Башҡорт халҡы
Көслө рухлы, сәсән
Туплана, йыйыла, яуға күтәрелә
Берләшәйек, бөтә донъя башҡорттары
Күмәк көс.

- Уҡыусылар, һеҙҙең Башҡортостандан, йә булмаһа, тыуған ҡалағыҙҙан сит яҡтарға китеп, өҙөлөп һағынып, атай-әсәй йортона, тәпәй баҫҡан ерегеҙгә ҡайтҡанығыҙ барҙыр. Шул мәлдәрҙә һеҙҙе ниндәйерәк хистойғолар сорнай, ниҙәр кисерәһегеҙ, һөйләгеҙ әле.

(Уҡыусылар кисергән тойғолары тураһында һөйләйҙәр).

- Хәҙер беҙ төрлө сәбәптәр арҡаһында ситкә сығып киткән милләттәштәребеҙҙең береһе менән әңгәмә тыңлап үтәйек, уның да уй-фекерен беләйек. Ситтә башҡортҡа башҡорт булып ҡалыуы еңелме икән?

Skype аша бәйләнеш булдырыу,йә булмаһа “Башҡорттар” тапшырыуынан өҙөк ҡарап үтеү.

Йомғаҡлау.

- Уҡыусылар, һеҙҙең алдығыҙҙа мәғрур ағас үҫеп ултыра (таҡтала ағас һүрәте). Уның тамырҙары ергә нык итеп һеңгән. Тамырын тойған ағас ҡына үҫә, нығый, емеш бирә, ә тамырһыҙы ҡорой.

- Мин һеҙгә ағас япраҡтары таратып бирәм, һеҙ шул япраҡтарға халыҡты бөйөк итеүсе сифаттарҙы яҙығыҙ (берҙәмлек, көс, тырышлыҡ, белем, нығышмаллыҡ, рух, хеҙмәт яратыу, һ.б.) япраҡтарҙы ағаҫҡа йәбештереү.

- Беҙҙең ағасыбыҙ тағы ла көслөгә, ҡеүәтлегә, тармаҡлыға әйләнде. Халҡыбыҙ тамырының нығлығы рух нығлығында, көстә, бер бөтөн булыуҙа. Бөгөнгө көндә халҡыбыҙҙың берҙәм булыуы бигерәк мөһим. Тормош ауырлығынан беҙҙе берҙәмлек, татыулыҡ ҡына ҡотҡарып алып ҡалыр. Башҡортостаныбыҙҙың лайыҡлы киләсәге – халҡыбыҙҙың берҙәмлегендә. Был турала атай-олатайҙарыбыҙҙан мираҫ булып ҡалған башҡорт халыҡ мәҡәлдәрендә әйтелгән (экранда).

Береклектә – тереклек. (В единении – житие)
Берлектә – көс (в единстве - сила)
Ише күптең көсө күп
Күпселек ҡайҙа – көс шунда.

Һеҙгә йәш йырсылар А.Шәмсетдинова менән Л.Таңатованың һүҙҙәре аманат булһын яңғыраһын.

Өй эше.

Беренсе кимәл: шиғырҙы дөрөҫ, тасуири уҡырға

Икенсе кимәл: үҙҙәренә оҡшаған 2 куплетты ятларға.

Өсөнсө кимәл: “Ҡоролтай” һүҙе менән кроссворд эшләргә

Рефлексив баһалау. Дәрестә ҡатнашыусылар бер береһен баһалай, тейешле билдәләр журналға ҡуйыла. - Шуның менән беҙҙең дәрес тамам. Һау булығыҙ.

Р. БИКБАЕВТЫҢ «ЯҢҒЫҘЛЫҠ»ШИҒЫРЫ

Ҡаһирова Гүзәл Ғариф ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Калинин районының
112-се урта мәктәбе

Маҡсат: шиғыр менән танышыу, анализлау, лексик яҡтан тикшереү, яңғыҙлыҡ концептын тикшереү; уҡыусыларҙың уйлау һәләтен, бәйләнешле телмәрен үҫтереү,тасуири уҡырға өйрәтеү; бай рухлы шәхес тәрбиәләү.

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу моменты.

Уҡытыусы: Дәрестe башлар алдынан мин һеҙҙең иғтибарға шиғырҙан бер өҙөк тәҡдим итәм. Иғтибар менән уҡыйбыҙ.

Киткем килә, ә ҡайтаһым килмәй,
Еңел түгел ул юл йөрөүе.
Әммә ауыр яңғыҙлыҡтан китеп,
Яңғыҙлыҡҡа ҡайтып инеүе.

- Н.Нәжми был һүҙҙәр менән нимә әйтергә теләгән? (Кешенең яңғыҙлығы тураһында һүҙ бара).

2. Төп өлөш

-Ошо өҙөкөн сығып дәрестең темаһын билдәләп ҡарайыҡ.(Яңғыҙлыҡ)

- Эйе, бөгөн дәрестә беҙ яңғыҙлыҡ тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Бөгөнгө тема: Р.Бикбаевтың “Яңғыҙлыҡ” шиғыры. (Дәфтәрҙәргә яҙып ҡуйырға).

- Ә дәрестең маҡсатын билдәләр өсөн шундай һорауға яуап бирәбеҙ, дәрестә беҙ ниндәй эштәр башҡарасабыҙ? (Шиғырҙы анализлау, тасуири уҡыу, концепт менән эш)

- Һеҙ нисек аңлайһығыҙ, нимә ул яңғыҙлыҡ?(Уҡыусыларҙың яуабы.)

- Ә хәҙер һүҙлектәрҙән яңғыҙлыҡ һүҙенең аңлатмаһын табып уҡыйыҡ.

Яңғыҙлыҡ, исем - Яңғыҙ булған хәл. Яңғыҙлыҡта йәшәү. Япа-яңғыҙ, бер үҙе.

Яңғыҙаҡ, исем- 1. Ғаиләһеҙ, яңғыҙ кеше. Яңғыҙаҡ тормошо. 2. Үҙ алдына хужалыҡ иткән крәҫтиән. Яңғыҙаҡ хужалыҡ.

- Яңғыҙ, яңғыҙлыҡ һүҙҙәре менән ниндәй халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре беләһегеҙ.

(Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй.
Яңғыҙлыҡ әжәлдән яман.
Яңғыҙға яла күп булыр.
Яңғыҙ бала яуҙан яман).

- Был һүҙ ниндәй ассоциациялар тыуҙыра?

- Ниндәй синонимдары бар? Ә ниндәй һүҙ уның антонимы була ала?

- Беҙ яңғыҙлыҡ һүҙен аңланыҡ, ә бына Р.Бикбаев үҙенең шиғырында был һүҙгә ниндәй мәғәнә һалды икән?(Шиғырҙы тасуири уҡыу).

Ә хәҙер шиғыр буйынса иң беренсе эш.

Һүҙлек эше.(Дәфтәрҙәргә яҙырға)

Йоҡоһоҙ йыһан. Ни өсөн йыһан йоҡоһоҙ?

Ут йотоу. Нығынған һүҙбәйләнеш. Ни сәбәпле шағир “ут йота”, ә “ҡайғырмай”?

Тоғро дуҫтар.Ни өсөн шағир “тоғро” һүҙен ҡуллана, ә “яҡын” тигән һүҙҙе түгел?

Йәшәү һуланы. Йәнләндереү ҡулланған. Ниндәй йәшәү ул, икенсе һүҙбәйләнеш ҡулланырға мөмкинме?

-Шиғыр монолог формаһында яҙылған, шағирҙың тормошҡа ҡарата фәлсфәүи уйланыуҙарына ҡоролған. Шағирҙың әйтергә теләгәне аңлашыламы?

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, шиғыр ниндәй мәлдә, ҡасанырaҡ яҙылған?

- Шағир нимә әйтергә теләгән?

- Ошо һөйләшкәндәрҙе дөйөмләштереп, шиғырҙың һәр строфаһына күҙ һалайыҡ.

- 1-се строфа: Яңғыҙлыҡ-төн-йыһан (слайд)

- Ни өсөн шағир ошо һүҙҙәрҙе бер-береһе менән бәйләй?

Яңғыҙлыҡ-үҙе.

Төн- киң масштаб.

Йыһан – глобаль масштаб.

2-се строфа: Кешеләр яҙмышы(слайд)

Р. Бикбаев был строфала яңғыҙлыҡтың сәбәптәрен асыҡлай кеүек. Дуҫтар бар, әйләнә – тирә буш түгел. Ә ни өсөн ул үҙен яңғыҙ тоя, кешеләр ҙә, донья ла яңғыҙ түгел бит? (Һәр кем үҙенең күңелендә генә булһа ла барыбер яңғыҙлыҡ тоя, төрлө кеше был хәл-торошто төрлөсә аңлатырға мөмкин, ә асылы- кеше күңеленең тәрәнлегендә, ә ул тәрәнлектең төбөнә етеп булмай, шунлыҡтан йыш ҡына яңғыҙлыҡ тойғоһо кисерәбеҙ.)

3-сө строфа: Йәшәү- тәбиғәт (слайд)

Йәшәү-ул тәбиғәт, туҡтауһыҙ хәрәкәт. Яңғыҙ булған саҡта ла яныңда йәшәү һулай, кем бәхетле, кем шатлана, кем илай...

(слайд) Мин ғүмерем буйы яңғыҙ булдым,
Мин ғүмерҙә яңғыҙ булманым.
(Һуңғы юлдарҙы аңлатығыҙ.)

3. Рефлексия.

Ниндәй яңғыҙлыҡ тураһында һүҙ бара һуң?(кешеләр араһындағы яңғыҙлыҡ)

-Эйе, кешеләр араһындағы яңғыҙлыҡ-хәҙерге заманның ҡапма-ҡаршылыҡтарының һөҙөмтәһе. Һине аңлап еткермәүҙәре, күп осраҡта хатта ишетмәүҙәре кешеләрҙән ситләштерә. М.Кәрим “Хатта яңғыҙлығыңды һөйләргә лә кеше кәрәк” ти. Ошо трагедия хәҙерге ваҡыттың реаль күренеше.

-Шиғыр һеҙгә оҡшанымы?

-Үҙегеҙгә ниндәй мәғлүмәт алдығыҙ?

-Был шиғыр һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар уятты?

- Иғтибар менән слайдтағы яңғыҙлыҡ тураһындағы һүҙҙәрҙе уҡыйбыҙ, был һеҙҙең өсөн тағы ла бер тапҡыр һығымта яһау булыр.

Ҡулһыҙ ҡалған кеше әйберҙәрҙе яңынан тоторға өйрәнгән кеүек, өйрәнәм мин яңғыҙлыҡҡа. (Шамил Анаҡ)
Бөтә яуызлыҡтан яманыраҡ кешеләргә килгән яңғыҙлыҡ.(F. Рамзанов)
Яңғыҙлыҡтан сыҙар әмәлдәр юҡ,
Йәш саҡтарҙа быны һиҙмәйһең.
Ҡартлыҡ килгәс, эттәр араһынан

Үҙеңә хатта иптәш эҙләйһең.(Ф.Ғәбиҙуллина)

4. Баһалау.

5. Өйгә эш. Яңғыҙлыҡ тураһында эссе яҙыу.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ризуанова Гөлшат Мирзаһит ҡыҙы,
Илеш районы Иҫке Татыш төп белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Р. Бикбаевтың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү, “Башҡортостан бында башлана” шиғырың идея-тематик йөкмәткеһен асыу, тасуири уҡыу күнекмәләрен, фекерләү, үҙ аллы эҙләнә белеү һәләтен үҫтереү, тыуған ергә һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: портрет, электрон дәреслек, компьютор, слайдтар

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ, һаумы әле!

Ниндәй йылы һүҙ икән.
Һәр күңелде иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән.

II. Психологик инеш.

Уҡытыусы талғын ғына музыка ҡуя, Ш. Бабичтың “Башҡортостан” шиғырынан өҙөктө яттан уҡый:

Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң иреккә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан гөлбостан,
Рәйханостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан…

- Ш. Бабичтың был шиғыры һеҙгә танышмы?
- Был шиғыр “Башҡортостан” тип атала.
- Эйе. Был шиғыр юлдары тыуған ере - Башҡортостаны, халҡы, теле өсөн янып, армай хеҙмәт итеүсе көслө рухлы шәхес, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил ағай Бикбаев тураһында яңғырай кеүек.

III. Төп өлөш.

1. Биография өйрәнеү.(Слайд)

Алдан уҡытыусы тәкдиме менән әҙерләнеп килгән бер уҡыусы биографик белешмә бирә, икенсе уҡыусы ижады, өсөнсө уҡыусы эшмәкәрлеге, дүртенсе уҡыусы маҡтаулы исемдәре тураһында иптәштәре алдында сығыш яһай.

Уҡытыусы:

“Һәләте менән Р. Бикбаев тапҡыр фекерле, уйсан шағир

М. Аҡмулла, Ш. Бабичтарҙан килгән көслө поэтик традицияларҙы, беҙҙең заманда уларҙы артабан үҫтереп һәм күрелмәгәнсә байытып ебәргән М.Кәрим, Р.Фариповтарҙың шиғри мәктәптәрен лайыҡлы дауам иткән шағирҙарҙың береһе” – ти академик Ғ. Хөсәйенов шағир тураһында.

Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем шағир ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Ул ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә.

2. “Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнеү.

Слайдта Башҡортостандың тәбиғәте күрһәтелә. Талғын көй ишетелә.Тасуири итеп шиғыр уҡыла.

- Был шиғырҙы тыңлағанда ниндәй хистәр кисереп ултырҙығыҙ?
- Башҡортостандың иҫ киткес бай, матур тәбиғәтен күҙ алдына килтерҙек.
- Ә автор, шиғырҙы яҙғанда ниндәй хистәр кисергән икән, нисек уйлайһығыҙ?
- Ул Башҡортостандың киңлектәренә хайран ҡалып ҡарап тора, тыуған ере менән ғорурлана.
- Шиғырҙы тағы бер ҡат уҡып сығығыҙ һәм уның йөкмәткеһенән сығып, шулай уҡ рәсемдәргә ҡарағанда тыуған уй-кисерештәрегеҙҙе лә ҡушып Башҡортостан тураһында үҙегеҙ һөйләп ҡарағыҙ әле. Бәлки ошо матурлыҡтан һеҙҙең күңелдәрҙә лә шиғри шәлкем тыуыр? (уҡыусылар һөйләй)

Башҡортостан – милләтемдең ғорурлығы,
Тау – урманлы уның төйәге.
Кеше тыуған ерҙең ҡәҙерен белһен -
Ошо минең изге теләгем.

- Афарин, уҡыусылар. Бик матур һөйләнегеҙ. Башҡортостан тураһында башҡа шағирҙар ижад иткән ниндәй әҫәрҙәр беләһегеҙ?
- Ш. Бабич “Башҡортостан”, М. Кәрим “Ҡайын япрағы тураһында” һ.б.

- Эйе, уҡыусылар, үҙ тыуған ерен ысын мәғәнәһендә һөйгән, ҡәҙерләгән бер генә кеше лә уның матур тәбиғәтенә, бай тарихына, ғорур тауҙарына, сылтырап аҡҡан шишмәләренә һәм батыр, көслө рухлы халҡына ҡарата битараф булалмай, минеңсә.

Хәҙер шиғырҙы иғтибар менән тағы бер тасуири итеп уҡып сығайыҡ.

- Уҡыусылар, автор шиғырҙа ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланған?
- Сағыштырыуҙар ҡулланған.
- Шул юлдарҙы уҡып китәйек әле.

1. Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,

Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан.

2. Талпына ла күктә тулай,

Яҙ айында һабан турғайындай.

3. Ҡояш кеүек ҡарап туп-тура.

4. Йөҙөгөҙ аҡ булһын,

Минең кеүек,

Минең кеүек – Башҡортостан кеүек,

Был донъяла тура ҡарарлыҡ.

- Был сағыштырыуҙар шағирҙың ниндәй хистәрен сағылдырыуға булышлыҡ итә?
- Был юлдарҙа шағир ҡайындарҙы ап-аҡ нурға тиңләй, үҙен күкте йәмләп талпынып һайраусы ҡошсоҡ һымаҡ хис итә.
- Эйе, уҡыусылар. Сит ерҙәрҙә йөрөп, үҙ илен һағынып ҡайтыусыға уның ни тиклем ҡәҙерле булыуын, тыуған ерҙең яҡты йөҙ менән ҡаршы алыуын, халҡының киң күңеллелеген әйтеү өсөн Башҡортостанды ҡояш менән сағыштыра.
- Тағы ниндәй һүрәтләү саралары таптығыҙ?
- Метафоралар:

1. Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,

Ҡоласымды минең киңәйтеп.

1. Кешем намыҫында кер күрһәләр.
2. Ерем ҡуйыны, тауыш ағыуы.
3. Талпына күңел.
4. Күңел күктә тулай.

- Был метафоралар, ысынлап та, әҫәрҙең тәрән мәғәнәле булыуына булышлыҡ итә.
- Шулай уҡ “ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр”, “йөҙөгөҙ аҡ булһын”, “сабыр тауыш” кеүек эпитеттар әҫәрҙең теленә нәфислек бирә, уны стилистик яҡтан байыта.
- Башҡортостан исеменән әйтелгән:

Мин бит башланамын һинән, унан,

Кешеләрем, һеҙҙән башланам!

тигән шиғыр юлдарын нисек аңлайһығыҙ?

- Һәр ерҙе уның кешеләре матурлай, биҙәй, данлай, таныта…
- Тимәк, Башҡортостан урман-тауҙары, йылға-күлдәре, ер-һыу байлыҡтары менән генә күркәм түгел, шул ерҙә йәшәгән кшеләре, уны данлаған, бар донъяға ишеттергән батыр, эшсән ул-ҡыҙҙары менән дә маҡтаулы. Ә һеҙ шундай кешеләрҙән кемдәрҙе беләһегеҙ?
- Бейеүсе Рудольф Нуриев
- Сәйәсәтсе Эльвира Набиуллина
- Спортсы Ирек Зарипов (һ.б тураһында фекер алышыу, слайдтар күрһәтеү)

IV. Йомғаҡлау.

- Ә Рауил Бикбаевты үҙенең халҡының данлы улы тип буламы?
- Әйе, була.
- Ни өсөн шулай уйлайһығыҙ?
- Рауил Бикбаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры. Ул үҙенең ғүмерен, ижадын, бар булмышын халҡына бағышлаған, уға бөгөнгәсә тоғро хеҙмәт итә.
- Ысынлап та, уның ижадында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара.

V. Өй эше биреү.

1. Башҡортостан тураһында ижади эш (шиғыр, инша, һүрәт).
2. Шиғырҙы тасуири уҡырға.

Дәрес Башҡортостан тураһында йыр тыңлау менән тамамлана.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “ХАЛҠЫМА ХАТ” ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Рамазанова Алһыу Нәбил ҡыҙы,
Кушнаренко ауылы гимназияһы

Маҡсат: Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән ҡыҫҡаса таныштырыу; Р.Бикбаевтың ижадына хөрмәт, ҡыҙыҡһыныу, туған телгә яратыу тәрбиәләү; шағирҙың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың ижады буйынса слайдтар, мультимедиа проекторы, китаптары, “Ағиҙел” журналдары.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу этабы.

II. Уҡытыусы дәрестең эпиграфын уҡый. (1слайд)

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Әңгәмә.

- Был шиғыр юлдары кемдеке? Ниндәй әҫәрҙән?
- Эйе, дөрөҫ был юлдар Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” әҫәренән.

III. Яңы тема.

А) Дәрестең маҡсатын аңлатыу.

Бөгөнгө дәресебеҙ етди һәм актуаль темаға – тел яҙмышына, халыҡ яҙмышына бағышлана.

Б) Уҡытыусы Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижады тураһында һөйләй (2, 4-се слайдтар)

В) “Халҡыма хат” поэмаһын өйрәнеү.

- Уҡытыусы был хаттың яҙылыу тарихын ҡыҫҡаса һөйләй һәм хатты уҡып күрһәтә, Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһын башҡорт милләтенең яҙмышы, киләсәге ҡурҡыныс аҫтына ҡуйылған мәлдә яҙыуын аңлата.
- Поэма өҫтөндә эш.

Һүҙлек эше.

Оран – яуға саҡырған ауаз

Маһир – оҫта (талантлы)

Кәр – сәм, ныҡышмалылыҡ

- Уҡытыусы поэманы тасуири итеп уҡый.
- Уҡытыусының инеш һүҙе.

Халыҡ тормошоноң хәл иткес мәлдәрендә сәсәндәр яҙыусылар халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, уның яҙмышына йоғонто яһаған мәсьәләләрҙе аңлата һәм уны хәл итергә саҡыра. Мәҫәлән, С. Юлаев яуҙаштарын дошманға ҡаршы көрәшкә әйҙәгән, Аҡмулла иһә халҡын белемгә, ғилемгә эйә булырға өндәгән. Ш.Бабич “Башҡорт халҡына көйлө хитап” әҫәрендә туған халҡына З.Вәлиди сәйәсәтенән аңлата, ә М.Кәрим “Башҡорт халҡына яуап хаты” шиғырында Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында халыҡты ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшкә әйҙәй. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп яҙылған әҫәрҙәр бөгөн дә тыуа. Шуларҙың күренекленеһе – Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһы.

Г) Поэманың йөкмәткеһен үҙләштереү.

Әңгәмә.

- Шиғри хатты яҙыуға нимә сәбәпсе булған?
- Хат авторы ниндәй фажиғәгә тап була? (рус телендә яҙылған хатты күрһәтеү һәм эстәлеген ҡыҫҡаса һөйләү)
- Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?
- Поэманың инешен нисек аңлайһығыҙ? Шағир ни өсөн “Тамырыңды уйлап ғорурланам, Бөгөнгөңдө күреп хурланым”, - тип әйтә?
- Телен, милләт азатлығын, Уралын һаҡлап яуға күтәрелгән халыҡ хаҡында әҫәрҙең ҡайһы юлдарында әйтелә?
- Ирек даулап, телдәре киҫелгән башҡорттоң бөгөнгөһө нисек һүрәтләнә?
- Шағирҙы бөтә донъяла танылыу алған, донъя сәхнәләрен сайҡалдырған мәҙәниәте булған милләттең хәле, яҙмышы ни өсөн борсолдора?
- “Сабыйының телен киҫкәндәр” тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ?

- Дөрөҫ, ата-әсә балаһын көсләп теленән яҙҙыра, сит телгә балам маһир, тиеп “ғорурлана”, һөҙөмтәлә бала үҙ милләтенән ояла.

Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый алһа,
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан,
Сыуаш булыуынан,
Мари булыуынан оялһа.

- Шундай “телһеҙ кешеләр” үҫеп сығыуында автор кемдәрҙе ғәйепләй?
- Телдең бөтөүе нимәгә килтереүе мөмкин?
- Шағир киләсәк быуынға ниндәй өмөт бағлай?
- Һеҙгә поэманың ниндәй юлдары нык тәьҫир итте? (Поэманы балалар уҡый)

Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” мөрәжәғәте-хаты, ысын мәғәнәһендә, халыҡты уята, бер кемде лә битараф ҡалдырмай, “телһеҙ” башҡорттарҙа туған теленә ихтирам, уны өйрәнеү теләге уятһа, үҙ теле өсөн көрәшкән кешеләргә рух нығлығы һәм көс бирә.

- Әҫәрҙә күтәрелгән борсоулы проблемаларҙы хәл итеү өсөн республикабыҙҙа ниндәй эштәр атҡарыла?

Ни мәғәнә батшаларҙың исемен,
Сит ил тарихтарын ятлауҙан,
Ил тарихы илгә бикле булһа,
Намыҫыбыҙҙы туҙан ҡаплаһа? –

тигән юлдар бөгөнгө көнгә тап киләме?

(Хәҙерге көндә хәлдең үҙгәреүе, суверенитет, телдәр тураһында закон ҡабул ителеүе, мәктәптәрҙә туған телде өйрәнеү, Бала йылы, Йәштәр йылы һ. б. хаҡында уҡыусыларҙың яуаптары.)

V. Йомғаҡлау. Шулай итеп, Р. Бикбаев “Халҡыма хат” әҫәрендә туған телебеҙҙең юғала барыуы хаҡында хафаланып уйлана, башҡорт балаларының үҙ телдәрен, әсә телен белмәүенә борсола. Телдең ҡороуы халыҡтың юҡҡа сығыуына килтереүенә әрнеп иҫкәртә. Туған халҡын, ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, моңһоҙлоҡтан, ялҡаулыҡтан арындырырға, уянырға саҡыра.

Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

VI. Өйгә эш. Әҫәрҙе тасуири уҡырға өйрәнергә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “УРАЛЫМА” ШИҒЫРЫ АША ИЛһӨЙӘРЛЕҠ ТӘРБИӘЛӘҮ

Мусина Инзира Рим ҡыҙы,
Туймазы ҡалаһы
Муниципаль белем биреү учреждениһы 4 –се урта мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбайҙың тормош юлы һәм ижады тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп үтеү, “Уралыма” шиғырының идея – тематикаһын асыҡлау; телмәр байлығын, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү; Тыуған ергә һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

Ҡулланылған әсбаптар: проектор, экран, магнитофон, фонояҙма, Рәсәй картаһы, Башҡортостан картаһы.

Эпиграф:

Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым,
Һиндә минең терәгем,
Һиндә минең йөрәгем…
Рәшит Шәкүр

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты

Тәбиғәт беҙҙе ике ҡуллы, ике аяҡлы, ике күҙле итеп яратҡан. Ә бына баш – берәү. Йөрәгебеҙ ҙә яңғыҙ. Шуға ла йөрәгебеҙгә дуҫ, фекерҙәш кәрәк, һөйләшергә, серләшергә…

Һаумыһығыҙ, ҡәҙерле уҡыусылар. Бөгөн беҙ бында ниндәй маҡсат менән бергә йыйылғанбыҙ, тимәк? (яуаптар)

Эйе, беҙ бөгөн дәрестә һөйләшәбеҙ, уйлашабыҙ.

Тик әлегә дәресебеҙҙе һөйләшеүҙән түгел, ә матур фотоларҙан башлайбыҙ.

Слайд – Урал тауҙары

II. Инеш

Уҡытыусы:

- Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (яуаптар)

Дата, теманы яҙыу

Һорау:

- Ә нимә ул Урал? (яуаптар)

Урал – тауҙар теҙмәһе.

Уҡытыусы:

- Бына һеҙҙең алдығыҙҙа Рәсәй картаһы. Ошо картанан кем Уралды табып, беҙгә күрһәтергә теләй?

Бер уҡыусы экрандағы картанан Урал тауҙарын таба.

Экранда: Ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Беҙҙең эраға тиклем II быуатта йәшәгән тарихсы Птолемей төҙөгән картала Урал тауҙары Рифей тауҙары тип аталған.

Икенсе бер тарихсы Дамаст Сигейский һәр ваҡыт һыуыҡ төньяҡ елдәре иҫеп торған Риппей тауҙары тураһында яҙып ҡалдырған.

Боронғо рус сәйәхәтселәре Урал тауҙарын Каменный пояс, тип атағандар.

Һорау:

- Ни өсөн рустар “Каменный пояс” тигән исем биргәндәр һуң уға? (яуаптар)

III. Төп өлөш.

Уҡытыусы:

– Ә хәҙер, уҡыусылар, ниһайәт, дәресебеҙҙең эпиграфына иғтибар итәйек. Экрандан уҡып үтәйек әле:

Шоңҡар йәнле Уралым,
Толпар һынлы Уралым,
Һиндә минең терәгем,
Һиндә минең йөрәгем…
Рәшит Шәкүр

Һорау:

– Иң тәүҙә ниндәй юлдарға иғтибар итергә кәрәк, тип уйлайһығыҙ? (яуаптар)

Уҡытыусы:

– Дөрөҫ, шағир Уралды толпар менән сағыштырған.

– Нимә ул толпар? (яуаптар)
“Аңлатмалы һүҙлек”тән:
Толпар - әкиәттәге ҡанатлы ҡош- бик яҡшы, етеҙ ат, арғымаҡ
һорау:
- Ә башҡа шағирҙар нимә менән сағыштыра икән һуң Уралды?
Мәҫәлән, Рауил Бикбаев… Ә ни өсөн уның тураһында һөйләшергә теләйемме? Ә был - әлегә сер. Был серҙе ҡайһы бер иптәштәрегәеҙ генә сисергә ярҙам итә ала. Бының өсөн улар ярҙамында һеҙгә бәләкәй генә блиц-һорауҙарға яуап бирергә генә кәрәк:
Экранда: Р. Бикбев портреты, блиц-һорауҙар
Исеме: (Рауил)
Ул - (Шағир)
Тыуған йылы: (1938)
Тыуған ере: (Ырымбур өлкәһе, Үргe-Ҡунаҡбай ауылы)
Билдәле шиғырҙары: (“Халҡыма хат”, “Ғүмер уртаһы”, “Уралыма” һ.б.). һорау:
Ни өсөн Р.Бикбаев тураһында һөйләшергә булдыҡ бөгөнгө дәрестә? (Р.Бикбаевҡа 75 йәш)
IV.“Уралыма” шиғыры өҫтөндә эш:
1. Шиғырҙы тасуири уҡыу.
2. һүҙлек эше: (экранда)
Ҡын – билгә тағып йөрөй торған ҡоралдың һауыты
Һын – фигура, кәүҙә, буй
Килмешәк – сит яҡ кешеһе
Екән – ҡамыш
3. Сиратлап уҡыу
4. План төҙөү:
I. Урал –
II. Урал –
III. Урал –
Шиғырҙы уҡыу.

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡандан ҡынға ингән ҡылысҡа.
Шул ҡылысты ҡулға алмаҡ булып,
Күпме дошман ерҙ тырышҡан.
Ил баҫырға килгән һәр килмешәк
Шул ҡылыстан ауған туралып.
Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым…

5. һорау:
- Шағир Уралды нимә менән сағыштыра?
- Ә нимә ул ҡылыс?
һорау:
- Ошо Урал-ҡылыстың тарихы тураһында автор ниҙәр һөйләй?
- Ә ниңә был ҡылыс кәрәк икән килмешәктәргә? (яуаптар)
Уҡытыусы:
Ҡылыс – яу ҡоралы. Һәр яугирҙың үҙ ҡылысы булған. Уны тик ысын батырҙарға ғына бүләк итер булғандар, бүләк атаһы- улына йә олатаһынан – ейәненә ҡомартҡы кеүек күсә килгән. Мәҫәлән, “Урал батыр” әкиәтендә Тереһыу шишмәһен, әжәлде эҙләп юлға сыҡҡан Уралға атаһы Йәнбирҙе ҡарт борондан ҡалған ҡылыс бүләк итә. Шулай уҡ “Акъял батыр” әкиәтендә лә атаһы ил гиҙергә сығыусы улына батырҙан ҡалған булат ҡылыс тоттора.
Бына ул – яу ҡылысы. Экранға иғтибар итегеҙ.
Уҡытыусы:
Был – башҡорттоң яу ҡылысы.
- Оҡшағанмы Урал тауына? (яуаптар)
- Кем Рәсәй картаһынан Урал-ҡылысты күрһәтергә теләй?
Бер уҡыусы картанан Урал-ҡылыстың һабын, йөҙөн күрһәтеп үтә
Уҡытыусы:
- Был ҡылыс – ябай түгел, батыр ҡылысы. Бәләкәй генә мәғлүмәт:
Салауат ҡылысы 1928 йылда Ғафури районында табыла һәм Латвиялағы Хәрби музейға тапшырыла. Уның оҙонлоғо – 96 см, яҫылығы-3см. Ҡиммәтле ваҡ таштар менгән биҙәлгән, һабы – еҙ, уға арыҫлан башы төшөрөлгән. Ҡылыс йөҙөндә ғәрәпсә яҙыу бар.
Уҡытыусы:
- Нисек уйлайһығыҙ, кем дең ҡылысы булырға мөмкин был? (яуаптар)
Тимәк, ҡылыс – ул яу ҡоралы ғыны түгел, ә батырҙар ҡоралы ла...
- Ә һеҙ ҡылыс тотоп, Уралды һаҡлаған ниндәй батырҙарҙы беләһегеҙ? (яуаптар)
Алдар батыр, Ҡараһаҡал, Салауат Юлаев, Ҡаһым түрә, Муса Мортазин, Генерал Шайморатов, һ.б.
- Ә ни өсөн һуғышҡан улар? (яуап: тыуған ер өсөн)
Уҡытыусы:
Шулай итеп, батырҙар, ҡулына ҡылыс алып, Уралды дошмандан һаҡлағандар.
6. Шиғырҙың киләһе дүрт юлында нимә тип әйтелә?
Шишмәләреңминең йөрәк аша

Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр.

Уҡытыусы:

Ҡыҙыҡ, ҡылыс тураһында һөйләне лә шағир, ҡапыл, ниңәлер, шишмәгә күсеп китте…

- Ни өсөн, тип уйлайһығыҙ? (яуаптар)

Уҡытыусы:

- Ниндәй әкиәт батыры шишмә эҙләп, юлға сыға?

- Ни өсөн эҙләй Урал батыр Тереһыу шишмәһен? Ни эшләтә ул был һыуҙы? (яуаптар)

Тимәк, шишмә, һыу - ул йәшәү сығанағы, тереклек өсөн бик кәрәк. Бында ошо һүҙҙәргә лә иғтибар итегеҙ, уҡыусылар.

Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,
Шул шишмәләр йәшәү илтәләр,- ти Р. Бикбаев.

Алдан әйтеп үтеүебеҙсә, шишмә ерҙәге бар тереклекте, тәбиғәтте йәшәтеүсе көс. Ә бына шағирға был шишмә һыуы ғына етмәй, уға тағы ла икенсе төрлө шишмә лә кәрәк.

- Шағирға шифыр яҙыр өсөн нимә кәрәк, әйтегеҙ әле.

Әңгәмәләшеү

Рауил Бикбаев – ижадсы, уға тағы ниндәй шишмә кәрәк икән? (яуаптар: илһам шишмәһе)

Р.Бикбаев үҙе был турала былай ти: (экрандан уҡый)

“…Илһам шишмәһе – туған халҡымдың күңелендә…” Рауил Бикбаев

Уҡытыусы:

Ә хәҙер һуңғы юлдарға күҙ һалайыҡ:

Һиңә бағһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та,
Сөнки беләм:
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар.

Шулай итеп, уҡыусылар, шағирға шат, тыныс, күтәренке кәйефле булыу өсөн, шифырҙар яҙыу өсөн ниҙәр кәрәк? (Уралы – тыуған ере, Урал шишмәләре, туған халҡы)

- Ә һеҙгә тыуған ерегеҙ, туған халҡығыҙ ҡәҙерлеме? (яуаптар)

Уҡытыусы:

- Әлбиттә, беҙҙең һәр беребеҙгә үҙ ере, иле үҙ халҡы бик ҡәҙерле, сөнки (мәҡәлдәрҙе дауам итәбеҙ):

Уҡыусылар мәҡәлдәр төҙөй:

1. Тыуған ер – алтын бишек
2. Илен белмәгән – тиле
3. Алтын – көмөш яуған ерҙән тыуған – үҫкән ил артыҡ
4. Ерле – ерендә, екән – күлендә
5. Иле барҙың теле бар, теле барҙың көнө бар.
6. Ат – туйған ерендә, ир – тыуған илендә
7. Иле бар батыр хур булмаҫ, батыры бар ил хур булмаҫ
8. Ватанһыҙ кеше – урманһыҙ һандуғас

Уҡытыусы:

Ә бына киләсәгебеҙ тыныс, матур булһын өсөн беҙ ни эшләй алабыҙ һуң? Әйҙәгеҙ, минән башлайыҡ. Мәҫәлән, мин, беҙҙең тыуған еребеҙ тыныс, матур, үҫешкән ил булһын өсөн һеҙгә белем бирә, юғалып ҡалмайынса, ҡурҡмайынса тормош юлына сығырға ярҙам итә алам.

Ә һеҙ ни эшләй алаһығыҙ? Әйҙәгеҙ әле шул турала серләшеп алайыҡ.

Илемдең киләсәге тыныс, матур булһын өсөн мин…

Уҡыусылар яуап бирә.

Уҡытыусы:

Шулай итеп, Р.Бикбаев Уралды ҡылысҡа тиңләгән, Рәшит Шәкүр толпар менән сағыштырған.

- Ә һеҙ нимәгә оҡшатаһығыҙ был тауҙар теҙмәһен? (яуаптар)

М.Кәрим :

Ҡанат йәйгән
Самаһыҙ ҙур
Ҡошҡа оҡшай Урал тауы,- тип яҙа.

Ә бына С.Юлаев шифырында Уралды алтын-көмөш менән сағыштыра:

С. Юлаевтың “Уралым” шифырын тыңлау

– һеҙгә ошо мөһабәт ҡоштай ғорур, толпарҙай алға елгән, алтын-көмөшкә тиң ерҙең ысын һаҡсылары, граждандары булып үҫеүегеҙҙе теләйем, уҡыусылар.

- Һау булығыҙ!

РАУИЛ БИКБАЕВ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!»

Тажетдинова Мәүлиҙә Турыйән ҡыҙы,
Ҡырмыҫҡалы районы Иҫке Шәрәй
төп дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостан йылғалары тураһында ҡыҫҡаса белешмә биреү, башҡорт халыҡ йыры «Йәмле Ағиҙел буйҙары»н тыңлау, Рауил Бикбаевтың биографияһы менән таныштырыу, поэманан өҙөктө уҡыу, һүҙлек эше үткәреү, телмәр үҫтереү өҫтөндә эшләү; тәбиғәт байлыҡтарына һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаев портреты, һүрәттәр, аудиояҙма, компьютер, проектор, мультимедиа.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

Артикуляцион күнегеү.

Ға – ға – ға – тулҡынын ҡаға йылға,
Ҙа –ҙа – ҙа – балыҡтар йөҙә һыуҙа,
Ҡа –ҡа – ҡа – беҙ барабыҙ балыҡҡа.

II. Яңы тема.

1.Йомаҡ ҡойола.
Оло юлдан күс килә,
Иртән килә, кис килә.
Үр яратмай, әйләнә,
Арты өҙөлмәй бәйләнә.(йылға)

2. Башҡортостан йылғалары тураһында ҡыҫҡаса белешмә.

Һеҙ ниндәй йылғалар беләһегеҙ?

Башҡортостанда 13 меңгә яҡын йылға иҫәпләнә. Иң ҙур йылға – Ағиҙел. Уның оҙонлоғо 1430 километр. Ағиҙелдең иң ҙур ҡушылдығы – Ҡариҙел йылғаһы.Уның оҙонлоғо 918 километр.

3. Башҡорт халыҡ йыры «Йәмле Ағиҙел буйҙары»н Башҡортостандың халыҡ артисы Зәки Мәхмүтов башҡарыуында тыңлау.

4. Ағиҙел тураһында беҙ ниндәй әҫәрҙәр уҡыныҡ, иҫегеҙгә төшөрөп килдегеҙме? Эйе, Рәшит Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары»поэмаһынан өҙөк уҡыныҡ. Поэманан өҙөктө уҡыу.

5. Һорауҙарға яуап биреү.

- Ағиҙелде шағир нисек тасуирлай?
- Ниндәй сифаттар ҡуллана?

Әйҙәгеҙ, шул сифаттар менән кластер төҙөйөк:



- Ниндәй һүрәт килеп сыҡты? Эйе, ҡояш. Ярай, был ҡояш беҙҙең дәресебеҙҙе биҙәп торһон.

6. Таблоға ҡарап бөгөн үтәсәк теманы белеп була.

	Р		Т		Ә	Ү	Д	К	Ҙ
	С		Р		У	И	Л	F	Ү
	Ц		Б		К	Б	А	Е	В
	һ		У		А	Н	Ы	М	Х
	П		һ		У	Ҙ	А	Р	Ө
	Л		Б		Р	Е	Г	Е	Ҙ

7. Рауил Бикбаевтың биографияһы менән танышыу. Уҡыусылар үҙ аллы эшләйҙәр һәм «Инсерт»алымын ҡулланып билдәләп баралар, аҙаҡ тикшерелә.

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында ярлы крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлгәс, күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына туғандарына күсеп бара һәм шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә һәм уны уңышлы тамамлай.

V (миңә билдәле)	+ (яңылыҡ)
шағир	Башҡортостандың халыҡ шағиры
Ырымбур өлкәһендә тыуған	БДУ-ла уҡыған
Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты	Экология, туған тел, халыҡтың яҙмышы мәсьәләләрен күтәрә
Яҙыусылар союзы рәйесе	Бөгөнгө көндә депутат

8. Күҙаллау. (һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр күрһәтелә) Хафаларым артты, шеш тыуа, һәләкәт, Ағиҙелде быуасаҡ, шартлау, ағыу–кислоталар, һөрөм яғыла, терегөмөш аға.

Уҡытыусы. Был юлдар һеҙҙә ниндәй уй-кисерештәр уятты? (Уҡыусылар яуап бирә. Хәүеф, хафа, бәлә, ҡурҡыу һ.б.).

Уҡытыусы. Уҡыусылар, беҙ дәрес башында Ағиҙелде ҡояш һүрәте менән сағылдырғайныҡ, ләкин беҙҙең ҡояшыбыҙҙы болот ҡаплап бара түгелме?

Болот күренһә, беҙҙе ниндәй тойғолар биләй? (Уҡыусылар яуап бирә. Хәүеф, хафа, бәлә, ҡурҡыу һ.б.).

Уҡытыусы. Эйе. Дәрестә уҡыясаҡ әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ барасаҡ? Нисек уйлайһығыҙ? Рауил Бикбаев поэмаһын ни өсөн «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»тип атаған?

9. «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»поэмаһынан өҙөктө тыңлау.

10. һүҙлек эше

хафа – беспокойство

шеш – опухоль

бушбоғаҙ – горлопан

һөрән –ҡысҡырыу; призыв

ҡыуғын – сплав

ҡырғын – мор

ылымыҡ – ил, водоросль

оран һалыу, саң ҡағыу, төрән һуғыу – бить в набат

элмәк – боғалаҡ; петля

11. һорауҙар ярҙамында әҫәрҙе анализлау. Поэмала ниндәй проблема күтәрелә? Әҫәрҙең төп идеяһы һәм темаһы тураһында нимә әйтергеҙ? Ағиҙелдең бөгөнгө хәлен тасуирлаған урынды табып уҡырға.

Башҡаса шул хәҙер заман хәле,

Башҡаса шул шағир уйҙары,

Йәмлеме Ағиҙел буйҙары,

Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

Ни өсөн шағир шундай һорау ҡуя? (Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтәләр)

12. Ижадсылар үҙәге. Ағиҙелдең бөгөнгө кисерештәрен нисек сағылдырыр инегеҙ?(Берәүҙәр һүрәт төшөрә, икенселәр эссе яҙалар)

Мәҫәлән: Мин – Ағиҙел. Илайым. Был минең ҡайғы – һағыш йәштәрем. Ҡышын миңә бик күңелһеҙ. Карбоҙ аҫтында кешеләрҙе һағынып, ашҡынып көтәм, тик үҙ башыма тигәндәй, йәмле йәй көндәрендә улар миңә ял итергә киләләр. Улар киткәс, мине күргәнегеҙ бармы икән? Ярҙарым сүп түгеү урыны кеүек булып ҡала. Рәшит Нигмәти мактап йырлаған сағым ҡайҙа икән тип илайым. Миңә ошондай ҡараш дауам итһә, хоҙай һаҡлаһын, нимә көтә мине - шуға әрнейем.

lll. Йомғаҡлау. Синквейн аша яһала.

Ағиҙел.

Саф, йәмле.

Аға, һуғара, йәшәтә.

Ул - йәшәү сығанағы.

Башҡортостан күрке.

Эйе, уҡыусылар, шағир үҙе лә киләсәктә Ағиҙелдең хәле яҡшырыуына өмөтөн өҙмәй. Быйылғы йылды президентыбыҙ Рөстәм Зәки улы Хәмитов «Тирә -яҡ мөхитте һаҡлау йылы» тип иғлан итте. Шулай булғас, Ағиҙелебеҙ ярҙамһыҙ ҡалмаҫ тигән өмөттә мин. Матурлыҡты кеше ҡотҡарыр. Ул беҙҙән тора, уны һаҡлайыҡ.

lV. Өйгә эш. Өҙөктө уҡырға. «Ағиҙелде ҡотҡарайыҡ» тигән темаға бәләкәй инша яҙып килергә. Баһалар куйыла.

"ЙӘЙҒОР КЕҮЕК БАЛҡЫЙ ТЫУҒАН ЕРЕМ"

Хәйруллина Лилиә Нуритдин ҡыҙы,
Әбйәлил районы Гусев урта мәктәбе

Маҡсат: Р. Бикбаевтың биографияһын хәтергә төшөрөү нигеҙендә уның әҫәренең әһәмиәтен, йөкмәткеһен үҙләштереү; тасуири уҡыу, һүҙлек өҫтөндә эштәр башҡарыу, һорауҙарға яуаптар алыу; уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү, эҙләнеү күнекмәләрен камиллаштырыу; Тыуған илгә оло һөйөү, рухи ныҡлыҡ тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: дәреслек, карта, плакаттар, һүҙлектәр, фонохрестоматия, китап күргәҙмәһе.

Хәйерле көн хөрмәтле ҡунаҡтар, уҡыусылар!

Бөгөнгө дәрестә һеҙ, үтәсәк тема буйынса белем алып, донъяға заманса күҙлектән ҡарап, үҙегеҙгә асыш яһарға тейешһегез. Шуның өсөн барлыҡ иғтибарығыҙҙы дәрестең аталышына, девизына йүнәлтеүегеҙҙе һорайым. Улар араһындағы оҡшаш яҡтарҙы билдәләп үтергә тейешлекте иҫкәртәм.

Ә хәҙер таҡтаға яҙылған девизға иғтибар итәйек,

- Был фигураны нәмәгә оҡшатырға була? /Йәйғор/

- Йәйғорҙа ниндәй төҫтәрҙе күрәбеҙ?

- Ул нимәне символлаштыра? Нимәнең билгеһе? / Дуҫлыҡ, берҙәмлек билгеһе /

-Был төҫтәр ниндәй мәғәнәгә эйә? Йәшел төҫ - азатлыҡ һәм тормоштоң мәңгелеген аңлата. Аҡ төҫ - тыныслыҡты һөйөү, үҙ-ара хеҙмәттәшлектә белдерә. Зәңгәр төҫ - асыҡлыҡ, яҡтылыҡты аңлата.

Рәсәй флагы төҫтәре:
аҡ төҫ-таҙалыҡ, тыныслыҡ, сафлыҡ
күк төҫ - ышаныс, тотороҡлолоҡ
ҡыҙыл төҫ - көс-берҙәмлек,
ил өсөн ҡойолған ҡан һәм энергия

Тыуған еркәй-алтын бишек
Сит ерҙәрҙә донъя гиҙеп
Таба алмаҫ һис кем, ахыры,
Шул һүҙҙәрҙән ҙурыраҡ аҡылды... (Рәшит Назаров.)

Ә хәҙер плакатта яҙылған дәрес девизын уҡып, аңғәмәләшеүгә күсәйек.

Рәшит Назаровтың шиғри юлдарынан нимәне күҙалларға була? Девиздың дәрестә әһәмиәтен билдәләү өсөн, әҫәр менән яҡындан танышҡас, ҡайтанан әйләнеп ҡайтасаҡбыҙ.

Дәрестең төп темаһын асыҡлап китерҙән алда ҡыҫҡаса ғына тарихҡа күҙ һалайыҡ. Был тажҙарға нимә яҙылған? Улар тарихта ниндәй әһәмиәткә эйә?

1919 й., 23 март – Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының төҙөлөүе.

1922 й., июнь – Башҡортостан АССР-ның хәҙерге мәлдәге ваҡыт сиктәрен билдәләү һәм Өфө ҡалаһының үҙәккә әүерелеүе.

1938 й., 12 декабрь – Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тыуған көнө / биографик белешмә биреп китеү /

1941 - 1945 – Бөйөк Ватан һуғышы.

1990 й., 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагын ҡабул итеү көнө.

1993 й., 12 октябрь – Башҡортостан Республикаһының дәүләт гербы һәм гимнын булдырыу.

Был даталар нимәне хәтерләтә, нимәгә ишара яһай? Быға ҡарата ниндәй һығымта яһарға була? Ниндәй мәҡәл килтерә алаһығыҙ? Эйе, һеҙҙең фекерегеҙ менән төплө килешәм һәм был фекерҙәрҙе билдәле ғалим, яҙыусы Ғайса Хөсәйеновтың һүҙҙәре менән йөпләп ҡуям: "Тарих - халыҡ яҙмыштары төйөнө, заманалар ағышы, яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ, аң менән томаналыҡ, яҡшы менән яман көрәше". Ғалимдың ошондай фекерҙәре менән, уҡыусылар, һеҙҙә килешәһегеҙҙер? Эйеме? Шулай итеп, бөгөнгө шиғыр нисек аталды? / "Башҡортостан бында башлана"

һүҙлек өҫтөндә эш:
офоҡ - горизонт (күк менән ерҙең тоташҡан һымаҡ күренгән һыҙығы)
ҡитға - материк
алыҫҡа бағыу - алыҫҡа ҡарау
ҡолас - размах.

Ә хәҙер шиғырҙы иғтибар менән тыңлағыҙ. Һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар уятыуын әйтерһегеҙ?(Уҡытыусы әҫәрҙе тасуири уҡый, һуңынан уҡыусыларға уҡырға ҡуша һәм уларға һорауҙар бирә).

- Шиғырҙың ҡайһы юлдары һеҙҙе тетрәндерҙе, уйландырҙы йә иһә ҡыуандырҙы?

- Автор нимәләрҙең исемдәрен телгә ала? Йылғалар аша нимә әйтергә теләй? /Картанан эҙләтеп таптырыу һәм схематик картанан күрһәтеү).

- Башҡортостандың тағы ла ниндәй йылғаларын беләһегеҙ? Йәй көндәрендә ниндәй йылға-күлдәрҙә һыу инәһегеҙ, сынығаһығыҙ?

- Рауил Бикбаев әҫәрен яңғырашлы, ныҡылмалы, хисле булһын өсөн ниндәй сараларҙы ҡуллана? / һүрәтләү сараларын таблица ярҙамындаиҫкә төшөрөү).

Йомғаҡлау.

-Уҡыусылар, был дәрестә ниндәй асыштар яһанығыҙ?

1. Тарих, география фәндәре менән бәйләнеш булыуын асыҡлау.

2. Йәйғор һүрәтендә ике илдең флаг төҫтәре сағылыуы, уларҙың иҡтисади, сәйәси, мәҙәни үҫеш берҙәмлегенең һүрәтләнеше.

3. Даталар яҙылған таждар ҡурай формаһы аша ете ырыуҙың татыулығын, атай-олатайҙарыбыҙ мираҫын киләсәк быуынға еткереү.

4. Ә беҙҙең төп бурысыбыҙ - Тыуған илебеҙҙең ысын хужаһы, патриоты булыу. Киләсәктә Башҡортостан республикаһының сәскә атыуын, унда йәшәүсе барлыҡ милләттәрҙең берҙәмлеген, дуҫлығын нығытыу һәм үҙ илеңдең файҙалы шәхесе булып ҡалыу.

Өйгә эш. Шиғырҙы тасуири уҡырға өйрәнеү һәм һүрәтләү сараларын яҙып бөтөрөргә.

«ҮҘЕ – БАҪЫУ, ҮҘЕ – ҺАБАНСЫ»

Ҡускарова Зилә Рәхимйән ҡыҙы,
Әбйәлил районы, 1-се һанлы Аскар
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙың Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы тураһындағы белемдәрен тулыландырыу; бәйләнешле телмәр, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү; Р.Бикбаевтың тормош һәм ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм һөйөү тәрбиәләү;

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, китаптары, компьютер, экран-проектор.

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.
Р. Бикбай

Дәрес барышы

I. Ойоштороу.

II. Инеш.

Уҡытыусы.

- Уҡыусылар, шундай әҙиптәр бар, һәр эшкә һөнәрмән кеше кеүек, ниндәй әҙәби төргә, жанрға тотонмаһын, бынамын тигән затлы әҫәрҙәр ижад итергә ҡулынан килә һәм шуларҙың һәр-береһенең берҙәй дәрәжәләге оҫтаһы булып таныла.

Шундай әҙиптәрҙең береһе – Рауил Бикбаев. Беҙ бөгөн күп яҡлы талант эйәһе Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына байҡау яһап китәбеҙ. (Экранда Р. Бикбаевтың портреты)

III. Төп өлөш.

Боронғо Яйыҡ, Туҡ-Соран буйҙары, Ырымбур далалары – башҡорттарҙың борон-борондан йәшәгән ерҙәре. Күпте күргән, күпте кисергән яҡтар (экранда Ырымбур далалары). Халыҡ илен, ерен һаҡлап, монгол-татар яуҙарына ҡаршы һуғышҡан. Үҙ иркен яҡлап, батшалыҡҡа ҡаршы баш күтәргән, әллә күпме ир-егеттәре яуҙарҙа баштарын һалған. Революция йылдары килгән. Башҡорттар Ырымбурҙа Башҡорт хөкүмәтен төҙөгән. Халыҡ үҙ ҡулы, үҙ аҡсаһы менән һалған Ҡарауанһарайҙы (экранда Ҡарауанһарай) ҡайтарып алған. Шунда хөкүмәт, уҡыу йорттары урынлашҡан. Ырымбур яҡтары республикабыҙға күренекле дәүләт эшмәкәрҙәрен, хеҙмәт алдынғыларын, әҙәбиәтебеҙгә Д. Юлтый, Ғ. Амантай, С. Агиш кеүек атаҡлы яҙыусыларҙы биргән.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев та сығышы менән ошо Ырымбур яҡтарынан. Уның шиғырҙарында, поэмаларында тыуып-үҫкән яҡтарының тәбиғәт йәме, халҡының күңел күрке, тарихы, хәҙергеһе киң сағылыш таба. Башҡортостан Республикаһын, туған халҡын данлаған, хәҙерге заман кешеһенең рухи донъяһын тасуирлаған шиғриәте башҡорт әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙанышы булып таныла бара.

- Кем һуң ул Р. Бикбаев? Ниндәй әҫәрҙәр ижад иткән?
- Һеҙгә Р. Бикбаев тураһында сығыштар әҙерләп килергә әйтелгәйне.

Балаларҙың сығыштары.

1. Беренсе уҡыусының сығышы. Р. Бикбаев – ҙур талант эйәһе.

“Миңә барлыҡ ижад юлымда шиғриәт менән фәнни эште бергә алып барырға тура килде. Сөнки мин ғилем донъяһына осраҡлы килеп юлыҡтым, тип уйламайым, мин был ғәйәт оло һәм арбаусы мөхиткә асыҡ маҡсаттар ҡуйып, был хеҙмәттең ни тиклем яуаплы һәм ауыр икәнен аңлап килдем һәм унда ғүмерлеккә ҡалдым”.

2. Р. Бикбаевтың тормош юлы (логик-мәғәнә-и моделдә күрһәтеү).

3. Башланғыс ижады.

“Вокзал” исемле тәүге поэмаһы 1962 йылда “Ағиҙел” журналында сыға. Тәүге китабы - “Дала офоҡтары” (1964), икенсе китабы - “Ҡош юлы” (1967), “Автобиография” (1969), “Ғүмер уртаһы” (1976).

4. Рауил Бикбаевтың тыуған ер, тәбиғәт, туған тел тураһындағы әҫәрҙәре. Р.Бикбаев күпселек шиғырҙарында бөгөн бөтәбеҙҙе лә уйландырған, борсоған мәсьәләләр ҙур урын биләй, улар тыуған ер яҙмышы, халҡыбыҙ яҙмышы, киләсәк хаҡында тәрәнерәк фекер йөрөтөргә, ғәмһеҙ генә йәшәмәҫкә мәжбүр итә.

Ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә саҡта,
Ҡул ҡаушырып, ғәмһеҙ ятмайыҡ.
Һаҡлайыҡ беҙ ғәзиз Ер - әсәне,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ! – ти, ул өҙгөләнеп.

5. Рауил Бикбаев – ғалим.

Р.Бикбаев – беҙҙең ҡайһы-бер әҙиптәребеҙ шикелле, яҙыусылыҡты ғилем эше менән алып барған ижадсы. Ул әҙәби тәнҡит- мәҡәләләре, рецензиялар, ижади портреттар яҙа. “Замандың шиғри йылъяҙмаһы” (1980), “Шағир һүҙе – шағир намыҫы” (1997); Ш.Бабич. Тормошо һәм ижады.

IV. Әңгәмә.

- Уҡыусылар, дәрестең темаһына һәм эпиграфҡа иғтибар итәйек.

– Был һүҙҙәр шағирҙың тормошона тап киләме?

– Эйе, Рауил Бикбаев, телең булһа ғына халҡың бар, халҡың булһа ғына, даның бар, - ти. Туған теле, иле, халҡы менән генә һәр кем ысын кеше, шәхес, ғорур йән ул.

(Экранда)

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.
Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған, - ти ғорурланып Рауил Бикбаев.

- Рауил Бикбаев әҫәрҙәрендә ниндәй проблемалар күтәрә?

- Ул проблемалар бөгөн дә актуалме? Ни өсөн?

– Мостай Кәрим әйткәнсә, Рауил Бикбаев – “Үҙе – баҫыу, үҙе – һабансы”. Шул һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ?

VII. Йомғаҡлау. «Р.Бикбаев – юғары гражданлыҡ тойғоло шағир. Уның поэзияһына эҙләнеүсән тынғыһыҙ фекер, болоҡһоу хис, замандың ҙур социаль-фәлсәфәүи, әхлаҡ-әҙәп мәсьәләләрен күтәреү, шуларҙы үтемле алымдарҙа поэтиклаштырыу хас» Ғ.Хөсәйенов.

Шиғыр һәм поэмаларында күтәргән, үҙен уйландырған һәм борсоған мәсьәләләрҙе Р.Бикбаев публицистик һәм әҙәби тәнҡит мәкәләләрендә лә ҡыйыу күтәреп сыға, уларҙы хәл итеү юлдары, сараларын билдәләй. Поэзияһында ла, фәнни хеҙмәттәрендә лә, публицистикала ла ул хәҙерге заман хәстәрҙәре, халҡының аң-зиһенен, зауығын тәрбиәләү мәсьәләләре менән янып йәшәй.

VI. Өйгә эш.

1. “Халҡыма хат” әҫәрен уҡырға.
2. Киләһе дәрестә сығыш яһау өсөн төркөмдәргә эш бирелә:

– Әҫәрҙең яҙылыу тарихы.

– Әҫәргә анализ.

– Әҫәрҙә күтәрелгән проблема.

– Шиғырҙың тел-стиль үҙенсәлектәре.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «УРАЛЫМА» ШИҒЫРЫ ЙӨКМӘТКЕһЕ МЕНӘН ТАНЫШТЫРЫУ

Байбулатова Земфира Наил ҡыҙы,
Күмертау ҡалаһы
3-сө урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, «Уралыма» шиғырының йөкмәткеһе менән таныштырыу; Урал тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илебеҙҙең үткәнен белеү, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау тураһында аңлатыу; уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, орфоэпия, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, Урал тауҙарын һынландырған һүрәттәр, мультимедиа, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, магнитофон.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

Ҡыңғырау шылтыраҫ,
Урындарға ултырҙыҡ.
Әҙерләндек, тынысландыҡ,
Һәм уҡырға тотондоҡ.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ултырығыҙ. Бер-беребеҙгә йылмайып, иғтибарлы, ихтирамлыбулып, дәрестә башлап ебәрәйек.

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

Уҡытыусы.

Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып күнегеүҙәр эшләп алайыҡ.

- Башҡорт теленең спецификөндәрен ҡабатлау: ә,ө, ү, ҡ, ғ, ҫ, ҙ, һ, ң.

- Ижектәрҙе әйтеп китәйек: -һы, -ҡы, -ҫы, -ҡү, - гү, -йө, -ға, -ҡа, -һа.

Таҡталағы шиғыр юлдарын уҡытыусы артынан хор менән уҡыу.

Минең тыуған ҡырҙарым,
Балдай татлы һыуҙарым,
Яландарым, урманым,
Күккә ашҡан Уралым –
Минең изге төйәгем,
Һеҙҙе һөйә йөрәгем.

III. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары һәм шағирҙарын иҫкә төшөрөп үтәйек. Мин һеҙгә уларҙың портреттарын күрһәтәм, һеҙ уларҙың исемдәрен һәм уҡылған әҫәрҙәрен әйтегеҙ.

Бөгөн беҙ үтәсәк бөйөк шағирҙарыбыҙҙың береһе – Рауил Бикбаев.

Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районының Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Үҙенең ауылында ете йыллыҡ мәктәпте тамамлағас, 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-булаҡ педагогия училищеһында уҡый. Аҙаҡ Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филология факультетын тамамлай. Студент сағында уҡ ижад менән шөғөлләнә башлай. 1957 йылда уның тәүге шиғырҙары донъя күрә. 1962 йылда «Ағиҙел» журналында «Вокзал» исемле беренсе поэмаһы баҫыла. Уның утыҙлаған поэтик, әҙәби китаптары бар. 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы булып эшләй. 1993 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән оло исем бирелә.

Башҡортостан Республикаһы гимнының һүҙҙәрен дә Рауил Бикбаев яҙған.

«Уралыма» шиғыры өҫтөндә эш.

Һүҙлек эше(уҡытыусы артынан хор менән ҡабатлап әйтеү)

Һын – стан, фигура

ҡын – ножны

Ҡилмешәк – переселенец

Баҡһам – если посмотришь

Күңелем – душа моя

Иңдәрендә – на плечах

(һүҙҙәрҙе тәржемәһе менән һүҙлек дәфтәрҙәренә яҙып алыу).

Уҡытыусы ҡурай моңо аҫтында шиғырҙы уҡый.

Шиғырҙы рус теленә тәржемә итеү һәм үҙ аллы уҡыу.

Һорауҙарға яуаптар биреү.

1. Автор нисек итеп Уралдың үткәнен һүрәтләй? (уҡыусылар яуапты текстан табып уҡып ишеттерә)

2. Шағирға нимә йәшәү көсө бирә?(өсөнсө дүрт юллыҡтан табып уҡыу)

3. Шағирҙың күңеле ни өсөн тыныс, күтәренке? (дүртенсе дүрт юллыҡтан уҡып ишеттереү)

Һеҙ Урал тураһында тағы нимәләр беләһегеҙ?

Уҡытыусы:

Башҡорт борон-борондан мәғрүр Урал тауҙары араһында, Уралға һыйынып йәшәгән, Уралда тыуып, Уралда үҫкән. Ырыу-ырыубулып матур тәбиғәт ҡосағында иркенләп көн иткән. Иҫәпһеҙ-һанһыҙ йылҡыларын дөбөрләтеп, һыйырҙарын мөңрәтеп, Урал буйы далаларында күсеп йөрөгән беҙҙең ата-бабалар. Урал тауының ҡуйы урмандары, бейек ҡаялары уларҙы дошмандарҙан һаҡлаған. Ата-бабаларыбыҙ үҙҙәре лә изге төйәктәрен күҙ ҡараһылай һаҡлар булғандар. Ер-һыуын, тау һәм далаларын ҡилгән яуҙарҙан һаҡлап, әллә күпме батыр башын һалған. Башҡорттарҙың иң изге уйҙары, йырҙары, көйҙәре, легендалары Уралға, уның батырҙарына арналған.

Уҡыусылар тексты ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

Шиғырҙы йомғаҡлау.

Шағир илебеҙҙең үткәне менән ғорурлана. Күпме дошман беҙҙең илде баҫып алырға уйлаған, ләкин булдыра алмаған. Рауил Бикбаев Тыуған иленең бөгөнгөһөн ярата һәм киләсәгенә лә ул тыныс. Был хис-тойғолар шиғырҙың ҡайһы юлдарында күренә?

- Автор Уралды нимәгә оҡшата?
- Ни өсөн уны ҡандан ҡынға кергән ҡылыс менән сағыштыра?

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, халыҡтың тыуған илгә булған мөхәббәте бик күп мәҡәлдәрҙә сағылдырылған. Шуларҙың бер нисәүһен экрандан уҡып ишеттерәйек һәм

аңлатып китәйек.

- Ат туйған ерендә, ир тыуған иленде.
- Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ.
- Иле юҡтың көнө юҡ.
- Ил өҫтөндә сәпсек үлмәҫ.
- Сит илдә солтан булғансы, үҙ илендә олтан бул.

Тыуған ил тураһында ребус сисеү.

Тыуған илем – (6н 5ек)

Мәҡәлде тәржемә итеү, аңлатыу.

Ни өсөн Тыуған илде алтын бишек менән сағыштыралар?

Уҡыусылар яуабы.

Беҙ тыуған илебеҙҙе яратырға һәм уның байлығын, тәбиғәтен һаҡлай ҙа белергә тейешбеҙ. быйылғы йыл Рәсәй һәм Башҡортостан Республикаһында тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде.

Дәфтәрҙә эш.

Үтелгән теманы ҡабатлау өсөн 132-се күнегеүҙе эшләү.

V. Дәрестә йомғаҡлау. Баһалау.

Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?

Кем ул Рауил Бикбаев?

Ниндәй әҫәрен өйрәндек?

Уҡыусылар, шағирҙың тыуған иленә, теленә, халҡына булған ысын мөхәббәте уның шиғырҙарында төп урыналып тора. Быйыл 2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа 75 йәш туласаҡ.

Мин дә һеҙгә шуны теләр инем: Тыуған илегеҙҙе, туған телегеҙҙе яратығыҙ, ихтирам итегеҙ, ысын патриоттар булып үҫегеҙ.

VI. Өйгә эш.

Шиғырҙы тасуири уҡырға, тыуған яҡ тәбиғәтенең һүрәтен төшөрөп килергә.

Р.БИКБАЕВ. “ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ” ШИҒЫРЫ.
ХӘБӘР,ҺОРАУ, ӨНДӘҮ ҺӨЙЛӘМДӘР (нығытыу)

Сәфиуллина Зөлфиә Ғәйфулла ҡыҙы,
Октябрьский ҡалаһы 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1) Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән танышыу; ”Яҙ” темаһы буйынса һөйләшеүҙе дауам итеү; ”Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғыры йөкмәткеһе менән таныштырыу;

2) һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән әйтергә өйрәтеү; ижади һәләттәрен үҫтереү;

3) тәбиғәткә ҡарата һөйөү, һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты; мультимедиа; “Яҙ килә” йыры яҙылған диск; компьютер; экологик тамғалар төшөрөлгән һүрәттәр; тест һорауҙары

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу моменты.

Һаумы, алтын ҡояшым,
Һаумы, зәп-зәңгәр күгем,
Иҫәнме һин, елкәйем,
Бөтәгеҙҙе сәләмләйем.

Бер- беребеҙгә ихлас йылмаябыҙ. Шул йылмайыу аша бер- беребеҙгә күтәренке кәйеф бүләк итәбеҙ.

II. Өй эшен тикшереү. Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән танышыу, һорауҙар әҙерләү. Слайд. Шағирҙың портреты.

Р. Бикбаев- Башҡортостандың халыҡ шағиры. Өфө ҡалаһының Почетлы гражданины.

- таҡталағы һөйләм уҡыла;
- һорауҙар бирелә, яуаптар әйтелә;
- Логик- мәғәнәүи моделдә (ЛММ) Р. Бикбаев тураһында алынған мәғлүмәт координаталарҙа төйөндәр менән билдәләнә (таҡтала);

Слайд. Р. Бикбаевтың биографияһына ҡарата ЛММ тәҡдим ителә;

- моделдәр сағыштырыла;
- ҡайһы ЛММ тулыраҡ?
- Ниндәй яңы мәғлүмәт бар?
- 1-2 уҡыусының ЛММ-гә таянып ҡыҫҡаса һөйләүе;
- Ниндәй һөйләмдәр менән эш иттек?
- Тағы ниндәй һөйләм була? Миҫал килтерегеҙ.

Үҙ-үҙеңде баһалау. (Уҡыусылар үҙ һәм башҡаларҙың эшмәкәрлеген баһалай)

III. Уҡыу мәсьәләһен билдәләү.

- Сыйырсыҡ, тамсы, гөрләүек, шиғыр, яҙғы эштәр, йырғанаҡ, ташҡын, бөрө, япраҡ (таҡтала һүҙҙәр)

Рәттәргә эш:

1-се рәт: таҡтала яҙылған һүҙҙәргә ҡарап дәрестә нимә өйрәнербеҙ? (һүҙҙе һыҙып ташлайҙар)

2-се рәт: алфавит буйынса хәрефтәрҙе дөрөҫ урынлаштырһағыҙ, әҫәрҙең авторын уҡырһығыҙ;

3		7	2	6			2	4				

3-сө рәт: ниндәй лексик темаға ҡарай һүҙҙәр; артыҡ һүҙҙе табығыҙ;

Бөгөнгө дәрескә ниндәй уҡыу мәсьәләһе ҡуйырбыҙ? (Р. Бикбаевтың шиғыры менән танышасаҡбыҙ. Шиғыр япраҡ, үҫемлектәр тормошо тураһында. Яҙ темаһын дауам итәбеҙ.)

Ял минуты. Р. Сәлмәнов көйө, Ә. Ихсан һүҙҙәренә яҙылған “Яҙ килә” йырын тыңлау. Һул ҡул менән япраҡ һүрәтен һауала төшөрөгөҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоп ҡайын япрағын күҙ алдына баҫтырығыҙ. Ҡайын ағасын сағыштырығыҙ. Ул үҙгәрәме?

IV. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.

Һүҙлек эше.

Шыйыҡ- жидкий (-ая, -ое)
Һығыу- выжимать
Һарылып- прильнув
Хаҡ- дөрөҫлөк

- һүҙҙәрҙең мәғәнәләренә аңлатма биреү, һүҙҙәрҙе таҡтаға яҙыу, дөрөҫ итеп әйтеү һәм әйттереү;
- һүҙҙәрҙе рус теленә тәржемә итеү;
- һүҙҙәр менән һүҙбәйләнеш, һөйләмдәр төҙөү;
- яңы һүҙҙәр һүҙлек дәфтәренә яҙыла;

Текст өҫтөндә эш:

- уҡытыусының яттан һөйләүе;
- уҡыусылар үҙ аллы уҡыйҙар;
- сылбырлы уҡыу;
- тәржемә итеү;
- теле асыла, сабый япраҡ, ярһып шыбырлай, тел осо, тел осонда талпына, ялғанға юлыҡмам һүҙбәйләнештәрен нисек аңлайһығыҙ? (аңлатмалы һүҙлек менән эш;)
- Тәбиғәттә япраҡ яҙын үҙен нисек һиҙә? Шиғырҙан ошо юлдарҙы уҡығыҙ.
- Япраҡ ниндәй? Күҙҙәрегеҙҙе йомоп шул япраҡты күҙ алдына баҫтырығыҙ.

Грамматика буйынса эш.

- Шиғырҙа интонация буйынса ниндәй һөйләмдәр ҡулланылған?
- Өндәү һөйләм ниндәй маҡсат менән ҡулланылған?

V. Төркөмдәргә эш.

Монологик телмәр төҙөү. Күҙ алдына килтерегеҙ һеҙ япраҡ. Түбәндәге план буйынса сығыш әҙерләгеҙ:

1. сәләмләү;
2. тыуған, үҫкән ереңә һоҡланыу белдереү;
3. тирә-йүндәгеләргә насар эштәре өсөн үтенеп өндәшеү;
4. хушлашыу.

Маҡсат: тирә-йүндәге эш-хәлгә, ҡурҡынысҡа иғтибарлы булыу

1-се төркөм: үҫҫәренән һуң шишмә буйында сүп-сар ҡалдырған ял итеүселәр;

2-се төркөм: урманда шаулап йөрөүселәр;

3-сө төркөм: ҡырмыҫҡа иләүҙәрен туҙҙырыусы тәртипһеҙ балалар;

Баһалау. (хеҙмәттәшлек, аралаша белеү, башҡаларҙың фекерҙәрен тыңлай белеү баһалана)

VI. Тест һорауҙарына яуаптар.

1. Р. Бикбаев ҡайҙа тыуған?

а) Силәбе өлкәһе; б) Ырымбур өлкәһе;
в) Башҡортостан

2. Р.Бикбаев ..... ҡалаһының Почетлы гражданины.Ҡайһы һүҙ төшөп ҡалған?

а) Ырымбур; б) Силәбе; в) Өфө

3. Тәбиғәттең теле асылған саҡ.
Шыйыҡ ҡына йәшкелт буяҡта,
Өйрәнәләр тәүге һүҙ әйтергә
Тәүге япраҡ, тәүге ҡыяҡтар.
Шиғыр нисек атала?

а) “Тәбиғәттең теле асылған саҡ”; б) “Тәүге һүҙ”; в) “Тәүге япраҡ”

4. “Теле асыла” һүҙбәйләнешен нисек аңлайһығыҙ?

а) һөйләшә алмаҫ булыу; б) һөйләшә башлау;
в) әрләшеү

5. Эй, кешеләр, һаҡ булайыҡ, зинһар,
Тәбиғәттең теле асыла!
Ни өсөн һөйләм аҙағында өндәү билдәһе ҡуйылған?

а) .... хәбәр итә; б) һорауҙы эсенә алған; в) өндәүҙе белдерә

6. Автор кешеләрҙе нимәгә өндәй?

а) һаҡ булырға; б) тәртипһеҙ булырға; в) өлгө булырға;

7. Өндәү һөйләм ни өсөн кәрәк?

а) эште; б) көслө тойғоно; в) һорауҙы белдерер өсөн

8. Шиғырҙа яҙҙың ҡайһы осоро тураһында яҙылған?

а) тәүге көндәре; б) уртаһы; в) аҙағы;

Баһалау критерийҙары:

7-8 һорау дөрөҫ- “5”;
5-6 - “4”;
3-4 - “3”

Яуаптар:

№	1	2	3	4	5	6	7	8
	б	в	а	б	в	а	б	Б

VII. Өй эше. (инструктаж үткәрелә)

Эш кимәле	Эш төрҙәре	Күрһәтмәләр
Ябай	Шиғырҙан 1-шәр хәбәр, һорау, өндәү һөйләм яҙырға;	185-186-сы биттәр
Уртаса	Шиғырҙан 1-шәр хәбәр, һорау, өндәү һөйләм яҙырға; ни өсөн өндәү һөйләм?	185-186-сы биттәр
Ижади	Шиғыр йөкмәткеһенән сығып экологик тамға яһарға; өндәү һөйләм төҙөргә	185-186-сы биттәр

VIII. Рефлексия.

- Дәрестә ниндәй эш төрҙәре ҡәнәғәтләнеү тойғоно уятты?
- Ниндәй эш башҡарғанда ауырлыҡтар күҙәтелде?
- Р. Бикбаев шиғырында ниндәй мәсьәләләр күтәрелә?

ТӘБИҒӘТКӘ МӘРХӘМӘТҺЕҘ БУЛЫП, УНАН МӘРХӘМӘТ КӨТӨП БУЛМАЙ

Кашапова Зөһрә Әғмәл ҡыҙы, Әбйәлил районы Т. Ҡусимов исемендәге Асҡар гимназияһы

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы нигеҙендә йылға-күлдәрҙе һаҡлау, һыуҙы һаҡсыл тотоноу тураһында белемде формалаштырыу, уҡыусыларҙа тыуған ергә, тәбиғәткә һөйөү тәрбиәләү.

Үткәреү сараһы. Әҙәби-музыкаль кисә.

Йыһазландырыу. Р. Бикбаевтың фотоһүрәте, компьютер, мультимедиа проекторы, Әсхәл Әхмәт Хужа. Баҡса. Өфө, “Китап”, 2001 (“Әбйәлил менән күл эйәһенең ярышы”- 108-115-се биттәр); плакаттар: “Һыу – йәшәү сығанағы”

Күпме ваҡыт, күпме зиһен китә
Кисәгенең төҙәтеп хатаһын.
Был донъяға хайран булып ҡына
Бер ҡарарға ине хафаһыҙ!

Кисә барышы.

Талғын ғына йыр ағыла. Экранда ағып ятыусы йылға, тау, урман күренештәре.

1-се алып барыусы(ҡыҙ кеше): Был төйәктә һәр бер тау ҡуйыны
Ил һуғарыр изге ер мәллә?
Бар яҡтарға һуҙылып һыуҙар аға,
Ҡайҙа ҡараһам да, Ирәмәл!

2-се алып барыусы (малай, егет кеше):
Ерҙең йыры бит ул бар йылғалар,
Таштар ҡуйынынан йыр аға.
Күкрәгенән һөҙөп сығара тау,
Әйтерһең дә, һүҙен һайлап һөйләр,
Көйөн һайлап һуҙыр ир-аға.

1-се алып барыусы:
Уралҡайым! Үҙәнеңә төшәм,
Яңы һырттарыңа ашығам.
Иртәгәңә бағам Ирәмәлдән,
Ил байҡайым Иҙел башынан.

2-се алып барыусы: Бар киңлеген барыбер иңләй алмам,
Күпме юл гиҙһәм дә илемдә.
Һәр шишмәнән һыуҙар уртлай алмам,
Ҡойона алмам барлыҡ күлендә.

(Проектор аша поэмала һүрәтләнгән Ағиҙел, төтәп ултырған химия заводы, ҡала янындағы үле күл, йылғала йөҙөп барыусы пароход күрһәтелә.)

1-се алып барыусы: Ҡуйы томанына сумған кеүек,
Һағышына ҡалдым сорналып.
Сырмалдылар сәсемә Белореттың
Сәстән нәҙек ҡорос сымдары.

2-се алып барыусы: Ағыуланған завод быуаһында
Сәсәй-сәсәй мин дә быуылдым.

1-се алып барыусы: Матурлыҡтан тел шартлатырсаҡта
Үткенселәр балыҡ шартлатты.

2-се алып барыусы: Иҙел менән бергә шаңҡыным мин,
Һағайҙылар ҡоштар, кейектәр,
Һарғайҙылар муйыл, еректәр...
Намыҫын юя бәндә нилектән?

1-се алып барыусы: Был шиғри юлдарҙы яҙыусы Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхвәт улы Бикбаев, “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһының авторы.

2-се алып барыусы: Урмандары ҡырҡылыуҙан йылғалар һайығып, яланғас ярға, ҡаҡ ҡаяға әйләнеп ҡалған Ағиҙел тураһында хафалы уйҙарға төшә автор.

1-се алып барыусы: Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнө – илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө – ил йөҙө” үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй, ил-йорттарың да шундай.

(Сығалар).

1-се алып барыусы: Тәбиғәттте вәхшиҙәрсә тәләфләүгә сик ҡуйыу – Башҡортостан Республикаһы етәкселәренең, граждандарының – минең, һинең, уның изге бурысы!

2-се алып барыусы. 2013 йыл республикабыҙҙа “Тирә-яҡ мөхит йылы” тип иғлан ителде. Ул беҙҙе, республика граждандарын, еребеҙҙе һаҡлап алып ҡалырға саҡыра. Төйәгебеҙгә ҡурҡыныс янай бөгөн – экологик һәләкәт! Еребеҙ, һыуҙарыбыҙ ҡурсалауға мохтаж!

(Сығалар).

“Әбйәлил” әкиәтенән өҙөк күрһәтелә.

(Әбйәлил арҡан ишеп ултыра. Арыраҡ сүкәйеп ултырған Күл Эйәһе “һыуҙан” башын ҡалҡыта).

Күл Эйәһе: Ниңә килдең, ни эшләйһең?

Әбйәлил (ҡурҡҡанын һиҙҙермәҫкә тырышып):

Бапаҡ, тотма үпкә:
Арҡанды ишеп бөтәм дә
Күленде аҫам күккә!
Күл Эйәһе:
Зинһар, егет, теймә күлгә!
(Теҙләнеп ерҙе тырнай)
Төпһөҙ күккә әлһәң уны –
Мин бит... мин бит... ярты үлдем...
Йәнең теләгәнде бирәм...
Ҡалдырһана бары күлде!
Әбйәлил (башын тотоп уйлай):
Яҡшы ат бир!
Арғымаҡ эҙләйем күптән...
Иң шәп юртағыңды килтер!
Килтермәһәң... аҫам күлде!
Күл Эйәһе (шыңшып илай):
Юҡ, юҡ!
Юртаҡ китһә – тотош үлдем...
(башын тота).
Әбйәлил: Ихтыярың,
Ҡыҫташырға мин тормайым,
Мәгәр ныҡлап киҫәтәмен:
Күлде бында ҡалдырмайым!
(Арҡан ишеүен дауам итә).
Күл Эйәһе (аҡырып илай):
Бигерәк көслө батыр булғас,
Һәләк өлкән, һәләк тәрән
Күлде күккә атыр булғас,
Һин етеҙ ҙә егетһеңдер:
Ярышайыҡ әйҙә хәҙер!
Йүгерешеп мине еңһәң,
Мин бирергә атты әҙер!
Әбйәлил:
Ярар, мин риза,
Әммә шундайын шартым бар:
Әле сәңгелдәктә ятҡан
Минең ҡусты йоратым бар,
Уҙалһаң уны йүгереп –
Ярышабыҙ, ҡарышыу юҡ,
Әгәр инде уҙалмаһаң –
Һинең менән ярышыу юҡ.
Күл Эйәһе (сәбәләнеп):
Ҡайҙа ҡустың?! Тиҙерәк күрһәт!

Әбйәлил (ҡулы менән төртөп күрһәтә):

Анау сауыл төбөндә ул! Ҡойроғоңдо шартлат йәһәт! (Сығалар).

Сәхнәгә һандар сыға (4 һан теҙелеп баҫа – 2013 һаны яҙылырға тейеш):

1-се һан(түшендә “2” һаны): Күл Эйәһе һыуһыҙ ҡалыуҙан юҡҡа ғына ҡурҡмайҙыр. Һыу – йәшәү сығанағы!

2-се һан(түшендә “0” һаны): Ер шарының 70 проценты һыуҙан тора.

3-сө һан(түшендә “1” һаны): Рәсәйҙең бөтә майҙанының 12,4 проценты һыу менән ҡапланған. Был 211,7 миллион гектар тигәнде аңлата.

4-се һан(түшендә “3” һаны): шуның 9 миллионы Башҡортостан йылғаларына тура килә.

1-се һан: Һыуҙың 70 проценты үҫемлектәргә һибелә, имеш.

2-се һан: Сәнәғәттә уның 20 проценты ҡулланыла.

3-сө һан: Көнкүрештә 10 процент һыу тотонабыҙ.

4-се һан: Көнөнә беҙ 270-300 литр һыу тотонабыҙ. Европа илдәрендә был һан кәмерәк.

1-се һан: Кеше организмы яҡшы эшләһен өсөн, көнөнә 6-10 стакан һыу әйләнештә йөрөргә тейеш, ә беҙгә ул уртаса 4 стакан тура килә.

2-се һан: 2003 йыл Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы тарафынан сөсө һыу йылы тип иғлан ителгәйне. 22 март көнө иһә календарҙа Бөтә донъя һыу көнө тип билдәләнә.

3-сө һан: Бөтә донъя һыу институты фаразынса, тағы бер 30 йылдан сөсө һыу илдәр араһындағы ыҙғыштарҙың төп сәбәбе булыуы мөмкин.

4-се һан: Крандан һыу тамсылап аҡҡанда ла көнөнә 13 литр һыу юҡҡа сыға. Айына, 1 йылға күпме һыу бушҡа аға? (Плакатты күрһәтә, ул уны ҡулында тотоп тора):

$13 \times 30 = 390$ л

$390 \times 12 = 4700$ л

4700 литрға яҡын һыу юҡҡа ағып китә. Ә уны таҙартыу, һәр фатирға килтереү өсөн күпме кеше хеҙмәт түгә!? Һыуҙы һаҡлайыҡ! (Сығалар).

1-се алып барыусы: Эйе, һыу – тереклек сығанағы, сөнки кеше ашамайынса йәшәй ала, ә һыуһыҙ оҙаҡҡа бармай. Кешегә йәшәү өсөн яҡында һыу сығанағының булыуы шарт. Шуға ла кешеләр йылға, күл, диңгеҙ буйҙарын төйәк итергә тырышҡан.

2-се алып барыусы: Башҡорттарҙа ла ауылдар йылға буйҙарында ултыра. Ә күлдәрҙән халыҡ алыҫыраҡ ултырырға тырышҡан, сөнки йылғалар үҙ яйы менән таҙарынырға һәләтле, ә ярына ауыл ултырған күлдең юҡҡа сығыуы ла ихтимал.

1-се алып барыусы:Башҡортостанды юҡҡа ғына икенсе Швейцария тип атамайҙар.

Бер саҡ Максим Горький үҙе әйткән,
Ағиҙелгә хайран ҡалған килеш:
“Там, на Белой, места такой красоты –
ахнешь, сто раз ахнешь... ” (Экранда был һүҙҙәр яҙыла).

2-се алып барыусы:
Академик Губкин әйткән байлыҡ –
Ул хазина әле ҡороған юҡ:
“Богатства, скрытые в недрах Башкирии,
Будут служить ее процветанию”. (Экранда был һүҙҙәр яҙыла).

Сығалар.

Күңелле музыка яңғырай.

Сәхнәлә Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим “йылғалары” (был исемдәр уларҙың түштәренә йәки баштарына түңәрәк яһап эшләнгән плакаттарға яҙылырға тейеш.)

Ҡариҙел:
-Һаумы, Ағиҙелкәй!
Алыҫтарҙан
Һағыныуым һиңә әйҙәне.
Ҡуйыныма алдым шишмәләрҙе,
Йор Йүрүҙән, йәмле Әйҙәрҙе.
Ҡара тиһәләр ҙә күңелем саф,
Һыуым таҙа. Йөҙөм аҡ ине.
Һыуҙарыма хәҙер ни аҡмай ҙа,
Йөҙҙәремә хәҙер ни яҡмайҙар,
Килалманым һиңә пак көйө.

Дим:
Күпме бысраҡ төшә аҙбарҙарҙан,
Күпме ағыу аға баҫыуҙан.
Шишмәләрем күмелә.
Туғай һөрөлә.
Таңғы төштәремдә баҫлығам.
Барыһынан ҡотолормон, тинем,
Далаларға йәйрәп ташҡанда.
Бер буялғас бысраҡ, еңел түгел
Өҫтәреңдән алып ташларға.
Ҡариҙел менән Дим:
Һыйынырға һинә үҙәнеңдән
Тиҙерәк урын бирсе, Ағиҙел!
Саф ҡуйыныңда таплы йөҙөбөҙҙө
Сайҡай ғына күрсе, Ағиҙел!

Ағиҙел:
Ҡариҙелем, Димем!
Тау-таш ярып,
Һеҙҙе күргә тип талпынам.
Тик бысранған тулҡындарым менән
Ҡағылырға һеҙгә тартынам. (Илай.)

Ҡариҙел: Йәшеңде бушҡа түкмә, Ағиҙел. Кәрәге тейеүе бар.

Дим:Белмәйем инде. Шулай ҙа яҡшыға өмөт итәйек. “Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ”,-тиҙәр бит.

(Өсөһө 3 яҡҡа сығып китә. Бер-береһенә ҡул болғайҙар.)

“Ағиҙел” йыры (Халыҡ һүҙҙәре, халыҡ көйө) башҡарыла – 1 уҡыусынан йырлатырға мөмкин:

Ағиҙелкәй ҡайҙа? Ай, туғайҙа.
Ағиҙелкәй һымаҡ һыу ҡайҙа?
Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары.
Ағиҙелкәй һыуҙың, ай, буйҙары,
Йәмле сағы уның яҙғы айҙа.
Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары.
Ағиҙелкәйҙәрҙең, ай, буйында.
Һандуғастар һайрай муйылда.
Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары.
Иҙел һыуын эскән ир-арыҫлан

Яман теләк йөрәтмәҫ уйында.
Ағым һыу, Ағиҙел буйҙары.
1-се алып барыусы:
Ниндәй көнгә килеп тарыныҡ беҙ,
Яҙмышыбыҙ, килсе иҫеңә!
Ағиҙелдең тулҡынына ятып,
Сайҡаламын, ҡарап Өфөгә.
(Экранда Ағиҙел, Өфө ҡалаһы күренештәре.)
2-се алып барыусы:
Ә алдымда йылға тулҡынлана,
Кем һуң әйткән ғашиҡ сағында:
“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ,
Үҙем һыу буйҙарында!”
Ағиҙелдең буйын буйла, имеш,
Һыуын уртлай алмай зарығып.
Илде иңләп аҡҡан изге йылғам,
Ниндәй көнгә килеп тарыныҡ? (Сығалар.) Сәхнәгә сәсәндәр сыға.
-Бер тигәс тә ни яман?
-Берҙән-берең – Ергенең
Емерелһә, шул яман!
-Ике тигәс тә ни яман?
-Илгә терәк кәрәктә,
Ике ҡулың ҡаушырып,
Ҡарап торһаң шул яман!
-Өс тигәс тә ни яман?
-Яман йола, яман йола –
Ҡаранабыҙ алан-йолан.
-Дүрт тигәс тә ни яман?
-Яман йола, яман йола –
Йолҡоп ҡалыу унан-бынан,
Нәфсе шаша, намыҫ йығыла.
-Биш тигәс тә ни яман?
-Яман йола, яман йола –
Алмалағы ҡорт шикелле,
Күңелдәргә тин оялай;
Кеҫәһен ҡалынайтмаған
Ҡалынайтҡандан ояла.
-Алты тигәс тә ни яман?
Хәкиҡәтте ялған талай,
Ялағайҙар яға яла...
-Ете тигәс тә ни яман?
Намыҫыбыҙ ғәмһеҙ йоҡлаһа.
Әйләнер йылан юхаға.
Бер тигәс тә,
Ун тигәс тә,
Мең тигәс тә шул яман!
Тирә-яғыбыҙ сүп-сар ояһына әйләнгән! (Сығалар.)

SOS сигналы яңғырай.

Сәхнәлә кисәне алып барыусылар.

1-се алып барыусы: Был “SOS – Save our – Souls! –Ҡотҡарығыҙ беҙҙең йәнебеҙҙе!”-бәлә тураһында хәбәр итеүсе халыҡ-ара сигнал. Тәбиғәт яҙмышы – беҙҙең яҙмышыбыҙ!

2-се алып барыусы: Матур күлдәр, хозур ялан-туғайҙар, көмөштәй саф йылға-шишмәләр, ғорур тауҙарыбыҙҙың исем-атамаларын онотмай һаҡлаһаҡ ине!

1-се алып барыусы: Урмандарҙы вәхшиҙәрсә ҡырҡыу ҙа йылға-шишмәләрҙең ҡороуына килтерә. Ғалимдар иҫәпләүенсә, һуңғы 20 йылда Урал аръяғында ғына 120-нән ашыу инеш, 200-гә яҡын шишмә юҡҡа сыҡҡан. Был аяныслы хәл – яҡынлашып килгән экологик һәләкәттең тере билдәһе ул.

2-се алып барыусы: Киләсәк быуын балалары ата-бабалары кеүек шишмәләрҙән һыу ҙа услап эсә алмаҫтар микән? Тәбиғәткә мәрхәмәтһеҙ булып, унан мәрхәмәт көтөп булмай! Бына нимәгә саҡыра беҙҙе Рауил Бикбаев.

1-се алып барыусы:
Күпме ваҡыт, күпме зиһен китә
Кисәгенең төҙәтеп хатаһын.
Был донъяға хайран булып ҡына
Бер ҡарарға ине хафаһыҙ!
2-се алып барыусы:
Тәбиғәт ул – наҙлы бала кеүек,
Мохтаж бөгөн беҙҙең яҡлауға.

Ярҙам кәрәк һыуға, күк йөҙөнә,
Ярҙам кәрәк тыуған яҡтарға!
1-се алып барыусы:
Эй, кешеләр! Урман-туғайҙарҙың,
Тау-таштарҙың ҡәҙерен белегеҙ!
Тәбиғәт ул – беҙҙең үткәнебеҙ,
Тәбиғәт ул – килер көнөбөҙ!

2-се алып барыусы: Бөгөнгө кисә - беҙҙең ораныбыҙ, Еребеҙ ораны ул! Шуны онотмайыҡ, дуҫтар!

“Әбйәлил” вальсы яңғырай (Самат Фәйзуллин һүҙҙәре һәм музыкаһы). Сәхнәнең артҡы өлөшөнә зәңгәр кейемдәге “йылғалар” сығып баҫа һәм көй ыңғайына тулҡын шикелле бер уңға, бер һулға тирбәлеп торалар. Ә был мәлдә уртала ике пар – “аҡҡоштар” (аҡ кейемдәге егеттәр һәм ҡыҙҙар) вальс әйләнәләр:

Ҡырҡты тауҙан услап-услап
Йондоҙ тирергә була.
Тыуған яҡ хозурлығынан
Күңелдәр нурға сума.
Ҡушымта:
Эй, Әбйәлил, Әбйәлил,
Гүзәллегең гөлгә тиң.
Көндән-көнгә балҡып үҫеп
Дан ҡаҙандың Ерҙә һин.
Ҡушымта.
Ҡырҡты тауҙа кейек уйнай,
Аҡҡоштар йөҙә күлдә.
Хеҙмәт дәрте ташып тора
Беҙҙең ярһыу күңелдә.
Ҡушымта.
Ҡурай, ҡумыҙ моңдарына
Һандуғастар көнләшә.
Тыуған яғым, Әбйәлилем,
Мәңге балҡы, мең йәшә!
Ҡушымта.

Көй тамамланғас, сығыш яһаусылар реверанс яһап баш эйәләр.

РАУИЛ БИКБАЕВ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА»

Ғибәҙуллина Фәүзиә Рифҡәт ҡыҙы,
Илеш төп белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1) шиғырҙы әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән тикшереү;
2) уҡыусыларҙың художестволы фекерләү һәләтен үҫтереү;
3) Башҡортостанға һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.
Йыһазландырыу: Р. Бикбаев портреты, плакат, магнитофон.
Дәрес барышы.
I. Ойоштороу мәле.
Дәрестең эпиграфын уҡыу.
Донъя картаһында ерем,
Бер япраҡ саҡлы ғына.
Мин хайранмын киңлегеңә
Башҡортостаным – илем.
- Таҡтала бөгөнгө дәрестең эпиграфы яҙылған (шиғырҙы уҡыу).
- Шиғырҙа нимә тураһында яҙылған?
- Авторы кем?
- Башҡортостан тураһында яҙған тағы ниндәй шағирҙарҙы беләһегеҙ?

II. Дәрестең маҡсатын аңлатыу.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырын сәнғәтле уҡырға, әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән тикшерергә өйрәнербеҙ, туған Башҡортостаныбыҙ тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт алырбыҙ.

III. Өй эшен тикшереү.

Өйҙә һеҙгә Башҡортостан тураһында бәләкәй генә шиғыр яҙырға бирелгән ине.
- Шиғырҙарҙы уҡытыу.
- Шиғыр яҙғанда нимәгә иғтибар иттегеҙ?
- Темаһы булырға тейеш.
- Һүрәтләү сараларын дөрөҫ ҡулланырға.
- Поэтик синтаксисҡа иғтибар итергә.

IV. Яңы материалды аңлатыу.

1. Уҡытыусы һүҙе.

Башҡортостан тураһында бик күп шағирҙар шиғырҙар яҙған. Бөгөн ошо теманы артабан дауам итәбеҙ. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнәбеҙ, уға анализ яһайбыҙ.

Р.Бикбаев 1938 йылда Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Аҡбулаҡ педагогия училищеһын тамамлағас, Өфөгә килеп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай, аспирантурала уҡый, кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлап, ғалим дәрәжәһен ала. Хәҙерге көндә филология фәндәре докторы, профессор. Башҡортостан яҙыусылар берлеге рәйесе.

2. Шиғырҙың фоноҙмаһын тыңлау.
3. Һүҙлек эше.

даръя – икһеҙ-сикһеҙ һыу
офоҡ – горизонт
ҡитға – материк
улан – ул (сын)
Яйыҡ – Урал йылғаһы
ҡарыш – пядь (мера длины)

4. Шиғырҙы уҡыусыларҙан уҡытыу.

5Шиғырҙы анализлау.

1) Тема, идеяһын билдәләү.
2) Образдар системаһы (лирик герой, Башҡортостан образы).
3) Һүрәтләү сараларын күрһәтеү.
4) Автор Башҡортостан киңлектәрен ниндәй йылғалар менән сикләй? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

Көнбайыштан – Сөн
Көнсығыштан – Яйыҡ
Көньяҡтан – Юшатыр
Төньяҡтан - Әй йылғалары

Шағирға туған республикаһының һәр ҡарышы күңеленә ғәзиз һәм ҡәҙерле. Башҡортостан урман-тауҙары, йылға-күлдәре,ер-һыу байлыҡтары менән генә күркәм түгел, шул ерҙә йәшәгән кешеләре, уны данлаған, исемен ил-ерҙәргә ишеттергән батыр, эшсән ул-ҡыҙҙары менән дә маҡтаулы.

- Ә мин мәңге бында – Уралымда,
Тик булмышым инде өр-яңы, - тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

(Башҡорттар бик боронғо замандарҙа уҡ Уралды төйәк иткән. Тик бында инде тормош яңыса. Башҡортостан көндән-көн матурлана, сәскә ата.)

Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!

(Башҡортостанда йәшәгән һәр кеше – башҡортостанлы – уларҙың һәр береһе уның ҡеүәтен, байлығын арттырыусы).

Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй
Ҡоласымды минең киңәйтеп.
“Башҡортостан” – тиеп,улдарыма
Алыҫ ҡитғаларҙа ҡарай ер.

(Башҡортостан кешеләре донъяның бөтә төбәктәренә таралғандар. Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайына 1995, 2002 йылдарҙа йыйылдылар. Башҡорт халҡы 450 йылдан ашыу рус халҡы менән дуҫ-татыу йәшәй.

Япониала архитектор булып эшләүсе башҡорт егетенең даны бөтә донъяға таралған. 450 йыллыҡҡа Өфөлә төҙөлгән Халыҡтар дуҫлығы йорто уның проекты буйынса эшләнде.)

- Һуңғы строфаны уҡытыу.
- Автор был юлдарға ниндәй мәғәнә һалған?

V. Нығытыу.

Шиғырҙы сәнғәтле уҡытыу.

VI. Телмәр үҫтереү.

Шиғыр буйынса Башҡортостанды күҙ алдына килтереп һөйләү.

VIII. Өй эше биреү. Шиғырҙы ятларға

VII. Дәресте йомғаҡлау.

Шулай итеп, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тағы бер шиғыры менән таныштығыҙ. Был әҫәрендә шағир үҙ иленең улы булараҡ, Башҡортостандың, башҡорт халҡының ғорур һынын кәүҙәләндерә. Һеҙ ҙә - шағир ғорурланған милләттең, илдең бер сатҡыһы бит. Уның өмөттәрен аҡлау – беҙҙең намыҫ эше ул.

«МИН ЫШАНАМ, КЕШЕ МАТУРЛЫҠТЫ ҺӘЛӘКӘТТӘН БАРЫБЕР ҠОТҠАРЫР»

Хәснәтдинова Ризидә Әфләх ҡыҙы,
Илеш районы Түбән Йәркәй
дөйөм белем биреү лицейы

Тәбиғәттең һәр миҙгеле һәйбәт,
Һәр бер көнө уның йәмлелер;
Тәбиғәтте һөйгән кешеләрҙең
Күңелдәре һиҙгер, ғәмлелер.

Р.Шәкүр(Слайд 3)

Маҡсат: 1. Поэманың идея- тематик йөкмәткеһен асыҡлау;

2. Тәбиғәт һәм кеше проблемаһын асыу;

3. Урал тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уныһаҡлау кәрәклеген аңлатыу;

4. Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, тасуири уҡыу һәм һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. (Слайд 4)

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, шиғырҙар йыйынтығы, Ағиҙелй ылғаһы һүрәте. Презентация.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу моменты
2. Өй эшен тикшереү.

Рәшит Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау (Слайд 5)

Уҡытыусы: Иҫегеҙгә төшөрөгөҙ әле, Р. Ниғмәти “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһын Уралды, Ағиҙелде данлап ниндәй гүзәл шиғри юлдар менән башлай.

Ҡурай моңо.

(Уҡыусы өҙөктө уҡый) Слайд 6

Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың башөҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.
Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға,
Һалҡын терегөмөш шикелле.

Әммә Р. Ниғмәти мәғрур Уралдың тәбиғи байлыҡтарын, матурлыҡтарын тасуир лапҡына ҡалмай, бәлки ошо тыуған ер, тыуған ил һындары ашауларҙы йәнле образдарға әүерелдереп, халҡының һәм ил-йорт тоҡтарихын, хәҙергеһен, яҡты киләсәген шиғри юлдарҙа һүрәтләп бирә.

Беҙ бөгөн уҡыясаҡ Р. Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»поэмаһыла ошондай ыраҡ принципҡа ҡоролған.

Уның үҙәгендә Ағиҙел йылғаһы, Уралтауҙары, Ағиҙелдең урман, туғайҙары торғандай. Бөтә Башҡортостанды Урал ҡуйынынан, Ирәмәл тауҙары итәгенән башлап иңләп-буйлап йәйрәп аҡҡан Ағиҙелдең тамағына, Кама йылғаһына ҡойғансы бар юлын шағир уй-күңеле менән сәйәхәт ҡылып, поэманың эске сюжет һыҙығын, композицияһының һөлдәһен барлыҡҡа килтерә.

Юл күрһәтеп алға тәгәрләне
Ағиҙелем–көмөш йомғағым.
Ирәмәлдән Кама Һыуына тиклем
Күп йотлоҡтом йырына йылғаның,-

Тип шағир быны үҙелә асыҡ итеп әйтә, «Аҡ сәфәргә, әйҙә, Ағиҙел” тип бергә юлға сыға. Сәйәхәт һоҡланыуға ҡоролмаған, ә күргәндәренән йәне әрней, күңеле болоҡһоҡ геройҙың.

3. Яңы тема өҫтөндә эшләү

а) Уҡытыусының инеш һүҙе.

- Рауил Бикбаевтың шиғырҙарында, поэмаларын датыуып үҫкән яҡтарының тәбиғәт йәме, халҡының күңел күрке, тарихы, хәҙерге һекиң сағылыш таба. Башҡортостан Республикаһын, туған халҡынданлаған, хәҙерге заман кешеһенең рухи донъяһын тасуирлаған шиғриәте башҡорт әҙәбиәтенең ҙур ҡаҙанышы булып таныла бара. “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы Рауил Бикбаевтың бөтә поэтик ижадының иң юғары кимәле дәрәжәһен алған бейеклеге һәм шиғри тажы тип иҫәпләнерлек әҫәр. Тәбиғәт һәм кеше проблемаһы - мәңгелек нигеҙ. Был поэма Уралтауҙың, Башҡортостандың әле лә ғәжәйеп байер - һыуҙары күркен йырҙарыбыҙҙағыса һоҡланып тасуирлау менән асылып китә. Был поэма бер кемде лә битараф ҡалдырмайҙыр, моғайын. Бер ҡараһаң, ул йәмле Ағиҙелебеҙгә, уның үткәненә һәм хәҙергеһенә, киләсәк яҙмышына бағышланған әҫәр кеүек.

б) Поэманы уҡыу. (уҡытыусы уҡый башлай, уҡыусылар дауам итә).

в) Поэманың йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү

Шағирәсән «Ағиҙелдең көнө–илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө–ил йөҙө» үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй, ил-йорттарыңда шундай. Сәйәхәткә сыҡҡан шағир элекке мәғрур Урал урмандарының һирәгәйеп, ҡарағай урмандарының ҡырылып, Уралтауҙарының күпурында яланғасланып ҡалыуын күреп, йөрәге әрней, хафаларға төшә. Башҡорт ҡорттарын, солоҡтарын аҫрар ҡарағайҙар хәҙер ярым юҡҡа сыҡҡан. Урмандары ҡырылыуҙан йылғалар һайыҡҡан, яланғас ярға, ҡаҡ ярға әйләнеп ҡалған Ағиҙел буйҙарының ҡото киткән. Сөнки юғарыла ултырған түрәләр план тип, дан-исем алыр өсөн «Халыҡтыңда ай-вайына ҡарамайҙар, ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар, әйтерһеңдә, ҡырағайҙар!» “Кемдәр генә һине ҡырманы?!”–тип өҙгөләнә шағир.

Урман
Юҡ, ҡурҡ маҡәләмдән,
Ҡурҡ һин бөгөн
Ҡәләм тотҡан ғәм һеҙ әҙәмдән...
Эшкә ҡушҡан уйһыҙ әҙәмдән,- ти шағир.

4. Ныҡытыу

а)Ни өсөн шағир Рәшит Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары”поэмаһындағы юлдарҙы үҙәҫәрендә ҡуллана?

Уҡыусыларҙың яуаптары:

Шағир Рәшит Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһындағы юлдарҙы үҙ әҫәрендә иҫкә төшөрөүе һис осраҡлы түгел. Улөлкән шағир тасуирлаған Ағиҙел, уның заманы менән үҙе хәҙер һүрәтләр Ағиҙелде, бөгөнгөҙ аманды сағыштырып ҡарай.

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары?
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?-

Тигән тура һорауҙы ла ҡуя ул. Йәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел буйҙары, тәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел һыуҙары тигән хәүеф-хафалы уйҙарын, ғәмәлдәге- хәҙерге хәлдәрҙе аса шағир.

б) Китаптағы өҙөктө Торатау, Шаһтау тауҙары, Ағиҙел буйҙарында ултырған ҡалалар тураһында нимә әйтергә теләй шағир?

Уҡыусыларҙың яуаптары:

-Тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙың һаманталаныуы, ситкә ағылыуы, ер-һыуҙарыбыҙҙың, һауаларҙың ағыуланыуы, илебеҙҙәге ҡоттоң–бәрәкәттең китеүе дауам итә. Ағиҙел буйҙарында, туғайҙарында ултырған Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Салауат ҡалалары өҫтөн ағыулы һөрөмдөң болот- томандары ҡаплаған, башҡалабыҙ Өфөлә һыу-һауа бысраныуҙан зыян күрә, кеше һаулығы насарая, ғүмерҙәре ҡыҫҡара - бындай үҙәк өҙгөс хәлдәргә Ағиҙел буйлап сәйәхәт иткән шағирыбыҙ нисек битараф ҡала алһын?! Ана, Шаһтау ише оло тауҙар йотолоп бөтөп бара, Стәрле өҫтөндә ағыулы төтөндәр йөҙә, Урал эсендә Ямантау тирәләрендә яман шеш һымаҡ яман ҡалдыҡтарҡа бара. Радиация тигән нур ауырыуы ер-һыуҙарҙы ғына түгел, кешеләрҙе ағыулай.

в) Р.Бикбаев «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында ниндәй мәсьәләләр ҡуҙғата, нимәләр хаҡында борсолоп уйлана автор?

Уҡыусыларҙың яуаптары:

-Тәбиғәт байлығы менән һаҡһыҙ ҡыланыу тәбиғәт йәмен генә бөтөрөп, тау-урмандарын яланғасландырып, йылға–күлдәрен һайыҡтырып, йәки киптереп кенә ҡалмай, әҙәм күңелдәрендә ҡорғаҡһыта.

Ғәмһеҙ бәндәләргә әйләндерә - шулары өсөн нығыраҡ борсола һәм бошона шағир.

-Сал Урал тәбиғәте, боронғо сәнғәт ҡомартҡыһы- Шүлгән мәмерйәһе яҙмышыла шунса борсолдора һәм уйландыра шағирҙы.Әммә шул боронғо сәнғәткәлә ҡулын һуҙған, шуны юҡҡа сығарырға әҙер торған хәҙерге заман ҡыраҡай бәндәләрҙә юҡ түгел арабыҙҙа.

-Шағир яҙғанса:

Эй сарсаным!

Ҡайҙа бер йотом һыу?

Үҙем Ағиҙелдең ярында.

Йырҙарҙа йырланғанса, һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ, үҙем һыу буйҙарында, тигәндәй, һалҡын Ағиҙел буйҙарындала хәҙер һыуҙарға сарсарға мөмкин икән.

- Һыу буйҙарында һыуҙарға һыуһау поэмала киң мәғәнәһендә кешенең хәҙер саф таҙа һыу, һауаларға сарсауы менән бергә ысын азатлыҡҡа, рухи сафлыҡҡа, кешелеклелеккә, юғары әҙәп- әхлаҡ сифаттарына һыуһауын да сағылдыра.

5. Йомғаҡлау.

Рус яҙыусыһы Федор Достоевский: «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр»,- тигән. Р. Бикбаев был фекер менән бәхәскә ингәндәй, «Матурлыҡ үҙе лә яҡлауға мохтаж»,- ти. Матурлыҡты кеше генә ҡотҡара алыр. «Мин ышанам, кеше матурлыҡты һәләкәттән барыбер ҡотҡарыр»,- тип өмөт менән ҡарай ул. Һәм шул уҡ ваҡытта «Донъяны ҡоро матурлыҡ түгел, батырлыҡ ҡотҡарыр!»- тип ҡысҡырғы килә.

«Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы тыуған ер-һыуҙарыбыҙҙың, тыуған республикабыҙҙың хәҙерге хәле тураһында уйланыуҙарҙан, хис-тойғоларҙан ойошҡан шағир монологы.

Йыйып әйткәндә, “Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль, иҡтисади,экологик һәм әхлаҡи- әҙәп мәсьәләләрен тура һәм үткер ҡуйыуы, публицистик пафос менән еткерә белеүе, заманса яңғырашы менән әһәмиәтле.

Шулай итеп, Иҙел башынан тамағына тиклем матур-матур йырҙар йырлап үтәһе урынға, шағир моңһоу уйҙарға бирелә.

Бөгөнгө көндә тәбиғәтте, йәмле Ағиҙелде һаҡлау буйынса ниҙәр эшләнә һуң? (Слайдтар.)

Тәбиғәтте һауыҡтырыу буйынса ниндәйҙер саралар күрелә башланы , әлбиттә. Дәүләтебеҙ тарафынан һуңғы йылдар “Төҙөкләндереү йылы”, «Тирә–яҡ мөхитте һаҡлау йылы» тип иғлан ителде. Дәүләт кимәлендә ҙур эштәр планлаштырылды. Ләкин киләсәктә тирә-яҡ мөхитте сафландырыуҙа эшләүсе эштәр күп әле.

6. Баһалау.

7. Өйгә эш: «Р. Бикбаев ижадында экологик проблема» тигән темаға инша яҙырға.

“НИНДӘЙ БӘХЕТ, НИНДӘЙ СИКһЕҘ БӘХЕТ – ОШО ЕРҘӘ ТЫУЫП ҮҪЕҮҘӘР!”

Төхбәтуллина Динә Рәфит ҡыҙы,
Кушнаренко ауылының гимназияһы

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән яҡынанараҡ таныштырыу, изге тыуған еребеҙгә һөйөү тәрбиәләү, арҙаҡлы шағирыбыҙ ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: медиапроектор, компьютер.

Уҡытыусы. (Р.Бикбаевтың “Тыуған ерем!” шиғырын яттан һөйләй.)

…Башҡортостан! Таштар сәскә ата
Таңғы елдәреңдең наҙынан.
Күгеңдәге һанһыҙ йондоҙ кеүек,
Ҡатламдарың тулы хазина.
Байрам бит ул – һауаларың һулап,
Һуҡмағыңдан тик бер үтеүҙәр.
Ниндәй бәхет, ниндәй сикһеҙ бәхет –
Ошо ерҙә тыуып үҫеүҙәр!...

Мәшһүр шәхестәре менән дан тотҡан гүзәл Башҡортостаныбыҙ ерендә тыуған халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа быйыл 75 йәш тула. Уның тормошо һәм ижады тураһында китап яҙған академик Ғайса Хөсәйеновтың һүҙҙәренә иғтибар итәйек. (Экран аша уҡыу.)

“Рауил Бикбаев – ысын мәғәнәһендә ҙур шәхес, атаҡлы кеше… Ул танылған йәмәғәт эшмәкәре. Ул күп йылдар Башҡортостан Яҙыусылар союзы менән уңышлы етәкселек итә, республикабыҙҙың, улай ғына түгел, Рәсәй, хатта бөтә донъя, халыҡ-ара кимәлдә мөһим йәмәғәт-ижтимағи, мәҙәни ойошмалары эшендә әүҙем ҡатнаша.

Рауил Бикбаев – Башҡортостан Хөкүмәте – Ҡоролтай депутаты. Уның бүлек мөдире. Танылған дәүләт эшмәкәре.

Шағир булараҡ Рауил Бикбаевтың үҙ индивидуаль йөҙө, сағыу пафосы, үҙ ҡәләм егәре бар. Уның шиғриәте аҡыл ҡеүәһе, интеллектуаллеге менән айырылып тора.

Рауил Бикбаев бик көслө публицист та… Рауил Бикбаев – бер үк ваҡытта әҙәбиәт белгесе, ғалим кеше. Филология фәндәре докторы, профессор… Рауил Бикбаевтың ораторлыҡ һәләте лә көслө. Мин уны трибун шағирыбыҙ ҙа тип атар инем… Ул натураһы менән ҡайһы мәлдәрҙә күпме генә ҡатмарлы тойолмаһын, рух көсө, талант ҡеүәһе, миһырбанлығы менән әсир итә.”

Бына ошондай оло талант эйәһенең тормош баҫҡыстары менән танышыу – беҙҙең бөгөнгө бурысыбыҙ. (Экран аша шағирҙың биографияһы хронологик таблица ярҙамында күрһәтелә.)

1-се алып барыусы. Рауил Бикбаев тыуып үҫкән Ырымбур далалары, Туҡсоран буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылы ҡыпсаҡ ырыуы нигеҙләгән боронғо ауылдарҙан иҫәпләнә.

Тарихтан билдәле булыуынса, ҡыпсаҡтар ғәйрәтле, яусан, даусан тоҡом. “Ҡырыҫ дала кешене бәләкәйҙән үк ҡаты һынауҙарҙа сыныҡтыра, тип фекер йөрөтә Рауил Бикбаев. – Даланың күҙ асҡыһыҙ бурандарҙа кеше ышыҡланыр урындары ла, йәйге селлә ҡояшы өтөп барғанда йәшенер күләгәһе лә юҡ. Сыҙамлығыңа ышыҡланаһың, сабырлығыңды күләгә итәһең…”

1-се уҡыусы. Туҡсораным – йәйрәп ятҡан далам,
Дала кеүек асыҡ күңелдәр.
Һиндә генә изге тамырҙарым,
Ҡанаттарым һиндә кирелгән.
Туҡсораным, сабый сағымда
Сыныҡтырҙы дауыл -бураның.
Көрттәр ярҙыҡ, һаман алға барҙыҡ,
Дауыл-бураныңа уранып.
Туҡсораным, күпме юл ураным,
Һағыныуым һиңә осора.
Алыҫтарҙан тыныҡ тартып ала,
Тыуған ерем, ғәзиз Туҡсоран. (“Туҡсоран”)

(Экран аша Р. Бикбаевтың шәжәрә ете быуыны күрһәтелә: Аҫылгәрәй – Бикбай – Ҡотлоәхмәт – Хәсән – Мөхәмәтшә – Шәрәфетдин – Төхфәтулла – Рауил.)

2-се алып барыусы. Аҫылгәрәй, оло олаталары, үҙ заманында Соранда ғына түгел, Туҡ буйҙарында ла дан тотҡан. Уның ике улы Бикбай менән Табылдынан Бикбаевтар менән Табылдиновтар фамилияһы таралып киткән. Бикбайҙан дүртенсе быуын булып Рауилдың ҡартатаһы Шәрәфетдин, Табылдынан дүртенсе быуын булып Ғабдулла Амантайҙың атаһы Сәхипгәрәй тыуған. Тимәк, Р. Бикбаев ауылдашы атаҡлы шағир һәм ғалим Ғабдулла Амантай менән бик яҡын туғандар.

1-се алып барыусы. Рауилдың Мәүлитбикә өләсәһе сәсән телле зат булған. Ауылдағы төрлө хәлдәр, ҡылымһыр ҡылыҡтар тураһында төртмә такмаҡтар сығарырға яратҡан, улар халыҡ теленә күскән. Ҡайғылы хәлдәр хаҡында бәйеттәр көйләгән, һүрәт төшөрөргә лә әүәҫ булған.

2-се уҡыусыОталманым уның әйткәндәрен,
Ҡалғанмын шул инде, аһ, һуңлап.
Өләсәм һуңғы бәйетен көйләгәндә,
Минең телем яңы асылған.
Иҫләмәйем йөҙөн. Юҡһынырға
Ғүмерлеккә серле өн ҡалды.

Төҫө булып өйөбөҙ ишегендә
Ул төшөргән бойоҡ гөл ҡалды…
(“Өләсәйем бәйеттәре”.)

2-се алып барыусы. Оло һуғыш йылдары Р. Бикбаевтар өйөнә лә ҡайғы килтерә. 1945 йылдың майында атаһы үлеп ҡала. Әсәһе, туғандары ярҙамы менән Ҡунаҡбай ауылындағы ҡуш өйҙөң яртыһын ҡутарып алып, үҙенең тыуған ауылы күрше Ғабдрафиҡҡа күсереп һалдыртырға мәжбүр була. (Экран аша Төхфәтулла Шәрәфетдин улының рәсеме күрһәтелә.)

3-сө уҡыусы. Һуғыш!
Сабый тотҡан туҫтаҡтағы
Аҡ ризыҡҡа ҡара һыу ҡушҡан.
Беҙ ҙә ҡырыҫ ирҙәр менән бергә
Сабый кәйә индек һуғышҡа.
Ҡара яуҙың ҡара ҡором-көлән
Битебеҙгә үтте ел бәреп,
Һуғыш тигән асы хәҡиҡәтте
Күп нәмәнән белдек элгәре...
Ул йылдарҙың утлы иҫтәлеген
Баҫа алмай һис бер аралар.
Әле яна беҙҙең тәнебеҙҙә
Атайҙарҙан ҡалған яралар.

1-се алып барыусы. Әсәһе ауылы Ғабдрафиҡҡа ла яйлап күнегә Рауил, яңы мәктәптә тырышып уҡый. Алтынсы-етенсе синыфтарҙа бүтәндәрҙән йәшереберәк шиғырҙар ҙа яҙа башлай. Бәләкәй генә ете йыллыҡ мәктәптә үҙенсә әҙәби мөхит булған. “Беҙ бәләкәй саҡта кем күпме әкиәт, күпме таҡмаҡ белә тип ярыша торғайныҡ. Йомаҡ ҡойош ғәҙәти хәл ине”,- тип иҫкә ала шағир.

4-се уҡыусы. Алыҫтарҙа, тыуған яҡты
Һағынып, уттар йоттом.
Иң йырлыһы, иң йылыһы –
Тупһаһы тыуған йорттоң.
Ошонда уҙҙы ғүмерҙең
Сабый сағы, шуҡ сағы.
Киң донъяға алып сыҡты
Тыуған йорттоң тупһаһы.
Талпынғанда тыуған йортҡа,
Күңелемде йыр ҡаға.
Тауҙарға менгәндәй булам,
Баҫһам тыуған тупһаға.
(“Тыуған йорттоң тупһаһы”.)

2-се алып барыусы. Шағир, ысынлап та, ижади мөхит эсендә, телгә, әкиәткә, йырға, таҡмаҡҡа оҫта ололар араһында үҫә, уларҙың һөйләгәндәрен, көйләгәндәрен йотлоғоп тыңлай, рухын байыта. Рауил өсөн был йылдар үҙе бер әһәмиәткә эйә.

Баланың күңел донъяһын байытыуҙа, әлбиттә, әсә кешенең роле ҙур. “Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зиһенемә һеңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне – әсәйем”, - ти ул үҙе лә. Әсәһе – Рәҡиә Латип ҡыҙы Вахитова дини рухлы ғаиләлә тәрбиәләнгән, илдә һөрөү башланғас, Архангель губернаһындағы Котлас лагерҙарында нисәмә йылдар буйы нужалар күргән ғибрәтле яҙмышлы. (Экран аша Рәҡиә Латип ҡыҙының фоторәсемдәре күрһәтелә.)

5-се уҡыусы. Иң беренсе ишеткәнем ерҙә,
Иң беренсе күргән күҙҙәрем –
Әсәйемдең яҡты йөҙө менән
Әсәйемдең йылы һүҙҙәрен.
Әсәләрҙең өмөт-ҡараштарын,
Әсәләрҙең әйткән һүҙҙәрен
Кешеләр һуң бөтәләрме аңлап,
Бала үҫтермәйсә үҙҙәре…
Бер йылмайып, бер моңайып ҡарап,
Йылдар менән донъям үҙгәрер.
Йылдар үткән һайын ҡәҙерлерәк
Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре.
Был йәйҙәр ҙә гөрләп үтер-китер,
Ғүмеремдең етер көҙҙәре,
Һуңғы минутымда сыңлап ҡалыр
Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре.
(“Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре”.)

1-се алып барыусы. Рауил Ғабдрафиҡта етенсе синыфты уңышлы тамамлай. Уҡырға тырыш, зиһенле улын әсәһе артабан уҡытырға теләй. Улар үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрымдар ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилищеһын һайлайҙар.

“Дүрт йылым китап уҡып үтте, - тип хәтерләй шағир. – Аҡбулаҡта күп ваҡыт тамаҡ яғы бик таҡыр булһа ла, китап уҡып кинәндек. Асығыуҙы баҫыр сара тапмағас, ял көндәрендә йыш ҡына ваҡытты китап уҡып үткәрә инек”. (Экран аша Р. Бикбаевтың Аҡбулаҡ педучилищеһында уҡыған ваҡытта төшкән фоторәсемдәре күрһәтелә.)

Ул бында уҡыған йылдарын яҙмыш бүләк иткән бәхет тип һанай, был уҡыу йортоноң программаһы бик йөкмәткеле һәм киң төҙөлгән булыуын иҫкә ала.

6-сы уҡыусы. Аҡ-Булағым минең, әй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.
Һин өйрәттең һис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ…
("Аҡ-Булаҡ".)

2-се алып барыусы. Рауил Бикбаев Аҡбулаҡ педучилищеһын 1957 йылда тамамлай һәм ошо йылдың көҙөндә Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында уҡый башлай. Уға өр-яңы рухи донъя, ижади мөхит асылып китә. "Китапханаларҙа үткәргән көндәр, әҙәби түңәрәктә ҡулъяҙмалар тикшереүҙәр, йәш ҡәләмдәштәр менән аралашыуҙар минең әҙәби зауығымды тиҙ үҫтерҙе, һүҙгә талапсанлығым көсәйҙе",- тип иҫкә ала ул. (Экран аша Р.Бикбаевтың университетта уҡыған йылдарҙа төшкән фоторәсемдәре күрһәтелә.)

7-се уҡыусы. Киләсәккә төбәп ҡараштарын,
Менгән халҡым тауҙарөҫтөнә.
Һәм тауҙарға ҡала ҡалҡып сыҡҡан,
Мин – мәңгелек
Тигән төҫ менән.
Ҡанса быуаттарҙың ҡайнар ҡаны
Ошо ҡаяларға түгелгән.
Минең өсөн Өфөм иң ғәзиз ер,
Һәр тыҡрығы яҡын күңелгә.

1-се алып барыусы. " Алтмышынсы йылдарҙа башҡорт шиғриәтенә йәштәр ҙур, көслө төркөм булып килде һәм ижади аралашыуҙар, фекер алышыуҙар бик йөкмәткеле, файҙалы була торғайны", -тип хәтергә ала Рауил Бикбаев был осорҙо. Студент йылдарында ул рус һәм донъя әҙәбиәте классикаһын, бигерәк тә шәректең бөйөк шағирҙарын уҡый, рухланып шиғырҙар яҙа.

8-се уҡыусы. Аҡ ҡағыҙ битенән элек
Аҡ ҡарға төшә йырым.
Аҡландарҙа, еләк булып,
Һутланып бешә йырым.
Яҙам талдар япрағына,
Ҡоштарҙың ҡанатына.
Һаҡ кейектәр һуҡмағына,
Ҡыҙған юлдар сатына.
Уйҙарым, тауҙарҙан ашып,
Ҡымыҙҙай тора ташып.
Эш бүлмәм – Башҡортостаным,
Өҫтәлем – Урал ташы…
("Аҡ ҡағыҙ битенән элек".)

(Экран аша Рауил Бикбаевтың төрлө йылдарҙа төшкән фоторәсемдәре күрһәтелә.)

2-се алып барыусы. Артабан ул Өфө Фәндәр академияһында аспирантураны тамамлап, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 30 йыл тирәһе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы. Ул – Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты, бер нисә орден-миҙалдар кавалеры. Рауил Бикбаев менән Рәшит Шәкүр Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны текстының авторҙары.

1-се алып барыусы. (Экран аша Р. Бикбаевтың китаптар шәлкеме күрһәтелә.) Р.Бикбаев тиҫтәнән ашыу шиғыр һәм поэма йыйынтыҡтары авторы. Р.Бикбаев поэзияһы уҡыусыға тыуған яҡтың яландар иркенлеген, науаларҙың йәмен-тәмен тойорға, ғәләм киңлектәрен иңләргә лә мөмкинлек бирә. Әммә шағир ер улы, туған халҡы балаһы булып ҡала. Рауил Бикбаев – Башҡортостандың халыҡ шағиры.

9-сы уҡыусы. Бер һүҙ беләм. Аҙашҡанда юлдарымды
Яҡтыртамын шул һүҙ менән.
Шул һүҙ менән, ауырҙы ла еңел күреп,
Мин тауҙарға елеп менәм.

Бер һүҙ беләм. Олатайҙар васыяты
Ошо һүҙгә һыйған һымаҡ.
Быуаттарҙың яҡты нурын, яҡшы йырын
Ул үҙенә йыйған һымаҡ.

Башҡа һүҙҙәр нур алырға йыйылғандар
Ошо һүҙҙең тирәһенә.
Оҡшатамын һәр саҡ уны телемдәге
Бар һүҙҙәрҙең йөрәгенә.

Нисәмә ҡат аҫылһа ла, атылһа ла,
Һатылмаған һис бер көскә.
Яу ҡупҡанда сафтар буйлап, юлбашсылай,
Остан осҡа
Был һүҙ осҡан –
Башҡортостан!

2-се алып барыусы. Уның тормошо һәм ижады буйынса монография яҙған академик Ғайса Хөсәйенов һүҙҙәрен тыңлап үтәйек:

“…Рауил Бикбаев – заман һулышына үтә һиҙгер шағир. Ул ер шарының һәр тарафынан иҫкән төрлө елдәрҙе, тетрәнеүҙәрҙе йәһәт тоя, шатлыҡлы һәм хәүефле өн-тауыштарҙы ҡолағы сос ишетә, күҙҙәре күп нәмәләрҙе зирәк күрә.

…шағир йөрәктәр тибешен, йәшкә мансылған шатлыҡты, хаҡ менән нахаҡ алышын аңларға, ерҙә йәшәү мәғәнәһен төшөнөргә, төшөндөрөргә теләй.

… Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды.

…Күп тармаҡлы, юғары сифатлы, тәрән тамырлы ижады менән Рауил Бикбаев башҡорт әҙәбиәте үҫешенә, Башҡортостандың рухи тормошона үҙенең ҙур өлөшөн индерә.”

Уҡытыусы. Уға киләсәктә лә ижади уңыштар теләйек. Рауил Бикбаев – башҡорт поэзияһының сағыу йондоҙо ул.

…Тыуған ерем! Түгеп хәләл тирен,
Халҡым һине гөлдәй ил иткән.
Ынтылам мин һинең бейеклеккә,
Ынтылам мин һинең киңлеккә.
Һулыу белмәҫ һинең матурлыҡҡа
Мин генәме былай табынған?
Йомартлығың йырҙа йырланылған,
Уңғанлығың илгә танылған.
…Башҡортостан!
Тамсы нурыңа ғына
Тиңләй алһам ине йырымды,
Һинең кеүек, йомарт бүлһәм ине
Башҡаларға йөрәк йылымды.
(“Тыуған ерем!”)

“ЙӘЙҒОР КЕҮЕК БАЛҠЫЙ ТЫУҒАН ЕРЕМ”

Искәндәрова Әлфирә Әнүр ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Калинин районының З. Биишева исемендәге
140- сы Башҡорт гимназияһы

Маҡсат. 1) Яҙыусы әҫәренең идея-тематик йөкмәткеһен асыу;
2) тасуири уҡыу күнекмәләрен ойоштороу;
3) уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү һәм эҙләнеү күнекмәләрен үҫтереү;
4) тыуған республикаңды ҡәҙерләү, һөйөү тойғолары тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: яҙыусының портреты, китаптарынан күргәҙмә, дәреслек, Башҡортостан картаһы, һүҙлектәр, плакаттар, фонохрестоматия.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

1. Дәрестең темаһы һәм маҡсаты менән таныштырыу.

2. Плакатҡа яҙылған девизға иғтибар йүнәлтеү.

Уҡытыусы.

- Девиз ниндәй фигураны хәтерләтә? (Йәйғор.)
- Йәйғорҙа ниндәй төҫтәрҙе күрәбеҙ? (Йәшел, аҡ, зәңгәр.)
- Ә был төҫтәр нимәне аңлата?

Йәшел төҫ – азатлыҡ, мәңгелек тормош билгеһе.

Аҡ төҫ – тыныслыҡты һөйөү, үҙ-ара хеҙмәттәшлекте белдерә.

Зәңгәр төҫ – сафлыҡ, яҡтылыҡты аңлата.

Ә хәҙер Рәсәй флагы төҫтәренең ниндәй мәғәнәгә эйә булыуын асыҡлап үтәйек.

Аҡ төҫ – тыныслыҡ, сафлыҡ.

Күк төҫ – ышаныс, тотороҡлолоҡ.

Ҡыҙыл төҫ – көс, ил өсөн ҡойолған ҡан, энергия.

II. Әңгәмә ҡороу (девизды бер –ике уҡыусынан тасуири уҡытыу, уның дәрескә ҡағылышлы әһәмиәтен билдәләп үтеү.)

Уҡытыусы.

Дәрестең төп темаһына ҡәҙәр, әйҙәгеҙ, ҡыҫҡаса тарихҡа тукталып үтәйек (ҡурай таждары төшөрөлгән һүрәт-плакат менән эш итеү.)

- Унда яҙылған даталарҙың әһәмиәтлеге нимәлә?

1919 йылдың 23 марты – Башҡортостан Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының төҙөлөүе.

1922 йыл, июнь – Башҡорт АССР-ның хәҙерге мәлдәге сиктәрен билдәләү һәм Өфөнөң баш ҡалаға әүерелеүе.

1938 йылдың 12 декабре – Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың тыуған көнө (биографик белешмә биреп китеү.)

1941-1945 йылдар – Бөйөк Ватан һуғышы.

1990 йылдың 11 октябре – Суверенлы Башҡортостан Республикаһының төҙөлөүе. Беренсе Президентты һайлау көнө.

1992 йылдың 25 феврале - Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагын раҫлау.

- Дәүләт флагының авторҙары кем? (Ольга Евгеньевна Асабина, Урал Тимербулат улы Мәсәлимов)

1993 йылдың 12 октябре - Башҡортостан Республикаһының дәүләт гербы һәм гимны раҫланған көн.

- Дәүләт гербының һәм гимнының авторҙары кем? (Герб авторы – Фазлетдин Фәррәх улы Ислахов, гимндың авторы - Фәрит Фәтих улы Иҙрисов, ә гимн тексы авторҙары – Рәшит Шәкүр, Рауил Бикбаев, тәржемәһе – Ф.Иҙрисов һәм Светлана Чураева. Гимндың тексы 2008 йылдың 18 сентябрендә раҫлана.)

- Был даталар нимәгә ишаралай? Ниндәй һығымта яһарға мөмкин?

- Эйе, һеҙҙең фекерҙәрегеҙ менән килешәм һәм билдәле ғалим, халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйеновтың һүҙҙәре менән йөпләп ҡуям: “Тарих – халыҡ яҙмыштары төйөнө, заманалар ағышы, яҡтылыҡ менән ҡараңғылыҡ, аң менән томаналыҡ, яҡшы менән яман көрәше”.

III. Президент тарафынан быйылғы йыл ниндәй йыл тип иғлан ителде? (Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы). Беҙҙең республика нисек атала?

Ә хәҙер бөгөнгө темаға – яңы әҫәр менән танышыуға күсәйек. Ул Р. Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғыры.

Һүҙлек өҫтөндә эш.

Офоҡ – горизонт (күк менән ерҙең тоташҡан һыҙығы)

Ҡитға –материк

Алыҫҡа бағыу – йыраҡҡа ҡарау

Ҡолас – размах.

- Уҡытыусының тасуири уҡыуы, һуңынан уҡыусыларҙан тасуири уҡытыу.

- Әңгәмә ҡороу. Һорауҙарға яуаптар алыу.

- Шиғыр һеҙҙә ниндәй тәьҫораттар уятты?

- Автор ниндәй ер-һыу атамаларын телгә алып үтә?

- Эйе, йылғаларҙы. (Сөн, Яйыҡ, Юшатыр, Әй.)

- Был йылғалар Башҡортостандың ниндәй мөйөштәренән башлана? Был йылғалар тураһында “Башҡортосан географияһы” дәресендә үтәһегеҙ.

- Тағы ла Башҡортостандың ниндәй йылғаларын беләһегеҙ? (Башҡортостан картаһы һәм йылғаларға бағышланған плакат менән эш итеү.)

- Йәй көндәрендә ниндәй йылғаларҙа һыу инәһегеҙ?

- Р. Бикбаев тыуған иленә, республикаһына булған мөнәсәбәтен нисек сағылдырған? Ул үҙенең әҫәрен яңғырашлы, хисле, һығылмалы итеү өсөн ниндәй һүрәтләү саралары ҡуллана?

Һүрәтләү саралары яҙылған таблицаға таянып эш итеү.

IV. Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе. Шулай итеп, балалар, беҙ бөгөнгө дәрестә тыуған республикабыҙ – Башҡортостан хаҡында һүҙ йөрөттөк. Тарих, география фәндәренә бәйле күренештәр менән танышып үттек. Йәйғор рәүешендә ике илдең (Башҡортостан менән Рәсәй) флаг төҫтәре сағылышын һәм уларҙың иҡтисад, сәйәси, мәҙәни үҫеше берҙәмлегенең һүрәтләнешен күрҙек. Шулай уҡ даталар яҙылған ҡурай таждары аша ете ырыуҙың татыулығына, берҙәмлегенә юлыҡтыҡ. Олатай-атайҙарҙың мираҫына һәр саҡ тоғро булып ҡалыуҙы раҫланыҡ. Ә беҙҙең бурысыбыҙ – үҙ илебеҙҙең ысын хужаһы, патриоты булып ҡалыу һәм киләсәктә Республикабыҙҙың сәскә атыуын, уның байлыҡтарын һаҡлау һәм унда йәшәгән халыҡтарҙың дуҫлығын, берҙәмлеген нығытыу.

V. Баһалау.

VI. Өй эше. Шиғырҙағы һүрәтләү сараларын яҙып бөтөрөргә.

“РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “БИКБАЙ МЕНӘН БИКБАЙ ҺӨЙЛӘШЕҮЕ” ШИҒЫРЫНДА ЗАМАНА, МОРАЛЬ-ЭТИК МӘСЬӘЛӘЛӘР

Яхина Люциә Рәис ҡыҙы,
Стәрлетамаҡ ҡалаһы “4-се гимназия”

Дәрестең маҡсаты: 1) Р. Бикбаевтың биографияһы, уҡылған шиғырҙары буйынса белемде иҫкә төшөрөү, нығытыу, системаға һалыу, «Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе» шиғырының идея-тематик йөкмәткеһен аңларға ярҙам итеү.

2) Тыуған илгә һөйөү, әүҙем тормош позицияһы булдырыуға булышлыҡ итеү, намыҫлылыҡ, үҙ-үҙеңә ышаныс тәрбиәләү.

3) Фекерләү, һығымта яһай белеү ҡеүәһен үҫтереү, аралашырға, күрше фекеренә ҡолаҡ һала белеү, хөрмәт тәрбиәләү, ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: Шағирҙың портреты, әҫәрҙәре, аңлатмалы һүҙлек, эш ҡағыҙҙары, презентация, аудиокассета, магнитофон.

Ойоштороу блогы.

(Экранда 1-се слайд. Р. Бикбаевтың портреты.)

Уҡытыусы: Балалар, аҡыллы кеше үҙенең, кешеләрҙең үткәндәренән һығымта яһай, өйрәнә, хаталарҙы ҡабатламаҫҡа тырыша. Үткәндәр беҙгә алға барырға ярҙам итә. Шуға күрә беҙ ҙә тәүҙә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың биографияһын, уҡылған әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөп үтербеҙ. Ваҡытты экономиялау маҡсатында төркөмләп эшләргә тәҡдим итәм. Эш барышы – 6-7 минут. Бер-берегеҙҙең фекерен иғтибар менән тыңлап эшләргә, белемдәрегеҙҙе баһаларға әҙер булығыҙ.

Актуалләштереү. Төркөмдәр менән эш. (2-се слайдта һәр төркөмгә эш төрҙәре.) Беренсе төркөмгә эш: тест һорауҙарына яуаптар.

1. Р. Бикбаев ҡайҙа тыуған?
а) Күгәрсен районында
б) Силәбе өлкәһендә
в) Ырымбур өлкәһендә
2. Уның беренсе шиғырҙар йыйынтығы нисек атала?
а) “Вокзал”
б) “Дала офоҡтары”
в) “Ҡош юлы”
3. Шағир нисәнсе йылда тыуған?
а) 1928 й.
б) 1938 й.
в) 1945 й.
4. Шағирҙың ниндәй поэмаһын баҫтырғандан һуң “Совет Башҡортостаны” гәзите хеҙмәткәрҙәренең бер нисәһе вазифаһынан бушатыла ?
а) «Ностальгия»
б) «Вокзал»
в) «Баҙар балтаһы»
5. Ниндәй шағирҙың тормошо һәм ижады буйынса монография яҙа?
а) Мостай Кәрим
б) Назар Нәжми
в) Шәйехзада Бабич

Икенсе төркөмгә эш: “Ҡара ҡумта”. Был уҡ менән Р. Бикбаев ижады араһында ниндәй бәйләнеш бар?

Өсөнсө төркөмгә эш: өҙөктәрҙең ниндәй әҫәрҙәрҙән икәнен билдәләргә.

«…Һиңә баҡһам күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та.
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар»(«Уралыма»)

“...Күпме йылдар үтте,
Әле һаман
Бер яңғыҙым ҡалған сағымда
Һығылып ҡына сыға ҡурай моңо
Һыҙылып ҡына атҡан таңымда.” (“Ҡурай”)

«...Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты.
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты,
Башҡортостан бында башлана» («Башҡортостан бында башлана»)

«...Талпынғанда йырым,
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды.
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон,
Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын»(«Йүкәләрҙән һығылып бал тама»)

Уҡыусыларҙың яуаптары, баһалау.

Мотивацион блок.

Уҡытыусы: Р.Бикбаевтың һуңғы йылдарҙа яҙылған лирик шиғырҙарының күбеһе монолог рәүешендәге уйланыуҙарҙан ғибәрәт. Бындай монологтың төп һыҙаты – ихласлыҡ. Был аңлашыла ла, сөнки үҙ-үҙеңде алдап булмай бит. Әммә был үҙең менән генә һөйләшеү түгел, шағир башҡаларға ла, хатта бөтә донъяға ла һорауҙар менән мөрәжәғәт итә.

(3-сө слайд. Тема. Рауил Бикбаев. Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе)

(1-се эш ҡағыҙы) Шиғырҙы инсерт алымы менән үҙ аллы уҡып сығырға.

Эй Бикбайым, ҡайҙа ҡалды егет сағың,
Убаларҙа уйнап туймаҫ кейек сағың,
Күк үләндән йондоҙғаса бейек сағың,
Ерле юҡтан бойоҡ сағың, көйөк сағың.

- Көлмә юҡҡа, мин һаман да Бикбай әле,
Намыҫымды ҡаплар майҙар йоҡмай әле,
Ғүмер ғәфләт йоҡоһона йығмай әле,
Йәшлек еле минән һаман сыҡмай әле.

Йөрәмәм дә эй тигәнгә эйеп кенә,
Тирә-бейҙәр бейеткәнгә бейеп кенә,
Юҡ ғәйепте бәндәләргә өйөп кенә,
Кеше бәхетен күреп ҡара көйөп кенә.

Алдайһыңмы әллә тура атлайһыңмы –
Нисек кенә йәшәһәң дә – үҙ яйыңда.
Берәү генә яҙмышың да, намыҫың да,
Берәү генә Рауилың да, Бикбайың да.

3-сө слайд. Парлап эш.

Беренсе рәт парҙары өсөн һорау: Был юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

“Намыҫымды ҡаплар майҙар йоҡмай әле...”

Уҡыусыларҙың яуабы: Намыҫым таҙа. Насар эштәр ҡылмайым.

Икенсе рәт парҙары өсөн һорау:

“Ғүмер ғәфләт йоҡоһона йығмай әле...”

Уҡыусыларҙың яуабы: Ғәфләт – ғәмһеҙлек, вайымһыҙлыҡ. Тимәк, ғәмһеҙ, битараф түгелмен. Ярамаған, оҡшамаған нимәләрҙе ваҡытында әйтеп барам.

Өсөнсө рәт парҙары өсөн һорау:

“Кеше бәхетен күреп, ҡара көйөп кенә...”

Уҡыусыларҙың яуабы: Кеше бәхетенә көнләшеп йәшәмәү.

(Аңлашылмаған һорауҙар булһа, асыҡлыҡ индерелә). Был эш төрҙәренән һуң шифыр ҡысҡырып тасуири уҡытыла.

Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.

Уҡытыусы: Үҙенең әле 1991 йылда яҙылған “Баҙар балтаһы” поэмаһында автор намыҫ, намыҫһыҙлыҡ проблемаһын күтәреп сыға.

4-се слайд.

Булырмы был хәсрәтле илдең
Биҙгәк ҡалтыратмаҫ саҡтары
Туҡтамаҫтан хаҡтар күтәрелә.
Төшә бара намыҫ хаҡтары.

Был әҫәрҙә намыҫ, намыҫһыҙлыҡ мәсьәләләре нисек хәл ителә? Нимә һуң ул намыҫлы йәшәү? Уҡыусыларҙың фекерҙәре.

Ял минуты. Блиц-турнир.

1. “Бер һүҙ беләм ата-бабалар васыят итеп ҡалдырған”. (Яуабы- Башҡортостан.)

2. Болгар ҡыҙы Снежана лирик геройҙы София урамында башҡорт халҡының ниндәй милли эсемлеге менән һыйлай һәм йөрәгенә ут һала. (Яуабы – айран.)

3. “Эҙләһә үҙ ирәмәлен”, ир ни табыр? (Яуабы – әмәлен.)

4. Рауил Бикбаевтың бер шиғыры “Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ” тип атала. Был кем һүҙҙәре? (Яуабы – Салауат Юлаев.)

5. “Көтөүсе хыялы” шиғырында көтөүсе һәм лирик герой нимә хаҡында хыяллана? (Яуабы – ер, туғай, ҡырҙар.)

6. Үҙенең бер шиғырында автор кемде “һаҡаллы сабый” тип атай? (Яуабы – үҙен.)

Уҡытыусы: Әҙәм балаһының йәшәүе ғүмер буйына хәҡиҡәтте эҙләүгә ҡайтып ҡала һәм ул хәҡиҡәтте халҡыңдың рухи байлығынан башҡа табыуы икеле.

Аудиотаҫманан “Бер тигәс тә ни яман” ҡобайырын тыңлау.

Икенсе эш ҡағыҙында ҡобайырҙың йөкмәткеһе бирелә. Йөкмәткә буйынса түбәндәге таблица тултырыла.

Ыңғай сифаттар	Кире сифаттар

Ата-бабаларыбыҙ ниндәй сифаттарҙы хуплай, ҡайһыларын инҡар итә?

Уҡытыусы: Кеше ғүмере бишек менән ҡәбер арауығы. Шул аҙ ғына ғүмерҙе кемдер намыҫлы итеп үтә, кемдер “ник тыуҙы” үкенесе менән китә. Нимә был?! Яҙмышмы?! Хоҙай ҡушыуымы?! Кемдеңдер ҡулындағы уйынсыҡмы әллә кеше?!

Өсөнсө эш ҡағыҙы. Әҫәрҙең йөкмәткеһе менән танышыу.

Бер саҡ Хужа Насретдин үҙенең уҡыусылары менән ҡала буйлап китеп бара. Ҡаршыға бер ҡатын осрай. Үҙенең аҡыллыраҡ икәнен күрһәткеһе, Хужаны оятҡа ҡалдырғыһы килә уның. Бер усында тере ҡошто йомарлаған килеш, ике ҡулын да алға һоноп, былай ти:”Хужа, һине бик аҡыллы, тиҙәр, яуап бир әле миңә: усымдағы ҡош тереме, үлеме?” Үҙенең уйы - Хужа ҡошто “тере” тип әйтһә, уны һығып үлтереү, “үле” тиһә, осороп ебәреү икән. Хужа ниндәйҙер мәлгә өнһеҙ ҡала ла ҡатындың күҙҙәренә ҡарап, “Хәҙер бөтәһе лә һинең ҡулда,”- ти, китеп бара.

Рефлексия.

Уҡытыусы: Хужаның был һүҙҙәрен Р. Бикбаевтың шиғыры менән нисек бәйләп була?

Уҡыусыларҙың яуаптары.

Уҡытыусы: Шулай, балалар, бер тигәс тә, ун тигәс тә, мең тигәс тә...Таяҡ башы барыбер үҙебеҙгә төшә. Ниндәй генә ғәмәлдәр ҡылһаҡ та, үҙ ҡулыбыҙҙа, яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ яһайбыҙ.

Уҡыусыларҙың фекерен иҫәпкә алып, билдәләр ҡуйыла.

Өй эше. Көслө уҡыусыларға ысын башҡорт, уртаса уҡыусыларға ысын кеше кодексын яҙырға, йомшаҡ уҡыусыларға “намыҫлы –намыҫһыҙ” таблицаһын тултырырға.

ҺАҒЫШТАРЫМ ТЫУҒАН ЯҠТА
(РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ИЖАДЫ БУЙЫНСА ӘҘӘБИ КИСӘ)

Әделгәрәева Зилә Фәрит ҡыҙы,
Баҡалы районы Иҫке Ҡорос
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаев ижадын, тормош юлын тулыраҡ өйрәнеү; шиғырҙарына ҡүҙәтеү яһау; уҡыусыларҙың тасуири һөйләү телмәрен үҫтереү; поэзияға ҡыҙыҡһыныу уятыу; тыуған яҡҡа һөйөү тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: плакаттар, Р. Бикбаев портреты, электрон дәреслек, китаптары, компьютер.

Кисә барышы.

1. Ойоштороу моменты.

Хөрмәтле уҡытыусылар, уҡыусылар! Кисәбеҙҙе башлайбыҙ. Ул *“Һағыштарым тыуған яҡта”* тип аталасаҡ.

Ике уҡыусы шиғыр һөйләй.

Шиғырҙарығыҙ өсөн рәхмәт. Уҡыусылар, мин хәҙер һеҙгә бер шиғырҙан өҙөк уҡып ишеттермәксемен, ә һеҙ уның кем шиғыры икәнен уйлап ултырығыҙ.

Р.Бикбаев шиғырынан өҙөк .

- Эйе, дөрөҫ. Әле һеҙ ишеткән шиғыр юлдарының авторы - Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев. Ул үҙенең ижады менән шағир. Асыҡ күңелле, тапҡыр һүҙле Рауил ағайҙың шиғырҙары беҙҙең күңел байлығыбыҙҙы яҡтыртып, байытып килә. Тыуған ерен, халҡын, телен һөйөүе уның ғүмерен оҙонайта. Бөгөнгө кисәбеҙ уға арналасаҡ.

-Һәр кешенең тәү тапҡыр тормошҡа аяҡ баҫҡан ере була. Кеше шунда тыуа, шунда донъя менән хушлаша. Тыуған яҡһыҙ кеше - ҡанаты ҡайырылған ҡош кеүек ул. Р.Бикбаев та үҙенең тыуған яғын һағына, юҡһына, үҙенең шиғырҙарында йыш ҡына тыуған ауылына юл ала. Уның ошо турала яҙылған шиғырын тыңлап үтеү урынлы булыр.

“Тыуған йорттоң тупһаһы”

Кисәбеҙҙең беренсе өлөшө - **Бөтәһе лә уның хаҡында**

А.Б. Һәр дәүерҙең үҙ иле, тыуған халҡы өсөн янып-көйөп йәшәгән ҡаһарман рухлы шәхестәре була. Бөгөнгө башҡорт шиғриәтенең ғорурлығы – мәшһүр һүҙ оҫтаһы Рауил Бикбаев нәҡ ошондай баһаға эйә. Уның исеме республикабыҙҙа ғына түгел, илебеҙҙең башҡа тарафтарында ла киң билдәле.

А.Б. Ырымбур далаһы. Туҡсоран буйҙары. Заманында ошо ерҙәрҙә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдары Мөхәммәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Ағиш, Ғабдулла Амантай һәм башҡа күп шәхестәр донъяға килгән. Шағир Рауил Бикбаев та шулар иҫәбендә.

А.Б. Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Буласаҡ шағирға тормоштоң әсеһен-сөсөһөн иртә татырға тура килә. Һәм уның аяныслы бала сағы *Балтырған* исемле әҫәрендә һүрәтләнә.

Ауылыма ҡайттым.

Һыу буйында балан сәскә атҡан күкрәп...
Нимә һиҙеп ярһый был йөрәгем,
Нимә күреп әрней был күкрәк.
Болон сәскәләрен һыйпап үтәм,
Ҡапыл күрәм алда балтырған.
Шул үләндең исемен әллә нәмә
Йөрәгемә уйып ҡалдырған.
Иҫкә төшә ҡустым менән бергә
Балтырғанды йыйған саҡтарым.
Шул үләндең һыуына йәшен тамыҙып,
Ҡуйған кеүек әсәй өҫтәлгә...
Балтырғанды күрһәм, тертләп китәм,
Балтырғанмы ашап үҫкәнгә.
Шуға микән ошо йомшаҡ үлән
Йөрәгемә кереп уйылған...
Балтырғандың һыуын беҙ татыныҡ,
Татытмайыҡ килер быуынға.
Икенсе өлөшө **Уға бағышлауҙар** тип атала.
Ҡәҙим Аралбай:
Диңгеҙ күрһәң,
Ярға килеп баҫһаң,
Әллә нишләйһең дә китәһең
Әллә ҡаның ҡайнай
Диңгеҙ кеүек-
Өтөләһең, ниҙер көтәһең.

Уйҙарыңда урғый аҫау диңгеҙ,
Тынғы тапмай башың каңғыра-
Әллә һине ата-бабаларҙың
Диңгеҙҙәге ҡаны саҡыра.
Мостай Кәрим:
Ил алдына сыҡһаң, мин тынысмын-
Һөйләмәҫһең ваҡты. Яманды.
Изгеләрҙе яуыз яһамаҫһың
Хатта сығармаҫһың ялғанды.
Тимер Йосопов:
Сама тигән аттар тыпырсынып,
Алмашынған саҡта дәүерҙәр,
Һин ҡалҡаһың алға.
Оло булып, кесерәйгән саҡта дәү ирҙәр.
Тере ҡуҙҙай күҙҙә осҡон янһа,
Өмөттәрҙең ҡалһа остоғо,
Һин бараһың алға,
Сая рухлы Рәмиҙең дуҫы, ҡустыһы.

Өсөнсө битебеҙ **һағыштарым тыуған яҡта**

А.Б. ...Тыуған яҡ. Уның шифалы һауаһын һулап, көмөш саф һыуҙарын эсеп, иркен болондарында аунап – тәгәрәп үҫкән кеше, минеңсә, тыуған ерен бер ҡасан да онота алмай. Һәм уның бөтә изге хистәре шиғыр юлдарына күсәлер.

А.Б. Шағирҙың тыуған яҡҡа, Башҡортостанға, Ағиҙел йылғаһына бағышлап яҙылған бик күп шиғырҙары бар. Рауил Бикбаев – замана ағышына, кешеләр яҙмышына һиҙгер шағир. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған мәсьәләләр, һорауҙар бик үткер итеп бирелгән. Бигерәк тә тәбиғәттең ярлыланыуы, экологик хәүефтәр ныҡ борсой.

А.Б. Ошо йәһәттән уның “Һыуһаным – һыуҙар биреген” тигән поэмаһынан өҙөк тыңлап үтеү дөрөҫ булыр.

А.Б. Ниндәй көнгә килеп тарыныҡ беҙ,
Яҙмышыбыҙ, килсе иҫеңә.
Ағиҙелдең тулҡынына ятып,
Сайҡаламын ҡарап Өфөгә.

А.Б . Һыуҙы сыҡҡан саҡта бер соҡорҙан
Ҡара мазут һигеҙаяҡ булып,
Мине ҡамап ҡалҡты болғанып.
Күпме бысраҡ, күпме ағыулы ләм
Төбөн ҡаплап ята йылғаның.

А.Б. Минең дә бит ал ҡаныма һеңде
Ағиҙелгә аҡҡан ағыуҙар.
Аҡ таштарға яғылып аҡҡан таптар
Йәбештеләр йәнгә һағыҙҙай.

А.Б. Йылға-күлгә аҡҡандары күпме,
Ә һуң күпме – ергә һеңгәне.
Ошо моңһоу кистә өс һыуһылыу
Бер – береһенә серен һөйләне.

Ҡариҙел:
-Һаумы, Ағиҙелкәй. Мин – Ҡариҙел.
Алыҫтарҙан һағыныуым һиңә әйҙәне.
Ҡуйыныма алдым шишмәләрҙе,
Йор Йүрүҙән, йәмле Әйҙәрҙе.
Ҡара тиһәләр ҙә күңелем саф,
Һыуым таҙа, йөҙөм аҡ ине.
Һыуҙарыма хәҙер ни аҡмай ҙа,
Килалманым һиңә аҡ көйө.

Дим:
Күпме бысраҡ төшә аҙбарҙарҙан,
Күпме ағыу аға баҫыуҙан.
Шишмәләрем күмелә,
Таңғы төштәремдә буҫығам.
Барыһынан ҡотолормон тинем,
Далаларға йәйрәп ташҡанда.
Бер буялғас бысраҡ еңел түгел
Өҫтәреңдән алып ташларға.

Икеһе бергә:
Һыйынырға һиңә үҙәнеңдән
Тиҙерәк урын бирсе, Ағиҙел.
Саф ҡуйыныңда таплы йөҙөбөҙҙө
Сайҡай ғына күрсе, Ағиҙел.

Ағиҙел:

Ҡариҙелем, Димем.
Тау-таш ярып,
Һеҙҙе күргә тип талпынам.
Тик бысранған тулҡындарым менән
Ҡағылырға һеҙгә тартынам.

А.Б. Бына ошондай һүҙҙәр менән шағир ер-һыуҙар ҡороуҙан, тәбиғәт ҡорғаҡһыуҙан ғүмерҙәребеҙкыҫкарыуы, тормош күрке китеүе хаҡында иҫкәртә. Матурлыҡты, тәбиғәт байлығын һаҡларға, яҡларға, ярҙам ҡулы һуҙырға саҡыра.

Дүртенсе битебеҙ ** Мөхәббәт донъяһында **

Мөхәббәтһеҙ.
Һөйөүем бөтһә, тормошомдоң йәме
Юйылып төшөр төҫлө хәтерҙән.
Кеше моңһоҙ күҙҙәремә ҡарап:
-Мөхәббәтһеҙ! – тиеп әйтерҙәй.
Нишләтһә лә, айырмаһын яҙмыш
Күңел ҡошом-сыуаҡ хисемдән.
Донъяла мин бер нәмәнән ҡурҡам:
Мөхәббәтһеҙ!- тигән исемдән.

Хистәремде быуҙым
Хистәремде быуҙым,
Ҡарашыңды һүндермәксе булдым хәтерҙә.
Хыялымды ҡыуҙым.
Үҙ-үҙемә исемеңде тыйҙым әйтергә.
...Айҙар үтте шулай.
Ойоған йылғам
Хәрәкәткә һыуһап тилмерҙе.
Һәм бер кисте бар кәртәләр ауҙы-
Был быуаны терегөмөш түгел,
Тамсы йәшең һинең емерҙе.
Бишенсе өлөш ** Шағир булаһың килһә, бул **

А.Б. Һәр кешелә шағирлыҡ тәбиғәте була тиҙәр. Тәбиғәттең йәме, тормоштоң күрке, ҡайғы-шатлыҡтары күңелдәрҙе йыш ҡына шиғри моңға көйләй. Матурлыҡты күрә, аңлай белеүселәр, тыуған яҡты ысын күңелдән һөйөүселәр араһында мәктәп уҡыусылары ла булыуы шатландыра. Улар тырышып уҡыу, төрлө кисәләрҙә, ярыштарҙа, эштәрҙә ҡатнашыуҙан тыш буш ваҡыттарында шиғыр яҙыу менән дә шөғөлләнергә ваҡыт табалар. Һәм уңышлы ғына сығыш яһайҙар. Ә хәҙер беҙгә уҡыусылар үҙҙәренең яҙған шиғырҙарын уҡып китәсәк.

Уҡыусылар сығышы

Уҡытыусы - Үҙ тыуған ауылын, уның тәбиғәтен һәм матурлыҡты күрә, ысын күңелдән, бөтә йөрәге менән яратыусылар кем тип атала? (патриот)

-Эйе. Бына мин дә үҙемде патриот тип әйтә алам, сөнки тыуған ауылда ҡалып, һеҙҙең - уҡыусыларҙың күңеленә яҡшы орлоҡтар сәсеп, һеҙҙең ҙур кешеләр булыуығыҙға йүнәлеш биреп, тыуған еребеҙҙең ысын хужалары итеп тәрбиәләүгә өлөш кертәм икән, бының менән мин бәхетле. Ә хәҙер мин дә үҙемдең бер нисә шиғырымды уҡып үтәһем килә.

Шиғырҙар уҡыу.

- Хөрмәтле дуҫтар! Бына шулай итеп Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил аға Бикбаевҡа бағышланған шиғри кисәбеҙҙе тамамларға ла ваҡыт етте.

-Тыуған еренән көс-дарман алып, халҡыбыҙҙың сикһеҙ бай күңел даръяһынан моң сумырып, әҙәпкә һәм хеҙмәткә бик йәшләй өйрәнеп үҫкән ир-егет ул Рауил ағай.

-Ағастарҙың ғына түгел, кешенең дә йөрәк тамырҙары үҙ тыуған тупрағына, тыуған еренә береккән. Рауил ағай Бикбаев та тыуған еренән көс-илһам алып йәшәй һәм йәшәйәсәк.

Ә хәҙер барығыҙҙы ла ҡотлап, йыр бүләк итәбеҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВ «ХАЛҠЫМА ХАТ» ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Дәүләтбаева Флорида Рафаэль ҡыҙы,
Октябрьский ҡалаһы «10-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе»

Маҡсат: 1. Рауил Бикбаевтың тормошо, «Халҡыма хат» поэмаһына ҡыҫҡаса байҡау яһау аша әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен уҡыусыларға еткереү;

2. Художестволы әҫәрҙәрҙе анализлау күнекмәләрен нығытыу;

3. Шағирҙың ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәре аша уҡыусыларҙа гражданлыҡ сифаттары тәрбиәләү.

Уҡыу-уҡытыу саралары: интернет селтәренә тоташтырылған компьютерҙар, мультимедиа проекторы, видеоролик, Р.Бикбаевтың портреты, китаптар күгәҙмәһе, магнитофон, матбуғат материалдары, электрон дәреслек.

Дәрес барышы:

I. Психологик инеш

Ҡурай моңо уйнай.Уҡытыусының шиғыр уҡыуы

- Туған тел дәресен башлайбыҙ. Кәтибә Кинйәбулатова туған телен бына ошолай тасуирлай.

Атай, тигәндә лә һин кәрәк,
Инәй, тигәндә лә һин кәрәк.
Күңелемдең һүнмәҫ нуры һин,
Мәңге йырланасаҡ йырым һин,
Моңло-йырлы туған телем һин.

- Эйе, ысынлап та, беҙҙең туған телебеҙ шундай наҙлы, яғымлы, моңло, йырлы. Бөгөнгө дәрестә тағы ла уның матурлығын иҫбат итәсәкбеҙ һәм һөйләшәсәк һүҙебеҙ телен, илен, халҡын һөйгән шағир, уның ижады тураһында барасаҡ. Портреты аша уның исемен билдәләгеҙ. Кем ул?
- Дөрөҫ, Рауил Бикбаев. Экранға иғтибар итәбеҙ.

Рауил Бикбаев - Башҡортостадың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге Республика дәүләт премияһы лауреаты, F. Сәләм исемендәге йәштәр, З. Биишева һәм Р. Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты, филология фәндәре докторы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған фән эшмәкәре, 1995—2011 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе, депутат, БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты рәйесе.

Рауил Бикбаев юғары граждандыҡ тойғоло шағир. Уның поэзияһына эҙләнеүсән тынғыһыҙ фекер, болоҡһоу хис, замандың ҙур социаль-фәлсәфәүи, әхлаҡ-әҙәп мәсьәләләрен күтәреү, шуларҙы үтемле алымдарҙа поэтиклаштырыу хас.

- Күренекле ғалим, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов Р.Бикбаев ижадын шулай юғары баһалай. Беҙ Рауил Бикбаев ижадын, уҡыусылар, ҡайһы кимәлдә беләбеҙ икән? Беҙҙең дәресебеҙ шағир ижады буйынса белемдәрҙе камиллаштырыуға, байытыуға йүнәлтелгән.

Тема: Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһы.

II. Дәрес маҡсатын билдәләү

- Тема буйынса дәрескә ниндәй маҡсат ҡуйыр инегеҙ?
- Рауил Бикбаевтың тормошона ҡыҫҡаса байҡау яһарбыҙ, «Халҡыма хат» поэмаһы өлгөһөндә ижадының үҙенсәлектәре тураһында һөйләшербеҙ.

III. Белемдәрҙе актуалләштереү

Үткән дәрестә ҡаралған һорауҙар буйынса тест эшләйҙәр.

1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхвәт улы Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
А. 1932 йылдың 12 февралендә Салауат районы Арҡауыл ауылында
Б. 1928 йылдың 10 апрелендә Ҡырмыҫҡалы районы Үтәгән ауылында
В. 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Үрге Ҡунаҡбай ауылында
2. Ул ниндәй уҡыу йорттарын тамамлаған?
А. Аҡ-Булаҡ педучилищеһы
Б. Башҡорт дәүләт университетының филология факультеты
В. Мәскәүҙә СССР Фәндәр академияһының Бөтә донъя әҙәбиәте институты
3. Яҙыусының беренсе китабы ҡасан һәм ниндәй исем аҫтында баҫылған?
А. 1964 йылда «Заман һәм поэзия»
Б. 1964 йылда «Дала офоҡтары»
В. 1967 йылда «Ҡош юлы»
4. Р. Бикбаевтың ниндәй поэмаһы монолог формаһында яҙылған?
А. «Һыуһаным, һыуҙар биреген!»
Б. «Ваҡыт менән һөйләшеү»
В. «Ностальгия»
5. Хәҙерге көндә шағир нимә менән шөғөлләнә?
А. Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе
Б. Ҡоролтай комитеты рәйесе
В. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр
6.*Мин бит башланамын һинән, унан,*
Кешеләрем, һеҙҙән башланам.
Был юлдар Р.Бикбаевтыңҡайһы шиғырынан алынған?
А. «Башҡортостан бында башлана».
Б. «Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда».
В. «Дауыл».
Г. «Барып етһен ине хаттарым».
Д.«Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта.
7. Ер-әсәбеҙ биргән икмәк менән
Аҡ һөттән дә изге нимә бар?
Был юлдар Р. Бикбаевтың ҡайһы әҫәренән алынған?
А. «Башҡортостан бында башлана»
Б. «Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда».
В. «Һыуһаным, һыуҙар биреген!».
Г. «Барып етһен ине хаттарым».
Д. «Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта.
8. Ҡайһы әҫәрендә экологик проблема күтәрелә?
А. «Һыуһаным – һыуҙар биреген».
Б.«Ҡурай».
В.«Уҡ».

Экранда күрһәтелгән дөрөҫ яуаптар һәм критерийҙар буйынса үҙҙәренең эштәрен баһалайҙар (ҡушымта 1).

IV. Яңы тема өҫтөндә ғәмәли эштәр:

1. Уҡыусыларҙың ижади төркөмдәрҙә эшләүе.

Бирелгән китап, мәҡәләләр, электрон дәреслек, интернет материалдарын өйрәнеп, проблемалы һорауҙарға яуап бирергә, терәк схема тултырырға.

1. Әҙиптең башҡорт шиғриәтенең үҫеш юлын билдәләүсе һүҙ оҫтаһы булып формалашыуына йоғонто яһаған тормош юлының этабын күрһәтергә.

2. Тәүге осор ижадының тематикаһын билдәләргә.

3. Рауил Бикбаев поэзияһының үҙенсәлектәрен билдәләргә.

4. Рауил Бикбаевтың ғалим булараҡ эшләгән проблемаһын асыҡларға.

Уҡыусылар сығыш яһай, төркөмдәр бер-береһенең яуабын баһалай.

2. Матбуғат материалдарына күҙәтеү

- Әле һеҙҙең Р.Бикбаев менән ғалим, шағир булараҡ танышырға мөмкинселегегеҙ булды. Ул Ҡоролтайҙың мәғариф, фән, мәҙәниәт, спорт һәм йәштәр эштәре буйынса комитет рәйесе булараҡ та йыш сығыш яһай.

Газета, журналдар күрһәтеү. Уҡыусылар терәк схемаларын эталон менән сағыштыра (ҡушымта 2).

3. «Халҡыма хат» поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү.

Алдан әҙерләнгән уҡыусы поэманың яҙылыу тарихын һөйләй.

Поэманы уҡыу.

Иғтибар менән тыңларға, аңлашылмаған һүҙҙәрҙе билдәләргә, һорауҙарға яуап бирергә әҙерләнергә эш бирелә.

Строфалап уҡыусылар уҡый.

Һүҙлек эше

Оран-яуға саҡырып өндәү

Маһир- оҫта

Кәр-сәм, ныҡышмалылыҡ

Сабый- йәш бала

Фәҙел- дөрөҫлөк яҡлы

Поэманы анализлау

- Ни өсөн Рауил Бикбаев поэмаһын “Халҡыма хат” тип атай?
- Ул халҡына мөрәжәғәт иткән.
- Ниңә ул был форманы һайлаған? Нимә ул хат?
- Хат рәүешендә яҙылған әҫәр. Был осраҡта поэма.

- Тағы ла халҡына шиғыр, хаттар аша мөрәжәғәт иткән ниндәй бөйөк шәхестәрҙе беләбеҙ?

-Башҡорт әҙәбиәтендә матур йола йәшәп килә. Халыҡ тормошоноң хәл иткес мәлдәрендә сәсәндәр, яҙыусылар халыҡҡа шиғри хат менән мөрәжәғәт итеп, уның яҙмышына хәл иткес йоғонто яһаған. Салауат Юлаевтың телмәре, Байыҡ сәсәндең ҡобайыры яуға әйҙәй. Мифтахетдин Аҡмулла халҡын белем алырға саҡыра, Шәйехзада Бабич халҡына хитап менән мөрәжәғәт итә. Мостай Кәрим шулай уҡ шиғри хат аша ил баҫҡынсыларына ҡаршы көрәшкә әйҙәй. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп яҙылған әҫәрҙәр бөгөн дә тыуа. Рауил Бикбаевтың халҡына яҙған хатын шулар индерергә мөмкин.

Әҫәргә мөрәжәғәт итәйек:

Туған телем минең! Күпме һүҙең

Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.

Тамырыңды уйлап ғорурланам,

Бөгөнгөңдә күреп хурланам.

- Уҡыусылар, шағир ниңә борсола?
- Тамырҙарын уйлап ғорурлана, шул тамырҙар мираҫы һаҡланмауға хурлана.
- Башҡорттарҙың тарихы һәм бөгөнгөһө нисек һүрәтләнә?
- Был юлдарҙа Р. Бикбаев туған телде нимә менән сағыштыра?
- Йым-йым нурланған йондоҙ менән.
- Был ниндәй һүрәтләү сараһы?
- Сағыштырыу.

Текстан метафораларҙы һәм эпитеттарҙы табырға эш бирелә.

- Ошо юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

Башҡорт балаһы мин,

Ер хәтерендә

Мең йыл уйылып барған эҙем бар.

Быуындарға ялғап быуындарҙы,

Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

- Башҡорт халҡының меңәр йыллыҡ тарихы бар. Шағир әйтеүенсә, быуындарҙы быуындарға, уҡыусылар, тел, һүҙ бәйләй, тағы нимә бәйләй ала икән быуындарҙы? Һуңғы юлды нисек дауам итерһегеҙ?

- Мин ғаиләм, шәжәрәм тип дауам итер инем. Ғаиләбеҙ, телебеҙ булмаһа, халҡыбыҙ ҙа булмаясаҡ.

- Телен белгән, илен һөйгән йәштәр, йәш ғаиләләр, һеҙ, уҡыусылар, киләсәгебеҙ. Быуындар араһындағы мөнәсәбәтте шәжәрәлә күрә алабыҙ. Шәжәрә – ул быуындар сылбыры. Үҙегеҙҙең шәжәрәгеҙҙе беләһегеҙме?

- Бына шул тарихыбыҙҙы һөйләр өсөн беҙ телебеҙҙе белергә тейешбеҙ. Туған тел – ул әсәң теле генә түгел, туған халҡыңдың теле. Уның меңәр йыллыҡ тарихы бар. Шул тарихты һөйләр, донъяларҙы матурлар туған тел бар.

Илдең иртәгәһе хәстәрҙәрен

Беҙ күрмәйсә тағы кем күрер?
Сабыйҙарҙың телен ҡайыртмаһаҡ,
Аҡһаҡалға булыр төкөрөү.

- Был юлдарҙы аңлатып китәйек.

- Ҡайһы бер ата-әсәләрҙең теленә ғәмһеҙ ҡарауы, шул арҡала туған телен белгән балалар кәмеүе шағирҙы хафаға һала. Һәр кем үҙ туған телен белергә, үҙ туған телендә аралашырға тейеш. Хөкүмәтебеҙ был йүнәлештә бик күп эштәр башҡара. 1999 йылда Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында Закон ҡабул ителде. Был Законға ярашлы һәр балаға үҙ туған телендә уҡырға, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнергә киң юлдар асылды. Телен белгән балалары булған ғына илдең киләсәге бар.

- Поэмала автор ниндәй проблема күтәрә?

- Телдең бөтөүе нимәгә килтереүе мөмкин?

- Шағир йәш быуынға ниндәй өмөт бағлай?

- Эйе, был поэмала Р. Бикбаев телдәрҙе һаҡлау проблемаһын күтәрә. Ошо проблема аша автор нимә әйтергә теләй? Әҫәрҙең идеяһын асыҡлайыҡ.

Идеяһы ниндәй юлдарҙа бирелгән тип уйлайһығыҙ?

Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

- Милләт яҙмышы тураһында уйланыу – Р.Бикбаев ижадында үҙәк йүнәлеш. Ул, китаптан китапҡа ялғанып үҫә, тулылана бара. Ул «Халҡыма хат» поэмаһында кешене вайымһыҙлыҡтан уяныр ға, тел яҙмышына битараф булмаҫҡа, уны ҡәҙерләргә, һаҡларға саҡыра. Телде һаҡлар халҡы бар милләттең генә оло хаҡы, киләсәге, бөйөклөгө барлығын зиһендәргә үтерлек итеп әйтә. Уҡыусылар, бына һеҙҙә тел хаҡында күп тапҡыр һүҙҙәр, мәҡәлдәр өйрәндегеҙ. Шуларҙы иҫкә төшөрөп алайыҡ әле.

Уҡыусылар яуабы:

1) Теле барҙың - иле бар.
2) Һөйҙөргән дә тел, көйҙөргән дә тел.
3) Тел балдан татлы.
4) Әсәм теле - сәсән теле.
5) Сәсән барҙа телең тый

V. Рефлексия

- Уҡыусылар, һеҙгә поэма оҡшанымы, ҡайһы строфалары?

- Һеҙ Рауил Бикбаевтың хатына нимә тип яуап бирер hегеҙ? Өс һөйләм менән яуап бирәбеҙ.

- Мин уҡытыусы булараҡ Ф.Туғыҙбаева һүҙҙәре менән яуап бирер инем.

Тәҡдирҙәре ҡайҙа йөрөтһә лә,
Һәр башҡорт ул минең туғаным.
Йәннәттә тим булһын киткәндәре,
Ҡуйыныма алам тыуғанын.

Видеоролик ҡарау (электрон дәреслектән), әңгәмә үткәреү

- Рауил Бикбаевтың был һүҙҙәре буйынса нимә әйтә алырhығыҙ? Һеҙ әҙиптең һүҙҙәре менән килешәhегеҙме?

Яҙыусының бәхетле китабы - халыҡтың ҡулынан төшмәгән, туҙып, таушалып бөткән китап.

- Рауил Бикбаевтың китаптарын ниндәй кәштәгә ҡуйыр инегеҙ?

- Бар булмышы менән иле, халҡы, заманы өсөн янып-көйгән шағир ғына ысын ижадсы дәрәжәһенә эйә. Был йәһәттән Рауил Бикбаев үҙен тулыһынса аҡлай һәм хуплауға лайыҡ.

VI. Йомғаҡлау.

- Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев бөгөн дә арымай-талмай ижад итеүен дауам итә. Дәүләт Гимнын Рауил Бикбаев менән Рәшит Шәкүр ижад итте.

Гимн ҡуйыла. Әҙерләнгән уҡыусылар уны йырлай.

Баһалар ҡуйыла.

Өйгә эш.1.Дәреслектең 158-се битендәге hорауҙарға яуап бирергә

2. Поэманан өҙөк ятларға.

3. Теләк буйынса: «Рауил Бикбаев» исеменәакростих (шиғыр юлдарындағы беренсе һүҙҙәрҙең тәүге хәрефтәрен өҫтән аҫҡа уҡығанда, кеше исеме йәки фамилияһы, йә айырым һүҙ, һөйләм килеп сығырлыҡ итеп яҙылған шиғыр) ижад итергә.

- Тиҙҙән Р.Бикбаев үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләйәсәк. Уҡытыусы булараҡ, мин уға бағышлап шиғыр ижад иттем.

Башҡортостан-илгенәмде
Рауил ағай данға күмде.
Яҙған әҫәр, шиғырҙары
Бик күп телдә донъя күрҙе.
Бөгөн үҙе данға лайыҡ
Башҡортостан ғорурлығы.
Беҙгә өлгө булып тора
Үҙ халҡына тоғролоғо.
Шиғырҙары, йырҙарында
Ынйы-мәрйен сыңлауҙары.
Ниндәй бәхет үҙ телендә
Үҙ иленде данлауҙары!

Башҡортостаным түрендә
Урын алдың, аҡһаҡалым.
Әйҙә, йондоҙҙар көнләшһен,
Яҙмышыңа хайран ҡалып!

– Ошо изге теләктәр менән дәресебеҙҙе тамамлайбыҙ, уңыштар һеҙгә!

РЕСПУБЛИКАМ, ЙОНДОҘ БУЛЫП БАЛҠЫ ӇИН, КҮҠРӘП ЙӘШӘ, ГҮЗӘЛ ИЛЕБЕҘ!

(Р. Бикбаевтың ижадына арналған кластан тыш сара)

Мөхәрәмов Мөхәмәт Әнүәр улы,
Әлшәй районы Воздвиженка урта мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың тормош юлы менән таныштырыу, уҡыусыларҙың ижади һәләтен асыу; шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, уның тормош юлын сағылдырған стенд, китаптары күргәҙмәһе, гәзит-журнал материалдары, фотографиялар, презентация, шифыр юлдары яҙылған плакаттар.

1-се алып барыусы

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.
Ҡушымта:
Дан һиңә, Башҡортостан
Илен һөйгән азат халҡына дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!
Башҡортостан, һин хөрмәтле данлы ил,
Еңеү яулап алға бараһың.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.
Ҡушымта.
Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.

Был һүҙҙәр беҙҙең Башҡортостаныбыҙҙың гимны. Уның һүҙҙәрен райондашыбыҙ Рәшит Шәкүр менән Рауил Бикбаев яҙған. Был бик яуаплы эш һәм үҙенең Тыуған ерен өҙөлөп яратҡан кешегә генә йөкмәтелә. Рауил Бикбаев шундай кешеләрҙең береһе.

Ҡушымта.

2-се алып барыусы :

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Бала саҡтарын, ялан-дала тәбиғәтен хәтерләп, Рауил Бикбаев шуларҙы әйтә: «Ауылдағы бала саҡһәм үҫмер йылдарым күберәк тәбиғәт менән, бигерәк тә һыу буйы, Соран йылғаһы менән бәйләнгән.

Соран ярындағы сер-усаҡтар,
Туғайҙарға һыймай сапҡан саптар
Ялҡынығыҙһаман битемә бәрелә
Бала саҡтан сығып барған саҡтар

1-се алып барыусы:1945 йылдың майында уның атаһы үлеп ҡала. Биш бала менән утыҙ өс йәшлек Рәкиә Бикбаева атаһы Латип Вахитовтың кәңәше һәм ярҙамы буйынса Ҡунаҡбай ауылындағы ҡуш өйҙөң яртыһын һүтеп алып, үҙенең тыуған ауылы күрше Фәбдрафиҡҡа күсереп һалдыртырға мәжбүр була.

2-се алып барыусы :

Әсәһе ауылында, Рауил яңы мәктәптә тырышып уҡый. Туған әҙәбиәт дәрестәренең тәьҫире микән, әллә үҙ күңел талабымы – алтынсы-етенсе синыфтарҙа бүтәндәрҙән йәшереберәк шифырҙар ҙа яҙа башлай.Мәктәпте тамамлағас, үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрымдар ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилищеһына уҡырға бара. Педучилищеның һуңғы курстарында уҡығанда Рауилдың күңелендә яңынан шифри тойғолар йышыраҡ уяна башлай. Ҡайһы саҡтарҙа, хәҙер үҙе хәтерләүенсә, көнөнә бер нисә шифыр яҙғылағаны була.

Уҡыусы:
Аҡ-Булағым минең, эй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.

1-се алып барыусы.

Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филология факультетында уҡый. «Университетта уҡыу миңә еңел бирелде, – ти ул. – Педучилищелағы әҙерлектең дә файҙаһы ҙур булғандыр. Һуңғы йылдарҙа

лекцияларға йүнләп йөрөмәнем, төндәрен шиғыр яҙып үткәрҙем. Гәзиттәрҙә исемем күренә башланы». Артабан Өфө Фәндәр академияһында аспирантура үтеп, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә.

2-се алып барыусы.

Шағирҙың ижади емеше бик күп. Бына улар: шиғырҙар һәм поэмалары ингән йыйынтыҡтары: «Дала офоҡтары», «Ҡош юлы», «Бураҙналар», «Звездный дом», «Поющие скалы», «Время. Поэт. Народ.», «Эволюция современной башкирской поэзии», «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!», “Шайехзада Бабич. Жизнь и творчество”, «Шағир һүҙе - шағир намыҫы», «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай».

Уҡыусы:

Миңә уның «Ғүмер уртаһы» шиғыры оҡшай:
Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
Һөҙөп ташлап шау-шыу туртаһын,
Юлдарыма хафа менән бағам ,
Еткән саҡта ғүмерем уртаһы...
Ғүмеремдең аҫыл уртаһында
Был тормоштоң серле асылын
Һиҙгән һымаҡ йөрәк
Түҙемлерәк,
Һәр тарафтан иҫкән елгә боролоп,
Һәр тауышҡа бармай асылып.
Килмәй хәҙер көтөп әҙер ҡәҙер,
Еңел-елпе тейәп юртаһым.
Бәйгеләрҙе ташлап, йөккә егел,
Еткән саҡта ғүмер уртаһы

Бында шағирҙың ир уртаһы йәшенә етеүен белдереүҙән бигерәк, уның билдәле бер ижад ғүмере миҙгелен аңлата.

Уҡыусы:

«Ерем балҡышы» — был минең унынсы китабым, — ти Рауил Бикбаев, ул шиғырҙарҙан ғына төҙөлдө, уға бер поэма ла инмәне. Был — лирика китабы

Хыялдарҙа эҙләп күк диңгеҙҙең
Аҡ карабын, алһыу елкәнен,
Онотабыҙ ерҙә кешеләрҙең:
Мал көткәнен, иген иккәнен —
Ошо үҙе тормош икәнен.
Уратҡанда ҡайсаҡ ығы-зығы,
Ауырлыҡтар баҫып киткәндә,
Әйткеләнем:
Шул да булған тормош!
Башҡасараҡ беҙҙең көткәндәр.
Уйламайса ысҡындырған һүҙҙән
Кешеләрҙең күңеле кителде.
Әллә ниндәй тормош эҙләнем мин —
Ошо үҙе тормош бит инде.

1-се алып барыусы

«Здравствуйте, Равиль Тухватович!

Боюсь показаться вам навязчивой и неинтересной, но мне надо исповедоваться перед Вами. Я уверена, что Вы должны меня понять. Возможно, все то, о чем я хочу писать, покажется Вам несущественным, но это моя беда и беда очень многих людей нашей республики. Вот я — башкирка, и не могу написать письмо по-башкирски. Родным считать башкирский я не перестаю, хотя уже много лет говорю, думаю на русском(үҙ хатында был башҡорт ҡыҙы ата-әсәһе рус мәктәбенә уҡырға биреп, теле башҡортса асылһа ла уны рус мәктәбендә, рус мөхитендә туған телен онотоп, рус телле кеше булып үҫеүен һөйләп китә, хәҙер туған телен онотоуына, белмәүенә үкенестәрен һөйләй)...В молодости считала, что башкирский язык не пригодится в жизни. Это было признаком отсталости, бескультурья. Я до сих пор в недоумении: почему так могло быть? Это какую же политику надо было проводить, чтобы весь народ отчуждать от родного языка... Я не знаю ныне ни языка, ни истории родного народа, ни литературы, ни религии, я не знаю культуру своего народа... Я рассказала Вам о трагедии моей жизни, немного стало легче. Помогите мне советом».

Уҡыусы.

Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарҙа яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.
Сабыйҙарҙың күҙенә ғәмһеҙ ҡарап,
Упҡын ситтәренә еткәнбеҙ.
Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең, —
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.

Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә...
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

2-се алып барыусы.

Беҙ мәктәптә өйрәнгән әҫәрҙәрҙең береһе- «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы. Был поэма хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль, иҡтисади, экологик һәм әхлаҡи-әҙәп мәсьәләләрен тура һәм ҙткер ҡуйыуы, публицистик пафос менән еткерә белеүе, заманса яңғырашы менән әһәмиәтле. Ул шағир ижадының поэма жанры өлкәһендәге ҙур уңышы булып тора.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаев ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһыныңүҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә.

Уҡыусы.
Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:
Башҡортостан бында башлана!
Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайылай:
Башҡортостан бында башлана!
Башҡортостан мине ҡаршы ала,
Ҡайтһам һыуҙар кисеп, ил урап,
Ҡабырғаһын, һыртын бора белмәй,
Ҡояш кеүек ҡарай туп-тура.
Республикам, бына башланды! – тип
Әйткәнемдә ергә ҡапланып,
Ишетәмен ерем ҡуйынынан
Сабыр ғына тауыш аҡҡанын:
Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,
Юшатырҙан Әйгә ҡаҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңелеңә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарашы, беләм, ҡаҙерле.
Ҡайтҡан һайын һыйынырһың миңә,
Берсә көлөп, берсә уйланып.
Тик мин һуҡмаҡтарҙан ғына түгел,
Башланам бит һинән, уланым.
Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!
Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,
Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай…
Ә мин мәңге бында – Уралымда,
Тик булмышым инде өр-яңы:
Минең янға донъя килмәһә лә,
Үтеп сыҡтым бөтә донъяны.
Моң-шатлығын илдең тигеҙ күреп,
Ил алдында һүҙен тиңәйтеп,
Уландарым ҡайҙа ғына йөрөмәй,
Ҡоласымды минең киңәйтеп.
«Башҡортостан!» – тиеп,
Улдарыма
Алыҫ ҡитғаларҙа ҡарай ер
Кешем намыҫында кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр.

Мин башланам һеҙҙән,
кешеләрем!
Ҡүңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек, Башҡортостан
кеүек,
Был донъяға тура ҡараргыҡ.

РАУИЛ БИКБАЕВ «ТУҒАН ТЕЛ»

Фәхретдинова Ләйсән Хәсән ҡыҙы,
Миәкә районы Ҡырғыҙ-Миәкә ауылы
Советтар Союзы Геройы М. Абдуллин исемендәге
1-се дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1. Уҡыусыларҙы Рауил Бикбаевтың «Туған тел» шиғыры менән таныштырыу, “Стәрлетамаҡ ҡалаһы ” темаһы буйынса белемдәрен тикшереү, республикабыҙ тураһында мәғлүмәттәр биреү. 2. Һөйләү телмәрен, фекерләрҙе, иғтибарлыҡты үҫтереү. 3.Тыуған илебеҙгә, туған телебеҙгә ҡарата һөйөү, ихтирамлыҡ тәрбиәләү.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу мәле.

Ҡыңғырау шылытраны,
Беҙ йыйылдыҡ дәрескә,
Китап, дәфтәрҙәр алып,
Тотонайыҡ беҙ эшкә.

II. Дәрескә маҡсат ҡуйыу.

-Уҡыусылар, бөгөн беҙ һеҙҙең менән ябай түгел, ә дәрес-сәйәхәт үткәрәсәкбеҙ. Сәйәхәт һүҙен нисек аңлайһығыҙ?

- Дәрестә матур, тәртипле итеп ултырһағыҙ, минең һорауҙарыма тулы яуаптар биреп, яҡшы итеп эшләһәгеҙ, дәрес аҙағында һеҙҙе бүләктәр көтәсәк.

III. «Стәрлетамаҡ ҡалаһы» тыҡталышы. Үтелгәнде ҡабатлау.

-Сәйәхәтте башлайбыҙ. Беренсе станцияға барып етер өсөн, үткән дәрестең темаһын иҫкә төшөрөп алайыҡ. Шуның аша станция исемен белерһегеҙ.

-Ниндәй ҡала тураһында һөйләштек?
-Стәрлетамаҡ ҡалаһы ҡасан барлыҡҡа килгән?
-Ҡала ниндәй урында һалынған?
-Ҡалала ниндәй уҡыу йорттары, мәҙәниәт усаҡтары бар?
- Тимәк, беренсе станция - Стәрлетамаҡ ҡалаһы.

IV. Артикуляцион күнегеү.

-Телдәребеҙҙе шымартып алайыҡ.

Туған телем

Туған телем минең-башҡорт теле,
Бүтән түгел, миңә һин кәрәк,
Сөнки халҡым әйткән тапҡыр итеп:
Иләк һорарға ла тел кәрәк!

Гөлнара Насипова

Шиғырҙы уҡытыусы уҡый. Уҡыусылар үҙ аллы уҡыйҙар. Һәр уҡыусы уҡый.

-Был шиғырҙа нимә тураһында әйтелә?

- «Туған тел» һүҙбәйләнешен һеҙ нисек аңлайһығыҙ? Нимә ул - тел? Аңлатып биреегеҙ әле.
- Әйҙәгеҙ әле ошо һүҙгә омонидар табып ҡарайыҡ. Омоним нимә икәнен беләһегеҙме? Бер үк яҙыла, әммә төрлө мәғәнәне аңлата торған һүҙҙәр.
- Ә ниндәй һуң ул һеҙҙең туған телегеҙ? Нимәләр матурлата һәм байыта һеҙҙең телегеҙҙе?
- Туған телде һаҡлар өсөн нимәләр эшләргә кәрәк?
- Һеҙ туған телегеҙҙә кемдәр менән аралашаһығыҙ?
- Беҙҙең республикала дәүләт теле тип ниндәй телдәр йөрөтөлә?
- Ни өсөн урыҫ теле менән йәнәшә башҡорт теле лә дәүләт теле тип йөрөтөлә?
- Тел тураһында ниндәй мәҡәлдәр беләһегеҙ?

V. Мәҡәлдәр өҫтөндә эш. «Кем күберәк» уйыны.

Уҡыусылар ике төркөмгә бүлешеп тел тураһында мәҡәлдәр әйтешәләр һәм мәғәнәләрен аңлаталар. Кем күберәк?

VI. «Шифриәт минуттары» тыҡталышы.

- Киләһе тыҡталышта беҙ туған телгә арналған шиғыр юлдарын тасуири итеп уҡыясаҡбыҙ.

Мин халҡымдың сәскә күңеленән
Бал ҡортондай ынйы йыямын,

Йыямын да - йәнле ынйыларҙан
Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.

Шуға ла мин беләм тел ҡәҙерен:
Бер телдән дә телем кәм түгел-
Көслө лә ул, бай ҙа, яғымлы ла,
Кәм күрер уны тик кәм күңел.

Халҡым теле миңә-хаҡлыҡ теле,
Унан башҡа минең илем юҡ;
Илен һөймәҫ кенә телен һөймәҫ,
Иле юҡтың ғына теле юҡ!

Әсәм теле миңә - сәсән теле,
Унан башҡа минең халҡым юҡ,
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ!

Р.Ғарипов

- Бер нисә минут әҙерләнегеҙ һәм һәр берегеҙ һигеҙешәр юл тасуири, дөрөҫ итеп уҡырһығыҙ.
- Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?
- Тел тураһында автор нимәләр яҙа?
- Шулай итеп, туған тел беҙгә иң яҡын, иң ғәзиз тел. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, ниндәй телдәрҙе өйрәнһәк һәм ниндәй телдәрҙә һөйләшһәк тә, иң яғымлы булып ҡолаҡҡа зыңлап тора ул - беҙҙең туған башҡорт телебеҙ.

VII. Дәреслек менән эш.

-Бөгөнгө дәрестең темаһы нимәгә арналған икән?

-Беҙ һеҙҙең менән бөгөн Рауил Бикбаевтың «Туған тел» тигән шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

Автор тураһында белешмә.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафиҡ ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. Быйыл уның юбилейы. Рауил Бикбаевҡа 75 йәш тула.

2) Һүҙлек эше.

Был шиғырҙы уҡығанда һеҙгә таныш булмаған һүҙҙә осрар:

аҫыл-матур, дан-слава.

3) Шиғырҙы уҡытыусы уҡый.

-Хәҙер мин шиғырҙы уҡыйым, ә һеҙ иғтибар менән тыңлағыҙ.

4) Уҡыусыларҙың шиғырҙы нисек аңлауын тикшереү.

- Автор шиғырҙа нимә тураһында яҙа?

5) Шиғырҙы уҡыусылар үҙ аллы уҡыйҙар.

6) Сылбырлап уҡыу.

7) Шиғырға анализ яһау.

-Шағир туған телгә һөйөүен ниндәй һүҙҙәр менән белдерә?

-Был шиғыр һеҙҙә ниндәй тойғолар уята?

-Шул тойғоларҙы ниндәй һөйләмдәр менән әйтеп булла?

-Тыуған ил, туған тел, әсәй һүҙҙәрен автор ни өсөн аҫыл һүҙҙәр тип атай?

-Ошо аҫыл һүҙҙәрҙе ишетеп, әйтеп, изгелеккә өйрәткән һүҙҙәрҙе тыңлап тыуған илде, телде ҡәҙерләргә, яратырға, һаҡларға, еребеҙҙең ысын хужалары булып үҫергә- беҙҙең иң зур бурысыбыҙ.

VIII. Ял итеү минуты.

-Әйҙәгеҙ әле туҡталып ял итеп алайыҡ.

Беҙҙең Башҡортостанда
Шулай бөгөлә талдар,
Ошондай бейек тауҙар
Шулай ҡағына ҡаҙҙар,
Шулай бейек балалар,
Шулай ырғып алалар,
Шунан шым ғына ултырып
Тағы белем алалар.

IX. «Өфө ҡалаһы» туҡталышы.

-Беҙ Республикабыҙҙың баш ҡалаһына ла барып еттек. Уның исемен кем әйтә?

-Элек Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡалаһы ниндәй ҡала булған?

-2013 йылды беҙҙең президент нимә йылы тип иғлан иткән? (Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы).

- Һеҙ тыуған яҡты һаҡлар өсөн нимәләр эшләйһегеҙ?

-Һеҙ Өфөлә булғанығыҙ барҙыр инде. Унда ниндәй һәйкәлдәр, парктар, театрҙар күргәнегеҙ бар?

-“Өфө беҙҙең ҡала" тексы өҫтөндә эш:

Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө. Өфө ҡалаһы Ағиҙел буйында, бейек тауҙа урынлашҡан. Тимер күперҙән сыҡҡан саҡта йылғала аҡ параходтар тирбәлә. Яр башында ике мөһабәт һәйкәл. Береһе башҡорт халҡы менән урыҫ халҡының мәңгелек дуҫлығын данлай. Икенсеһе Салауат Юлаевҡа арналған. Салауат батыр текә сағылда ат өҫтөндә илен һаҡлап тора.

Өфө бигерәк матур ҡала. Йорттары ифрат бейек, күп ҡатлы. Урамдарҙа автобустар, троллейбустар, трамвайҙар йөрөй. (Й. Солтанов.)

-Һәр берегеҙҙең алдында текст ята. Иғтибар менән тыңлап ҡарап барығыҙ. Был текста нимә тураһында һүҙ бара икән?

1) Тексты уҡытыусы уҡый. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе шунда уҡ аңлатып бара: тирбәлә, мөһабәт, сағылда, ифрат.

2) -Был текста нимә тураһында һүҙ бара?

3) Тексты уҡыусылар үҙ аллы уҡып сығалар.

4) Һорауҙарға яуаптар бирәләр:

-Өфө ҡалаһы ҡайҙа урынлашҡан?

-Тимер күпер аша сыҡҡанда нимәләр күреп була?

-Яр башында нимәләр бар?

-Беренсе һәйкәл нимәгә арналған?

-Уның исемен кем әйтә ала?

-Дөрөҫ. Дуҫлыҡ монументы Башҡортостандың Рәсәй менән бергә йәшәүенә 400 йыл тулыуына төҙөлгән. Унда башҡорт һәм урыҫ ҡатын-ҡыҙҙары төшөрөлгән. Улар рус һәм башҡорт халҡының дуҫлығын һүрәтләй. Ошо монумент эргәһендә ҙур байрамдар һәм тантаналы саралар үтә. Республика көнө, ҡала көнө, ҡунаҡтарҙы ҡаршылау.

-Дуҫлыҡ тураһында һеҙ нимәләр әйтә алаһығыҙ? Дуҫ булып йәшәүе кәрәкме? Ни өсөн?

-Ә икенсеһе кемгә арналған?

-Салауат Юлаев тураһында һеҙ нимәләр әйтә алаһығыҙ?

х. «Музыкаль» туҡталыш.

-Туған тел тураһында йыр йырлап, ял итеп алайыҡ.

Эй туған тел, эй матур тел, атам-әсәмдең теле.
Донъяла күп нәмә белдем һин туған тел арҡылы…

XI. Дәрестe йомғаҡлау. «Әҙәбиәттә ҡунаҡта» уйыны.

-Шулай итеп бөгөнгө дәрестә беҙ нимәләр өйрәнгәндәрҙе слайд аша ҡарап нығытасаҡбыҙ.

XII. Өй эшен биреү.

-Өйҙә «Туған тел» шиғырын тасуири уҡырға һәм ятлап килергә әҙерләнәһегеҙ.

XIII. Баһалау. Бүләктәр өләшеү.

“УРАЛЫМА” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ибраһимова Рида Риф ҡыҙы,
Балаҡатай районы
Әшәй тәп дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1.Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады һәм тормош юлы менән таныштырыу;

2.Уҡыусыларҙың художестволы фекерләү һәләтен үҫтереү;

3.Уҡыусыларҙа илһөйәрлек тойғоһон тәрбиәләү, тыуған илдең үткәнен белеү, уны һаҡлау кәрәклеген аңлатыу.

Йыһазландырыу: дәреслек, компьютер, проектор, экран, ҡурай моңо яҙылған аудиотаҫма, Урал тауҙарын һынландырған һүрәттәр.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек.

II. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

Бөгөнгө дәрестең темаһын асыҡлар өсөн беҙ һеҙҙең менән кроссворд сисәбеҙ.

Слайд 1.

Кроссворд һорауҙары.

1. “Башҡортостан” телевидениеһының балалар студияһы.
2. Башҡорт халҡының милли геройы.
3. Башҡорт халҡының милли музыка ҡоралы.
4. Башҡортостандағы тау.
5. Башҡорт халҡының милли гимны.
6. Башҡортостандағы иң ҙур район
7. Башҡортостандағы иң оҙон йылға.
8. Белем шишмәһе.
9. Татлы ризыҡ.
10. Башҡоростандағы шифахана.
11. Республикалағы йәштәр гәзите.
12. Тыуған ил.



Тимәк, бөгөн дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, тормош юлы һәм «Уралыма” тигән шиғыры менән танышырбыҙ.

III.Уҡытыусы Рауил Бикбаевтың биографияһы менән таныштыра.

Слайд2. (Рауил Бикбаевтың портреты)

Ай Уралым, Уралым,
Күгәреп ятҡан Уралым.
Нурға сумған түбәһе
Күккә ашҡан Уралым!

- Эйе, тыуған еребеҙ - изге Урал. Беҙҙең һәр көнөбөҙ уны уйлап башлана.Тыуған-үҫкән ереңде күберәк белеү, уның тарихи үткәне менән танышыу, бөгөнгөһөн уйлау, киләсәген ҡайғыртыу һәр кешенең изге бурысы. Нисә быуат йырау һәм сәсәндәр, яҙыусы, шағир һәм рәссамдар йәнтәйәгебеҙгә һоҡланып, уны данлап туймай.

Ә хәҙер, ихлас шиғриәте менән беҙҙең йөрәктәрҙе яулап, яратҡан шағирыбыҙға әйләнгән, заман пульсын тоя белеүсе, халыҡты борсоған социаль, мораль-этик мәсьәләләрҙе ваҡытында күтәрә белеүсе олпат шағирыбыҙҙың «Уралыма” тигән шиғыры менән танышып китәйек.

IV.Ҡурай моңо аҫтында шиғырҙы уҡытыусы уҡый.

Шағир был шиғыры менән нимә әйтергә теләй?- тигән һорау ҡуйыла.

Слайд 3.

Һүҙлек эше.

Һын- кәүҙә, буй;
Ҡын-ҡорал һалыр өсөн һауыт;
Килмешәк-ситтән килгән кеше, сит яҡ кешеһе;
Баҡһам-ҡараһам;
Иңдәремә-яурын;

(Һүҙҙәр менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөү)

Уҡыусылар тағы бер тапҡыр үҙаллы уҡыйҙар.

-Был шиғыр шиғри әҫәрҙең ниндәй төрөнә ҡарай?

(Тыуған ил тураһында лирик шиғыр.)

-Шиғырҙы мәғәнәһе буйынса ниндәй образдарға бүлергә була?

(Ике:лирик герой һәм Урал)

Дәфтәр бите ике өлөшкә бүлеп, һәр образға хас ҡылыҡтарҙы яҙып барабыҙ.

Лирик герой ниндәй кәйефтә?

(Ғорурлана, быны «Ҡулдарына һине алмаҡ булып
Күпме дошман ерҙә тырышҡан.»- юлдарында күрергә була.)
(Һоҡлана- “Күпме генә һиңә ҡараһам да ,
Күҙем тала белмәй, Уралым.»)
(Ышана- «Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
киләсәгем шат та, тыныс та...)

Уралдың үткәне нисек һүрәтләнгән?

(Әллә күпме дошман Уралды ҡулына төшөрөргә теләһә лә, булдыра алмаған-Урал баш бирмәй, мәғрур.)

Урал нимәгә оҡшаған?

(Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа-дуҫлыҡ һәм татыулыҡ иле.)

Авторға нимә йәшәү көсө бирә?

(Тыуған илдең шишмәләре.)

Ниндәй мәҡәлдәр менән алмаштырып булыр ине?

Слайд 4.

Тыуған илем- алтын бишек.
Алтын –көмөш яуған ерҙән тыуып-үҫкән ил яҡшы.
Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илендә олтан бул.

Уның күңеле ни өсөн тыныс?

(Сөнки Уралдың киләсәге шат һәм тыныс, ул бирешмәҫ, уның иңдәрендә илдең һынмаҫ ҡылысы бар.)

Шиғырҙы йомғаҡлау.

Тимәк, шағир был шиғыры менән нимә әйтергә теләй?

-Беҙ тыуған еребеҙҙең үткәне менән ғорурланырға, бөгөнгөһөн яратырға, уның менән һоҡланырға һәм матур, бәхетле киләсәгенә ышанырға, намыҫлы кеше булып йәшәргә тейешбеҙ.

VI.Тәрбиәүи әңгәмә.

-Эйе, дөп-дөрөҫ һүҙҙәр. Мин һеҙҙең шундай кешеләр булып үҫеүегеҙгә ышанам, сөнки һеҙ тырышып уҡыйһығыҙ, тыуған ерегеҙҙе яратаһығыҙ.Һеҙҙең кеүек тырыш, уңған балалар булғанда беҙҙең тыуған илебеҙҙең киләсәге яҡты, шат, тыныс буласаҡ.

Слайд 5.

VII.Ял итеү минуты.

Ҡояш, ҡояш күтәрел,
Ҡояш, ҡояш яҡтыраҡ бул.
Яҡты нурҙарың йәлләмәй,
Тыуған илемә, халҡыма
Көлтәләп яҡтылыҡ бүл!

VIII.Ижади эш.

(шиғыр ижад итеү)

Слайд 6.

_____
_____төйәгем,
_____
_____йөрәгем.

Эштәрҙе тикшереү.

IX.Дәресте йомғаҡлау.

-Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?

-Кем ул Рауил Бикбаев?

-Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла. 2013 йылдың 12 декабрендә Рауил Бикбаевҡа 75 йәш тула.

X. Баһалау.Өйгә эш.

1.Шиғырҙы тасуири уҡырға;

2.Урал тәбиғәте тураһында бәләкәй генә инша яҙырға.

«РАУИЛ БИКБАЕВ – ҘУР ШӘХЕС, АТАҠЛЫ КЕШЕ»

Нурисламова Сәкинә Зайнислам ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 14-се
урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән танышыу; тыуған еребеҙ, арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурланыу, башҡорт теленә һөйөү, хөрмәт тәрбиәләү, телде нығыраҡ өйрәнеүгә ынтылыш уятыу; телмәр үҫтереү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, фотостенд, сәйләп төҫлө теҙелгән шиғри китаптар шәлкеме: «Дала офоҡтары» (1964), Ҡош юлы»(1967), «Автобиография» (1969), «Лирика» (1971), «Ғүмер уртаһы» (1976), «Һөйөнсө» (1979), «Яҙмышым (1988), …, «Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны» (2003).

Плакаттар: «…Сыҙамлығыңа ышыҡланаһың, сабырлығынды күләгә итәһең…»

« Һәр милләт шәхестән башлана
Шиғриәттә лә иң мөһиме- шәхес».

(Рауил Бикбаев)

Эпиграф: «Ғүмерем буйы ошо һүҙҙәргә хеҙмәт иттем, шул шағир һүҙенә, намыҫҡа тоғро булырға тырышып йәшәнем. Киләсәктә яҙмыш ошо изге таяныстарымдан - шағирһүҙенән, шағир намыҫынан айырмаһын». / Рауил Бикбаевтың ижад девизы/.

Дәрескә әҙерлек:

Уҡыусыларға Рауил Бикбаевтың төрлө йылдарҙа яҙылған шиғырҙарын уҡып, танышып килергә, ҡайһы берҙәрен ятларға, уның тураһында ваҡытлы матбуғат биттәрендә баҫылған һүрәттәр, мәҡәләләр йыйып алып килергә.

Дәрес барышы: (слайд 4)

Ойоштороу мәле. Тема, маҡсат.

Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге, Зәйнәб Биишева исемендәге премиялар лауреаты, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Республикаһы гимнының авторының береһе, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев данлыҡлы замандашыбыҙ ул.

1-се уҡыусы: «Ете быуыным»

(слайд 5)

Был тормоштоң ҡапыл йәме бөтһә,
Күңелдәрем китһә һыуынып,

Янып торған ете егет булып,
Алға баҫа ете быуыным.
Йөҙҙәренә әле ҡояш ҡарай,
Әле ҡарлы әсе ел бәрә.
Төхфәт- Шәрәфи- Мөхәмәтша- Хәсән- Ҡотлоәхмәт- Бикбай- Аҫылгәрәй.
Батшаларҙың нәҫеле киҫелгәндә
Тармаҡланған һаман шәжәрәм.
Мин- тамырлы, тамырҙарым- нурлы,
Олондарым йырлап йәшәрә.

Уҡытыусы: Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Урге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Рауил Бикбаев матур ғаиләлә, етеш тормош шарттарында иркен үҫкән. Шағир үҙе һөйләүенсә, ул ижади мөхит эсендә, телгә оҫта, әкиәткә, йырға, таҡмаҡҡа мәйел ололар араһында үҫә, уларҙың һөйләгәндәрен, көйләгәндәрен йотлоғоп тыңлай, рухын байыта. Әлбиттә, бының тәү орлоҡтары ғаиләлә үк һалынған. «Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зиһенемә һеңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне- әсәйем» ти ул үҙе лә. (слайд 6) Ләкин донъяла бер көйгә генә аҡмай шул. Бөйөк Ватан һуғышы. Оло һуғыш касафаты һәр ауылға, һәр өйгә тиерлек ҡара ҡағыҙ алып килә, йәтимдәр арта. Ҡунаҡбай ауылы ла ситтә тороп ҡалмай, ҡара ҡағыҙҙар алып бик миктәп, етемһерәп ҡала. Рауил Бикбаевтарҙың өйөнә лә әжәл керә, 1945 йылдың майында атаһы үлеп ҡала. Биш бала менән 33 йәшлек Рәҡиә Бикбаева үҙенең тыуған ауылына күсенергә мәжбүр була. Әсәһе ауылында Рауил тырышып уҡый - алтынсы-етенсе синыфтарҙа бүтәндәрҙән йәшереберәк шиғырҙар ҙа яҙа башлай. (слайд 7)

2- се уҡыусы: «Аҡ- Булағым минең». (слайд 8)

Аҡ- Булағым минең, әй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.
Һин өйрәттең һис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт- тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ. (слайд 9)

Уҡытыусы: Әммә ләкин Рауил Бикбаев 1953 йылда етенсе синыфты уҡып бөткәндә, Ырымбур өлкәһе тарафтарында ҡайҙа урта белем алырға тигән юлдар бик сикле булған. Ырымбур ҡалаһының үҙендә Башҡортостан пединституты, педтехникум, милли урта мәктәптәр булмаған. Башҡортостанға барып, башҡортса уҡырға юлдар алыҫ, ғаиләлә лә мохтажлыҡ ҙур. Уҡырға тырыш, зиһенле улын әсәһе нисек тә артабан уҡытырға теләгәндер, бала күңелен тойғандыр, уйлап-уйлап улар үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрымдар ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилищеһын һайлайҙар. Рауил Бикбаев унда дүрт йыл уҡып «Дүрт йылым китап уҡып үтте. Аҡбулаҡта күп ваҡыт тамаҡ бик таҡыр булһа ла, китап уҡып кинәндек. Асығыуҙы баҫыр сара тапмағас, ял көндәрендә йыш ҡына ваҡытты китап уҡып үткәрә инек»,- тип хәтерләй Рауил Бикбаев. Педучилищеның һуңғы курстарын уҡығанда Рауилдың күңелендә яңынан шиғри тойғолар йышыраҡ уяна башлай. Шағирҙың әйтеүе буйынса «Педучилищала уҡыған йылдар минең ижад юлында эҙ ҡалдырманы тиерлек. Ләкин был өйрәнсек дәүерен үтмәү мөмкин түгел ине. Был дүрт йыл миңә төплө белем бирҙе, үҙаллылыҡҡа өйрәтте».

3-сө уҡыусы:«Ятаҡ» (слайд 10)

Һирәктер ул бында бүлмәләрҙең
Тынып ҡалған сағы саҡ ҡына.
Был залдарҙа йәшлек хыяллана,
Йәшлек яна, йәшлек талпына.
Һөйөү, әйҙә, йөрәктәрҙе өтһөн,
Һәм хыялдар тынғы белмәһен-
Яратамын ошо бүлмәләрҙең
Шау-шыуын һәм итһеҙ өйрәһен.

Уҡытыусы: 1957 йыл Өфөлә Башҡорт дәүләт педагогия институтының Башҡорт дәүләт университеты юғары статусын алған йылы. (слайд 11). Боронғолар әйтмешләй, Хоҙай хыял иткән ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына. (слайд 12, 13) 1957 йылдың көҙөндә Рауил Бикбаев университета уҡый башлай.

Р. Бикбаев алсаҡ һәм тиҙ аралашыусан егет. Ул курсташтары менән тиҙ уртаҡ тел таба, күптәре яҡшы дуҫ-иш булып китә. Уның шикелле ҡәләм тибрәткәндәр, шиғыр ене ҡағылғандар бар ине. Рауил Бикбаев студент булып уҡып йөрөгән 1957-1962 йылдар шиғриәтебеҙгә йәштәр бер быуын булып эркелеп килгән ваҡыт ине.

60- сы йылдарҙың икенсе яртыһы Булат Рафиҡов, Шакир Биҡҡолов, Ғәлим Дәүләтовтар үҙ тауыштарын дәррәүерәк ишеттерә башлаған осор. Рауил Бикбаевтың да тап ошо осорҙа поэтик тауышы асыҡлана барып, «Дала офоҡтары» (1964), «Ҡош юлы» (1967) исемле шиғыр һәм поэма китаптары менән ошо йәштәр быуыны сафына инеп китә.

Мостай Кәрим «Ғүмер миҙгелдәре» исемле иҫтәлектәр китабында был тәүге «Дала офоҡтары» йыйынтығы хаҡында «Тәүге шиғыр китаптары күп тыуа, ләкин тәүге китабы менән бергә һөрәнләп донъяға килгән шағир һирәк. Шул һирәктәрҙең береһе Рауил Бикбаев булды» тип яҙған. (слайд 14, 15)

Ысындан да, Рауил Бикбаев шикелле кешеләр һирәктер. Рауил Бикбаев - шәхес, атаҡлы кеше. Уның «һәр милләт шәхестән башлана. Шиғриәттә лә иң мөһиме- шәхес» тигән һүҙҙәре менән беҙ дәрестең артабан бүлегенә күсәйек.(слайд 2)

Хәҙер, балалар, өс төркөмгә бүленеп, һеҙҙең өҫтәлдә ятҡан шиғыр юлдарын уҡып, шағир был юлдар менән нимә әйтергә теләүен беләйек.(һәр төркөмдән бер бала шиғырҙы тасуири уҡый. Уҡыусыларға һүҙ бирәбеҙ. Уларҙың фекер алышыуын тыңлайбыҙ).

Уҡытыусы: Бына беҙ бирелгән өс шиғыр тураһында һеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе тыңланыҡ. Һеҙ бер- берегеҙ менән ризалашаһыҙмы?

Дәресте йомғаҡлау: Эйе, балалар, шағирҙың ижады тәрән, киң. Ул бөтөн нәмәне төптән уйлай, йөрәк аша үткәрә. Беҙҙе лә шуға саҡыра! Әлбиттә, бөгөн беҙ Рауил Бикбаев кеүек шәхестәребеҙҙе ишетмәһәк, һәр нәмәгә лә вайымһыҙлыҡ күрһәтһәк- беҙҙең киләсәгебеҙ юҡ тигән һүҙ. Шуға күрә лә, балалар, мин бөгөнгө дәресте шәхесебеҙ, атаҡлы кешебеҙ, замандашыбыҙ Рауил Бикбаевтың һүҙе менән йомғаҡлап ҡуйғым килә: «Бөгөн берләшергә ваҡыт. Атышҡан таштарҙы йыйып, шуларҙан яңы йорт ҡорор ваҡыт. Күп бәләләр белмәүҙән, шул арҡала бер-береңде аңламауҙан килә. Бер нисә көнлөк кенә аралашыу ҙа байтаҡ һорауҙарға яуап табырға ярҙам итә, беҙҙең аңды йылдар буйы томалап килгән ҡайһы бер кәртәләрҙе ҡаҡшата, хатта емереп тә ҡуя».

Өйгә эш: шағирҙың оҡшаған шиғырҙарын ятлап килергә.

“ХАЛҠЫМА ХАТ” ПОЭМАһЫ

Хөсәйенова Гөлшат Нәбиулла ҡыҙы,
Дүртөйлө ҡалаһы Башҡортостандың
халыҡ шағиры Назар Нәжми исемендәге башҡорт гимназияһы

Маҡсат:

- Башҡортостандың халыҡ шағирҙары менән таныштырыуҙы дауам итеү, Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады буйынса алған белемдәрен камиллаштырыу, Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһы менән таныштырыу;
- һөйләү телмәрен үҫтереү, ижади ынтылыш тәрбиәләү, фәнни эҙләнеүҙәргә ылыҡтырыу;
- күренекле шәхесебеҙгә ҡарата ихтирам хисе уятыу, йәш быуынды халҡыбыҙҙың рухи ҡиммәте нигеҙендә тәрбиәләү, туған телгә һөйөүҙе уятыу.

Йыһаз: компьютер, проектор, Р. Бикбаев китаптары, портреты, конвертҡа һалынған хат.

Дәрес барышы

1) Ойоштороу мәле.

2) Инеш әңгәмә. - Хәйерле көн, уҡыусылар! Дәресебеҙҙе ошо шиғырым менән башлап ебәргем килә. (Уҡытыусы яттан һөйләй).

Оло юлдың сатында
Мөһабәт һәйкәл тора.
Үткән һәр бер кешене
Оҙата, ҡаршы ала,
Изге юл теләп ҡала.
Бөйөк шағирҙың ҡарашы
Бик алыҫҡа төбәлгән.
Әйтерһең дә, уның кешеләргә
Әйтер һүҙе әле бөтмәгән,
Һуңғы һүҙен әле әйтмәгән.
Шиғырҙарым әгәр тыумай торһа,
Киләм тағы һәйкәл янына.
Көс-ҡеүәт һәм илһам алам,
Һүҙҙәр баҫа шиғыр юлына,
Күңелемдә моңдар ярала.
Күпме эштәр башҡарырға кәрәк,
Яҡты эҙең Ерҙә ҡалырлыҡ.
Рәхмәт һеҙгә! Ерҙә һеҙҙең булыу –
Беҙҙең өсөн шундай ғорурлыҡ,
Ижадығыҙ – һүнмәҫ яҡтылыҡ.

Кем тураһында һүҙ бара? Ниндәй һәйкәл? Ошо һәйкәл янында ниндәй һүҙҙәр яҙылған? (Уҡыусыларҙың яуабын тыңлау).

- Назар Нәжмиҙең һәйкәле янында яҙылған “ Ерҙә яҡты эҙең ҡалһын, “Кеше” ул тип әйтә алырлыҡ” тигән һүҙҙәрен дәресебеҙҙең девизы итеп алайыҡ. Назар Нәжми ошо һүҙҙәре менән нимә әйтергә теләне икән? Бөйөк шағирыбыҙ әйткәнсә, кемдәрҙе “Кеше” тип әйтә алабыҙ? (Уҡыусыларҙың фекерен тыңлау).

- Халҡыбыҙҙың азатлығы өсөн көрәшкән батырҙар (Салауат, Батырша, Ҡараһаҡал, Ҡаһым түрә, Шайморатов), Тыуған ил, халыҡ яҙмышы өсөн янып көйөп йәшәгән, туған телдең бөйөк көсөн халыҡҡа еткергән әҙиптәр һ.б.

- Дөрөҫ, шағирҙарҙы ла атарға мөмкин. Назар Нәжми Ерҙә “Кеше” ул тип әйтә алырлыҡ яҡты эҙен ҡалдырҙымы? Халыҡ уның ижадын баһалап, ниндәй мактаулы исем бирҙе?

- Башҡортостандың халыҡ шағиры.

- Дөрөҫ. Ә хәҙер, уҡыусылар, проектор аша Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының портретын күрһәтәм, һеҙ был кем икәнен әйтергә һәм был шағир тураһында ҡыҫҡаса һөйләргә тейешһегеҙ. (Уҡыусыларҙың яуабы тыңланыла).

- Уҡыусылар, беҙ бөгөн Башҡортостандың халыҡ шағирҙарының береһе менән яҡындан танышасаҡбыҙ. Был шағирҙың оҙаҡламай тыуған көнө - юбилейы етәсәк. Ошо дата беҙҙең илебеҙҙәге икенсе бер байрам менән тап килә. Был байрам Тыуған ил, уның граждандарының хоҡуҡтары, туған тел мәсьәләләре тураһында статьяларға бәйле. Был ниндәй дата, ошо көндә ниндәй байрам үткәрелә һәм беҙ һеҙҙең менән бөгөн кем хаҡында һөйләшәсәкбеҙ?

- 12 декабрь, Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы көнө, Рауил Бикбаев.

- Дөрөҫ, уҡыусылар, илем, халҡым, телем тип, бөгөнгө көндә лә янып йәшәүсе һәм ижад итеүсе Рауил Бикбаев. 1938 йылдың 12 декабрендә Рауил Бикбаев донъяға килһә, 1993 йылдың 12 декабрендә Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы ҡабул ителә. Рәсәй Федерацияһының Конституцияһы – Рәсәйҙең Төп Законы. Рауил Бикбаевтың тапҡыр һүҙе – туған халҡы өсөн саҡырыу ул. Дәрестә кем хаҡында һөйләшәсәкбеҙ икән инде? (Яуап). Ә хәҙер Рауил Бикбаев тураһында белгәндәрегеҙҙе иҫкә төшөрөп алайыҡ. (Уҡыусылар шағирҙың тормош юлы, ижады хаҡында һөйләйҙәр).

Уҡытыусы дәрескә алып килгән конвертты күрһәтеп:

- Уҡыусылар, конверт эсендә нимә тип уйлайһығыҙ? (Яуап)

- Аңлашыла, хат. Ә кемдән икән? (Яуап)

- Дөрөҫ, Рауил Бикбаев үҙенең туған халҡына, башҡорт гимназияһында белем алыусыларға яҙған был хатын. Тик был хат - яуап хаты. Был хатты яҙырҙан алда шағирға бер ҡыҙ хат яҙған. Ә хәҙер, әйҙәгеҙ, тәүҙә ҡыҙҙың хаты менән танышайыҡ. (Алдан тасуири итеп уҡылған хатты фонояҙманан тыңлатыу, фекер алышыу).

- Ысынлап та, уҡыусылар, бер нисә быуын үҙенең туған телен өйрәнеүҙән мәхрүм булды. Бына һеҙ йәшәгән Дүртөйлө ҡалаһының мәктәптәрендә лә хатта тәнәфес ваҡытында башҡортса һәм татарса бер һүҙ әйтергә лә рөхсәт итмәгәндәр. (Беренсе мәктәптә генә, милли мәктәп булараҡ, туған телдә белем алыу мөмкинлеге булған). Шулай итеп, башҡорт һәм татар балалары бары тик рус телендә генә белем алғандар, фәкәт рус телендә генә аралашҡандар. Туған тел аҡрынлап онотола барған. (Был шиғыр 1989 йылда яҙылған). 90 – сы йылдарҙа илдә барған ыңғай үҙгәрештәр арҡаһында башҡорт теле дәүләт теле итеп иғлан ителде, туған телде өйрәнеүгә ҡаршы ҡуйылған кәртәләр емерелде, туған телдә белем алыуға юлдар асылды.

Ә хәҙер конверт эсенә күҙ һалайыҡ. Хат – шиғырҙың башын Р. Бикбаев “Халҡыма хат” тип атаған. Уҡыусылар, был хатты уҡырҙан алда, әйҙәгеҙ әле, фаразлап алайыҡ, автор нимә тураһында яҙҙы икән? (Фекер алышыу).

- Ә хәҙер беҙҙең уйлағандар автор фекере менән тура киләме икән? Тәүҙә һүҙлек эше башҡарыла (бәғер, оран, намыҫ, һәләт, бығау, маһир, ғәмһеҙлек, кәр).

Уҡытыусы (конверт эсенән алынған) хатты – шиғырҙы тасуири итеп уҡып сыға. Артабан һәр уҡыусы бер строфа уҡый һәм ҡыҫҡаса нимә тураһында һүҙ барғанын әйтә. (Инеш өлөштә һүҙ туған тел тураһында бара, артабан тыуған еребеҙҙең тарихы, халҡыбыҙҙың үткәне).

- Шиғырҙың тәүге өлөшөндә үк Рауил Бикбаев нимә тураһында һүҙ барасағын әйтә, ошо юлдарҙы табығыҙ.

- Тамырыңды уйлап ғорурланам.

Бөгөнгөңдө уйлап хурланам.

Шағир мең йылдар элек илде тотҡан телдең булыуы, ирек даулап теле киҫелгән халыҡтың тамыры – үткәне тураһында, телдең быуындарҙан быуындарға ялғанып бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланыуы, башҡорт милли мәҙәниәтенең сит илдәрҙә танылыу алыуы хаҡында яҙа. Әммә хәҙерге ваҡытта балалар ғына түгел, хатта ата-әсәләр балаһының туған телдә аралашыуын теләмәй, сит телдәрҙе өйрәнеүҙе өҫтөнөрәк күрә.

- “Телле көйө телһеҙ уғландар бар”, “Сабыйының телен киҫкәндәр” юлдарын нисек аңлайһығыҙ?

- Ата-әсәһе көслөп балаһын туған теленән яҙҙыра, бала туған телендә һөйләшеү түгел, хатта үҙенең милләтенән ояла. Был бер башҡорт халҡының ғына башына төшкән бәлә түгел, ә башҡа халыҡтар өсөн дә.

- Был аяныслы хәлдең тыуыуына автор кемдәрҙе ғәйепләй? Текстан табып уҡыу.

- “Башһыҙ башлыҡтар”, “ҡуштан – түрә” ләр. Ә шулай ҙә төп сәбәп халҡыбыҙҙың ғәмһеҙлегенән килә.

- “Халҡыма хат” әҫәренең төп идея-йөкмәткеһен асҡан лейтмотив юлдарҙы табығыҙ.

- Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән

Уян, халҡым, ҡуҙғал милләтем!

- Рауил Бикбаев үҙенең әҫәрендә балаларҙың әсә телен белмәүҙәре, туған телебеҙҙең ҡороп барыуы тураһында уйланып хафалана, телдең ҡороуы халыҡтың юҡҡа сығыуына сәбәпсе булыуын иҫкәртә, халҡыбыҙҙы ғәмһеҙлектән уянырға саҡыра.

Тел мәсьәләһен күтәреп сыҡҡан ниндәй шағирҙарҙы беләһегеҙ, уларҙың ниндәй әҫәрҙәре хәтерегеҙҙә ҡалған? (Уҡыусыларҙың яуабы).

Ә хәҙер, уҡыусылар, әйҙәгеҙ, баҫып, Рәми Ғариповтың “Туған тел” шиғырын яттан һөйләйек.

- Уҡыусылар, дәресебеҙҙең девизына әйләнеп ҡайтайыҡ әле.

- “Ерҙә яҡты эҙең ҡалһын,

“Ҡеше”, - ул тип әйтә алырлыҡ”

Рәми Ғариповтың “Туған тел” шиғырының ниндәй юлдары Назар Нәжми һүҙҙәренә ауаздаш?

Әсәм теле миңә - сәсән теле -

Унан башҡа минең халҡым юҡ,

Йөрәгендә халҡы булмағандың

Ҡеше булырға ла хаҡы юҡ.

Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе.

Өйгә эш. Үҙегеҙҙе борсоған проблемаларҙы сағылдырып, тиҫтерҙәрегеҙгә, ата-әсәләргә, халыҡҡа мөрәжәғәт итеп хат яҙырға. Шиғри формала булһа, тағы ла һәйбәтерәк.

МИН БАШ ЭЙӘМ ҠАЙҒЫЛАРҘАН ТҮГЕЛ, ҮҘ ЕРЕМДЕ ӨҘӨЛӨП ҺӨЙГӘНГӘ

Мөхәмәтғәлина Гөлсинә Нуриман ҡыҙы,
Сибай ҡалаһы "8-се урта дөйөм биреү мәктәбе"

Маҡсат:

1. Р. Бикбаевтың тормошо һәм ижад юлы тураһындағы белемдәрен тулыландырыу; 2.Бәйләнешле телмәр, фекерләү кеүәһен үҫтереү; 3.Шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаев тураһында плакат; тормошон һәм ижадын яҡтыртҡан матбуғат баҫмалары; китаптар күргәҙмәһе; Башҡортостандың ҡыҫҡа энциклопедияһы; аҡлатмалы һүҙлек; компьютер, экран, проектор.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу. Хәйерле көн, уҡыусылар! Бөгөн беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижад юлы менән танышырбыҙ.

Экранда шиғыр юлдары сыға. Бер уҡыусынан уҡытыу.

- *Тыуған йылың ҡайһы?*
- *Халҡым тыуған йыл.*
- *Ҡыуған юлың ҡайһы?*
- *Халҡым ҡыуған юл.*

Яҙмышынан уның уҙмышым юҡ,
Ярам- яралары.
Күҙе менән күреп, айырам ерҙең
Ағын- ҡараларын.

Уҡытыусы:

Был юлдарҙы Рауил Бикбаевтың барлыҡ шиғриәтенә эпиграф итеп алырға мөмкин. Шағирҙың халыҡ яҙмышы тураһында шулай уйланыуы уның донъяға ҡарашынан, шиғри тәбиғәтенән килгәндер. Ырымбур далалары әҙәбиәтебеҙгә тағы ниндәй билдәле шәхестәрҙе бирҙе?

Уҡыусылар:

-Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Сәғит Ағиш.

Уҡытыусы:

- Шағирҙың ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

Уҡыусылар:

-"Уралыма","Салауат ҡылысы", "Берләшегеҙ,бөтә донъя башҡорттары", "Башҡортостан бында башлана", "Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда", "Барып етһен ине хаттарым".

II.Төп өлөш.

- Уҡыусылар, мин һеҙҙе Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына арналған "Әҙәби вернисажға" саҡырам. (Экранда яҙыу)

Вернисаж- француз теленән ингән һүҙ, "тантаналы рәүештә күргәҙмәне асыу" тигәнде аңлата.

Икенсе стенд.

Экранда яҙыу.

Умырзаялы ҡырҙарға
Саҡыра мине тағы,
Бәүелтеп зәңгәр томанын,
Даламдың офоҡтары.

Шағирҙың тыуған ауылы, бала сағы, туғандарының фотолары күрһәтелә һәм ошо осор тураһында һөйләп үтелә.("Йәшлек"№143, 2008 йыл,"Башҡортостан ҡыҙы"№3, 2008 йыл.)

Уҡыусы:

… «Атайһыҙ- арҡаһыҙ ҡалғанда беҙ биш бала инек. Әсәйебеҙгә утыҙ ике генә йәш. Һуғыш, унан аҙаҡҡы йылдарҙа беҙҙе аяҡҡа баҫтырыу өсөн ғәзизебеҙгә ниҙәр кисерегә тура килгәнен уның йөрәге үҙе генә белгәндер.Әсәйем бик уңған кеше ине. Эш- ғәмһеҙ ултырыуҙы, көн үтһен, тип йәшәүҙе беҙ аңламаныҡ…»

Өсөнсө стенд.

Экранда яҙыу."Фән мине тынғыһыҙлыҡҡа өйрәтте…"

Уҡыусы: Рауил Бикбаев -күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Шәйехзада Бабич әҫәрҙәре тыйылған саҡта уның хаҡында монография яҙыуы, Рәми Ғариповтың нисәмә йыл бикләнеп ятҡан мираҫын уҡыусыларға еткереүе лә туҡтауһыҙ эшләүе, төрлө жанрҙар һәм проблемалар буйынса әллә күпме тикшеренеүе уның ижади офоҡтарының киң булыуы хаҡында һөйләй. Өс тиҫтә йыл Тарих, тел һәм әҙәбиәт ғилми-тикшеренеү институтында эшләй. Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе була, оҙаҡ йылдар буйына поэзия секцияһына етәкселек итә, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы- Ҡоролтай депутаты була."Фән минең ғөмүми ижадымда шиғриәт менән бер тиң торған тормош тип иҫәпләйем. Ошо фән даирәһенә ҡасандыр барып юлығыуымды яҙмышымдағы бәхетле мәл тип иҫәпләйем"- ти Рауил Бикбаев.

Дүртенсе стенд.

Экранда яҙыу.«Миләттең ғорурлығы»

…Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған?
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.
…Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна,теленә.

Халҡыма мин ошо хаҡта яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Рауил Бикбаев тик ошо поэмаһын яҙып, башҡа бер шиғыр, бер поэма яҙмаһа ла, щиғриәттә генә түгел, милләттең рухи донъяһында һүнмәҫ шәм булып балҡыр ине.

“Халҡыма хат” поэмаһын шағирҙың үҙе уҡыуында тыңлау.

Рауил Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһы буйынса фекер алышыуҙар.

Бишенсе стенд.

Экранда Р. Бикбаевтың портреты,яҙыу

Үҙ халҡынан айырылмаһа,
Илгә арналһа эше,
Дандарын тауҙай күтәреп
Был донъяла мәңге шулай
Күкрәп йәшәр кеше.
А. Игебаев.

III. Йомғаҡлау.

“Рауил Бикбаев - заман һулышына үтә һиҙгер шағир. Ул – ер улы, туған халҡы балаһы. Ошо төп һыҙаттар Рауил Бикбаев поэзияһында шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ мөнәсәбәтен тығыҙ үрелештә үҙәкләштереп ебәрә”. Ғ. Хөсәйенов.

“Рауил Бикбаев бөтәһенән элек тәрән милли шағир. Киң масштаб һәм юғары осош шағиры… Үҙ халҡының героик тарихына ифрат тоғро. Бөтә барлығы менән уның яҡты киләсәгенә уҡталышлы»… Рәми Ғарипов.

(Фекер алышыу)

IV.Баһалау.

V. Өйгә эш.

I.«Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын уҡырға.

II.Класты ике төркөмгә бүләбеҙ.

1-се төркөм. Аналитиктарға «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында күтәрелгән проблемаларҙы асыҡларға

2-се төркөм. Экологтарға бөгөнгө тирә –яҡ мөхит тураһында мәғлүмәттәр әҙерләргә.

”БАШҠОРТ БАЛАҺЫ МИН”

Насирова Менәүрә Абдулхай ҡыҙы,
Благовар районы һарайлы төп дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев ижады һәм тормошо менән танышыу; «Халҡыма хат» шиғырының идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү, һығымталар яһау; тыуған ергә, халыҡҡа ҡарата һөйөү, туған телебеҙҙе һаҡлау, уны яҡлау кеүек патриотик тойғолар тәрбиәләү;

Күргәҙмә: Р.Бикбаев портреты, ҡурай моңо, аудиомагнитофон, презентация.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу моменты.

II.Төп өлөш.

1. Дәрес темаһын асыҡлау.

Слайд №3,4,5

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар…

-Был өҙөк беҙҙең дәресебеҙҙең эпиграфы.

- Яҙыусы был шиғыр юлдарында менән нимә әйтергә теләгән?

- Бөгөн беҙ дәрестә Башҡортостандың бөйөк халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижадына башышлайбыҙ. Сөнки декабрь айында Рауил Бикбаевтың юбилейы. Әйҙәгеҙ, уға нисә йәш тулыуын кроссворд аша беләйек.

Слайд № 6

, , ,,

7 (етмеш биш)

һандар тураһында ҡыҫҡаса ғына ҡабатлау:

- Был ниндәй һан? (ҡушма)
- Төркөмсәһе буйынса ниндәй төргә инә?(төп һан) Слайд № 7

2. Р.Бикбаевтың биографияһы менән танышыу.

Рауил Төхфәт улы Бикбаев – күренекле шағир, әҙәбиәт белгесе. Ул 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫкән, һуңыраҡ күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына күсеп, шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған. Аҙаҡ Аҡ-булаҡ педагогия училищеһенда белем алғас, Өфөлә

Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филология факультетында уҡый. Артабан Өфө Фәндәр академияһында аспирантура үтеп, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 30 йыл тирәһе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы булып эшләй. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бер нисә орден-миҙалдар кавалеры.

Хронологик таблица буйынса бер-ике уҡыусынан һөйләтеү.

Слайд № 8

- ❖ 1938 йыл декабрь – Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған.
- ❖ 1995 йыл – Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара.
- ❖ 1964 йыл - «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы донъя күрә.
- ❖ 1992 йыл – Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелә.

Слайд № 9

- ❖ Әҫәрҙәре:

«Дала офоҡтары» (1964),
«Ҡош юлы» (1967),
«Бураҙналар» (1985),
«Звездный дом» (1985),
«Поющие скалы» (1986),
«Время. Поэт. Народ.» (1986),
«Эволюция современной башкирской поэзии» (1991),
«Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» (1991),
“Шайехзада Бабич. Жизнь и творчество” (1995),
«Шағир һүҙе - шағир намыҫы» (1997),
«Ай күргәндәй, ҡояш алғандай» (1998),
-« Автобиография»,
- «Ҡаруанһарай»,
- «Баҙар балтаһы».

Слайд № 10

- ❖ Баһалары:
- F. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы
- Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты

Слайд № 11

- ❖ Уңыштары:
- Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе
- Күренекле әҙәбиәт ғалимы
- Филология фәндәре докторы, профессор

3. Һүҙлек эше. Слайд № 12

- ❖ бәғер – күңел; душа
- ❖ золом – яуызлыҡ; зло
- ❖ биҙҙереү – отучить
- ❖ яҙҙырыу – лишить
- ❖ ҡуйын – пазуха
- ❖ ҡый – сорняк
- ❖ һәләт – способность
- ❖ тиҫтер – йәштәш; одногодок
- ❖ даръя – ҙур йылға; большая река
- ❖ ырыуҙаш – сородич
- ❖ алҡым – тамаҡ; үңәс; горло
- ❖ тоҙаҡ – петля

Һүҙҙәрҙе уҡыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һөйләмдәр төҙөү. Слайд № 12

4. Әҫәр менән танышыу.

а) аудиояҙма тыңлау,
б) уҡытыусыһәм яҡшы интонация менән уҡыған уҡыусыларҙың уҡыуы.

5. Проблемалы һорауҙар ҡуйыу:

- Был шиғырҙа автор ниндәй проблемалар күтәрә?
- Ни өсөн автор хәҙерге ваҡытта телебеҙҙең бөтөүе тураһында ҡайғыра? Миҫалдар килтерегеҙ.
-Һеҙ ниндәй телдә күберәк һөйләшәһегеҙ?
- Дәүләтебеҙ тел тураһында ҡайғыртып, ниндәй Закон сығарҙы?
(Закон о языках) Кем шул закон тураһында ишеткәне бар?
-Һеҙ үҙ телегеҙҙе һаҡлап ҡалыр өсөн нимәләр эшләр инегеҙ?

6. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу:

- Был әҫәр ҡайһы ваҡыттарҙа яҙылған? Нисек уйлайһығыҙ?
- Был әҫәр нимә тураһында? Ул ни өсөн шулай атала?
- Әҫәрҙә ниндәй проблема күтәрелгән?

(халыҡ яҙмышына, теленә бәйле проблемалар күтәрелә).

- Идеяһы нимәлә?

(Туған теленән яҙған – мең йәтим).

-Бөгөнгө көндә был проблема актуалме?

(Актуаль, сөнки күп балалар үҙ телдәрен онотоп бөткәндәр).
-Был әҫәр ни өсөн “Халҡыма хат” тип аталған?
Слайд № 13-20
7.Эмоциональ ял.
Тыуған яҡ, байрамдар тураһында слайдтар ҡарау һәм Тыуған ил тураһында мәҡәлдәрҙе иҫкә төшөрөү.
-Тыуған ил – алтын бишек.
-Торған илдән тыуған ер артыҡ.
- Тыуған ерҙәй ер булмаҫ,
Тыуған илдәй ил булмаҫ…
Слайд № 21
6.Төркөмдәр менән эш.
1 - се төркөм.
Шул юлдарҙың мәғәнәһен аңлатырға:
Шул тел менән халҡым үҙ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған..
Слайд №22
2- се төркөм
Ошо юлдарҙың мәғәнәһен аңлатырға:
Башҡорт илен тотош утҡа солғап,
Тәфтиләүҙәр ниҙәр ҡылмаған?!
Тик батшалар телен киҫкәндә лә
Башҡортом бит телһеҙ ҡалмаған!..
9. Сылбырлап уҡыу.(Интонацияға иғтибар итеү)
10. Дәресте йомғаҡлау.
- Шиғырҙың ҡайһы юлдары хәтерҙә ҡалды?
- Автор ниндәй кәңәштәр бирә?
- Әҫәрҙең төп фекере ниндәй?
- Был шиғыр менән танышҡас,һеҙҙә ниндәй хистәр тыуҙы?
- Ниндәй кәйефкә бирелдегеҙ?
- Автор беҙҙе нимә хаҡында уйландырырға теләй?
-Туғанынан яҙған –ярты йәтим.
Туған теленән яҙған –мең йәтим!
Авторҙың ошо шиғыр юлдары һеҙгә фәһем булһын, бер ваҡытта ла үҙегеҙҙең туған телегеҙҙе онотмағыҙ!
Слайд № 23
10. Баһалар ҡуйыу. Өйгә эш биреү
«Минең туған телем» темаһына инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ТОРМОШ ЮЛЫ ҺӘМ ИЖАДЫ БУЙЫНСА МӨҒЖИЗӘЛӘР ЯЛАНЫ УЙЫНЫ

Яманһарина М.Д.,
Мәләүез районы Нөгөш урта мәктәбе

Маҡсат:
1. Рауил Бикбаевтың ижады буйынса уҡыусыларҙың белем кимәлен тикшереү.
Бурыстар:
1. Рауил Бикбаевтың тормош юлын һәм әҫәрҙәрен иҫкә төшөрөү;дәрестәрҙә алынған белемдәрен нығытыу.
2. Уйын барышында иғтибарлыҡ. ҡыҙыҡһыныу,логик фекерләү һәләттәрен үҫтереү.
3. Шағирҙың үҙенә, уның ижадына ҡарата ихтирамлыҡ тәрбиәләү.
Йыһазландырылыу: интерактив таҡта, мультимедиалы проектор, компьютер,ике шкатулка,приз өсөн бүләктәр.
Әҙерлек эштәре:
1. Уйынға ҡарата презентация өсөн слайдтар әҙерләү.
2. Р.Бикбаевтың биографияһын ике уҡыусыға һөйләргә әҙерләтеү.
3. Рауил Бикбаевтың шиғыр,поэмаларынан өҙөктәр ятлатыу.
Уйын барышы:
1. Инеш өлөш.
Алып барыусы:
-Хәйерле көн, ҡәҙерле уҡыусылар, хөрмәтле уҡытыусылар! Бөгөн Рауил Бикбаевтың юбилейына арналған «Мөғжизәләр яланы» уйынына йыйылдыҡ. Быйылғы йылдың 12 декабрендә күренекле шәхесебеҙ-Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, филология фәндәре докторы, профессор, танылған дәүләт эшмәкәре Рауил ағайға 75 йәш тула. Шағирыбыҙҙың тормош юлы тураһында белгәндәребеҙҙе иҫкә төшөрөп китәйек.

(1-се уҡыусыны тыңлайбыҙ) Ҡушымта №1.

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында кохозсы ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Фәбдерафиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый.

Ҡушымта №2. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда «Хәҙерге башҡорт поэмаһы» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Утыҙ йылға яҡын ошо Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Рауил Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

Ҡушымта №3,4,5.

(2-се уҡыусыны тыңлайбыҙ)

Ҡушымта №6,7,8.

Рауил Бикбаевтың ныҡлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Башҡорт дәүләт университетындағы ижади-ғилми мөхит, әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәгендә ҡатнашыу, йәш һәм оло ҡәләмдәштәре менән аралашыу ижад өсөн киңмөмкинлектәр аса. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда «Ағиҙел» журналында «Вокзал» исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. 1964 йылда «Дала офоҡтары» тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға. Был китабында дала офоҡтарындай темалар киңлеген тойорға мөмкин ине.

1967 йылда сыҡҡан «Ҡош юлы» тигән икенсе китабы Рауил Бикбаев поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә барыуын күрһәтте.Ул Ырымбур далалары киңлектәренән урман-таулы, ялан туғайлы Башҡортостан тарафтарына сығып, яңы шиғри артылыштарға, алдағы офоҡтарға ынтылды,поэтик бейеклектәргә үрләне.

Алып барыусы:

Сығыштар бик күләмле булды, ҙур рәхмәт! Ә хәҙер уйынды башлап ебәрәйек… Барабан янына 1 турҙа ҡатнашыусыларҙы саҡырайыҡ!

Ҡушымта №9

Әйҙәгеҙ, ҡаршы алайыҡ!

Мин һеҙҙе уйынды ойоштороусылар менән таныштырып китәйем…

Уйындың тәртибе һәм инструкцияһы менән таныштырам. Ҡушымта №10

1 турҙың һорауын уҡыйым һәм сыҫкан ярҙамында слайд буйынса яуапты эҙләйбеҙ. Ҡушымта №11

Дөрөҫ яуап - «Урал» шиғыры. 1 турҙан һуң «Урал” шиғырын бер уҡыусы яттан һөйләй.

«Урал»
Сит бер кеше һымаҡ,тыныс ҡына
Мөмкин микән ҡарау Уралға?
Миң тауҙарҙы ҡәҙбә ташы итеп,
Табынырға әҙер уларға…
Аҡ ҡайындар яҡты маяҡ булып
Юлдарыма минең теҙелгән.
Тупрағымдан сыҡҡан был нурҙарга
Баш эймәйсе нисек түҙергә?
Уйсан саҡтарымды күрһәң әгәр,
Әйтмә ,ҡайғыра ,тип,был бәндә,
Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел,
Үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә.

2 турҙың дөрөҫ яуабы- РӘҠИӘ Ҡушымта №12

“Ете быуыным” шиғырынан өҙөктө яттан һөйләү

Ете быуыным
Был тормоштоң ҡапыл йәме бөтһә,
Күңелдәрем китһә һыуынып,
Янып торған ете егет булып
Алға баҫа ете быуыным.
Йөҙҙәренә әле ҡояш ҡарай,
Әле ҡарлы әсе бәрә.
Төхфәт-
Шәрәфи-
Мөхәмәтша-
Хәсән-
Ҡотлләхмәт-
Бикбай-
Аҫылгәрәй.

3 турҙың яуабы- «Халҡыма хат» поэмаһы. Ҡушымта №13

Шиғри пауза- поэманан өҙөк тыңлау.

Халҡыма хат
Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,

Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна,теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Финал туры. Ҡушымта №14
Дөрөҫ яуап- «Көҙ" исемле шиғырҙар йыйынтығы китабы.
Супер уйын. Ҡушымта №15
Дөрөҫ яуап- «Ятаҡ» шиғыры.Ошо шиғырҙы яттан һөйләү.

Ятаҡ

Һирәктер ул бында бүлмәләрҙең
Тынып ҡалған сағы саҡ ҡына.
Был залдарҙа йәшлек хыяллана,
Йәшлек яна,йәшлек талпына.
Һөйөү,әйҙә,йөрәктәрҙе өтһөн,
Һәм хыялдар тынғы белмәһен-
Яратамын ошо бүлмәләрҙең
Шау-шыуын һәм итһеҙ өйрәһен.

Алып барыусы:

- Ошоноң менән , Рауил Бикбаевтың юбилейына арналған «Мөғжизәләр яланы» уйыны тамам. Иң тантаналы ваҡыт килеп етте: уйында ҡатнашыусыларға һәм еңеүселәргә тәмле-татлы призлар тапшырыу! Ҡушымта 16,17,18,19.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “УРАЛЫМА” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Рәхмәтуллина Әлфинур Риф ҡыҙы,
Салауат ҡалаһының 1- се гимназияһы

Уҡыусылар өсөн маҡсат: 1. Рауил Бикбаевтың “Уралыма”шиғырының йөкмәткеһен үҙләштереү. 2. Парлап эшләргә, аралашырға өйрәнеү. 3. Бәйләнешле телмәр, логик фекерләүҙе үҫтереү, ижади һәләттәрҙе асыу. 4. Тыуған илде һөйөргә, тәбиғәтен ҡәҙерләргә, туған телде, халҡыбыҙҙы ихтирам итергә өйрәнеү.	Уҡытыусы өсөн маҡсат: 1. Рауил Бикбаевтың “Уралыма” шиғырының йөкмәткеһен аңлатыу. 2. Парлап эшләргә, аралашырға өйрәтеү. 3. Бәйләнешле телмәр, логик фекерләүҙе үҫтереүгә, ижади һәләттәрен асыуға йүнәлеш биреү. 4. Тыуған илде һөйөргә, тәбиғәтен ҡәҙерләргә, туған телде, халҡыбыҙҙы ихтирам итергә өйрәтеү.
Дәрес төрө: яңы тема өйрәнеү Дәрес формаһы: әҙәби кафе	Ҡулланылған технологиялар: проблемалы уҡытыу, интеграциялы, дифференциаль, мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар.
Һүҙлек: һын – стан, фигура, ҡын – ножны, килмешәк – переселенец, баҡһам – когда смотрю, иңдәрендә – на плечах	Яңы мәғлүмәттәр: Кешегә нимә йәшәү көсө бирә? Ниндәй кеше ысын шәхес була ала? «Һин беләһеңме?» рубрикаһы яңылыҡтары.
Контроль формаһы: карточкаларҙа проект эштәре башҡарыу	Йыһазландырыу: Мультимедиа йәки интерактив таҡта, Р.Бикбаевтың портреты, китаптары, яҙыусы тураһында презентация, ҡурай моңо яҙылған диск

Дәрес Этаптары	Уҡытыусының эшмә кәрлеге	Уҡыусының эшмәкәрлеге	Методтар, алымдар, формалар	Универ саль уҡыу эшмәкәр леге	Хеҙмәттәш лек һөҙөмтә һе
Ойошто роу мәле.	Иҫәнләшеү. – Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек!	-Һаумы, ҡояш, Һаумы, зәңгәр һауа, Һаумыһы ғыҙ, уҡытыусым, Һаумыһы ғыҙ, дуҫтарым!	Метод: һөйләү Форма: коллектив Алым: диалог	Аралашыу универ саль уҡыу эшмәкәр леге уҡытыусы менән уҡыусыла рҙың уҡыу хеҙмәттәш леген план лаштырыу	Уҡыусылар ҙың актив уҡыу эшмәкәрле генә көйлә неүе (мотива ция)
Артикуля ция күне геү.	Слайдта яҙылған шиғыр	Шиғыр юлдарын хор менән тасуири уҡыу.	Метод: һөйләү Форма:	Шәхсән универ саль уҡыу	Телдәрҙе шымар тыу.

	юлдарын хор менән уҡытыу: -Минең тыуған ҡырҙарым, Балдай татлы һыуҙарым, Яланда рым, урманым, Күккә ашҡан Уралым – Минең изге төйәгем, Һеҙҙе һөйә йөрәгем. С.Юлаев		коллектив	эшмә кәрлеге мотивлашт ы рыу, уҡыусыла рҙың уҡыу эшмә кәрлегене ң маҡса ты һәм уның мотивы араһында бәйләнеш булдырыу.	Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре нең әйтле шен нығытыу.
Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын билдәләү.	Кроссворд систереү, теманы әйттереү. Уҡыусылар, һеҙ хәҙер үҙегеҙҙе кафела тип хис итегеҙ. Был кафе ябай түгел, әҙәби кафе. Һәм беҙҙе унда арҙаҡлы шәхестәребеҙ ҙең береһе менән осрашыу көтә. Уның кем икәнлеген билдәләү өсөн, кроссворд сисәбеҙ. 1.Башҡорттар ҙың милли музыка ҡоралы. 2.Ағиҙел йылғаһы башланған тау. 3.Башҡорт халыҡ йыры. 4.Белем шишмәһе. 5.Башҡортостандағы иң ҙур күл. 6.Тәүге башҡорт халыҡ яҙыусыһы. 7.Башҡортостандағы иң оҙон йылға. 8.З.Биишева тыуған район. 9.Башҡорттар ҙың ҡыллы музыка	Һорауҙарға яуап биреү. Кроссвордты сисеп, теманы әйтеү. Кроссворд та вертикаль буйлап, Рауил Бикбаев, тип яҙылды. Тимәк, бөгөн беҙ дәрестә Р. Бикбаев Бикбаевтың ижады менән танышасаҡбыҙ (слайдта портреты) 	Метод: Аңлатма лы- иллюс тратив, аралашыу. Форма: коллектив. Алым: әңгәмә	Логик универ саль эшмәкәр лек: Төшөнсәгә килтереү, -эҙемтә сыға рыу.	Фекерләү ҡеүәһен, һөйләү күнекмәлә рен үҫтереү

	ҡоралы. 10.Башҡорт халҡының милли батыры. 11.Республик алағы йәштәр гәзите. 12. Тыуған ил. -Эйе, туған халҡы, теле өсөн янып-көйөп йәшәгән көслө рухлы кешеләр араһында Башҡортос тандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев айырым бер урын биләй.				
Яңы тема өҫтөндә эш.	Биография белешмә (слайдта шығырҙарынан өҙөктәр). а) -Тыуған йылың ҡайһы? Халҡым тыуған йыл. Ҡыуған юлың ҡайһы? -Халҡым ҡыуған юл. *Р.Бикбаевтың тыуған йылын кемегеҙ әйтер?* б) -Тыуған ерем, һаумы? Һағындырҙың Ҡайттым бына алыҫтарҙа булып. *Шағирҙың тыуған ере тураһында нимә беләһегеҙ?* в)Мөғжизәләр көтөп, алыҫ юлға Ашыҡтым мин “Өфө, Өфө!” тип. *Шағирҙың тормош юлына ҡыҫҡаса байҡау яһау.* г) –Яҙ, ҡәләмем, бер һүҙ. Яҙған саҡта Тертләп	Яуап бирегеҙ. Яуап бирегеҙ. Яуаптар бирегеҙ.	Метод: Аңлатмалы- иллюстратив, аралашыу. Форма: коллектив. Алым: әңгәмә	Логик универсаль эшмәкәрлек: эҙләнеү,анализлау, -һығымта яһау.	Шағирҙың тормош һәм ижад юлын иҫтә ҡалдырыу.

	китһен дәфтәр биттәре. *Р.Бикбаевтың ниндәй әҫәр ҙәре менән һеҙ танышһығыҙ?* Уларҙың тематикаһы тураһында ҡыҫҡаса әңгәмә.				
Пробле малы уҡытыу	Проблемалы һорау ҡуйыу: Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, нимә кешегә йәшәү көсө бирә? -Бөгөн һәр берегеҙ дәрес барышында ошо һорауға тулы яуап табырға тырышырһығыҙ. Һеҙгә яуапты табырға Р.Бикбаевтың “Уралыма” шиғыры ярҙам итәсәк.	Һорауға яуап эҙләү, үҙҙәренең фекерҙәрен әйтеү.	Метод: проблема лы уҡытыу, эҙләнеү Форма: коллектив һәм индивиду аль Алым:диал ог форма һында әңгәмә	Логик универ саль эшмәкәр лек: -- проблема ҡуйыу, проблема ны аныҡлау һәм уны хәл итеү, Һығым та яһау.	
һүҙлек эше.	1. – Электрон китаптан шиғырҙы тыңлау. (Башҡорт әҙәбиәте: 5-9 – сы кластар өсөн әҙәбиәт буйынса электрон ҡулланма) 2.Шиғырҙы аңлауҙарын тикшереү (проверка первичного восприятия): - Шағир был әҫәре менән беҙгә нимәләр әйтергә теләгән? 3.Сылбырлап уҡытыу. Тасуири уҡыуға иғтибар итеү. 4.Әңгәмә. Һорауҙарға яуаптар алыу: -Уралдың *үткәнен* автор нисек	Хор менән уҡыу, тәржемә итеү, һүҙбәйләнештәр төҙөү, һүҙлек дәфтәренә яҙыу.	Метод: һөйләү Форма: коллектив Алым:диа лог формаһын да әңгәмә	Аралашыу универ саль уҡыу эшмәкәр леге контроль, коррек ция, -үҙеңде баһалау.	һүҙлек байлығын арттырыу, грамматика ны ҡабатлау.

	һүрәтләй? Лирик герой Тыуған илебеҙҙең *бөгөнгөһөнә* ниндәй мөнәсәбәттә? Ул *киләсәкте* нисек күҙаллай?				
Текст өҫтөндә эш.		Тыңлау. һорауға яуап бирең. Сылбырлап, буксир менән уҡыу. һорауҙарға яуаптар бирең. Яуаптарҙы шиғырҙан өҙөктәр менән дәлилләү.	Метод: элект рон дәреслек ҡулланыу. Форма: коллектив Алым: диалог формаһында әңгәмә Метод: эҙләнеү. Форма: индивидуаль Алым: диалог форма һында әңгәмә	Логик универ саль эшмәкәр леге: анализ, сағышты рыу.	Тасуири уҡыу күнекмәләр ен үҫтереү. Шиғырҙың йөкмәтке һен аңлау.
Ял минуты.	Дискынан ҡурай моңон тыңлатыу.	Ҡурай моңон тыңлау.	Релакса ция.		Аҡтерлыҡ, артислыҡ сифаттарын үҫтереү.
Шиғырҙа һүрәтләү сараларын табыу	һүрәтләү сараларын табырға ярҙам итеү. – Уҡыусылар, ассоциатив һүрәтләү сараларының иң күп таралған төрҙәрен иҫкә төшөрәйек әле? -Эйе, әйҙәгеҙ, шиғырҙан уларҙы эҙләп ҡарайыҡ.	-Сағыштырыу, йәнләндереү, метафора, эпитет. Һүрәтләү сараларын эҙләү, табыу. 1.-Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа. Был – *сағыштырыу*, шағир Уралды ҡылысҡа оҡшата. 2.Шишмәләрең минең йөрәк аша Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр. Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел, Шул шишмәләр йәшәү илтәләр. Был юлдарҙа *йәнләндереү* ҡулланылған.	Метод: эҙләнеү Форма: коллектив һәм индивидуаль Алым: диалог форма һында әңгәмә	Логик универ саль эшмәкәр лек: Эҙләнеү сағыш тырыу, төшөнсәгә килтереү,- һығым та яһау.	Шағирҙың үҙенең уҡыусылары на әҫәрҙең төп идеяһын тәьҫирлеоб разлы итеп еткереү өсөн ассоциа тив һүрәтләү сараларын нисек итеп бик оҫта ҡулланыуын күрһәтеү.
һеҙ беләһегеҙ ме?” рубрикаһы	Уҡытыусының күҙәтеүе. - Уҡыусылар, һеҙ өйҙә Башҡортостандың ҡыҫҡаса энциклопедия һынан йә булмаһа Интернет селтәренән Урал тауҙары теҙмәһе тураһында мәғлүмәт эҙләргә	Өйҙә әҙерләп килтергән мәғлүмәттәрҙе уҡыу.	Метод: Эҙләнеү эвристик, күҙәтеү. Форма: индивидуаль	Логик универ саль эшмәкәр лек: эҙләнеү.	

	тейеш инегеҙ, кемдәр тапты? Һеҙгә һүҙ бирелә.				
Проект өҫтөндә эш. Төркөм дәр хеҙмәттәш легеҙ	Проекттың темаһын тәкдим итеү. –Хәҙер 3 төркөмгә бүленеп эшләйбеҙ. 1-се төркөм үҙегеҙҙе этнограф-тикшеренеүселәр тип, 2-се төркөм ҡоролтай ағзалары тип, 3-сө төркөм - яҙыусылар итеп хис итегеҙ. Беренсе төркөм – халыҡ ижа ды ынйы ларын балап, улар ара һынан Уралға арналған дарын табығыҙ, икенсе төркөм – дәрестә алынған белемдәрҙе файҙаланып, ҡарарҙар сығарығыҙ, өсөнсө төркөм үтелгәндәр тураһында иҫбатлауҙар яҙығыҙ.	“Эҙләйем –табам”:дәрестә белемдәрҙе үҙебеҙ эҙләйбеҙ һәм табабыҙ. 1.: “Урал” халыҡ йыры, “Урал батыр” эпосы, “Урал батыр” әкиәте, “Урал ҡалымы” риүәйәте, һ.б. 2.:Халҡыбыҙҙың үткәне менән ғорурланайыҡ! Илебеҙҙең бөгөнгөһөн яратайыҡ! Уралыбыҙҙы, телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы һаҡлайыҡ, киләсәк быуындарға еткерәйек! “Урал батыр” эпосын уҡыйыҡ, өйрәнәйек! 3.: Урал булғанда – башҡорт та булыр! Урал – башҡорттарҙың изге төйәге!	Метод: эҙләнеү эвристик, күҙәтеү Форма: төркөмләп эшләү.	Логик универ саль эшмәкәр лек:- проблема ҡуйыу, проблеман ы аныҡлау һәм уны хәл итеү, -проект эшенең һөҙөмтәлә рен анализ лау.	Проектты төҙөй һәм яҡлай белеү.
Дәфтәрҙә эш.	Уҡытыусы күҙәтә, ҡарай, төҙәтә, иҫкәртә. - Ҡарарҙарҙы, иҫбатлауҙарҙы дәфтәргә яҙып ҡуяйыҡ.	Ижади уйлау, яҙыу, төҙөлгән һөйләмдәрҙе уҡыу.	Метод: репродук тив Алым: күнегеү эшләү (яҙма).	Аралашыу универ саль уҡыу эшмәкәрл еге: кон троль, коррекция -партнер ҙың эшмә кәрлеген баһалау.	Дөрөҫ ултырыу, матур яҙыу.
Йомғаҡлау	Һығымта яһарға өйрәтеү. – Тимәк, лирик геройға нимә йәшәү көсө бирә? -Эйе, уҡыусылар, Тыуған ил	Һығымта яһарға өйрәнеү. -Илебеҙҙең матур, һоҡланғыс тәбиғәте: сылтырап аҡҡан шишмәләре, бейек тауҙары, ҡуйы урмандары, һ.б. - беҙгә йәшәү көсө бирә. Яуап биреү.	Метод: индуктив, үҙ-үҙеңә анализ.	Логик универ саль эшмә кәрлеге: анализ, -сағышты рыу, -һығымта яһау.	Анализ, һығымта яһарға өйрәнеү.

	кешегә илһам, дәрт, йәшәү көсө бирә. Ә шағир тураһында ниндәй яңы мәғлүмәттәр белдегеҙ? -2013 йылдың 12 декабрен дә үҙенең 75 йәшлек юбилейын билдәләү се Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың Тыуған илен, халҡын ысын күңелдән яратыуы уның көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шығырҙарын да сағыла.				
Рефлекция.	Һорау биреү : -Дәрес барышында һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар уянды? Киләсәк өсөн һеҙҙең күңелегеҙ тыныҫмы? -Мин һеҙҙең дә Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы, аң-белемгә ынтылыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала!	Яуап эҙләү.	Метод: аңлатыу Форма: индивидуаль эшләү Алым: әңгәмә	Регулятив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге: уҡыу маҡсатын нығытыу.	
Өй эше.	Өй эше биреү: а) Урал тауы тураһында бәләкәй хикәйә төҙөргә йә шығыр яҙып ҡарарға; б) Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр табып яҙырға.	Өйҙә өй эшен башҡарыу.	Метод: аңлатыу Форма:индивидуаль эшләү	Шәхсән универсаль уҡыу эшмәкәрлеге: эшмәкәрлектең һөҙөмтәлә рен нығытыу.	Алған белемдәрҙе нығытыу, үҙ-үҙеңде тикшереү.
Баһалау.	Уҡыусыларҙы бер-береһен баһаларға өйрәтеү. –Ә хәҙер	Бер-береңде баһалау.	Метод: һөйләү Форма: коллектив	Аралашыу универсаль уҡыу эшмәкәр	Баһалау оҫталығын үҫтереү.

	дәрес барышында иң әүҙем ҡат нашҡан, тасуири уҡыған, һорауҙарға дөрөҫ һәм тулы яуап бир гән уҡыусыларҙы билдәләп үтәйек. Кемдәргә бөгөн “бишле” билдәһе ҡуйыр инегеҙ?			леге: эшмәкәр лектең шарты һәм ысулдары рефлекси яһы, эшмә кәрлек тең һөҙөм тәләренә контроль һәм баһа.	

РАУИЛ БИКБАЕВ “ХАЛҠЫМА ХАТ “ШИҒЫРЫ
(дәрес өлгөһө)

Ғәзизуллина Миндиниса Әхәт ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы,
М. Искужин исемендәге 136-сы башҡорт лицейы

Дәрестең темаһы: Рауил Бикбай "Халҡыма хат" шиғыры.

Маҡсаты: Шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү аша шағирҙың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү.

Бурыстары: 1) Шиғырға анализ яһау. Идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау. 2) Һөйләү телмәрен үҫтереү, әҫәргә ҡарата үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү. 3) Р.Бикбаев ижады менән ғорурланыу тәрбиәләү. Телде, милләтте һаҡлау, милли рух тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Эпиграф яҙылған плакат, Р.Бикбаевтың портреты, китаптары, хаттар, электрон дәреслек, проектор, экран, аудиотаҫма, шағир хаҡында видеояҙма.

Эпиграф:

Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт халҡына.

Дәрес барышы:

Дәрестең темаһы, маҡсаты, бурыстары әйтелә. Бер уҡыусы эпиграфты уҡып ишеттерә.

Экранда әҙәби календарь: Уҡыусылар экранға иғтибар итегеҙ. Унда февраль айының әҙәби календары бирелгән. Был ай юбилейҙарға бик бай.

Үткән дәрестәрҙе ҡабатлап алайыҡ.

Экранда портреты, фотолар күргәҙмәһе, китаптары, әҫәрҙәр исемлеге: 2 рәт Р.Бикбайҙың тормошо һәм ижады хаҡында бер-береһенә һорауҙар бирә һәм өҫтәп яуап әҙерләй.

1. Р.Бикбай ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
2. Шағир бөгөнгө көндә ниндәй вазифа биләй?
3. "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаһында ниндәй проблема күтәрә?
4. Фән эшмәкәре булараҡ иң беренсе ҡайһы шағирға арнап ғилми хеҙмәт баҫтыра?

Уҡытыусының инеш һүҙе. Халыҡ тормошоноң хәл иткес мәлдәрендә сәсәндәр, яҙыусылар халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, уның яҙмышына йоғонто яһаған мәсьәләләрҙе аңлата һәм уны хәл итергә саҡыра....

Экранда терәк һүҙҙәр: С. Юлаев, Байыҡ сәсән, М. Аҡмулла, М. Ғафури, Ш. Бабич, М. Харис, Р.Ниғмәти, М. Кәрим һ.б.

1. Нимә ул хат? Нимә ул мөрәжәғәт?

Аңлатмалы һүҙлектән мәғәнәһен табып, ике уҡыусы уҡып ишеттерә.

2. Тарихҡа күҙ һалайыҡ? Кемдәр, ҡасан, ниндәй маҡсат менән халыҡҡа мөрәжәғәт иткәндәр?
3. Әҙәбиәт тарихында ҡайһы яҙыусылар был жанрҙы үҙ ижадтарында ҡулланғандар?

Экранда:

М. Аҡмулла "Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!"
М. Ғафури уҡырға, белемгә өндәй.
Ш.Бабич "Башҡорт халҡына көйлө хитап"
М.Харис "Хат"
Р. Ниғмәти "Һинең кәләшеңдең хаттары"
М. Кәрим “Башҡорт халҡына яуап хаты" һ.б.

- Шулай итеп Р. Бикбайҙы халҡына хат менән мөрәжәғәт итергә нимә мәжбүр итте икән?

Бер уҡыусы шағирға яҙған ҡыҙҙың хатын тасуири итеп уҡып сыға. Икенсе уҡыусы шиғырҙың яҙылыу тарихын һөйләй.

- Ошо ҡыҙҙың хатына шағир нимә тип яуап биргән, шуны бөгөн асыҡлаясаҡбыҙ, һеҙҙә уйлап ултырағыҙ, ниндәй яуап хаты яҙыр инегеҙ? Дәрес аҙағында уҡып ишеттерегеҙ.

Экранда һүҙлек эше:

Оран - яуға саҡырған ауаз
Маһир - оҫта, талантлы
Кәр - сәм, ныҡышмалылыҡ
Бәғер - кешенең хис-тойғоһон туплаған эске донъяһы
Золом - терания, деспотизм
Ҡәһәрләрҙәр - яман теләк, ҡарғыш менән әрләү

Аудиотаҫма: "Халҡыма хат" шиғырын аудиотаҫманан тыңлау.

Экранда схема: Уҡыусыларға шиғырға анализ яһау өсөн, схемалар таратыла, әңгәмә барышында тултырып ултыралар.

Шиғырҙы иғтибар менән тыңлағандан һуң анализлауға күсәбеҙ.

1. Әҫәрҙең жанры? (шиғри хат) Схемаға яҙабыҙ.
2. Шиғырҙың темаһы? (туған тел, ил, милләт яҙмышы) Схеманы тултырып ҡуябыҙ.
3. Шиғырҙағы образдар? (шағир, халыҡ) Схемаға яҙабыҙ.
4. Шиғырҙың тел-стиль үҙенсәлектәре?
- өндәш һүҙҙәр булған строфаларҙы табып уҡығыҙ.

Экранда һүрәтләү саралары:

- һүрәтләү сараларына миҫалдар табығыҙ: синонимдар, антонимдар, сағыштырыуҙар, эпитеттар, метафоралар. Миҫалдарҙы схемаға яҙа барабыҙ.

Синоним - яна. теленә һ.б., антоним - ғорурланам, хурланам һ.б., сағыштырыу - йондоҙ кеүек йым-йым, эпитет - аҫыл ерҙәр, метафора - телле көйө телһеҙ башҡорттар һ.б.

5. Р. Бикбай шиғырҙа ниндәй проблемаларҙы сағылдыра?

Таҡтала схема – Проблемалар

Проблемалар

Проблемалар - тел, милләт, моң, ғәмһеҙлек, киләсәк, башҡа милләттәр.

Уҡыусылар әйтә баралар һәм таҡтаға сығып, алдан әҙерләнгән схемаға (икенсе схема) яҙып тултыралар.

6. Был проблемалар бөгөн дә актуалме? Актуаллеге нимәлә? Гипотезалар менән иҫбатлағыҙ.

Экранда Башҡортостан тураһында һүрәттәр.

Уҡыусылар үҙ фекерҙәрен әйтәләр. Проблемаларҙың актуаллеген иҫбатлайҙар, дәлилдәр килтерәләр.

7. Шулай ҙа ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр бармы? Булһа, ниндәй үҙгәрештәр әйтеп үтегеҙ?

Шиғыр яҙылған - 1989 йылда, ә быйыл - 2012 йыл.

- Ошо йылдар араһында ниндәй үҙгәрештәр күрәбеҙ?

Үҙгәрештәр:

- суверенитет тураһында декларация
- Хөкүмәтебеҙ, йәмәғәтселек тарафынан телгә иғтибар артты
- башҡорт теле - дәүләт теле. туған телдәр тураһында закон ҡабул ителде
- мәктәптәрҙә туған телде өйрәнеү
- мәктәптәр асыла
- башҡорт телендә баҫмалар һаны арта
- вывескалар(алтаҡталар) ике телдә
- урам.туҡталыш исемдәре, иғландар ике телдә
- тауарҙар этикеткалары тәржемә ителгән һ.б.
- башҡорт телендә төрлө конкурстар, бәйгеләр, ярыштар һ.б.
- Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тураһында

8. Шулай итеп, Р. Бикбай. Халҡыма мин ошо хатты яҙам Оран һалам башҡорт иленә, - тип өндәшә, мөрәжәғәт-хаты менән халыҡты уята, телде, илде һаҡларға саҡыра...

9. Ике төркөмгә бүленеп Р.Бикбайға һорау биреүсе Йәштәр исеменән яуап хаты яҙайыҡ.

Уҡыусылар тиҙ генә ике төркөмгә бүленеп хат яҙалар.

Аҙаҡ тасуири итеп уҡып ишеттерәләр.

10. Йомғаҡлау. Баһалар ҡуйыу.

Шулай итеп, Р.Бикбай ораны бөгөн дә актуаль яңғырай. Хәл итәһе мәсьәләләр бар әле. Киләсәк һеҙҙең ҡулда.

Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

11. Өйгә эш. Ижади эш. Р.Бикбай тормош юлын һәм ижадын йомғаҡлап: шиғыр яҙырға, викторина һорауҙары, тест төҙөргә, һүрәт төшөрөргә, кроссворд эшләргә (һайлап алып үтәргә).

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ. ХӘБӘР, ҺОРАУ, ӨНДӘҮ ҺӨЙЛӘМДӘР

Солтанова Лилиә Ишкилде ҡыҙы,
Өфө ҡалаһы Киров районының
41-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Дәрес маҡсаты: 1) Рауил Бикбаев тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреү; “Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғырының йөкмәткеһе менән таныштырыу; тәбиғәт менән кеше араһындағы мөнәсәбәтте асыҡлау; хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе телмәрҙә дөрөҫ ҡулланырға өйрәтеүҙе дауам итеү; 2) әҫәрҙе тасуири уҡырға өйрәтеү, һүҙ запасын байытыу, уҡыусыларҙың үҙ аллы фекерләү һәләтен, бәйләнешле һөйләү телмәрен үҫтереү; 3) тәбиғәткә, тыуған ергә һөйөү, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаев портреты, слайдтарҙа шағирҙың тормош һәм ижадына бәйле фотоһүрәттәр, видео һәм аудиояҙмалар, тәбиғәт тураһында картиналар, мультипроектор, экран.

Дәрес барышы:

Ойоштороу мәле.

Психологик комфорт тыуҙырыу.

- Хәйерле иртә, уҡыусылар! Мин һеҙгә бик яҡшы кәйеф менән килдем. Ә һеҙҙең кәйефегеҙ нисек?

Шиғырҙы уҡыу.

- Хәйерле иртә, күҙҙәр, һеҙ уяндығыҙмы? (күҙҙәрҙе һыйпау)
- Хәйерле иртә, ҡулдар, (ҡулдарҙы һыйпау)
- Һеҙ уяндығыҙмы? (сәпәкәйләү)
- Хәйерле иртә, аяҡтар, (һыйпау) һеҙ уяндығыҙмы? (тыпырҙау)
- Хәйерле иртә, ҡояш! (ҡулдарҙы ҡояшҡа һүҙыу)
- Мин уяндым!
- Ҡулдар менән ҡояшҡа ынтылабыҙ. Беҙ эшләү өсөн ҡояштан дәрт алабыҙ. Ә хәҙер бер-беребеҙгә ҡарап йылмайып, матур көн теләйек. (Слайдта ҡояш һүрәте)

Өйгә эште тикшереү (Слайдта өс вариантта тәҡдим ителгән өй эштәре күрһәтелә).

1. Яҙ темаһына мини-инша яҙыу.
2. Бирелгән 3 һынамышты яттан яҙып өйрәнеү.
3. Грамматик бирем: Х. Ғиләжевтың «Яҙ» шиғырын тасуири уҡыу, һөйләмдәрҙе табып баш киҫәктәрҙе билдәләү. - Үткән дәрестә һәр кем үҙенә оҡшаған эш төрөн өй эше итеп һайлап алғайны. Кемдең нисек үтәүен төркөмдәрҙә тикшереп алайыҡ. (1-се “Ижади төркөм”дә яҙ темаһына яҙылған иншаларҙы бер-береһенә ҡысҡырып уҡып, иң оҫта инша яҙыусыны билдәләйҙәр. 2-се төркөм мәҡәлдәрҙе яттан яҙалар, аҙаҡ слайдҡа ҡарап эштәрен тикшерәләр һәм бер-береһенә баһа ҡуялар. 3-сө төркөмдәге уҡыусылар уҡытыусы менән берлектә өй эшен тикшерәләр.) (Слайд) Беренсе стадия – саҡырыу. Яңы теманы өйрәнеүгә саҡырыу.

Уҡытыусы: - Шулай итеп, яҙ темаһын өйрәнеүҙе дауам итәбеҙ. Бөгөнгө дәрестә өйрәнеләсәк әҫәрҙе, уның авторын эҙләп табабыҙ. (Уҡыусылар слайдтан дәрестә өйрәнеләсәк әҫәрҙе, уның авторын билдәләйҙәр.) (Слайд)

- Уҡыусылар, дәрестә нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? Эйе, бөгөн дәрестә халҡыбыҙҙың күренекле шәхестәренең береһе Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижадына ҡыҫҡаса күҙәтеү яһарбыҙ, уның шиғыры менән танышырбыҙ. Шулай уҡ грамматик теманы нығытыуға күнегеүҙәр башҡарырбыҙ. (Слайдта Рауил Бикбаевтың портреты күрһәтелә. Уҡыусыларға ҡағыҙ битендә яҙыусының рус һәм башҡорт телдәрендә яҙылған ҡыҫҡаса тормош һәм ижады тураһында мәғлүмәт таратыла. Башта һәр уҡыусы мәғлүмәт менән үҙ аллы таныша, аҙаҡ әңгәмә үткәрелә. Был эш тәнҡитле фекерләү технологияһының “инсерт” алымы менән башҡарыла.)

Яҙыусының тормош юлы һәм ижады	“V” – миңә билдәле, “?” –аңлашылмай, “+” - яңылыҡ белдем, “!” - килешмәйем
1. Рауил Бикбаев – күренекле башҡорт шағиры, ғалим, депутат. 2. Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Бикбаев Равиль Тухватович родился 12 декабря 1938 года в деревне Верхний Кунакбай Покровского района Оренбургской области. 3. Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында уҡый. 4. Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы рәйесе вазифаһын башҡара. 5. Рауил Бикбаев - бик күп китап авторы. Уның “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. 6. Отдельные произведения его переведены на немецкий, турецкий, украинский, казахский, якутский, чувашский, каракалпакский, алтайский и другие языки. 7. Ул – филология фәндәре докторы. 8. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.	

- Уҡыусылар, Рауил Бикбаев тураһында һеҙгә нимә билдәле ине? Ниндәй яңылыҡ белдегеҙ? Нимә бөтөнләй аңлашылмай? Мәғлүмәт менән кемдәр килешмәй? Быйыл яҙыусыға нисә йәш тула тип уйлайһығыҙ? (Уҡыусыларҙың яуаптарын тулыландырыу йәһәтенән экранда Рауил Бикбаев тормош юлы һәм ижадын сағылдырған слайдтар күрһәтелә.)

Күҙаллау. (Слайдта һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр күрһәтелә. Уҡыусылар хор менән бирелгән һүҙҙәрҙе уҡый.).

Япраҡ, тәүге ҡыяҡтар, ярһып шыбырлай, сабый япраҡ, теле асыла, ер-һыуҙар, таштарыңдың.

-Был һүҙҙәрҙе уҡығас, нимәләр күҙ алдына килеп баҫты? Тимәк, бөгөн өйрәнеләсәк әҫәр нимә тураһында тип уйлайһығыҙ?

Икенсе стадия – фекер йөрөтөү. Шиғыр өҫтөндә эш.

1. Уҡытыусының өлгөлө уҡыуы
2. Һүҙлек эше.

- Шиғырҙа ниндәй һүҙҙәр аңлашылмай? (Слайдта һүҙлек эшенә тәҡдим ителгән һүҙҙәр күрһәтелә.)

Шыйыҡ – жидкий,
Һығыу – выжимать
Һарылып – прильнув
Хаҡ – дөрөҫлөк
Намыҫ - совесть
Ялған – ложь
Сабый- младенец
Ҡыяҡ- лист злаковых растений
Юлығыу - попадаться, встречаться
Асыу - злость
Илгәҙәк – приветливый, любезный
Талпыныу – рваться, тянуться
Шыбырлау - шептать

1-се төркөм – ялған, асыу, асыу тотоу, илгәҙәк һүҙҙәренә синоним табып яҙырға.

2-се төркөм – шыйыҡ, ялған, асыу, илгәҙәк, тәүге, асыла һүҙҙәренең антонимдарын яҙырға.

3-сө төркөм - ошо уҡ һүҙҙәр менән хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр төҙөргә. (Был эш төркөмдәрҙә башҡарыла һәм тикшерелә. Һәр төркөмдән берәр уҡыусы сығыш яһай. Яуаптары слайдта бирелгән һүҙҙәр менән тулыландырыла.)

3. Уҡыусыларҙың эстән уҡыуы.

-Уҡыусылар, шиғырҙа ниндәй тыныш билдәләре осраны? Тимәк, яҙыусы ниндәй һөйләм төрҙәрен ҡулланған? Ни өсөн? Ул юлдарҙы нисек уҡырға кәрәк?

4. Хор менән уҡыу
5. Сылбырлы уҡыу.
6. Тасуири уҡыу (бер- ике уҡыусынан уҡытыу).
7. Һорауҙарға яуаптар:

- Шиғырҙа яҙ миҙгеленең ниндәй айы тураһында һүҙ бара тип уйлайһығыҙ? Ни өсөн? Шул юлдарҙы табып уҡығыҙ.

- Шиғыр ни өсөн “Тәбиғәттең теле асылған саҡ” тип атала икән?

- Тәбиғәттә тәүге япраҡ үҙен нисек тоя? Автор ни өсөн япраҡты сабый япраҡ тип һүрәтләй? Сабый һүҙен икенсе төрлө нисек әйтәләр?

- “Ҡолағыма һарылып, сабый япраҡ, әллә ниҙәр ярһып шыбырлай” тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ? Шыбырлай һүҙен тағы ниндәй һүҙҙәр менән алыштырып әйтергә мөмкин?

- Яҙ миҙгеле тәбиғәткә, кешегә нимә алып килгән? Автор был турала нимә ти?

- Һуңғы строфалағы тәүге ике шиғри юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

- Һеҙ яҙ миҙгелен яратаһығыҙмы? Ни өсөн яҙ миҙгеле оҡшай?

- Әгәр һеҙгә шиғырҙың йөкмәткеһенә һүрәт төшөрөргә ҡушһалар, иң беренсе нимәне төшөрөр инегеҙ? Ни өсөн?

- Автор кешеләргә нимә тип өндәшә? Был саҡырыуға һеҙ ҡушылыр инегеҙме? Ни өсөн?

- Эйе, сөнки Рауил Бикбаев япраҡ образы аша тәбиғәттең иң йәмле яҙ миҙгелен, уның матурлығын, шулай уҡ кешеләрҙең тәбиғәткә мөнәсәбәтен һүрәтләүгә ирешкән. Әммә бөгөнгө көндә тәбиғәт бик ҙур зыян күрә. Шуға күрә яҙыусы үҙенең әҫәрҙәре аша кешеләрҙе, бигерәк тә йәш быуынды тәбиғәтте һаҡларға, уяу булырға саҡыра. Сөнки кеше тәбиғәтһеҙ йәшәй алмай. Ни өсөн? Уй-фекерҙәрегеҙҙе кластер ярҙамында күрһәтегеҙ.

Кластер төҙөү (1-се төркөм шиғырҙағы төп образ - япраҡ, 2-се төркөм - тәбиғәт, ә 3-сө төркөм кеше һүҙҙәренә кластер төҙөй. Аҙаҡ эштәр тикшерелә, слайд ярҙамында уҡытыусы төҙөгән кластер менән сағыштырыла.)

Өсөнсө стадия – рефлексия. Йомғаҡлау.

-Шулай итеп бөгөнгө дәрестә ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ? Ниндәй яҙыусы менән яҡындан таныштығыҙ? Кемдәр дәрестә актив эшләне? Үҙегеҙҙең эшегеҙгә ниндәй баһа ҡуйыр инегеҙ? Әйҙәгеҙ, дәрестә алған белемегеҙҙе тест ярҙамында тикшереп үтәйек.

Тест һорауҙары.

1. Рауил Бикбаев нисәнсе йылда тыуған?

а) 1939 йыл; б)1938 йыл; в) 1928 йыл.

2. Шағирҙың тыуған ере?

а) Баймаҡ районы Буранбай ауылы; б) Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылы; в) Ырымбур өлкәһе Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылы.

3. Уның тәүге китабы нисек атала?

а) «Отряд ҡуҙғалды»; б) «Дала офоҡтары»; в) «Яҙғы йыр».

4. Рауил Бикбаев кем?

а) педагогия фәндәре кандитаты; б) филология фәндәре докторы; в) медицина фәндәре докторы.

5. Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме нисәнсе йылда бирелә?

а) 1995 йыл; б) 1997 йыл; в) 1992 йыл.

6. Әй, …, һаҡ булайыҡ, зинһар,

Тәбиғәттең теле асыла!

Шиғри юлдарҙа ниндәй һүҙ төшөп ҡалған?

а) балалар; б) кешеләр; в) дуҫтар.

Тест яуаптары: 1 – б; 2 – в: 3 – б; 4 – б; 5 – в; 6 – б. (Уҡыусылар слайдҡа ҡарап яуаптарының дөрөҫлөгөн тикшерәләр һәм баһалау критерийҙарына таянып баһалайҙар.)

Өйгә эште һайлап алығыҙ.

1. “Йәншишмә” гәзитенән һәм “Аманат” журналынан яҙ темаһына арналған шиғыр-хикәйәләрҙе туплап альбом эшләү.
2. Яҙ, тәбиғәт һүҙҙәренә синквейн төҙөү.
3. Һуңғы строфаны яттан яҙып әҙерләнегеҙ.

- Шулай итеп, дәрестә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдарының береһе Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән яҡындан таныштығыҙ. Киләсәктә уның ижады тураһында тағы ла күберәк белерһегеҙ. Дәресебеҙҙе яҙыусы һүҙҙәренә ижад ителгән “Өфө – Ырымбур юлдары” йыры менән тамамлайбыҙ.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ИЖАДЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ғирфанова Г.Т.,
Ҡырмыҫҡалы районы
1-се Ҡырмыҫҡалы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың шиғриәтен өйрәнеү; матур уҡыу күнекмәләрен үҫтереү; башҡорт шиғриәтенә ҡарата һөйөү хисен арттырыу.

Йыһазландырыу:

Р.Бикбаевтың портреты, китаптар күргәҙмәһе, слайдтар.

Дәрес барышы:

Эҙләмәйем мөғжизәләр
Мин көндәрем эсенән.
Башланһындар улар бары
Хәләл аштан,
Тоғро эштән,
Ҡояштан,
Һөйөнсөнән.

1. -Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Ошондай матур һәм ябай ғына һүҙҙәр менән башлағым килә дәрестә. Ысынлап та, һәр тыуған көн үҙе бер мөғжизә түгелме ни! Әгәр ҙә кешенең эше хәләл, үҙеңдең күңелеңә яҡын һәм һин шул эштән күңелеңә рәхәтлек алаһың икән, шул бит үҙе - бәхет! Беҙ бөгөн дәрестә ана шул һәр бер көндән күңеленә рәхәтлек алған, үҙ иленең яҙмышы ла, кешелек донъяһының тормошо ла берҙәй борсоған Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, профессор, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе Рауил Бикбаевтың ижадын өйрәнәбеҙ.
2. - Бер уҡыусы Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады хаҡында ҡыҫҡаса мәғлүмәт биреп үтә:

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районы Үргe Ҡунаҡбай ауылында тыуып үҫкән. Ете йыллыҡ мәктәптән һуң Аҡбулаҡта педучилище, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында белем ала. Рауил Бикбаев бөгөнгө көндә илебеҙҙең күренекле шағирҙарының береһе, ғалимы, йәмғәт эшмәкәре. Әҙиптең ун бер шиғри йыйынтығы донъя күргән. Р.Бикбаев тәүге шиғырҙарында һәм “Вокзал” поэмаһында уҡ ауылы, иле, быуыны күргән – ишеткәнде үҙенекеләй кисереүсе шәхес итеп таныта. Иң беренсе шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда “Далалар офоҡтары” исеме аҫтында баҫылып сыға. Уның күп шиғырҙарында халыҡ, ил яҙмышы, тарихи шәхестәр образдары урын ала. Р.Бикбаев матбуғатта әҙәби тәнҡит, публицистик мәҡәләләр, докладтар менән йыш сығыш яһай. Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Ул – Республикабыҙҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр, З.Биишева һәм Р.Ғарипов исемендәге премиялары лауреаты.

3. “Ғүмер уртаһы” шиғырын ишеттереү:

Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
Һөҙөп ташлап шау-шыу туртаһын,
Юлдарыма хафа менән бағам,
Еткән саҡта ғүмерем уртаһы.
…
Ғүмеремдең аҫыл уртаһында
Был тормоштоң серле асылын
Һиҙгән һайын йөрәк
Түҙемлерәк –

Һәр тарафтан иҫкән елгә боролоп,
Һәр тауышҡа бармай асылып.
…
Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип,
Ҡарай бөгөн беҙгә ил күҙе.

- Был шиғырҙы уҡығанда лирик геройҙың борсоулы уйҙарының сәбәбен аңлап буламы икән? Ни өсөн шағир берсә шатлана, берсә ул үҙен йыуатҡандай була.

- Етмешенсе йылдарҙа Рауил Бикбаев үҙенең иң яҡшы әҫәрҙәре менән милли лириканың йөҙөн билдәләүсе шағирҙар рәтендә тора. Һиҙгер күңелле, философ тәбиғәтле шағир был осорҙа донъяны һәм унда үҙ урынын нескә тойоп, тормоштоң һәр асылын һиҙгер тойған, һәр бер ялтыр әйбергә ҡыҙыҡмай торған ир уҙманы итеп үҙен күрһәтә һәм ошо ғүмер уртаһына еткән ир-егеттәргә лә өндәшкәндәй “Ир уртаһы илдең тотҡаһы” тип әйтеп ҡуя. Һәм ошо йәшкә еткән ир-егеттәр үҙ һүҙен елгә осормаҫҡа тейештер тигән мәғәнә һала автор шиғырына. Хәҙерге ҡатмарлы тормошта был бик мөһим .

Киләһе шиғыр “Бөрйән ҡарағайы” тип атала. Был шиғыр бөгөнгө көндә бик актуаль тип әйтер инем. Быйылғы йыл беҙҙең Президентыбыҙ тарафынан “2013 - Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы” тип иғлан ителде.

Ҡитеп бара Бөрйән ҡарағайы,
Еркәйендә ҡалған тамыры.
Ҡитеп бара Бөрйән ҡарағайы,
Сайыр йәшен юлға тамыҙып.
Барып етер Бөрйән ҡарағайы,
Күпме генә йәшең ағыҙма-
Иҫән сығыуҙар юҡ был цехтарҙан
Әйләнер ул ап-аҡ ҡағыҙға.
Ҡире ҡайтыр Бөрйән ҡарағайы,
Әйләнер ҙә ап-аҡ ҡағыҙға.
Ул ҡағыҙҙа Бөрйән урмандарын
Нығыраҡ ҡырырға тип яҙылған.

- Был шиғырҙа тәбиғәт проблемаһы күтәрелә. Ысынлап та, тыштан беҙҙең Башҡортостанда ағас күп һымаҡ күренһә лә , ул бит мәңгелек түгел. Автор үҙенең әҫәрҙәрендә халыҡ яҙмышын, тормошон, көнкүрешен, тәбиғәт рух экологияһы аша бирә. Шағир Башҡортостан урмандарының ҡырылыуына битараф ҡала алмай һәм шул “ ҡағыҙҙа Бөрйән урмандарын нығыраҡҡырырға тип яҙылған” тип әйтеп ҡуя.

4. Юнир Һағынбаев башҡарыуында “Әсәй, мине таңда уят әле” йырын ишеттереү. (Р.Бикбаев һүҙҙәре, Ә.Бикташева музыкаһы).

5. Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижадына арналған
Әҙәби викторина.

1. Рауил Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
2. Ниндәй уҡыу йорттарында белем алған?
3. Иң беренсе поэмаһы нисек атала һәм ниндәй темаға арналған?
4. Беренсе шиғырҙарын ҡайһы осорҙа яҙа башлай?
5. Иң беренсе поэмаһы ниндәй журналда баҫылып сыға?
6. Беренсе шиғырҙар йыйынтығы ҡасан сыға?
7. Бирелгән шиғыр юлдары кемгә төбәлеп әйтелә?

Был донъяның иркә улы булып
Йәшәүҙәр юҡ беҙгә кинәнеп.
Һиндә – Салауаттың яралары,
Миндә – һыҙланыуы Кинйәнең.

8. Быуындан быуынға һуҙылған йөрәк ауазын, алты йыр-бүлектәр буйына тарихи шәхестәрҙең яҙмышын сағылдырыусы йыйынтыҡ.
9. Ҡыҙрас һәм Аҡъюл образдары ҡайһы әҫәрҙән?
10. Салауат Юлаевҡа арналған әҫәре?
11. “Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙән” исемле юлъяҙмалар китабы ҡасан сыға?
12. “һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ” поэмаһы һәм “Минең яҙмышым” китабы өсөн ниндәй награда ала?
13. Бирелгән шиғыр юлдары ҡайһы әҫәренән:

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып ҡалған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

14. Дәүләт Йыйылышы - Башҡортостан Республикаһының Ҡоролтайы депутаты итеп нисәнсе йылда һайлана?
15. Рауил Бикбаевтың ниндәй ордендары бар?
16. Рауил Бикбаев ниндәй премияларға һәм нисәнсе йылдарҙа лайыҡ булған?
17. Ш.Бабичтың тормош юлы һәм ижадына арналған монографик китабы нисәнсе йылда баҫылып сыға?

Яуаптар:

1. 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе, Покров районы, Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуа.

2. Ауылдағы ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай, Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында белем ала, артабан БДУ-ла аспирантура тамамлай.
3. “Вокзал” тип атала, һуғыш һәм халыҡ яҙмышы темаһы.
4. Студент сағында.
5. “Ағиҙел” журналында.
6. 1964 йылда, “Дала офоҡтарында” тип атала.
7. Рәми Ғариповҡа.
8. “Ностальгия” йыйынтығы.
9. “Ҡаруанһарай” поэмаһынан.
10. “Ер һәм диңгеҙ” балладаһы.
11. 2002 йылда.
12. 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен ала.
13. “Халҡыма хат” поэмаһынан.
14. 2008 йылдың 2 мартында.
15. Салауат Юлаев ордены, Халыҡтар дуҫлығы, “хөрмәт билдәһе” ордены.
16. Салауат Юлаев премияһы (1989й.), Зәйнәп Биишева (2003й.), Ғәлимов Сәләм (1970й.), Рәми Ғарипов (1994й.).
17. 1981 йылда сыға.

Йомғаҡлау.

Һәр дәүерҙең үҙ иле, тыуған халҡы өсөн янып-көйөп йәшәгән ҡаһарман рухлы шәхестәре була. Бөгөнгө башҡорт шиғриәтенең ғорурлығы – мәшһүр һүҙ оҫтаһы Рауил Бикбаев нәҡ ошондай баһаға эйә. Уның исеме республикабыҙҙа ғына түгел, илебеҙҙең башҡа тарафтарында ла киң билдәле. Ғөмүмән, бар булмышы менән иле, заманы өсөн йәнен фиҙа ҡылырлыҡ шағир ғына ысын ижадсы дәрәжәһенә эйә.

Р.БИКБАЕВ “БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА”

Ибраһимова Зөлфиә Мәүлит ҡыҙы,
Шишмә районы Алкин-2 урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1)Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбайҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу; “Башҡортостан бында башлана” шиғырын уҡыу, йөкмәткеһен үҙләштереү;

2) уҡыу, телмәр күнекмәләрен үҫтереү, һүҙлек менән эшләй белеү күнекмәләрен камиллаштырыу;

3) Башҡортостан, уның тәбиғәте, халҡы, тарихы тураһында әңгәмәләшеү, республикабыҙ тормошона битараф булмау тураһында һөйләшеү; Тыуған ергә мөхәббәт тәрбиәләү, уның именлеген, тәбиғәтен һаҡлауға өндәү.

Йыһазландырыу: дәреслек, компьютер, интерактив таҡта, һүҙлектәр, Башҡортостан тәбиғәтен һүрәтләгән картиналар, карта, Р. Бикбаев китаптары күргәҙмәһе, магнитофон, аудиокассета. 1-се слайд.(Башҡортостан картаһы)

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу моменты.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар, хәйерле көн! Ултырығыҙ! Туған тел дәресен башлайбыҙ.
- Әйҙәгеҙ әле таҡтала яҙылған шиғыр юлдарын бергәләп уҡып сығайыҡ.

Башҡортостан – ҡурай иле,
Башҡортостан – Урал ере,
Башҡортостан – ҡумыҙ теле,
Башҡортостан–ҡымыҙ сере. (Ә. Үтәбай)

- Был шиғыр юлдарында нимә тураһында һүҙ бара? (Башҡортостан).
- Башҡортостан ниндәй тауҙарҙа урынлашҡан? Картанан күрһәтегеҙ әле. (Урал тауҙары).
- Башҡортостан исемен әйтеү менән нимә күҙ алдына баҫа?
- Башҡортостан нимә менән дан тота? (инеш әңгәмә)

2-се слайд (Башҡортостан тәбиғәте)

II. Маҡсатҡа сығыу.

- Эйе, Башҡортостан, уның матур тәбиғәте, бай тарихы, ихлас халҡы һәр ваҡытта ла иғтибар үҙәгендә булған. Уны яҡлап, батырҙары һәләк булған, сәсәндәре маҡтап ҡобайырҙар яҙған, йырсылары данлап йырҙар сығарған. Бөгөнгө көндә лә Башҡортостан тураһында бик күп әҫәрҙәр ижад ителә, шулай бит, уҡыусылар? Әйҙәгеҙ әле, иҫкә төшөрөп үтәйек, кемдәр ниндәй әҫәрҙәр белә? Түбән кластарҙа Башҡортостан тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡыны? (Ғ.Сәләм “Республика иртәһе”, Ш.Бабич “Башҡортостан” һ.б.)

III. Үтелгәнде ҡабатлау.

- Бөгөнгө дәрестә лә беҙ һеҙҙең менән был тема буйынса белгәндәребеҙҙе арттырыуҙы дауам итәсәкбеҙ.

3-сө слайд (Р.Бикбаевтың портреты)

-Был кемдең портреты?

-Дөрөҫ, был Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев.

Беҙ уның “Башҡортостан бында башлана” шиғырын уҡыясаҡбыҙ, һәр беребеҙ “Нимә ул Ватан?” һорауына яуап бирергә тырышасаҡбыҙ. Дәфтәрҙәрегеҙгә бөгөнгө датаны, теманы яҙып ҡуйығыҙ.

IV. Яңы тема буйынса эш.

1) - Беҙ шағир тураһында нимәләр беләбеҙ һуң?

- Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул

күрше Ғәбдерәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда “Хәҙерге башҡорт поэмаһы” тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Утыҙ йылға яҡын ошо Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Рауил Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

Рауил Бикбаевтың шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. 1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға. “Ҡош юлы” (1967) тигән икенсе китабы Рауил Бикбаев поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә барыуын күрһәтте. Ул Ырымбур далалары киңлектәренән урман-таулы, ялан-туғайлы Башҡортостан тарафтарына сығып, яңы шиғри артылыштарға, алдағы офоҡтарға ынтылды, поэтик бейеклектәргә үрләне. Шағирҙың “Автобиография” исемле китабында шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ бәйләнеше тулыраҡ һүрәтләнә.

Рауил Бикбаевтың шулай уҡ “Ғүмер уртаһы”, “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!”, “Халҡыма хат” әҫәрҙәре киң билдәле.

4 –се слайд (шағирҙың төрлө йылдарҙа төшкән фото һүрәттәре)

2) Шиғыр буйынса эш:

- дәреслектән һүҙлек эше:

Һабан турғайы – жаворонок

һуғай – луг

сабыр – терпение

яҙмыш – судьба

мәңге – вечно

алыҫ – далеко

намыҫ – совесть, честь

(уҡыусылар яңы һүҙҙәрҙе уҡытыусы артынан ҡабатлайҙар, тәржемәһен әйтәләр, һөйләмдәр төҙөйҙәр, һүҙлек дәфтәренә яҙып ҡуялар).

- уҡытыусының шиғырҙы тасуири уҡыуы;
- шиғырҙың йөкмәткеһен ҡыҫҡаса руссаға тәржемә итеү;
- уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы;
- ҡысҡырып тасуири уҡыу;
- һорауҙарға яуап биреү:

1) Шиғырҙа Башҡортостан нисек тасуирлана? Ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланылған? Миҫалдар килтерегеҙ.

2) Башҡортостан исеменән әйтелгән “Мин бит башланам һинән, унан, Кешеләрем, һеҙҙән башланам!” тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

3) Ватан беҙҙән башланған кеүек, беҙ ҙә Ватанһыҙ йәшәй алмайбыҙ, шулай бит, уҡыусылар? Ватан алдында беҙҙең йөҙөбөҙ яҡты, намыҫыбыҙ саф булһын өсөн, беҙ нимәләр эшләргә тейешбеҙ? (Тырышып уҡырға, өлкәндәрҙе хөрмәт итергә, ярҙам итергә һ.б.) .

Теманы нығытыу.

- Уҡыусылар, беҙ һеҙҙең менән дәрес башында уҡ Башҡортостан тураһында бик күп әҫәрҙәр ижад ителеүен билдәләп үткәйнек. Әйҙәгеҙ, бер аҙ ял итеп, “Карауанһарай” төркөмө башҡарыуында “Башҡортостан” йырын тыңлап алайыҡ.(йыр тыңлау)

Дәфтәрҙә эш.

- Уҡыусылар, дәресебеҙҙе дауам итеп, өндәш һүҙҙәр тураһында ҡабатлап алайыҡ. Түбән кластарҙа һеҙ өндәш һүҙҙәр тураһында бер аҙ белешмә алдығыҙ, әйҙәгеҙ, иҫкә төшөрәйек әле, нимә ул өндәш һүҙ?
- Ул ниндәй һүҙ төркөмөнән килә?
- Ә хәҙер шиғырҙан өндәш һүҙҙәргә миҫалдар табып яҙығыҙ. (үҙ аллы эш)

VII. Дәрестә йомғаҡлау.

- Уҡыусылар, бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ? Нимәләр иҫегеҙҙә ҡалды?

Башҡортостан – беҙҙең Тыуған илебеҙ. Беҙ Башҡортостанда йәшәүебеҙ менән сикһеҙ ғорурланабыҙ. Беҙҙең бурыс республикабыҙға кәрәкле, ышаныслы, талантлы улдар, ҡыҙҙар булып үҫеү.

Баһалау.

VIII. Өйгә эш. Шиғырҙан өҙөк ятларға.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИЯ ПРОБЛЕМАҺЫ

Әхмәтшина Альбина Тимерйәр ҡыҙы,
Шишмә районы, Шишмә
1-се һанлы урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, хәүефләндергән иҡтисади, экологик мәсьәләләрҙе асыҡлау; уҡыусыларҙа тыуған тәбиғәттең матурлығын, байлығын һаҡлау, уға һөйөү тәрбиәләү; дәрестә күтәрелгән проблемаларға ҡарата үҙ фекерҙәрен асыҡ сағылдырырға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: мультимедиа проекторы, уҡыусылар төшөргән фотоһүрәттәр, карточкалар, ҡурай моңдары яҙылған компакт диск, компьютер, Р.Бикбаевтың “Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы, Р.Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмалары.

Төйәгемә күҙ ташлаһам,
Хәүефтәрем ҡуҙғала,
Зифа ҡамышын һарғайтып,
Һыуҙар кәмей йылғала,
Эсер һыуҙар ҙа ҡороһа,
Донъябыҙҙан ни ҡала?

I. Ойоштороу моменты.

-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, беҙ дәрестә сәйәхәт итеп алайыҡ. II. Инеш әңгәмә. Тема, маҡсат менән таныштырыу (тема, эпиграф мультимедиа проекторҙа күрһәтелә).

-Уҡыусылар, экранға иғтибар итегеҙ, был ниндәй һүрәт(эмблема)? Ул нимәне аңлата?

Беҙ бөгөнгө дәрестә хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, хәүефләндергән иҡтисади, экологик мәсьәләләрҙе асыҡларбыҙ; тыуған тәбиғәттең матурлығын, байлығын һаҡлау кәрәклеге хаҡында әңгәмәләшербеҙ. -Уҡыусылар, быныңөсөн экология, экологик проблема төшөнсәһен асыҡлап үтәйек. Һеҙ уны нисек аңлайһығыҙ?

-Тәбиғәтте һаҡлау, тирә-йүнде бысратмау, таҙартыу. - Ә хәҙер фәнгә күҙ һалайыҡ. (мм.п-ҙан ҡарау һәм уҡыу) “Башҡорт теленең һүҙлеге” түбәндәгесә аңлатма бирә: “Биологияның тереклек һәм үҫемлектәр менән тирә-яҡ мөхит араһындағы бәйләнеште өйрәнә торған бүлеге”. Экологияның тамыры “эко”- “өй” һүҙенән алынғанын да онотмайыҡ. Артабан уның мәғәнәһе кеше - йәмғиәт-тәбиғәт төшөнсәләренең үҙ-ара мөнәсәбәте менән киңәйә барған. Р.Бикбаевтың поэмаһы ана шуларҙы үҙ эсенә ала ла инде. Иленә ҡарап-халҡы, йәмғиәтенә ҡарап тәбиғәте сағылдырыла. -Ни өсөн экологик проблема бөгөнгө көндә лә актуаль булып тора? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

- Сөнки әле лә урмандар киҫелә, һыуҙар бысрана, йылғалар ҡорой, шунлыҡтан йәнлектәр юҡҡа сыға, ҡоштар ҡырыла, үҫемлектәр юғала, төрлө ауырыуҙар тарала.(Экологик темаға төшөрөлгән фотоһүрәттәрҙе ҡарау. Цитаталарҙы уҡыу.) Был беҙҙең тормош девизыбыҙ булһын. Ошо һүҙҙәрҙе дәфтәребеҙгә теркәп ҡуяйыҡ. (Эпиграфты уҡыу.)

- Эйе, кеше лә, тәбиғәт тә һыуһыҙ йәшәй алмай. Шуға күрә һыуҙы ҡәҙерләргә, һаҡларға кәрәк. Башҡортостанда йылғалар бик күп: Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим, Һаҡмар, Әй, Яйыҡ, Нөгөш, Ашҡаҙар, Һеләүек һ.б. Ә күлдәре күҙҙәрҙе ҡамаштыра, бик тә матур. Шулай уҡ Башҡортостаныбыҙ тауҙарға, урмандарға ла бай.

Илдең иҡтисади үҫешен булдырыу төрлө производство объекттарын төҙөүгә бәйләнгән. Әммә беҙҙең илдә завод-фабрикалар төҙөү беренсе планға ҡуйылды, ә тәбиғәтте һәм кеше һаулығын һаҡлау бөтөнләй онотолдо тип әйтерлек, һөҙөмтәлә тәбиғәт байлығы юҡҡа сыға барҙы: тауҙар емерелде, урмандар ҡырылды, йылғалар ағыуланды, һауа һөрөмләнде, кешеләр һаулығына ҙур зыян килде.

Бөтә илде химия баҫып алды. Башҡортостанда ҙур-ҙур ҡалалар үҫеп сыҡты. Әммә шул ҡалаларҙа тупланған нефть- химия гиганттары үҙҙәренең зарарлы матдаләре менән халыҡты әле лә тонсоҡтороуын дауам итә. Был ҙур фажиғә. Ана шулар хаҡында әсенеп яҙа шағир үҙенең “Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ” поэмаһында.Бөгөнгө көн проблемаһын күтәреп сыға.

-Хәҙер Ағиҙел йылғаһын картанан ҡарап үтәйек.

(Артем мультимедиа проекторҙағы картанан йылғаны күрһәтә, географик белешмә бирә. Картала Ағиҙел йылғаһы икенсе төҫ менән бирелә). -Сәфәребеҙгә юлланыр алдынан Ағиҙелдең үткәненә бағайыҡ. Йылғаның матурлығы, һыуының таҙалығы, балыҡтарға, йәнлектәргә бай булыуы борон-борондан йырҙарҙа, легендаларҙа һәм ҡобайырҙарҙа данланған. Беҙҙең яратҡан шағирҙарыбыҙ ҙа Ағиҙелгә арнап бик күп әҫәрҙәр ижад итте. Шуларҙың береһен тыңлап үтәйек.

Гүзәл ҡурай моңо аҫтында яттан поэманан өҙөк һөйләй. Был ваҡытта мм.п. Урал һәм Фадеевтың “Йәмле Ағиҙел буйҙары” картинаһы күрһәтелә, аҫтына Р.Ниғмәти поэмаһынан өҙөк яҙыла:

Ағиҙелкәй!
Һинең буйҙарыңда
Нисә быуын ғүмер кисергән,
Үҙең кеүек тәрән,
үҙеңдәй киң
Күпме йыр бар һинең исемгә!

-Был поэманың авторы кем? (мм.п. Р.Ниғмәтигә арналған презентация күрһәтелә).

-Был поэманы нисәнсе йылда яҙған?

-Был ваҡытта халыҡтың Ағиҙелгә мөнәсәбәте нисек, һыуы ниндәй булған? -Тимәк, был ваҡытта Ағиҙел көмөштәй саф һыулы, кешенең азат, ирекле тормошҡа сығыуына, илдәге үҙгәрештәргә, үҫештәргә ҡыуаныусы булып күҙ алдына баҫа. Ул һәр саҡ кешегә ярҙам итеүсе лә.

-Әйҙәгеҙ, хәҙер Р.Бикбаев менән оҙон юлға, сәфәргә сығайыҡ. (мм.п. Р.Бикбаевҡа арналған презентация күрһәтелә.

-“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ” поэмаһы нисәнсе йылдарҙа яҙыла?(1987-1988 йылдарҙа)

- Был ике поэма араһында ярты быуат ғүмер ята. Заманалар үтә тора, Ағиҙел ошо сафлығы менән беҙҙең көндәргә килеп етә алғанмы? Ошо һорауға яуапты поэманан эҙләйек. Шағир менән сәфәребеҙҙе башлап ебәрәйек.

- Регина ҡурай моңо аҫтында поэманан өҙөктө яттан һөйләй. (Уралҡайым! Үҙәнеңә төшәм, Аҡ сәфәргә әйҙә, Ағиҙел. - тигән урынға тиклем).

Ә был ваҡытта мм.п.: Ирәмәл картинаһы күрһәтелә, аҫтына поэманан өҙөк яҙыла:

Был төйәктә һәр бер тау ҡуйыны
Ил һуғарыр изге ер мәллә?

Бар яҡтарға һуҙылып һыуҙар аға,
Ҡайҙа ҡараһам да, Ирәмәл.

- Шулай тип әйтә шағир Ирәмәлдән иртәгәгә баҡҡанда, Иҙел башынан илен байҡағанда. Шулай итеп, Иҙел башынан, Ирәмәл итәктәренән кескәй шишмәләрҙән һыу алған, йырғанаҡтан йылғаға әйләнгән Ағиҙел буйлап оҙон сәфәр башланып китә.

Бергә оҙон юлға сыҡҡас, сәфәр башлығы шағир һүҙҙәрен, күҙәтеүҙәрен тыңлап, Ағиҙел буйы йәмдәренә һәм байлыҡтарына бергәләп ҡыуанырбыҙ, тәбиғәтен, урман-туғайҙарын самаһыҙ тәләф итеп, ҡырып-емереп бөткән яҡтарын күреп хәүефләнербеҙ, йөрәктәребеҙ әрнер әле. Сәфәр башы: Ағиҙел менән шағир сәфәргә сығатип мм.п-ға яҙыла. -Шағир ҡыуанып, шатланып килгәндә нимәгә осрай?

Белорет тураһындағы урындарҙы табып уҡыйҙар. 1-се туҡталыш: Белорет ҡалаһы (һәр туҡталыш мм.п. күһәтелә бара). Ағыуланған завод быуаһында сәсәй-сәсәй быуылалар, үткенселәр балыҡ шартлата, бала-саға ҡырсын таш менән уйнай.

-Һәм юлын дауам итеп ҡайһы районға барып сыға, был районында Ағиҙел ниндәй афәттәргә шаһит була? Бөрйән районыны, “Шүлгән” ҡурсаулығы, ҡарағай урманы күрһәтелә. Аҫтына шиғыр юлдары яҙыла:

Ҡарағайҙар,
Солоҡ ҡына тотор ҡарағайҙар!
Улар менән бергә ерегеп үҫкән
Халыҡтың да
Ай-вайына ҡарамайҙар,
Ҡарағайҙы ҡыра ағайҙар,
Әйтерһең дә ҡырағайҙар!

-Шағирҙың урманға мөрәжәғәтенә иғтибар итәйек. (Урман!... тип башланған урынды табып уҡыйҙар). 2-се туҡталыш:Бөрйән районы. Ҡарағай урманы юҡҡа сыға, солоҡсолоҡ онотолған, һал ағыҙыр өсөн йылғаларҙы төҙәйтәләр, шаршыларҙы киптерәләр.

-Был вәхшилекте кем ойоштора һуң? Артабанғы сәфәребеҙҙең киләһе нөктәһе ҡайҙа булыр тип уйлайһығыҙ? Шүлгән мәмерйәһе күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Шүлгән! Иң боронғо храм булып,
Нурың менән индең йөрәккә.
Эрмитаждар, Луврҙар бит тыуған
Һинең ташыңдағы һүрәттән.

3-сө туҡталыш: Шүлгән мәмерйәһе.

Шүлгән һүрәттәре емерелгән, сувенир тип, ватып алынып бөткән. -Шүлгән мәмерйәһенә башҡорт бөгөн үҙе хужа түгел . Мәмерйәбеҙ Мәскәү ҡулында.

-Был туҡталышында автор ниндәй мөһим проблема тураһында фекер йөрөтә, кемдәр хаҡында уйлана?

М.Аҡмулла, Ш.Бабич, Д.Юлтый портреттары күрһәтелә. Аҫтына шиғыр юлдары яҙыла:

Аҡмулланың аҡ йөҙөнә
Ҡара яғылды,
Бер сабылған башы Бабичтың
Яңынан сабылды,
Таңға юл ярыусы Юлтыйҙар
Төрмәгә ябылды.
Бөркөттәрҙең ҡанатына
Герҙәр аҫылды.
Йәннәт булыр ил ҡуйынына
Гүрҙәр асылды…
Меңдәр аҫылды, меңдәр атылды…

-Сәйәхәт эстафетаһын Шүлгәндән һуң Иштуған ҡабул итә. Лирик геройҙы айырыуса ниндәй проблема борсой?

4-се туҡталыш: Иштуған һыуһаҡлағысы. Ауылдар, зыяраттар һыу аҫтында ҡала. Тарих онотола.

-50 йыл элек беҙҙең Республикала һыуһаҡлағыс төҙөлә. Йәгеҙ әле иҫкә төшөрөп китәйек. (Павловка һыуһаҡлағысы). Әлбиттә, беҙҙең райондағы ауылдар күсерелмәй. Ә бына Ҡариҙел районында бик күп ауылдар юҡҡа сыға, тарихын юғалта. Һәм Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөүҙә лә ошо хәлдәр ҡабатлана түгелме? Ошо урындарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ.

-Шағир үҙенең юлын дауам итә һәм сәфәренең артабанғы туҡталышы ҡайҙа була?(Шаһтау)

Тоpатау күрһәтелә,өҙөк яҙыла:
Елкендерә тағы бейеклектәр,
Күңелемдә тағы тыуа таң.
Иркен түбәң түшәлеп тә ятҡан
Хәтфә үлән икән, Тоpатау.
Йөрәктау күрһәтелә, өҙөк яҙыла:
Тоpатауҙар ғына
Иҫләй күккә ашҡан саҡтарын.
Тағы шартлау.
Ҡора заман, Шаһтау,
Тамырыңа хатта ауҙарын.
Был йылдарҙың ҡоластары хәтәр:
Ниндәй даръяларҙы һемереп бөттө,
Ниндәй ҡаяларҙы ауҙарҙы,
Кимереп бөттө ниндәй тауҙарҙы!

-Ерҙә кешеләрҙең китеүе - ул тәбиғәт һәм тормош законы, ә тауҙарҙың юғалыуы сәбәбе нимәлә икән?

5-се туҡталыш: (Стәрлетамаҡ шихандары тураһында белгәндәрен һорау, өҫтәмә белешмә биреү).

Шаһтауҙың нигеҙе емерелә, тау шиңә.

- Ошоға оҡшаш хәл-ваҡиғалар беҙҙең яҡта ла күҙәтеләме?

-Эйе, Кәрәкә тауы аҫыл таштарға бай булмаһа ла, унан юл төҙөү өсөн күпләп ҡом алына. Был иһә шишмә һыуҙарының юлдарын быуа.

Йәнәлде йылғаһының һайыуығыуына килтерә (мм.п. Кәрәкә тауындағы ҡом соҡоро фотоһүрәте күрһәтелә).

-Юлыбыҙҙы ары дауам итәйек. Шағир менән Торатау түбәһенә менеп ҡарайыҡ. Һәм ҡайҙан килә был ағыулы һөрөмдөң болот-томандары? Стәрлетамаҡҡалаһындағы завод мөрйәләре күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Хәүеф-һорауҙарҙың өнөн тыҡтыҡ:
-Бындай ҡеүәт Европала юҡтыр!
Барыһы һәйбәт! Һис бер бәлә юҡ!
Стәрленән төтөн, йылға булып,
Туғайыңа һылаша, һеләүек!
Баллы йүкәләргә ағыу һибеп,
Алыҫ армыттарға ҡағыла.
Сал Уралдың сабыр йөҙкәйенә
Ағыу яуа, һөрөм яғыла.

6-сы туҡталыш: Стәрле ҡалаһы. Һөрөм аша ҡала күренмәй, ә алыҫта үле даръя ялтырап ята. Күк һөрөмлө, һыуы ыулы. Стәрленән ағыу яуа, һөрөм яғыла.

- Был сәфәрҙә нисәмә ҡат баҫты
Күҙ алдыма Рәшит Ниғмәти.
Урал менән Ағиҙелде данлап,
Бындай һүҙҙе тағы кем әйтер?

-Был юлдарҙы Р.Бикбаевтың үҙ әҫәрендә иҫкә төшөрөүе лә һис осраҡлы түгел. Ул өлкән шағир тасуирлаған Ағиҙел, уның заманы менән хәҙер һүрәтләр Ағиҙелде, бөгөнгө заманды сағыштырып ҡарай. Һәм ниндәй үҙгәрештәр күрә?

-Эйе, оло халыҡ шағиры Ағиҙел тураһында ғорурланып йырлаһа, ә Р.Бикбаев бөгөн уның фажиғәле яҙмышын күреп әсенә.

-Ағиҙел, Шаһтау, Стәрле яҙмыштарының ошо хәлгә төшөүендә кем ғәйепле? Был һорауға яуапты беҙ әҫәрҙең алдағы бүлектәренән табырбыҙ.

-Ул-беҙҙең ғәмһеҙлек (ошо урынды әҫәрҙән табып уҡыйҙар).

Әлбиттә, тәбиғәт, автор һымаҡ, ҡысҡырып яуап бирә алмай. Әммә уның яуабын һәм хөкөмөн һәр кем тоя: көнкүрештә, эштә, һаулыҡтың торошонда. Тәбиғәт законын боҙған кешене ул бер ваҡытта ла ғәфү итмәй.

-Лирик герой сәфәре Өфөгә килеп еткән. Ул, Ағиҙел тулҡынына ятып, Өфөнө күҙәтә. Әйҙәгеҙ беҙҙә Ағиҙел төбөнә иғтибар менән ҡарайыҡ, нимәләр күрербеҙ икән?

Өфөнөң Салауат Юлаев һәйкәле янындағы күренеше, Ағиҙел йылғаһы аша һалынған күпер күрһәтелә, өҙөк яҙыла:

Өфөм, Өфөм!
Һәр биҙәгеңде
Ниндәй оҫта ҡулдар уйған ырып?
Ағиҙелең, Ҡариҙелең, Димең-
Һыуһылыуҡай кеүек һылыу һыу.
Өфөм, Өфөм! Иҫ китерлек кистә
Йүкәләрҙең балы һығылһын.

7-се туҡталыш: Өфө ҡалаһы.

Ҡара мазут, бысраҡ, ағыулы ләм йылғаның төбөн ҡаплап ята. Ҡариҙел һәм Дим кеүек йылғалар ҙа саф көйө килеп етә алмайҙар.

- Элекке көмөштәй саф йылғалар Ҡариҙел , Дим һәм Ағиҙелдең һөйләшеүенә лә ҡолаҡ һалайыҡ әле.

-Бына сәйәхәтебеҙҙең һуңғы туҡталышында килеп еттек. Ағиҙел тамағында ниндәй ҙур төҙөлөш тураһында һүҙ бара һәм шағиргә был ниңә кире тәьҫир яһай.

8-се туҡталыш: Ағиҙел ҡалаһы.

Тамырлана Башҡрт АЭС-ы. Был АЭС Чернобелдән ҡеүәтлерәк буласаҡ. (Силәбе өлкәһендәге Ҡыштым аварияһын һөйләп үтеү).

--Сәфәребеҙгә сығыр алдынан ҡуйған һорауыбыҙға кире әйләнеп ҡайтайыҡ. Ярты быуат элек булған сафлығы беҙҙең көндәргә килеп етә алғанмы?

9.-Бөгөнгө көндә тәбиғәтте һаҡлау буйынса ниҙәр эшләнә һуң?

--заводтарҙа зарарлы цехтар ябыла
--һыуҙы һәм һауаны таҙартҡыс ҡоролмалар төҙөлә
--экология закондарын боҙоусыларға штраф һалына.
--Ә беҙ үҙебеҙ ниҙәр эшләй алабыҙ?
--Шишмә, инештәрҙе, кескәй йылғаларҙы таҙарта алабыҙ.
--Экологик субботниктарҙа ҡатнаша алабыҙ һ.б.

10.-Поэманың төрөн билдәләйек. -Лиро-эпик поэма.

-Ә бына әҙәбиәтебеҙ аҡһаҡалы Мостай Кәрим был поэманы лирик-трагик поэма тип атай. Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

-Сөнки был поэмала Ағиҙел йылғаһының фажиғәле яҙмышы көслө трагизм менән һуғарылған.

11. Р.Бикбаев поэмаһында халыҡ ижады алымдарын уңышлы файҙалана, уларҙы шиғыр туҡымаһына тәбиғи үреп ебәрә. Поэманан ошо алымды табып уҡып күрһәтегеҙ.-Ҡобайыр алымы.

12. Р.Бикбаевтың поэмаһы һүрәтләү сараларына ла бик бай. Эпитет, метафора, метонимия, йәнләндереү, сағыштырыу, фразиологик берәмектәрҙе табып уҡып күрһәтәләр.

III. Йомғаҡлау.

-Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнә-илдең көнө. Ағиҙелдең йөҙө-ил йөҙө” үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй, ил-йорттарың да шундай. Шуның өсөн тыуған тәбиғәтебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны һаҡлайыҡ. Ул беҙҙе туйындырыусы ла, кейендереүсе лә. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә ниндәй хәлдә бүләк итеп ҡалдырған, беҙ уны шул килеш килер быуындарға тапшырырға тейешбеҙ.

IV.Өйгә эш: Тыуған еребеҙҙе, эсер һыуҙарыбыҙҙы һаҡлауға өндәгән мөрәжәғәт йә шиғыр яҙып килергә.

V. Баһалау.

ҒҮМЕР ЙОМҒАҒЫ ТӨЙӨНДӘРЕ

Распаева Дилбәр Валерий ҡыҙы,
Мишкә районы Ирсай ауылы
А.Искәндәров исемендәге дөйөм урта белем биреү мәктәбе

Маҡсат. Шағирҙың тормош юлы һәм ижады буйынса белемдәрҙе системаға килтереү, байытыу; уҡыусыларҙың үҙ аллы эшмәкәрлеген, тасуири һөйләү һәм фекер йөрөтөү һәләтен үҫтереү; шағирҙың ижадына ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, китаптарының күргәҙмәһе, интерактив тақта. Тақтаға эпиграф яҙылған.

«Ғүмер - бер йомғаҡ , нисек һүтһәң, шунса үтә.»

Дәрес барышы.

Ойоштороу. (Эпиграф уҡыла, уҡыусылар менән берлектә дәрестең маҡсаты билдәләнә)

Уҡытыусының инеш һүҙе. Быйыл Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев премияһы лауреаты, филология фәндәре докторы Рауил Төхфәт улы Бикбаев үө йәшен билдәләй. Бөгөнгө дәрес уның тормош юлын өйрәнеүгә арнала. Уҡыусылар шағир биографияһының дәреслектә бирелмәгән фактгары менән таныштырырҙар.

(Уҡыусылар үҙҙәренең ижады эштәрен яҡлап сығыш яһайҙар, презентациялар күрһәтелә).

Беренсе уҡыусы. Ҡайһы йылға һыуын һыулайһың.

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған.

Үрге Ҡунаҡбай ауылы ҡыпсаҡ ырыуы нигеҙләгән боронғо ауылдарҙан иҫәпләнә.Тарихтан билдәле булыуынса, ҡыпсаҡтар – ғәйрәтле, яусан, даусан тоҡом. Ҡырыҫ дала тәбиғәте, һалҡын ҡыш шарттары уларҙы түҙем, тилбер итеп сыныҡтырған. Ирекле, ватансыл, ғорур тәбиғәтле итеп тәрбиәләгән.

Рауил Бикбаев бала сағының бик күңелле, ғүмергә онотолмаҫлыҡ алсаҡ, хәтирәле мәлдәрен, дала, йылға буйҙары күркен ғүмере буйы күңел түрендә һаҡлай. Ауылдарына терәлеп аҡҡан Соран йылғаһының яҙғы, йәйге, көҙгө йәмдәре генә ни тора.(Слайдтар). Яҙын ҡотороп боҙҙар аҡҡаны, Сорандың ярҙарынан ташып сыҡҡаны, йәйен кинәнеп һыу инеүҙәре, әмәлен табып балыҡ тотоуҙары, яр буйындағы балалыҡ уйындары.Ә туғайлыҡтарҙың төрлө сәскәләргә күмелгән саҡтары һуң. Йыуа, ҡуҙғалаҡтар тәмен татыу, бешкән еләк, бөрлөгән емештәрен йыйыу, әлмороно, ҡарағаты, уңған саҡтар... Ә дала ерҙәре, ҡылғандары елдәр иҫкәндә диңгеҙҙәй тулҡынланып ятыуҙары. Яҙғы ҡош һайрауы, бөркөттәр саңҡыуы. Бесәнгә төшкән мәлдәр, ураҡ саҡтары. Утауға йөрөүҙәр, бесән осорҙары, баҫыу эштәре – үҙҙәре бер эш, күңел күрке. Былар һәммәһе шағир ижадында үҙенсәлекле сағылыш табыр, поэтикаһына яңы биҙәктәр өҫтәр.

Кешенең рухы, холоҡ- ҡылығы, бар булмышы ата-бабалары, әсәй-ҡартәсәйҙәре нәҫел- ырыуына, тәрбиәһенә ҡарай формалаша, сыныға.

Кемдәр булған Рауил Бикбаевтың ата – бабалары? Йәшәгән мөхите, тәрбиәләре ниндәйерәк? Бер анкетаға биргән яуаптарында Рауил Бикбаев шуларҙы иҫләй һәм нарыҡлай: “ Ҡартатайым менән өләсәйем мин бәләкәй саҡта вафат булған, шуға уларҙы иҫләмәйем. Хәлле, тамырлы булғандар. Ике яҡлы ҙур йортта ике улдары ғаиләләре менән йәшәне. Ҡартатайымдар менән беҙ торған яҡ эре бүрәнәләрҙе уртаға ярып һалынғайны. Киң ихата эре-эре таштарҙан өйөлгән ҡойма менән уратып алынғайны. Ишек алдындағы ҙур таш һарай, таш келәт хәтерҙә ҡалған. Ҡартатайымдың йылҡылары Соранға һыу эсергә төшкәндә көтөүҙең башы йылғаға еткән саҡта осо әле һарайҙан сығып бөтмәгән, тип һөйләгәндәрен ишеткәнем булды. Аҙаҡ ҡартатайым малдарын ҡыҫҡартып, күберәк иген сәскән, хатта заманаһы өсөн яңы техника ла алған. Үҙе мәсеттә мәҙин булып йөрөһә лә, донъялыҡты ҡайғыртҡан, тормош ағышын һиҙгән.”

Рауил Бикбаевтың шәжәрә ете быуыны шундай: Аҫылгәрәй – Бикбай – Ҡотлоәхмәт – Хәсән – Мөхәмәтша – Шәрәфетдин – Төхфәтулла – Рауил...(слайд)

Был тормоштоң ҡапыл йәме бөтһә,
Күңелдәрем китһә һыуынып,
Яныҫ торған ете егет булып
Алға баҫа ете быуыным.
Йөҙҙәренәәле ҡояш ҡарай,
Әле ҡарлы әсе ел бәрә.
Төхфәт –

Шәрәфи-
Мөхәмәтша-
Хәсән-
Ҡотлоәхмәт-
Бикбай-
Аҫылгәрәй.

Аҫылгәрәйҙең ике улы Бикбай менән Табылдынан Бикбаевтар менән Табылдиндар фамилияһы таралып киткән.Рауилдың өләсәһе Мәүлитбикә – Табылдиндар ҡыҙы. Тамыр тамырға тарта тиҙәр. Рауилдың өләсәһе сәсән телле зат булған. Ауылдағы төрлө хәлдәр, ҡылымһыр ҡылыҡтар тураһында төртмә таҡмаҡтар сығарырға яратҡан, улар халыҡ теленә күскән. Ҡайғылы хәлдәр хаҡында бәйеттәр көйләгән. Һүрәт төшөрөргә лә әүәҫ булған.

Шағир үҙе һөйләүенсә, ул ысынлап та ижади мөхит эсендә, телгә оҫта, әкиәткә, йырға, таҡмаҡ әйтергә яратҡан ололар араһында үҫә, уларҙың һөйләгәндәрен, көйләгәндәрен йотлоғоп тыңлап, рухын байыта.

Рауил Бикбаев үҙе бына нимәләр һөйләгән: “Ауылыбыҙҙа Нәзифә Байтимерова тигән һуҡыр әбей торғаны менән әкиәт хазинаһы ине. Уны әкиәт һөйләтер өсөн өйҙән өйгә ҡундырып йөрөтөрҙәр ине. Уны ҡундырыр көндө балалар байрам кеүек көтөп ала торғайны. Ҡайһы бер әкиәттәр бер көндә генә бөтмәй, дауамы икенсе көн һөйләнелә ине. Беҙҙең бала саҡтың сериалдары.”

Икенсе уҡыусы. ” Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре”.

Шағирлыҡтың тәүге орлоҡтары, әлбиттә, ғаиләлә үк һалынғандыр. Бигерәк тә әсәй кешенең роле ҙур. “Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зиһенемә һеңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне – әсәйем,- ти Рауил Бикбаев. (Слайдтар).

Әсәһенең булмышы һәм яҙмышы – үҙе бер ғибрәтле һабаҡ. Буласаҡ тарихсы Сәғит Мерәҫевтың һеңлеһе тейеш әсәһе Рәкиә Латип ҡыҙы Вахитова етеш тормошло, дини рухлы ғаиләлә тәрбиәләнгән. Уны үтә йәшләй хәлле кешегә кейәүгә биргәндәр. Ләкин 1930 йылда бик күп уңған крәҫтиәндәрҙе кулак тип йорттарын, мөлкәттәрен тартып алып, илдән һөрөү башланғас, ун һигеҙ йәшлек Рәкиә лә ҡайны – ҡәйнәләре, ире менән – тотош ғаилә Архангель губернаһындағы Котлас лагерҙарында, нисәмә йылдар буйы күпме нужалар күрә. Ҡараңғы тайга төпкөлдәрендә, мәңге туң тундра наҙлыҡтарында иҫ киткес һыуыҡ, тубыҡтан батҡаҡ эсендә аслы-туҡлы торф сығара, ҙур-ҙур төньяҡ йылғаларында һал ағыҙа, аяҡ- ҡулдары һыҙлауға әйләнә. Шунса ыҙа-яфаларға түҙә алмайынса, нинһайәт, 1936 йылда был мәхшәрҙән ҡасып ҡотолмаҡ була. Тимер юлына етеп, тауар вагондарының береһенә йәшеренеп, станцияларҙа бер составтан икенсеһенә күсә-күсә, тыуған ауылына ҡайтып йығыла. Уны НКВД тынғы бирмәй эҙәрләй башлай. Рауилдың буласаҡ атаһы Төхфәтулла Бикбаев армиянан ҡайтып, Рәкиәгә өйләнгәс кенә, кире һөрөлөүҙән ҡотолоп ҡала әсәһе.

Бикбаевтар матур ғаилә ҡоралар. Биш бала үҫтерәләр. 1938 йылдың декабрь айында донъяға килгән Рауил шул ишле ғаиләлә, етеш тормош шарттарында иркен үҫә.

Донъялар бер көйгә генә аҡмай шул. Оло һуғыш һәр ауылға, һәр өйгә тиерлек ҡара ҡағыҙ алып килә. Йәтимдәр арта. Рауил Бикбаевтарҙың өйөнә лә әжәл килә – 1945 йылдың майында атаһы үлеп ҡала. Биш бала менән утыҙ өс йәшлек Рәкиә Бикбаева атаһы Латип Вахитовтың кәңәше һәм ярҙамы буйынса Ҡунаҡбай ауылындағы ҡуш өйҙөң артыһын үҙенең тыуған ауылы Ғабдрафиҡҡа күсереп һалдыртырға мәжбүр була.

Тормош ауыр булһа ла, Рәкиә инәй уҡырға тырыш, зиһенле улын уҡытып кеше итергә тырыша. Рауил Бикбаев бик күп әҫәрҙәрен әсәһенә арнай.

Әсәләрҙең өмөт – ҡараштарын,
Әсәләрҙең әйткән һүҙҙәрен
Кешеләр һуң бөтәләрме аңлап,
Бала үҫтермәйсә үҙҙәре...
Бер йылмайып, бер моңайып ҡарап,
Йылдар менән донъям үҙгәрер.
Йылдар үткән һайын ҡәҙерлерәк
Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре.
Өсөнсө уҡыусы. “ Ҡайҙа белем алырға?”

Рауилға, һигеҙ йәшлек балаға, тыуған ауылын, уйнаған тиҫтерҙәрен ташлап икенсе ауылға күсеүҙәре еңел булмағандыр. Әммә бала күңеле – дала. Ғабдрафиҡҡа ла яйлап күнегә малай. Өҫтәүенә, башланғыс мәктәпте бөтөүенә ауылда ете йыллыҡ мәктәп асыла. Яңы мәктәптә Рауил тырышып уҡый, йәшереберәк шифырҙар ҙа яҙа башлай. 1953 йылда етенсе класты бөтөп,”Алда ҡайҙа белем алырға?” тигән һорау тыуа. Уйлап – уйлап, үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрым ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилищеһына уҡырға инә. Педучилищелар ул ваҡытта – бик престижлы уҡыу йорттары, сөнки уҡытыусыларҙың абруйы ҙур булған. “Дүрт йылым китап уҡып үтте, - тип хәтерләй Рауил Бикбаев.- Аҡбулаҡта тамаҡ яғы бик таҡыр булһа ла, китап уҡып кинәндек. Асығыуҙы баҫыр сара тапмағас, ял көндәрендә йыш ҡына ваҡытты китап уҡып үткәрә инек.” Педучилищела бигерәк тә рус телен һәм әҙәбиәтен үҙләштереүгә бар күңелен һала.

1957 йылда педучилищены тамамлап, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында уҡый башлай. Рауил Бикбаев – алсаҡ һәм тиҙ аралашыусан егет. Курсташтары менән тиҙ уртаҡ тел таба, күптәре менән дуҫ-иш булып китә. “Ең һыҙғанып” шифырҙар яҙа башлай. Ошонда ул үҙенең мөхәббәтен таба.(Слайдтар)” Тәүге мөхәббәтем ул минең ҡатыным- Фәриҙә апайығыҙ. Уның менән университетҡа уҡырға инергә имтихандарға әҙерләнгәндә таныштыҡ. Сит ил кешеләре кеүек, ғаилә ҡороу өсөн бөтә шарттар ҙа булырға тейеш, тип торманыҡ, дүртенсе курсҡа еткәс, өйләнешеп ҡуйҙыҡ. Дөйөм ятаҡта стипендияға йәшәп, бергә тормош башланыҡ.” -ти шағир.

Үҙ хәлемде үҙем белмәй,
Күҙҙәреңә баҡтым.
Уйҙарымдың бөтәһен дә
Күҙҙәреңдә таптым.
Айырмаһын беҙҙе яҙмыш

Хатта бик-бик аҙға.
Күҙһеҙ ҡалған кеүек булам,
Күҙҙәреңдән яҙһам.

Уҡытыусы. Сығыштарығыҙөсөн рәхмәт.

Йомғаҡлау. Шағирҙыңғүмер йомғағы шулай әкрен генәһүтелә бара. Ул михнәт- ауырлыҡты ла, рәхәтте лә күргән.Шуға ла Рауил Бикбаевтың шиғриәте лә күп ҡырлы, төрлө йүнәлешле, тәрән мәғәнәле. Рауил Бикбаев - нескә күңелле шағир-лирик та, киң эрудициялы шағир-философ та, ялҡынлы оран һүҙе менән йөрәктәрҙе елкендерер, халыҡты үҙ артынан әйҙәр шағир-трибун да, новатор-әҙип тә.

Өйгә эш. Дәреслектәге 136-140-сы биттәрҙе уҡырға.

Ижады тураһында сығыштар әҙерләргә.

“Ваҡыт менән һөйләшеү” шиғырынан өҙөк ятларға.

«БАШҠОРТОСТАН МИНЕҢ ТОРМОШОМ!»

Аптикаева Зилә Тәлғәт ҡыҙы,
Мишкә районы Иштыбай мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙы Башҡортостандың халыҡ шағиры һәм ғалимы Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу, интернет селтәре ярҙамында белемдәрҙе тәрәнәйтеү, Башҡортостан тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү.
Йыһазландырыу: компьютер, китаптар күргәҙмәһе, презентация, китап.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу.

II. Дәрестең темаһын, маҡсатын әйтеү.

- Бөгөнгө дәрестә беҙ Рауил Төхвәт улы Бикбаев тураһында һөйләшәсәкбеҙ, Р.Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” исемле шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

III. Өй эшен тикшереү.

Бер нисә уҡыусы Башҡортостан тураһында үҙҙәре һайлаған шиғырҙы яттан һөйләй. (Башҡортостан тураһында слайд 1.)

IV. Яңы тема өҫтөндә эш.

1. Яҙыусының тормош юлын өйрәнеү.

(слайд 2- презентация)

Уҡытыусы: Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафик ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. 1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башкортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелде. Ул — Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты.

1966 йылдан Яҙыусылар союзы ағзаһы.

2. Логик мәғәнә моделен төҙөү. (Уҡыусылар шағирҙың тормошо, әҫәрҙәре, ижадының тематикаһы тураһында бирелгән һорауҙар ярҙамында логик мәғәнә моделен эшләй)

V.Шиғыр өҫтөндә эш.

1) һүҙлек эше: офоҡ-горизонт, тараф-сторона, туғай-луг, һырт-хребет, улан-дитя, керле уй-плохая мысль.

2) уҡыусыларҙың яңы һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырыуын тикшереп, бер-береһенә баһа ҡуйыуы;

3) электрон китаптан шиғырҙы тыңлау. (Башҡорт әҙәбиәте: 5- 9 – сы синыфтар өсөн әҙәбиәт буйынса электрон ҡулланма) - Шиғырға анализ яһау

- Лирик тонын билдәләү
- Шиғырҙың эске структураһы
- Тел саралары
- Тәрбиәүи маҡсатты хәл итеү

4) уҡыусыларҙың тасуири уҡыуы.

5) шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау.

V I. Рефлексия. Р.Бикбаевтың шиғырҙарында ниндәй мәсьәләләр күтәрелә? (һәр төркөм үҙе уҡыған бүлек буйынса һығымта сығара.)

V II. Тест.

1. Рауил Бикбаевтың тыуған йылы

а) 1918
б) 1838
в) 1938
2. Рауил Бикбаевтың тыуған ауылы
а) Иштыбай
б) Ҡунаҡбай
в) Үтәбай
3. Башҡорт дәүләт университетын нисәнсе йылда тамамлай?
а) 1962йыл
б) 1956 йыл
в) 1965 йыл
4. 1989 йылда ниндәй премия менән бүләкләнә
а) Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы
б) Башҡортостандың халыҡ шағиры
5. Талпынғанда йырым
Ысыҡ йырып,
Ҡаршыларға сығам ал таңды.
Йырҙарыма ысыҡ сафлыҡ ҡойһон,
Йүкәләрҙән һығылып бал тамһын...
а) Дауыл
б) Барып етһен ине хаттарым
в) Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда
Эштәрҙе тикшереү һәм баһалау.
V III. Йомғаҡлау.

Уҡытыусының йомғаҡлау һүҙе: Оло талант эйәһе, Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премияларға лайыҡ булған бөйөк шәхескә быйыл 75 йәш тула. Уның шиғырҙарында Башҡортостандың ғорурлығы, байлығы һүрәтләнә. Ул бөтә кешене лә туған илде һаҡларға, һоҡланырға өйрәтә. Кеше үҙ фекерҙәре, эштәре, ҡылыҡтары менән был донъяны яҡшыртырға, биҙәргә һәм үҙенән һуң яҡты иҫтәлек, онотолмаҫ эштәр ҡалдырырға тейеш икәнен аңлата. Уның уйҙары һәр беребеҙҙең тормош маҡсатына әүерелһен ине.

IX. Өйгә эш. “Башҡортостан изге төйәгем...” темаһына инша яҙырға.

“ТЕЛЕ ЮҠТЫҢ ИЛЕ ЮҠ, ИЛЕ ЮҠТЫҢ КӨНӨ ЮҠ”

Ишҡыуатова Ирина Бахтияр ҡыҙы,
Мишкә районы Баймырҙа урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1) Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән танышыуҙы дауам итергә; 2) шиғырҙарын тыңлау һәм уҡыу; 3) үҙ телендә һөйләшә белергә һәм башҡа телде хөрмәт итергә кәрәклекте аңлатыу.

Йыһазландырыу: мультимедиа проекторы, Р.Б Бикбаевтың фотоһы, китаптарынан күргәҙмә.

Уҡытыусы.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тыуыуына-75 йыл. Бөгөн беҙ Рауил Бикбаевтың ижадына һәм тормош юлына арналған класс сәғәтен үткәрәбеҙ.

Уҡытыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев сығышы менән Ырымбур яҡтарынан. Ул заман пульсын тоя белеүсе, халыҡты борсоған социаль, иҡтисади һәм мораль- этик мәсьәләрҙе ваҡытында күтәрә белеүсе олпат шағир.

1-се уҡыусы. Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. 1953йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай.

2-се уҡыусы. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый.

3- сө уҡыусы. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә.

Уҡытыусы. Рауил Бикбаевтың ижад эше фәнни хеҙмәт менән тығыҙ үрелеп барҙы. Ул шул уҡ ваҡытта республикабыҙҙың йәмәғәт эштәрендә ҡатнаша, матбуғатта көнүҙәк мәсьәләр буйынса публицистик яҙмалар, әҙәбиәт, шиғриәт хаҡында мәҡәләләр менән йыш сығыш яһай. Уның шиғыр китаптары, ғилми хеҙмәттәре Мәскәүҙә рус телендә лә бер нисә тапҡыр баҫылып сыҡты.

(Йыр “Башҡорт теле”, Мәхмүт Һибәт һүҙҙәре, Абдулла Хәлфетдинов көйө.)

Уҡытыусы. Башҡорт әҙәбиәтендә әүәл – әүәлдән бер матур традиция йәшәп килә. Ул – заманаларҙың, йәмғиәт тормошоноң ауыр йәки хәл иткес саҡтарында халыҡҡа шиғри хат менән мөрәжәғәт итеү йолаһы.

“ Халҡыма хат” шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым – йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам,

Уҡытыусы. Шәйехзада Бабич, Рәшит Нигмәти, Рәми Ғариповтар кеүек, башҡорт теле хаҡында ғорурланып һәм тел яҙмышы хаҡында борсолоп, Рауил Бикбаев туған халҡына мөрәжәғәт итә:

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә…
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

Туған тел – ул әсә теле генә түгел, туған халҡыңдың теле. Туған халҡыңдың тарихы кеүек уның меңәр йыллыҡ тарихы бар. Шул тарихты һөйләр, батыр улдары, һылыу, егәрле ҡыҙҙары менән ғорурланыр, илдәр, халыҡтар араһында үҙен үҙе танытыр, донъяларҙы, күңелдәрҙе матурлар гүзәл, ғәзиз туған тел ул.

Тыуған ил, тел тураһында мәҡәлдәр.

Теле юҡтың иле юҡ, иле юҡтың көнө юҡ.

Телен һаҡлаған – башын һаҡлаған.

Ә хәҙер З.Биишеваның һүҙҙәренә яҙылған “Башҡорт теле” йырын тыңлайыҡ (йыр тыңлау).

Йомғаҡлау. Башҡортостан – күп милләтле республика. Беҙҙең республикала төрлө милләт кешеләре дуҫ, татыу йәшәй. Һәр милләт үҙ телендә иркен һөйләшә ала.

Үҙ туған телен, ата – әсәһе телен белмәгән кеше милли аңын, милли рухын да юғалта. Бындай хәл халыҡ, милләт яҙмышы өсөн оло хәүеф, оло хәтәр. Туған әсә теле бөткәндең милләте лә бөтә, милләте бөткәндең иле, республикаһы ла бөтә.

Туған тел – беҙҙең байлығыбыҙ, яҙмышыбыҙ.Телдең дә, илдең дә йәшәүе беҙҙеңҡулда.

“РАУИЛ БИКБАЕВ ИЖАДЫНДА БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ АРҘАҠЛЫ УЛДАРЫ”

Аҫылбаева Асия Әлмөхәмәт ҡыҙы,
Мәләүез ҡалаһы 1-се мәктәбе

Маҡсат. 1) Текст өҫтөндә эшләү күнекмәләрен камиллаштырыу; хәл-ваҡиғаларҙы интонация аша күрһәтеп, тасуири уҡырға өйрәтеү;

2) Күҙәтеүсәнлек, логик фекерләү һәм хәтерҙе үҫтереү, тарихи материал менән эшләүгә ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү;

3) Йөкмәткене менән танышыу аша илһөйәрлек тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: һәйкәл макеты, плакаттар, буклеттар, альбомдар; компьютер, интернет селтәре материалдары, презентация, видеофильм, республика матбуғат материалдары, уҡыусыларҙың рефераттары, фонотека.

Ҡурайҙа “Урал” көйөн тыңлау.

Алып барыусы. Эй еркәйем! Уттар үткән халҡым
Мәңгелеккә төйәк тапҡан ер.
Тынғы белмәҫ сиктәреңде һаҡлап.
Ир-егеттәр яуҙар сапҡан ер.

Алып барыусы. Поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәреп, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ алып барған Рауил Бикбаев үҙенең геройҙары – арҙаҡлы милләттәштәребеҙ менән бөгөн беҙҙең арала. Тормош, йәшәйеш тураһындағы әҫәрҙәре уҡыусылары өсөн бик ҡәҙерле.

Алып барыусы. Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафиҡ ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.

Алып барыусы. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә.

Алып барыусы. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ.Сәләм (1970), Р.Ғарипов (1994), З. Биишева (2003) исемендәге премиялар, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты (1989). 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

Алып барыусы. 1965 йылдан башлап — Рәсәй Федерацияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында әҙәбиәт бүлегенең ғилми хеҙмәткәре булып эшләй.

1995-2011 йылдар — Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе.

2007 йылдан Башҡортостан Республикаһы Ҡоролтайы депутаты.

Р.Шәкүр, Ф.Иҙрисов менән бергә Башҡортостан Республикаһы Дәүләт гимнын яҙыусы.

Алып барыусы. Халыҡ шағирының емешле ижадына күҙ һалайыҡ.

Ҡош юлы. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1967.

Ғүмер уртаһы. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1976.

Бураҙналар. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1985.

Звездный дом. Стихи. (урыç.) Мәскәү, 1985.
Поющие скалы. Стихи. (урыç.) Мәскәү, 1986.
Время. Поэт. Народ. (урыç.) Мәскәү, 1986.
Эволюция современной башкирской поэзии. Москва, 1991.
Шайехзада Бабич: Жизнь и творчество. Өфө, 1995.
«Слово поэта — совесть поэта». 1997
Год человека. Китап, 2003
Заветное слово. Уфа. Скиф, 2008.
Степной родник. Оренбург, 2008
Рәми. Өфө, 2008.
Триста три хадиса Скиф, 2009.
Бригада уходит в горы. Эксмо. 2010 г.
Һайланма әçәрҙәр, 5 томда, 2010-2012.

Алып барыусы. Халыҡ шағирының шиғриәте, ғилми тикшереүҙәре - оло бер хазина. Сит телдәргә лә тәржемә ителгән әçәрҙәре китап һөйөүселәрҙә рух, кешелеклек, илһөйәрлек тойғоларын тәрбиәләүен дауам итә. Әçәрҙәре немец, төрөк, украин, ҡаҙаҡ, яҡут, сыуаш, ҡарағалпаҡ, алтай һәм башҡа телдәргә тәржемә ителгән.

Уҡыусы. Булат ҡылысы менән күкте айҡап,
Күбекләнгән атта ашҡынып,
Ҡалҡһын ине Өфө тауҙарында
Салауатттың ғорур таш һыны.
Аҡбуҙаты менән һикереп менеп
Гранит пьедесталдың өçтөнә,
Ҡарап торһон ине Уралына,
Беҙ – мәңгелек! –
Тигән төç менән.

Алып барыусы. Шиғырҙың исеме юҡ, açтында яҙылыу датаһы ғына ҡуйылған - 20.03.62. Иң бейек атлы скульптура иçәпләнгән, Башҡортостандың баш ҡалаһы символына әүерелгән Салауат һәйкәле ҡуйылыуға әле биш йыл бар. Һәйкәл тураһында нимәләр беләһегеҙ, ул 24 йәшлек Рауилдың хыялына тура киләме?

Уҡыусы. Салауат һәйкәле тураһында һөйләй. Слайд.

Алып барыусы. Шәйехзада Бабич... Һин бит үҙең
Тарих биттәренә башҡортомдоң
Битенән тамған ҡанлы күҙ йәше. 1964.

Алып барыусы. Ошо шиғырҙы яҙғанда Рауил Бикбаев үҙе лә Бабич йәшенән яңы уҙған, ә был осор Бабич исеме халыҡ күңелендә булһа ла, йәш быуын хәтеренә ҡайтарыу башлана ғына. Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әçәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса ғилми хеҙмәте 1995 йылда баçылып сыға. Слайд.

Уҡыусы. Ш.Бабичтың “Кем өсөн” шиғырын һөйләй.

Алып барыусы. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. Ул Бабич менән фекерҙәш, яуҙаш. Бабич тураһында бына нимәләр яҙа ул: “Шағир һәм яугир Шәйехзада Бабич милли шиғриәтебеҙҙә тарихи яңырыш яһаны, әҙәбиәтебеҙҙең халыҡсан рухын, гражданлыҡ үткерлеген өр-яңы юғарылыҡҡа күтәрҙе. Уның әçәрҙәре аша Башҡортостан образы шиғриәтебеҙҙә үҙ исеме менән тәү башлап кәүҙәләнде, милли дәүләтселегебеҙ символына әйләнде. Бабич әле лә ватандаштарын берҙәмлеккә саҡырып киләсәккә әйҙәй. Шағирҙың изге ораны бөгөн дә күңелдәрҙе елкендерә — көрәшеп үткәр ҡыçҡа ғүмереңде!”

Алып барыусы. Төштә ҡолас етмәç яндар тартып,
Ҡарағоштар атып алдыҡ беҙ.
Арҡабыҙҙан һөйгән Ҡаһымдарҙы
Алыç яуға оҙатып ҡалдыҡ беҙ.1966.

Алып барыусы. Тыуған халҡының арҙаҡлы улдары менән шағир кескәйҙән таныш, төштәрендә лә, өндәрендә лә уларҙың батырлығы, фиҙакәрлеге алдында баш эйә. Ҡаһым түрә тураһында уҡыған әçәрҙәрҙе , Баязит Бикбайҙың “Ҡаһым түрә” тарихи драмаһы, Яныбай Хамматовтың “Төньяҡ амурҙары” романы геройҙарын исемләп иçкә төшөрәйек әле.

Уҡыусы. Ҡаһым түрә тураһында тарихи белешмә бирә. Слайд.

Уҡыусы. Яҡташыбыҙ Дәүләтбаева Рәсимәнең “Көнгәк”шиғырын тыңлағыҙ.

Тау ҡуйынынан һарҡылып сыҡҡан
Шишмәләрҙә – халҡым яҙмышы.
Ағиҙелдең көмөш һыуылай саф
Ғәҙел тарихының юл башы.
Тау ҡуйынына боçҡан ҡошсоҡтай,
Ауылҡайым Көнгәк буйында.
Ошонан яуға киткән башҡорттар,
Ат эсергән Сена һыуында.
Кемдәр ҡайтҡан еңеп ҡалғандарҙы
Иçкә алыу – Көнгәк башында.
Ҡаһым түрә, Буранбайҙар рухы
Йәшәй төçлө һәр бер ташында.
Күтәрелдек бөгөн Көнгәк тауға,
Ҡулдар биреп имән-ағаçҡа.
Ейәндәребеҙгә юлдар башлап,
Йәштәр килә беҙгә алмашҡа.

Алып барыусы. Үткән йыл Көнгәк итәгендә асылған стела, тауҙың иң түбәһендәге иҫтәлекле таҡта һүрәтен ҡарап китәйек тә Рауил Бикбаев ижадындағы батырҙар менән танышыуҙы дауам итәйек.

Алып барыусы. Ҡанаттары ергә саҡ-саҡ һуғылып,
Тыпырсына ҡоҙғон аҡ ҡомда.
Ҡапыл шунда хәтеремә килде:
“Өсәр йөҙ йыл йәшәй ҡоҙғондар”.
Быуаттарҙың йоткан уғы шул саҡ
Өтөп үтте кеүек иренде.
Бынау ҡоҙғон Батыршалар менән
Бергә күргәндер бит еремде. (Үҙән буйында үлгән ҡоҙғон). Слайд.
Алып барыусы. Ваҡлыҡтарға әүрәп.
Намыҫ менән
Көйһеҙләнеп китһә арағыҙ.
Эй башҡорттар.
Муса Мортазиндың
Һуңғы һүрәтенә ҡарағыҙ! (Мортазиндың һуңғы һүрәте). Слайд.
Алып барыусы. Был донъяның иркә улы булып
Йәшәүҙәр юҡ беҙгә кинәнеп.
Һиндә – Салауаттың аралары,
Миндә – һыҙланыуы Кинйәнең.
Ҡайҙа барһам, әсе моңдай сыңлап,
Йөрәгемдә бергә килерҙәр
Шәһиттәрҙең ҡаны аҡҡан боҙҙар,
Зөбәйҙәрҙән ҡалған күмерҙәр. (Рәми Ғариповҡа). Слайд

Алып барыусы. Рауил Бикбаев геройҙарын - беҙҙең данлы милләттәштәребеҙҙе үҙенең шиғырҙарында бер йыйынды осраштыра кеүек. Уларҙы ваҡыт та, аралар ҙа айыра алмай.

Уҡыусы. Шағир, яугир, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһарманы Зөбәй Үтәғолов, ул эшләп киткән Юлдаш мәктәбе тураһында белешмә бирә.

Алып барыусы. Сибай, Буранбайҙар телдән төшһә,
Үткәнемдән ниндәй ҡот ҡала?
Тупраҡтан һут эсер ағас кеүек,
Тыуған тупрағымдан һут алам. (Имән).
Алып барыусы. Алыҫ юлдарымдан ҡайтҡанымда
Ҡайнай кеүек минең күңелдә
Тотҡондағы Салауаттың һағышы,
Буранбайҙың йыры һөргөндә. (Ете быуыным”).

Алып барыусы. Башҡортостан Республикаһының иң юғары наградаһы Салауат Юлаев исемендәге премия шағирға “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы һәм рус телендә сыҡҡан “Судьба моя” шиғырҙар китабы өсөн бирелә. Ижадында ла Салауат ҙур урын алып тора.

Уҡыусы. ... Дала йөрәгендә
Йәркәй моңо тынып ҡалған юҡ.
Хаҡлыҡ бында күкрәк киреп йөрөй,
Ҡалтыранып ҡаса ялғанлыҡ.
Тик замандың әле башҡа мәле:
Мең ете йөҙ етмеш дүртенсе йыл.
Тарих даулай, яулай
Икенсе юл.
Бүгәсәү – ут,
Салауат – уҡ,
Икеһе лә
Ике башлы сәмреғошто туҡмай. (Мәсәл ярым ғүмер. Поэма)
Уҡыусы. Берәү генә Салауаттың
Тәүге өнөн тәү белгән ер.
Берәү генә Салауаттың
Сәңгелдәге бәүелгән ер. (Сәскәтөбәк)
Уҡыусы. Ҡурай моңо менән ҡандарымды
Ҡыҙҙырыр ҙа ошо уй йөрөр:
Илде талпындырыр ниндәй ҡурай
Салауатҡа биргән был ерем? (Ҡурай һәм ҡауырһын)
Алып барыусы.Салауатты телгә алған саҡта
Нур ингәндәй ҡыуыш эсенә.
Уралымда күпме мәмерйәгә
Ҡушҡан халҡым батыр исемен. (Мәмерйә). Слайд
Алып барыусы.Тауҙан-тауға ҡағылып, шаңдау ҡайтты,
Яңғыраны:
Һаумы, Салауат!

Ҡабатланы үлән шыбырҙап:
Һаумы, Салауат! (Һаумы, Салауат!)
Уҡыусы. Салауаттың һуңғы саңғы эҙе!
Йөрәгемә ул эҙ уйылған...
Ҡарҙар яуа – күмелмәй ул яра,
Ләйсән ҡоя – эҙҙәр юйылмай. (Салауаттың саңғы эҙҙәре). Слайд

Алып барыусы. Салауаттың үҙ ҡулы менән яҙылған хаттар, приказдар һаҡланып, беҙҙең көндәргә килеп еткән. Слайдтар.

Уҡыусы. Ҡылысыбыҙ һәр саҡ ҡул осонда –
Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ.
Яҙмышыбыҙ булды ҡыл осонда –
Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ. (“ Инде күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ!” Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Ҡатау заводы эшселәренә яҙған хатынан, 1774 йыл 10 сентябрь)

Уҡыусы. “Салауат ҡылысы” шиғырын һөйләй. Слайд.

Алып барыусы.

Салауаттың эҙҙәренән
Салауатҡа килдем тағы.
Йәйҙең йылы еле иҫә,
Иңемдән юл саңын ҡаға.
Күкрәгендә ил моңон да,
Анттарын да һаҡлай Урал.
Салауаттың шиғыр-хатын,
Аманатын һаҡлай Урал. (“Йыр” балладаһы)

Алып барыусы. Халыҡ шағиры Салауат образына мөрәжәғәт иткәндә Салауат иле, Салауат донъяһын гиҙә, батырҙың ҡыҫҡа ла, оҙон да ғүмер юлын барлай.

Алып барыусы. Мин йөрөнөм диңгеҙ ярҙарында
Салауаттың һуңғы эҙенән.

Был юлдар “Ер һәм диңгеҙ” әҫәренән. Салауат ғүмеренең яртыһынан артығырағын ситтә үткәрә. Батырыбыҙ һөйәктәрен һаҡлаған урын тураһында нимәләр беләһегеҙ? Слайдтар.

Алып барыусы. Аҡбуҙымдың тояҡ тауышына
Йүгереп сығыр йәнем – Әминәм.
Яраларҙың һыҙлауҙары баҫылыр
Тыуған яҡтарымдың йәменән. (Яралы Салауаттың яуҙан ҡайтҡандағы уйҙары). Салауат йыйынында төшөрөлгән видеофильмдан Салауат менән Әминә йыры.

Уҡыусы. Юлбаҫарҙар түгел, илбаҫарҙар
Алған саҡта илде ҡамалап.
Көрәштәрҙең алғы сафындалыр
Никарагуа улы Салауат.

Алып барыусы. Салауат исеме менән башҡорт яугирҙары дошмандарға ҡаршы барған, ил һаҡларға ант иткән. Ә алыҫ Никарагуа иленең йәш революционеры Салауат исемен үҙенә ҡушамат итеп һайлаған.

Алып барыусы. Батырыбыҙға арнап бик күп әҙәби әҫәрҙәр, ғилми хеҙмәттәр яҙылған, кино, спектаклдәр күрһәтелә, башҡаса мәңгеләштерелә. Рауил Бикбаевтың Салауат тураһындағы поэтик әҫәрҙәре тотош гөлләмә кеүек. Батырыбыҙ мәңге беҙҙең хәтерҙә, илебеҙ тарихының иң түрендә.

Уҡыусы. Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа.
Тәбиғәттең йәннәт саҡтары!
Күҙебеҙгә ҡарап, ил батыры
Барлай кеүек йыл да сафтарҙы. (“Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа”).

Алып барыусы.

Салауат йыйыны бөтә республика халҡын ойоштороп, рухландырған ҙур байрамға әүерелде. Уның программаһы бик киң, күп конкурстар үткәрелә. Слайд.

Алып барыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың геройҙары менән осрашыу тамам, ләкин улар шағир ижадында һәм беҙҙең йөрәктәрҙә! Слайд.

Видеояҙмалар ҡарау менән тамамлана.

Р.БИКБАЕВТЫҢ “ЕТЕ БЫУЫНЫМ” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Ишмеева Рәсимә Ришат ҡыҙы,
Мәләүез ҡалаһы 3-сө гимназияһы

Маҡсат: Р.Бикбаевтың “Ете быуыным” шиғырының идея-тематик йөкмәткеһен асыу; уҡыусыларҙы үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү, бәйләнешле телмәрҙәрен үҫтереү; үҙ милләтеңә, тамырҙарыңа ҡарата ихтирам, һөйөү, ғорурлыҡ тойғолары тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: интерактив таҡта, Р.Бикбаевтың портреты, уҡыусыларҙың шәжәрәләре, тест һорауҙары.

Дәрес барышы:

I. Ойоштороу өлөшө.

- Һәр көн һеҙҙе сәләмләйем
Һөйөклө туған телдә.
Туған телһеҙ, тыуған ерһеҙ
Йәшәй алмай бер кем дә!
- Хәйерле көн, уҡыусылар!
II. Дәрес маҡсаты менән таныштырыу.
1-се слайд. Р.Бикбаевтың портреты
- Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Рауил Бикбаевтың ижадын өйрәнеүҙе дауам итербеҙ. Тик тәүҙә уның үҙе тураһында иҫкә төшөрөп, тест һорауҙарына яуап биреп үтәйек.
III. Өйгә эште тикшереү.
1) Эштәрҙе уҡытыусы таратып биргән ҡағыҙ битенә эшләйҙәр.
2-се слайд. Тест һорауҙары.
1. Р.Бикбаев ҡасан тыуған?
А) 23 август 1929 йыл;
Б) 12 февраль 1932 йыл;
В) 12 декабрь 1938 йыл;
Г) 10 апрель 1928 йыл.
2. Ул тыуып үҫкән яҡ.
А) һамар өлкәһе;
Б) Ырымбур өлкәһе;
В) Ҡаҙаҡ далалары;
Г) Баймаҡ ерҙәре.
3. Ул ниндәй һөнәр ала?
А) уҡытыусы;
Б) тракторсы;
В) табип;
Г) агроном.
4. Тәүге китабының исеме:
А) “Ҡош юлы”
Б) “Ерем балҡышы”
В) “Дала офоҡтары”
Г) “Ғүмер уртаһы”
5. Башҡорт халыҡ шағиры тигән исем ҡасан бирелә?
А) 1993 йыл;
Б) 1998 йыл;
В) 2001 йыл;
Г) 1985 йыл.
(Шунда уҡ яуаптарҙы тикшереп баһалау: бер хатаһыҙ эшкә – 5, бер хата булһа – 4, 2-3 хатаға – 3 билдәһе ҡуйыла.)
Асҡыс: 1(В), 2(Б), 3(А), 4(В), 5(А).
2) Шәжәрәләр буйынса эш.
(11 класс уҡыусыларының шәжәрәләре алдан уҡ эшләнгән булыуы мөмкин. Шулай булһа, балаларҙың эштәренән слайд-шоу эшләһәң, бигерәк тә отошло була)
- Уҡыусылар, өйҙә һеҙ ғаиләгеҙҙең шәжәрәһен төҙөп килергә тейеш инегеҙ. Шул шәжәрәгеҙҙе төҙөгән саҡта ниндәй быуын һеҙҙе нығыраҡ ҡыҙыҡһындырҙы, кемдәр һеҙҙә ғорурлыҡ тойғолары уятты һәм ни өсөн? Шулар тураһында һөйләп китһәгеҙ ине.(...)
- Эйе, һуғышта булған, үҙ Тыуған иле, халҡының азатлығы өсөн көрәшкән атай-олатайҙар менән сикһеҙ ғорурланабыҙ. Ә һуғышта булмағандар һеҙҙә нисек тә булһа ҡыҙыҡһыныу уятамы? (...)
- Бик яҡшы, уҡыусылар. Шулай, ысын башҡортмон тигән кеше үҙ шәжәрәһен, туған телен, халҡының тарихын белергә тейеш. Сөнки кешенең рухы, холоҡ-ҡылығы, бар булмышы ата-бабаларына, әсәй-ҡартәсәйҙәренә, нәҫел-ырыуына, тәрбиәһенә ҡарай формалаша, сыныға башлай.
IV. Р.Бикбаевтың “Ете быуын” шиғырын үҙләштереү.
- Дәфтәрегеҙҙе асып, бөгөнгө числоны, дәрес темаһын яҙып ҡуйығыҙ. Дәрестең темаһы: Рауил Бикбаевтың “Ете быуын”шиғыры.
- Шиғырҙы уҡыр алдынан Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевты беҙҙә ҡунаҡта тип хис итеп, уның тауышын тыңлап алайыҡ.
(Интернет селтәренән алынған шағирҙың берәй сығышынан 2 минутлыҡ ҡына телмәрен тыңлау һәм ҡарау)
- Р.Бикбаевтың ижады боронғолар, ата-бабалары йәшәгән дала тәбиғәте, шуға ҡулайлашҡан сабыр яҡташтары тураһындағы “Дала офоҡтары” шиғырҙар йыйынтығы менән башлана. Ул үҙенең нәҫел-ырыуын бик яҡшы белә һәм улар тураһында “Ете быуыным” тигән шиғыр ҙа ижад итә. Был шиғырҙы уҡыр алдынан ҡайһы бер һүҙҙәргә иғтибар итәйек.
1)Һүҙлек эше.
3-сө слайд. Һүҙлек һүҙҙәре.
Даръя – күсмә мәғәнәлә, нимәнеңдер күплеген, сикһеҙлеген белдерә. Бик ҙур һыу тигәнде лә аңлата.
Намаҙ – обязательная молитва у мусульман, совершаемая пять раз в сутки.
Намыҫ – совесть, честь
Ант – клятва
Гүр – могила

Йәннәт – рай
Һөргөн – ссылка, изгнание
Бәғер – сердце, душа
Аманат – то, что доверено хранить как святыню
Имгәтеү – калечить
Имгәк – обуза, бремя
Абайырақ – осторожно
Һеңгәҙәтеү – довести до потери сознания, оглушить
Олон – ствол (дерева)
Бөрө – почки (от дерева)
Етегән йондоҙ – созвездие, Большая или Малая медведица
(Уҡыусылар өсөн ят булған һүҙҙәрҙе яҙып ҡуйыу.)

2) Шиғырҙың тулы тексын уҡытыусының тасуири уҡыуы.

4-се слайд. Ете быуыным.

Был тормоштоң ҡапыл йәме бөтһә,
Күңелдәрем китһә һыуынып,
Янып торған ете егет булып
Алға баҫа ете быуыным.
Йөҙҙәренә әле ҡояш ҡарай,
Әле ҡарлы әсе ел бәрә.
Төхфәт –
Шәрәфи –
Мөхәмәтша –
Хәсән –
Ҡотләхмәт –
Бикбай –
Аҫылгәрәй.
Батшаларҙың нәҫеле киҫелгәндә
Тармаҡланған һаман шәжәрәм.
Мин – тамырлы, тамырҙарым – нурлы,
Олондарым йырлап йәшәрә.
Олуғ китаптарҙа олатайҙарҙың
Исемдәре яҙылып ҡалмаған,
Үҙ исемен улар ер йөҙөнә
Арба юлы, сана юлы менән,
Һабан менән, нигеҙ, зыярат менән,
Окоп менән киткән тамғалап.
Ҡолаҡсын бүрек, таҡыя, буденовка,
Ян-уҡ, һөңгө, ҡылыс, винтовка –
Барыһы ла әммә эйәрҙәрҙә,
Юҡ боролоу кире, юҡ туҡтау.
Илбаҫарһың улар йәнен ҡыйған,
Нахаҡҡа ҡан, күҙ йәш ҡоймаған.
Хуш еҫ аңҡып торған кәбән ҡойған,
Кешеләргә, малға мәке уйған,
Ауыл ҡото булған ҡойо ҡаҙған,
Ям ҡаҙмаған, мәкер уймаған.
Тарихтағы бөйөк ҡағыҙҙарға
Бер ҡасан да улар ҡул ҡуймаған –
Үкенергә уға нилектән?..
Кешеләрҙең ғәзиз башын ашар
Яла яҙмағандар – шул еткән.
(Ҡалған өлөшөн дәреслектән уҡыу).

3) Аңлау кимәлен тикшереү: Р.Бикбаев үҙенең ете быуыны тураһында нимә тигән?(...)

- Күреүегеҙсә, ете һаны был шиғырҙа йыш осрай. Был осраҡлымы? (юҡ). Ә ни өсөн Р.Бикбаев тап ете һанын ҡулланған тип уйлайһығыҙ? (…)

4) Уҡыусыларҙың строфалап уҡыуы

5) Шиғырҙы тасуири уҡыу (1-2 уҡыусы)

6) Йөкмәткеһе буйынса эш.

- Шиғырҙа ниндәй тарихи шәхестәр иҫкә алына? Улар тураһында нимә беләһегеҙ?(Салауат, Буранбай, Тәфтиләү).

Ял минуты. Хәҙер саҡ ҡына ял итеп, “Ҡарауанһарай” төркөмө башҡарыуында Рәми Ғарипов һүҙҙәренә яҙылған “Салауат батыр” йырын тыңлап алайыҡ.

- Р.Бикбаевтың “Ете быуыным” шиғырында аманат тураһында бик үткер юлдар бар. Кем табып уҡып күрһәтер?

-

Уйлайым да кеше яҙмыштарын,
Хайран ҡалып ҡуям аптырап:

Күпме быуын аманатын кеше
Килер быуындарға тапшыра.

Кем төҙәтә алыр берәй һүҙен
Аманаттың – ҡуйһаң имгәтеп?
Кем һуң аҡлай алыр киләсәктә
Ғәйептәрен ундай имгәктең?

- Был шиғырҙа ниндәй аманат тураһында һүҙ бара, кем әйтә алыр?(...)
- Уҡыусылар, аманатты боҙоуҙан ҡурҡыу кәрәкме? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? (…) Р.Бикбаев был турала нимә тигән?(…)
- Шул туралағы юлдарҙы табып уҡып күрһәтһәгеҙ, бигерәк тә һәйбәт булыр ине.

Тирә-йүнгә ҡара абайыраҡ,
Барлап атла барыр юлыңды.
Бер быуындың ҡылған хаталары
Һеңгәҙәтер ете быуынды.
Бер быуындың ҡылған хатаһынан
Йәш бөрөләр күпме ҡороно.

- Иғтибар иткәнһегеҙҙер, шағир үҙенең үткәне өсөн дә, киләсәге өсөн дә бик борсолмай. Ул әлеге көндә бик ышаныслы тора. Ни өсөн? Уны бәлә-ҡазанан нимә һаҡлай? Шуны табып уҡығыҙ әле.

Мөмкинме һуң яңғыҙ ҡалыуҙарың,
Мөмкинме һуң етем булыуың,
Еркәйемдең ете ҡаттарынан
Етегән шишмә булып гел типкәндә,
Етегән йондоҙ булып нур һипкәндә
Ете яҡтан ете быуыным.

IV. Йомғаҡлау.

- Беҙ ҙә, уҡыусылар, атай-олатайҙарҙың аманатына хыянат итмәйенсә, туған-тыумасаларҙың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәйенсә, тормош юлын лайыҡлы үтергә тейешбеҙ. Һеҙ минең менән ризамы, уҡыусылар? (…)

V. Өй эше биреү.

- Өйҙә Р.Бикбаевтың “ Ете быуыным” шиғырын тасуири уҡырға, йөкмәткеһенә тура килгән мәҡәлдәр яҙып алырға.

VI. Балаларҙың яуаптарын баһалау.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ ИЖАДЫ БУЙЫНСА МӨҒЖИЗӘЛӘР ЯЛАНЫ

Солтанова Лариса Муллағаян кыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 6-сы мәктәбе

“Мөғжизәләр яланы” уйыны, башҡа интеллектуаль уйындар кеүек, уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү, нығытыу, тәрәнәйтеү, ҡыҙыҡһындырыу маҡсатынан сығып ойошторола.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЯЛАНЫ

Күңелле музыка яңғырай. Сәхнә (класс таҡтаһы) байрамса биҙәлгән. Яҙыусы Р.Бикбаевтың портреты, БР картаһы, бүләктәр, барабан, аудиояҙма, магнитофон.

Алып барыусы уҡыусыларҙы, ҡунаҡтарҙы, ҡатнашыусыларҙы сәләмләй. Музыка аҫтында тәүге турҙа ҡатнашыусы 3 уҡыусы барабан янына үтә.

Алып барыусы: Бөгөнгө уйыныбыҙҙың төп темаһы – башҡорт әҙәбиәтендә айырым урын алып торған, ике тиҫтәгә яҡын китап сығарған, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләүсе күренекле шағир Рауил Бикбаевтың ижады. Шулай итеп, 1-се турҙы башлайбыҙ һәм беренсе һорау:

I ТУР. ҺОРАУ

Рауил Бикбаев поэзияһында кемдәрҙең яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә? "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә. (Халыҡ.)

Беренсе ҡатнашыусы барабанды әйләндерә, үҙе тураһында һөйләй. Уйын дауам итә. Бүләктәр бирелеп барыла, реклама йәки музыкаль паузалар ойошторола. Һәр ҡатнашыусы үҙе менән таныштырып бара.

Музыкаль пауза. “Халҡыма хат” әҫәре уҡыла

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Еркәйемдең тарих һөйләмәгән

Юҡ һуҡмағы, һыуы, юҡ тауы.
Ишетәмен әле ҡылыс сыңын,
Әле һылыу ҡыҙҙың һыҡтауын.

Күпме моң бар еләҫ аҡландарҙа,
Күпме наҙ бар дала елендә.
Ҡарай улар ғәзиз әсәм булып,
Һөйләшәләр башҡорт телендә.

Башҡорт балаһы мин, Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып ҡалған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

II ТУР. ҺОРАУ

Тәүге шиғырҙар йыйынтығы, 1964 йылда донъя күрә. ("Дала офоҡтары")

Музыкаль пауза. Матур көй аҫтында Р.Бикбаевтың шиғыры уҡыла.

Уҙған ғына ғүмер, ҡалған хәтер…
Барлыҡ замандарҙан өҫтөн,
Бар йәмдән ғәзиз йәме –
Әле баҫып торған ерем,
Әле осоп барған күгем,
Әле йәшәгән мәлем.
Йәнем донъяға тиҡ был мәл,
Был ер аша тоташа.
Тиҡ бөгөнгөгә мин хужа,
Тиҡ бөгөнгөгә батша.

Үкендерһә лә үткәндәр,
Унда ҡайтыр әмәл юҡ.
Иртәгәһе көн ҡапҡаһын
Әллә аса, әллә юҡ...

III ТУР. ҺОРАУ

Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. Ҡайһы поэмала был бигерәк тә асыҡ күренә?

("Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!")

Музыкаль пауза. Матур көй аҫтында "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ! Әҫәренән өҙөк уҡыла.

Финал. ҺОРАУ

1985 йылда донъя күргән шиғырҙар һәм поэмалар йыйынтығы. (Бураҙналар).

Финалға сыҡҡан уҡыусыларға Рауил Бикбаев китабын бүләк итеү.

Уйынды йомғаҡлау.

Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

Шағирҙың шиғырҙар һәм поэмалары ингән йыйынтыҡтары: «Дала офоҡтары» (1964) «Ҡош юлы» (1967), «Бураҙналар» (1985), «Звездный дом» (1985), «Поющие скалы» (1986), «Время. Поэт. Народ.» (1986), «Эволюция современной башкирской поэзии» (1991), «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» (1991), Шайехзада Бабич. Жизнь и творчество. (1995), «Шағир һүҙе - шағир намыҫы» (1997), «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай» (1998) һ.б.

Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Шағир ғәзиз милләте һәм Башҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә. Быға миҫал итеп бик күп шиғырҙарҙы, «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!», «Халҡыма хат», «Баҙар балтаһы», «Система», «Барокамера»,«Хазина» һ.б. ҙур хеҙмәт башҡарҙы. Башҡортса һәм русса фундаменталь шиғри антологияларҙы уҡыусыларға еткереүгә лә ул күп көс һалды. Ҡәләмдәштәре хаҡында әйтелгән һүҙҙәр, төрлө жанрҙар буйынса ғилми тикшеренеүҙәр, яҙыусыларҙың съездарындағы бай йөкмәткеле докладтар, публицистик сығыштар, шиғри тәржемәләр, һуңғы йылдарҙа үҙенсәлекле күренешкә әйләнгән шиғри хәҙистәр үҙҙәре махсус томдарҙы тәшкил итерлек. Рауил Бикбаевтың «Сәфәрҙәрҙә сығам сәхәрҙәрҙә» китабы башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын өр-яңы баҫҡыҫҡа күтәрҙе.

РАУИЛ БИКБАЕВ «ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ»

Ниғмәйева Ҡәҙриә Ғәлфәт ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы
7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсаттар: 1. Яҙ миҙгеле тураһында һөйләшеп, шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү; 2. Бәйләнешле телмәр булдырыу, тасуири уҡыу һәләттәрен үҫтереү; 3. Тәбиғәткә, йыл миҙгелдәренә һаҡсыл ҡараш, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: «Яҙ миҙгеле» һүрәте, шағирҙың портреты, һүҙлек һүҙҙәре слайдттарҙа бирелә.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

1. Валеологик күнегеү.

- Һаумыһығыҙ, уҡыусылар!
- Мин һеҙҙе күреүемә бик шатмын.
- Рәхим итеп ултырығыҙ! Бер-беребеҙгә ҡарайыҡ, йылмаяйыҡ, бер-беребеҙгә яҡшы теләктә ҡалайыҡ. Дәресебеҙҙе шиғыр юлдары менән башлайыҡ.

Башланып китте дәрес,
Беҙ матур ултырабыҙ.
«4»ле, «5»ле билдәләрен
Көн һайын арттырабыҙ.

2. «Яҙ» һүрәте буйынса эш.

(1 слайд)

- Уҡыусылар, бөгөн нисәһе?
- Беҙҙең ниндәй миҙгел?
- Яҙ миҙгеленә ниндәй айҙар инә? (Март, апрель, май).
- Һүрәттә нимәләр күрәһегеҙ?
- Малай нимә эшләй?
- Һүрәттә яҙ миҙгеле икәнен ҡайҙан белдегеҙ?
- Әйҙәгеҙ әле, яҙ миҙгелдәрен һанап сығайыҡ !

II. Дәрестең темаһын, маҡсатын билдәләү.

- Яҙ көнө тәбиғәттә ниндәй үҙгәрештәр була? (Ҡояш йылыта, ҡар ирей, йылғаларҙа һыуҙар аға, кешеләр ҡышҡы кейемдән еңел кейемгә күсәләр).
- Яҙ көнө ниндәй ниндәй байрам бар? (8 Март байрамы).

Был миҙгелдә беҙ ниндәй ҡоштарҙы көтөп алабыҙ? (Сыйырсыҡтар килә)

- Сыйырсыҡтар тураһында 3 класта ниндәй шиғыр ятланыҡ?

(Р. Ғарипов «Сыйырсыҡ»). Кем иҫкә төшөрөп үтә?

- Яҙ тураһында ниндәй йыр беләбеҙ? (Яҙ килә).

Әйҙәгеҙ ошо йырҙы иҫкә төшөрөп алайыҡ.

(2 слайд)

Яҙ, яҙ, яҙ килә,
Тәҙрәне астылар.
Тып, тып, тып,тып, тып итә
Эре – эре тамсылар.

- Дәрестә ниндәй миҙгел тураһында һөйләшәсәкбеҙ?

Һығымта: Бөгөн дәрестә яҙ миҙгеле тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ. Рауил Бикбаевтың «Тәбиғәттең теле асылған саҡ » шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

Ял минуты.

III. Яңы тема

- Хәҙер дәфтәрҙәрегеҙҙе асып, бөгөнгө числоны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, кем ул Рауил Бикбаев? (Уҡытыусының һөйләүе).

(3 слайд), (портретҡа иғтибар итеү).

Рауил Төхфәт улы Бикбаев— күренекле шағир, яҙыусы. 1938 йылдың 12 декабрь көнөндә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Өфө ҡалаһында йәшәй. (Дәфтәргә яҙыу). Күрше ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы баҫыла. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларын яҙа. Ул филология фәндәре докторы, профессор Рауил Бикбаев F.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

- Кем ул Рауил Бикбаев?
- Уға нисә йәш тула? (75 йыл).

(4 слайд)

Һүҙлек эше
шыйыҡ- жидкий һарылып - прильнув
һығыу- выжимать хаҡ – дөрөҫлөк
(Уҡыу, тәржемә итеү, һүҙлеккә күсереп алыу, телдән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү).

Шиғыр өҫтөндә эш

- Ә хәҙер уның шиғыры менән танышабыҙ. Дәреслектәрҙе астыҡ.

Шиғырҙы үрнәкле уҡый торған уҡыусынан тасуири итеп уҡытыу.

Ял минуты.

- Шиғыр һеҙгә оҡшанымы?
- Шиғырҙы тыңлағанда ниндәй уйҙар кисерҙегеҙ?

Сылбырлы уҡыу.

- Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара?
- Тәбиғәттә япраҡ яҙын үҙен нисек һиҙә?
- Ни өсөн автор шиғырҙы «Тәбиғәттең теле асылған саҡ » тип атай?
- Тәбиғәт менән кешегә яҙ миҙгеле нимә алып килгән?
- Теле асыла, сабый япраҡ, тел осо, ялғанға юлыҡмам һүҙбәйләнештәрен нисек аңлайһығыҙ?

Шиғыр өҫтөндә төрлө уҡыу күнекмәләре үткәрәйек : «Һайланма уҡыу» - уҡытыусы төрлө урындан уҡый, ә уҡыусылар табып дауам итә; уҡытыусы хата менән уҡый, ә уҡыусылар был хатаны табып төҙәтеп уҡыйҙар. Хәҙер шиғырҙан тәбиғәт күренештәрен табып уҡыйыҡ (уҡыу).

Төркөмдәр менән эш:

«Рәссамдар», «Шағирҙар» төркөмдәре. Беренсе төркөмгә бирем:

«Ҡышҡы тәбиғәт уяна» темаһына һүрәт төшөрөргә. Икенсе төркөм: бирелгән һүҙҙәрҙе ҡулланып шиғыр юлдары төҙөргә.

Һүҙҙәр: ҡар ирей, һыуҙар таша, нур һибә, бөрөләр бүртә, тамсы тама, уйнай, ялтырай, көлә, килә.

Беренсе команда үҙенең эшен яҡлай. Ә хәҙер икенсе командаға һүҙ бирәбеҙ.

- Был шиғыр юлдары беренсе команданың һүрәтенә тура киләме? Команданың эштәре баһалана.

IV. Йомғаҡлау.

- Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә ниндәй шиғыр менән таныштыҡ? Шиғырҙы кем яҙған? Кем ул Рауил Бикбаев?Шиғырҙың йөкмәткеһе бөтәгеҙгә лә аңлашылдымы?

Өй эше. Шиғырҙы тасуири итеп уҡып килергә, шиғыр буйынса һүрәт төшөрөргә.

Баһалау.

«ТЕЛЕ БАРҘЫҢ – ИЛЕ БАР, ИЛЕ БАРҘЫҢ – КӨНӨ БАР»

Әбсәхова Эльвира Зөфәр ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 10 – сы урта мәктәбе

Хәҙерге уҡыу-уҡытыу процесында заман талаптарына яуап биргән яңы алымдар, технологиялар ҡулланыу мөһим. Ошондай яңы алымдарҙың береһе — проект методы. Ул эште алдан планлаштырыуҙы, эҙмә-эҙлекле этаптар буйынса ойоштороуҙы һәм ҡатмарлаша барған практик эштәрҙе башҡарыуҙы күҙ уңында тота. Был тормошта үҙеңде теге йәки был осраҡта дөрөҫ тота белергә өйрәтә.

Әҙәбиәт – бөгөнгө көндә уҡый торған китап ҡына түгел, ә тормош китабы. Сөнки туған тел дәрестәрендә уҡылған әҫәргә ҡарата шәхси мөнәсәбәт формалаша. Ысынбарлыҡты төшөнөү, танып белеү әҙәби герой менән бергә йәшәп, бергә борсолоуҙар аша шәхси әхлаҡи тәжрибәгә таянып барлыҡҡа килә. Бала был осраҡта уҡыған ҡайтарып һөйләүсе генә түгел, ә әҙәби әҫәрҙе төрлө яҡлап аңлап тикшереүсе, геройҙарға ҡарата үҙенең мөнәсәбәтен белдерә белеүсе шәхес булып сығыш яһай. Баланың ижади эшмәкәрлеген үҫтереүҙә проектлау технологияһын ҡулланыу ҙур роль уйнай. Ижади эшләү — үҙ аллы, бойондороҡһоҙ, үҙенсәлекле фекер йөрөтә белеп эшләү тигән һүҙ.

Проектлау методы менән эшләү барышында иң мөһиме нимә һуң?

1) Хыял итеү, фараз итеү, күҙ алдына килтереүҙе талап иткән ижади эшмәкәрлек аша уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныуын дәртләндереү.

2) Уҡыусы мәғлүмәтте механик рәүештә ятлап алырға түгел, ә мәғәнәһен аңлата, эстәлеген асып бирә, артабан үҙ тәжрибәһендә ҡуллана белергә тейеш. Проектлау технологияһын ҡулланыу ошо мәсьәләләрҙе теүәл хәл итергә ярҙам итә:

— ҡуйылған мәсьәләне сисеү юлын эҙләй белеү оҫталығын, тәнҡитсел аҡыл эшмәкәрлеген үҫтерә,

— уҡыусыларҙа фаразлау, күҙ алдына килтереү, тикшеренеү, анализлай белеү оҫталығын, үҙенсәлекле фекерләүҙе үҫтерә,

— балаларҙың үҙ баһаһын күтәреүгә булышлыҡ итә. Проектлау технологияһы һәр саҡ балаларҙың үҙ аллы (айырым, парлы, төркөмдәрҙә) эшмәкәрлеген ойоштороуға йүнәлтелгән[1].

Проекттың типтары:

Проекттағы төп эшмәкәрлек буйынса – мәғлүмәти

Йөкмәткеһе буйынса – моно – проект

Бәйләнеш характеры буйынса – мәктәп эсендәге проект

Проекттағы ҡатнашыусылар һаны буйынса – парлы проект

Башҡарылыу ваҡыты буйынса – ҡыҫҡа ваҡытлы.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 11 класында 2 сәғәт уҡытыла. Программала Рауил Бикбаев ижадын өйрәнеүгә 5 сәғәт бирелгән. (Тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге тураһында белешмә. «Уралыма», «Ҡурай» шиғырҙарының, «Баҙар балтаһы» поэмаһынан өҙөктөң идея – тематик йөкмәткеһен, проблемаларын асыҡлау, «Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе» шиғырында замана, мораль – этик мәсьәләләр.) Проекттар яҡлауға әҙерлек өсөн дәрестәр түбәндәгесә бүленә:

[1]Дәүләтшина М. С. , Янышева З. Ф. «Туған тел» дәреслегенә методик ҡулланма: 3 – сө класс. – Өфө: Китап, 2010. – 112 бит.

1 – се дәрес. Проекттың башы һәм планлаштырыу.

Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм эшмәкәрлеге тураһында белешмә бирелә. Уҡыу өсөн программа буйынса ҡаралған әҙәрҙәр тәҡдим ителә. Проект әҙерләү өсөн темалар асыҡлана, маҡсаттар билдәләнә. Проблеманы анализлау, мәғлүмәт сығанаҡтарын билдәләү, бурыстар ҡуйыу, һөҙөмтәне баһалауҙың критерийҙарын булдырыу, төркөмдә ролдәрҙе бүлешеү ҙә 1-се дәрестә башҡарыла. Уҡытыусы уҡыусыларға проекттың маҡсатын аңлата, консультация бирә, уҡыусыларҙың һорауҙары буйынса ярҙам итә.

2 – се дәрес. Ҡарар ҡабул итеү.

Өйҙә әҙерләп алып килгән материалды тикшереү, «мейе штурмы», оптималь вариантты һайлау, эш планын асыҡлау, гипотеза ҡороу. Уҡыусылар мәғлүмәт менән эшләйҙәр, тикшеренеү үткәрәләр, йыйылған материалдарҙы анализлайҙар, кәрәкле һайлап алалар. Уҡытыусы күҙәтә, консультация бирә.

3 – сө дәрес. Эшләү.

Билдәле темалар буйынса проект өҫтөндә эшләү. Уҡыусылар проектлау барышында эҙләнәләр, тикшерәләр, һөҙөмтәләрен эшкәртәләр. Уҡытыусы күҙәтә, кәңәш бирә.

4 – се дәрес. Һөҙөмтәне баһалау.

Проектты анализлау, ирешелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау. Уҡыусылар проектты анализлауҙа һәм баһалауҙа ҡатнашалар. Уҡытыусы күҙәтә, кәрәк булғанда анализға йүнәлеш бирә.

5 – се дәрес. Проектты яҡлау.

Уҡыусылар проекттарын яҡлайҙар, һөҙөмтәне баһалауҙа барыһы ла ҡатнаша. Уҡытыусы проекттың һөҙөмтәһен баһалауҙа, анализлауҙа ҡатнаша.

5 – се дәрес.«Теле барҙың – иле бар, иле барҙың – көнө бар» (Рауил Бикбаев ижады буйынса йомғаҡлау дәресе. Проекттар яҡлау)

Маҡсаттар: Рауил Бикбаев ижадын өйрәнеү; тыуған илгә, туған телгә һөйөү тәрбиәләү;уҡыусыларҙы эште планлаштырырға, шул планды тормошҡа ашырырға, эшләгән эште анализларға, баһаларға, эштең практик әһәмиәтен аңларға өйрәтеү.

Йыһазландырыу: проектор, компьютер, фоноҙәмә, Р. Бикбаев портреты, экран.

Дәрес барышы.

1. Психологик комфорт тыуҙырыу.

Хәйерле иртә, уҡыусылар. Бөгөнгө дәресте Р. Ғариповтың «Туған тел» шиғырын тыңлауҙан башлайыҡ.Шиғырҙы тыңлау өсөн компьютер ҡулланыу. (Слайдтар ҙа әҙерләргә була)

2. Уңыш ситуацияһын тыуҙырыу.

- Бөгөнгө дәресебеҙ етди һәм актуаль темаға – тел яҙмышына, халыҡ яҙмышына бағышлана. “Иле барҙың - теле бар”, - ти халыҡ мәҡәле. Башҡорт халҡы борон – борондан үҙ ере, үҙ теле өсөн көрәшкән. Тыуған илебеҙҙе данлап, туған телебеҙгә һоҡланып, сәсәндәр генә түгел, төрлө быуын шағирҙары шиғырҙар ижад иткән.

Алдағы дәрестәрҙә һеҙ Рауил Бикбаев шиғырҙары һәм поэмаһы өҫтөндә эшләнегеҙ. Бөгөн дәрестә проекттарҙы яҡлау ҡаралған.

3. Проекттарҙы яҡлау. Уҡыусыларҙың сығышын тыңлау. Һөҙөмтәне баһалау.
- Р. Бикбаевтың тормош юлы һәм фәнни эшмәкәрлеге;
- «Уралыма»шиғырының идея-тематик йөкмәткеһе;
- «Ҡурай» шиғырының идея – тематик йөкмәткеһе;
- «Баҙар балтаһы» поэмаһындакүтәрелгән проблемалар;
- «Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе» шиғырында замана, мораль – этик мәсьәләләр.

4. Дәрескә рефлексив анализ.
5. Өй эше. Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһынан өҙөктө ятларға.

РАУИЛ БИКБАЙҘЫҢ “УРАЛЫМА” ШИҒЫРЫ

Шәрәфиева Гөлнара Фаат ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 3-сө урта дөйөм белем биреү учреждениеһы

Класс: 6 класс

Дәрес төрө: яңы материалды үҙләштереү

Йыһазландырыу: интернетҡа тоташҡан компьютер, презентация, видеоматериал, аудиояҙма, дәреслек.

Маҡсат: Рауил Бикбайҙың “Уралыма” шиғырын өйрәнеү.

-Уҡыусыларҙың бәйләнешле һөйләү телмәрен үҫтереү.

-Тыуған илгә, тарихыбыҙға ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

-Рауил Бикбай кеүек үҙ иленә патриоты булырға өйрәтеү.

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу мәле.

-Һаумыһығыҙ, хәйерле көн, уҡыусылар. Мин һеҙҙе күреүгә бик шатмын. Яҡшы кәйефтәр менән әҙәбиәт дәресен башлайыҡ. Мин һеҙҙең иғтибарға видеоматериал тәҡдим итәм. Иғтибар менән ҡарағыҙ һәм бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләргә тырышығыҙ.

(Урал тауҙары тураһында сюжет)

Уҡыусылар үҙҙәренең фекерҙәрен әйтәләр.

2. Инеш әңгәмә.

-Эйе, беҙ бөгөн дәрестә Рауил Бикбайҙың “Уралыма” тигән шиғыры менән танышасаҡбыҙ.

Урал - тәбиғәте ғәжәйеп хозур, йәнлектәргә, ҡош-ҡортҡа, ҡаҙылма байлыҡтарға ифрат бай илаһи ер. Урал - Европа менән Азия сиктәрендә ятҡан, Ҡар диңгеҙенән Ҡаҙағстан ерҙәренә тиклем 2000 саҡрымдан ашыуға

һуҙылған, киңлеге 40-60, урыны менән 150 саҡрымға еткән армыт-армыт уралып ятҡан тауҙар иле. Армыт-армыт йәмле Урал тауҙарына, Ирәмәл буйҙарына таң ҡалмаған кеше кеше юҡтыр. Мәскәүҙән килгән илгиҙәр, сәнғәт белгесе Сергей Лебедев һоҡланыуын белдереп, бына шулай тип яҙған: «Был Рио-де Жанейро һәм Сан-Франциско ла түгел. Йөҙ мәртәбә яҡшыраҡ!” Йәнә көньяҡ Урал, Яйыҡ буйы тәбиғәтенә иҫе-һушы китеп, туктауһыҙ фотоға төшөрөп йөрөгән Мәскәү журналисы : « Бында бәхетле кешеләр йәшәй!» тигән.

-«Бында бәхетле кешеләр йәшәй» тигән фекерҙе һеҙ нисек аңлайһығыҙ? (уҡыусылар фекерҙәре).

-Ә бына Рауил Бикбайҙың фекерҙәре ниндәй икән? Урал тауҙарына ҡарата ниндәй уй-кисерештәре тыуған?

3. Яңы тема.

1.Шиғыр менә танышыр алдынан, Рауил Бикбайҙың тыуған яҡтарына барып ҡайтайыҡ әле. Дәреслектең 268-се битен асығыҙ. Унда биографик белешмә бирелгән. (Бер уҡыусы уның ниндәй өлкәлә, районда, ауылда тыуғаны тураһында уҡый)

-Дәрес ваҡытында ғына Ырымбурға барып етеп булмаҫ, шуға күрә интернет селтәренә мөрәжәғәт итәбеҙ инде, сөнки беҙҙең дәрестәге компьютер интернетҡа тоташҡан. (Алдан эҙләнеп ҡуйылған материал сыға. Ырымбур өлкәһенең картаһы.) Биография дауам итеп уҡыла. Экранда слайдтар сығып бара.

2. Шиғырҙы уҡытыусы уҡый.

Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау.

-Шиғыр кем йәки нимә тураһында?

-Ул ни өсөн шулай тип атала?

-Тыңлау барышында ниндәй һорауҙар тыуҙы?

3. Һүҙлек эше:

Һын-

Килмешәк-

Баҡһам-

3. Шиғырҙы уҡыусылар уҡый.

-Автор Урал тауын нимә менән сағыштыра?

- Ни өсөн ҡылыс менән?

-Бында автор Уралды «ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа» оҡшата. Уралдың буй-һыны ни өсөн ҡандан ҡанға кергән ҡылыс һуң ул?

Билдәле, башҡорт донъяһын юҡ итергә тырыштылар. Баҫҡынсыларға, иректәрен ҡыҫыусыларға, телдәрен киҫеүселәргә, ғәзиз ерен, тәүтөйәген, илен талаусыларға ҡаршы көрәштә һәр килмешәк ошо ҡылыстан тонсоҡҡан. Артабан автор Уралға, йәғни «ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа», тимәк, тыныс тормошто теләүсе, кәрәк булһа, уяу һаҡта тороусы ҡылысҡа, ҡарап һоҡлана.

-Әйҙәгеҙ ошо ерҙе текстан табып уҡығыҙ. (Уҡыусылар уҡыйҙар)

- Ошонда тағы ла бер һорауҙы асыҡлап китәйек. Ниңә шағир Уралға күпме генә ҡараһа ла күҙе талмай? Ә инде даланың зәңгәр ситтәренә, офоғона ҡараһаң, күҙең тала, ти? Бында Урал менән дала төшөнсәләре икеһе ике нәмә. Урал — тыуған ил, тәүтөйәк, Ватан. Ватансы булған кеше ана шул Ватаны менән һоҡлана. Тәүтөйәгенең төрлө яҙмышҡа дусар булған мәлдәрен, йөрәген ҡанһыратып, бөтә рухи булмышы, күңеле менән тәрән кисергән сәсән Уралға ҡарап туя алмай. Урал — ата-бабаларыбыҙҙың күҙ ҡараһылай һаҡлаған, килер быуындарға нәҫер әйтеп, мираҫ итеп ҡалдырған йәнтөйәге. Ул йәнтөйәк шағир өсөн изге, иман булып ҡанына һеңгән, моң булып йөрәгенә үткән, илһам булып хис-тойғоһон балҡытҡан, ата-бабалар аманаты булып аңына, зиһененә, аҡылына көс-көҙрәт биргән.

-Уҡыусылар, жанры буйынса был әҫәр ниндәй?

-Ни өсөн лирик шиғыр? Яуаптарығыҙҙы дәлилләгеҙ.

Урал изгеләрҙән изге ил, башҡорттоң тәүтөйәге, ҡаһарман халыҡтың моң бишеге, выжданы, намыҫы. Шуға ла шағир: «Күпме генә һиңә ҡараһам да, күҙем тала белмәй, Уралым», — тип әйтә. Уралға ҡарап Рауил Бикбаев ҡына түгел, ә башҡа бик күп билдәле кешеләр ҙә һоҡлана. Ошоноң нәтижәһендә бик күп матур йырҙар, әҙәби әҫәрҙәр тыуа.

-һеҙҙең иғтибарға “Уралтау” тигән йыр тәҡдим итәм.

-Йыр һеҙгә оҡшанымы?

-Нимә тураһында һүҙ бара?

-Ошо йырҙы тыңлағас һеҙҙә тыуған ил менән ғорурланыу хисе тыуамы?

4. -Ә хәҙер беҙ һеҙҙең менән төркөмдәрҙә эшләп алабыҙ. Беренсе рәт - беренсе төркөм, икенсе рәт - икенсе төркөм, өсөнсө рәт - өсөнсө төркөм. Һеҙҙең бурыс- шиғырҙы тасуири уҡырға әҙерләү һәм уҡып ишеттереү (паузаларҙы, логик баҫымды, интонацияны һ.б. күрһәтәләр). Ҡайһы төркөмдөң эше нисек килеп сығыр?

Уҡыусыларҙың сығышы.

4. Дәрестә йомғаҡлау.

-Беҙ бөгөн ниндәй әҫәр менән таныштыҡ?

-Жанры буйынса ниндәй шиғыр?

-Дәрестең башына әйләнеп ҡайтып, Мәскәү журналисының һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек әле. Нимә тигән ул? (Бында бәхетле кешеләр йәшәй)

- Был һүҙҙәр беҙгә лә ҡағыла. Ысынлап та шулаймы?

-Һеҙ бәхетлеме бында йәшәүегеҙ менән?

-Ни өсөн?

- Ә Рауил Бикбай? Әйҙәгеҙ интернет селтәре аша уға ошо һорауҙы ебәрәбеҙ. Икенсе дәрестә уҡырбыҙ. (Класташтар сайты аша уға һорау яҙалар)

5. Уҡыусыларҙың дәрестәге яуаптарын баһалау.

Өй эше: Урал тураһында өҫтәмә материал алып килергә.

РАУИЛ БИКБАЕВ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!»

Шәймиева Эльза Сәғит ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 7-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат :

1. Поэманың йөкмәткеһен үҙләштереү;
2. Тасуири уҡыу һәләттәрен үҫтереү;
3. Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, тиҫтерҙәренән тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү.

Йыһазландырыу :

Р.Бикбаевтың портреты, компьютер, проектор, һүҙлектәр, шағирҙың китаптары, тестар.

Дәрес барышы :

I. Ойоштороу мәле.

Иҫәнләшеү.

II. А) артикуляцион күнегеү.

Ул урманға бай, тауға бай,
Яланы йәшел матур баласҡан.
Шунда минең тыуған илем,
Һөйгән ерем – Башҡортостан.

- Шиғыр өҫтөндә эш : уҡыу, анализлау, әңгәмә.

Б) инеш әңгәмә.

- Бөгөнгө дәресебеҙҙең темаһын белер өсөн кроссворд сисеп беләйек. Мин һеҙгә йомаҡтар ҡоям, ә һеҙ яуабын табығыҙ. Иғтибар менән тыңлағыҙ (йомаҡтар сәсеү).

1. Аҡ ашъяулыҡ таптым,
Ер өҫтөнә яптым. (Ҡар)
2. Ерҙә ята табаҡ, уның исеме ... (Ҡабаҡ)
3. Күҙгә лә күренмәй,
Кеше унһыҙ йәшәй алмай. (һауа)
4. Юҡ теле, юҡ күҙе, һөйләй өйрәтә үҙе. Телгә унан оҫта юҡ, унан яҡын дуҫ та юҡ. (китап)
5. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ ҡапҡа аса(ел)

- Тимәк, ниндәй исем килеп сыҡты? (Рауил)
- Эйе, Рауил Бикбаев. Ә ул кем? Уның ниндәй шиғырҙарын уҡығанығыҙ бар? Бына уның портреты.

III. Төп өлөш.

(Слайд №1) Р. Бикбаев тормош юлы һәм ижады.

- Афарин, уҡыусылар. Бөгөнгө дәрестә Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным- һыуҙар биреҙ” тигән поэма менән танышасаҡбыҙ. Был шиғырҙы уҡыр алдынан иҫкә төшөрөп үтәйек: һеҙ тәбиғәт тураһында ниндәй шиғырҙар беләһегеҙ?(уҡыусыларҙың тәбиғәт тураһында шиғырҙар һөйләүен тыңлау).
- Хәҙер дәфтәрҙәрегеҙҙе асып, бөгөнгө числоны һәм теманы яҙып ҡуйығыҙ. Нисек уйлайһығыҙ, был поэма нимә тураһында?
- Һеҙ һәр берегеҙ үҙегеҙҙең фекерҙәрегеҙҙе әйтеп киттегеҙ, ә кемдеке дөрөҫ икәнен белер өсөн был поэманы уҡып үтәйек.
- Уҡыр алдынан һүҙлек эше эшләп китәйек. Бына һеҙҙең иғтибарығыҙға ошондай һүҙҙәр тәҡдим итәм, таҡтаға ҡарағыҙ.

монарланыу – покрываться мглой
ҡарғыш – проклятие
пәрҙә - занавеска
ағыулы – ядовитый
оран – клич
мәғрүр – гордый
хафа – беспокойство

Һүҙлек эше: уҡыу, анализлау, яҙыу, иҫтә ҡалдырыу өсөн күнекмәләр.

- Хәҙер поэманы сылбырлап уҡый башлайыҡ (поэманы аҙағына тиклем уҡыу).

Һорауҙарға яуаптар:

1. Уҡыусылар, поэма нимә тураһында?
2. Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьсораттар ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?
3. Поэмала тәбиғәт унда нисек һүрәтләнә?
4. Ниндәй ҡала тураһында һүҙ алып барыла?
5. Автор ниндәй проблемалар күтәрә, ни өсөн уның йәне әрней?
6. Был поэма ни өсөн “Һыуһаным- һыуҙар биреҙ” тип атала?
7. Экология проблемалары ниндәй юлдарҙа әйтелә? (Экологик темаға һүрәттәр ҡулланыу)

Тимәк, был поэма бөгөнгө көндә лә актуаллеген юғалтмаған.

- Поэма өҫтөндә төрлө уҡыу күнекмәләре үткәрәйек: уҡытыусы төрлө урындан уҡый, ә уҡыусылар табып дауам итә; уҡытыусы хата менән уҡый, ә уҡыусылар был хатаны табып төҙәтә.
- Хәҙер поэманан тәбиғәт күренештәрен табып уҡыйыҡ (уҡыу).

III.Ныҡытыу.

Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады буйынса тест һорауҙары.

(Слайд №2)

1. Р.Бикбаев ҡасан тыуған?

а) 1928 йылда;

б) 1938 йылда;
в) 1939 йылда;
г) 1941 йылда.
2. Р.Бикбаев ҡайҙа тыуған?
а) Ырымбур өлкәһендә;
б) Башҡортостанда;
в) Силәбе өлкһендә;
г) Һамар өлкәһендә.
3. Р.Бикбаев әлеге көндә ниндәй вазифа башҡара?
а) Яҙыусылар союзы рәйесе;
б) Мәғариф министры;
в) БДУ ректоры;
г) «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире.
4. Р.Бикбаевтың бер поэмаһы нисек атала?
а) «Халҡыма хат»;
б) «Күлдәк»;
в) Үлмәҫбай»;
г) «Табыныу».
5. Р.Бикбаевтың экология темаһы яҡтыртылған поэмаһы нисек атала?
а) «Аманат»;
б) «Икмәк еҫе»;
в) «Бөрөләр»;
г) Һыуһаным-һыуҙар бирегеҙ!»
6. Р.Бикбаев - …
а) Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы;
б) Башҡортостандың халыҡ шағиры;
в) Башҡортостандың халыҡ шағиры һәм яҙыусыһы;
г) Башҡортостандың халыҡ артисы.
7. Р.Бикбаев ҡайҙа уҡыған?
а) Башҡорт дәүләт университетында;
б) Башҡорт дәүләт педагогия университетында;
в) Башҡорт дәүләт аграр университетында;
г) Ырымбур дәүләт университетында.
8. Р.Бикбаевтың атаһының исеме нисек?
а) Таһир;
б) Төхвәт;
в) Тимер;
г) Тәлғәт.
9. Р.Бикбаев -…?
а) күренекле әҙәбиәт ғалимы;
б) күренекле тел ғалимы;
в) тарих фәндәре докторы;
г) педагогия фәндәре докторы.

IV. Йомғаҡлау.

- Шулай итеп, бөгөнгө дәрестә ниндәй поэма менән таныштыҡ? Кем яҙған? Нимә тураһында? Кемдең фекере дөрөҫ булып сыҡты?

Өй эше: экологияны һаҡлау буйынса тиҫтерҙәренә мөрәжәғәт яҙырға.

Баһалау.

“ҒҮМЕР ЮЛЫМ....”.

(Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына арналған сара)

Буданцева Гөлназ Ришат ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 6-сы урта мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙы шағирҙың тормош юлы һәм ижады менән таныштырыу; үҙ аллы эшмәкәрлеккә өйрәтеү, һөйләү телмәрен үҫтереү; шәхескә ҡарата һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү; тормош юлын, ижадын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу.

Йыһазландырыу: дәреслек, интерактив таҡта, китаптарынан күргәҙмә.

Сара барышы.

Алып барыусы. Хәйерле көн, ҡәҙерле тамашасылар! Тапшырыубыҙҙы башлайбыҙ. Студияла … (уҡыусы исем, фамилияһын әйтеп ишеттерә). (Музыка яңғырай). Бөгөнгө сығарылыш Башҡортостандың халыҡ шағиры, республикабыҙҙың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рауил Төхфәт улы Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына бағышлана. Кем ул Рауил Бикбаев? Ҡайҙа һәм ҡасан тыуған? Ҡайҙа белем ала? Ниндәй шиғырҙар, поэмалар ижад итә? Башҡа ғалимдар, шәхестәр уның тураһында ниндәй фекер йөрөтә? Ошо һәм башҡа һорауҙарға яуаптар ҡаралыр (музыка тамалана).

Ә хәҙер ошо темалар хаҡында тулыһынса.

Һәр халыҡтың үҙ дәүеренә ҡарата алдынғы фекер йөрөтөүсе аҡыл эйәләре була. Улар милләтте белемгә, ғилемгә өндәүсе, тыуған халҡы, туған теле хаҡында борсолоусы ябай һәм бөйөк шәхестәр. Шундайҙарҙың береһе – республикабыҙҙың йәмғәт эштәрендә ҡатнашыусы, матбуғатта көнүҙәк мәсьәләләр буйынса публицистик яҙмалар, әҙәбиәт, шиғриәт хаҡында мәҡәләләр менән йыш сығыш яһаусы Рауил Төхфәт улы Бикбаев. Уның 75 йәшлек юбилейы етә.

Республикала юбилей байрамы сиктәрендә, башҡорт халыҡ шағирының ижадын, тормош юлын, фәлсәфәһен тәрәнерәк, күләмлерәк өйрәнеү, уның әһәмиәтен билдәләү маҡсатынан райондарҙа, ҡалаларҙа әҙәби, ғилми саралар, кисәләр уҙғарыла килә.

Ә хәҙер Нефтекама ҡалаһының 6-сы урта мәктәбендә Р.Бикбаевтың юбилейына бағышланған кисәнең өҙөгөн ҡарап үтерһегеҙ. (слайдта шағирҙың портреты). Репортаж (уҡыусының исем, фамилияһы).

Корреспондент. Республиканың барлыҡ ауылдарында ла, райондарында ла халыҡ шағиры, шиғриәт һәм фәнни тормошонда эшләүсе Рауил Бикбаевты яҡшы белә. Бөгөнгө репортажда Нефтекама ҡалаһының 6-сы урта мәктәбендә лә шағирҙың 75 йәшлек юбилейына айҡанлы кисә уҙғарыла.

Рауил Бикбаев тураһында ниндәй мәғлүмәттәр белә икән уҡыусылар? Ошо һорау менән уҡыусыларға мөрәжәғәт иттек. Ә хәҙер уларҙың яуаптарын тыңларбыҙ.

- Р. Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуа? (слайдта шағир тыуған Ырымбур өлкәһе, Үрге Ҡунаҡбай ауылы, Соран йылғаһы күрһәтелә,)

1-се тамашасы: Р. Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған.

- Р. Бикбаев ҡайҙа белем ала? (слайдта шағирҙың бала сағы, студент саҡтарының фотолары күрһәтелә)

2-се тамашасы: 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Ғәбдерәфиҡ ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. 1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты тамамлағас, филология факультетына уҡырға инә. 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда “Хәҙерге башҡорт поэмаһы” тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай. Утыҙ йылға яҡын ошо Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй. 1996 йылда ул филология фәндәре докторы тигән ғилми дәрәжәгә өлгәшә. 1995 йылда Р. Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде. 1995 йылда Р. Бикбаев Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе итеп һайлана. Башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙәге ҙур уңыштары өсөн уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

- Ниндәй шиғырҙар, поэмалар ижад итә шағир? Уларҙың тематикаһы?

3-сө тамашасы: Р. Бикбаевтың шиғырҙары 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә. 1964 йылда “Дала офоҡтары” тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы сыға. 1967 йылда Р. Бикбаев “Ҡош юлы” тигән 2-се китабы поэзияһының офоҡтары һаман киңәйә барыуын күрһәтте. 1969 йылда “Автобиография” исемле китабы донъя күрә. Бында шағир һәм заман, шәхес һәм халыҡ бәйләнеше һүрәтләнә. “Уҡ”, “Революция”, “Халҡыма хат” шиғырҙары, “Һыуһаным-һыуҙар биреген!”, “Мәңгелек мәл” поэмалары һәм башҡа әҫәрҙәрендә шағирҙың Тыуған ил, халыҡ, йәмғиәт тормошона арналған, публицистик пафос Р.Бикбаевтың поэзияһы төп өлөшөн тәшкил итә һәм үҙенсәлекле сифаттарын билдәләй. Р.Бикбаев поэзияһы халыҡсан аҡыллығы, тос фекерҙәре, тапҡыр һүҙҙәре менән көслө.

Р. Бикбаевтың 70-се йылдар уртаһында сыҡҡан бер китабы “Ғүмер уртаһы” тип атала. Ир уртаһы йәшенә етеүен белдереүенән бигерәк, уның билдәле бер ижад ғүмере миҙгелен аңлата ине. Ғүмер уртаһында автор үҙен өлгөрөп еткән шәхес һәм шағир итеп тоя. Үҙ ғүмер һәм ижад юлына тәнҡит ҡарашы менән баға, алдына тағы олораҡ, талапсаныраҡ бурыстар ҡуя.

Р. Бикбаевтың да “Ғүмер уртаһы” шиғырын яңы бейеклектәр яуларға вәғәҙә иткән етди әҫәре, ир-егеттең берәгәйле һүҙе тип ҡарарға хаҡлыбыҙ. Әйткән һүҙ – атҡан уҡ: (уҡыусы шиғыр һөйләй)

Ғүмеребеҙҙең аҫыл миҙгелендә
Ебәрмәйек елгә ир һүҙен.
Ир уртаһы – илдең тотҡаһы, тип
Ҡарай бөгөн беҙгә ил күҙе.

Ғөмүмән, “Ғүмер уртаһы” йыйынтығы шағирҙың тотош бер осор ижад миҙгелендә поэтик йомғаҡ, алдағыһына ир-егет вәғәҙәһе, шул юлда шиғри бер артылыш юғарылығы сифатында һынлана.

Исем, фамилия. Яңылыҡтар хеҙмәте, Нефтекама ҡалаһы.

Алып барыусы. Р. Бикбаевтың ил һәм заман тураһындағы фекерҙәре кеше һәм халыҡ яҙмышы, заманалар, илдәр, ғөмүмән, кешелек тураһындағы уйланыуҙарға ҡушылып китә. Тимәк, заманалары ниндәй - моңдары ла шундай һүҙ оҫтаһының.

Ә хәҙер артабанғы репортажды ҡарағыҙ.

Корреспондент: Башҡорт әҙәбиәтендә бер матур традиция йәшәп килә. Ул – заманаларҙың, йәмғиәт тормошоноң ауыр йәки хәл иткес саҡтарында халыҡҡа шиғри хат менән мөрәжәғәт итеү йолаһы. Ошо традицияларҙы дауам итеп, халҡыбыҙ Рауил Бикбаев та “Халҡыма хат” шиғырын яҙа. Һеҙҙең иғтибарға шағирҙың тыуған Үрге Ҡунаҡбай ауылы мәктәбендә үткән башҡорт әҙәбиәте дәресе өҙөгөн тәҡдим итәбеҙ. Шәйехзада Бабич, Рәшит Нигмәти, Рәми Ғариповтар кеүек, башҡорт теле хаҡында ғорурланып һәм тел яҙмышы хаҡында борсолоп, Рауил Бикбаев туған халҡыма мөрәжәғәт итә: (11 класс уҡыусыһы яттан шиғыр һөйләй, экранда слайдтар күрһәтелә)

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлар ғорурланам,

Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Туған телкәйемдең хәлкәйенән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Халҡына хаты - халыҡ шағирының намыҫ һүҙе, йөрәк һүҙе ул. Йөрәктән сыҡҡан һүҙ генә йөрәккә барып етә ала. Йөрәктә шундай рух йәшәгәндә туған телебеҙ ҙә ҡеүәтләнеп, милләтебеҙҙең мәртәбәһе күпкә үҫеп китәсәк.

Репортаж исем, фамилия Ырымбур өлкәһе, яңылыҡтар хеҙмәте.

Эфирҙа реклама (йыр башҡарыу).

Алып барыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаевтың юбилейына арналған Өфө ҡалаһының Әхмәт-Зәки Вәлиди китапханаһында үткәрелгән саранан өҙөк.

Корреспондент. Өфө ҡалаһының Әхмәт-Зәки Вәлиди китапханаһында уҡыусылар араһында шағирҙың тормош юлына һәм ижадына арналған кроссвордтар төҙөү конкурсы ойошторолдо. Уҡыусылар тырышып шағирҙың юбилейына төрлө кроссвордтар башҡарған. Бына миҫал өсөн ошо кроссворд. Уны Рәми Ғарипов исемендәге башҡорт республика гимназия – интернатының 11 синыф уҡыусыһы төҙөгән (слайд).

1. “.....- шағирҙың күңел биографияһы”, ти Герцен.
2. 1964 йылда Р. Бикбаевтың донъя күргән тәүге йыйынтығы.
3. “Булһаң икән дауыл ҡанаты!
Осам, осам дауылдарға ҡаршы, ҡанатымды ҡанатып” (шиғырҙың исеме).
4. Р. Бикбаевтың тормош иптәшенең исеме.
5. Шағирҙың уйлауынса бөгөнгө көндөң иң ҙур дефициты нимәлә күренә.
6. Урғылған ҡаҙан аҫтынан
Үрелгән төтөн менән,
Сабый иренемдән тамған
Әсәмдең һөтө менән (шиғырҙың исеме).
7. Август..... Йондоҙ яуа.
Беҙҙең һарай түбәһенә.
Офоҡтағы ялағайҙар
Ялтлап яна, ялтлап һүнә.
8. 1993 йылда шағирға ниндәй исем бирелә.
9. Р. Бикбаевтың “..... сығам сәхәрҙәрҙә” тигән китабы башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын өр-яңы баҫҡыҫҡа күтәрҙе.
10. Шағирҙың әсәһенең исеме.
11. Р. Бикбаев БР Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтайҙың 4-се саҡырылыш .....
12. Р. Бикбаев 2000 йылда ниндәй орден менән бүләкләнә.
13. Шағир “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” баҫмаларын нисә томда яҙа.
14. Б. Бикбаевтың ниндәй шиғырында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелеү, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ турыһында әйтелә.
15. Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя – баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡ
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:
–..... бында башлана!
16. Шағирҙың 2008 йылда ижад иткән хеҙмәте.
17. Рауил Бикбаев башҡорт поэзияһының ниндәй жанрҙың үҫешенә ҙур өлөш индерә.
18. Шағирҙың тыуған ауылының исеме.
19.

19. Һиңә баҡһам, күңелем күтәренке,
Киләсәгем шат та, тыныс та;
Сөнки беләм:
Иңдәрендә илдең
Урал тигән һынмаҫ ҡылыс бар (шиғыр исеме).

20. Р. Бикбаевтың Дауыт Юлтый иҫтәлегенә яҙған шиғырының исеме.

21. 1962 йылда “Ағизел” журналында авторҙың ниндәй поэмаһы донъя күрә.

Алып барыусы. Ғөмүмән, Рауил Бикбаев – заман пульсын тоя белеүсе, халыҡты борсоған социаль, иҡтисади һәм мораль-этик мәсьәләләрҙе ваҡытында күтәрә белеүсе олпат шағир. Уның ижадына баһа бирep, поэзиябыҙҙың аҡһаҡалы Мостай Кәрим былай тигәйне: “Рауилдың “башлап яҙыусылар” ҡоронда йөрөгәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым. Тәүге шиғыр китаптары күп тыуа, ләкин тәүге китабы менән бергә һөрәнләп әҙәбиәт донъяһына килгән шағир һирәк. Шул һирәктәрҙең береһе – Рауил Бикбаев”.

Ошоноң менән бөгөнгө тапшырыуыбыҙ тамам. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт. Һау булығыҙ!

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!” ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Мәтиғуллина Земфира Әхнәф ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы 4-се урта белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, поэма йөкмәткеһе менән таныштырыу, фекерләү һәләтен һәм бәйләнешле телмәрҙе үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу, тыуған яҡҡа һөйөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, матурлыҡты күрә һәм тоя белергә өйрәтеү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, китаптары; мультимедиа; башҡорт халыҡ йыры “Йәмле Ағиҙел буйҙары” яҙылған диск; компьютер; видеотаҫма; Ағиҙел буйҙарын сағылдырған слайдтар.

Дәрес барышы.

I.Ойоштороу мәле.

1. Ситуация тыуҙырыу. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.

(Экранда Ағиҙел йылғаһының рәсеме. Башҡорт халыҡ йыры “Йәмле Ағиҙел буйҙары” яңғырай. Уҡыусылар йырҙың исемен, уның нимә тураһында икәнен әйтә.)

- Бөгөн беҙ ҙә һеҙҙең менән йәмле Ағиҙел буйҙарына сәйәхәт ҡылырбыҙ, уның гүзәллегенә һоҡланырбыҙ.

2.“Психологик атмосфера” ситуацияһын тыуҙырыу. Экранда өс төрлө маска сыға. Уҡыусылар үҙ кәйефенә тура килгән масканы һайлай.

- Сәйәхәткә ниндәй кәйеф менән барағыҙ?

II.Төп өлөш.

1.Өйгә эште тикшереү.

- Интернет селтәр аша Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев тураһында ниндәй ҡыҙыҡлы мәғлүмәт таба алдығыҙ?

(Уҡыусыларҙың сығыштары)

- Шулай итеп, Рауил Бикбаев тураһында бик күп ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тапҡанһығыҙ. Бик яҡшы.

- Һеҙҙең иптәшегеҙ шағир тураһында презентация эшләгән. Әйҙәгеҙ был эш менән дә танышып китәйек. (Презентация ҡарау, баһалау)

2. “ Һыуһаным, һыуҙар бирегеҘ!” поэмаһына инеш. Магнитофон яҙмаһынан аҡрын ғына музыка ағыла.

Ағиҙелкәй аға урғып-урғып,
Ҡояш байыштары яғына.
Таштар аҡтарырға ҡыуһалар ҙа,
Ағиҙелкәй, һине һағынам...

- Ысынлап та, башҡорт халҡының бөтә тормошо Урал тауҙарында, Ағиҙел буйында үткән. Халыҡ шағиры Рауил Бикбаев та Ағиҙелде данлап, уның киләсәге тураһында ҡайғыртып, “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҘ!” поэмаһын яҙған. Бөгөн беҙ дәрестә шағирҙың поэмаһы менән нимәләр әйтергә теләгәнен, ни өсөн уның күңеле тыныс түгел икәнен аңларбыҙ.

3. География уҡытыусыһы Ағиҙел йылғаһы тураһында мәғлүмәт менән таныштыра. (Видеотаҫманан Ағиҙел буйҙарын ҡарау һәм йылғаға характеристика биреү.)

4. Һүҙлек эше.

хафа- беспокойство
шеш- опухоль
бушбоғаҙ – горлопан
һөрән – ҡысҡырыу,призыв
ҡыуғын – сплав
ҡырғын – мор
ылымыҡ –водоросль
элмәк – петля

Уҡыусылар һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен асыҡлайҙар, улар менән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр төҙөйҙәр.

III. Яңы тема.

1) Уҡытыусының дәреслектә булған поэманан өҙөктө өлгөлө уҡыуы.

2) Уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы.

3) Поэманың йөкмәткеһе өҫтөндә эш. Түбәндәге һорауҙар ярҙамында әңгәмә үткәрелә.

-Автор был әҫәрҙә ниндәй проблема күтәрә?

-Поэмала һүҙ нимә хаҡында бара?

-Әҫәр ни өсөн “ Һыуһаным, һыуҙар бирегеҘ!” тип атала?

-Өҙөктә Башҡортостандағы ниндәй һыуһаҡлағыстар телгә алына?

4) География уҡытыусыһы сығышы. Башҡортостандағы һыуһаҡлағыстар тураһында һөйләй. Уҡыусылар һыуһаҡлағыстарҙы картанан таба, ниндәй райондар территорияһында урынлашҡандарын билдәләй.

- Автор өсөн бындай һыуһаҡлағыстар төҙөүгә ҡаршы сыға? Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ ниндәй?

- Беҙҙең тирәлә ниндәй һыуһаҡлағыс бар?

- Уның таҙалығын, тирә-яғының матурлығын һаҡлау өсөн нимәләр эшләнә?

- Һеҙ был эштәрҙә ҡатнашҡанығыҙ бармы?

4) Парҙар менән эшләү.

Поэманан сағыштырыуҙарҙы табыу. (Уҡыусыларға эшләү өсөн биш минут ваҡыт бирелә. Эш баһалана.)

- Рауил Бикбаевтың шиғриәте һүрәтләү сараларына бик бай. Иң киң таралғандарынан – сағыштырыу.

1.Юҡ- бар диңгеҙеңдән былайыраҡ
Һыуһаҡлағыс бында буласаҡ!

2.Һыу төбөндә батҡан ағас-
Ағыулы бер мина һымаҡ.

3.Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары. һ.б.

IV.Нығытыу.

1)Шиғырҙы тасуири уҡыу, нығытыу.

- Был поэмаһы менән автор ни әйтергә теләй?

- Әҙәбиәттә әленән-әле Ағиҙел йылғаһына, тәбиғәткә бағышлап әҫәрҙәр ижад ителә. Тәбиғәт проблемаһы берәүҙе лә битараф ҡалдырмайҙыр. Рауил Бикбаев та үҙ әҫәрендә көн проблемаһын күтәреп сыға. Ул өлкән шағир Рәшит Ниғмәти тасуирлаған Ағиҙел менән Ағиҙелдең хәҙерге хәлен сағыштырып ҡарай.

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары?
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

- тигән тура һорауҙы ла ҡуя ул. Йәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел буйҙары, тәмле түгел шул хәҙер Ағиҙел һыуҙары тигән хәүеф- хафалы уйҙарын, ғәмәлдәге – хәҙерге хәлдәрҙе аса.

Шағир өсөн “Ағиҙелдең көнө – илдең көнө. Ағиҙелдең йөҙө – ил йөҙө” үлсәмендә. Ер-һыуҙарың ниндәй - ил-йорттарың да шундай. Шуның өсөн тыуған тәбиғәтебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, уны һаҡлайыҡ. Ул беҙҙе туйындырыусы ла, кейендереүсе лә. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә ниндәй хәлдә бүләк итеп ҡалдырған, беҙ уны шул килеш килер быуындарға тапшырырға тейешбеҙ.

V. Йомғаҡлау.

- Балалар, беҙ – тәбиғәт балаһы. Тәбиғәт – беҙҙең уртаҡ өйөбөҙ. Уны һаҡлайыҡ. Уның байлыҡтарын әрәм-шәрәм итмәйек. Беҙ тәбиғәткә ҡарата рәхимһеҙ булһаҡ, килер быуындарға ни ҡалыр? Тәбиғәткә сәйәхәткә сыҡҡанда ла, урманда еләк-емеш йыйғанда ла, йылғаһында балыҡ ҡармаҡлағанда ла, Урал батыр ейәнсәрҙәре икәнлегегеҙҙе онотмаһағыҙ ине.

VI. Рефлексия.

- Һеҙгә бөгөнгө дәрес оҡшанымы? Нимәләр оҡшаны? Ниндәй яңылыҡтар белдегеҙ? Нимәләр өйрәндегеҙ? Улар һеҙгә киләсәктә кәрәк буласаҡмы?

(Уҡыусылар дәрескә баһа ҡуя, үҙ эштәре менән ҡәнәғәт булыу-булмауын әйтә, яуаптарын дәлилләй. Баланың эшмәкәрлеге, хеҙмәте баһалана.)

VII. Өйгә эш. 1-се төркөм “Ағиҙелкәй” исемле презентация төҙөй, 2-се төркөм ошо уҡ темаға кескәй инша яҙа йә проект эшләй, 3-сө төркөм Ағиҙел тураһында шиғыр ижад итә.

РАУИЛ БИКБАЕВ. “ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ”

Вәлиева Зилә Камил ҡыҙы,
Октябрьский ҡалаһы
«10-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе»

Маҡсат:

- Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев тураһында уҡыусыларға белешмә биреү, шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереп, тасуири уҡырға өйрәтеү; һүҙлек менән эшләү күнекмәләрен нығытыу; һүҙлек запасын байытыу; уҡыу техникаһын камиллаштырыу.

- Уҡыусыларҙың уҡыу, һөйләү һәм яҙыу телмәрен, һүҙлек эше аша башҡорт һүҙҙәренең мәғәнәләренә иғтибарын, ҡыҙыҡһыныуын үҫтереү.

- Тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш, яратыу хистәре тәрбиәләү.

Предмет: башҡорт теле һәм әҙәбиәте.

Класс: 4.

Дәрес төрө: яңы материал менән танышыу дәресе.

Уҡытыу методы: күрһәтеү-аңлатыу, эҙләнеү методтары.

Уҡытыу алымдары: әңгәмә, һорау-яуаптар, кроссворд сисеү, йомаҡтар сисеү, карточкалар менән эш, таҡтала һәм дәфтәрҙә эш, һүҙлек менән эш, тәржемә итеү, уҡытыусының тасуири уҡыуы, уҡыусыларҙың куплетлап, сылбырлы уҡыуы, уйын, ИҠТ ҡулланыу, ял минуты, уйындар уйнау, ижади эш.

Принциптар: фәннилек, теория һәм практика берлеге, эҙмә-эҙлеклелек, коммуникатив.

Яңы термин-төшөнсәләр: шыйыҡ, һығыу, һарылып, хаҡ.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, Р. Бикбаевтың ижадына бағышланған китаптар күргәҙмәһе, компьютер, презентация материалдары (тәбиғәт тураһында һүрәттәр, кроссворд, текст һәм һүҙлек һүҙҙәре, өй эше төрҙәре), интерактив таҡта, мультимедиа проекторы, уҡыусыларҙың “Яҙ” темаһына яҙған иншалары, “Ҡайын” тураһында яҙылған текст карточкалары, тест һорауҙары яҙылған карточкалар, таҡта, аҡбур.

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу моменты.

1.1Психологик кәйеф шарттары булдырыу.

Уҡытыусы:

Һаумыһығыҙ! Һаумы әле!
Ниндәй йылы һүҙ икән!
Һәр күңелде иретерлек,

Һәр кемгә лә үҙ икән.
Берәү әйтә танышына:
“Туған, хәйерле иртә!”
Йылы һүҙҙән тыуған шатлыҡ
Көнө буйына етә.
(М. Дилмөхәмәтов.)

Уҡытыусы: Һаумыһығыҙ, уҡыусылар! Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек!
Һаумы, ҡояш,
Һаумы, зәңгәр һауа,
Һаумыһығыҙ, уҡытыусым,
Һаумыһығыҙ, дуҫтарым!

Уҡытыусы:

Уҡыусылар! Дәресте башларға рөхсәт итегеҙ. Бөгөн класта кем дежур? Кемдәр юҡ класта? (дежурҙың отчеты)

Уҡыусылар, башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телмәр ағзаларына күнекмәләр эшләп алайыҡ әле.

1.2 Артикуляцион күнегеүҙәр. “Көҙгө” (теш таҙартыу, тултырма, йылмайыу, көрәк)(3 тапҡыр).

1.3 Тын юлдарына күнегеү. “Яра”.

Уҡытыусы:

Тәндәге яра әрнемәһен өсөн нимә эшләйбеҙ? (3 тапҡыр).

“Шар өрөү” – бер тында оҙаҡ итеп өрөү;

“Торба” – телде торба кеүек бөрөп, яй ғына тын өрөү.

1.4. Телгә күнегеү. “Телде тешләү”.

Уҡытыусы:

Әйҙәгеҙ, аҡрын ғына итеп телдең осон, ситтәрен тешләп сығабыҙ.

“Сәғәт” – телде ауыҙҙан сығарып, бер уңға бер һулға йөрөтөү (8-10 тапҡыр)

1.5 Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр.

Ға-ға-ға – әйҙә киттек урманға.
Шә-шә-шә – урманда еләк бешә.
Ле-ле-ле – ауыҙ итәйек әле,
Ге-ге-ге – ҡалай тәмле еләге!
Са-са-са – һөйләшәбеҙ башҡортса.
Ый-ый-ый – уҡыусы шиғыр уҡый.

“Яҙ” (мультимедиа проекторы аша шиғырҙы уҡыу һәм анализлау) - (слайд №1)

Шатлыҡтар өләшеп һәр кемгә
Яҙ килә, яҙ килә еремә.
Иҫә ел наҙланып, йыуанып,
Тамсылар бейешә ҡыуанып.
Кемгәлер сер һөйләй гөрләүек,
Ҡояшты уята күләүек.
Күҙәтеп быларҙың барын да,
Сыйырсыҡ маҡтаны йырында.
Уның саф моңдарын ишетеп,
Сәскәләр йылмайҙы, ҡар тишеп.
(М. Дилмөхәмәтов)

1.6. Өй эшен тикшереү.

Уҡытыусы:

Марат (дежурға өндәшәм), ниндәй өй эше бирелгәйне?

Уҡыусы:

“Яҙ” темаһына инша яҙырға.

Уҡытыусы:

Өй эштәре әҙерме?(бер-ике уҡыусының эшен уҡытыу, баһа биреү).

2. Яңы тема өҫтөндә эш.

2.1 Дәресте актуалләштереү. Дәрестең темаһын асыҡлау.

Уҡытыусы:

Афарин! Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, бөгөн дәрестә беҙ нимә тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (уҡыусыларҙың яуаптары). Нисек белдегеҙ? (уҡыусыларҙың яуаптары).

Уҡытыусы: Эйе, дөрөҫ. Беҙ бөгөн һеҙҙең менән яҙ миҙгеле тураһында һөйләшәсәкбеҙ. Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә кроссворд сисергә кәрәк булыр. Кроссвордты сисәр өсөн йомаҡтарҙың яуаптарын әйтергә кәрәк.

1. Күктән килде, ергә китте.(ЯМҒЫР)
2. Моронһоҙ турғай боҙҙо тишә.(ТАМСЫ)
3. Күҙгә лә ул күренмәй,
   Кеше унһыҙ тора алмай. (һАУА)
4. Ике аяҡта түңәрәк ҡыуышалар тәгәрәп,
   Үҙем ултырам, үҙем сабам теләгән ергә табан. (ВЕЛОСИПЕД)
5. Аяҡһыҙ, ҡулһыҙ ҡапҡа аса. (ЕЛ)
6. Зәңгәр күктә бөркөт оса,
   Күләгәһе ерҙе ҡоса.
   Ҡанаттарын йәйеп һалды,
   Ҡояш нурын ҡаплап алды. (БОЛОТ)
7. Сиң-сиң итә, ситәнгә менә. (СИҢЕРТКӘ)
8. Быҙлай ҙа быҙлай,
   Үпкән ере һыҙлай. (СЕРӘКӘЙ)
9. Сыбар ала күлдәге,
   Тотһаң, уңа биҙәге. (КҮБӘЛӘК)
10. Көндә төн итә, үлән башын һыу итә. (ТОМАН)
11. Ем-ем итә, емелдәп китә. (ЙӘШЕН)
12. Асфальт өҫтөнән саба, эсе тулы бала-саға. (АВТОБУС)

(мультимедиа проекторы аша күрһәтәм, балалар кроссвордты сисәләр) - (слайд №2)

Уҡытыусы:

Ниндәй һүҙ килеп сыҡты?

Уҡыусылар:

Рауил Бикбаев.

Уҡытыусы:

Афарин! Эйе, бөгөн дәрестә беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың “ Тәбиғәттең теле асылған саҡ ” шиғыры менән нимәләр әйтергә теләгәнен белербеҙ.

2.2 Рауил Бикбаевтың биографияһы менән танышыу.

Уҡытыусы:

Ә хәҙер числоны, эш төрөн, теманы дәфтәргә яҙып ҡуяйыҡ. (уҡыусылар дәф-тәрҙә яҙалар).

Уҡытыусы:

Кем һуң ул Рауил Бикбаев ? (уҡыусыларҙың яуаптары). Ә хәҙер мин һеҙҙе Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән таныштырып үтәсәкмен.

(мультимедиа проекторы аша Р. Бикбаевтың портретын күрһәтеү) - (слайд №3)

Рауил Төхвәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Юғары Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғабдрахман ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

2.3 Рауил Бикбаевтың “Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғыры менән танышыу.

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, иҫкә төшөрәйек әле, беҙ бөгөн Рауил Бикбаевтың ниндәй шиғыры менән танышасаҡбыҙ?

Уҡыусылар:

“Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғыры.

а) уҡытыусының өлгөлө уҡыуы.

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, ошо шиғырҙағы бөтә һүҙҙәр ҙә һеҙгә танышмы? (уҡыусыларҙың яуаптары). Әйҙәгеҙ, шуға күрә һүҙлек эше эшләп алайыҡ. (4-се слайдты күрһәтәм).

б) һүҙлек эше (мультимедиа проекторы аша күрһәтелә, балалар һүҙлек дәфтәрендә яҙалар).

Шыйыҡ – Жидкий (-ая, -ое)

Һығыу – Выжимать

Һарылып – Прильнув

Хаҡ – Дөрөҫлөк, истина, правдивость

в) уҡыусыларҙан яңы һүҙҙәрҙе ижеккә бүлеп, дөрөҫ итеп уҡытыу; әйтелеш өҫтөндә эшләү.

г) шиғырҙы тәржемә итеү.

Уҡытыусы:

Ял итергә теләк бармы?(уҡыусыларҙың яуаптары)

Әйҙәгеҙ, тороп баҫығыҙ. Ял итеп алайыҡ.

2.4 Ял минуты.

Ҡитеп барам урмандан
Төрлө ҡыҙыҡ күп уңда,
Бына тейен һикерә,
Уна ҡуян йүгерә.
Мышы миңә: “Һөҙәм, - ти, -
Балам, һин, теймә”, - ти.
Сыҫҡан миңә: “Үҫәм, - ти.
Һине уҙып китәм”, ти.
Күңелле миңә бында
Саф һауалы урманда.

Уҡытыусы.

Шиғыр өҫтөндә эште дауам итәйек. (уҡыусылар урындарына ултыралар).

д) куплетлап, сылбырлы уҡыу.

е) һорауҙарға яуап алыу (телдән): (5-се слайдты күрһәтәм, тәбиғәт тураһында һүрәттәр)

- Шиғырҙа нимә тураһында һүҙ бара? (уҡыусыларҙың яуаптары).
- Тәбиғәттә япраҡ яҙын үҙен нисек һиҙә? Шул юлдарҙы ҡабат уҡып күрһәтегеҙ.
- Тәбиғәт менән кешегә яҙ миҙгеле нимә алып килгән?
- Автор был турала нисек әйтә? Шул юлдарҙы шиғырҙан табығыҙ.

Уҡыусылар:

Тәбиғәттең теле асылған саҡ.

Шыйыҡ ҡына йәшкелт буяҡта…(3 бала айырым уҡый, 4 бала парлап уҡый, бөтәһе күмәкләп уҡый)

Уҡытыусы:

Рауил Бикбаев был һүҙҙәр менән ни әйтергә теләгән? (уҡыусыларҙың яуаптары).

Уҡытыусы:

Ошо һүҙҙәрҙе дәфтәргә яҙабыҙ.(эш дәфтәренә яҙыу).

2.5 Хәрәкәтле уйын. “Урманда еләк күп икән, айыу бүре юҡ икән” уйыны – аяҡтар өсөн динамик күнегеү.

Түңәрәк буйлап үксәгә, аяҡтың осона һәм ҡырына баҫып йөрөү, бер урында тороп аяҡ осонан - үксәгә, үксәнән аяҡ осона күтәрелеү.

Уҡытыусы:

Афарин! Ултырығыҙ.

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, белеүегеҙсә, һәр бер кеше – тәбиғәт балаһы. Рауил Бикбаев та илебеҙҙең тәбиғәте өсөн биҡ ныҡ борсола. Сөнки һуңғы ваҡытта кешелекте “Тәбиғәтте һаҡлау”, “Экология” төшөнсәһе борсоуға һалды. Йыл һайын тәбиғәткә зыян килтереүселәр күп. Сәйәхәттә йөрөүселәр күпләп сүп ҡалдыра, янғын сығара. Шағир беҙҙе тәбиғәтте һаҡларға һәм уны яратырға өндәй. Тимәк, тәбиғәтте һаҡлау – һәр кешенең изге бурысы.Был һүҙҙәрҙе дәфтәрҙә яҙабыҙ.(эш дәфтәренә яҙыу)(6-сы слайд)

2.6 Яҙ тураһында һынамыштар уҡыу.(7-се слайд) - (һынамыштарҙы эш дәфтәренә яҙыу)

Март башында тамсы тамһа, йәй яҡшы килер

Яҙ көнө ағастар бөрөләрен аҫтан яра башлаһа, яҙ тиҙ киләсәк.

Яҙ көнө ерҙән пар күтәрелһә, йәй көнө иген дә, бесән дә уңыр.

Әгәр беренсе мартта тәҙрәлргә боҙ ҡатһа, был йылды ҡыяр уңыр.

2.7 “Осто - осто”уйыны.

Осто, осто – ҡарғалар осто.
Осто, осто – ағастар осто.
Осто, осто – япраҡтар осто.
Осто, осто – тауыҡтар осто.
Осто, осто – турғайҙар осто.

(Уйын 3-4 тапҡыр ҡабатлана.)

2.8 “Ҡайын” темаһына текст.(уҡыусыларға карточкалар таратыла, эш тәртибен аңлатам, уҡыусылар карточкала эшләйҙәр).

Ҡайын.

Юл ситендә ҡара ҡайын үҫә. Элек уның күлдәге ап-аҡ ҡына ине. Ул ни өсөн ҡарайған һуң?

Ҡайынҡай тыуған мәлдә тирә-яғында ағастар күп ине. Улар бөтәһе лә уның менән таныштылар. Имән олатай, Ҡарағас ағай, Миләш апай... Ҡайынҡай күрше Шыршыҡай менән дуҫ-лашты.

Ағастар үҙҙәрен биҡ бәхетле хис итте. Тыуған ерҙең ҡара тупрағы йәшәү бүләк иткән бит уларға.

Ҡыш етеү менән Ҡайынҡай аҡ шәл ябынды. Башҡа ағастар менән тын ғына яҙҙы көт-тө. Яҙ еткәс, бөтә тәбиғәт уянды. Ҡарҙар ирене. Ҡоштар ҡайтып оя ҡорҙо. Йылы ҡояш нур-ҙары аҫтында Ҡайын бөрөләнде, япраҡ ярҙы. Йәйгеһен тирә-яҡ сәскәләргә күмелде. Көҙ еткәс, урман алтын төҫөнә инде. Ағастарҙың япраҡтары ҡойолдо. Ҡайынҡай тағы ла аҡ шәлгә төрөнөп йоҡога талды.

Тик... Ҡышҡы иртәлә урманда кешеләр күренде. Өй һалырға тип Ҡайындың дуҫтарын ҡырҡа башланылар. Шыршыны Яңы йыл байрамына алып киттеләр.

Урман урынында буш ялан тороп ҡалды. Ҡайынҡай туҡтауһыҙ иланы.Ул ҡайғыһынан башын түбән эйҙе. Ә икенсе көндө уның олоно ҡап-ҡара ине...(“Тәбиғәт”журналынан.)

Өҫтәлмә эштәр

1. Тексты уҡы.

2. Яҙғыһын ниндәй тәбиғәт күренештәре осрай? Тамға ҡуй.V

Ҡоштар йылы яҡҡа китә.		Ағастар япраҡ яра	
Ҡоштар йылы яҡтан ҡайта.		Ҡар ирей.	
Ҡар яуа.		Ағастарҙың япраҡтары ҡойола.	

3.Ни өсөн Ҡайынҡайҙың олоно ҡарайған? Яуабыңды 1-2 һөйләм менән яҙ.

4. Тексты яңынан уҡып сыҡ. Һиңә таныш булмаған һүҙҙәрҙең аҫтына һыҙ. Уларҙы иҫәплә. Яуапты шаҡмаҡ эсенә яҙ.

Таныш булмаған һүҙ	*Уның мәғәнәһе*

3. Яңы теманы нығытыу.

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, мин һеҙгә хәҙер тест һорауҙары таратып бирәм. Уларға яуап бирәбеҙ. (карточкалар таратыла, эш тәртибен аңлатам, уҡыусылар карточкала эшләйҙәр)

- бөгөн дәрестә нимәләр тураһында һөйләштек?

а) тәбиғәт б) ғаилә в) мәктәп

- кемдең шиғырын уҡыныҡ?

а) Рауил Бикбаевтың б) Мостай Кәримдең в) Рәшит Ниғмәтиҙең

- был шиғырҙа һүҙ ниндәй миҙгел тураһында бара?

а) ҡыш б) яҙ в) көҙ

4. Баһалау.

Уҡыусылар, бөгөнгө дәрестә ҡатнашып, тулы яуаптар бирep, тырышып эшләп ултырғанығыҙ өсөн һеҙгә барығыҙға ла ҙур рәхмәт! Матур, тулы яуаптарығыҙ өсөн һеҙгә “бишле” билдәләре ҡуям. Ҡайбер уҡыусыларға өндәрҙең дөрөҫ әйтелешен ҡабатларға, һүҙҙәрҙе дөрөҫ уҡырға кәрәк. Уларға дүртле билдәһе ҡуям.

5. Өй эше. (эш төрҙәрен аңлатам, һәр бер уҡыусы үҙенә оҡшаған эште һайлап ала. Ижади эш башҡарыла).- (слайд №8)

а) “Тәбиғәтте һаҡлау” темаһы буйынса һүрәт эшләргә.

б) Яҙ тураһында мәҡәлдәр яҙып килергә.

в) “Тәбиғәтте ҡурсалау – илде һаҡлау”тураһында ,бәләкәй генә хикәйә төҙөргә.

г) Шиғырҙы тасури уҡырға

6. Теманы йомғаҡлау.

Уҡытыусы:

Был дәрестә һеҙ нимәләр белдегеҙ?

Ниндәй кәрәкле, файҙалы мәғлүмәттәр алдығыҙ?

Уҡытыусы:

Уҡыусылар, тәбиғи тигеҙлектe боҙорға ярамай, унда һәр нәмә үҙ урынында.

Балалар, тәбиғәт – беҙҙең өйөбөҙ уны бысратмайыҡ! Тәбиғәтте һаҡлау – һәр ке-шенең изге бурысы!

Уҡытыусы: Дәрес тамам. Ҡиләһе осрашҡанға тиклем, һау булығыҙ! (слайд №9)

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ХАЛҠЫМА ХАТ» ПОЭМАҺЫ БУЙЫНСА ДӘРЕС-ҠОРОЛТАЙ

Саҙретдинова Гүзәл Мөнәүир ҡыҙы,
Илеш районы Ишҡар урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1. Шағирҙың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү. 2. Телмәр үҫтереү, тасуири уҡыу күнекмәләрен биреү. 3. Милли үҙаң тәрбиәләү, халҡыбыҙ яҙмышы тураһында уйланыу, үҙ теленде ҡәҙерләргә, киләсәген хәстәрләргә өйрәтеү.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаевтың портреты, китаптары, слайдтар, тапҡыр, ҡанатлы һүҙҙәр, мәҡәлдәр, әйтемдәр яҙылған плакаттар, фонояҙма.

Дәрес барышы.

Хәйерле иртә, хөрмәтле уҡыусылар! Бөгөн беҙ дәрес-ҡоролтайға йыйылдыҡ. Ә нимә һуң ул ҡоролтай?

(Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау. Яҡынса яуаптар интерактив таҡтала күрһәтелә бара). 1.Ҡоролтай - бөтә ил вәкилдәре ҡатнашлығында үткәрелгән ижтимағи-сәйәси йыйылыш, съезд. 2.Түңәрәкләп ултырған кешеләр төркөмө. Һөйләшер, кәңәшләшер өсөн йыйылған йыйын.

-Тимәк, ҡоролтай - халыҡ вәкилдәренең бергә тупланып, йәшәү рәүешен күтәреү, милләтте, телде һаҡлау, йолаларҙы тергеҙеү, ғөмүмән, уртаҡ мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн кәңәшкә йыйылған иң ҙур ҡоро. (слайдта күрһәтелә бара.) Ә бөгөнгө ҡорҙа беҙ нимә тураһында һөйләшербеҙ икән? Был турала һеҙ түбәндәге хикәйәтте тыңлағас төшөнөрһөгөҙ.

Боронғо гректарҙа атаҡлы мәҫәлсе Эзоп философ Ксанфтың ҡоло булған. Бер ваҡыт Ксанф ҡунаҡтар саҡырырға уйлап, Эзопҡа тәмле аш әҙерләргә ҡушҡан. Эзоп, тел һатып алып, өс төрлө аш әҙерләй. Философ ҡолдоң шундай һый ултыртыуына ғәжәпләнгән һәм ни өсөн тик тел ашы әҙерләгәнен һораған. Эзоп: “Һин иң яҡшы, иң тәмле ризыҡ әҙерләргә бойорҙоң. Донъяла телдән дә татлы нимә булыуы мөмкин? Тел ярҙамында ҡалалар төҙөлә, халыҡтарҙың мәҙәниәте үҫә, уның аша фән үрҙәре яулана, төрлө мәсьәләләр хәл ителә. Тел кешене рухландыра, ир-егеттәрҙе батырлыҡҡа әйҙәй. Хистәребеҙҙе, һөйөүебеҙҙе белдергәндә лә тел байлығын ҡулланабыҙ.” – тип яуап биргән. Уның кинәйәле яуабы Ксанфҡа ла, ҡунаҡтарға ла бик хуш килгән.

Икенсе ваҡыт Ксанф Эзопҡа төшкө ашҡа иң насар аҙыҡ әҙерләргә ҡушҡан. Эзоп тағы ла тел һатып алған. Ҡунаҡтар ғәжәпкә ҡалған. Был юлы Эзоптың яуабы түбәндәгесә булған: “Телдән дә яман нимә бар донъяла? Уның менән кешеләр бер-береһен ҡайғыға һала, өмөт-хыялдарын емерә. Тел кешеләрҙең, илдәрҙең араһын боҙа, беҙҙең тормошҡа афәт, хәсрәт килтерә. Ошоларҙан һуң телдән дә яман нәмәнең булыуы мөмкинме?”

Эзоптың был һүҙҙәренән һуң ҡунаҡтар тәрән уйға ҡалғандар.

Ғөмүмән, нимә һуң ул тел? Ул ниндәй төшөнсәләргә эйә?

Уҡыусыларҙың яуаптары (1.Тел – халыҡтың иң ҡиммәтле, ҡәҙерле рухи хазинаһы. 2. Тел - аралашыу, аңлашыу сараһы ғына түгел, милләттең рухи байлығын йыйған хазина. 3. Туған тел – ул ата-әсә теле. 4.Тел - кешенең ғүмерлек юлдашы. 5. Тел - милләтте милләт иткән иң мөһим шарттарҙың береһе.)

Эйе, туған телде ҡәҙерләп һаҡлаусы, киләсәк быуынға еткереүсе халыҡ булһа, уның нәфислеге, моңо – әҙиптәр ҡулында. Шағирҙар – халыҡ теленең иң матур өлгөләрен, байлығын, күркәмлеген үҙҙәренең ижадында сағылдырып, халыҡ күңеленә ҡайтарыусылар.

Халыҡ тормошоноң хәл иткес мәлдәрендә сәсәндәр, яҙыусылар, халыҡҡа мөрәжәғәт итеп, уның яҙмышына йоғонто яһаған мәсьәләләрҙе аңлата һәм уны хәл итергә саҡыра. Мәҫәлән, С.Юлаев яуҙаштарын дошманға ҡаршы көрәшкә әйҙәгән, Аҡмулла иһә халҡын белемгә, ғилемгә эйә булырға өндәгән. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп яҙылған әҫәрҙәр бөгөн дә тыуа. Беҙ бөгөнгө ҡорҙа тап шундай әҫәр тураһында һөйләшәсәкбеҙ ҙә инде. Ул әҫәр “Халҡыма хат” тип атала. Авторы – Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев. (слайдта автор портреты күрһәтелә.) Шағир ижады тураһында әңгәмә.

“Халҡыма хат” поэмаһының йөкмәткеһен үҙләштереү.

1.Бер уҡыусы поэманың яҙылыу тарихын һөйләй.

2. Ҡыҙҙың хатын тасуири итеп уҡый.

Уҡытыусы: Илебеҙҙә һикһәненсе йылдарҙың уртаһынан башланған үҙгәртеп ҡороуҙар Р.Бикбаев шифриәтенә лә яңы рух өрә, торғонлоҡ осоронда тыйылып килгән проблемаларҙы тура ярып әйтеү мөмкинлеге, ижад ирке ҡанатландыра. Әммә демократик үҙгәрештәргә, замандың йылы елдәренә тәүҙә ихлас шатланған шағир, йәшәлгән ғүмер, тупланған тормош тәжрибәһе юғарылығынан ҡарап, яңы тарихи шарттарҙа халҡы яҙмышы, Башҡортостанының киләсәге өсөн тәрән борсола, “йоҡлар йоҡоһонан яҙһын кеше, яҙмаһын тик еренән, иркенән” тип уяу тороргә, иң ҡәҙерле ҡиммәттәрҙе һаҡлап ҡалырға, күңел паклығына тап төшөрмәҫкә өндәй. Был поэма 1989 йылда яҙылһа ла, үҙенең актуаллаген бөгөн дә юғалтмаған.

-Әҫәрҙә ниндәй таныш булмаған һүҙҙәр осраны?

Оран- яуға саҡырған ауаз.

Маһир-оҫта.

Кәр-сәм, ныҡышмалылыҡ.

Уҡытыусы поэманы тасуири итеп уҡып күрһәтә.

Әңгәмә.

-Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?

(Яҙмышыбыҙ – тел яҙмышы,
Беләм уның хаҡында.
Әгәр телем йәшәй икән,
Йәшәйәсәк халҡым да.)

-Поэманың инешен нисек аңлайһығыҙ? Шағир ни өсөн “Тамырыңды уйлап ғорурланам, Бөгөнгөңдө күреп хурланам” ти? (Ата-бабаларыбыҙ борон-борондан үҙ теленә бик һаҡсыл булған. Быуаттар буйына тупланған аҡыл хазинаһын тел аша үҫеп килеүсе быуындың күңеленә һеңдерергә тырышҡан.)

-Поэмала телен, милләт азатлығын, Уралын һаҡлап яуға күтәрелгән халыҡ хаҡында ҡайһы юлдарҙа әйтелә?

-Ирек даулап, телдәре киҫелгән башҡорттоң бөгөнгөһө нисек һүрәтләнә?

-Ә ни өсөн шағирҙы бөтә донъяла танылыу алған, донъя сәхнәләрен сайҡалдырған мәҙәниәте булған милләттең хәле, яҙмышы борсолдора? (Тел бөтһә, халҡыбыҙ бөтөр, тел йәшәһә, халҡыбыҙ ҙа йәшәр. Ҡайһы осраҡта тел юҡҡа сығырға мөмкин? - 1.Әгәр халыҡ үҙ телендә аралашмаһа, үҙ телендә уҡымаһа. 2.Өйҙә ата-әсә туған телдә һөйләшмәһә. 3. Кешеләр телгә битараф булһа.)

-“Сабыйының телен киҫкәндәр” тигән һүҙбәйләнеште нисек аңлайһығыҙ? (республика мәктәптәрендә бөтә фәндәрҙе лә рус телендә уҡытыуға күсергә тырышлыҡ күрһәтеү һөҙөмтәһендә туған телгә кәмһенгән ҡараш

тамырланып өлгергәйне. Телгә һөйөү ғаиләнән башлана. Ата-әсә баланы бишектә ятҡанда уҡ туған теленең моңон һеңдерергә бурыслы. Элек ҡәйнәләр килендәренә эстән генә көйләп, йырлап йөрөргә ҡушҡан. Был да туған телгә һөйөү тәрбиәләүҙә үҙенсәлекле бер алым булған.)

-Дөрөҫ, ата-әсә балаһын көсләп теленән яҙҙыра, “сит телгә балам маһир, тиеп ғорурлана”, һөҙөмтәлә бала үҙ милләтенән ояла.

Ни мәғәнә гөлдәй баҡса төҙөү,
Ул баҡсаны яман ҡый алһа.
Тиҫтерҙәре араһында бала
Башҡорт булыуынан,
Сыуаш булыуынан,
Мари булыуынан оялһа.

-Шундай “телһеҙ кешеләр” үҫеп сығыуында автор кемдәрҙе ғәйепләй?(Эйе, был донъяла беҙҙән ни ҡалыр?!” – тип фекер йөрөткәндә, ҡырғыҙ яҙыусыһы Сыңғыҙ Айтматовтың “Быуаттан да оҙағыраҡ һуҙыла был көн...” романынан Найман-ана һәм уның улы Жоламан хаҡында хикәйәт хәтергә килә. Уҡытыусы әҫәрҙән өҙөк уҡып ишеттерә.)

-Телдең бөтөүе нимәгә килтереүе мөмкин? (Ҡайһы бер кеше, телде юғалтыу ҡурҡыныс нәмә түгел, тамаҡ туҡ, өҫ бөтөн булһа – шул еткән, тип уйларға мөмкин. Бында мин атаҡлы педагог К.Д.Ушинскийҙың бер фекерен хәтергә алырға тәҡдим итәм. Ул: ”Туған тел бөтһә – халыҡ бөтә”, - тигәйне. Рәми Ғариповтың атаҡлы шиғырын әйтеп тә тормайым. Бының дөрөҫлөгөн бөгөнгө ысынбарлыҡ раҫлап тора. 2009 йылда ЮНЕСКО халыҡ-ара ойошмаһы тарафынан башҡорт теле “Хәүеф янаған донъя телдәре атласы”на индерелде.)

-Р.Бикбаевтың “Халҡыма хат” мөрәжәғәт-хаты ысын мәғәнәһендә халыҡты уята, бер кемде лә битараф ҡалдырмай, “телһеҙ” башҡорттарҙа туған теленә ихтирам, уны өйрәнеү теләге уятһа, үҙ теле өсөн көрәшкән кешеләргә рух нығлығы һәм көс бирә.

Ә поэмала күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн республикабыҙҙа ниҙәр эшләнә?

Ни мәғәнә батшаларҙың исемен,
Сит ил тарихтарын ятлауҙан,
Ил тарихы илгә бикле булһа,
Намыҫыбыҙҙы туҙан ҡаплаһа? –
Тигән юлдар бөгөнгө көнгә тап киләме? (Яуаптар)

-Шағир киләсәк быуынға ниндәй өмөт бағлай?

Халҡының яҙмышы өсөн борсолған һәр кем илен, телен үҫтереү өсөн хәстәрлек күрергә бурыслы. Бигерәк тә балалар аңлы, белемле булып үҫһә, тыуған ерен, телен, илен һаҡларға һәм яҡларға һәр саҡ әҙер торһа, халҡыбыҙ йәшәйәсәк. Киләсәк – һеҙҙең ҡулда.

Ҡоролтай ҡарары:

1. Ғаиләлә әсә телендә генә һөйләшергә, бергәләп төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашырға.
2. Башҡорт телен өйрәнеүгә иғтибарҙы көсәйтергә.
3. Халҡыбыҙҙың тарихын, мәҙәниәтен, әҙәбиәтен өҫтәлмә рәүештә үҙаллы өйрәнергә.
4. Алдынғы ҡарашлы шәхес булып үҫеү өсөн үҙ-үҙеңде тәрбиәләргә.
5. Насар ғәҙәттәрҙән йыраҡ торорға.

Йомғаҡлау. Шулай итеп, Р.Бикбаев “Халҡыма хат” әҫәрендә туған телебеҙҙең ҡороп барыуы хаҡында хафаланып уйлана, башҡорт балаларының, үҙ телдәренән яҙып, әсә телен белмәй үҫеүҙәренә борсола. Телдең бөтөүе халыҡтың бөтөүе булыуын әрнеп иҫкәртә. Туған халҡын ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, моңһоҙлоҡтан, ялҡаулыҡтан ҡотолоп, уянырға саҡыра.

Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Өй эше: “Халҡыма хат” поэмаһы буйынса уйланыуҙарға ҡоролған инша яҙып килергә

“ХАЛҠЫМА ХАТ”

Шәрипова Әлфиә Венер ҡыҙы,
97-се һанлы һөнәрселек лицейы

Сараның маҡсаты:

1. Шағирҙың тормош юлы, ижады менән таныштырыу;
2. Шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыу;
3. Тыуған илгә, туған телгә һөйөү тәрбиәләү, телде ҡәҙерләүсе, уның киләсәген ҡайғыртыусы, аңлы, белемле, илен, телен, халҡын яҡларҙай яңы йәш быуынды тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, плакат, китаптар күргәҙмәһе, тел тураһындағы һүҙҙәр яҙылған плакаттар, проектор, компьютер.

Сара барышы.

Туғанынан яҙған - ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем. (Р. Бикбаев)

Уҡытыусы: Һаумыһығыҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар, уҡыусылар. Бөгөн беҙ милләтебеҙ өсөн мөһим булған мәсьәләләргә тукталасаҡбыҙ.

Гимн уйнай (баҫып тыңлайҙар).

Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны

Фәрит Иҙрисов музыкаһы Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙҙәре

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.
Дан һиңә, Башҡортостан!
Башҡортостан, һин хөрмәтле данлы ил,
Еңеү яулап алға бараһың.
Киләсәккә яҡты моң-нур сәсә
Һинең ғоруррухлы байрағың.
Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!
Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ
Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Уҡытыусы: һеҙ бөгөн гимнды һүҙҙәре менән тыңланығыҙ. Кем яҙҙы уның һүҙҙәрен?

Уҡыусы: Р. Бикбаев һәм Р. Шәкүр.

Уҡытыусы: Бөгөн беҙ Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышабыҙ.

(Р. Бикбаевтың экранда портреты һәм һүҙҙәре).

Китаптар күргәҙмәһенә байҡау.

Уҡытыусы: Уҡыусылар, Рауил Бикбаевтың Тыуған ил, туған тел тураһында ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?

Уҡыусылар шағирҙың әҫәрҙәрен һанап сыға.

Уҡытыусы: Бөгөн беҙ Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» шиғыры менән яҡындан танышайыҡ.

«Халҡыма хат» тигән мөрәжәғәт шиғыры – шағирҙың тулҡынландырғыс көслө поэтик әҫәрҙәренең береһе. Ул шиғыр туған халҡыбыҙҙың хәҙерге яҙмышы, туған тел мәсьәләләре хаҡында борсоулы уйҙар уята.

Шиғырҙың йөкмәткеһен уҡыу.

Уҡытыусы: Хәҙер теманы, идеяны асырҙай асҡыс һүҙҙәр булған юлдарҙы уҡып үтәйек.

Шиғырға лингвистик анализ. (поэтик әҫәрҙе анализлау схемаһы буйынса).

1. Әҫәрҙең жанры ниндәй?

а) хат стилендә яҙылған шиғыр;

б) шиғыр поэма;

в) шиғыр.

2. Тема.

а) телде һаҡлау;

б) телде үҫтереү;

в) Ватан;

г) милләтте һаҡлау.

3. Идея.

а) Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

б) Сабыйҙарҙың телен ғайғыртмаһаҡ,
Аҡһаҡалға булыр төкөрөү.

в) Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.

4. Әҫәрҙең эмоциональ тоны.

а) шатлана;

б) ҡайғыра.

5. Һүрәтләү саралары.

а) лексик саралар;

синоним: халыҡ, милләт, башҡорттар;

эпитет: аҫыл ирҙәр, аҫыл йырҙар;

антоним: сабый – аҡһаҡал, үлә - йәшәй, яҡшы – яман;

йәнләндереү: тарих уйлап үҙе һиҫкәнер.

б) морфологик саралар:

өндәш һүҙҙәр, абстракт исемдәр

ҡылымдарҙың бойороҡ һөйкәлешендә тороуы, әҫәрҙең идеяһын көсәйтеү, пафосын күтәреү өсөн ҡулланыла.

в) фигуралар: риторик һорау, риторик өндәү һөйләмдәр:

Илдең иртәгәһе хәстәрҙәрен

Беҙ күрмәйсә тағы кемдәр күрер?

Тимәк, был шиғыр халыҡсан аҡыллылығы, тос фекерҙәре, тапҡыр һүҙҙәре менән көслө әҫәр.

Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” шиғырында иң актуаль проблемаларҙың береһе – телде һаҡлау. Хәҙерге көндә Башҡортостанда туған телдең яҙмышы нисек хәл ителә? Ошо һорауҙарға үҙегеҙҙең ҡарашығыҙҙы, фекерегеҙҙе әйтегеҙ.

1. Шиғри хатты яҙыуға нимә сәбәпсе булған?
2. Телдең бөтөүе нимәгә килтерергә мөмкин?
3. Телде белмәү фажиғәһенең төп сығанағы нимәлә?
4. Ни өсөн телдәр юҡҡа сыға?

Беҙҙең телебеҙҙең юғалыуы ихтималмы?

5. Һуңғы ваҡытты телгә иғтибар көсәйҙе. Был ниндәй эштәрҙә күренә (закондар, статус)?
6. Сит өлкәлә йәшәгән башҡорттар үҙ телен беләме?
7. Үҙебеҙгә башҡорт телен үҫтереү өсөн нимә эшләргә кәрәк?

Һеҙҙең тәҡдимдәрегеҙ?

8. Тел тураһында ниндәй шиғырҙар, йырҙар, поэмалар, драмалар, цитаталар беләһегеҙ?

Шулай итеп, телде һаҡлау – беҙҙең алда торған иң ҙур проблемаларҙың береһе.

Туған тел... Кеше тәү мәртәбә ошо телдә әсәй, атай һүҙҙәрен әйтә. Туған тел кешене белемле, аҡыллы, йыйнаҡ фекерле, тотанаҡлы, ғилем донъяһына ынтылыусан итеп тәрбиәләй. Туған телдә иркен һөйләшә белеү үҙ аллы фекерләргә генә түгел, юғары мәҙәниәткә эйә булырға ярҙам итә.

Әсәм теле миңә - сәсән теле
Унан башҡа минең халҡым юҡ.
Йөрәгендә халҡы булмағандың
Кеше булырға ла хаҡы юҡ. (Р. Ғарипов)

Сара тамам. Ҡатнашыуығыҙ өсөн рәхмәт. Һеҙгә уңыштар теләйем. Һау булығыҙ.

”УРАЛЫМА”

Ғәрфүтдинова Флорида Тимерғәзе ҡыҙы,
Балаҡатай районы Яңы Балаҡатай 1-се һанлы мәктәбе

Дәрес маҡсаты:

1.Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен үҙләштереү.

2. Уҡыусыларҙа Уралға, Тыуған илгә ҡарата һөйөү тойғоһо тәрбиәләү.

3. Һөйләү, яҙма телмәрҙе үҫтереү өҫтөндә эш.

Йыһазландырыу: Р. Бикбаев портреты, китаптары күргәҙмәһе, Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр яҙылған плакаттар, Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы буйынса слайд-шоу.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

-Һаумыһығыҙ, балалар!

-Бөгөн дәрестә кем дежур? Һауа торошо бөгөн ниндәй?

II. Ҡабатлау.

1. Өйгә эште тикшереү.

Урал. Башҡорт халыҡ йыры.

Яттан һөйләү бәйгеһе. Р. Заһретдинов башҡарыуындағы ҡурай моңо аҫтында.

2. Дәрес темаһын билдәләү.

Кроссворд сисеү.

Урал тауҙары тураһында һөйләшеүҙе дауам итәсәкбеҙ.

III. Төп өлөш.

1. Инеш әңгәмә. Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы. (5-11- се слайдтар)

- Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимны авторы – Рауил Бикбаев. Тыңлап китеү.

2. Шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү өҫтөндә эш.

1)Уҡытыусы уҡыуы;

2) Һүҙлек эше.

- Ниндәй һүҙҙәр аңлашылмай?

- Һүҙлек дәфтәренә күсереп яҙыу.

3) Коментарийлы-строфалы анализ.

Визуалләштереү (уҡығанда, һәр строфаның мәғәнәһенә ярашлы һүрәттәр (слайдтар) күрһәтелә).

3.Уҡыусыларҙың тасуири уҡыу күнекмәләре.

- Ниндәй тон менән уҡыйбыҙ? (Ғорурланып)

4. Шиғырҙың йөкмәткеһе буйынса һорауҙарға яуаптар алыу.

(Дәреслектең 97-се битендә)

IV. Йомғаҡлау.

1. Синквейн төҙөтөү.

3. 2013 йыл- Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы.

- Тыуған яғыбыҙҙы, Тыуған Уралыбыҙҙы һаҡлайыҡ!!!!
- Илебеҙҙең ысын патриоттары булайыҡ!

V. Өйгә эш биреү.
Р. Бикбаевтың “Уралыма” шиғырын ятларға (96-cs бит).
VI. Балаларҙың дәрестәге эштәрен баһалау, билдә ҡуйыу.

“УЯН, ХАЛҠЫМ, ҠУҘҒАЛ МИЛЛӘТЕМ!”

әҙәби-музыкаль кисә

Ғәлиева Рәмзиә Хәмит ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы 8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Кисәнең маҡсаты: Рауил Бикбаевтың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу; шағирҙың тормошо, ижады өлгөһөндә уларҙа илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү; уҡыусыларҙың телмәр, фекерләү кәүһәһен үҫтереү.

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, китаптар күргәҙмәһе,әҙип тураһында яҙылған гәзит-журналдарҙан өҙөктәрҙән торған стенд, интерактив таҡта, магнитофон, фонояҙмалар, видеояҙма, фотоһүрәттәр.

(Башҡорт халыҡ йыры “Урал” яңғырай.)

Мультимедиа проекторы аша Башҡортостан тураһында слайдтар күрһәтелә. Көй аҙағында ике алып барыусы сыға (егет менән ҡыҙ).

1-се алып барыусы.

Күгәреп ятҡан Урал тауы-
Атай-олатайҙарҙың төйәге.
Ерен-һыуын һаҡлап ҡорбан булған
Шунда ята батырҙар һөйәге.

2-се алып барыусы.

Урал –башҡорт иле. Халҡыбыҙ ғүмер буйы Уралда йәшәгән…Ошо изге ер өсөн көрәшкән, ошо ер өсөн башын һалған, ошо ер өсөн хаҡлыҡ яулап илен данға күмгән.

(Малайҙар бейеүе.)

1-се алып барыусы:

Һаумыһығыҙ, хөрмәтле уҡытыусылар, уҡыусылар һәм ҡунаҡтар! Бөгөн беҙҙең мәктәптә оло, иҫтәлекле ваҡиға. Башҡортостандың халыҡ шағиры, көслө рухлы ҡәләм оҫтаһы Рауил Бикбаевтың 75 йыллыҡ юбилейына арналған кисәгә йыйылдыҡ.

2-се алып барыусы: Был кисәлә әҙиптең тормош юлы, тыуған еребеҙҙе, туған телебеҙҙе һаҡларға әйҙәүсе ижад ынйылары күҙ алдына баҫыр һәм әҙәбиәт донъяһына сәйәхәткә илтер. Барығыҙға ла күтәренке кәйеф, рухи байлыҡ юллап, кисәбеҙҙе башлайбыҙ!

(Ш.Бабич һүҙҙәренә халыҡ йыры”Башҡортостан-гөлбостан”)

1-се алып барыусы.

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылда Ырымбур өлкәһенеңПокровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған.

2-се алып барыусы.

Ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай.

1-се алып барыусы. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Өфөләге Тарих,тел һәм әҙәбиәт институтында ғилми хеҙмәткәр булып эшләй.

2-се алып барыусы. 1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара.

1-се алып барыусы. Рауил Бикбаев тиҫтәнән ашыу шиғыр һәм поэма йыйынтыҡтары авторы.

2-се алып барыусы. Ул - Башҡортостандың Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы, Ғәлимов Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Рәми Ғарипов исемендәге премиялар лауреаты.

1-се алып барыусы. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор.

2-се алып барыусы. Шифриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелде.

1-се алып барыусы.

Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем,һүҙем бар.,ти ул “Халҡыма хат “поэмаһында.

2-се алып барыусы.

Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.

1-се алып барыусы.

Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,

2-се алып барыусы.

Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,

1-се алып барыусы.

Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,

2-се алып барыусы.

Тик моңонан, теленән яҙмаған.

(Ҡурайсылар сығышы.)

1-се алып барыусы.

Ҡулындағы ҡанлы бығауҙарын
Өҙҙө халҡым, ғәҙел юл табып;
Башҡорт аты елеп етмәҫ ергә
Барып етте башҡорт китабы.(«Халҡыма хат.”)

2-се алып барыусы.

Донъяла һәр халыҡтың рухи хазинаһы,халыҡты халыҡ иткән бер булмышы бар.Ул - тел.
(Ғ.Туҡай һүҙҙәренә халыҡ йыры ”Туған тел”)

1-се алып барыусы.

Р.Бикбаев”Халҡыма хат” поэмаһында туған телебеҙҙең ҡороп барыуы хаҡында хафаланып уйлана, телдең бөтөүе халыҡтың бөтөүенә килтереүен әрнеп иҫкәртә.

2-се алып барыусы.

Туғанынан яҙған ярты йәтим,
Туған теленән яҙған мең йәтим.
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

(Р.Шәкүр һүҙҙәренә йыр “Ерем, илем, телем”)

1-се алып барыусы.

“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!“ поэмаһында шағир тыуған-үҫкән ер-һыуҙарыбыҙҙың ҡороуы, ағыуланыуы, Башҡортостан тәбиғәтенең ярлылана барыуы тураһында борсолоп яҙған, уларҙы һаҡларға саҡырған.

2-се алып барыусы.

Тормош матурыраҡ булһын тип,
Күпме матурлыҡтар ҡырылған,
Ҡот-дәүләте илдең артһын тип,
Урман ауған, һыуҙар ҡороған. (”Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ”)

1-се алып барыусы.

Ер һатылһа, нәфрәтенән Урал
Башыбыҙға таштар яуҙырыр,
Һағыш түгел, ҡарғыш түгер ҡурай,
Ғәрлегенән иңрәп ярылыр. (“Баҙар балтаһы”)

2-се алып барыусы.

Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел…
Сафланырмы тағы был күңел,
Сафланырмы тағы был күңел? (“Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ”)

1- се алып барыусы.

Барыһына мал хужа, тип
Әйтә күрмә ҡомһоҙ һүҙен,
Аулаһын кеше күңелен
Ҡүркәм холҡоң, көләс йөҙөң. (“Йөҙ ҙә бер хәҙис”)

(Йыр ”Тыуған ил” Ҡ.Даян һүҙҙәре, Р.Сәлмәнов музыкаһы)

2-се алып барыусы: Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева ил-халыҡ өсөн янғандарҙы нурлы йөрәк тип атаны. Донъя үҙгәрә, алға бара, әммә мәңгелек ҡиммәт - халҡыңа һөйөү - кешене кеше иткән бөйөк хис.

1-се алып барыусы.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек,
Был донъяға тура ҡарарлыҡ. (“Башҡортостан бында башлана.”)

2-се алып барыусы

Бер һүҙ беләм.Аҙашҡанда юлдарымды
Яҡтыртамын шул һүҙ менән.
Шул һүҙ менән, ауырҙы ла еңел күреп,
Мин тауҙарға елеп менәм.
(Йыр”Елдәр” Р.Бикбаев һүҙҙәре,Н. Сабитов музыкаһы)

1-се алып барыусы.

Нисәмә ҡат аҫылһа ла, атылһа ла,
Һатылмаған һис бер көскә.
Яу ҡупҡанда, сафтар буйлап, юлбашсылай
Остан осҡа бер һүҙ осҡан -
Башҡортостан! (“Бер һүҙ”)

(Йыр”Дан һиңә,дан,Башҡортостан!”Р.Ғарипов һүҙҙәре,Р.Сәлмәнов музыкаһы)

Р. БИКБАЕВ “ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!”

Ахундова Инжира Хәбир ҡыҙы,
Балаҡатай районы Урғалы
урта дөйөм белем биреү учреждениеһы

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың «һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһының идея-тематик йөкмәткеһен асыу; лирик әҫәрҙе анализларға өйрәтеүҙе дауам итеү, төп проблемаһын асыҡлау; тәбиғәттең матурлығын тойорға, уны һаҡлау- һәр кешенең бурысы икәнен аңлатыу, экологик белемде киңәйтеү, төрлө сығанаҡтарға таянып, ҡараласаҡ проблеманың көнүҙәк булыуын асыҡлау.

Йыһазландырыу: яҙыусының портреты, мультимедиа экраны, китаптары күргәҙмә, дәреслек, карточкалар.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

Уҡытыусы:

-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар. Әйҙәгеҙ, бер- беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек! Йәмле көҙҙөң тәбиғәтенә һоҡланыу үҙе бер ғүмер.

II. Инеш. Башҡорт халыҡ йыры- «Йәмле Ағиҙел буйҙары» ишетелә. (экранда Ағиҙел йылғаһы һәм йырҙың тексы яҡтыртыла бара).

Уҡытыусы: Ошо йырҙың хис- тойғоға бай кешегә бар донъяһын онотороп ләззәтләндерер, хыялын әллә ҡайҙарға алып китер үҙенә бер төрлө ҡөҙрәте бар. Был йырҙа күҙ алдына берсә ҡылғанлы киңлектәре, Ағиҙел буйҙарының йәмле туғайлыҡтары теҙелеп үтер, берсә Урал ҡаялары, Ирәндек һырттары һынланып ҡалыр.

- Йырҙа Ағиҙелдең нисек маҡталғанын ишеттегеҙ. Унда уның ниндәй сифаттары һанала?

- Был сифаттар Ағиҙел йылғаһына әле лә хасмы?(балалар үҙ фекерҙәрен әйтәләр)

III. Артикуляцион күнегеү (Слайдта шиғыр юлдары күрһәтелә, бер нисә уҡыусы тасуири уҡый)

Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?
Башҡаса шул хәҙер заман хәле,
Башҡаса шул шағир уйҙары,
Йәмлеме Ағиҙел буйҙары
Тәмлеме Ағиҙел һыуҙары?

Р.Бикбаев «һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ!»

Уҡытыусы:

- Әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ алып барыла? (дәрестең темаһын билдәләйҙәр)

- Әйҙәгеҙ, балалар картаға байҡап китәйек.

(уҡытыусы карта ҡулланып, бер-ике уҡыусы Ағиҙелдең башланған урынынан, уның Кама йылғаһына ҡойғанлығын, яр буйы матур хәтфә, урман-тауҙар аша үткәнлеген һөйләй).

Уҡытыусы: Әлбиттә, Башҡортостандың тәбиғәте бик матур. Башҡорт өсөн гүзәл тәбиғәт - рух сығанағы, шатлыҡ шишмәһе, йәшәү тамыры. Тәбиғәттә һаҡлау, яҡлау һәр ваҡытта изге бурыс булып ҡалырға тейеш. Уның киләсәге өсөн утты-һыуҙы кискән кешене генә шәхес, ысын ир тип атап була.

Ошоларҙың береһе - Башҡортостандың халыҡ шағиры, Рауил Бикбаев айырым бер урын алып биләй. Бөгөн дәрестә әҙиптең «һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ! » поэмаһы менән танышасаҡбыҙ, идея- тематик йөкмәткеһен үҙләштерербеҙ; әҫәрҙе анализлауҙы дауам итербеҙ, уның төп проблемаһын билдәләрбеҙ.

IV. Яңы тема.

1. һүҙлек эше: (слайдта)

оран- клич
хафа- беспокойство
һөрәм- копоть
ыулы- ядовитый
вайымһыҙ- беспокойство

2. Дәреслек менән эш. Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным- һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһынан өҙөктө уҡыу.

3. Әҫәрҙе анализлау (әңгәмә алымы)

а) әҫәрҙең темаһын билдәләү: - Әҫәрҙә ниндәй тема күтәрелгән? (тыуған ер, уның тәбиғәте, тәбиғәттең матурлығы һ.б);

б) - ниндәй проблемалар күтәрелә? (кеше һәм тәбиғәт, экология һ.б.)

в)- Әҙиптең төп фекерен асыҡлау. Поэманың нигеҙендә нимә ята?

4.Уҡыусыларҙың дөйөмләштереүе. (Слайдта һорауҙар бирелә. Уҡыусылар әҫәрҙән яуаптар табып уҡыйҙар)

А) авторҙың тойғо- хистәре эсенә һыймай, күкрәктән сыҡҡан юлдарҙы табығыҙ;

Б) тәбиғәттең ниндәй күренештәре авторҙы борсой?

В) тәбиғәтте көслө һөйөү тойғоһон ниндәй һүҙҙәр менән автор һүрәтләй?

5. Комментарийлы - строфалы анализ эшләү. (Слайдта)

«Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға,

һалҡын терегөмөш шикелле».
Р.Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары».

«Ағиҙелгә терегөмөш ағып,
Ағыулауын күрһә Ниғмәти,
Ниндәй оран һалыр ине шағир,
Әйтер ине бөгөн нимә тип?».
Р.Бикбаев «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!».
- ике строфаны сағыштырып, шағирҙы борсоған мәсьәләләрҙе асыҡлағыҙ;
- «терегөмөш» бер үк мәғәнәне аңлатамы?
6. Төркөмләп эшләү.

Уҡытыусы. 2013 йыл- Тирә- яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Дәресебеҙ маҡсатттарының береһе - тәбиғәтебеҙҙең матурлығын тойорға, уны һаҡлау - һәр кешенең бурысы. Хәҙер, уҡыусылар, төрлө сығанаҡтарға таянып, ҡараласаҡ проблеманың көнүҙәк булыуын асыҡлап, әүҙем булараҡ, шул проблеманы асып ҡарайыҡ.

(уҡыусыларҙы 3 төркөмгә бүлеп, һәр бер төркөмгә бер консультант ҡуйыла).

(Слайдта сыға)
Ағиҙел

1-се төркөм	2- се төркөм	3-сө төркөм
Поэмала заманның ниндәй проблемалары күтәрелә? (бөгөнгө, киләсәк)	Йәмлеме? Тәмлеме? (актуаллеген иҫбатлау)	Йәмләнерме Тәмләнерме? (һығымта яһау)

V.Әҫәрҙе йомғаҡлау. Башҡорттарҙың иң изге уйҙары, йырҙары, көйҙәре, легендалары Уралға арналған.
- Ошо әҫәр кейефегеҙгә нисек тәьҫир итте? Поэма ниндәй тәьҫораттар ҡалдырҙы?

VI. Дәресте йомғаҡлау. Баһалау.

- Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм әҫәрҙәрендә сағыла. 2013 йылдың 12 декабрендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаевҡа 75 йәш тула. Ысын шәхесебеҙгә һаулыҡ, оҙон ғүмер теләйек!

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе, телегеҙҙе яратыуығыҙҙы, ысын шәхес булыуығыҙҙы теләйем.

VI. Өйгә эш. «Тәбиғәтте һаҡлайыҡ» темаһына план-проект төҙөргә.

“КЕШЕ ЕРҘӘН БИҘЕР ӨСӨН ТҮГЕЛ, БИҘӘР ӨСӨН ТЫУА БЫЛ ЕРҘЕ…”
(телдән журнал)

Сәләхова Нурия Фәнәүис ҡыҙы,
Баҡалы районы Иҫке Ҡорос мәктәбе

Маҡсат:

1. Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән таныштырыу;
2. Уҡыусыларҙың үҙ аллы эшләү, бер-береһенең фекерҙәрен тыңлай белергә, үҙҙәрен иркен тоторға, сығыш яһарға өйрәтеү;
3. Шағирҙың халыҡ, ил, тел яҙмышы хаҡындағы фекерҙәрен уҡыусыларға төшөндөрөү, уның ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү, шиғырҙары аша әхлаҡ тәрбиәһе биреү;
4. Телмәр үҫтереү, байытыу, тасуири уҡыу күнекмәләре биреү;

Йыһазландырыу: портреты, телдән журнал, китаптары, газета-журнал материалдары, плакат, терәк-схема (проектлау), комьпютер, электрон дәреслек, презентация.

Дәрес барышы

-Һаумыһығыҙ,уҡыусылар! Ултырығыҙ.

Беҙ хәҙер кластан тыш уҡыу дәресе үткәрәбеҙ.(Гимн ҡуям. Бөтәһе лә баҫа)

-Ултырығыҙ. Һеҙ әле генә ниндәй музыка тыңланығыҙ?

- Гимн. Башкортостан гимны.

- Һеҙ уны ни өсөн баҫып тыңланығыҙ?

- Дәүләт символы. Гимн һәр ваҡыт баҫып тыңланырға тейеш. Ул тантаналы йыйылыштарҙа уйнала.

-Эйе. Гимн дәүләт символы. Уның көйөн, һүҙҙәрен кем яҙған?

-Фәрит Иҙрисов көйө. 1993 йылдың 12 октябрендә БР гербы һәм гимны раҫланды.

- Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙҙәре.(Гимн һүҙҙәрен уҡыу)

– Эйе, уҡыусылар, дәүләт символы булған,гимн тиклем гимндың һүҙҙәрен яҙыусы, шағир Рауил Бикбаевҡа 75 йәш була.

Бөгөн беҙ Рауил Бикбаевтың тормошона һәм ижадына күҙәтеү яһарбыҙ. Телдән журнал сығарырбыҙ.(Презентация)

1-се бит.

“Күҙ иңләмәҫ киңлек булып,
Һағындыра күк далам.
Тыным тарыға офоҡһоҙ,
Далаһыҙ күҙем тала” тип атала.

Шулай булғас ул ҡайҙа һәм ниндәй ерҙә тыуған?

- Р. Бикбаев 12.12.1938 йылда Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙерге Переволоцкий) районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Ырымбур далаһы. Туҡсоран буйҙары. Заманында ошо ерҙәрҙә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улдары Мөхәммәтша Буранғол, Дауыт Юлтый, Сәғит Ағиш, Ғабдулла Амантай донъяға килгән. Яҙыусы Рауил Бикбаев та шулар иҫәбендә.

Рауил Бикбаев үҙенең поэзияһының төп маҡсаты, төп темаһы итеп тыуған ергә һөйөү, уны данлау проблемаһын ала. Уның тыуған илгә һөйөү тойғоһо бик иртә уянып, ул Ырымбур далаларын маҡтауҙан башлана.

-Ә. Гөлфиә “Дала офоҡтары” (“Ерем балҡышы” 147 бит)

- В. Ильвир “Далам,далам – даланым” (152 бит “Язмышым”)

Ырымбур далаларына булған һөйөүен белдереп, «Тыуған яҡтарыма ҡайтҡанда, мин бер һырттан төшөп, икенсеһенә күтәреләм, ул һырттарҙың һәр береһендә тирә - яҡҡа әллә күпме саҡрымдарға йәйрәп киткән зәңгәр киңлектәр хайран итә. Тыуған далаларымдағы киңлекте, һәр һыртҡа күтәрелгәс, бар тарафтарға саҡырып торған ҡабатланмаҫ офоҡтарҙы миңә башҡаса бер ҡайҙа ла күрергә тура килмәне. Бында ҡарашың бер генә ҡаршылыҡҡа ла барып төртөлмәй, сәхрә - яландарҙы кинәнеп байҡай. Даламды һағынғанда мин барыһынан да бигерәк шул киңлектәрҙе һағынам. Ысынлап та, далаһыҙ тыным ҡыҫыла, далаһыҙ күҙем тала. Елдәр ҙә бит бында тау – таш ярығынан, ағас араһынан йәшенеп – боҫоноп өрмәй, иҫһә бер юлы бар даланы тултырып, ҡоласын киреп иҫә, дауыл-бурандары килһә, бар даланы айҡап-иңләп килә,» - тип яҙғайны.

2-се бит.

Иң беренсе ишеткәнем ерҙә,
Иң беренсе күргән күҙҙәрем -
Әсәйемдең яҡты йөҙө менән
Әсәйемдең йылы һүҙҙәрен.

Ижадының тәү орлоҡтары, әлбиттә, ғаиләлә үк һалынған. Бигерәк тә әсәй кешенең роле ҙур. “Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зиһенемә һеңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне- әсәйем”, - ти Рауил үҙе лә. Әсәһенең булмышы һәм яҙмышы – үҙе бер ғибрәтле һабаҡ. Буласаҡ тарихсы Сәғит Мерәҫевтың һеңлеһе тейеш әсәһе Рәкиә Латип ҡыҙы Вахитова етеш тормошло, дини рухлы ғаиләлә тәрбиәләнгән. Уны үтә йәшләй хәлле кешегә кейәүгә бирәләр. Ләкин 1930 йылда бик күп уңған крәҫтиәндәрҙе кулак тип йорттарын, мөлкәттәрен тартып алып, илдән һөрөү башланғас, ун һигеҙ йәшлек Рәкиә лә ҡайны-ҡәйнәләре, ире менән – тотош ғаилә Архангель губернаһындағы Котлас лагерҙарында нисәмә йылдар буйы күпме нужалар күрә. Ҡараңғы тайға төпкөлдәрендә, мәңге туң тундра һаҙлыҡтарында иҫ киткес һыуыҡ, тубыҡтан батҡаҡ эсендә аслы-туҡлы торф сығара, ҙур-ҙур төньяҡ йылғаларында һал ағыҙа, аяҡ-ҡулдары һыҙлауға әйләнә. Шунса ыҙа-яфаларға түҙә алмайынса, нинәйәт, 1936 йылда был мәхшәрҙән ҡасып ҡотолмаҡ була. Тимер юлына етеп, тауар вагондарының береһенә йәшеренеп, станцияларҙа бер составтан икенсеһенә күсә-күсә, тыуған ауылына ҡайтып йығыла. Уны НКВД тынғы бирмәй эҙәрләй башлай. Рауилдың буласаҡ атаһы Төхвәтулла Бикбаев армиянан ҡайтып, Рәкиәгә өйләнгәс кенә, кире һөрөлөүҙән ҡотолоп ҡала әсәһе.

М. Илнар “Тыуған йорттоң тупһаһы” (1-се том)

Ш. Азамат “Әсәйемдең әйткән һүҙҙәре” (1-се том)

3-сө бит

“ Уйҙарым тауҙарҙан ашып,
Ҡымыҙҙай тора ташып.
Эш бүлмәм – Башҡортостаным,
Өҫтәлем– Урал ташы.”

1957 йылда Өфөгә килеп, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә.Шунан башлап Башҡортостан уның икенсе тыуған төйәгенә әйләнә. Һәм ул Урал, Башкортостан тураһында бик күп шиғырҙар ижад итә.

-Ә хәҙер «Уралыма»шиғырын Д. Денис уҡый (Ерем балҡышы”, 32-се бит).

-«Башҡортостан бында башлана» Б.Ғәлиә (“Яҙмышым”, 157-се бит)

-“Бер һүҙ” И. Илнар (“Ерем балкышы”, 112-се бит)

Рауил Бикбаевҡа туған республикаһының һәр ҡарышы күңеленә ғәзиз һәм ҡәҙерле. Башҡортостан урман-тауҙары, йылға- күлдәре, ер-һыу байлыҡтары менән генә күркәм түгел, шул ерҙә йәшәгән кешеләре, уны данлаған, исемен ил-ерҙәргә ишеттергән батыр, эшсән ул-ҡыҙҙары менән дә маҡтаулы. Шуға күрә тыуған республикабыҙ ул-ҡыҙҙарынан үҙенең дә һәм уларҙың да йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек итеп йәшәү һәм эшләүҙәрен үтенеү һис осраҡлы түгел.

Башҡортостан тигән һүҙҙе өр-яңыса аса, уны “ Бар һүҙҙәрҙең йөрәгенә» оҡшата. Рауил Бикбаев Урал тауҙарын ҡәғбә ташы итеп табына. Уралына булған һоҡланыу хистәрен “мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел, үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә» тигән һүҙҙәр менән тамамлай. Шағирҙың Уралды өҙөлөп һөйөүе хаҡындағы кескәй генә шиғырға ҙур фәлсәфә һалынған:

«Елдәр, һеҙгә минең үтенес бар,
Тыңламайса уны үтмәгеҙ:
Мине, зинһар, туҙан көйөнсә лә
Уралымдан алып китмәгеҙ.»
Үлгәс тә Башҡортостанға күмегеҙ үтенә.

4-се бит.

“Тыуған ерем! Ҡуйыныңдан бәрелә батырҙарҙың эҫе тындары» тип яҙған Рауил Бикбаев өсөн халҡының тарихы, ошо шанлы тарихты яҙған бөйөк шәхестәр айырыуса ҡәҙерле. Шуға ла Салауат образына ул айырыуса йыш мөрәжәғәт итә.

-“һаумы,Салауат” (“Ерем балкышы”, 43-сө бит) С. Илназ

-“Салауат ҡылысы” (магнитафон таҫмаһынан тыңлау)

-Ошоноң менән халыҡ йөрәгендә Салауат исеменең үлемһеҙлеге раҫлана. Эстонияла Палдиски ҡалаһында Салауат һәйкәлен асҡан көндәрҙә Балтик диңгеҙе буйында Салауаттың эҙҙәре буйлап йөрөүҙәр,

Өфөлә йыл да Салауат һәйкәле янына йыйылыуҙар, батырҙың тыуған ерендәге байрамдар, йыл һайын уҙғарылған «Салауат йыйыны» күңелдәрҙән эҙһеҙ генә үтмәй.

Йыйылабыҙ йыл да Салауатҡа,
Тарта беҙҙе бында хаҡ оран.
Батырлыҡҡа беҙҙе саҡыра ул,
Берҙәмлеккә беҙҙе саҡыра.
5-се бит
“Ағайҙарым ҡояш булып ҡалыҡмаҫ,
Күңел күпме өҙөлөп көтмәһен.
Башын һалған ирҙәр кире ҡайтмаҫ,
Тереләре яуға китмәһен.”

-Журналдың был бите нимә тураһында икән?

-Бөйөк Ватан һуғышы тураһында.

- Халҡыбыҙҙың рухи ныҡлығы, хәрби традицияларға тоғролоғо “Йондоҙло йорт”, “Туғыҙынсы май”, “Фронтовиктар табынында” шиғырҙарында сағылыш тапҡан. Был шиғырҙар һуғыш батырҙарының ҡаһарманлығы менән ғорурланыу хистәре уята.

– “Туғыҙынсы май” - С. Гөлфиә (“Ерем балҡышы”, 150-се бит)

– Эйе, был шиғырында байрам шатлығынан бигерәк һуғыш күрһәткән ғазаптар, яуҙа башын һалған миллионлаган ҡорбандар, еңеүҙе яҡынлаштырыу өсөн көн -төн хеҙмәт иткән ҡарт- ҡоро, ҡатын-ҡыҙ, бала-саға яҙмышы күңелде һыҙландыра. Шағир үҙенең кисерештәрен, һағыштарын һуғыштан ҡултыҡ таяғына таянып ҡайтҡан һалдаттарҙың һағыштары менән бергә ҡушып һүрәтләй.

– “Йондоҙло йорт” - F. Илвир (“Ерем балҡышы”, 160-сы бит)

– Был шиғырында шағир үҙенең бала сағын иҫкә төшөрөп, “һандыҡ төбөндәге һарғылт хаттар, эленеп торған һарғылт һүрәттәр» беҙҙе сабырлыҡҡа өйрәтте, тип иҫкә ала. Йондоҙло өйҙәргә үҙенең ихтирамын, оло хөрмәтен белдереп, моңһоу шатлыҡ хистәре менән уның нигеҙенә баш эйә.

- “Балтырған “ Ш. Лиана (“Ерем балҡышы”)

- Балалар өсөн иң ауыры – астан интегеү. Улар сыуаҡ баҫыуҙарҙа башаҡ сүпләгәндәр, ҡаты жмых кимергәндәр. Йәшел һыу эскәндәр. ”Ниңә әле ҡапыл хәтерләнем сабый саҡтарымды, усты өтөп барған ҡурмасты“,-тип аслыҡ йылдарында үткән бала сағын тантаналы байрам көнөндә иҫкә төшөрә .

Гуманист шағир был шиғырында ла:

Кешеләрем минең, кешеләрем,
Йылы йылғам, яҡты ҡояшым,
Бар ғүмерем үтһен арағыҙҙа,
Бергә көлөп, бергә илашып. - тигән һүҙҙәр менән Бөйөк Еңеүҙе яулаған ҡаһарман халҡыбыҙға баш эйҙе.
(Батырҙар бейеүе)
6-сы бит
«Кеше ерҙән биҙер өсөн түгел,
Биҙәр өсөн тыуа был ерҙе...»

-был өлөшө ер, һыу, тәбиғәтте һаҡлау проблемаһын күтәрә.

-“Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”–С.Гөлфиә

-Беҙҙе туйындырған һәм кейендергән, кеше иткән республикабыҙҙың тәбиғәтен һаҡлау, ҡәҙерләү, уны һаҡ файҙаланыу уй-ниәттәре менән һуғарылған. Ғәзиз тыуған ер, бар байлығы үҙе үк шағирҙың шиғырҙарына, йырҙарына таңғы ысыҡ сафлығы, йүкәләрҙән һығылып тамған бал тәме, тупраҡтан шытып сыҡҡан һә р ҡыяҡ йәшеллеге булып күсә кеүек.

Унда тәбиғәттең терелткес көсө, кешелә йәшәү дәрте, хеҙмәт дәрте уятыуы, шағир ижадына илһам, көс биреүе бик оҫта сағылдырылған.

- “ Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта»- F. Ильяс

-Шиғыры шулай уҡ ошо борсолоулы уйҙарҙы дауам итә. Хәҙер алып-һатыуға ҡоролған баҙарлы заманда хатта тыуған ер-һыуҙарыбыҙҙың һатылып, ситтәр ҡулына күсеүе бар. Ер-һыуһыҙ ҡалһа, халыҡ үҙе ни эшләр һуң? Нисек йәшәр? Шуға шағир йәнә туған халҡына мөрәжәғәт итергә, уны уяу булырға саҡырырға мәжбүр.

-Был проблема беҙҙә лә актуаль. ”Тәбиғәт яҡлауға мохтаж” тигән темаға инша яҙғайныҡ. Сәйетғәлина Альбинаның иншаһы бик матур ине, уҡы әле.

-Шулай итеп, Р.Бикбаевтың күпселек шиғырҙарын да бөгөн бөтәбеҙҙе уйландырған, борсоған мәсьәләләр ҙур урын биләй, улар тыуған ер яҙмышы, халҡыбыҙ яҙмышы, киләсәк хаҡында тәрәнерәк фекер йөрөтөргә, ғәмһеҙ генә йәшәмәҫкә мәжбүр итә. Поэзияның көсө, тәьҫире лә шундалыр, моғайын.

7-се бит.

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Халҡыма хат әҫәрендә тел яҙмышының ил яҙмышына бәйләнгәнлеген Рәми Ғариповтың *Теле юҡтың ғына иле юҡ. Иле юҡтың ғына теле юҡ* тигән ғәҙел иҫкәртеү һүҙҙәрен раҫлап, тел сәйәсәтенең алып барылмауын ҡат- ҡат әйтеп, уны кисектергеһеҙ хәл итеүҙе теләп йөрәгенән сыҡҡан ҡайнар һүҙҙәр менән халҡыбыҙҡа оран һалды.

-*Халҡыма хат*- Садиҡова Ләйсән

-*Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!*- Альбина

-Рәми Ғарипов кеүек башҡорт теленең яҙмышы өсөн яныусы шағирҙарҙы милләтселектә ғәйепләп, башҡорт телен уҡытыуҙы тыйып, мәктәптәрҙә русса уҡытыуға күсеү сәйәсәте башланды. Шул осорҙа әсә телен белмәй үҫкән балалар тәрбиәләнде.

Р.Бикбаевтың *Халҡыма хат* мөрәжәғәте-хаты ысын мәғәнәһендә халыҡты уята, бер кемде лә битараф ҡалдырмай, *телһеҙ* башҡорттарҙа туған теленә ихтирам, уны өйрәнеү теләге уятһа, үҙ теле өсөн көрәшкән кешеләргә рух нығлығы һәм көс бирә.

Хәҙерге көндә хәл үҙгәрҙе. Суверенитет, телдәр тураһында закон ҡабул ителде. Мәктәптәрҙә туған тел де өйрәнәләр.

-*Мин ни өсөн башҡорт телен өйрәнәм* тигән темаға инша, асыҡ хат яҙғайныҡ. (Ике- өс инша, хат уҡыу)

-Шулай ҙа үҙ теленән биҙгән халыҡтар күбәйә. Бөгөн дә үҙен ныҡ һиҙҙергән был сәйәсәт шағир күңелен телгеләп, һәр саҡ һыҙландыра. Шағир үткер поэтик фекер аша халҡының үткәнен барлай, бөгөнгөһөн күҙаллай,киләсәген һәр йәһәттән төҫмөрләй.

8-се бит Хәҙистәр

-Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Ҡөрьәнде аңлатып биргән үҙ һүҙҙәрен, дини йолалар хаҡында әйткәндәрен, тапҡыр һүҙҙәрен ХӘҘИСТӘР тип атайҙар.

Хәҙистәрҙең төрләһе бар: ҙур, кесе, ҡыҫҡа, тапҡыр һүҙлеләре. Тематикаһы ла төрлө: дин, ғилем, белем, әҙәп, яҡшылыҡ, яманлыҡ, холоҡ, намыҫ, йолалар (10 хәҙис һөйләү)

Башҡортостандың халыҡ шағиры Бикбаев Рауил хәҙистәрҙән һайлап шиғри тәржемәлә *Йөҙ ҙә бер хәҙис* тигән китабын башҡортса баҫтырып сығарҙы. 2002 йылда «Ағиҙел» журналында донъя күрҙе.

9-сы бит

Шиғри арнауҙар.

-Рауил Бикбаевтың *Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны* китабын уҡығас, Ирек Кинйәбулатов *Ҡуш йөрәкле ҡоштоң осҡаны* шиғырын яҙа (З. Алһыу)

-Тимер Йосопов *Бөркөт саңҡыуы* (Х.Булат)

-Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Ҡәҙим Аралбай ҙа Рауил Бикбаев тураһында бик матур фекерҙәләр

10-сы бит

«Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙән»

-Рауил Бикбаев матбуғатта әҙәби тәнҡит, публицистик мәҡәләләр, докладтар менән йыш сығыш яһай. Төрлө ҡитғаларға һәм илдәргә сәйәхәт ҡылырға өлгөрә. Уның 2002 йылда «Сәфәрҙәргә сығам сәхәрҙәрҙән» тигән юлъяҙмалар китабы донъя күрҙе. Был йыйынтыҡ хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын үҫтереүгә тос өлөш индерҙе.

Шиғриәттәге һәм фән өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Рауил Бикбаевҡа 1993 йылда Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде. Ул – Республикабыҙҙың атҡаҙанған фән эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт, Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр, Зәйнәб Биишева һәм Рәми Ғарипов исемендәге премиялары лауреаты.

Ижад - тынғыһыҙ һәм үтә яуаплы эш. Әйткәндәй, Рауил ағай Бикбаев бөгөнгө көндә лә ҡомарланып, ең һыҙғанып ижад итә. Йәмәғәт эштәрендә ҡайнай. Үҙе артынан эйәреүсе һәм йәш ҡәләмдәштәре менән әңгәмәләшергә лә форсат таба.

Ғөмүмән, бар булмышы менән иле, халҡы, заманы өсөн янып- көйгән шағир ғына ысын ижадсы дәрәжәһенә эйә. Был йәһәттән Рауил Бикбаев үҙен тулыһынса аҡлай һәм хуплауға лайыҡ.

Йомғаҡлау.

Синквейн.

Шағир.

Тынғыһыҙ, яуаплы.

Өйрәтә, тәнҡитләй, тәрбиәләй.

Ҡомарланып, ең һыҙғанып ижад итә. Йәмәғәт эштәрендә ҡайнай.

Ижадсы.

- Викторина һорауҙарына яуаптар алыу.
- Белемдәрен баһалау.
- Өйгә эш биреү.

Р. БИКБАЕВТЫҢ «УРАЛЫМА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Кинйәғолова Гөлшат Фәрис ҡыҙы,
Баҡалы районы Тоҡбирҙе мәктәбе

Маҡсат. 1. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады, шиғыр йөкмәткеһе менән таныштырыу. 2. Урал тәбиғәтенең матурлығын күрһәтеү, Тыуған илдең үткәнен белеү, киләсәге тураһында хәстәрлек күреү һәм уны һаҡлау көрәклеген аңлатыу. 3. Уҡыусыларҙың һүҙлек байлығын арттырыу, һөйләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу. Р. Бикбаевтың портреты, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары, яҙыусылары плакаттары, Урал тауҙары һынландырылған һүрәттәр, презентация, өҫтәлмә материал.

Дәрес барышы:

I. Иҫәнләшеү.

Уҡытыусы.

Һаумыһығыҙ, һаумы әле,
Ниндәй йылы һүҙ икән!
Күңелдәрҙе иретерлек,
Һәр кемгә лә үҙ икән.

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

Уҡытыусы. Башҡорт телендә дөрөҫ һөйләшер өсөн телдәрҙе шымартып алайыҡ әле.

Телтәҙәткес:

Ҙа – ҙа – ҙа – ҡыҙҙар киткән һуң ҡайҙа?

Ҙы – ҙы – ҙы – ҡаҙҙар йылғаға барҙы.

Ҙә- ҙә – ҙә – рәхәтләнеп эй йөҙә,

Ҙе – ҙе – ҙе – баҫтырмағыҙ һеҙ беҙҙе.

III. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

Бөгөнгө дәрестең темаһын билдәләр өсөн беҙгә ребус сисергә кәрәк булыр. (Өҫтәлмә материал №1)

Шулай итеп, беҙ бөгөн дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышасаҡбыҙ. Шағирҙың "Уралыма" әҫәре менән нимәләр әйтергә теләгәнен белербеҙ.

IV.Яңы тема.

Бер уҡыусының Р. Бикбаевтың биографияһы һәм ижады буйынса алдан әҙерләнгән доклад менән сығышы.

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафиҡ ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. 1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш.Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың Ғ. Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

Уҡытыусы: Рауил Бикбаевтың ата – бабалары, әсәй – ҡартәсәйҙәре, нәҫеле кем булған икән? Ҡартатаһы менән ҡартәсәһе иртә вафат булғанлыҡтан, шағир уларҙы иҫләмәй. Шулай ҙа улар бик хәлле булғандар. Ике яҡлы ҙур өйҙә ике улдары ғаиләләре менән йәшәгәндәр. Шулай уҡ беҙгә Р. Бикбаевтың ете быуыны билдәле: Аҫылгәрәй-Бикбай-Ҡотлоәхмәт-Хәсән-Мөхәмәтшә-Шәрәфетдин-Төхфәтулла-Рауил.

Ә нимә ул шәжәрә һәм ни өсөн ул кәрәк?

Алма алмағастан йыраҡ төшмәй. Рауилдың Мәүлитбикә өләсәһе сәсән телле кеше булған. Ул төрлө төртмә таҡмаҡтар сығарырға яратҡан. Улар телдән – телгә күсер булғандар. Шулай уҡ ҡайғылы хәлдәр тураһында бәйеттәр ҙә сығарған. Уның иң кесе улы һалдат хеҙмәтендә вафат булғас, уға оло бәйет бағышлаған.

– Иҫкә төшөрөп китәйек әле, нимә ул бәйет?

Һуғыш йылдарында бик ауырға тура килә Бикбаевтарҙың ғаиләһенә. Рауилдың атаһына һуғыш яланынан тере ҡайтырға насип булмай. Әсәһе Рәҡиә Бикбаева биш бала менән бер үҙе тороп ҡала. Шуналыҡтан уларға әсәһенең туғандарына күсеп китергә мәжбүр булалар.

– Тағы ла иҫкә төшөрөп китәйек, Р. Бикбаев ҡайҙарҙа белем ала?

– Ҡасан беренсе шиғырҙар йыйынтығы баҫыла?

– Ниндәй шиғырҙары һеҙгә таныш?

– Ниндәй темаларға яҙылған шиғырҙары һеҙгә бигерәк тә яҡын?

– Ни өсөн?

- Әйҙәгеҙ, хәҙер Башҡортостандың халыҡ шағирҙарын һәм яҙыусыларын иҫкә төшөрәйек. (Уҡытыусы Башҡортостандың халыҡ яҙыусылары һәм шағирҙары портреттарын күрһәтә, уҡыусылар уларҙы атап, тыуған ерҙәрен, уҡылған әҫәрҙәрен әйтә.)

Ә хәҙер Рауил Бикбаевтың фотолар теҙмәһенә арналған презентацияны ҡарап үтәйек. (Өҫтәлмә материал №2)

"Уралыма" шиғыры буйынса эш.

1. Уҡытыусының уҡыуы.
2. Уҡыусыларҙың үҙ аллы уҡыуы.
3. Һүҙлек эше (уҡыусылар хор менән уҡытыусы артынан

һүҙҙәрҙе уҡый, тәржемә итә, һүҙлектәренә яҙып ала): һын - стан, фигура; ҡын - ножны; килмешәк - переселенец; баҡһам - посмотрю; индәрендә - на плечах.

4. Уҡыусылар уҡытыусы ярҙамында шиғырҙы рус теленә тәржемә итә һәм тағы бер тапҡыр үҙ аллы уҡый.
5. Һорауҙарға яуаптар:

- Уралдың үткәнен автор нисек һүрәтләй? (1, 2-се күплетты яңынан уҡып үҙ һүҙҙәре менән һөйләйҙәр.)
- Авторға нимә йәшәү көсө бирә? (3-сө куплетта яуап табалар.)
- Уның күңеле ни өсөн тыныс? (4-се куплет.)
- Һеҙ Урал тураһында тағы нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ? (Уҡыусыларҙың яуаптары)

6. Был шиғырҙағы троптар һәм фигуралар менән эш.

- Эпитеттар: сылтыр – сылтыр ағып үтәләр, күтәренке күңел, киләсәгем шат, киләсәгем тыныс, һынмаҫ ҡылыс.
- Сағыштырыуҙар: Уралды ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа оҡшатам.
- Йәнләндереү: шишмәләр йәшәү илтәләр.

- Метонимия: ҡулдарына алмаҡ булып, илдең иңдәре.
- Градация: күҙем тала белмәй, һәр килмешәк ауған туралып.

7. Уҡыусылар тексты ҡысҡырып сылбырлап уҡый.

Шиғыр буйынса йомғаҡлау эше. Шағир илебеҙҙең үткәне менән ғорурлана: күпме дошман беҙҙең илде баҫып алырға теләгән, ләкин булдыра алмаған; шағир Тыуған иленең бөгөнгөһөн ярата, уның менән һоҡлана һәм киләсәге тыныс булырына ышана. Был хис-тойғолар шиғырҙың ҡайһы юлдарында күренә? Автор Уралды нимәгә өкшата? Ни өсөн уны ҡандан ҡынға кергән ҡылыс менән сағыштыра?

V.Тыуған ил тураһында мәҡәлдәр буйынса эш.

Тыуған илем – алтын бишек.

Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ илеңдә олтан бул.

Ил ҡәҙерен белмәгән башын юғалтҡан, ер ҡәҙерен белмәгән ашын юғалтҡан.

Үҙәккә үткән ел яман, илен һатҡан ир яман.

Мәҡәлде тәржемә итеү, аңлатыу. (Ни өсөн тыуған ил алтын бишек менән сағыштырыла? Ни өсөн сит илдә солтан булғансы үҙ илеңдә олтан булыу яҡшыраҡ? Ни өсөн ил менән ер ҡәҙерен белергә кәрәк? Ни өсөн илен һатҡан ир яман?)

Дәфтәрҙә эш.

Дәфтәрҙәргә ил, ер тураһында мәҡәлдәрҙе күсереп яҙыу.

- Уларға рус телендә эстәлеге яғынан яҡын булған мәҡәлдәр бармы?

VI. Дәрестә йомғаҡлау. Баһалау.

- Бөгөн дәрестә нимәләр белдегеҙ?
- Кем ул Рауил Бикбаев?
- Ниндәй троптар һәм фигураларҙы иҫкә төшөрөп киттек?
- Уҡыусылар, Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың Тыуған илен, туған телен, халҡын ысын күңелдән яратыуы көндәлек эшмәкәрлегендә һәм шиғырҙарында сағыла.

Мин дә һеҙҙең Тыуған илегеҙҙе яратыуығыҙҙы, аҡыллы булыуығыҙҙы, аң-белемгә ынтылыуығыҙҙы теләйем. Илен, телен яратҡан кеше генә ысын шәхес була ала.

VI. Өйгә эш.

а) Шиғырҙы тасуири уҡырға; б) Урал, уның тәбиғәте тураһында һөйләргә әҙерләнергә.

РАУИЛ БИКБАЕВ – ШАҒИР, ҒАЛИМ, СӘЙӘСМӘН.
ПРОЕКТ ӨҪТӨНДӘ ЭШ.
(дәрес-уйланыу)

Ғәлиуллина Тәслимә Инсаф ҡыҙы,
Баҡалы районы Баҡалы ауылының
1–се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат. Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына байҡау яһау, уҡыусыларҙың үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү, шағир шәхесе менән һоҡланыу, ғорурлыҡ тойғолары тәрбиәләү, шағир әҫәрҙәрен уҡыу теләге булдырыу, төркөмләп эшләү күнекмәләрен нығытыу, үҙ аллы эшләү күнекмәләрен үҫтереү.

Йыһазландырыу: интерактив таҡта, компьютер, мультимедиа проекторы.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу.

Психологик комфорт тыуҙырыу.

Һәр көнөбөҙ, һәр дәресебеҙ бер-беребеҙҙе сәләмләүҙән башланһын, кәйефебеҙ яҡшы, эшебеҙ уңышлы булһын!

Хәйерле көн – ағастар!
Хәйерле көн – ҡоштар!
Хәйерле көн – тәбиғәт!
Хәйерле көн – дуҫтар!

2.Фонетик- орфоэпик күнегеүҙәр.

-Дәрес алдынан телдәрҙе шымартып алайыҡ.

Тә-тә-тә – ултырабыҙ дәрестә,
Са-са-са- һөйләшәбеҙ башҡортса,
Ый-ый-ый- уҡыусы шиғыр уҡый,
Ыш-ыш-ыш- беҙ шундай тырыш.

3. Уҡытыусының инеш һүҙе.

- Бөгөнгө дәрестә ниндәй шағир тураһында һөйләшербеҙ икән?

Таҡталағы таблонан шағирҙың исемен табыу.

о	в	Б	а	л	а	ҡ
Р	ә	и	ш	ҡ	о	р
а	к	к	е	м	о	т
у	и	ә	в	п	е	е
к	л	б	а	ә	м	л
а	б	а	ө	ғ	о	е

Шундай әҙиптәр бар, һәр эшкә һөнәрмән кеше кеүек, ниндәй әҙәби төргә, жанрға тотонмаһын, бынамын тигән матур әҫәрҙәр ижад итә һәм шуларҙың береһенең оҫтаһы булып таныла. Шундай әҙиптәрҙең береһе – Рауил Бикбаев. Беҙ бөгөн Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына байҡау яһап үтәрбеҙ.

4. Үтелгән материалды ҡабатлау. Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы тураһында төркөмдәргә бүлеп һөйләү.

Проект өҫтөндә эш. Проекттың темалары экранда бирелә.

1-се төркөм	2-се төркөм	3-сө төркөм
Шағир	Ғалим	Сәйәсмән

5. Төркөмләп эшләү.

1-се төркөм

Шағир. Р.Бикбаев башҡорт әҙәбиәтенә Ырымбур далаларынан иртә таңда иҫкән ел кеүек, уйнаҡлап торған тай һымаҡ килеп инде. Йәйрәп ятҡан Ырымбур далаларында тәрбиәләнеп үҫкән был егет башҡорт халҡының арҡа терәп йәшәгән Уралына, ташына алмас ҡылысын ҡайраған ҡаялар иленә булған ҡайнар һөйөүен “Уралыма” тигән шиғырында әйтеп биргәйне.

1-се слайд. Ташһыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡындан ҡынға кергән ҡылысҡа.
Ҡулдарына һине алмаҡ булып,
Күпме дошман ерҙә тырышҡан…

Шағир мәғрур Уралына булған һөйөүенә ғүмере буйына тоғро ҡалды, офоҡтары киңәйгән һайын Урал тауы уның табыныр ташына, изге атай йортона әйләнде. Ҡартлас Урал тағы ла, шағирҙың үҙе кеүек, китаптан китапҡа төрлө яҡтары менән балҡый, олпатлана барҙы. Баһаһы артты, бәҫе күтәрелде.

Һығымта. Шулай итеп, йырҙарҙа данланған, ҡурай моңдарында маҡталған сал Урал Рауил Бикбаев ижадында һынланыш алды.

2-се төркөм

Ғалим. Уның хеҙмәт кенәгәһендә бер генә юл яҙыу бар: СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән хеҙмәткәре. Ошо дәүерҙә ул кандидатлыҡ һәм филология фәндәре докторы ғилми дәрәжәләрен яҡлай. Аҙаҡ Башҡорт дәүләт педагогия университетында өлкән уҡытыусы, профессор, башҡорт әҙәбиәте үҫешенә ҡағылышлы бик күп проблемалы ғилми хеҙмәттәр, шул иҫәптән биш монография авторы.

2-се слайд.

“Заманды шиғри йылъяҙмаһы”	1980
“Заман. Шағир. Халыҡ”	1988
“Хәҙерге башҡорт шиғриәтенең үҫеше”	1991
“Ш.Бабич. Ғүмере һәм ижады”	1981, 1995

Һығымта.Үҙенең новаторҙарса шиғриәтен фәлсәфәүи кимәлдә яңғыратыуға өлгәшкән, тормош фәлсәфәһенән аҫыл шиғриәт үрнәктәре табырға һәләтле башҡорт халыҡ шағиры һәм күренекле ғалим ул – Рауил Бикбаев.

3-сө төркөм

Сәйәсмән. Шағир Рауил Бикбаев майҙандарға сығып тамаҡ ярыуға ҡарағанда халҡы күңелен шиғри тел, үткер публицистик һүҙ менән яуларға ынтылды. Шағирҙың күп кенә китаптары халҡы йөрәгендә өмөт сатҡылары дөрләтеп ебәрерҙәй яңы һүҙ, ҡыйыу фекерҙәр тантанаһы булды.

3-сө слайд. “Ностальгия”
“Халҡыма хат”
“Эҙләйем”
“Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!”
“Система”
“Баҙар балтаһы”
“Барокамера”
“Башһыҙ һыбайлы” поэмалары
“Шағир һүҙе. Шағир намыҫы”
“Кеше йылы” китаптары.

Һығымта. Шағирлығындағы тап бына ошо үткер публицистик ағым уның өсөн алдағы сәйәсмәнлек эшмәкәрлегенә әҙерлек, нигеҙ, ерлек булды ла инде.

Депутат булып та сәйәсмән булмау мөмкин булмағандай, милләте өсөн янған, йәне һыҙлаған шағирҙың көрәшсе булмауы, рух һаҡсыһы булмауы мөмкин түгел. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевта был сифаттарҙың өсөһө лә тәбиғи үҫешкән.

6. Викторина һорауҙарына яуап биреү.

- Проекторҙа викторина һорауҙары

(Уҡыусылар яҙма яуап бирәләр)

Рәт №	һорауҙар	Дөрөҫ яуап өсөн балл һаны
1.	Кем ул - Р.Бикбаев?	4
2.	Ҡасан һәм ҡайҙа тыуған?	6
3.	Ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ?	3
4.	Аҡбулаҡ педагогия училищеһын ҡасан тамамлай?	4
5.	С.Юлаев исемендәге премияһы ҡасан бирелә?	3
6.	Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем ҡасан бирелә?	4
7.	Ниндәй китабы өсөн Ғ.Сәләм исемендәге премияһы менән бүләкләнә?	5
8.	Тәүге шиғыры ниндәй гәзиттә баҫыла?	3
9.	Беренсе шиғри китабы нисек атала?	6
10.	“Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады” тигән монографияһы ҡасан сыға?	5
	Бөтәһе 50 балл 5-ле билдәһенә 4-ле билдәһенә 3-лө билдәһенә	

7. Рауил Бикбаевтың биографияһы һәм ижады буйынса тест үткәрелә.

1. Рауил Бикбаевтың тыуған ауылы:

а) Үрге Ҡунаҡбай б) Туймбәт в) Бесәнсе

2. Нисәнсе йылда Өфө ҡалаһының почетлы гражданы исеме бирелә?

а) 2000 б)1989 в) 1999

3.Тәүге шиғри китабы нисек атала?

а) “Өс кис” б) “Далала таң” в) “Дала офоҡтары”

4. Тәүге шиғри китабы ҡасан донъя күрә?

а) 1961 б) 1956 в) 1964

5. З. Биишева исемендәге премия ҡасан бирелә?

а) 2003 б) 2005 в) 1987

6.Кем ул Р. Бикбаев?

а) йырсы б) шағир в) бейеүсе?

-Үҙбаһа. Компьютерҙағы дөрөҫ яуаптар буйынса уҡыусылар үҙ эштәрен үҙҙәре баһалайҙар.

Хата юҡ – «5», 1-2 хата –«4», 3-4 хата – «3», 5 хата – ҡабатларға.

8. Проект өҫтөндә эш.

1) Маҡсат ҡуйыу

Уҡыусылар, 2013 йылдың 12 декабрендә Р.Бикбаевтың тыуыуына 75 йыл тула. Әйҙәгеҙ, ошо юбилейға арнап проект эше – “китапсыҡ” эшләйек.

2) Эш төрҙәрен билдәләү

“Китапсыҡ”ҡа ниндәй мәғлүмәттәр ҡуйыр инегеҙ?

(Уҡыусыларҙың яуаптары)

- Шағирҙың портретын ҡуйыр инем.
- Р.Бикбаев тураһында инша яҙыр инем.
- Р.Бикбаевҡа арнап шиғыр яҙыр инем.
- Ребус төҙөр инем.
- Тел тураһында мәҡәлдәр яҙыр инем.
- Р.Бикбаевҡа арнап синквейн төҙөр инем.

-“Китапсыҡ”тың баш мөхәррире һәм биҙәүсе – рәссамы һайлана.

Түбәндәге таблица тултырыла.

Таблица №1

	Эш төрө	Башҡарыусы	Мәғлүмәт сығанағы
1.	Портретын табырға	Сәбитова Ә.	Интернет
2.	Шағир тураһында инша яҙырға	Медведева Ә.	Интернет
3.	Р.Бикбаевҡа арнап шиғыр яҙырға	Шакирова Алһыу	Дәреслек
4.	Ребус төҙөү	Ғәниев Р.	Әҫәрҙәр йыйынтығы, китапхана
5.	Тел тураһында мәҡәлдәр яҙыу	Закиров А.	Интернет, китапхана
6.	Р.Бикбаевҡа арнап синквейн төҙөр инем	Хәйруллина Г.	Интернет, китапхана

9. Йомғаҡлау.

Уҡыусылар, һеҙ бөгөнгө дәрестә ниндәй яңылыҡ белдегеҙ?

10. Баһалау.

11. Өйгә эш.

Уҡыусыларға түбәндәге эштәр бирелә.

1) Таблицала күрһәтелгән биремдәрҙе эшләргә

2)Биҙәүсе-рәссамға эштәрҙе йыйып, “китапсыҡ”ҡа урынлаштырырға.

3) Проект эшен яҡларға әҙерләнергә.
1. Проекттың темаһын әйтергә.
2. Проект эшегеҙҙә ниндәй мәғлүмәттәр урынлаштырҙығыҙ?
3. Проектҡа таянып, шағирҙың тормошо һәм ижады тураһында һөйләргә.

БАРЫБЫҘ ӨСӨН ДӘ УРТАҠ ҺЫҘЛАНЫУ

Батталова Таңһылыу Зиннәт ҡыҙы,
Мәләүез районының
8-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Дәрес маҡсаты: уҡыусыларҙы Р.Бикбаевтың „Халҡыма хат” исемле поэмаһы менән таныштырыу, туған телебеҙҙең яҙмышы хаҡында фекер алышыуҙы ойоштороу, уҡыусыларҙа илһөйәрлек рухы тәрбиәләү, уларҙың телмәрен үҫтереү өҫтөндә эште дауам итеү.

Йыһазландырыу: компьютер, китаптар күргәҙмәһе, презентация, фонояҙмалар, яҙыусының китаптары һәм портреты.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу, инеш әңгәмә. Дәрескә әҙерләнгәндә М.Кәримдең: «Шундай әҙиптәр бар. Улар халыҡ рухын ғына сағылдырып ҡалмай, шул рухты тере һыу булып байытыусы, уны алға әйҙәүселәргә әйләнәләр. Бындай яҙыусылар әҙәбиәттә генә түгел, ә бөтә милләт күләмендә бер күренеш», - тигән һүҙҙәре иҫкә төштө.

- Һеҙҙеңсә, ниндәй әҙипте «Бөтә милләт күләмендә бер күренеш булырҙай, халыҡ рухын тере һыу булып байытыусы» тип билдәләп булыр ине? Ни өсөн?

- Дөрөҫ, уҡыусылар. Шағир дәрәжәһен ул ижад иткән әҫәрҙәр, уның ижади хеҙмәттәре билдәләй. Был - төп үлсәү.

Беҙҙең маҡсат: Башҡортостандың халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһын өйрәнеү, шағирҙы ошо әҫәрҙәрҙе яҙырға мәжбүр иткән ваҡиғаларҙы һәм күңел кисерештәрен асыҡлау, ошо кисерештәрҙең ғәмен тойоу, уларға үҙебеҙ аңлағанса баһа биреү.

Әйҙәгеҙ, бөгөнгө числоны һәм теманы дәфтәргә яҙып ҡуябыҙ.

II. Р. Бикбаевтың биографияһын ҡабатлау (презентация буйынса, алдан әҙерләнгән уҡыусы сығыш яһай).

III. Ҡыҙ баланың Р. Бикбаевҡа яҙған хатын уҡыу:

Йәмле июнь уртаһында Өфөнөң Салауат Юлаев һәйкәле янында, халҡыбыҙҙың легендар батырына арналған йыр-моң, шиғриәт байрамы гөрләп торғанда Рауил Бикбаевҡа бер егет хат килтереп бирә. Ул хат бер ҡыҙҙан була. Шул хатты нисек яҙылған булһа, шул көйө, бер урынын да үҙгәртмәйенсә уҡып сығайыҡ.

(Бер уҡыусы ҡысҡырып уҡып сыға).

Здравствуйте, Равиль Тухватович!

Боюсь показаться Вам навязчивой и неинтересной, но мне надо исповедоваться перед Вами. Я уверена, что Вы должны меня понять. Возможно, все то, о чем я хочу написать, покажется Вам несущественным, но это моя беда, и это беда очень многих людей нашей республики. Просто, может быть, не все это осознали. Вот я - башкирка, я не умею писать письмо по-башкирски. Родным считать башкирский я не перестаю хотя уже много лет говорю, думаю на русском. Но я все равно башкирка, и никто не сможет переубедить меня.

Все началось еще в детстве. Мои родители – башкиры. И они оба сделали тот шаг, о котором жалеют. Но тогда было непрестижно учиться родному языку. Они записали меня в русский класс. Тогда я по-русски ничего не знала. Со мной говорили всегда по-башкирски. Помню недоумение, детский ужас, когда я попала в некомфортную обстановку. Я помню свое отчаяние на уроках от того, что я ничего не понимаю. Я отупела вдруг, я не могла решать задачи, пример, не могла пересказывать рассказы, на переменах я ни с кем не разговаривала. Я не хотела ходить в школу. Произошло насилие над детской душой. Я не обвиняю в этом родителей. Это было такое время, так политика, и, конечно, надо было быть очень умным и дальновидным, чтобы понять, что это будет ошибкой. Они искренне хотели дать мне полноценное образование.

Постепенно я научилась русскому языку: детская душа восприимчива. Школу я закончила хорошо, бойко писала сочинения, очень много читала, но только по-русски.

Башкирский я считала чем-то вроде того, что не пригодится в жизни. Это был признак отсталости, бескультурья. Я до сих пор в недоумении: почему так могло быть, это какую же политику надо было проводить, чтобы весь народ отчуждать от языка?

Когда мне моя бабушка, которую я искренне люблю, упрекала меня в незнании языка, я лишь досадно отмахивалась.

Но, наконец, я поняла, и поняла это гораздо раньше, чем начала бить тревогу наша творческая интеллигенция, что я – «ничто», и что хотя и имею диплом о высшем образовании и знаю два иностранных языка, а своего родного-то я не знаю. Я не знаю ни истории народа, ни литературы, ни религии, не знаю ни культуры своего народа.

Вот тогда, когда я вроде бы уже сформировалась, многого достигла, оказывается, во мне нет главного стержня, на котором держится личность.

Конечно, я сейчас наверстываю упущенное, часто хожу в филармонию, читаю стихи башкирских поэтов в оригинале и, слава Богу, кое-что понимаю; если я не знаю значения слов, я интуитивно догадываюсь по смыслу. Но все равно я чужая вам всем и, может быть, не смогу быть своей в своей республике, и в этом весь ужас. Я чувствую себя ущербной чем-то очень большим, чем-то очень важным.

Я рассказала Вам о трагедии моей жизни, немного стало легче.

Помогите мне советом.

Уфа. 15. 06. 89.

IV. Хаттың йөкмәткеһе буйынса әңгәмә.

- Хат авторы фажиғәгә тап була. Был фажиғә ниҙән тора?

- Фажиғә хат авторына ғына тап киләме? (Был ҡыҙҙың ғына фажиғәһе түгел. Меңәрләгән башҡорт ана шундай фажиғәгә дусар ителде, үҙ туған телен өйрәнеүҙән мәхрүм булды).

- Ҡыҙға яуап итеп Рауил Бикбаев «Халҡыма хат» поэмаһын ижад иткән. Хәҙер шул поэманы уҡыйбыҙ.

V. Шиғри хаттың йөкмәткеһе өҫтөндә эш.

1. Хаттың йөкмәткеһе менән танышыу (фонояҙманы тыңлау йәки уҡыусылар тарафынан тасуири уҡыу).

2. Йөкмәткегә буйынса һорауҙарға яуап биреү.

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, шағир ни өсөн хат формаһын һайлаған? (Поэманың хат формаһында яҙылыуы осраҡлы ғына хәл түгел. Халыҡ, ил тормошоноң иң киҫкен, хәл иткес мәлендә шағирҙар хат формаһын һайлағандар. Мәҫәлән, Граждандар һуғышы соронда Ш. Бабич башҡорт халҡына шиғри хат менән мөрәжәғәт итә. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Р.Ниғмәти менән М. Кәрим дә хат формаһын ҡулланалар.

- Уҡыусылар, хат юлдарын файҙаланып һорауҙарға яуап биреегеҙ.

- Автор нимә менән ғорурлана?

- Тәүге строфала шағир туған телен нимә менән сағыштыра?

- Нимәгә хурлана?

- Шағир Башҡортостанда тел яҙмышының фажиғәле булыуын нисек күрһәтә?

- Тел менән тарих араһындағы бәйләнеште автор нисек аңлай?

- «Телле көйө телһеҙ уғландарҙың үҫеүендә кем ғәйепле? Ни сәбәпле ошо хәлгә төштөк?

- Тел, милләт яҙмышы кем ҡулында?

- Поэмала балта образы ни өсөн ҡулланылған?

- Поэмала тел һәм азатлыҡ өсөн көрәш мотивы нисек асыла?

- Шағир ниндәй мөрәжәғәт менән сығыш яһай, нимәгә өндәй?

- Тимәк, әҫәрҙең йөкмәткеһе ниндәй юлдарҙа сағыла?

Телде йоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян халҡым, ҡуҙғал, милләтем.

- Әйҙәгеҙ поэманы 2 өлөшкә бүлеп ҡарайбыҙ. Нисек бүлеп була?

(Тәүге өлөштә халыҡтың үткән тарихы һәм тел яҙмышы тураһында һүҙ бара, икенсе өлөштә –авторҙың мөрәжәғәте)

- Халыҡ поэмала нисек һүрәтләнгән? (Миҫалдар килтереп, иҫбат итегеҙ).

- Поэмала лирик герой (автор) образы һеҙҙең күҙ алдына ниндәй кеше булып баҫа? Автор беҙгә ошо тарихты һөйләүсе. Поэманың йөкмәткеһе ошо лирик геройҙың хис-кисерештәренән ғибәрәт, әйҙәгеҙ, уның хис донъяһын асыҡлайыҡ.

Беренсе строфала – һоҡланыу һәм хурланыу антонимдар аша бирелгән: ғорурланам-хурланам.

Икенсе строфала телдең хәлен күреп авторҙың «Бәғерҙәре яна, теленә».

Өсөнсө строфала автор һыҡтау, ҡылыстар сыңы ишетә, туған ере тураһында уйлана.

Дүртенсе, бишенсе строфаларҙа автор үҙенең башҡорт булыуы менән ғорурланыуы күрһәтелә.

Тарихын иҫенә төшөргәс, ғорурланыу хисенә үкенес, әрнеү өҫтәлә: «ни үтмәгән башҡорт баштарынан», «золом, йәберҙәр ябырылыған», ти .

Әммә «Тик батшалар телен киҫкәндә лә, башҡортом бит телһеҙ булмаған», - тигән ғорурланыу хисе көслөрәк яңғырай, хистең йөкмәткеһе үҙгәрмәй, тик уның дәрәжәһе, тәрәнлеге арта. (Башҡа абзацтар ҙа шулай тикшерелә).

- Милләткә, башҡорт теленә ҡарата ғәҙелһеҙлек шағир күңелендә ниндәй хистәр тыуҙыра алған? (Ҡайғы, хәсрәт, үкенес, рәнйеү, нәфрәт)

V . Фекер алышыу.

- Башҡорт теле нимәгә кәрәк ул, тигән кешеләр бөгөн дә осрай. Һеҙ уларға нимә тип яуап бирер инегеҙ?

- Телде һаҡлап алып ҡалыу өсөн кем яуаплы?

- Ә Рауил Бикбаевҡа хат яҙыусы ҡыҙға һеҙ ниндәй кәңәш бирер инегеҙ?

- Поэма 1989 йылда яҙылған. Шул йылдарҙан бирле башҡорт теленең яҙмышында үҙгәрештәр булдымы? (Башҡорт теле дәүләт теле итеп иғлан ителде. Ҡалалаларҙа, район үҙәктәрендә башҡорт мәктәпәре, балалар баҡсалары асылды. Профтехучилищеларҙа, техникумдарҙа, институттарҙа башҡорт теле өйрәнелә башланы. Башҡортса сыҡҡан гәзит-журналдар һаны күбәйҙе һ.б.)

- Ниндәйҙер кире күренештәр ҙә күҙәтелә. Һуңғы йылдарҙа балалар һаны аҙ булыуға һылтанып ауылда мәктәптәр ябыла. Был күренеш бигерәк тә бәләкәй башҡорт ауылдарына хас. Балалар күрше ауылдарға йөрөп уҡырға мәжбүр. Башҡорт телен башҡа милләт халыҡтары тарафынан дәүләт теле итеп өйрәнеүгә ҡарата ҡаршы сығыусылар күбәйҙе).

- Р. Бикбаев БР Дәүләт йыйылышы – Ҡоролтай депутаты булараҡ ниндәй эштәр башҡара?

Яҙыусы башҡорт телен үҫтереү һәм яҡлау буйынса ҙур эштәр башҡара. 2013 йылда Ҡоролтай депутаттары алдында Р. Бикбаев сығыш яһай. Ул унда нимә әйткәндер, беҙгә билдәле түгел. Әммә башҡорт телен мәктәптәрҙә өйрәнеү кәрәклеге тураһындағы һорау ыңғай хәл ителде. Тимәк, 2013-2014 уҡыу йылында мәктәптәрҙә башҡорт теле законға ярашлы рәүештә өйрәнеләсәк. 1989 йылда поэмаһы менән башҡорт халҡына мөрәжәғәт итеүсе яҙыусы бөгөн юғары трибунанан башҡорт телен яҡлаусы кеше булараҡ та үҫеште.

Ул түңәрәк өҫтәлдәрҙә ҡатнаша, мәғариф өлкәһенә ҡараған ҡыйыу фекерҙәре менән гәзит һәм журналдарҙа сығыш яһай, бик йыш халыҡ менән осраша, аңлатыу эше алып бара. (Яҙыусының бер сығышын тыңлау).

- Телде һаҡлау, үҫтереү өсөн бөгөн һеҙҙеңсә ниндәй саралар кәрәк?

VI. Үҙ аллы проект төҙөү.

1 команда. Башҡорт телен үҫтереү буйынса тәҡдимдәр менән Республика президентына хат яҙа.

2 команда. Ҡоролтай депутаттарына телде үҫтереү буйынса эшлекле тәҡдимдәр индерә.

3 команда. Башҡорт телен өйрәнеүгә ҡаршы булған кешегә телде өйрәнеү кәрәклеге буйынса дәлилдәр әҙерләй.

4 команда Телевизор аша башҡорт халҡына мөрәжәғәт менән сығыш яһай.

VII. Проекттарҙы яҡлау.

VIII. Рауил Бикбаевтың Рәшит Шәкүр менән бергә Башҡортостандың гимнының һүҙҙәрен яҙыуы ла уның илһөйәр рухлы шағир булыуын иҫбатлай. (Гимнды тыңлау).

IX. Дәресте йомғаҡлау.

- Р. Бикбаевтың ижады һеҙҙә ниндәй хис-тойғолар ҡалдырҙы?

Дөрөҫөн әйткәндә, Рауил Бикбаевтың ижадына бирәһе баһаны М.Кәримдең һүҙҙәре менән алдан әйтеп ҡуйҙыҡ. Рауил Бикбаев – халыҡ рухын тере һыу булып байытыусы, уны алға әйҙәүсе, яҡлаусы әҙип.

X. Өйгә эш. Поэманан өҙөк ятларға. Төрлө һүрәтләү сараларына миҫалдар килтерергә.

“ТӘБИҒӘТТЕҢ ТЕЛЕ АСЫЛҒАН САҠ” ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Морозова Фаягөл Кәфил ҡыҙы,
Мәләүез ҡалаһының 1-се мәктәбе

Маҡсат: 1) Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлын өйрәнеү; шиғырҙың идея-тематик йөкмәткеһен асыҡлау; тасуири уҡыу, телмәр үҫтереү күнекмәләре биреү аша тәбиғәт күренештәренә күҙәтеүсәнлек тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, китаптар күргәҙмәһе, яҙ төшөрөлгән һүрәттәр, автор менән осрашыуға арналған фотолар, компьютер, проектор.

Дәрес барышы

1. Ойоштороу. Психологик уңай тыуҙырыу.

Йәшәр генә ерем, эсер һыуым,
Һулар һауам, йылыныр уттарым,
Хайран ҡалып һеҙҙең матурлыҡҡа,
Барған ерҙә ҡалам туҡталып. (Р. Бикбаев)

Матурлыҡты күҙәтеү: тәҙрә аша яҡты, аяҙ, ҡояшлы көндө күҙәтеү. Бер-береңә теләктәр белдереү: -Бер-берегеҙгә ҡарап йылмайығыҙ, уңыштар, хәйерле көн теләйек. Хәйерле көн! Уңыштар һеҙгә!

2. Ситуация тыуҙырыу. Уҡыу мәсьәләһе ҡуйыу.

- Уҡыусылар, беҙ үткән дәрестә нимә тураһында һөйләштек? Дәрестең темаһы ниндәй ине? Хикәйә нимә тураһында ине? Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау, өй эшен тикшереү.

- Яҙ тураһында һөйләшеүҙе дауам итәбеҙ.

Иғтибарҙы таҡтаға йүнәлтеү. Яҙ темаһына рәсемдәр, һүрәттәр эленгән. (Уҡыусылар төркөмдәр менән эшләйҙәр. 1-се төркөм-һүҙҙәр уйлай, 2-се төркөм һөйләмдәр төҙөй.)

3. Маҡсат ҡуйыу. Эште планлаштырыу. Бөгөнгө дәресебеҙҙең маҡсаты - Рауил Бикбаевтың яҙ темаһына арналған “Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғыры менән танышыу, шағирҙың тормош һәм ижад юлын өйрәнеү .

Дәфтәргә число, теманы яҙыу.

4. Актуаллаштереү.

а) Кем ул Рауил Бикбаев? Уның тураһында беҙ нимәләр беләбеҙ?

б) Р. Бикбаевтың биографияһы менән танышыу. (Шағирҙың тормош юлы проектор аша күрһәтеп барыла. 1-6-сы слайдтар)

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покровка районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Күрше Ғәбдрафик ауылындағы ете йыллыҡ мәктәпте, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһын, Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. Аспирантуранан һуң оҙаҡ йылдар Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының ғилми хеҙмәткәре булып эшләй. 1995 йылдан Башҡортостан Яҙыусылар союзының идара рәйесе вазифаһын башҡара. Рауил Бикбаев университетта уҡыған йылдарында яҙыша башлай. "Дала офоҡтары" тигән тәүге шиғырҙар йыйынтығы 1964 йылда донъя күрә. Шунан бирле ул ике тиҫтәгә яҡын китап сығарҙы, хәҙерге башҡорт поэзияһының кимәлен билдәләрлек күренекле шағир булып танылды. Рауил Бикбаев поэзияһында халыҡ яҙмышына бәйле проблемалар күтәрелә, заман, ил, халыҡ, киләсәк алдында яуаплылыҡ тураһында һүҙ бара. "Карауанһарай", "Баҙар балтаһы", "Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!" поэмаларында, "Халҡыма хат" шиғырында был бигерәк тә асыҡ күренә. Рауил Бикбаев – күренекле әҙәбиәт ғалимы. Ул филология фәндәре докторы, профессор. Хәҙерге башҡорт поэзияһының үҫеү проблемаларына арналған күп ғилми хеҙмәттәрҙең авторы. Уның бигерәк тә Ш. Бабич ижадын өйрәнеү, әҫәрҙәрен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса хеҙмәте ҙур. Рауил Бикбаев республикабыҙҙың F.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. 1992 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән маҡтаулы исем бирелде.

5. Шиғыр йөкмәткеһе өҫтөндә эш. Практик эштәр.

а) Һүҙлек эше: (7-8 слайдтар) шыйыҡ – жидкий (-ая, ое); һығыу – выжимать;
һарылып – прильнув; хаҡ – дөрөҫлөк.

б) Шиғырҙың исеменә иғтибар итегеҙ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ һүҙ нимә тураһында барасаҡ?

в) Уҡытыусының тасуири уҡыуы. (9-12 слайдтар)

г) Уҡыусыларҙың үҙ аллы, тасуири уҡыуы.

д) Әңгәмә. Һорауҙар:

- Әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ бара? (Яҙ миҙгеле, яҙғы тәбиғәт тураһында.)

- Тәбиғәттә япраҡ үҙен нисек һиҙә? Шиғырҙан ошо юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ.

- Тәбиғәт менән кешегә яҙ миҙгеле нимә алып килгән? Автор был турала нисек әйтә?

- Тақтала кластер төҙөлә: ҡарҙар ирей, гөрләүектәр аға, тамсы тама, ҡояш нығыраҡ ҡыҙҙыра, йылы яҡтан ҡоштар ҡайта, балалар сыйырсыҡ ояһы яһай, тәүге япраҡтар күренә, яҙҙың беренсе сәскәһе умырзая ҡалҡа, тәбиғәттең теле асыла.

- Тәбиғәттәге ошо үҙгәрештәрҙе, матурлыҡты күргән шағир бына ниндәй бай йөкмәткеле шиғыр ижад иткән.

Матурлыҡ, тәбиғәттең уяныуы тураһында , уларҙы һаҡлау тураһында һөйләшеү.

6. Һүрәтләү саралары өҫтөндә эш.

1. Йәнләндереү: тәбиғәттең теле асыла, япраҡ шыбырлай, ҡолаҡҡа һарыла, һүҙ әйтергә өйрәнә, ер-һыу ашҡына, шыбырлау таштарҙың йәшен һыға, намыҫ һөйләй.

2. Япраҡты нимә менән сағыштырған? Ни өсөн тип уйлайһығыҙ?

Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау.

- Япраҡты автор сабый менән сағыштыра. Сабыйҙың бына-бына теле асылған ваҡытты күҙ алдыбыҙға килтерәйек.

7. Ял итеү минуты. Магнитофондан балаларҙың теле асылғанда һөйләгән телмәрҙәрен тыңлау.

8. Ижади эш.

Автор тәбиғәт күренештәрен һүрәтләү өсөн йәнләндереүҙәрҙе бик оҫта ҡуллана. Һөҙөмтәлә, хозур тәбиғәттең матурлығы асыла.

Әгәр һеҙ шиғыр яҙһағыҙ, ниндәй һүҙҙәр ҡулланыр инегеҙ? (Тақтала терәк һүҙҙәр бирелә. Уҡыусылар ижади эшләй. Эштәр тикшерелә.)

.....сыға

.....уяна.

.....дәрт өҫтәп,

.....тыуа.

9. Тест.

1. Кем ул Рауил Бикбаев?

А) йырсы

Б) рәссам

В) шағир

2) Рауил Бикбаетың шиғырын билдәләгеҙ.

А) Яҙ саҡыра

Б) Тәбиғәттең теле асылған саҡ

В) Яҙғы ташҡын

3) Яҙ тураһындағы мәҡәлдәрҙең мәғәнәләре буйынса тап килгән өлөштәрен тоташтырығыҙ.

А) Яҙғы буран йәш улан: үҙе илай, көҙҙөң йәме көлтә менән.

Б) Яҙҙың йәме сәскә менән, ауыҙ өсөн көҙ яҡшы.

В) Ҡүҙ өсөн яҙ яҡшы, үҙе ҡолай.

4) Йомаҡтың яуабын билдәләгеҙ.

“Ҡыж-ҡыж” тиеп тауыш бирә,
Мороно, гүйә, көрәк,
Йылы яҡтан яҙын ҡайта,
Ниндәй ҡош, тиһең? … .

А) торна

Б) ҡарлуғас

В) өйрәк

10. Йомғаҡлау. Дәресебеҙҙең аҙағында шиғырҙың һуңғы ике юлын ҡабаттан уҡыйыҡ. Шағир беҙҙе нимәгә саҡыра?

Әй, кешеләр, һаҡ булайыҡ, зинһар,
Тәбиғәттең теле асыла!

Уҡыусыларҙың яуаптарын тыңлау.

Уҡытыусы. Эйе, һәр миҙгел үҙенсә матур. Беҙ ошо матурлыҡты һаҡлау өсөн ҡулдан килгәнсә тырышырға тейешбеҙ. Ер эшкәртергә, ағас ултыртырға, тирә-яҡты йәшелләндерергә, матурларға, тәбиғәт менән килешеп йәшәргә кәрәк икәнлеген онотмайыҡ! Быйылғы 2013 йыл Башҡортостан Республикаһының Тәбиғәтте файҙаланыу һәм экология министрлығы тарафынан Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Һәм йылдың девизы түбәндәгесә яңғырай: «Иртәгәһе көнөбөҙҙө һаҡлайыҡ!» Ошо девизды онотмайыҡ, уҡыусылар!

Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың тағы ла бер шиғырында шундай юлдар бар:

Кеше бер саҡ, аҡылына килеп,
Һыҙлауҙары ерҙең баҫылғас,
Әйтә алһын ине бар тәбиғәт:
“Кешеләрем ниндәй аҫылдар!”

Тәбиғәтте һаҡлау – Хоҙай аманаты. Кеше ерҙә иң аҡыллы йән эйәһе, тәбиғәт батшаһы. Ер йөҙәндәге һәр кешегә тәбиғәт, шиғырҙа әйтелгәнсә, “аҫылдарым” тип өндәшерлек булһын!

10.Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеген, хеҙмәтен баһалау.

11. Өй эше. Төркөмдәргә бүлеп эш бирелә: шиғырҙы тасуири уҡырға; яҙ миҙгелен төшөрөргә, “һаумы, яҙ!” темаһына шиғыр яҙырға.

ДАН ҺИҢӘ,БАШҠОРТОСТАН

Ибраһимова Әлфирә Әмир ҡыҙы,
Сибай ҡалаһының "7-се дөйөм белем биреү мәктәбе"

Маҡсат: уҡыусыларҙы Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимнының тексы менән таныштырыу, интернет селтәре ярҙамында Башҡортостан символикаһы буйынса алған белемдәрҙе тәрәнәйтеү, Р.Бикбаев, Р.Шәкүр ижады буйынса алған белемдәрҙе системалаштырыу, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: компьютер, интернет селтәре, локаль селтәр, китаптар күргәҙмәһе, презентация, интерактив таҡта. Дәрес барышы.

I.Ойоштороу.

II. Дәрестең темаһын, маҡсатын әйтеү. -Бөгөнгө дәрестә беҙ Рауил Бикбаевтың ижады тураһында һөйләшеүҙе дауам итербеҙ, Р.Бикбаевтың ижадында Башҡортостан символикаһын булдырыуҙа ҙур йоғонтоһо бар, Рәшит Шәкүр менән берлектә Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимнының һүҙҙәрен яҙғандар. Авторҙарҙың ижады, Башҡортостан тураһында һөйләшәсәкбеҙ, танышасаҡбыҙ.

III. Өй эшен тикшереү.

-Дәрестә өйгә эште тикшереүҙән башлайыҡ. Беҙ бөгөн күп яҡлы талант эйәһе Р.Бикбай, Р. Шәкүр тормошо һәм ижад юлына байҡау яһап үтәбеҙ.

Кемдәр реферат яҙған, викторина һорауҙары төҙөгән, эштәрегеҙҙе тапшырығыҙ, икенсе дәрестә баһалармын. Авторҙарҙың ижады, тормошо, ҡаҙаныштары, эшмәкәрлеге тураһында презентацияларҙы тыңлап китәйек.(4 уҡыусы алдан үҙҙәре әҙерләгән презентация буйынса яҙыусыларҙың биографияһы, ижады, эшмәкәрлеге тураһында сығыш яһай - слайд 1,слайд 2, слайд 3,слайд 4)

-яҙыусыларҙың шиғырҙарын тыңлап китәйек.

(Бер нисә уҡыусы Р.Бикбаевтың, Р.Шәкүрҙең ижадынан үҙҙәре һайлаған шиғырҙы яттан һөйләй.) - Улар ниндәй әҫәрҙәр ижад иткәндәр? (китаптар күргәҙмәһе тураһында ике уҡыусы һөйләй).

IV.Ҡабатлау.

- Эйе, уҡыусылар, күреүегеҙсә ике яҙыусы ла һәләтле, оҫта шағирҙар. Ошо ике авторҙарҙы бер бөйөк ижад емеше берләштерә. Ул беҙ өйрәнәсәк Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны.

- Нимә аңлата икән гимн тигән һүҙ? (аңлатмалы һүҙлектән аңлатманы табып уҡыу)

- Башҡортостан Республикаһының тағы ниндәй атрибуттары бар икән?

V. Интернет-кафе. - Яндекстағы Башҡортостан сайтына инәбеҙ һәм өҫтәлмә материал эҙләйбеҙ. Флагтың һәм гербтың һүрәтен табабыҙ, аңлатмаларын уҡыйбыҙ.(Википедия.www.bashinform.ru/bash 217928)
-Гимндың һүҙҙәрен табабыҙ.(barushnikovtotogranhicom/bertevor/гимн Башкортостана)

- Уҡыусылар һеҙҙең алдығыҙҙа гимндың һүҙҙәре ята.(Интерактив таҡтала гимндың һүҙҙәре сыға).
- Үҙаллы уҡып сығығыҙ.(Балалар уҡып сығалар)
- Гимндың көйө 1993 йылдың 12 октябрендә бар. Композиторы –Фәрит Иҙрисов.Тик һүҙҙәре генә булманы. 2008 йылда ғына Р.Бикбаев менән Р.Шәкүрҙең яҙған варианты гимн һүҙҙәре итеп раҫланды. Руссаға Светлана Чураева менән Фәрит Иҙрисов тәржемә иттеләр.(Слайд 6. Светлана Чураева менән Фәрит Иҙрисовтың портреты сыға)
- Гимн менән танышыр алдынан ял итеп алайыҡ. Гимнды ишеткән кеше тура баҫып тыңларға тейеш
- VI. Ял итеү минуты.Тура баҫып гимнды тыңлау. (сайт 7)

VII. Шиғыр өҫтөндә эш.-

- һүҙлек өҫтөндә эш.
- Таҡтала яҙылған һүҙҙәрҙе бер уҡыусы ҡысҡырып уҡып ишеттерһен.

Тараф -
Байраҡ-

- *Һөйөклө ғәзиз ер-*
- *Ҡалҡа бар тарафҡа-*
- *Бөйөк берҙәмлектә-*
- *Хөрмәтле данлы ил-*
- *Нур-моң сәсә-*
- *Рухлы байрағың-*
-

Шиғырҙы строфаларға бүлеп башҡортса-русса уҡыу, һүҙлек эшен русса билдәләп, дәфтәргә яҙып ҡуйығыҙ.

-Шиғырға анализ яһап китеү өсөн таблица тултырайыҡ.

әҫәрҙең жанры	шиғыр
темаһы	Башҡортостан
идеяһы	Башҡортостандың берҙәмлегенә, татыулығына, гүзәллегенә дан йырлау
һүрәтләү саралары	Йәнләндереү-Башҡортостан алға бараһың, моң-нур сәсә. Эпитет-изге Ватан,рухлы байрағың, бөйөк берҙәмлек,сағыштырыу-йондоҙ булып.
әһәмиәте	Башҡортостанды яратырға, ҡәҙерләргә,һоҡланырға һәм уның менән ғорурланырға өйрәтә.

Был шиғырҙың әһәмиәте ошо юлдарҙа ярылып ята. Уны беҙ локаль селтәр аша бәйләнешле текст килеп сыҡһын өсөн һөйләмдәрҙе урынына ҡуйып һәм дауам итеп яҙғанда асыҡларбыҙ. (Локаль селтәр менән эш.)

1. Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
- Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
2. Дан һиңә,Башҡортостан!
- Илен һөйгән азат халҡыңа
- Ошо юлдар аша авторҙар нимә әйтергә теләгән?
- Улар Башҡортостанды мәктәп ҡына ҡалмағандар, артабан халыҡтың берҙәмлектә, татыулыҡта, күкрәп сәскә атып йәшәүенә ышаныс белдерәләр.

Эйе,бөйөк яҙыусыларыбыҙ һеҙгә киләсәктә лә Башҡортостанда берҙәм, һаҡсыл, татыу халыҡтар йәшәһендәр ине тигән теләкте еткерергә тырышалар, сөнки һеҙ Башҡортостандың киләсәге.

XI. Йомғаҡлау һәм өй эше биреү.

- Өй эше:

1. гимндың һүҙҙәрен ятларға.
2. Беҙ Башҡортостан киләсәге темаһына инша яҙырға

«ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!» ПОЭМАҺЫ БУЙЫНСА ДӘРЕС ӨЛГӨҺӨ

Кәйепова Рәсимә Насырйән ҡыҙы,
Сибай ҡалаһының Р.Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейы

Маҡсат. Р.Бикбаевтың ижады менән таныштырыу, әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү; фекерләү һәләтен һәм бәйләнешле телмәрҙе үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу; тыуған яҡҡа һөйөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, матурлыҡты күрә һәм тоя белергә өйрәтеү.

Йыһазландырыу. Яҙыусының портреты, китаптары; карточкалар, аудиояҙма, Ағиҙел буйҙарын сағылдырған картиналарҙың репродукциялары.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу мәле.

Аудиояҙманан А. Игебаевтың “Донъябыҙҙа ни ҡала?” шиғырынан өҙөк яңғырай. Уҡыусылар уның авторын, исемен, нимә тураһында булыуын әйтә (экологик проблема). Экранда өҙөк күрһәтелә.

Уҡытыусы. Нимә ул экология? “Башҡорт теленең һүҙлеге”нән табып уҡыусы уҡый.

Яуап: “Башҡорт теленең һүҙлеге” түбәндәгесә аңлатма бирә: “Биологияның тереклек һәм үҫемлектәр менән тирә-яҡ мөхит араһындағы бәйләнеште өйрәнә тарған бүлеге”(Экранда сыға).

Экранда Урал тауының рәсеме, артабан А.Фадеевтың “Йәмле Ағиҙел буйҙары” картинаһының репродукцияһы. Ағиҙел йылғаһы тураһында мәғлүмәт биреү (Бер уҡыусы сығып картанан күрһәтә).

“Тәбиғәт – производство – кеше” темаһына инеш әңгәмә ойошторола.

Уҡытыусы. Экология (йәки тәбиғәтте һаҡлау) проблемаһы һуңғы йылдарҙа иң актуаль мәсьәләләрҙең береһенә әйләнде. Илдең иҡтисади үҫешен булдырыу төрлө производство объекттарын төҙөүгә бәйләнгән. Әммә тоталитар режим хөкөм һөргән осорҙа завод-фабрикалар төҙөү беренсе планда булып, тәбиғәтте һәм кеше һаулығын һаҡлау бөтөнләй тип әйтерлек иңкәр ителде, һөҙөмтәлә тәбиғәт байлығы юҡҡа сыға барҙы.

Уҡытыусы.Ағиҙелкәй аға урғып-урғып,
Ҡояш байыштары яғына.
Таштар аҡтарырға ҡыуһалар ҙа,
Ағиҙелкәй, һине һағынам...

Ысынлап та, башҡорт халҡының бөтә тормошо Урал тауҙарында, Ағиҙел буйында үткән.

Экранда Ағиҙел йылғаһының рәсеме. Башҡорт халыҡ йыры “Йәмле Ағиҙел буйҙары”н тыңлау.

Уҡытыусы. Халыҡ шағиры Р.Ниғмәтиҙең “Йәмле Ағиҙел буйҙары” поэмаһы Уралды, Ағиҙелде данлап ошондай юлдар менән башлана:

Урал!
Үҙе Боҙ диңгеҙҙең һыуын эсә,
Ә ҡойроғо ҡойона Аралда.
Быуаттарҙың баш өҫтөнән ҡарап,
Мәғрур тора бында ҡаялар.
Шул Уралдың гранит итәктәрен,
Ҡара ҡаяларын иретеп,
Ағиҙелкәй һыҙылып аҡып сыға,
Һалҡын терегөмөш шикелле.

Р.Ниғмәти мәғрур Уралдың, йәмле Ағиҙелдең тәбиғи байлыҡтарын, матурлыҡтарын тасуирлап ҡына ҡалмай, бәлки ошо тыуған ер, Тыуған ил һындары аша уларҙы йәмле образдарға әүерелдереп, халыҡтың һәм ил-йорттоң тарихын, хәҙергеһен, яҡты киләсәген шиғри юлдарҙа һүрәтләп бирә. Урал менән Ағиҙел шуның бер эске сюжет һыҙығын, композицияһының арҡа һөйәген тәшкил итә.

III. Яңы тема.

Уҡытыусы. Әҙәбиәттә әленән-әле Урал тауҙарына, Ағиҙел йылғаһына, тәбиғәткә бағышлап әҫәрҙәр ижад ителә. Тәбиғәт проблемаһы берәүҙе лә битараф ҡалдырмайҙыр. Башҡортостан халыҡ яҙыусыһы Н.Мусинды “урман йырсыһы” тип атайҙар. Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев та үҙ әҫәрҙәрендә көн проблемаһын күтәреп сыға. Ул өлкән шағир Р.Ниғмәти тасуирлаған Ағиҙел менән Ағиҙелдең хәҙерге хәлен сағыштырып ҡарай.

Бөгөн беҙ һеҙҙең менән Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ” поэмаһын өйрәнеп ошо проблема буйынса әңгәмә ҡорасаҡбыҙ.

1. Уҡытыусының поэманы тулыһынса уҡыуы.
2. Әҫәрҙе бүлекләп уҡыу, һәр бүлектең мәғәнәһен асыу.
3. Түбәндәге һорауҙар ярҙамында әңгәмә үткәрелә.

1) Был поэма һеҙҙә ниндәй тәьҫир ҡалдырҙы, күңелегеҙҙә ниндәй хистәр уятты?
2) Поэма ни өсөн “Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” тип аталған?
3) Автор поэмаһында ниндәй мәсьәләләр ҡуҙғата, нимәләр хаҡында борсолоп уйлана?
4) Уралтауҙы, Торатауҙы, Шаһтауҙы тасуирлаған урындарға иғтибар итегеҙ, һүрәтләнгән картиналарҙы күҙ алдына килтерегеҙ.
5) Поэма-монологтың төп образы?
6) Поэмала Ағиҙелдең яҙмышы тураһында автор һөйләгәндә уҡыусыларға ниндәй һорауҙар ҡуя?
7) Шаһтау, Стәрле, Ағиҙел яҙмыштарының ошо хәлгә төшөүендә кем ғәйепле?
8) Ер аҫты байлыҡтарыбыҙ ни өсөн халыҡты яфаларға һала, илде бөлгөнлөккә төшөрә?

Лирик герой менән Ағиҙелдең сәйәхәте.

Экранда бирелгән таблицаны тултырырға.

Ваҡиға урыны	Төп ваҡиға
1.Ирәмәл	Ағиҙел менән лирик герой сәфәргә сыға.
2. Белорет ҡалаһы	Ағыуланған завод быуаһында сәсәй-сәсәй быуылалар. Үткенселәр балыҡ шартлата, ә бала-саға ҡырсын таш менән уйнай.
3. Бөрйән районы	Ҡарағай урманы юҡҡа сыға, солоҡсолоҡ онотолған, һал ағыҙыр өсөн йылғаларҙы төҙәйтәләр, шаршыларҙы киптерәләр.
4. Шүлгән мәмерйәһе	Шүлгән һүрәттәре емерелгән, сувенир тип, ватып алынып бөткән.
5.Иштуған һыуһаҡлағысы	Ауылдар, зыяраттар һыу аҫтында ҡала. Тарих онотола.
6.Торатау	Шаутауҙың нигеҙе емерелә, тау шиңә.
7.Стәрлетамаҡ ҡалаһы	Һөрәм аша ҡала күренмәй, ә алыҫта үле даръя ялтырап ята. Күк һөрәмлә, һыуы ыулы. Стәрленән ағыу яуа, һөрәм яғыла.
8.Өфө ҡалаһы	Ҡара мазут, бысраҡ, ағыулы ләм йылғаның төбөн ҡаплап ята. Ҡариҙел һәм Дим кеүек йылғалар ҙа саф көйө килеп етә алмайҙар.
9.Ағиҙел ҡалаһы	Тамырлана Башҡорт АЭС-ы. Был АЭС Чернобылдән ҡеүәтлерәк буласаҡ.

Уҡытыусы. Автор тағы ла бер мөһим ваҡиға тураһында фекер йөрөтә. Нисек итеп наҙанлыҡтан, вәхшилектән ҡотолоп, тарихи ҡомарткыларыбыҙҙы, телебеҙҙе, мәшһүр әҙиптәребеҙҙең бай мираҫын һаҡлап ҡалырға һәм уларҙы йәш быуынға еткерергә – бына нимә борсой лирик геройҙы. Күпме китап инквизиция усаҡтарында янды; күпме һүҙ оҫтаһы (Аҡмулла, Бабич, Юлтый һ.б. экрандасыға) нахаҡҡа юҡ ителде; сәсән телле күпме ҡарт-ҡоро үҙе менән аҫыл ҡомарткыларҙы ҡәбергә алып китте; күпме бала туған телһеҙ үҫте...

Әммә шағир төшөнкөлөккә бирелмәй, уның киләсәккә ышанысы түбәндәгесә дөйөмләштерелә:

Мин ышанам, кеше матурлыкты
Һәләкәттән барыбер ҡотҡарыр –
Ғәмһеҙлектән беҙҙе һиҫкәндереп,
Үкереп ебәрерҙәй мамонттарың,
Кешнәп ебәрерҙәй толпарың.

Йомғаҡлау.Бөгөнгө көндә тәбиғәтте һаҡлау буйынса ниҙәр эшләнә? Үҙгәрештәр бармы?

Яуап. Башҡортостан хөкүмәте экология өлкәһендә һиҙелерлек эштәр башҡара: уны финанслау планлаштырыла; заводтарҙа зарарлы цехтар ябыла; һыуҙы һәм һауаны таҙартҡыс ҡоролмалар төҙөлә; экология закондарын боҙоусы хужаларға, предприятияларға штраф һалына һ.б. Ҡыҫҡаһы, халыҡ талабы әкренләп тормошҡа ашырыла, элекке режим ваҡытында ебәрелгән хаталар әкренләп төҙәйтелә. Әммә тәбиғәтте һауыҡтырыу буйынса эшләйһе эштәр күп.

Һығымта.Уҡыусылар, башҡорт халыҡ йыры “Йәмле Ағиҙел буйҙарында” йырланғанса:

Ағиҙелкәй ҡайҙа, ай туғайҙа,
Ағиҙелкәй кеүек һыу ҡайҙа,
Ағиҙелкәйҙәрҙең ай һауаһы,
Йәнгә рәхәт, тәнгә ҙур файҙа.

Беҙ – тәбиғәт балаһы. Тәбиғәт беҙҙең уртаҡ өйөбөҙ. Уны һаҡлайыҡ, уның байлығын әрәм-шәрәм итмәйек. Беҙ тәбиғәткә ҡарата рәхимһеҙ булһаҡ, килер быуындарға ни ҡалыр?һ

Өйгә эш. Поэманың йөкмәткеһе буйынса инша яҙырға әҙерләнергә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!»ПОЭМАҺЫН ӨЙРӘНЕҮ

Мөхәмәтйәнова Лиана Әлиф ҡыҙы,
Нефтекама ҡалаһы,
3-сө дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсаттар: Рауил Бикбаетың ижады менән таныштырыу, әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү; фекерләү һәләтен һәм бәйләнешле телмәр үҫтереү, һүҙ байлығын арттырыу; тыуған яҡҡа һөйөү, тәбиғәткә һаҡсыл ҡараш тәрбиәләү, матурлыҡты күрә белергә өйрәтеү;

Йыһазландырыу: компьютер, презентация, китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы:

1.Ойоштороу мәле.

Башҡортостан! Һинең гүзәллеккә
Тиң булырлыҡ ерҙәр бармы икән?
Аҡҡош кеүек ап-аҡ Ағиҙелкәй
Ҡайһы илдә генә бар икән?

2. Дәрестең темаһы, маҡсаты менән таныштырыу.

Бөгөн беҙ дәрестә йәмле Ағиҙел буйҙары тураһында һөйләшеүҙе дауам итербеҙ. Ағиҙел йылғаһының матурлығына ҡабат һоҡланып, авторҙы борсоған мәсьәләләр тураһында ла һөйләшеп китербеҙ.

3. Өй эшен тикшереү.

Бер нисә уҡыусының башҡорт халыҡ йыры «Йәмле Ағиҙел буйҙары»н яттан һөйләтеү.

- Йырҙа Ағиҙел йылғаһы нисек маҡтала?

4.Төп өлөш.

- Бөгөн беҙ дәрестә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың ижады менән танышасаҡбыҙ.
- Уның тураһында нимәләр әйтә алаһығыҙ? Ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ?
- Ул 1938 йылда тыуған. Рауил Төхфәт улы Бикбаев сығышы менән Ырымбур өлкәһенән. Ныҡлап яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Башҡорт дәүләт университетындағы ижади-ғилми мөхит, әҙәби кисәләрҙә, әҙәбиәт түңәрәгендә ҡатнашыу, йәш һәм оло ҡәләмдәштәре менән аралашыу ижад өсөн киң мөмкинлектәр аса. Р.Бикбаевтың ижады уның фамилияһына торошло бик бай. Уның шиғырҙарында, поэмаларында тыуып-үҫкән яҡтарының тәбиғәт йәме, халҡының күңел күрке, тарихы, хәҙергеһе киң сағылыш таба. Уның шиғриәтендә һәр кемде борсоған, уйландырған, хәүефләндергән мәсьәләләр, төрлө һорауҙар асыҡтан-асыҡ һүрәтләнә. Илебеҙҙең үткәненә лә, бик үк төҫмөрләнмәгән киләсәгебеҙгә лә ҡараш ташлана; ебәрелгән ҙур етди хаталар, ғәмһеҙлектәр, ғәҙелһеҙлектәр, битарафлыҡтар уйландыра; тәбиғәттең ярлыланыуы, экологик хәүефтәр, кеше күңелдәренең ҡорғаҡһыуы, әҙәп-әхлаҡтың ҡаҡшауы ныҡ борсой. Ошо йәһәттән Рауил Бикбаевтың «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» тигән поэмаһы бигерәк тә көслө тәьсирле әҫәр.
- «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһынан өҙөктө уҡытыусының тулыһынса уҡыуы

Һүҙлек эше (һүрәттәр күрһәтелә):

хафа-беспокойство
шеш-опухоль
бушбоғаҙ-горлопан
һөрән-призыв
ҡыуғын-сплав
ҡырғын-мор
ылымыҡ-водоросль
оран һалыу, саң ҡағыу, төрән һуғыу- бить в набат
элмәк-петля

5.Физ-тәнәфес

«Ағиҙелкәй» музыкаль презентацияһын ҡарау.

Поэманың йөкмәткеһе буйынса һөйләшеү:

- Шағир поэманы ниндәй юлдар менән башлай?
- Артабан авторҙы ниндәй уйҙар борсой башлай?
- Өҙөктә Башҡортостандағы ниндәй һыуһаҡлағыстар телгә алына?(Картанан табып күрһәтеү.)
- Автор ни өсөн бындай һыуһаҡлағыстар төҙөүгә ҡаршы сыға? Быға һеҙҙең ҡарашығыҙ нисек?

Күпме йылдар тәбиғәттә үҙебеҙгә бойһондорабыҙ тип уға мәрхәмәтһеҙ ҡаранык, уны самаһыҙ таланык, байлыҡтарын әрәм-шәрәм иттек. Диңгеҙ яһайбыҙ тип, оло йылғаларҙы быуҙык, йылғаларҙы киреге ағыҙырға йыйындыҡ, тауҙарҙы емерҙек, күсерергә тотондоҡ. Күпме матур туғайҙарыбыҙ, ауылдарыбыҙ һыу аҫтында ҡалып юҡҡа сыҡты, диңгеҙҙәр һаҫыҡ даръяларға әйләнде, балыҡтар тонсоҡто, һыуҙар ағыуланды. Кешеләр үҙҙәре ҡылған эштәр тураһында аҙ ғына булһа ла уйланһын ине.

- Поэмала ошо фекерҙе һүрәтләгән юлдарҙы табып уҡып күрһәтегеҙ һәм мәғәнәләрен аңлатығыҙ.

«Яңы һыуһаҡлағыс төҙөйбөҙ тип, төҙөйбөҙ бит ағыу һаҡлағыс», «Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит, үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ», Күпме «бөйөк төҙөлөштәр» тип, «ҡаш төҙәтеп, күҙ сығарҙыҡ».

- Сәйәхәткә сыҡҡан шағирҙың йөрәге нимәгә әрней? (Мәғрүр Урал урмандары һирәгәйгән, ҡарағай урмандары ҡырылған, Урал тауҙарының күп урындарында яланғасланып ҡалыуына шағир хафалана.)

Башҡорт ҡорттарын, солоҡтарын аҫрап ҡарағайҙар ярым юҡҡа сыҡҡан. Урмандары ҡырылыуҙан йылғалар һайыҡҡан, яланғас ярға, ҡаҡ ҡаяға әйләнеп ҡалған Ағиҙел буйҙарының ҡото киткән.Сөнки юғарыла ултырған түрәләр бер нимәгәлә ҡарамай, план тип, дан-исем алыр өсөн бөтә урманды ҡыралар.

- Тәбиғәт байлығы менән ҡарауһыҙ ҡыланыу тәбиғәт йәмен генә бөтөрөп, тау-урмандарын яланғасландырып, йылға, күлдәрен һайыҡтырып ҡына ҡалмай, әҙәм күңелдәрен дә ҡорғаҡһыта, үҙҙәрен ғәмһеҙ бәндәләргә әйләндерә - шулары өсөн нығыраҡ борсола һәм бошона шағир.
- Ниндәй шағирҙың поэмаһын Р.Бикбаевтыҡы менән сағыштырырға була? (Рәшит Ниғмәти «Йәмле Ағиҙел буйҙары».)
- Был ике поэмала авторҙарҙы ниндәй мәсьәлә борсой?

Рәшит Ниғмәти мәғрүр Уралдың, йәмле Ағиҙелдең тәбиғи байлыҡтарын, матурлыҡтарын тасуирлап ҡына ҡалмай, ошо тыуған ер, тыуған ил һындары аша уларҙы йәнле образдарға әүерелдереп, халҡының һәм ил-йорттоң тарихын, хәҙергеһен, яҡты киләсәген шиғри юлдарҙа һүрәтләй.

Рауил Бикбаев ошондайыраҡ принципҡа ҡоролған, уның үҙәгендә Ағиҙел йылғаһы, Урал тауҙары, Ағиҙелдең урман, туғайҙары тора. Бөтә Башҡортостанды Урал ҡуйынынан, Ирәмәл тауҙары итәгенән башлап иңләп-буйлап йәйрәп аҡҡан Ағиҙелдең тамағына, Кама йылғаһына ҡойғансы бар юлын шағир уй-күңеле менән сәйәхәт ҡыла. Әммә Р.Ниғмәти был сәфәрҙе поэмаһында утыҙынсы йылдар аҙағында ҡыла, Рауил Бикбаев дәүеребеҙҙең яңы кешеһе, быуат аҙағында, туҡһанынсы йылдар алдында. Тимәк, күп йылдар үткән, күп һыуҙар аҡҡан, заманалар үҙгәргән, ҡараштар яңырған, тормоштар башҡаланған.

- Поэманы уҡыусыларҙың тасуири уҡыуы.
- Бирелгән һүҙҙәрҙе һүрәтләү сараларын билдәләргә, мәғәнәләрен аңлатырға:

Урал күкрәге, йөрәгемде яра, көн киҫелә, ағыу һаҡлағыс, Урал ҡойроғо ҡойона Аралда, Уралдың гранит итәктәре, Ағиҙелде көслө ҡулдар менән быуасаҡ,тере һыу.

6. Йомғаҡлау.

- Шулай итеп, поэманың йөкмәткеһе буйынса нимә әйтә алаһығыҙ?

Йомғаҡлап әйткәндә, «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль-иҡтисади, экологик һәм әхлаҡи-әҙәп мәсьәләләрен тура һәм үткер еткерә белеүе, заманса яңғырашы менән әһәмиәтле. Беҙ - тәбиғәт балаһы. Уны һаҡлайыҡ. Уның байлығын әрәм-шәрәм итмәйек. Беҙ тәбиғәткә ҡарата рәхимле булайыҡ.

Башҡортостаныбыҙҙың күренекле халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа быйыл 75 йәш тула. Халыҡ бәхете, ил яҙмышы, кешеләр араһындағы саф мөнәсәбәттәр хаҡында изге эштәр һәм яҡты уйҙар менән янып-ярһып йәшәгән Рауил Бикбаевҡа һәр яҡлап оло ихтирамға лайыҡ.

Дәресебеҙҙе йомғаҡлап һеҙгә ошо шиғырҙы уҡып ишеттерәһем килә:

Тәбиғәтте һаҡлайыҡсы, дуҫтар!
Һаҡлайыҡсы таҙа һыуҙарҙы,
Хуш еҫ бөркөгән нәфис сәскәләрҙе,
Урмандарҙы, сикһеҙ ҡырҙарҙы.
Бөтәһен дә һаҡлайыҡсы, дуҫтар,
Ҡарап ҡына ситтән уҙмайыҡ.
Беҙҙең иң ҙур байлыҡ - тәбиғәткә
Ярҙам ҡулыбыҙҙы һуҙайыҡ!
Туғайҙарҙағы матур гөл-сәскәләр
Беҙгә рәхмәт йырын йырлаһын,
Яраланмай үҫкән ағастарҙа
Ҡоштар моңо һис тә тынмаһын!

7. Өй эше. Поэманы тасуири уҡырға әҙерләнергә һәм Башҡортостан йылғалары исемдәренән кроссворд төҙөргә.

КВН- ПУТЕШЕСТВИЕ, ПОСВЯЩЕННОЕ 75 – ЛЕТИЮ НАРОДНОГО ПОЭТА РАВИЛЯ ТУХВАТОВИЧА БИКБАЕВА « В ДОРОГЕ НОГИ, А В ПЕСНЯХ ДУМЫ…»

Яндугушева Серафима Александровна,
Мишкинский район,
МКОУ СОШ им.братьев Беловых д. Тынбаево

Равиль Бикбаев – поэт, литературовед, депутат, Председатель комитета по образованию, науке, культуре, спорту и делам молодежи Государственного Собрания – Курултая Республики Башкортостан, Народный поэт Башкортостана, доктор филологических наук, профессор, заслуженный деятель науки Республики Башкортостан, заслуженный работник культуры Чувашской Республики, Почетный гражданин г.Уфы, Член-корреспондент Академии наук Республики Башкортостан, автор Гимна Республики Башкортостан.

Биография.

1. Назовите полную фамилию башкирского поэта (Равиль Тухватович Бикбаев)
2. Когда и в каком районе он родился?

(12 декабрь 1938 год, д. Верхнее- Кунакбаево Покровского района Оренбургской области)

3. Как звали родную сестру и зятя поэта?

(сестра Зульхиза, зять Рифат)

4. Где получил первые знания?

(1953 год. Окончил семилетнюю школу в родной деревне)

5. Годы его студенческой жизни

(1953 – 1956г. Ак-Булакское педучилище.

Филологический факультет Башкирского государственного университета. 1962 – 1965 гг.

Аспирантура Института истории, языка и литературы

Башкирского филиала Академии наук СССР)

Трудовая деятельность

1. Чем знаменит 1965 год?

(Научный сотрудник отдела литературы Института истории, языка, литературы Уфимского научного центра Российской Академии наук)

2. В каком году стал председателем правления Союза писателей РБ? Секретарем правления Союза писателей России ?(1995)

3. С какого года является членом Президентского Совета РБ? (2007 г.)

4. Год избрания в депутаты Государственного Собрания – Курултая Республики Башкортостан? (2 марта 2008 г.)

5. Год защиты и названия диссертаций. (1966 г. Защитил кандидатскую диссертацию на тему: «Современная башкирская поэма».1996 г. Докторская диссертация.)

Творчество

1. Название первой книги

(Поэма «Вокзал» 1962 г., напечатан в журнале «Агидель».)

2. Первая книга стихов

(«Степные горизонты» 1964 г.)

3. За какую книгу удостоен республиканской премией имени Галяма Саляма («Автобиография », 1970 г.)

4. Книга, написанная после путешествия

(«На заре выезжаю в путь» 2002 г.)

5. Название книги, куда вошли статьи, выступления, интервью Равиля Бикбаева («Год человека» 2003 г.)

Исследования по современной башкирской поэзии, философской лирике.

1. «Время. Поэт. Народ». 1986 г.
2. «Эволюция современной башкирской поэзии». 1991 г.
3. Шайехзада Бабич.» Жизнь и творчество». 1995 г.
4. «Слово поэта – совесть поэта» 1997 г.

Анализы произведений

1. Что отражает поэт в поэме « Вокзал» (судьба страны, деревни, родного очага, судьба женщины, вынесшей все тяготы войны)
2. Сколько глав – песен в поэме « Ностальгия»?(шесть)
3. Сборник стихов, получивший высокую оценку в центральнойпечати. (« Поющие скалы» 1978г)
4. В какой поэме отражена трагическая история башкирского народа? («Караван – сарай»)
5. Поэмы, в которых проблемы экологии занимают важное место

(«Жажду – дайте воды!», « Письмо моему народу»)

Поэты, с которыми путешествовал по Башкирии

1. Баязит Бикбай
2. Динис Буляков
3. Мустай Карим
4. кураист Юлай Гайнетдинов
5. Какую реку переезжали во время путешествия? (Юшатыр)

Стихи

1. «Поющие скалы» 1978 г.
2. «Радостная весть» 1979 г.
3. «Сияние земли моей» 1982 г.
4. «Заря»1982 г.
5. «Звездный дом» 1985 г.

Звания

1. Год присвоения народного поэта Башкортостана(1992 г.)
2. Когда стал доктором филологических наук?(1996 г.)
3. Чем знаменателен 1992 г.?(Заслуженный деятель науки РБ)
4. В каком году стал Почетным гражданином г.Уфы? (1999 г.)
5. Год избрания Член-корреспондент Академии наук РБ (2009 г.)

Награды:

1. Государственная премия РБ имени Салавата Юлаева (1989 г.)
2. Орден Салавата Юлаева (2000 г.)
3. Орден Дружбы народов(2000 г.)
4. Премия имени Зайнаб Биишевой(2003 г.)
5. Орден « За заслуги перед Республикой Башкортостан» (2009 г.)

Р. БИКБАЕВ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА»

Йыһаншина Т.М. ,
Дүртөйлө районы,
Иҫке Байыш урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: Р.Бикбаев ижады менән танышыу, шиғырҙы анализлау; уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү , тыуған ергә һөйөү, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү .

Йыһазландырыу: компьютер, мультимедиа проекторы, аудиояҙма.

I. *Ойоштороу мәле* .

Һаумыһығыҙ, хәйерле көн, уҡыусылар! Ултырығыҙ ! Ошо ҡояшлы, матур көндә һеҙҙе ҡабат күреүемә бик шатмын. Һеҙҙең бөтәгеҙгә лә күңел күтәренкелеге, уңыштар, һаулыҡ теләп ҡалам.

II. Өйгә эште тикшереү.

III. Төп өлөш.

1. Иғтибар менән таҡтаға күҙ һалығыҙ !

Мөхәмәтша Буранғолов, Сәғит Агиш, Дауыт Юлтый, Ғабдулла Амантай, Рауил Бикбаев. Ошо языусылар, шағирҙарҙы нимә берләштерә? (Уларҙың тыуған яғы -Ырымбур өлкәһе) .

Р.Бикбаев тураһында ҡыҫҡаса биографик белешмә (презентация). Уҡытыусы сығышы.

2. Ә хәҙер уҡыусылар тыуған төйәгебеҙ – Башҡортостан тураһында ниндәй шиғырҙар, йырҙар беләһегеҙ? Шуларҙы иҫкә төшөрөп үтәйек.

Уҡыусылар һөйләй, был ваҡытта проектор аша Башҡортостандың матур тәбиғәтен тасуирлаған презентация күрһәтелә.

Уҡытыусы. Эйе, уҡыусылар, Башҡортостан тураһында шиғыр күп яҙылған. Был теманы Ш. Бабич, Р.Ниғмәти, М.Кәрим, Н.Нәжми, Р.Ғарипов, Б.Бикбай поэзияһында йыш осратабыҙ. Һәр шағир республиканың матурлығын, байлығын, халҡының киң күңеллелеген һәм дуҫ йәшәүен зур оҫталыҡ менән һүрәтләй.

Рауил Бикбаевтың«Башҡортостан бында башлана» шиғырында шулар рәтенә ҡуйырға мөмкин.

3. Ҡурай моңо аҫтында уҡытыусы шиғырҙы тасуири уҡый (йәки фонояҙманан тыңлау).

а) һүҙлек эше:

Яйыҡ- Урал йылғаһы

Юшатыр – Башҡортостандағы йылға

ҡитға – континент, материк.

Ошо һүҙҙәр менән уҡыусылар телдән һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр

төҙөйҙәр.

б) уҡыусылар шиғырҙы тағы бер ҡат үҙаллы уҡыйҙар.

IV. Шиғыр буйынса әңгәмә .

4. Уҡытыусы.

- Шиғыр юлдарын уҡығанда Башҡортостан күҙ алдығыҙға нисек итеп килде?
- Шиғыр уҡығанда ниндәй моң ишетелә ? Моңһоумы, әллә күңеллеме, бейеү көйөмө, әллә маршмы?
- Шиғырҙы нисә өлөшкә бүлер инегеҙ ?

5. Төркөмдәр ҙә эш.

I төркөм – 1 -се өлөшкә исем бирә.

II төркөм – 2 -се өлөшкә исем бирә.

III төркөм – 3 -сө өлөшкә исем бирә.

Өлөштәр нимә тураһында? Сығыш яһарға.

- Башҡортостан ситтә йөрөп ҡайтҡан һәр кемде яҡты йөҙ менән ҡаршы ала. Шиғыр юлдарында был турала нисек яҙылған?
- Тыуған ер лирик геройға үҙенең ҡайҙан башланыуын нисек аңлата?

6. Дәреслектәге 2-се һорауға яуап алыу.

Эйе, уҡыусылар, шиғыр шағирҙың ил улдарын кешеләргә тура ҡарарлыҡ яҡты йөзлө булырға саҡырыуы менән тамамлана. Беҙҙең тамырҙарыбыҙ ошо ергә береккән һәмреспубликабыҙҙың киләсәге беҙҙең ҡулда. Шуға күрә үҙебеҙҙең һәм республикабыҙҙың йөҙөнө ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек итеп йәшәү һәм эшләү – беҙҙең төп бурыстарыбыҙҙың береһе.

V. Өй эше: шиғырҙы Рауил Бикбаев кисерештәрен, уй-фекерен бирерлек итеп тасуири уҡып килергә .

VI. Йомғаҡлау. Баһалау.

Шулай итеп, Р.Бикбаев үҙенең «Башҡортостан бында башлана» шиғырында Башҡортостандың географик күренешен күҙ алдына баҫтыра, ил улдарының йөҙө аҡ булып, намыҫлы кешеләр булып йәшәүҙәрен үтенә.

Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек – Башҡортостан кеүек –
Был донъяға тура ҡарарлыҡ .

РАУИЛ БИКБАЕВ «ХАЛҠЫМА ХАТ»

Шәрипова Айгөл Малик ҡыҙы
Ишебай ҡалаһының айырым фәндәрҙе
тәрәнәйтеп өйрәнеүсе 11-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат. Әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу; социаль, иҡдисади, экологик һәм мораль-этик проблемаларҙың ҡуйылышын, тел-стиль үҙенсәлектәрен тикшереү. Әҫәргә ҡарата үҙ фекерҙәрен әйтергә өйрәтеү, һүҙлек байлығын арттырыу. Бөйөк шағирыбыҙҙың ижады менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү.

Йыһазлау. Мультимедиялы проектор, интерактив экран, компьютер, әҫәр буйынса презентация.

Дәрес барышы.

I.Психологик комфорт атмосфераһы тыуҙырыу.
- Һаумыһығыҙ уҡыусылар!
- Кәйефтәрегеҙ нисек ?
- Ҡояшлы иртә кеүек!
-Бөгөнгө көнгә нимә тип өндәшәбеҙ?
-Хәйерле көн, рәхмәт һиңә, матур иртә.
Минең күңелем көр, кәйефем күтәренке!
-Бер-берегеҙгә ҡарап йылмайып алығыҙ.
- Һеҙ - туған телебеҙ –башҡорт теленең серҙәрен тағын да тәрәнерәк өйрәнергә әҙерһегеҙме?
-Бөгөнгө дәрестә миңә ярҙам итеү өсөн эксперт төркөмө кәрәк буласаҡ, һайлайыҡ.
-Туған телебеҙ серҙәре «Серле ҡумта» эсендә.
һорауҙарға дөрөҫ яуап бирһәк, серле ҡумта асылыр.
1-се һорау. Беҙ туған телебеҙгә нимә тип өндәшәбеҙ?
Әсә телен белгәндең
Теле матур, бай булыр.
Белмәгәндең белеме
Һәм күңеле һай булыр.
2-се һорау «Мәкәлдәр аҙашҡан» интерактив таҡтала (мәкәлдәрҙең 2-се өлөшөн табырға)
Иң татлы тел-
Туған тел -
Теле барҙың-
Телдәр белгән-
Оҫта барҙа ҡулың тый,
Аҙ һөйлә -
Аяғы бысраҡ - өй бысратыр,
Аштың тәме - тоҙ менән,
Туған тел - осар ҡанат
Теле барҙың - иле бар.
Телдәр белгән - илдәр гиҙгән.
Оҫта барҙа ҡулың тый, сәсән барҙа телең тый.
Аяғы бысраҡ -өй бысратыр, теле бысраҡ –кеше бысратыр.
Аҙ һөйлә – күп эшлә.
Аштың тәме - тоҙ менән, кешенең тәме - эш менән.
Иң татлы тел - туған тел.
3-сө һорау. Уҡыусылар, күреүебеҙсә, телде яҡшы белеү өсөн уның һүҙ байлығын ентекләп өйрәнергә кәрәк. Туған телебеҙ тураһында ниндәй авторҙарҙың әҫәрҙәрен беләбеҙ?
Интрерактив таҡтала.
З. Биишева. Бер телдән дә телем, кәм түгел.....
Р. Гарипов. Моң шишмәһе һандуғастай,…
Б. Бикбай портреттары Телем үлмәгән, бөгөнгә еткән…
-Серле ҡумта эсенән «Тел әсәнең балаға иң ҡиммәтле бүләге» тигән мәҡәл килеп сыға.
-Ошоларҙан сығып, беҙ «Тел әсәнең балаға иң ҡиммәтле бүләге»- тип әйтә алабыҙмы?
- Был шиғыр юлдары бөгөнгө дәресебеҙҙең девизы булыр.Бергәләп уҡып сығайыҡ.
-Тел байлығын,һүҙлек хазинаһын тулы һәм дөрөҫ файҙалана белеү беҙҙең бурыс .Туған телдә фекерҙе теүәл , асыҡ итеп дөрөҫ һөйләү һәм дөрөҫ яҙыу - мәҙәниәтлек билдәһе. Һеҙ әсә телен белергә, яратып өйрәнергә, хөрмәтләргә тейешһегеҙ. Әсә телен белгән кеше төплө белемле,юғары мәҙәниәтле була.
«Туған тел үҙең өсөн,башҡа тел көнөң өсөн» - ти халыҡ.
II.Таҡталағы таблонан өйрәнәсәк әҙәрҙең авторын, исемен табабыҙ.

1	З	7	8	0	5	п	Т	э
д	Х	а	л	З	ы	м	А	б
х	а	т	т	ш	р	л	О	р
п	р	г	о	Р	а	у	И	л
Б	и	к	б	а	е	в	Т	9
г	а	д	о	а	г	л	У	р

Рауил Бикбаев «Халҡыма хат» -Уҡыусылар хат тигән һүҙгә һеҙең ассоцияцияларығыҙ.
-Нимә ул хат? Хат -ул ҡағыҙ, яҙыусы, конверт, почта, ручка, хат ташыусы һ.б..
Ә ниндәй хатттар була, сифаттар уйлап табығыҙ әле.
ҡайғылы
борсолоулы
шатлыҡлы
маҡтау
өмөтлө
-Таҡтаға һүҙбәйләнештәр яҙылған.
Туған телем, тамырында ғорурлыҡ, бөгөнгөңдә хурлыҡ, бәғерҙәрем яна, хат яҙам, оран һалам...
Был юлдарҙы уҡығанда ниндәй, уй тойғолар кисерҙегеҙ? (Шатлыҡ, ҡурҡыу, хәүеф, борсолоу.)
-Беҙ өйрәнәсәк әҫәрҙә һүҙ нимә тураһында барасаҡ?(Халыҡ,тел, хат...)
-Алдан фараз итеүбеҙ ,прогнозлау тап килерме?

--һәр төркөмгә карточка таратам.

Р. Бикбаев тураһында таратма материал, ситенә тамға ҡуйып үҙ алдына уҡыу.

-Логик мәғәнә моделен төҙөү.

(Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылы, Аҡ-Болаҡ педагогия училищеһы, БДУ филология факультеты, ғалим, фәндәр докторы, профессор, Башҡортостандың халыҡ шағиры)

-Юғары исемдәре.

-Кем ул Рауил Бикбаев?

-Башҡортостандың халыҡ шағиры,……

-Уҡыу йылдары ҡайҙа, ҡасан тыуған?

Һүҙлек эше. Яңы һүҙҙәр.

Бәғер-

Оран-

Даръя-

әжәл-

алҡым-

тоҙаҡ-

Уҡыусылар, дәфтәрҙә һүҙбәйләнеш, һөйләм төҙөй, тақтала бер уҡысы яҙа.

-Дәреслек менән эш.

-Шиғырҙы уҡытыусының уҡып сығыуы. Ҡыҫҡартылған текст таратам.

Тамға ҡуйып уҡып сығабыҙ.Тәнҡитле фекерләү алымы.

? - бидәһеҙ !- билдәле

-Төрлө уҡыу алымдары ҡулланыу.

Сылбырлап ,автостоплы,смайликтар менән.

Комментарийлы коллектив эш.

һорауҙар буйынса шиғырҙы анализлау.

_Ҡулымдағы ҡанлы бығауҙарҙы өҙҙә халҡым, тип автор нимә әйтергә теләй?

- Ни өсөн Р. Бикбаев “Халҡыма хат” тип яҙған был шиғырҙы?

-Алда әйтелгән фараз дөрөҫ булдымы?

-Шиғырҙа ҡуллнылған һүрәтләү саралары?

-Тақтаға яҙылған нығынған һүҙбәйләнештәрҙең лексик мәғәнәһен билдәләү һәм әҫәрҙә хәл- ваҡиғаларға тура килтерерлек итеп урынлаштырыу.

(Күпме һүҙең йондоҙ кеүек йым-йым нурлана,….)

(бергәләп уҡыу)

Туған телем, йым-йым нурлана, тамырың менән ғорурланам, бөгөнгөңдө күреп хурланам, халҡма хат яҙам, оран һалам, халҡым яҙмышы, күпме аҫыл ирҙәренән, ерҙәренән, йырҙарынан яҙған,тик моңонан , теленән яҙмаған...

- Р.Бикбаев шиғриәтендә һүрәтләү саралары һөйләмдәргә матурлыҡ биреү өсөн генә түгел, ә әҫәрҙең төп идеяһын тәьҫирле, образлы итеп еткереү сараһы булараҡ оҫта ҡуллана.

- Сәсәндәр борон илгә яу килгәндә , йәки ил-йорт эсендә ниндәйҙер мөһим мәсьәләләр килеп тыуғанда шиғри һүҙ , ҡобайыр менән йыйындарҙа халыҡҡа мөрәжәғәт итер булғандар.Мәҫәлән,Салауат Юлаев «Салауат телмәре» йәки «Бүгәсүгә ҡушылып …»тигән ҡобайырын, Байыҡ сәсәндең халыҡты француз илбаҫарҙарына ҡаршы яуға сығырға саҡырған ҡобайыры,М. Аҡмулла «Башҡорттарым, уҡыу кәрәк» тип һүҙ асҡан. Ошо традицияларҙы дауам итеп, халҡыбыҙ шағиры Р. Бикбаев та «Халҡыма хат» шиғырын яҙған.

III.Рефлексия

-Төркөмдәр хеҙмәттәшлеге.

Проектлаусылар әҫәр буйынса эшләй.

1-се төркөм.«Эҙләнеүсе»

-Шиғырҙа килеп сыҡҡан проблемаларҙы аңлатҡан проект төҙөбөҙ.

Телле көйө,телһеҙ башҡорттар.

Әсә телен белмәй үҫкәндәр.

Тырышып үҙ ата-әсәләр теленән яҙҙыра....

2-се төркөм «Иҫбатлаусы»

-Проблемаларҙың хәл ителеше.

Телем барҙа- илем бар .

Туған телем өсөн телем ҡырҡылһын.

Телдән яҙған мең йәтим.

Уян халҡым.....

3-сө төркөм« Ижадсылар» үҙәге дәресте йомғаҡлау өсөн эмпатия алымы ҡулланып синквейн төҙөй.

IV.Синквейн

Тыуған тел хат

Бай, матур борсоу, өмөт

Бөйөк Оран

-Телен һаҡлаған -илен һаҡлар, ти халыҡ.

-Илен , милләтен һаҡлар өсөн халыҡ иң әлек телен һаҡларға тейеш тигән,- Рауил Бикбаев.

Тыуған илебеҙ , туған телебеҙ яҙмышы беҙҙең ҡулда. Р.Солтангәрәеваның «Башҡорт иленә ҡобайыр»ы менән тамамлағым килә:

«Һаҡлағыҙ башҡорт йәнен,

Һаҡлағыҙ башҡорт ерен,

Һаҡлағыҙ башҡорт ғәмен,тим,

һаҡлағыҙ башҡорт илен,-
Батыр илен, дан илен...
V. Экспорттар баһалай.
VI. Өйгә эш. “Туған телем” эссе яҙырға.

“МИН БАШЛАНАМ, ҺЕҘҘӘН, КЕШЕЛӘРЕМ!
КҮҢЕЛЕГЕҘҘӘН ҺЕҘҘЕҢ ЯРАЛДЫМ!”

Сәлихова Лилиә Әнүәр ҡыҙы,
Шишмә районы Шишмә э.ҡ. 4-се һанлы мәктәбе

Тема: Мин башланам һеҙҙән кешеләрем!
Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың тормош юлы менән таныштырыу, уҡыусыларҙың ижади һәләтен асыу; шағирҙың ижадына ҡыҙыҡһыныу уятыу һәм хөрмәт тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, уның тормош юлын сағылдырған стенд, китаптары күргәҙмәһе, гәзит-журнал материалдары, фотографиялар, презентация, шиғыр юлдары яҙылған плакаттар.

Кисә Башҡортостан гимны менән башлана.

1-се слайд ҡуйыла.

1-се алып барыусы.

Рауил Бикбаевҡа етмеш йәш тулыу алдынан республикабыҙ матбуғаты күңелле хәбәр алып килде: Рауил Бикбаев менән Рәшит Шәкүр Башҡортостан Республикаһының Дәүләт гимнына текст яҙған һәм ул текст комиссия тарафынан хупланып, Башҡортостан Хөкүмәт-Ҡоролтай тарафынан Башҡортостан Республикаһы конституцияһына индерелгән.

Бына ул гимн тексы:

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.
Ҡушымта:
Дан һиңә, Башҡортостан
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!
Башҡортостан, һин хөрмәтле данлы ил,
Еңеү яулап алға бараһың.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.
Ҡушымта.
Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.
Ҡушымта.

Йөҙәрләгән текстар араһынан комиссия тарафынан һайлап алынған был башҡортса һәм руссаға тәржемә ителгән гимныбыҙ тексы Фәрит Иҙрисов яҙған музыкаһы менән бер бөтөн булып, көн һайын республика радиоһы, телевизион каналы аша таңдан эш башлағанда яңғырай.

1-се алып барыусы.

«Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исемгә бөйөк һүҙҙәр тупланған: һәр беребеҙҙең иң изге төйәге — Башҡортостан, һәр беребеҙ өсөн ғәзиздәрҙең-ғәзизе — халыҡ, донъялағы иң ғәжәп мөғжизәләрҙең береһе — шағир. Шәхес Башҡортостан өсөн янып йәшәгәндә генә, халыҡҡа ал-ял белмәй хеҙмәт иткәндә генә һәм ул ысын шағир булғанда ғына, Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исемде алыусы әҙәбиәтебеҙҙе яңы баҫҡысҡа күтәрә, тарихи вакиға тыуҙыра», — тигәйне Рауил Бикбаев беренсе башлап рәсми халыҡ шағиры исемен алған Мәжит Ғафури хаҡында. Хәҙер Башҡортостандың халыҡ шағиры исемен үҙе лә йөрөткән Рауил Бикбаев та ошондай оло баһаға һәм ҙур мәртәбәгә шулай лайыҡ. Рауил Бикбаев — ысын мәғәнәһендә ҙур шәхес, атаҡлы кеше. Уның «һәр милләт шәхестән башлана. Шиғриәттә лә иң мөһиме — шәхес» тигән һүҙҙәре лә бар.

2- се слайд ҡуйыла.

Уҡыусы.

Сөн ярынан алыҫтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты;
– Башҡортостан бында башлана!
Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам!
Юлдар һеҙҙе ҡайҙа ғына илтмәй,
Яҙмыш һеҙҙе ҡайҙа ташламай...
Мин башланам һеҙҙән,

Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым.
Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек — Башҡортостан кеүек
Был донъяға тура ҡарарлыҡ.

3-сө алып барыусы : Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында тыуа. Бала саҡтарын, ялан-дала тәбиғәтен хәтерләп, Рауил Бикбаев шуларҙы әйтә: «Ауылдағы бала саҡ һәм үҫмер йылдарым күберәк тәбиғәт менән, бигерәк тә һыу буйы, Соран йылғаһы менән бәйләнгән. Даланың иң ныҡ хәтерҙә ҡалған саҡтарының береһе — яҙ килеүе, үҙәктәрҙең шаулап ярып килеп төшөүҙәре. Сорандың ташыуы, ҡар һыуы ҡойоп, йомран тотоуҙар. Йәйҙең йәмле көндәре, Ҡунаҡбайға барған юлдағы шау сәскәле яландар, Соран ярында теҙелеп киткән бесәнселәрҙеңҡыуыштарында йәшәүҙәр — иҫтәлектәр бихисап... “3-4-5-се слайдтар ҡуйыла.

Уҡыусы :

Соран ярындағы сер-усаҡтар,
Туғайҙарға һыймай сапҡан саптар
Ялҡыныҡыҙ һаман битемә бәрелә
Бала саҡтан сығып барған саҡтар
Беҙҙе йылдар ҡаҡлап сыныҡтырҙы
Һайлағандай ут сәсрәтер саҡма.
Икмәк ҡаптыҡ тәү ҡат ауыҙ тултырып.
Бала саҡтан сығып барған саҡта
Уйламаным, әсәйемдең йөрәге
Һисек өҙгәләнеп типкәнен дә,
Йылы икмәк ятҡан тоҡсай аҫып
Бала саҡтан сығып киткәнемдә,
Тик атайым бары аманатын
Әйтә алманы ҡыҫып бер ҡосаҡлап
Оло донъяларға яңғыҙ башым
Бала саҡтан сығып киткән саҡта

1-се алып барыусы: Оло һуғыш ҡасафаты һәр ауылға, һәр өйгә тиерлек ҡара ҡағыҙ алып килә, йәтимдәр арта. Үлем, хәүеф йыш ҡына аяҡ аҫтында ята. Ҡунаҡбай ауылы ла оло һуғыш йылдарында ҡара ҡағыҙҙар алып бик миктәп, етемһерәп ҡала. Рауил Бикбаевтарҙыңөйөнә лә әжәл керә, 1945 йылдың майында атаһы үлеп ҡала. Биш бала менән утыҙ өс йәшлек Рәкиә Бикбаева атаһы Латип Вахитовтың кәңәше һәм ярҙамы буйынса Ҡунаҡбай ауылындағы ҡуш өйҙөң яртыһын һүтеп алып, үҙенең тыуған ауылы күрше Ғабдрафиҡҡа күсереп һалдыртырға мәжбүр була. Рауилға, һигеҙ йәшлек балаға, тыуған ауылын, уйнаған тиҫтерҙәрен ташлап икенсе ауылға күсеүҙәре, шул өйҙө етемһетеп ташлауҙары ла еңел булмағандыр. Шулай ҙа әсәһе, ҡартатаһы ауылы Ғабдрафиҡҡа ла яйлап күнегә Рауил. Үҙенә яңы дуҫтар таба. Ғабдрафиҡ ауылы Ҡунаҡбайға ҡарағанда ҙурыраҡ та, малай-шалайҙары ла күберәк. Өҫтәүенә, башланғыс мәктәпте тамамлауына Ғабдрафиҡта ете йыллыҡ мәктәп асыла.

Уҡыусы :

Баҫтыммы тупһаңа –
Күңелемә ҡот йыям,
Эй, алсаҡ аласыҡ,
Эй, йәйге утоя.
Баҫтыммы тупһаңа –
Ҡайтҡандай бала саҡ.
Әкиәт күп. Икмәк аҙ.
Ҡатыҡ бар. Ҡалас юҡ.
Тик һаман бала саҡ
Шат булып ҡаласаҡ..
Эй, ҡотло утоя,
Эй, алсаҡ аласыҡ.

1-се алып барыусы: Әсәһе ауылында, яңы мәктәптә тырышып уҡый. Туған әҙәбиәт дәрестәренең тәьҫире микән, әллә үҙ күңел талабымы – 6-7-се синыфтарҙа бүтәндәрҙән йәшереберәк шиғырҙар ҙа яҙа башлай. «Мине кеше итеп аяҡҡа баҫтырған, кешелек сифаттарын зиһенемә һеңдергән, тормошта үҙ урынымды табырға, маҡсатҡа ынтылырға өйрәткәне – әсәйем», – ти Рауил Бикбаев.

6-сы слайд ҡуйыла. Уҡыусы:

Күргәнем юҡ, әсәй, ҡулдарыңдың
Эшһеҙ генә торған тын сағын.
Өйөрәлә һаман орсоҡконаң,
Тәгәрләүен белә йомғағың.
Һинең ҡулдан үткән бәйләм-ептәр
Етер ине ерҙе урарға.
Кейеү менән тәндәр ireп китә,
Бәйләйһеңме әллә нурҙарҙан?
Ҡулың етһә, мамыҡ-дебеттәргә
Кейендерер инең ғаләмде.

Өмөттәрең менән бергә үреп,
Бәйләйһең бит һәр бер бәйләмде.

2-се алып барыусы : Рауил Бикбаев 1953 йылда етенсе синыфты уҡып бөтә. Уҡырға тырыш, зиһенле улын әсәһе нисек тә артабан уҡытырға теләгәндер, бала күңелен тойғандыр, уйлап-уйлап, улар үҙҙәренән урау юлдар менән йөҙ саҡрымдар ары ҡаҙаҡ далалары яғында ятҡан Аҡбулаҡ педучилищеһын һайлайҙар.

7- се слайд ҡуйыла. «Дүрт йылым китап уҡып үтте, – тип хәтерләй Рауил. – Аҡбулаҡта күп ваҡыт тамаҡ яғы бик таҡыр булһа ла, китап уҡып кинәндек. Асығыуҙы баҫыр сара тапмағас, ял көндәрендә йыш ҡына ваҡытты китап уҡып үткәрә инек.»

Педучилищеның һуңғы курстарында уҡығанда Рауилдың күңелендә яңынан шиғри тойғолар йышыраҡ уяна башлай. Ҡайһы саҡтарҙа, хәҙер үҙе хәтерләүенсә, көнөнә бер нисә шиғыр яҙғылағаны була.

Уҡыусы:

Аҡ-Булағым минең, эй, аҡ шишмәм,
Улың кеүек мине үҙ күрҙең.
Һиңә килгән сибек бер малайҙы
Еткән егет итеп үҫтерҙең.
Һин өйрәттеңһис бер кәмһетмәҫкә
Кешеләрҙең милләт-тоҡомон.
Дүрт йыл буйы бер үк һабаҡтарҙы
Төрлө-төрлө телдә уҡыныҡ.

8-се слайд ҡуйыла. 1-се алып барыусы. Рауил Бикбаев Аҡбулаҡ педучилищеһын 1957 йылда тамамлай һәм инеү имтихандарын уңышлы тапшырып, Өфөлә университеттың филология факультеты студенты булып китә . «Университетта уҡыу миңә еңел бирелде – ти ул. – Педучилищелағы әҙерлектең дә файҙаһы ҙур булғандыр. Һуңғы йылдарҙа лекцияларға йүнләп йөрөмәнем, төндәрен шиғыр яҙып үткәрҙем. Гәзиттәрҙә исемем күренә башланы».

Уҡыусы. «Ятаҡ» шиғыры

Һирәктер ул бында бүлмәләрҙең
Тынып ҡалған сағы саҡ ҡына.
Был залдарҙа йәшлек хыяллана,
Йәшлек яна, йәшлек талпына.
Һөйөү, әйҙә, йөрәктәрҙе өтһөн,
Һәм хыялдар тынғы белмәһен –
Яратамын ошо бүлмәләрҙең
Шау-шыуын һәм итһеҙ өйрәһен.

Уҡыусылар Рауил Бикбаевтың китаптары менән сығып баҫалар.

9-сы слайд ҡуйыла.

2-се алып барыусы: Ә хәҙер Рауил Бикбаевтың ижад емештәре менән танышайыҡ. Бына ул сәйләп төҫлө теҙелгән шиғри китаптар шәлкеме: «Дала офоҡтары» (1964), «Ҡош юлы» (1967), «Автобиография» (1969), «Лирика» (1971), «Ғүмер уртаһы» (1976), «Һөйөнсө» (1979), «Ерем балҡышы» (1982), «Бураҙналар» (1985), «Яҙмышым» (1988), «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» (1991), «Барыһы ла беҙҙең намыҫта. Халҡыма хат» (1991), «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай» (1998), «Яңғыҙ ҡоштоң осоп барғаны» (2003)

Һәр бер уҡыусы үҙе тотҡан китап менән таныштырып китә.

1-се уҡыусы

Рауил Бикбаевтың «Дала офоҡтары»1964 йылда нәшер ителгән.

Беҙ далаға барыбер хужа булдыҡ,
Беҙ далаға йәшлек килтерҙек.
Елдәренә уның йүгән һалдыҡ,
Ҡырҙарында алтын үҫтерҙек.
Беҙҙең йәшлек, беләм, үтеп китер,
Үткән кеүек беҙҙең бала саҡ.
Тик тарихта йәшлек тарафынан
Йәшәртелгән дала ҡаласаҡ.

2-се уҡыусы.«Ғүмер уртаһы» (1976).

Ғүмер уртаһы. Был төшөнсә китап авторының, йәғни шағирҙың ир уртаһы йәшенә етеүен белдереүҙән бигерәк, уның билдәле бер ижад ғүмере миҙгелен аңлата.

Көндәремде ваҡлыҡтарҙан әрсеп,
Һөҙөп ташлап шау-шыу туртаһын,
Юлдарыма хафа менән бағам ,
Еткән саҡта ғүмерем уртаһы...
Ғүмеремдең аҫыл уртаһында
Был тормоштоң серле асылын
Һиҙгән һымаҡ йөрәк
Түҙемлерәк,
Һәр тарафтан иҫкән елгә боролоп,
Һәр тауышҡа бармай асылып.
Килмәй хәҙер көтөп әҙер ҡәҙер,
Еңел-елпе тейәп юртаһым.
Бәйгеләрҙе ташлап, йөккә егел,
Еткән саҡта ғүмер уртаһы

3-сө уҡыусы: «Һөйөнсө» китабы шиғриәт һөйөүселәрҙе ҙә һөйөндөрә.

– Кеше тыуҙы, һөйөнсө!
– Тыуыуҙары ни өсөн?
– Аяғына баҫып илдән
Алыр өсөн һөйөнсө.
– Ҡоштар ҡайтты, һөйөнсө!
– Ҡайттылар һуң ни өсөн?
– Тыуған ерҙе, һөйөнсө, тип,
Ҡыуандырыр көй өсөн.
– Һөйөнсө! Бешкән иген!
– Һөйөнсө! Төшкән килен!
– Һөйөнсө! Яулаған ирек ,
Алыҫ ҡитғаның иле.

Уҡыусылар һөйләгәндә 10, 11, 12, 13 слайдтарҙы ҡуйырға мөмкин.

4-се уҡыусы. «Ерем балҡышы» (1982)

«Ерем балҡышы» – был минең унынсы китабым, – ти Рауил Бикбаев, ул шиғырҙарҙан ғына төҙөлдө, уға бер поэма ла инмәне. Был – лирика китабы

Хыялдарҙа эҙләп күк диңгеҙҙең
Аҡ карабын, алһыу елкәнен,
Онотабыҙ ерҙә кешеләрҙең:
Мал көткәнен, иген иккәнен –
Ошо үҙе тормош икәнен.
Ураткында ҡайсаҡ ығы-зығы,
Ауырлыҡтар баҫып киткәндә,
Әйткеләнем:
Шул да булған тормош!
Башҡасараҡ беҙҙең көткәндәр.
Уйламайса ысҡындырған һүҙҙән
Кешеләрҙең күңеле кителде.
Әллә ниндәй тормош эҙләнем мин –
Ошо үҙе тормош бит инде.

5- се уҡыусы. «Ҡош юлы». Был икенсе китабы тәүгеһенән һуң өс йыл ҡала (1967) йылда донъя күрә. Өс йыл ижад өсөн әллә ни ҙур ара түгел. Был китабы ус аяһындай кескәй форматта. Һәр береһе йыйнаҡ ҡына 31 шиғырҙан ойошҡан. Йыйынтыҡтың яртыһынан күп өлөшөн алып торған «Ҡаруанһарай» поэмаһы ғына уны бер аҙ ҡалынайта төшә.

Сит бер кеше һымаҡ, тыныс ҡына
Мөмкин микән ҡарау Уралға?
Мин тауҙарҙы ҡәрҙә ташы итеп,
Табынырға әҙер уларға...
Аҡ ҡайындар яҡты маяҡ булып
Юлдарыма минең теҙелгән.
Тупрағымдан сыҡҡан был ҡурҙарға
Баш эймәйсә нисек түҙергә?..
Уйсан саҡтарымды күрһәң әгәр,
Әйтмә, ҡайғыра, тип, был бәндә,
Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел,
Үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә.

6-сы уҡыусы. Нәүбәттәге китабын Рауил Бикбаев “Лирика “тип атаған. Лирика – тәрән мәғәнәле атама: лирика – ул шағирҙың күңел донъяһының көҙгөһө, лирика – ул уй-хистәр ташҡыны, тойғолар балҡышы

Ҡанаттары ҡором ҡошсоҡтоң:
Мөрйәләрҙәкошсоҡҡыш сыҡты.
Яҙға ярһып ҡошсоҡһөйөндө,;
Тәүге күләүектә һыу инде,
Ҡара саңлы һыуға ул атты,
Ҡанаттарын йәйғор уйнатты.
Ҡыуаныстан күкте ҡосаҡлап,
Ташланды ул ҡайнар ҡояшҡа!
Ҡояшҡа ҡош ҡунған был мәлдә,
Йәберҙән йән туңған был мәлдә,
Булһам икән, тиеп йән аттым,
Бер ҡаурыйы йәйғор ҡанаттың

7- се уҡыусы. «Здравствуйте, Равиль Тухватович!

Боюсь показаться вам навязчивой и неинтересной, но мне надо исповедоваться перед Вами. Я уверена, что Вы должны меня понять. Возможно, все то, о чем я хочу писать, покажется Вам несущественным, но это моя беда и беда очень многих людей нашей республики. Вот я — башкирка, и не могу написать письмо по-башкирски. Родным считать башкирский я не перестаю, хотя уже много лет говорю, думаю на русском (үҙ хатында был башҡорт ҡыҙы ата-әсәһе рус мәктәбенә уҡырға биреп, теле башҡортса асылһа ла уны рус мәктәбендә, рус мөхитендә туған телен онотоп, рус телле кеше булып үсеүен һөйләп китә, хәҙер туған телен онотоуына, белмәүенә үкенестәрен һөйләй) ...В молодости считала, что башкирский язык не пригодится в жизни. Это было

признаком отсталости, бескультурья. Я до сих пор в недоумении: почему так могло быть? Это какую же политику надо было проводить, чтобы весь народ отчуждать от родного языка... Я не знаю ныне ни языка, ни истории родного народа, ни литературы, ни религии, я не знаю культуру своего народа... Я рассказала Вам о трагедии моей жизни, немного стало легче. Помогите мне советом. 15.06.82. Уфа».

Был хатҡа шағир, «Халҡыма хат» шиғыры менән яуап бирә.

Уҡыусы:

Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарҙа яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған.
Сабыйҙарҙың күҙенә ғәмһеҙкарап,
Упҡын ситтәренә еткәнбеҙ.
Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең, –
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә...
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.
Туған телем өсөн көрәк икән –
Бер бәхетем әйҙә юҡ булһын,
Туған телем өсөн көрәк икән –
Ауыҙымдағы телем ҡырҡылһын
Туғанынан яҙған – ярты йәтим,
Туған теленән яҙған – мең йәтим
Телде тоҙаҡларлыкғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

8-се уҡыусы. «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы хәҙерге заманда күптәрҙе борсоған, ныҡ уйландырған социаль, иҡтисади, экологик һәм әхлаҡи-әҙәп мәсьәләләрен тура һәм үткер ҡуйыуы, публицистик пафос менән еткерә белеүе, заманса яңғырашы менән әһәмиәтле. Ул шағир ижадының поэма жанры өлкәһендәге ҙур уңышы булып тора.

– Бер тигәс тә ни яман?
– Берҙән-берең – Ергенең
Емерелһә, шул яман!
– Ике тигәс тә ни яман?
– Илгә терәк кәрәктә,
Ике ҡулыңҡаушырып,
Ҡарап торһаң, шул яман!
Ун тигәс тә,
Йөҙ тигәс тә,
Мең тигәс тә шул яман!
Йорттоң ҡото китеү – яман,
Рухтың ҡото китеү – яман.
Ҡот осоп йәшәү сиренән
Ҡотола алмайбыҙ һаман.
Бер тигәс тә,
Ун тигәс тә,
Мең тигәс тә шул яман.

9- сы уҡыусы «Автобиография»(1969). Рауил Бикбаевтың был өсөнсө китабы поэтик ижадының үҫешендәге күҙгә күренеп юғары күтәрелеше, бик мөһим баҫҡысы. Китаптың инеш эпиграфы булып ошо тора: «Ҡеше өс нәмәгә табынырға тейеш: иленең уҙғанына, уның бөгөнгөһөнөһәм тыуар киләсәгенә. Әүәлге менән киләсәк — кешенең ике ҡанаты. Мин баш өҫтендәге ҡояшҡа ғына ҡыҙынып йәшәмәйем. Шәфәҡ моңһоулығы ла, һыҙылып ҡына атҡан таңдың яҡтылығы ла миңә берҙәй ҡәҙерле».

– Тыуған йылың ҡайһы?
–Халҡым тыуған йыл.
– Ҡыуған юлың ҡайһы?
– Халҡым ҡыуған йыл.
Яҙмышынан уның уҙмышы юҡ,
Ярам-яралары.
Күҙе менән күреп, айырам ерҙең
Ағын-ҡараларын.

1-се алып барыусы. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бер нисә орден-миҙалдар кавалеры Рауил Бикбаев гүзәл Башҡортостаныбыҙға дан йырлай, уның менән ғорурлана. 14- се слайд ҡуйыла.

Бер һүҙ беләм.
Аҙашҡанда юлдарымды
Яҡтыртамын шул һүҙ менән.
Шул һүҙ менән, ауырҙы ла еңел күреп,
Мин тауҙарға елеп менәм.
Бер һүҙ беләм.
Олатайҙар васыяты
Ошо һүҙгә һыйған һымаҡ.
Быуаттарҙың яҡты нурын, яҡшы йырын
Ул үҙенә йыйған һымаҡ.
Башҡа һүҙҙәр нур алырға йыйылғандар
Ошо һүҙҙең тирәһенә.
Оҡшатамын һәр саҡ уны телемдәге
Бар һүҙҙәрҙең йөрәгенә.
Нисәмә ҡат аҫылһа ла, атылһа ла,
Һатылмаған һис бер көскә.
Яу күпҡанда сафтар буйлап, юлбашсылай,
Остан осҡа
Был һүҙ осҡан –
Башҡортостан!

2- се алып барыусы

15- се слайд ҡуйыла. Рауил Бикбаевтың телебеҙ , тәбиғәтебеҙ, Башҡортостаныбыҙ тураһында йөрәккә үтеп инерлек шиғыр юлдары һоҡланғыс, уларҙы уҡыған һайын уҡығы килеп тора. Улар беҙгә йәшәргә әйтеп бөтөргөһөҙ көс, дәрт бирә. Уның ижады иҫ киткес бай, киң. Рауил Бикбаев артабанда беҙҙе үҙенең ижад шишмәһе менән шатландырып, илһамландырып торор.

Кисә Башҡортостан гимны менән тамамлана.

Р. БИКБАЕВТЫҢ “САЛАУАТ ҠЫЛЫСЫ” ШИҒЫРЫ

Сәғитова Резеда Ғәйзулла ҡыҙы,
Бөрйән районы,
Иҫке Собханғол урта дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: уҡыусыларҙы Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән ҡыҫҡаса таныштырыу, „Салауат ҡылысы” исемле шиғырын уҡыу, мәғәнәһен асыҡлау, тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү, фекерҙәрен аныҡ, эҙмә-эҙлекле әйтә белергә өйрәтеү, ҡылыс образы тураһында төшөнсә биреү, С. Юлаев тураһында алған белемдәрҙе системалаштырыу, уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: Рауил Бикбаевтың портреты, компьютер, китаптар күргәҙмәһе, презентация, китаптары, Рәсәй һәм Башҡортостан картаһы, С. Юлаев музейы һәм ҡылыс фотолары.

Дәрестең эпиграфы:

Салауат алмас ҡылысын
Йөрөтөр булған һәр саҡ биленде.
Салауат батыр һәләк булһа ла,
Даны йәшәй Тыуған илендә.
(Халыҡ йыры)

Дәрес барышы

I. Ойоштороу мәле. Сәләмләү. Психологик комфорт булдырыу.

Яҡты көндө сәләмләйек,
Һаумы, ҡояш!
Һаумы, зәңгәр күк!
Һаумы, тыуған ерем!
Һаумы, яҡын дуҫым!

II. Өй эшен тикшереү.

Үткән дәрестә Р.Бикбаевтың шиғырын уҡығайныҡ.

“Уралыма” шиғырын тасуири уҡыу конкурсына нисек әҙерләндегеҙ икән? (Тасуири уҡыуға конкурс ойоштороу, уҡыусыларҙы баһалау)

Уҡыу ситуацияһы тыуҙырыу.

- Уҡыусылар, хәҙер мин һеҙгә бер һүрәт-фото күрһәтәм. Ә һеҙ унда нимә төшөрөлгәнен әйтеп ҡарағыҙ.
- Эйе, бында музей һүрәте күрәһегеҙ. Ә музей тураһында һеҙ нимә беләһегеҙ?
- Беҙҙең районда музей бармы?

Мөхтәр Сәғитовҡа арналған музей. Әле уның 80 йыллыҡ юбилейын билдәләнек . Уға арналған викторинала һеҙҙең класташығыҙ Тәслимә Ҡолдәүләтова район буйынса икенсе урын алды. Афарин, Тәслимә!

Ә ни өсөн мин дәрестә һеҙгә музей һүрәте күрһәтеүҙән башланым икән? Ошо һорауға яуапты дәрес аҙағында бирерһегеҙ.

Ә хәҙер уның шиғырына күсәйек. Шиғыр “Салауат ҡылысы” тип атала. - Шиғырҙы уҡыр алдынан Салауат Юлаев тураһында белгәдәрегеҙҙе иҫкә төшөрәйек.

(Салауат Юлаевтың тыуған йылы һәм урыны, ғаиләһе, Емельян Пугачев менән бергә яуға сығыуы тураһында уҡыусыларҙан ҡыҫҡаса һөйләтеү.)

Дәрестең эпиграфына иғтибар итегеҙ әле.. 1-се слайдтағы эпиграфты уҡыу:

Салауат алмас ҡылысын
Йөрөтөр булған һәр саҡ билендә.
Салауат батыр һәләк булһа ла,
Даны йәшәй Тыуған илендә.

Әңгәмә. - Кем тарафынан ижад ителгән? Нимә тураһында? Ниндәй уй-тойғолар сағылған? Халыҡ үҙ геройын яратамы?

- Эйе, Р. Бикбаевтың “Салауат ҡылысы” шиғырында ла милли батырлыҡҡың ҡаһарманлығы тураһында һүҙ бара.

- Уҡытыусының шиғырҙы тасуири уҡыуы.

- Һүҙлек эше: (экранда)

ҡомартҡы – реликвия, аманат, быуындан-быуынға күсә килгән ҡәҙерле әйбер.

Үҙ аллы гөжләп уҡыу. Һорауға яуап эҙләү:

– Ни өсөн шиғыр “ Салауат ҡылысы” тип атала? (Яуаптарҙы тыңлау: Шиғырҙа халҡыбыҙҙың милли геройы Салауаттың ҡылысы тураһында һүҙ бара. Шағир Салауат Юлаевтың ҡылысын үҙ күҙҙәре менән күргән һәм тотоп ҡарағандан һуң, кисерештәрен шиғыр юлдарына һалған).

Сылбыр буйынса ҡысҡырып уҡыу. Шиғырҙың йөкмәткеһен үҙләштереү:

- Шиғырҙа Салауат ҡылысы тураһында нимә белдегеҙ?
- Ниндәй билдәләр буйынса белдегеҙ?
- Шағир ҡылыстың ниндәй билдәләрен әйтеп бирә?

Ҡылыс ҡайтты
йәшен булып ялтлаған
Рәсәйҙе дер һелкеткән
ил нәфрәте уны утта ҡойған
ил йәштәре уны һуғарған
улының ҡулына ҡылысы күсмәһә лә

Ҡылыс һүрәтен күрһәтеү.(Экранда)

-Бына уның бөгөн музейҙа һаҡланған ҡылысы.

- Нисек, егеттәр, һеҙгә оҡшанымы? Шәпме? Ул һеҙгә ни өсөн оҡшай?

- Ни уйлайһығыҙ ҡылыс тураһында?

- Батырҙың ҡылысы – ул беҙҙең өсөн ғорурлыҡ.

- Ә бөгөн ул беҙгә кәрәкме? Ни өсөн?

- Ҡылыс үҙе нимә өсөн кәрәк?

- Дөрөҫ, ул – һуғыш ҡоралы. Йән ҡыя торған ҡорал. Ул беҙгә һуғышыр өсөн бөгөн кәрәкмәй. Һуғыш булмаһын. Ерҙә тыныслыҡ булһын.

- Ҡылыс әйҙә, музейҙа ғына торһон. Салауат та уны яуыз ниәт менән түгел, ә халҡының азатлығы өсөн күтәрергә мәжбүр булған. Еңеү символы булып һаҡланһын.

IV. Ял итеү минуты

- Әйҙәгеҙ,уҡыусылар беҙ батыр менән ғорурланыу тойғоларын кисереп алайыҡ.

“Ай-һай, Салауат” йыры (тантаналы рәүештә маршҡа баҫыу)

Шиғыр өҫтөндә эште дауам итәйек.

- Шағир Салауат менән ғорурланамы?

-Ғорурлана, һоҡлана. (Уҡып күрһәтегеҙ)

Бер Уралды түгел, бар Рәсәйҙе
Дер һелкеткән булыр был ҡылыс.
Был ҡылыстың батшаларҙың башы
Саҡ-саҡ осмай ҡалған ҡырҡылып.

- Ғорурлыҡ тойғоһонан башҡа тон шиғырҙа һиҙелмәйме?

-Батырҙың еңелеүенә әсенеү ҙә бар, үкенеү, йәлләү тойғолары бар.

- Ҡайһы юлдарҙа асыҡ сағыла? (һайлап уҡыу)

Башҡынайын алып киткәндәр,
Ҡатындарын алып киткәндәр,
Балаларын алып киткәндәр. (йәлләү)
Был ғүмерҙең иң аяныс мәле-
Батыр ҡулынан ҡылыс төшкәне… (әсенеү)
Ҡылысын тоткан саҡта һатлыҡ йәндәр,
Эй, янғандыр батыр яраһы. (Үкенеү)

- Шағир нимә әйтергә теләй? (Милли батырлыбыҙҙы, тарихыбыҙ тураһында белергә өйрәтә. -Салауат кеүек илебеҙҙе, еребеҙҙе, халҡыбыҙҙы һаҡларға өндәй.)

- Ни өсөн ул Салауаттың ҡылысын һатлыҡ йән һелтәй алмаҫ, ти?

- Батыр ҡылысы хужаһына тоғро ҡалыр.

-Ҡылыс беҙгә тормоштоң гел яҡшы булып тормауына бер дәлил булып тора. Батыр ҡылысының республиҡаға ҡайтыу тарихы ошолайыраҡ.

Ҡылыс тураһында тәүге тапҡыр салауатсылар 1982 йылда Латвия университеты профессорынан ишетәләр, Ул Пугачевтың иң яҡын ярҙамсыһының ҡылысы тарих музейында булыуын әйтә. Артабанғы

тикшеренеүҙәр шуны асыҡлай:1928 йылда уны музейға революцияға тиклем бер тарихсы, коллекционер Сергей Минцлов тигән кеше һатҡан. Ә ул үҙ сиратында 1910-1911 йылдарҙа Өфө губернаһы табын ерендә земский начальник булған һәм ҡылысты Ғафури районы Ҡормантай ауылы кешеләренән һатып алған.

Тап ошо ауылда Салауатты ҡулға алыусы Әбсәләмовтар йәшәгән. Күрәһең, улар алтын хәрефтәр менән яҙылған ҡылысты үҙҙәренә алып ҡайтҡан.

1986 йылда Латвия ССР-ы музейы был реликвияны Башҡортостан милли музейына тапшыра. Ул бөгөн дә шунда һаҡлана.

Ә хәҙер дәрес башында һеҙгә ҡуйылған һорауға яуап бирегеҙ.

-Ни өсөн мин дәрестә һеҙгә музей һүрәте күрһәтеүҙән башланым икән?

-Сөнки беҙ уҡыған шиғырҙа ҡылыс тураһында бара, ул бөгөнгө көндә музейҙа һаҡлана.

V. Йомғаҡлау

-Рауил Бикбаевтың “Уралыма” шиғырын иҫкә төшөрәйек әле. Уның “Салауат ҡылысы” шиғыры менән оҡшашлығы бармы?

(Ике шиғырҙа ла ҡылыс образы бар.)

- Һәр шиғырҙа уға ниндәй мәғәнә һалынған?

Бының өсөн башҡорт теле дәресендә үткән теманы иҫкә төшөрәйек.

- Башҡорт теле дәресендә беҙ “Лексика” бүлегендә барабыҙ.

-Шунда һүҙҙәрҙең мәғәнәһе тураһында белгәйнек.Һүҙҙәрҙең ниндәй мәғәнәләре бар? (тура һәм күсмә)

-Шиғырҙың ҡайһыныһында ҡылыс -тура, ә ҡайһыныһында күсмә мәғәнәлә икән?

-“Уралыма” шиғырында күсмә мәғәнәгә эйә, сөнки автор Урал тауҙарын картаға ҡарап, уны ҡылыҫҡа оҡшата .

(Рәсәй картаһынан Урал тауҙарын күрһәтеү)

-Оҡшағанмы ҡылыҫҡа?

-“Салауат ҡылысын” шиғырында ҡылыс һүҙе тура мәғәнәгә эйә, сөнки бында ҡылыстың үҙе тураһында һүҙ бара.

VI.Баһалау.

- Бөгөн дәрестә алған белемдәрегеҙҙе тикшереү өсөн бәләкәй генә тест эшләйек. (һорауҙар экранда, уҡыусылар дәфтәрҙә яуапты билдәләйҙәр)

Тест.

1. Салауат Юлаев йәшәгән йылдар :

а) 1754 – 1800 ;

б) 1700 – 1854.

2. Салауат Юлаевтың атаһы :

а) Емельян Пугачев ;

б) Юлай Аҙналин .

3. Салауатты ҡайҙа каторгаға ебәрәләр?

а) Рогервик ҡәлғәһенә;

б) Мәскәү төрмәһенә .

4. Рауил Бикбаев ҡайһы шиғырында Урал тауҙарын ҡылыҫҡа оҡшата?

а) “Салауат ҡылысы” шиғырында;

б) “Уралыма” шиғырында.

5. Салауаттың ҡылысы ҡайҙа һаҡлана?

а) Салауат ҡалаһында;

б) Салауат районы музейында;

в) Башҡортостан милли музейында.

-Ә хәҙер яуаптарығыҙҙы тикшерегеҙ, экранда әҙер яуаптар.

Үҙегеҙгә баһа ҡуйығыҙ: хата юҡ – “5”,

1 хата – “4”,

2 хата – “3” һ.б.

VII.Рефлексия.

-Был дәрестә үҙегеҙ өсөн берәй яңылыҡ астығыҙмы?

Нимә тураһында белдегеҙ? Уны белеү һеҙгә кәрәк инеме? Үҙегеҙҙең кәйефегеҙҙе төҫтәр ярҙамында күрһәтегеҙ.

VIII. Өй эше биреү.

Шиғырҙың үҙегеҙгә оҡшаған бүлеген ятлап килергә.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА» ШИҒЫРЫН ӨЙРӘНЕҮ

Иҫәнбаева Зилә Кинйәбай ҡыҙы,
Бөрйән районы,
Иҫке Собханғол мәктәбе Байғаҙы филиалы

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың тормош юлына, ижадына, эшмәкәрлегенә байҡау яһау һәм ҡыҙыҡһыныу уятыу, илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү; һөйләү телмәрен, фекерләү ҡүәһен үҫтереү, тасуири уҡыу оҫталығын формалаштырыу.

Йыһазландырыу. Р.Бикбаевтың портреты, компьютер,интерактив таҡта, дәреслек,проектор,китаптар күргәҙмәһе.

Дәрес барышы

I.Ойоштороу мәле.

Уҡытыусы.

-Һаумыһығыҙ, уҡыусылар.Әйҙәгеҙ, бер-беребеҙҙе йылмайышып сәләмләйек!

II. Артикуляцион күнегеү. (Слайдта шиғыр юлдары күрһәтелә.)

Милләттәштәр! Иңде-иңгә терәшәйек.
Серләшәйек, уңғанлыҡта серәшәйек.
Ғәмһеҙ булһаҡ, тарих беҙҙе ғәфү итмәҫ.
Ҡалҡһын тиһәк илдә бәхет ҡояшыбыҙ,
Бөтә донъя башҡорттары,берләшәйек.

III. Дәрестең темаһын әйтеү, маҡсатын аңлатыу.

- Әле беҙ уҡыған шиғыр юлдарының авторы кем тип уйлайһығыҙ? (Яуап.)

Бөгөн дәрестә беҙ республикабыҙҙың Салауат Юлаев һәм Ғәлимов Сәләм исемендәге премиялары лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормош юлына, ижадына байҡау яһарбыҙ, уның “Башҡортостан бында башлана» тигән шиғыры менән танышырбыҙ.

Уҡытыусы. Рауил Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылында тыуған.(Экранда Р.Бикбаевтың портреты.) Күрше Ғәбдрәфиҡ тигән ауылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған, унан Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡыған.Өфөгә килеп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлаған, аспирантурала уҡыған. Кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлап, ғалим дәрәжәһе алған. Хәҙерге көндә филология фәндәре докторы,Башҡортостан яҙыусылар союзы идараһы рәйесе. Р.Бикбаев хәҙерге башҡорт әҙәбиәтенең танылған шағиры һәм ғалимы.

IV. “Башҡортостан бында башлана» шиғырын уҡыу.

Һүҙлек эше:

офоҡ – күк менән ерҙең тоташҡан һымаҡ күренгән һыҙығы

Уҡытыусының тасуири уҡыуы.

Уҡыусыларҙың үҙ аллы,тасуири уҡыуы.

Әңгәмә. Һорауҙар:

- Әҫәрҙә нимә тураһында һүҙ бара?

(Башҡортостан тураһында)

- Башҡортостанды автор нисек һүрәтләй?

- Шиғыр буйынса Башҡортостанды күҙ алдына килтереп һөйләп ҡарағыҙ.

- Башҡортостан исеменән әйтелгән “Мин бит башланамын һинән, унан, кешеләрем, һеҙҙән башланам» тигән шиғыр юлдарының мәғәнәүи төшөнсәһен аңлатып бирегеҙ. (Тыуған республикабыҙ ул-ҡыҙҙарынан үҙенең дә һәм уларҙың да йөҙҙәренә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек итеп йәшәү һәм эшләүҙәрен үтенеүе.)

- һеҙ Башҡортостан тураһында тағы нимәләр өҫтәп әйтер инегеҙ?

(Башҡортостан урман-тауҙары, йылға-күлдәре, ер-һыу байлыҡтары менән генә күркәм түгел,шул ерҙә йәшәгән кешеләре,уны данлаған, исемен ил-ерҙәргә ишеттергән батыр, эшсән ул-ҡыҙҙары менән дә маҡтаулы.Башҡортостандағы ҡуйы урмандарға, аллы-гөллө сәскәләргә, йәм-йәшел үләндәргә, бейек тауҙарға һоҡланып туймаҫһың. Беҙҙең илебеҙ тәбиғәте һоҡланғыс.)

-Уҡыусылар,һеҙ Башҡортостандың тәбиғәтен, үҙ тыуған ауылығыҙҙы нисек һаҡлар инегеҙ?

- 2013 йыл Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда ниндәй йыл тип иғлан ителде?

Эйе, 2013 йыл Рәсәйҙә һәм Башҡортостанда “Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы» тип иғлан ителде.Тәбиғәтте һаҡлау буйынса ниндәйҙер эштәр эшләнә.Ауылыбыҙ йылдан-йыл төҙөкләндерелә, һәр ерҙә ағастар, сәскәләр үҫтерелә.Тыуған тәбиғәтеңдең байлыҡтарын,ҡабатланмаҫ гүзәллеген һаҡлау-үҙ өйөңдө,тыуған ереңде,Тыуған илеңде һаҡлау ул. Азат рухлы,ирек һөйөүсе кешенең тәбиғәткә һаҡсыл ҡарашлы булыуын “Урал батыр» эпосында ла күрәбеҙ. Урал батырҙың Йәншишмә һыуын эҙләп йөрөүе һәм, уны тапҡас, үҙе эсмәйенсә, тирә-йүнгә бөркөп, тәбиғәтте йөшәртеп ебәреүе-тыуған ере һәм халҡы өсөн яҡшылыҡ эшләүе беҙҙең күңелебеҙгә тәбиғәткә ҡарата һөйөү генә тәрбиәләй.Эйе, Башҡортостаныбыҙ бик матур. Шуның өсөн тәбиғәтте, уның байлығын, матурлығын беҙгә яҡларға, һаҡларға кәрәк!

Шиғырҙы йомғаҡлау.

Шиғырҙа Яйыҡ буйҙарынан Сөн йылғаһы ярҙарынаса, көньяҡтан Юшатыр буйҙарынан төньяҡтағы Әй буйҙарынаса йәйрәп ятҡан киң Башҡортостандың географик күренеше күҙ алдына баҫа. Шағирға туған республикаһының һәр ҡарышы күңеленә ғәзиз һәм ҡәҙерле. Был хис-тойғолар шиғырҙың ҡайһы юлдарында күренә?

-Яйыҡ туғайынан Сөн ярына,
Юшатырҙан Әйгә ҡәҙәрле
Йәйрәп ятҡан ерҙең күңеленә
Һәр ҡарышы,
Һәр ҡарышы, беләм, ҡәҙерле.

V. Ял минуты.

VI. Дәфтәрҙә эш.

Тест ярҙамында Р.Бикбаевтың тормош юлын ҡабатлау.

1.Р.Бикбаев нисәнсе йылда тыуған?

а) 1928 б) 1938 в) 1942

2. Тыуған ауылының исеме?

а) Иҫке Собханғол ауылы б) Темәс ауылы в) Ҡунаҡбай ауылы

3. Р.Бикбаевҡа ниндәй премиялар бирелә?

а) Ш. Бабич б) С. Юлаев в) Ғ. Сәләм

4. “Башҡортостан бында башлана» шиғырының авторы кем?

а) М. Кәрим б) Хәсән Назар в) Р. Бикбаев

5. Р. Бикбаевтың тағы ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ?

а) Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда б) Дауыл в) Барып етһен ине хаттарым

(Бер-береһенең эштәрен үҙ-ара тикшерәләр.)

VII. Йомғаҡлау. Әңгәмә өсөн һорауҙар:

Һеҙ бөгөнгө дәрестә үҙегеҙ өсөн нимәләр астығыҙ? Рауил Бикбаевтың шиғырҙары һеҙгә оҡшанымы, ни өсөн?

-Уҡыусылар, ысынлап та, Рауил Бикбаевтың күпселек шиғырҙарында бөгөн бөтәбеҙҙе уйландырған, борсоған мәсьәләләр ҙур урын биләй, улар тыуған ер яҙмышы, халҡыбыҙ яҙмышы, киләсәк хаҡында тәрәнерәк фекер йөрөтөргә, ғәмһеҙ генә йәшәмәҫкә мәжбүр итә. Күңелдәрҙә урын алырлыҡ, иҫтә ҡалырлыҡ әҫәрҙәр ижад итеү өсөн, иң элек күңелендә халыҡҡа, тыуған яҡҡа ҡарата оло һөйөү йөрөтөргә кәрәк. Тыуған төйәгенә мөкиббән ғашиҡ шағирҙың ижадын өйрәнеүгә бағышланған дәресебеҙҙе Рауил Бикбаевтың шиғыр юлдары менән тамамлау урынлы булыр:

Ил яҙмышы ҡыл өҫтөндә саҡта,
Ҡул ҡаушырып, ғәмһеҙ ятмайыҡ.
Һаҡлайыҡ беҙ ғәзиз Ер-әсәне,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡлайыҡ!-

VIII.Баһалау. Өйгә эш. Шиғырҙы тасуири уҡырға, Р.Бикбаевтың тормош юлын өйрәнергә.

Р. БИКБАЕВТЫҢ ТОРМОШ ҺӘМ ИЖАД ЮЛЫНА БАЙҠАУ ЯҺАУ

Ғилмуллина Эльмира Риф ҡыҙы

Маҡсат: уҡыусыларҙы Р.Бикбаевтыңтормош юлы һәм ижади мираҫы менән таныштырыу. Күренекле шағир булып формалашыуын да мөһим роль уйнаған моменттарҙы асыҡлау; уҡыусыларҙың үҙаллы эшләү һәм һөйләү күнекмәләрен үҫтереү. Уның ижады йоғонтоһонда уҡыусыларҙа аң-белемгә ынтылыш, юғары әхлаҡ нормалары, сафлыҡ тәрбиәләү, әҙәпкә, иманнурҙарына күндереү. Уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен, телмәрҙәрен үҫтереү, тормошҡа актив мөнәсәбәттәр биәләү, үҙ фекерҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Р.Бикбаев тураһында өҫтәлмә мәғлүмәт тәрбиереү. Башҡорт теленә, бөйөк шәхестәргә,Тыуған илгә һөйөү, ихтирам тойғоһо, патриотизм тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты; уның тураһында альбом материалдары; тормошон һәм ижадын яҡтыртҡан матбуғат баҫмалары; китаптар күргәҙмәһе, Башҡортостандың административ картаһы, ҡыҫҡа энциклопедияһы, аҡлатмалы һүҙлек, фотоһүрәттәр,компьютер,проектор.

Дәрес барышы

I.1. Ойоштороу– һаумыһығыҙ!

“Психологик атмосфера” ситуацияһын тыуҙырыу.

- Хәйерле көн, уҡыусылар! Тағы берғәжәйеп матур,гүзәл көн тыуҙы. Ошо йәмле көнгә, серле донъяға бағып, үҙебеҙгә көс һорайыҡ. Кисә ул зәп- зәңгәр булһа, бөгөн уны иңләпап- аҡ болоттар йөҙә. Әйҙәгеҙ, ҡулдарҙы өҫкә күтәреп, аяҡ остарына ғына баҫайыҡта, ҡулдарыбыҙҙы, бармаҡ остарын болоттарға тиклем “һуҙайыҡ”. Күк йөҙөнән, һауананаҡлыҡ-паклыҡ, таҙалыҡ, күңел торошо боҙҙо яҡшыға көйләйек. Бөгөнгө көнгә нимә тип өндәшерһегеҙ?

- Хәйерле көн! Рәхмәт һиңә, матуркөн!

- Тимәк, беҙдәрт, илһам менән эшкә тотонорға әҙер. Мин дә һеҙҙе сәләмләйем, ҡул һәм күңел йылымды тапшырам ,ҡәҙерле уҡыусылар!

2. Инеш әңгәмә- Һәр көн иртән торғас, һеҙ яҡындарығыҙҙы ошолай йылмайып сәләмләйһегеҙ, хәйерле иртәләр, бәхетле киләсәк теләйһегеҙ!

Нимә һуң ул бәхет? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

-Һаулыҡ. Уҡыу. Ата-әсәле булыу. Илең, телең һаҡланыуы. Йәшәререң. Дуҫтарың. Туғандарың. Илеңә, халҡыңахеҙмәтитеү.

- Дөрөҫ, уҡыусылар.

-Бәхет яулау һәм Башҡортостандың азатлығы өсөн беҙҙең ата- бабаларыбыҙ бик күпҡан ҡойған. Илем, телем, халҡым, тип янып йәшәүҙе оло бәхет һанаған милләт тәштәребеҙ, бөйөк шәхестәребеҙ бихисап. Һеҙ кемдәрҙе шундай шәхестәр рәтенә индерер инегеҙ?

-Әҙәбиәте беҙ күгендә үҙ балҡышы булған, баһалап бөткөһөҙ талантлы шағир,бөйөк шәхесебеҙгә бағышлана бөгөнгө дәресебеҙ.

II. 1.Тема һәм маҡсаттыбилдәләтеү

- Һүҙҙең кем тураһында барасағын белеү өсөн, ошо шиғыр юлдарына күҙһалайыҡ. (Экранда сыҡҡан шиғыр юлдарын бер уҡыусы уҡый)

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бартарафҡа
Тыуған илдең тыныс алтаңы.

Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыма дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

- Тимәк, һүҙ кем тураһында барасаҡ?.

- Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны тексының башҡортса һүҙҙәренең авторы – республика парламенты комитеты рәйесе, шағир Рауил Бикбаев тураһында.

-Дөрөҫ, уҡыусылар, бөгөнгө дәресебеҙ әҙәбиәте беҙҙең аҡ һаҡалы республикабыҙҙың күренекле шағиры, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевҡа бағышлана.

- Әйҙәгеҙ әле, Рауил Бикбаевтың портретын табайыҡ.(Мостай Кәрим, Рауил Бикбаев, Рәми Ғарипов, Назар Нәжми, Әнғәм Атнабаевтың портреттары араһынан табалар).

- Ә былары ниндәй әҙиптәр?

- Мостай Кәрим, Рәми Ғарипов, Назар Нәжми, Әнғәм Атнабаев.

- Ни өсөн фәҡәт ошо портреттар ҡуйылған?

- Сөнки улар халыҡ исемеңя улаған бөйөк шағирҙар, ил улдары!

- Рауил Бикбаевтың тыуыуына быйыл нисә йыл була?(Экранда күрһәтелә.)

- Дөрөҫ, 75 йыл.

-Әйҙәгеҙ, дәфтәрҙәрегеҙгә теманы яҙып ҡуяйыҡ (Число, көниҫәбе, темаяҙыла).

Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына байҡау яһау.

- Уҡыусылар, дәрескә ниндәй маҡсат ҡуйып булыр ине?

- Рауил Бикбаев менән яҡындан танышыу.

-Уның тормош юлын байҡау.

- Рауил Бикбаевҡа ихтирам тойғоһо тәрбиәләү.

-Шиғырҙарын өйрәнеү.

- Илде, телде яратырға,һаҡларға.

2.Өйгә эште тикшереү.

- Һеҙгә өйҙә: Р. Бикбаев тураһында уҡып килергә,материалдар тупларға ҡушылғайны. Кем ниндәйәш башҡарҙы?

- Яҡшы. Үҙегеҙ белгәндәр, уҡығандар буйынса миңә ярҙам итеп ултырырһығыҙ. Һеҙ шағирҙың биографияһын нисек үҙләштерҙегеҙ икән? Тест һорауҙары буйынса өйгә эшегеҙҙе, белемдәрегеҙҙе тикшереп алайыҡ. Алдығыҙҙа тест һорауҙары. Исем, фамилияғыҙҙы яҙығыҙ. Р. Бикбаевтың ижады, биографияһы буйынса тест һорауҙары

1. Р. Бикбаевтың тыуған йылы?
а) 1932
б) 1939
в) 1938
г) 1928
2. Р. Бикбаев ҡайһы ауылда тыуған?
а) Үрге Ҡунаҡбай
б) Үрге Илъяс
в) Диңгеҙбай
г) Хәсән
3. Р.Бикбаев ҡаҡасан Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән исем бирелә?
а) 1959
б) 1963
в) 1992
г) 1980
4. Р. Бикбаев ҡайҙа йәшәй?
а) Өфөлә
б) Туймазыла
в) Украинала
г) Һамарҙа
5.Р. Бикбаев ете йыллыҡ мәктәпте ҡайҙа тамамлай?
а) ЯңыМорапталда
б) Ғәбдрафиҡ ауылында
в) Ырымбурҙа
г) Өфөлә
6. Р.Бикбаевҡа ҡасан Салауат Юлаев исемендәге Республика премияһы лауреаты тигән исем бирелә?
а) 1993
б) 1989
в) 1978
г) 1990

(балалар эшләгәндән һуң экранда сығарыла)

- Ә хәҙер яуапптарҙы тикшереп сығабыҙ. Бик һәйбәт! Уҡыусылар, һеҙ Р. Бикбаевтың биографияһын яҡшы үҙләштергәнһегеҙ.

3. Яңы тема өҫтөндә эш- Хөрмәтле, уҡыусылар, беҙ бөгөн дәрестә Рауил Төхвәт улы Бикбаевтың тормошон һәм ижадын өйрәнеүҙе дауам итәбеҙ. Мин һеҙҙе яратҡан шағирыбыҙҙың үткән тормош юлдары буйлап сәйәхәткә саҡырам. Һеҙгә сәйәхәтсе- хәбәрселәр ролен тәҡдим итәм. Ике төркөмдә эшләйәсәкбеҙ. Һәр төркөмдең үҙенең етәксеһе- координаторы була. (Уҡыусылар үҙҙәре билдәләй.) Ә хәҙер ошо юлдарға иғтибар итәйек.

- Уҡыусылар, эпиграфҡа иғтибар итегеҙәле.(эпиграф уҡытыла)

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,

Бөгөнгөңдө күреп хурланам.

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә, -тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?

һүҙлек эше.

- Шағир телен, илен, халҡын ҡурс алап йәшәй, уның үткәндәре менән ғорурлана, киләсәген уйлап ҡайғыра.

Хәйерле сәғәттә бөйөк шағир Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына сәйәхәткә юлландыҡ.

Хәбәрселәр төркөмөнә еңел булһын өсөн, алда мәғлүмәт тәрәҫтәле бар.

| төркөм «Шәхес булып формалашыуы»темаһы буйынса әҙерләнә.

|| төркөм «Шиғри әтиленә сәйәхәт»темаһын аса.

| төркөм:Рауил Төхфәт улы Бикбаев — күренекле шағир, әҙәбиәт белгесе. Ул 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровский районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында ауылында тыуып үҫкән, һуңыраҡ күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына күсеп, шунда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлаған. Аҙаҡ Аҡ-булаҡ Педагогия училищеһендә белем алғас, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетында башҡорт филология факультетында уҡый. Артабан Өфө Фәндәр академияһында аспирантура үтеп, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһенә ирешә. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында 30 йыл (1965-1995) тирәһе ғилми хеҙмәткәр булып эшләй, докторлыҡ диссертацияһы яҡлай. 1995 йылдан алып Башҡортостан Яҙыусылар союзында ошо ижади ойошманың башлығы булып эшләй. Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты, бер нисә орден-миҙалдар кавалеры.

|| төркөм:Шағирҙың шиғырҙар һәм поэмалары ингән йыйынтыҡтары: «Дала офоҡтары» (1964), «Ҡош юлы» (1967), «Бураҙналар» (1985), «Звездный дом» (1985), «Поющие скалы» (1986), «Время. Поэт. Народ.» (1986), «Эволюция современной башкирской поэзии» (1991), «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» (1991), (1995), «Шағир һүҙе - шағир намыҫы» (1997), «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай» (1998).

Рауил Бикбаев төрлө күләмдәге ундан артыҡ поэма ижад итте. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа яҙылған шиғырҙарынан алып яңы мең йыллыҡ башланған осорҙарҙа ижад ителгән әҫәрҙәренә тиклем Рауил Бикбаев ижадында халыҡ яҙмышын, илдең бөгөнгөһөн һәм киләсәген ҡурсалау һәр саҡ үҙәктә булды. Шағир ғәзиз милләте һәмБашҡортостаны өсөн иң кәрәкле һүҙҙе иң тейешле ваҡытта әйтә белә. Шуға ла уның шиғри юлдары уҡыусыларҙың рухи юлдашына әйләнә, телдән-телгә күсә, сәхнәләрҙә яңғырай, дәреслектәргә инә. Быға миҫал итеп бик күп шиғырҙарҙы, «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!», «Халҡыма хат», «Баҙар балтаһы», «Система», «Барокамера»,«Хазина» ҙур хеҙмәт башҡарҙы. Рауил Бикбаевтың «Сәфәрҙәрҙә сығам сәхәрҙәрҙә» китабы башҡорт әҙәбиәтендә сәйәхәтнамә жанрын өр-яңы баҫҡыҫҡа күтәрҙе.

Р. Бикбаевтың«Ерем балҡышы», «Бураҙналар» шиғырҙарында тәбиғәт алдында кешенең яуаплылығы үҙәккә ҡуйыла.

Үҙ дәүереңә, үҙ быуатыңа тиңәлеү–шағириңенә төшкән ауырҙа, ҡатмарлы ла бурыстарҙың береһе. Сөнки бөгөн әйткән һүҙең иртәгәгә ярамауы мөмкин…Ә шағирға ошо нескәлектәрҙе тойорға, алдан күрергә һәм ваҡытында уҡыусыға еткерергәлә кәрәк.

Билдәле булыуынса, шиғриәттә шәхес һәм халыҡ, үҙең һәм дәүер бәйләнештәре хаҡындағы уйланыуҙар алтмышынсы йылдарҙа уҡ күҙәтелгәйне.

Былар барыһыла поэзиялағы тарихилыҡтың тәрәнәйеүенә, яңырыуына килтерҙе: үткәндәрҙе баһалау менән бөгөнгөнө уйлау, киләсәкте ҡайғыртыу бер бөтөнгә әйләнде.

Ҡаҙерле уҡыусылар, һеҙҙе ошо поэзия йортона саҡырабыҙ. Поэзия йортоноң төп хужаһы– үҙе олпат, үҙе саф һәм нескә күңелле, халҡым, илем, телем тип янған Рауил Төхвәтулы Бикбаев. Әйҙәгеҙ, шағирҙың хистән, саф, сағыу нурҙарҙан туҡылған рухи йортона юл алайыҡ. (Р. Бикбаевтың төҫлө портреты таҡтаға эленә, халыҡ шағирының китаптар күргәҙмәһе күрһәтелә.)

Йырҙар яҙам, халҡым түгел наҙан.
Ҡайҙа уҡып ҡайтмай ҡыҙ-улы…
Тик ниңә һаман йоҡлай халҡым,
Баш аҫтына һалып дипломын.

II. Уҡыусыларҙың белемен баһалау.

-Һеҙ, уҡыусылар, бөгөн бик матур ҡатнашып ултырҙығыҙ.(һәр кем үҙ эшен баһалай, көндәлектәргә билдәләр ҡуйыла)

Өйгә эш. – Рауил Бикбаевтың бер шиғырын ятларға.

Йомғаҡлау

Р.Бикбаев шағирҙың йәшәү маҡсаты хаҡында былай тип әйткәйне: “Ниндәй генә осорҙа йәшәһә лә, шағир һәр саҡ үҙ заманының көрәшсе-гражданиныбулырға, яҡшылыҡтың еңеүе өсөн яманлыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ яуға сығырға бурыслы”.

РАУИЛ БИКБАЕВ “БАШҠОРТОСТАН БЫНДА БАШЛАНА”

Ғиҙәтуллина Резеда Мөнир ҡыҙы,
Бәләбәй ҡалаһы 17-се урта белем биреү мәктәбе

Маҡсат:

1) Р.Бикбаевтың тормош юлын һәм ижадын өйрәнеү;

2) ”Башҡортостан бында башлана” шиғырен уҡыу;

3) яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр өйрәнеү;

4) уҡыусыларҙың халыҡ шағирына ҡарата ихтирам, ижадына ҡыҙыһыныу хисе уятыу;

Йыһазландырыу: Р.Бикбаевтың портреты, китаптар күргәзмәһе, Башҡортостан картаһы, фоноҙәма, мультимедиа проекторы,

Дәрес барышы.

1. Ойоштороу моменты. (Таҡтаға тема, эпиграф яҙыла, В.Э.Штейнберг схемаһы һыҙыла, Р.Бикбаевтың портреты, Башҡортостан картаһы, китаптар күргәзмәһе ойошторола).

1-се слайд

Бөгөн беҙҙә башҡорт теле,
Яратам һине телем.
Рәхмәт һиңә һинең аша,
Алам мин яҡшы белем.

2. Фонетик-орфоэпик күнегеүҙәр.

Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен ҡабатлау, улар менән һүҙҙәр уйлау.

2-се слайд

Ә-ә-ә- әсәй, әрем, әҙер
Ү-ү-ү – үлән,үҫкән, үҙем
Ҡ-ҡ-ҡ- ҡара ҡарға ҡаҙаҡ
Ө-ө-ө- өләсәй, өлөш, өҙөк

Түбәндәге слайдты уҡып шиғырҙың исемен, авторы кем икәнлеген әйтеү.

3-сө слайд.

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы

-Уҡыусылар был йыр һеҙгә танышмы? Эйе, был Республикабыҙҙың гимны.

Гимн һүҙҙәрен кем яҙған?

Дөрөс, гимн һүҙҙәрен авторының береһе башҡорт халыҡ шағиры, С.Юлаев премияһы лауреаты, ғалим, күренекле йәмәғәт эшмәкәре, Рауил Бикбаев ижад иткән.

Шағирҙың ҙур юбилейы –75 йыл тулыу айҡанлы бөгөнгө дәресебеҙҙе уның тормошона, ижадына бағышлайбыҙ.

5-се слайд.

Башҡорт халыҡ шағиры, Салауат Юлаев,Рәми Ғарипов, Ғәлимов Сәләм,Зәйнәб Биишева премиялары лауреаты, ғалим, йәмәғәт эшмәкәре.

3. Яңы материалды өйрәнеү.

1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһенең Покров (хәҙер Переволоцкий) районында Соран йылғаһы буйындағы Юғары Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуа. 1945 йылда атаһы үлеп киткәс, ул күрше Ғәбдрәфиҡ ауылына туғандарына күсеп килә. Ошо ауылда 1953 йылда ете йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Башҡорт әҙәбиәтенә һәм мәғрифәтенә Мөхәмәтша Буранғолов, Дауыт Юлтый, Сәғит Агиш, ауылдашы Ғабдулла Амантай, нәҫелдәштәре Сәғит Мерәсев, Кәрим Иҙелғужин һымаҡ арҙаҡлы шәхестәрҙе биргән Туҡсоран ерендә Рауил бәләкәстән йыр-моңға, әҙәбиәткә ғашиҡ булып үҫә.

1953-1956 йылдарҙа Ҡаҙағстан менән Ырымбур сигендәге Аҡбулаҡ педагогия училищеһында уҡый. 1957 йылда Өфөгә килеп Башҡорт дәүләт университетының филология факультетына уҡырға инә. Университетты уңышлы тамамлағас, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты аспирантураһында уҡый. 1966 йылда «Хәҙерге башҡорт поэмаһы» тигән темаға кандидатлыҡ диссертацияһын яҡлай.

4. Ижады.

Рауил Бикбаевтың нығлабыраҡ яҙыша башлауы университетта уҡыған йылдарына тура килә. Шиғырҙары республика матбуғатында 1957 йылдан бирле баҫылып килә. 1962 йылда «Ағиҙел» журналында «Вокзал» исемле тәүге поэмаһы баҫылып сыҡты. 1964 йылда «Дала офоҡтары» тигән беренсе китабы донъя күрҙе.Унан һуң донъя күргән «Ҡош юлы», «Автобиография», «Ғүмер уртаһы», «Ерем балҡышы», «Яҙмышым», «Ай күргәндәй, ҡояш алғандай» һ.б. китаптары башҡорт шиғриәтенең үҫешенә тос өлөш индерҙе. Бигерәк тә замандың иң киҫкен һәм борсоулы хәлдәре хаҡында яҙылған «Халҡыма хат», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!», «Система», «Баҙар балтаһы», «Башһыҙ һыбайлы», «Барокамера» тигән поэмалары киң билдәлелек алды.

Р. Бикбаев хәҙер тиҫтәнән артыҡ китап авторы. Уға «Автобиография» тигән китабы өсөн 1970 йылда республика комсомолының Ғ.Сәләм исемендәге премияһы бирелде. Уның поэзияһына тыуған халҡының тарихи яҙмышы һәм бөгөнгө бәхетле көнө хаҡында тәрән уйланыуҙар һүрәтләнә.

Рауил Бикбаев шағирлыҡ эшен әҙәбиәт ғилеме менән тығыҙ бәйләп алып бара. Фәндәр академияһының Өфөләге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында оҙаҡ йылдар әҙәбиәт секторында өлкән ғилми сотрудник булып эшләй. Р. Бикбаев тәржемә өлкәһендә лә актив эшләй, матбуғатта публицистик мәҡәләләр менән йыш сығыш яһай.

1989 йылда Р. Бикбаевҡа «Яҙмышым» китабы һәм «Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы өсөн республиканың Салауат Юлаев исемендәге премияһы бирелде.

Ул Ҡоролтай депутаты, Башҡортостан языусылары союзы председателе.

(Уҡыусыларҙы китап күргәзмәһе менән таныштырыу).

Р.Бикбаевтың Башҡортостан бында башлана шиғыры өҫтөндә эшләү.

Һүҙлек эше

Офоҡ-горизонт	улан-дитя
Тараф-сторона	ғәрлек-позор
Ҡан тибеше-биение	ҡарыш-пядь

Һырт-хребет

А)уҡытыусы шиғырҙы тасуири уҡый.

Б)шиғырҙы үҙ аллы уҡыу

В) тексты рус теленә тәржемә итеү

Г) сылбырлап уҡыу

Шиғыр йөкмәткеһе өҫтөндә эшләү

- Әҫәрҙә Башҡортостан нисек һүрәтләнә?
- Был юлдарҙы һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

“Мин бит башланам һинән, унан,
Кешеләрем һеҙҙән башланам”
-“Кешем намыҫымда кер күрһәләр,
Ғәрлегемдән йөҙөм ҡарайыр”.

– Был юлдар менән автор нимә әйтергә теләгән?

Шиғриәт минуттары. Р.Бикбаевтың шиғырҙарын тыңлау.

Төркөмдәр менән эш.

1-се төркөм шиғырҙан синонимдарҙы таба. (юлдар-һуҡмаҡтар, ҡолас-ҡуйын, уланым-улдарым)

2-се төркөм. Шиғырҙы өлөштәргә бүлеү, план төҙөү.

3-сө төркөм. Әҫәрҙе темаһын, идеяһын билдәләү.

Йөҙөгөҙ аҡ булһын,
Минең кеүек,
Минең кеүек- Башҡортостан кеүек-

Был донъяға тура ҡараҙлыҡ – тигән юлдарында автор тормошона, ижадына тура киләме?

Рауил Бикбаевтың был шиғырендә беҙ тыуған илгә сикһеҙ мөхәббәт, уның менән ғорурланыу хистәрен күрәбеҙ. Шағирҙың тыуған еренә бағышлап яҙған тағы ниндәй әҫәрҙәрен беләһегеҙ («Уралыма”, “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”)

Рефлексия.

-Уҡыусылар, ә хәҙер шағир тураһында өйрәнелгәнде дөйөмләштереп китәйек. Р.Бикбаев тормошо һәм ижады буйынса һорауҙар.

1. Шағир уҡыған педагогия училищеһы.
2. 1962 се йылда баҫылып сыҡҡан ... поэмаһы.
3. Рауил Бикбаев тыуған ауыл ...йылғаһы буйында урынлашҡан.
4. Шағирҙың яҡташы, билдәле сәсән. 2013 йылда беҙ уның 125 йыллығын билдәләйбеҙ. Был кем?
5. Рауил Бикбаев ете йыллыҡ мәктәп тамамлаған ауылдың исеме...
6. “Вокзал” поэмаһы баҫылып сыҡҡан журнал ...
7. Шағир йәшәй торған ҡала.
8. ... поэмаһы өсөн 1989- сы йылда Салауат Юлаев премияһы менән бүләкләнә.

Әгәр яуаптар дөрөҫ тапһағыҙ, вертикаль буйынса шағирҙың F. Сәләм премияһы менән бүләкләнгән поэмаһының исемен уҡырһығыҙ.

Өй эше биреү. «Башҡортостан бында башлана” шиғырын тасуири уҡыу.

ТӘБИҒӘТ ҠОМАРТҠЫЛАРЫБЫҘ ЮҠҠА СЫҠТЫ

Янышева Гөлфиә Фатых ҡыҙы
МиәкәрайоныТамъян –Таймаҫ дөйөм белем биреү мәктәбе

Маҡсат: 1) Шиғри әҫәрҙең йөкмәткеһен үҙләштереү;

2) Шағирҙың ҡараштарын күрһәтеп, үҙ фекерҙәреңде яҡлай белергә өйрәтеү;

3) Логик һәм тәнҡитле фекер йөрөтөүенүҫтереп, дәлилләп әйтергә, башҡаларҙың кисерештәренә ихтирам менән ҡарарға өйрәтеү;

4) Әүҙем, эшлекле, маҡсатлы шәхес тәрбиәләү. Үҙеңде ышаныслы итеп тотоп, публика алдында сығыш яһарға өйрәтеү, дискуссия үткәреү күнекмәһен нығытыу.

Йыһазландырыу: шағирҙың портреты (беренсе слайдта), Башҡортостандың физик картаһы, ноутбук, тәбиғәт ҡомарткылары төшөрөлгән слайдтар, дебаттарҙы үткәреү ҡағиҙәләре.

Дәрес барышы:

Уҡытыусының инеш һүҙе: Үткән дәрестә беҙ һеҙҙең менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһынан өҙөк уҡығайныҡ, тотош уҡып киләргә ине. Тәбиғәт һәм кеше тураһында әҫәр яҙыу уйы шағир башында әллә ҡасан тыуған булһакәрәк. Ул 1982 йылда уҡ “Совет Башҡортостаны” гәзите биттәрендә мәҡәләләр баҫтыра.

-Поэма ҡайһы төбәктән башлана?

Уҡыусы табып уҡый:

Бар яҡтарға һуҙылып һыуҙар аға,
ҡайҙа ҡараһам да Ирәмәл!
Бында Йүрүҙәндең, Әйҙең башы
Бында Яйыҡ, Миәс, Уй башы.

Икенсе уҡыусы картанан табып күрһәтә.

-Уҡыусылар, бөгөн беҙҙә ябай дәрес түгел, поэманың йөкмәткеһе буйынса эште дебаттар итеп үткәрәйек. Бының өсөн беҙ һеҙҙең менән әҙерлек эшен үткәрәйек. Беренсе төркөм спикерҙар “Раҫлаусы”булһа, оппоненттарын “Инҡар итеүсе”ләр тип атаныҡ. Дебаттарҙы үткәреү ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәйек (икенсе слайдта):

- һөйләй белеү генә етмәй, тыңлай ҙа белергә кәрәк;
-аңлайышлы итеп, проблема буйынса сығыш яһарға;
-һорау бирә белергә;
- шәхестәрҙе түгел, төшөнсәләрҙе тәнҡитләргә.

Һүҙлек эше: дебаттар, спикерҙар, оппонент, проблема, гипотеза, тайм-кипер, тьютор, регламент, рефлексия.

I.Проблеманы тәҡдим итеү.

“Раҫлаусы” спикер сығыш яһай: - һаумыһығыҙ, судьялар, һаумыһығыҙ, оппоненттар, хәйерле көн, тамашасылар! Халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың “һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын уҡып сыҡҡас, беҙ шундай гипотеза тәҡдим итәбеҙ: Тәбиғәт ҡомарткыларыбыҙ юҡҡа сыҡты. Атайсалыбыҙ ҡурҡыныс аҫтында! Үткән быуаттың башында беҙҙең яҡтарға килгән (әҫәрҙән өҙөк килтерәм):

Бер саҡ Максим Горький үҙе әйткән,
Ағиҙелгә хайран ҡалған килеш:
“Там, на Белой, места такой красоты –
ахнешь, сто раз ахнешь…”

Ҡайҙа булған һуң ошо матурлыҡтар? Ағиҙелдең йырлы кисеүҙәре йырғысланған, Белорет һәм Бөрйән урмандары (өсөнсө слайдта Шүлгән мәмерйәһенең фотоһүрәте) ҡырағайҙарса киҫелеп бөткән. Йылға буйлап һалдар ағыҙып, нисәмә мең ағас шунда батҡан. Саф һыуҙа йәшәгән бағры, бәрҙе кеүек балыҡтар юҡҡа сыҡҡан. Һәммә кешене хайран иткән, ”ун биш мең йыл элек ижад ителгән ғәйәр мамонт, таш быуат аттарыныңһүрәттәре” янына ҡара дегет менән үҙенең ҡара исемен яҙып ҡалдырыусыларҙы кем тип атарға һуң? Шартлауҙарҙан ”тертләй Шаһтау”, умырыла нигеҙе Шаһтауҙың! Торатауға менеп ҡараһаң да, Стәрлене табырлыҡ түгел, сөнки уны көн яҡтыһын күрһәтмәй торған пәрҙә ҡаплаған (дүртенсе слайдта Торатау фотоһүрәте). Ағиҙел ҡалаһында Чернобылдән ҡеүәтлерәк АЭС төҙөлә башланы. Шартлауҙар булмаҫмы һуң, Припят ҡалаһындағы кеүек кешеһеҙ йорттар ҡалмаҫмы? Ағыу-кислоталар түгелеп, Ағиҙелдеңһыуы эсергә яраҡһыҙ.

“И-3” һорау бирә: - Элекке замандарҙа Ағиҙелдең һыуын эскәндәрме ни? Ә ни өсөн ауылдар гел бәләкәй йылғалар, шишмәләрҙең ярында урынлашҡан һуң?

“Раҫлаусы” : - Бик боронғо заманда Ағиҙелдеңһыуын эскәндәр. Белорет заводтарында тимер иретер өсөн дәһыу алына, быуаларҙа дары шартлатып, балыҡ тоталар, был да тәбиғәтебеҙгә вәхшиҙәрсәкараш.

“Инҡар итеүсе” спикер сығыш яһай:

- Хөрмәтле судьялар, хәйерле көн, оппоненттар, тамашасылар, һаумыһығыҙ! “Раҫлаусы” оппонент мәғлүмәттәрен ентекләп ҡарайыҡ. Урман беҙҙең йортобоҙ, ул туйындырыусы ла, йылытыусы ла. Йорт төҙөмәй ҙә булмай, урманды ҡартайған, серегән ағастарҙан да таҙартырға кәрәк. Киҫкән ағастар урынына яңы үҫентеләр ултыртыла. Тәүге проект буйынса, ысынлап та, Иштуған һыуһаҡлағысы төҙөлһә, Ағиҙел йылғаһы бассейнында урынлашҡан унлап ауыл, төйәк иткән ялан-кырҙары, изге ҡәберлектәре менән һыу аҫтында ҡалыр ине. Был хәлде булдырмаҫ өсөн, икенсе проект буйынса, кеше йәшәмәгән төбәктә, йылғаның ярҙарын киңәйтеп, таштарын аҡтарып, Йомағужа һыуһаҡлағысы төҙөлдө (фотоһүрәте бишенсе слайдта). Иҫ китмәле матур урында диңгеҙ барлыҡҡа килде. Башҡортостаныбыҙҙа туризмды үҫтереүгә тос өлөш индерелә. Сеймалһыҙ завод эшләмәй, шуға ла Шаһтау таштары Стәрлеләге сода –цемент етештереүсе заводтар өсөн кәрәк. Һуңғы йылдарҙа Стәрлетамаҡ заводтарында таҙартыусы ҡоролмалар ҡуйыла. Беҙ тормошобоҙҙо электрһыҙ күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ, шулай булғас, Ағиҙел ҡалаһында атом станцияһы төҙөү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып тора.

“Раҫлаусы -3” һорау бирә:

- Йомағужа һыуһаҡлағысында плотина яһалып, электр тогы етештерелә бит, шул етмәйме ни?
- Инҡар итеүсе” яуабы:
- Ҡалаларҙа, ауыл йорттарында ла электр приборҙары бик күп ҡулланыла. Урамдарҙа ла, бөтә сәнәғәт ойошмаларына ла электр энергияһы кәрәк, шуға ул етешмәй.

II.Гипотезаларҙы раҫлау һәм кире ҡағыу.

“Раҫлаусы- 2” сығыш яһай:

- Шағир Рауил Бикбаев гүзәл тәбиғәтебеҙҙең юҡҡа сығыуына ғына йәне әсенмәй, бөтә насарлыҡтарҙы кешеләрҙең үҙгәреүендә күрә.

“Яман йола, яман йола –

Нәфсе шаша, намыҫ йығыла”,“алмалағы ҡорт шикелле, күңелдәргә тин оялай”, “хәҡиҡәтте ялған талай”, - тип әсенә. Кешеләр ҡомһоҙға, ғәмһеҙгә әйләнде, ҡотобоҙҙо, рухыбыҙҙы юғалттыҡ, йәштәр туған телен, йырын-моңон белмәй.

- Илгә терәк кәрәктә,
Ике ҡулың ҡаушырып,
Ҡарап торһаң, шул яман!
Ун тигәс тә,
Йөҙ тигәс тә,
Мең тигәс тә шул яман!”-ти.

“Инҡар итеүсе-2” сығыш яһай:

- Кешеләргә йәшәр өсөн, әлбиттә, аҡса кәрәк, эш кәрәк, йортһоҙ, кейемһеҙ ҙә йәшәп булмай. Шағир үҙе лә: “Завод насар тип әйтмәйем бит мин”, - ти. Тик “бөгөндө мәңгелеккә бәйләр сараларҙы ҡайҙан табаһы?” -тип мөрәжәғәт итә.

-

III. Гипотезаларға төҙәтмәләр индереүһәм яҡлап сығыш яһау.

- “Раҫлаусы- 3 “ сығыш яһай:

- Шағир йөрәге алдан һиҙеүсән, шуға ла ул беҙҙең кеүек йәш быуынға өндәшә. “Ҡырылыр урманды ҡырҙырмай була, йырылыр йырынды йырҙыртмай була, быуылыр намыҫты быуҙыртмай була, биҙер ихласлыҡты биҙҙертмәй була. Тик ниңәһуң булдырмайбыҙ? Ҡырҙырабыҙ, йырҙырабыҙ, быуҙырабыҙ “, -ти. Ни өсөн һуң беҙҙән еребеҙгәүҙебеҙ хужа түгелбеҙ?

- “Инҡар итеүсе – 3” сығыш яһай:

- Ысынлап та, Башҡортостаныбыҙ суйын иретеү, ҡорос ҡойоу, нефть сығарыу һәм эшкәртеү буйынса алдынғылар рәтендә. Илебеҙ көслө булһын тиһәк, беҙгә яңы технологиялар ҡулланып эшләргә кәрәк.

V. Дөйөм һығымта яһау.

Уҡытыусы: - Фәҙеллек кем яғында һуң?

Судьялар сығыш яһайҙар:

- Оппоненттар үҙҙәренең сығыштарында төрлө дәлилдәр килтереп, үҙ фекерҙәрен яҡланы. “Раҫлау”сылар ҙа, “Инҡар итеүселәр “ҙә проблеманы асыҡ яҡтырттылар.

Уҡытыусы йомғаҡлай:

- Тимәк, еңеүсе, еңелеүсе лә юҡ, мәсьәлә асыҡҡала.Халыҡ шағирыныңүҙһүҙҙәре менән әйтәйек: “Ҡулыбыҙҙан килгән көс-ҡеүәттәрҙе генәҡулыбыҙҙан ысҡындырмайыҡ”.

Рефлексия: Бөгөнгө дәрестәге дебаттарҙа ҡатнашҡан оппоненттарға, судьяларға рәхмәт. Һеҙ был дәрестә үҙ фекерҙәрегеҙҙе әйтергә һәм яҡларға өйрәндегеҙ, диалогтар төҙөнөгөҙ. Дебаттар үткәреү ҡағиҙәләре үтәлдеме икән?

Тайм –кипер: Ҡағиҙәләр теүәл үтәлде, бөтәгеҙҙе лә ҡыҙыҡһынып тыңланыҡ, оппоненттар проблеманы дөрөҫ ҡуя алдылар.

Протокол тултырыла.

Уҡыусыларға баһалар ҡуйыла.

Өйгә эш бирелә:

“Башҡортостан республикаһында экология торошо” темаһы буйынса кластан тыш уҡыу дәресенә матбуғат биттәренән материалдар тупларға, уларҙы уҡырға, алып килергә.

«ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!» ПОЭМАҺЫНДА ЭКОЛОГИК ҺӘМ РУХ ПРОБЛЕМАҺЫ

Сәфәрова Рәсимә Хәлил ҡыҙы,
Стәрлетамаҡ ҡалаһы
Жәлил Кейекбаев исемендәге 3- сө гимназия

Маҡсат: Р.Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы менән танышыуҙы дауам итергә, әҫәрҙең идея-тематик йөкмәткеһен асыу, актуаллеген билдәләү; уҡыусыларҙың үҙ аллы эҙләнеү күнекмәләрен, һөйләү телмәрен үҫтереү; матурлыҡҡа һоҡланыу тойғоһо тәрбиәләү, экологик тәрбиә биреү.

Йыһазландырыу: яҙыусының портреты, китаптарынан күргәҙмә, 2013 - Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылының девизы һәм эмблемаһы төшөрөлгән плакаттар, мультимедиа проекторы.

Дәрестең эпиграфы: Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел…

Дәрес барышы

1. Ойоштороу мәле.
2. Белемде актуалләштереү.

Инеш әңгәмә. 2013 йыл Башҡортостанда Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылы тип иғлан ителде. Был йыл ниндәй девиз аҫтында үтә? (1- се слайд).

- «Иртәгәһе көнөбөҙҙө һаҡлайыҡ!» тигән һүҙҙәрҙе нисек аңлайһығыҙ? (2- се слайд)

- Ни өсөн символы итеп аҡ бөркөт һайланған? (сөнки был ҡоштар йәшәү урыны итеп экологик яҡтан таҙа төбәктәрҙе генә һайлай) (3-сө слайд)

- Ни өсөн был тема бөгөнгө көн өсөн актуаль булып тора?

Башҡортостан үҙенең ҡабатланмаҫ тәбиғәте менән күптәрҙе һоҡландыра. Был гүзәллекте һаҡлау – һәр беребеҙҙең изге бурысы. Һуңғы йылдарҙа тәбиғәтте һаҡлау, экологик хәлде яҡшыртыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарыла, ләкин эшләнәһе эштәр күп әле. Тәбиғәтте һаҡлау темаһына йәмәғәтселек кенә түгел, беҙҙең шағирҙарыбыҙ, яҙыусыларыбыҙ ҙа мөрәжәғәт итә. Тәбиғәтте һаҡлау тураһында ниндәй әҫәрҙәр уҡығанығыҙ бар?

Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев ижадында ла күтәрелә ул экологик проблема. Иҫкә төшөрәйек әле, уның ижадының төп темаһы ниндәй? (Тыуған ер, туған тел, тыуған тупраҡ, Тыуған ил, халыҡ яҙмышы.) (4-се слайд)

3.Уңыш ситуацияһын тыуҙырыу.

- Шағир ижадының аҫыл ташы булған «Һыуһаным – һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында шағир беҙҙе нимәгә өндәй икән? Дәрестең темаһына иғтибар итегеҙ әле, нимәләр тураһында һөйләшәсәкбеҙ? (5 - се слайд)

Лирик герой гүзәл Ағиҙелебеҙҙе маҡтарға, данларға, һоҡланырға юлға сыға. Ә ни өсөн Ағиҙел буйлап? (Сөнки башҡорт халҡының бөтә тормошо Урал тауҙарында, Ағиҙел буйында үткән. Был йылғаның матурлығы, һыуының таҙалығы, балыҡҡа, йәнлеккә бай булыуы борон-борондан йырҙарҙа, легендаларҙа, ҡобайырҙарҙа данланған). (6-сы слайд)

Ағиҙел йырсыһы Рәшит Ниғмәти маҡтап яҙған уны шиғырҙарында, Максим Горький «Там, на Белой, места такой красоты – ахнешь, сто раз ахнешь»... тип һоҡланған) (7-8-се слайдтар)

3. Уҡыу мәсьәләһен ҡуйыу. Ниндәй ул бөгөн беҙҙең Ағиҙелебеҙ, нисек йәшәй ул, нисек көн күрә? Шағир әҫәренә ни өсөн шундай исем һайлаған? Экологик һәм рух проблемаһы нисек бәйләнгәндәр? Әйҙәгеҙ әле ошо һорауҙарға яуап эҙләп юлға сығайыҡ!

4. Уҡыу мәсьәләһен сисеү.

Был сәйәхәттә ниндәй туҡталыштарҙы билдәләйбеҙ?

- Иҙел башы.
- Бөрйән.
- Шүлгән.
- Иштуған һыуһаҡлағысы.
- Эстәрле.
- Өфө.
- Кама.

– Шағирҙы нимә борсой? Поэманан юлдар менән иҫбатлағыҙ (төркөмдәрҙә эшләү)

1-се төркөм: Иҙел башында уҡ ағыуланған быуа, «матурлыҡтан тел шартлатыр саҡта» йылғала балыҡ шартлатҡандарын, шул тауыштан ҡоштар, кейектәр ҡурҡыуын күреп, һағаябыҙ, «Ағиҙелдең көнө - илдең көнө, Ағиҙелдең йөҙө - ил йөҙө» тип, уйға ҡалабыҙ. (9-сы слайд)

2-се төркөм: икенсе туҡталыш – Бөрйән. Бында ла күңел кителерлек күренеш: Ағиҙел буйындағы солоҡло, ҡарағайлы урмандар ҡырҡыла, уларҙы кешеләр «йолҡҡолайҙар, талайҙар». Кешенең тәбиғәткә, үҙенә ҡарата ҡылған яуызлыҡтары тураһында уйланып, киләсәк хаҡында борсолоп, шағир менән артабан атлайбыҙ. Алда Ағиҙел, бәлки, Горький һоҡланғанса, Ниғмәти маҡтағанса һаҡланғандыр? Юҡ, хәлдәр маҡтарлыҡ түгел: йылға төбөн аҡтаралар, унда һуңғы ҡабат балыҡ уйнай, бүрәнә ағыҙалар. (10-сы слайд)

3-сө төркөм: «таш өй» – Шүлгәнгә етәбеҙ. Бөтә донъяға билдәле мәмерйәлә лә ҡара шом, ҡара моң, аҡ таштарҙа «ҡара дегет менән ҡара исемдәр яҙылған», таш һындар ватып алынып бөткән, емерелгән. Былар ҙа бит таш бәғер кешеләр эше! Боронғо ҡомартҡыларҙы юҡ итергә кемдең ҡулы барған?! (11-12-се слайдтар)

4-се төркөм: Иштуған һыуһаҡлағысы - «Урал күкрәгендә тағы ла бер шеш», бында һыу аҫтында ҡалған ауылдар, ҡәберлектәр, яҙмыштар. (13-сө слайд)

5-се төркөм: поэмала беҙҙең тыуған ҡалабыҙ Эстәрлегә, шихандарыбыҙға ҙур урын бирелгән. Хәтфә түбәле Торатау башынан күҙәтмәксе була уны шағир. Тик унан ҡала күренмәй! Төтөн, һөрөм, ҡором аҫтында ҡалған ул. Шаһтауҙың (Шәкетау) юҡҡа сығыуын, Ағиҙелдең, һәләүектең бысраныуын, Торатауҙан ҡаланың төтөн эсендә ултырыуын күреп борсола шағир. Ә Шаһтау, тотош бер тау, Ер йөҙөнән ғәйеп булған! Беҙгә, ошо ҡалала тыуып үҫкән кешеләргә, ошо юлдарҙы уҡыу бигерәк тә оят, ҡурҡыныс, аяныс булды. Легендар, уникаль шихандар тибеҙ, Ер йөҙөндә башҡа ундай тауҙар юҡ тибеҙ, маҡтанабыҙ. Нимә һуң ул шихандар, улар ҡайҙан килеп сыҡҡан?

- Сәнәғәт өсөн кәрәк тип кенә тау тиклем тауҙың юҡҡа сығыуын киләсәк быуынға нисек аңлатырбыҙ? Бөтә кешелек алдында оло енәйәт бит был! Нимә тип яуап бирербеҙ беҙ балаларыбыҙға? Беҙҙең ҡала - нефть ҡалаһы, ҙур сәнәғәт үҙәге, шуға тауҙы аҡтарҙыҡ, Ағиҙелебеҙҙе бысраттыҡ, һәләүекте бөтөрҙөк, ҡаланы ҡара һөрөмгә батырҙыҡ, ләкин план үтәнек тиһәк, аңлармы улар беҙҙе, ғәфү итерме? (14-19-сы слайдтар)

- Тәбиғәт гүзәллеген тергеҙеп булмау тураһында Рауил Бикбаев бик фәһемле итеп ниндәй юлдар менән әйтеп бирә?

- Ситтән күсерә торған шишмә булмай,
Ситтән килтереҙәй тау булмай.

- Эйе, тауҙы ситтән килтереп ултыртып булмай. Ер йөҙөндә тиңе булмаған, Бөтә донъя тәбиғәт ҡомартҡыларын һаҡлау ойошмаһының исемлегенә ингән изге тау – Торатау яҙмышына ҡул һуҙырға маташҡан «Сода» берекмәһе етәкселәре ни уйлай икән был турала? Был турала нимәләр беләһегеҙ?

- Алдашыуға барып, вәғәҙәләргә ышандырып, киләсәк быуын хаҡын хаҡын уйламайынса улар халыҡтан имза йыя. Торатауҙы һәм Йөрәктауҙы бай сәнәғәтселәргә бирер һауабыҙҙы, ер-һыуыбыҙҙы бысратҡан, балаларыбыҙҙың сәләмәтлегенә зыян килтергән өсөн республикабыҙға ҡалабыҙға аҙмы-күпме ярҙам иткәс, ни ҡыланһаҡ та хаҡлыбыҙ, тип уйлайҙар, күрәһең. Ҡала гәзите «Ашҡаҙарҙың» һуңғы һандарында «Сода»лар ризаһыҙлыҡ белдерә», «Ымһынмағыҙ Торатауға!» тигән мәҡәләләр баҫылды.

- Тәбиғәттә һаҡлау йылында был көрәшкә нөктә куйылып, изге тауҙарыбыҙ тәбиғәт ҡомартҡыһы статусын юғалтмай, һаҡланып ҡалырға тейеш. Йөрәктауыбыҙға ла, Торатауыбыҙға ла бер кем дә ҡул һонмаҫ тип өмөтләнәйек, көрәшәйек. Изге тауҙарыбыҙ киләсәк быуын өсөн кәрәк.

- Борсоулы уйҙар, мең төрлө һорау менән ары китә лирик герой, уларҙан башы сатнай, тамаҡ кибә. Ҡайҙа һыу, бер йотом һыу? Ағиҙел һыуын уртлап булмай, ул быҫраҡ, ағыулы. Сарсап, өмөт-ышаныс менән баш ҡалабыҙ Өфөгә лә килеп еттек, бында хәлдәр нисек? (20-се слайд)

6-сы төркөм: ләкин бында ла бер йотом һыу табып булманы, сөнки ул мазутлы, хатта йылға өҫтөндә ыуылдырыҡ ағыуланып ята. Ҡала туҙан, ҡором эсендә ултыра. Өс һыуһылыу - өс ҙур йылға- Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим бер-береһенә аһ-зар һөйләй, кеше ҡылыҡтары өсөн ояла, үҙҙәренең булмыштарынан үҙҙәре ояла. (21-се слайд)

7-се төркөм: Камаға еттек, сәйәхәт тамам. Нефть вышкалары ер быҫрата, ҡырҙар ҡутара, йәйләүҙәр тарая, уларҙы ағыулы ямғырҙар һуғара. (22-се слайд)

- Поэманың һуңғы биттәрен уҡығанда нимәләр кисерҙегеҙ? (Үҙебеҙҙе кешелектең бер тамсыһы итеп тойоп, тәбиғәткә вәхшиҙәрсә ҡараштан оялыу кисерҙек, ғәйепле икәнебеҙҙе таныныҡ).

5. Нығытыу. Ағиҙелебеҙҙе маҡтарға юлға сыҡтыҡ, әммә йырыбыҙ үтә лә моңһоу, хәүефле булды. Кем ғәйепле? (Кеше ғәмһеҙлеге, аңһыҙлығы, ил дәүләте артһын тип тырышыуы).

- Тәбиғәткә был ҡырағайҙарса ҡарашты тамырынан ҡоротоп, йәнтәйәгебеҙҙең ниндәй көнгә төшкәнен аңларға ваҡыт икәне шағир ниндәй һүҙҙәр менән аңлата?

(Ағиҙелде генә быумайбыҙ бит,
Үҙебеҙҙе үҙебеҙ быуабыҙ).

- Ниндәй хәүеф алдында торғаныбыҙға саң һуғып, беҙҙең аҡылға нимә тип өндәшә ул?

Беҙ бит кеше!
Беҙ бит түгел
Донъя ҡоротор ер ҡорто!

(23-сө слайд)

- Ни өсөн поэманың исеме «Һыуһаным –һыуҙар бирегеҙ!» тип атала? (Беҙ Иҙел буйында йәшәйбеҙ, ләкин уның һыуын эсә алмайбыҙ, унда хатта һыу инеүе лә ҡурҡыныс була башланы. Сөнки бөтә нефть-химия гиганттары шул мәшһүр йылға буйында урынлашҡан һәм, бер-береһе менән ярышып, уны ағыулай. Бер Ағиҙел генә ошо хәлдә түгел бит әлеге заманда. Бына ни өсөн Рауил Бикбаев үҙенең поэмаһын «Һыуһаным –һыуҙар бирегеҙ!» тип атаған һәм тәбиғәткә ҡарата һаҡсыл ҡарашта булырға саҡыра.)

6. Йомғаҡлау.

– Был поэма беҙҙе ниндәй уйҙарға һалды? (Был поэманы уҡығас, һәр кеше киләсәк өсөн ниндәй тәбиғәт ҡалдырабыҙ тип уйланырға тейеш. Беҙҙең балаларыбыҙ Ағиҙел буйлап «Һыуһаным –һыуҙар бирегеҙ!» тип, бер йотом һыу эҙләп йөрөрлөк булмаһын. Ғәмһеҙ булмайыҡ, сөнки, шағир әйтмешләй: (24-се слайд)

Ҡотҡарырға ерҙә матурлыҡты
Һуң түгелдер әле, һуң түгел…

- Бер-береһе менән экологик һәм рух проблемаһы нисек бәйләнгәндәр? (Тәбиғәтте, тәбиғәт менән бергә кешенең үҙен дә һаҡлап ҡалырға саҡыра шағир, кешенең аҡылына өндәшә.)

7. Яуаптарҙы баһалау. Һәр бер төркөм үҙенең һәм башҡаларҙың эшен баһалай.

8. Өй эше. Матбуғат баҫмаларында (Ҡ.Булат. Ымһынмағыҙ Торатауға! // Ашҡаҙар, 2012, № 93, «Сода»лар ризаһыҙлыҡ белдерә // Ашҡаҙар, 2013, № 5) һәм Интернет селтәрендә шихандарҙы яҡлап барған көрәш тураһында сығыштар әҙерләргә.

Р. БИКБАЕВТЫҢ «ҺЫУҺАНЫМ, ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ!» ПОЭМАҺЫ

Ғарипова Альбина Малик ҡыҙы,
Салауат ҡалаһының 8-се лицейы

Маҡсат: әҫәрҙең йөкмәткеһен әҙәбиәт ғилеме күҙлегенән анализлау; уҡыусыларҙың художестволы фекерләү һәләтен үҫтереү; бөйөк шағирыбыҙ, таланттарыбыҙға ҡарата ихтирам, хөрмәт, ғорурланыу тойғоларын тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: мультимедиа проекторы, интерактив таҡта, карточкалар, китаптар күргәҙмәһе.

Дәрестең эпиграфы: «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» Ф.Достоевский.

«Матурлыҡ яҡлауға мохтаж!» Р.Бикбаев.

Дәрес барышы.

1.Ойоштороу мәле. (Уҡыусылар дәрес барышында төркөмдәргә бүленә, эксперттар билдәләнә).

Эпиграфты уҡыу.

-Был юлдарҙың айышын нисек аңлайһығыҙ?

Дәрес аҙағында был эпиграфҡа яңынан әйләнеп ҡайтырбыҙ.)

2. Уҡытыусының инеш һүҙе. Тыуған илгә мөхәббәт тойғоһо - кешенең иң изге тойғоларынан. Ошо мөҡҡәҫ кисерештең көсөнән күп шағирҙарҙың теле асылған. Был тема Башҡортостандың халыҡ шағиры Р.Бикбаев поэзияһында төп темаларҙың береһе. Шағир–заман ағышына, кешеләр яҙмышына иғтибар туплаған. Бөгөнгө дәрестә шағирҙы һәм бөтә кешелекте борсоған, уйландырған һорауҙарға яуаптар эҙләп йәмле Ағиҙел буйҙарына сәйәхәт ҡылырбыҙ.

3.Дәфтәргә число теманы яҙыу.

4. Әҫәрҙе анализлауға күсеү.

Уҡытыусы.Үткән дәрестә Р. Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһының йөкмәткеһе менән танышҡайныҡ, ә өйҙә Р.Нигмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйында» поэмаһын иҫкә төшөрөп, һорауҙарға яуаптар әҙерләргә бирелгәйне. Бөгөнгө дәрестә ошо ике әҫәрҙе сағыштырып йөкмәткеһен анализлаясаҡбыҙ.

5-се эш.

Интерактив таҡтала авторҙарҙың портреттары һәм улар тураһында ҡыҫҡаса белешмә.

6-сы төркөм- Р. Бикбаев, 2-се төркөм Р.Нигмәтигә арналған таблоны тултыралар. Ҡасан, ҡайҙа тыуған? Ниндәй әҫәр? Ҡасан яҙылған? Юғары исемдәре.

2-се эш. Уҡыусыларҙың тулы яуаптары. Эксперттарҙың баһалауы.

(Р.Бикбаев 1938 йылда Ырымбур өлкәһе Покров районы Ҡунаҡбай ауылында тыуған. Башҡортостандың халыҡ шағиры, филология фәндәре докторы, С Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Дәүләт йыйылышы-Ҡоролтай депутаты. 1991 йылда «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»поэмаһын яҙған).

(Р.Нигмәти 1909 йылда Куйбышев өлкәһе Диңгеҙбай ауылында тыуған. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, ике тапҡыр “Почет Билдәһе” ордендары, Яҙыусылар союзы ағзаһы, халыҡ шағиры. 1939 йылда «Йәмле Ағиҙел буйында »поэмаһын яҙа).

(Экранда Ағиҙел йылғаһының панорамаһы күренә).

2-се эш.

(Төркөмдәргә карточкалар таратыла.)

1-се төркөм. Р.Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйында» поэмаһынан өҙөк. Уҡыусылар уның авторын, исемен, ҡасан ижад ителеүен, темаһын билдәләй.

2-се төркөм Р.Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһынан өҙөк. Уҡыусылар уның авторын, исемен, ҡасан ижад ителеүен билдәләй.)

Уҡыусыларҙың яуабы.

Эксперттарҙың баһалауы.

-Поэманың сюжет һыҙығында нимәләр ята? (Уның үҙәгендә Ағиҙел йылғаһы, Урал тауҙары, Аҙиҙелдең урманы, туғайҙары. Бөтә Башҡортостанды Урал ҡуйынынан, Ирәмәл итәгенән башлап, йәйрәп ятҡан Ағиҙелдең тамағынан Кама йылғаһына ҡойғансы шағир уй-күңеле менән сәйәхәт ҡыла).

Уҡытыусы. Әгәр Р.Ниғмәти был сәфәрҙе «Йәмле Ағиҙел буйында» поэмаһын 30-сы йылдар аҙағында социализм осоронда ҡылған булһа, Р.Бикбаев инһә быуат аҙағында, 90-сы йылдар башында –кире капиталистик мөнәсәбәттәргә ҡайтыу заманында юллана. Тимәк, арала бик күп йылдар ята, күп һыуҙар аҡҡан, заманалар үҙгәргән, ҡараштар яңырған, тормоштар башҡаланған.

-Ни өсөн Р.Бикбаев үҙенең әҫәрендә Р.Ниғмәтиҙе иҫкә төшөрә?

Уҡыусылар. (Шағир Ағиҙелдең үткәне менән бөгөнгөһөн сағыштырыу өсөн үҙенең әҫәрендә Р.Ниғмәтиҙең «Йәмле Ағиҙел буйҙары» поэмаһына мөрәжәғәт итеп, Ағиҙелдең ниндәй саф, ниндәй матур, көмөш һыулы таҙа йылға булыуын «Ағиҙелкәй һыҙылып ағып сыға һалҡын терегөмөш шикелле» тигән юлдарын иҫкә төшөрә һәм «башҡаса шул заман хәле, башҡаса шул шағир уйҙары» тип Ағиҙелдең бөгөнгө яҙмышы өсөн борсоулы уйҙарын белдерә.

-Шағир тағы ла ниндәй проблемалар тураһында уйлана, борсола, хәүефләнә?

(Карточкалар таратыла)

1-се төркөм. Бирелгән өҙөктә күтәрелгән проблемаларҙы билдәләргә.

Тағы шартлау.
Тағы тертләй Шаһтау.
Умырыла нигеҙе Шаһтауҙың.
Бөтә был тау…
Был йылдарҙың ҡоластары хәтәр:
Ниндәй даръяларҙы һемереп бөттө,
Ниндәй ҡаяларҙы ауҙарҙы,
Кимереп бөттө ниндәй тауҙарҙы!

2-се төркөм. Бирелгән өҙөктә күтәрелгән проблемаларҙы билдәләргә.

Торатауҙың түбәләре хәтфә,
Ташҡайҙары ҡырлы, селтәрле.
Торатауға менеп ҡараһам да,
Табалманым һине, Стәрле!
Һөрөм аша ҡарап ҡала,
Булырмы тиеп көнөм яҡтыраҡ.
Ә алыҫта заводтарҙан сыҡҡан,
Әле донъя ята ялтырап.

(Тыуған-үҫкән ер, һыуыбыҙҙың ҡороуы, ағыуланыуы, Башҡортостан тәбиғәтенең ярлылана барыуы.)

Поэманың тел-стиль сараларын күҙәтеү.

- Р.Бикбаев «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!»поэмаһын һүрәтләгәндә ниндәй алымдар файҙалана? (Ҡобайыр алымдары-риторик һорау, риторик өндәш, мәҡәлдәр, йырҙар)

-Әҫәрҙең теле ниндәй стилгә яҡын тора? (йәнле һөйләү, халыҡ телендә осрай торған бик күп һүрәтләү саралары.)

-Ниндәй һүрәтләү саралары ҡулланылған?

Уҡыусыларҙың яуабы.

Эштәрҙе тикшерәбеҙ. Эксперттарҙың баһалауы.

- Ә хәҙер поэмала күтәрелгән проблемаларҙың килеп сығыуын һәм хәл ителешен эҙләп проект төҙөйөк.

Проект төҙөү (15 минут ваҡыт бирелә).

Проект-документтың алдан әҙерләнгән яҡынса тексы.

Закон проекты, ҡарар проекты.

Проектлаусы-проектты башҡарыусы.

1-се төркөм. Р.Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында проблемаларҙың килеп сығыуын асыҡлаған проект төҙөй.

2-се төркөм. «Бөгөнгө көндә экологик проблеманың хәл ителеше» тигән проект төҙөй.

Өй эше. Дәрестә алған белемдәрҙе, проекттарҙы ҡулланып «Донъяны матурлыҡ ҡотҡара» тигән мәҡәлә яҙып килергә.

Поэмаға ҡарата эшләгән проекттарҙы яҡлау.(Проекттарҙы яҡлағанда бөтә уҡыусылар ҙа ҡатнаша. Бер төркөм икенсеһенең проектына ҡарата үҙҙәренең тәҡдимдәрен, өҫтәмәләрен индерә алалар.)

Йомғаҡлау. Уҡыусылар үҙҙәре төҙөгән проектарҙан сығып, әҫәргә ҡарата үҙҙәренең фекерҙәрен әйтәләр.

Уҡытыусы. Дәрес башында уҡып үткән Ф.Достоевскийҙың «Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр» тигән һүҙҙәренә ҡушылып, Р.Бикбаев ер-һыуҙар ҡороуҙан, ғүмеребеҙ ҡыҫҡарыуы, тормош күрке китеүе тураһында «Матурлыҡ яҡлауға мохтаж» тип иҫкәртте. Ата-бабаларыбыҙ беҙгә тәбиғәтте ниндәй хәлдә бүләк итеп ҡалдырған, беҙ уны шул килеш килер быуындарға тапшырырға тейешбеҙ.

Баһалау. Эксперттар үҙҙәренең төркөмөндәге һәр уҡыусыға билдәләр ҡуя һәм аңлатмалар бирә.

Уҡыусыларҙың төҙөгән проекттары.

1-се төркөм. Р.Бикбаевтың «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында проблемаларҙың килеп сығыуын асыҡлаған проект.

1.Аҡыл менән түгел, дәрәжәләргә ҡарап эш итеү;
2.Тәбиғәт байлығы менән һорауһыҙ ҡулланыу;
3. Әхлаҡ нормаларының түбән булыуы;
4.Тәбиғәтте бойһондорорға тырышыу;
5.Тауҙарҙы емереү, күсерергә тырышыу;
6.Йылғаларҙы быуыу, киргә ағыҙырға тырышыу;
7.Киләсәк тураһында уйларға теләмәү;
8.Эскән һыуыбыҙҙы, һулаған һауабыҙҙы ағыулау.

2-се төркөм. «Бөгөнгө көндә экологик проблеманың хәл ителеше»

1.Тәбиғи байлыҡты талатыуға, ситкә ебәреүгә юл ҡуймау;
2. Ер-һыу, һауаны ағыулауҙы тыйыу;
3. АҒиҙел буйында ултырған Стәрлетамаҡ, Салауат, Мәләүез ҡалаларын ағыулы һөрөмдән ҡотҡарыу;
4. Кеше һаулығын иғтибар үҙәгенә ҡуйыу;
5. Экологик юҫыҡта законҙар сығарыу;
6. Закон боҙоусыларҙы хөкөмгә тарттырыу;
7. Ағастар ултыртырға, яңы йылда яһалма шыршылар ҡулланырға;
8. Тәбиғәт менән гармонияла йәшәү.

РАУИЛ БИКБАЕВТЫҢ «ХАЛҠЫМА ХАТ» ӘҪӘРЕН ӨЙРӘНЕҮ

Ғәлләмова Зиниә Раил ҡыҙы,
Әбйәлил районы 1-се һанлы Асҡар урта мәктәбе

Маҡсат: Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәре менән танышыу, туған телебеҙҙең яҙмышы хаҡында фекер алышыу; Тыуған илде, туған телде һөйөү тойғоһо, улар менән ғорурланыу хисе тәрбиәләү.

Йыһазландырыу:

1. Рауил Бикбаевтың портреты.
2. Шағирҙың әҫәрҙәренән һәм тел тураһындағы китаптарҙан күргәҙмә.
3. Тел тураһындағы мәҡәлдәр яҙылған плакат.
4. «Халҡыма хат»тан өҙөк (плакат).
5. Урал тәбиғәте һәм ҡурайсы төшөрөлгән һүрәт.
6. Ҡурай.
7. Р. Бикбаевтың һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙары һәм мәҡәләләре.
8. Р. Агишев. «Дәүләт теле – нимә ул?»
9. И. Дилмөхәмәтовтың ҡурай моңдары яҙылған дискы.
10. Р. Бикбаевҡа арналған стена газетаһы.
11. Интерактив таҡта.
12. Ноутбук.

Дәрес барышы

I. Уҡытыусы. Дәфтәрегеҙгә бөгөнгө теманы һәм уның планын яҙып ҡуйығыҙ:

Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” әҫәрен өйрәнеү.

План.

1. «Халҡыма хат»тың яҙылыу тарихы.
2. Уның төп проблемаһы.
3. Идея йөкмәткеһе.
4. Әҫәрҙең художество үҙенсәлеге.
5. Әһәмиәте.

(Дәрестең маҡсаты әйтелә.)

II. Үтелгәндәрҙе иҫкә төшөрөү, ныҒытыу.

Уҡытыусы. Беҙ халҡыбыҙҙың береһенән-береһе матур йырҙары, көйҙәре, әҙәбиәтебеҙҙең гүзәл өлгөләре менән танышырға бурыслыбыҙ. Бының өсөн уларҙы үҙегеҙ белергә һәм яратырға тейешһегеҙ. Хәҙер халҡыбыҙҙың боронғо йырҙарының береһе яңғырай.

(Ҡурай уйнай.)

– Ниндәй көй яңғыраны?
– «Урал» көйө.
– Дөрөҫ. Ә нимә һуң ул Урал?
– Урал – беҙҙең Тыуған илебеҙ, тыуған төйәгебеҙ, тыуған еребеҙ.
– Һеҙ VII класта тарихи йырҙарҙы өйрәндегеҙ. Хәҙер «Урал» йырының һүҙҙәрен иҫкә төшөрәйек.

(Бер уҡыусы «Урал» йырының һүҙҙәрен яттан һөйләй.)

– Был йыр ҡасан тыуған?
– «Урал» йыры ете ырыу берләшкән саҡта, башҡорт ырыуҙарын бер төбәккә йыйған Уралтау хөрмәтенә дан булып тыуған.

Уҡытыусы. Тыуған ил, тыуған ер, туған тел темаһы алтын һүҙле аҡһаҡалдар — сәсәндәрҙе генә түгел, С. Юлаевтан алып бөгөнгө көнгә тиклем бөтә башҡорт шағирҙарын тәрән уйландыра, тулҡынландыра. С. Юлаев та Ватанына булған ҡайнар һөйөүен шиғыр юлдары менән әйтеп биргән.

(Бер уҡыусы Салауат Юлаевтың «Уралым» шиғырын һөйләй.)

Уҡытыусы. Таҡтаға ҡарағыҙ әле:

Тыуған ил

Тыуған ер

Туған халыҡ

Туған тел

Күреүегеҙсә, ошо төшөнсәләр бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. «Иле барҙың – теле бар» ти халыҡ мәҡәле. Башҡорт халҡы борон-борондан үҙ ере, үҙ теле өсөн көрәшкән. Туған телебеҙҙе данлап, туған телебеҙгә һоҡланып, төрлө быуын шағирҙары шиғыр ижад иткән. Һеҙ мәктәптә уларҙы өйрәндегеҙ. Әйҙәгеҙ, хәҙер иҫкә төшөрөп ҡтәйек. Ниндәй шиғырҙарҙы беләһегеҙ?

(Бер уҡыусы Б. Бикбайҙың «Туған тел» шиғырын һөйләй.)

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы З. Биишева әсә теленә ҡарата күпме сағыштырыуҙар, эпитеттар тапҡан.

(Бер уҡыусы әҙибәнең «Башҡорт теле» шиғырын һөйләй.)

– Кем белә, кем ошо әҫәргә көй яҙған?

– Үҙешмәкәр композитор Абдулла Хәлфетдинов.

– Ә ҡайһы йырсыбыҙ ошо йырҙы һәр кемде таң ҡалдырырлыҡ итеп башҡара?

– Башҡортостандың халыҡ артисы Флүрә Килдейәрова.

– Мәктәптә Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Ғариповтың ниндәй шиғырын ятланығыҙ?

– «Туған тел». (Шиғырҙы яттан һөйләйҙәр.)

Уҡытыусы.Әсәм теле миңә — сәсән теле,

Унан башҡа минең халҡым юҡ.

Был юлдарҙы һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

– Тел бөтһә, милләтебеҙ ҙә бөтә.

– Яратҡан шағирыбыҙ Ғ. Туҡай әсә теле тураһында ни тип яҙған?

(“Туған тел” шиғырын яттан һөйләү.)

– Башҡорт теле тураһында тағы кемдең шиғырын беләһегеҙ?

– Рәшит Шәкүровтың «Башҡорт теле» тигән шиғырын.

– Уның һүҙҙәренә үҙешмәкәр композитор Мөхәррәм Сәлимов көй яҙған. Әйҙәгеҙ, шуны йырлап алайыҡ әле. (Хор менән йырлау.)

– Телдең тормошта тотҡан урыны, әһәмиәте хаҡында халыҡ бик тапҡыр итеп әйтеп биргән.

(Бер уҡыусы плакаттағы мәҡәлдәр менән таныштыра.)

III. Уҡытыусы. Телдең төп функцияһы нимәнән тора?

– Ул – аралашыу ҡоралы.

– Дөрөҫ. Бынан тыш тел –- ниндәй ҙә булһа милләттең төп билдәһе. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, дөрөҫ булмаған милли сәйәсәт арҡаһында башҡорттарҙа ла әсә телендә һөйләшә, уҡый-яҙа белмәгән бер нисә быуын барлыҡҡа килде. Олатайҙары, өләсәйҙәре ейәндәре менән башҡорт телендә һөйләшә алмайҙар. Бөтә халыҡтарҙы бер телдә һөйләштереүгә ынтылыу, туған телде ҡулланыу даирәһенең тарайыуы уны икенсе планға төшөрҙө.

«Теле юҡтың – иле юҡ», ти халыҡ мәҡәле. Башҡорт милләтенең яҙмышы, киләсәге ҡурҡыныс аҫтына ҡуйылды. Бына ошо фажиғә айҡанлы тәрән борсолоу менән Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаев «Халҡыма хат» шиғырын яҙҙы.

IV. Шиғри хатты яҙыуға нимә сәбәп булған һуң?

(Бер уҡыусы «Барыбыҙ өсөн дә уртаҡ һыҙланыу» мәҡәләһенең тәүге абзацын уҡый. Башҡалар китаптан ҡарап баралар.)

Ә хәҙер хаттың үҙе менән танышайыҡ.

(Уҡыусыларҙың береһе хатты уҡып ишеттерә.)

– Хат авторы фажиғәгә тап була. Был фажиғә ниҙән тора һәм ул уға ғына ҡағылғанмы?

– Хатты яҙған ҡыҙ мәктәпкә барғансы туған телдә һөйләшә, русса бер нимә лә белмәй. Шуға ҡарамаҫтан, уны рус класына уҡырға бирәләр.

Фажиғә шунан башлана ла инде: ҡыҙ юғары белем тураһында диплом ала, ике сит телде белә, әммә туған телен белмәй. Халҡының тарихын да, әҙәбиәтен дә, мәҙәниәтен дә, динен дә белмәй. Шуныһы аяныслы: был уның ғына фажиғәһе түгел. Меңәрләгән башҡорт ана шундай фажиғәгә дусар ителде, туған телен өйрәнеүҙән мәхрүм булды.

– «Барыбыҙ өсөн дә уртаҡ һыҙланыу» тигән мәҡәләһендә автор артабан нимә ти?

(Бер уҡыусы уҡып ишеттерә.)

– Уҡыусылар, һеҙ нисек уйлайһығыҙ, шағир ни өсөн хат формаһын һайлаған?

– Әҫәрҙең хат формаһында яҙылыуы осраҡлы хәл түгел. Халыҡ, ил тормошоноң киҫкен, хәл иткес мәлендә шағирҙар ошо хат формаһын һайлағандар. Граждандар һуғышы осоронда Ш. Бабич башҡорт халҡына шиғри хат менән мөрәжәғәт итә. Был форманы Р. Ниғмәти менән М. Кәримдең Бөйөк Ватан һуғышы йылдарындағы ижадында күрергә мөмкин.

V. Шиғри хаттың йөкмәткеһе өҫтөндә эш,

– Хәҙер әҫәрҙең йөкмәткеһе менән танышайыҡ.

(Ҡурай моңо фонында биш уҡыусы шиғырҙы яттан һөйләй.)

Үҙ аллы эш

Текстан сығып, түбәндәге һорауҙарға яуап әҙерләгеҙ. (Һорауҙар алдан таҡтаға яҙып ҡуйылған.)

Шағир ни менән ғорурлана?

Р. Бикбаев нимәне күреп хурлана?

Ни сәбәпле ошо көнгә төштөк?

Шағир халҡына ни тип мөрәжәғәт итә, нимәгә өндәй?

(Уҡыусылар, хат юлдарын файҙаланып, ҡуйылған һорауҙарға яуап бирә.)

Уҡытыусы. Тимәк, әҫәрҙең идеяһын һуңғы бер һөйләм менән әйтергә мөмкин, таптығыҙмы?

Телде йоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән

Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем.

VI. Фекер алышыу, бәхәсләшеү.

– Ҡайһы берәүҙәр, шул башҡорт теле нимәгә кәрәк ти. Һеҙ быға ни тип яуап бирер инегеҙ?

– Туған тел бик кәрәк. Әсә теле аша башҡа телгә тиҙ төшөнәһең, халҡыңдың рухи хазинаһына эйә булаһың, уның тарихын, фольклорын, әҙәбиәтен, мәҙәниәтен, ғөрөф-ғәҙәтен, ырымдарын беләһең, Әсә телен белмәүсе үҙенең тамырын онота, башҡорт милләте вәкиле булыуҙан туҡтай.

– Телде һаҡлап алып ҡалыу өсөн кем һуң яуаплы? Әйҙәгеҙ, бергәләп уйлашайыҡ, кәрәк икән, бәхәсләшеп алырбыҙ.

Дискуссияла ҡатнашыусыларҙың яуаптары:

– Бөтәбеҙ ҙә яуаплы. Ләкин ғаиләнең, ата-әсәнең яуаплылығы бигерәк тә ҙур. Иң тәүҙә өйҙә әсә теленә һөйөү тәрбиәләргә кәрәк. Бала тыуғас та уның менән тик туған телдә һөйләшергә кәрәк.

– Әсә телен ҡулланыу даирәһен киңәйтергә. Суд эштәрен, йыйылыштарҙы халыҡтың үҙ телендә алып барырға. Сауҙала, һаулыҡ һаҡлау өлкәһендә туған телдә аралашыуҙы киңерәк файҙаланырға.

– Радио, телевидение аша туған телдә тапшырыуҙар ваҡытын арттырырға.

– Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер ҡыҙҙар икенсе милләт кешеһенә кейәүгә сыҡһа, үҙ телдәрен оноталар, балаларға ла өйрәтмәйҙәр.

– Кеше күп тел белергә мөмкин. Ләкин үҙ телен онотмаһын. Үҙ телен онотҡан – иманын юғалтҡан.

VII. Дәрестә йомғаҡлау. (Пландағы һорауҙарға яуап биреү.)

Уҡытыусы.Уҡыусылар, беҙ күп милләтле республиҡала, Рәсәй Федерацияһы составында йәшәйбеҙ. Шунлыҡтан беҙҙең барыбыҙға ла рус телен дә һәйбәт белеү кәрәк. Тик үҙебеҙҙе юғары мәҙәниәтле кеше тип иҫәпләһәк, әсә теле икенсе планда булырға тейеш түгел.

VII. Өйгә эш. Текстан сығып, үҙ фекерҙәрегеҙҙе белдереп, «Туған телен ҡәҙерләгән халыҡ ҡәҙерле булыр» тигән темаға инша яҙырға.

РАУИЛ БИКБАЕВ «ХАЛҠЫМА ХАТ»

Кинйәбулатова Рәйлә Ғайса ҡыҙы,
Салауат ҡалаһы «21-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе»

Маҡсат:

1) Р.Бикбаевтың тормошо һәм ижады менән танышыуҙы дауам итеү, «Халҡыма хат» поэмаһынан өҙөктөң йөкмәткеһен үҙләштереү, идеяһын асыу, яңы һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр менән таныштырыу;

2) телмәрҙәрен, һүҙ байлыҡтарын, үҙ аллы фекерләү һәләтен үҫтереү, эҙләнеү, күҙәтеү, нығымта яһарға өйрәтеү;

3) яҙыусы ижадына ҡыҙыҡһыныу, башҡорт теленә, туған телгә ихтирам, һөйөү тәрбиәләү, Тыуған ил, тел яҙмышына битараф булмаған уҡыусылар тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: мультимедиа проекторы, Р.Бикбаев ижадына арналған күргәҙмә.

Дәрес барышы.

I. Ойоштороу моменты.

- Дәрестә яратҡан шиғырыбыҙҙан өҙөк менән башлайыҡ.

Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле, Атам теле, әсәм теле- минең телем! (2-се слайд)

II. Артикуляцион күнегеүҙәр.

1. Һүҙбәйләнештәрҙе дөрөҫ уҡығыҙ.

Килә алманы арғы урам
Өйгә эш
Урман эсендә
Сәскә ата
йыр ишетелә (3-сө слайд)

2. Тел көрмәлдергес буйынса эш.

Өҫтәге өс өҫтәлде өс оҫта яһаны. (4-се слайд)

3. Шиғырҙарҙан өҙөктәрҙе тасуири уҡыу.

4.

Ҡулға алдым Салауаттың ҡылысын,
Тутыҡмаған уның ҡоросо.
Ялтлаған ул күпме йәшен булып,
Даулап илдең бәхет-ырыҫын. (5-се слайд)
Тик барыбер хыялдарҙан айырып,
Хафа тынғы бирмәй аҡылға.
Йәмләнерме тағы Аҡ йылға,
Тәмләнерме тағы Аҡ йылға? (6-сы слайд)

III. Тема һәм маҡсатты билдәләү.

- Беҙ уҡыған өҙөктәрҙең авторы кем? Әҫәрҙәрҙең исеме нисек?(Р.Бикбаев «Салауат ҡылысы», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ»)

- Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, бөгөнгө дәрестә кемдең ижады менән танышасаҡбыҙ?

- Эйе, беҙ бөгөн Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады менән танышыуыбыҙҙы дауам итәсәкбеҙ . (7-се слайд)

IV. Яңы тема буйынса эш.

1.Рауил Бикбаевтың биографияһы менән таныштырыу. - Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһында белемдәребеҙҙе иҫкә төшөрөп, тулыландырып китәйек.

Уҡыусылар Р.Бикбаев тураһында әҙерләгән материалдары менән сығыш яһай. (Уҡыусыларҙың презентациялары) (8-се слайд)

2. Уҡытыусының Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады тураһында йомғаҡлау һүҙе. (9-сы, 10-сы слайдтар)

Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покров районы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Ете йыллыҡ мәктәптән һуң Аҡбулаҡта педучилище, Өфөлә Башҡорт дәүләт университетының филология факультетын тамамлай. 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалының аспирантураһында уҡый һәм кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлай.

Тыуған яҡтарының далаһынан илһам алып, Рауил Бикбаев ун һигеҙ йәшендә үк өлгөргән шағир булып әҙәбиәткә килеп инә. Ул бөгөнгө көндә илебеҙҙең күренекле шағирҙарының береһе, ғалимы, йәмәғәт эшмәкәре. Әҙиптең ун бер шиғри йыйынтығы донъя күргән. «Салауат ҡылысы», «Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!», «Халҡыма хат», «Уралыма»,«Ҡурай менән ҡауырһын» һәм башҡа әҫәрҙәр яҙған.

Рауил Бикбаев – филология фәндәре докторы, профессор, Ғ.Сәләм исемендәге йәштәр премияһы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты. 192 йылда уға Башҡортостандың халыҡ шағиры тигән юғары исем бирелде.

3. Ял итеү минуты.

11-се слайд.

– Ҡыҙыл төҫтәге дүртмөйөштәр буйлап “а” хәрефенән башлап, баштарҙы бормайынса, күрһәтелгән юл буйынса “һ” хәрефенә барып сығығыҙ.

4. Р.Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһынан өҙөк менән таныштырыу. (12-се слайд)

А) Инеш әңгәмә.

Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһының яҙылыу тарихы менән ҡыҫҡаса таныштырыу.

– Р.Бикбаев «Халҡыма хат» поэмаһының яҙылыу тарихы тураһында былай тип яҙа: «Йәмле июнь уртаһында Өфөлә Салауат Юлаев һәйкәле янында миңә бер егет хат килтереп бирҙе. Ошо хат бына күпме ваҡыт миңә тынғы бирмәй. Уны яҙған һеңлекәште борсоған уйҙар, күңеленә тынғы бирмәгән һорауҙар миңә генә түгел, һәр беребеҙгә төбәлгән һымаҡ. Мин уны нисек яҙылған булһа шул көйө, бер урынын да үҙгәртмәйенсә, авторҙың рөхсәте менән, уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итәм. Бына ул хат. (Хаттан өҙөктәрҙе уҡыу)

Салауат һәйкәле янында ҡулыма килеп еткән хат күңелемдә күптән тулышып йөрөгән бер шиғырҙың яҙылыуына сәбәп булды. Уны айырым кешегә генә исемләү мөмкин түгел. Унда һөйләнелгән аяныслы хәлдәр, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, барлыҡ халҡыбыҙҙың, хатта илебеҙҙәге бөтә милләттәрҙең яҙмышы өсөн уртаҡ. Шуға мин шиғри хатым менән барлыҡ халҡыма өндәшәм.»

Б) һүҙлек эше.

Хурланам- стыжусь

Бәғерҙәрем яна- душа разрывается

Золом- яуызлыҡ; зло

Биҙҙереү- отучать

Яҙҙырыу- лишать

Ҡуйын- пазуха

Упҡын- пропасть

Ҡый- сорняк

Һәләт—способность

Тиҫтер- йәштәш; одногодок

Даръя- ҙур йылға; большая река

Ырыуҙаш- сородич

Алҡым- тамаҡ, үңәс; горло

Тоҙаҡ- петля (13-сө, 14-се слайдтар)

В) Р.Бикбаевтың дәреслектә бирелгән «Халҡыма хат» поэмаһынан өҙөктө уҡыу.

- Өҙөктө иғтибар менән тыңлағыҙ һәм түбәндәге һорауҙарға яуап әҙерләгеҙ.

- Әҫәрҙең төп фекере ниндәй юлдарҙа айырыуса асыҡ сағыла?

- Ни өсөн поэма «Халҡыма хат» тип атала?

Уҡытыусы үҙе һәм алдан өйҙә әҙерләнеп килгән уҡыусылар поэманан өҙөктө уҡый.

Г) Әҫәрҙе анализлау.

- Р.Бикбаев «Халҡыма хат » поэмаһында ниндәй проблемаларҙы күтәреп сыға? (тел ҙәм милләт яҙмышы, уның киләсәге)

- Әҫәрҙең төп фекере ниндәй юлдарҙа айырыуса асыҡ сағыла?

(Туғанынан яҙған- ярты йәтим,
Туған теленән яҙған- мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!)

-Ни өсөн поэма «Халҡыма хат» тип атала? (Был поэмала шағир башҡорт халҡына мөрәжәғәт итә, үҙ халҡын ғәмһеҙлектән, вайымһыҙлыҡтан, ялҡаулыҡтан, моңһоҙлоҡтан ҡотолоп, уянырға саҡыра, ихлас теләктәрен еткерә, шуға күрә «Халҡыма хат » тип атала.)

- Поэманың төп идеяһы ниндәй тип уйлайһығыҙ?

Төп идеяһы түбәндәге юлдарҙа сағыла:

Теле бөткәндең бит көнө бөтә,
Иле бөтә теле бөткәндең.)
- Поэмала ниндәй тел- һүрәтләү саралары ҡулланыла?
(Күпме һүҙең йондоҙ кеүек йым- йым нурлана – сағыштырыу;
Шул тел менән халҡым хаҡ яҙмышын
Ҡайһы быуаттарға яҙмаған.
Күпме аҫыл ерҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл ирҙәренән яҙған,
Күпме аҫыл йырҙарынан яҙған,
Тик моңонан, теленән яҙмаған-ҡабатлау һ.б.)
- «Телле көйө телһеҙ башҡорттар бар» тигән юлдарҙы нисек аңлайһығыҙ?
- Телдең бөтөүе нимәгә килтереүе мөмкин?
- Тел, милләт яҙмышы кем ҡулында?
- Р. Бикбаев «Халҡыма хат » поэмаһында бөгөнгө көндә актуаль булған проблемалар күтәреләме?
- Был поэма һеҙҙе нимәгә өйрәтә?
- Халыҡтың рухи донъяһында тел төп урындарҙың береһен биләй, ул кешенең аңын, рухи культураһын сағылдырыусы, үҫтереүсе иң мөһим һәм универсаль сара булып тора. Шуның өсөн Тел, Ил, Тыуған ер кеүек үк бөйөк төшөнсәләр рәтенә ҡуйыла. Башҡортостан- күп милләтле республика. Республикабыҙҙа төрлө милләт кешеләре дуҫ, татыу йәшәй, уларға үҙ туған телдәрен өйрәнергә бөтә мөмкинселектәр булдырылған. (15-се слайд)

V. Йомғаҡлау.

- Башҡорт теле тураһында яҙған тагы ниндәй шағирҙарҙы, яҙыусыларҙы беләһегеҙ? (Р. Ғарипов, З. Биишева, Б. Бикбай, Н. Нәжми)

(16-сы слайд)

- Р. Бикбаев тураһында белгәндәрҙе йомғаҡлап, викторина һорауҙарына яуап бирәйек. (17-се слайд)

1. Р. Бикбаев ҡайҙа һәм ҡасан тыуған?
2. Шағир ниндәй университетты тамамлай?
3. 1995-2010 йылдарҙа ниндәй вазифа башҡара?
4. Тәүге шиғырҙар йыйынтығы нисек атала?
5. Бөгөн дәрестә ниндәй поэманан өҙөк менән таныштыҡ?
6. Р. Бикбаев ниндәй юғары исемдәргә лайыҡ?

- Һеҙ дәрестә актив булдығыҙ. Артабанғы слайдтағы ребусты сисһәгеҙ, мин һеҙгә әйтер һүҙемде белерһегеҙ. (1h- се слайд)

- Бөгөнгө дәрестә Р. Бикбаевтың «Халҡыма хат» поэмаһынан алынған түбәндәге юлдар менән тамамлайыҡ. (19- сы слайд)

Туғанынан яҙған- ярты йәтим,
Туған теленән яҙған- мең йәтим,
Телде тоҙаҡларлыҡ ғәмһеҙлектән
Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!

Р. БИКБАЕВТЫҢ ИЖАДЫ БУЙЫНСА ДӘРЕС-УЙЫН

Ҡужабаева Әнүзә Сәлимйән ҡыҙы

Маҡсат: 1. Р. Бикбаевтың ижадына байҡау яһау.
2. Уҡыусыларҙың фекерләү үҙенсәһен, һөйләү телмәрен үҫтереү.
3. Шағир әҫәрҙәренә ҡыҙыҡһыныу уятыу.
Йыһазландырыу: шағирҙың портреты, плакат, Р.Бикбаевтың китаптары күргәҙмәһе.
Таҡтала яҙыу: “ Рауилдең “башлап яҙыусылар” ҡоронда йөрөгәнен һиҙмәй ҙә ҡалдым. Тәүге шиғыр китаптары күп тыуа, ләкин тәүге китабы менән бергә һөрәнләп әҙәбиәт донъяһына килгән шағир һирәк. Шул һирәктәрҙең береһе- Рауил Бикбаев.” (Мостай Кәрим)

I. *Ойоштороу моменты.*

II. Төп өлөш.

Ҡәҙерле уҡыусылар, бөгөн беҙ халҡым, илем, телем тип янған шағирҙың – Рауил Бикбаевтың- ижадына байҡау яһаясаҡбыҙ. (һорауҙар 6-8 кластарҙа үткән темалар буйынса). Дәрес-уйынды башлар алдынан эпиграфты уҡыйыҡ. Мостай Кәримдең шағир хаҡындағы был һүҙҙәре буйынса беҙ нимәләр әйтә алабыҙ? (Яуаптар)

1. Һайлап алыу туры.

Уҡыусыларға тест һорауҙары бирелә. Иң күп дөрөҫ яуап биргән 6 уҡыусы артабан уйынды дауам итә. (1-се ҡушымта)

2. 2 –се тур.

Уйынсыларға 5 тема тәҡдим ителә. (2-се ҡушымта). (Һәр темала 5 һорау. Эштең ауырлығын уның күпме балға торошло икәнлегенән белергә була.)

Мәҫәлән, “Биография” темаһы буйынса 3 –сө һорау һайланды ти. Уҡыусы дөрөҫ яуап бирһә, уға 30 балл өҫтәлә; яуапты белмәһә, икенсе уйынсы әйтеп, үҙенә балл йыя ала.

3. 3-сө тур.

12 һорауға яуап биргәндән һуң, иң күп балл йыйған 3 уҡыусы һайлап алына.

Уйын дауам итә. Иң күп балл йыйыусы еңеүсе тип табыла.

III. Йомғаҡлау.

Еңеүсене бүләкләү.

Уҡытыусы: Р. Бикбаев шағирҙың йәшәү маҡсаты хаҡында былай тип әйткәйне: “ Ниндәй генә осорҙа йәшәһә лә, шағир һәр саҡ үҙ заманының көрәшсе-гражданины булырға, яҡшылыҡтың еңеүе өсөн яманлыҡҡа ҡаршы аяуһыҙ яу асырға бурыслы”. Был һүҙҙәрҙең раҫ булыуын , уҡыусылар, һеҙ үҙегеҙ ҙә һорауҙарға яуап биргәндә иҫбат иттегеҙ. Рауил Бикбаевтың беҙҙең өсөн, халҡыбыҙ өсөн ниндәй ҡәҙерле кеше икәнлегенә беҙ бөгөн тағы ла бер ҡат инандыҡ.

1-се ҡушымта.

Тест һорауҙары.

1. Р. Бикбаев ҡайҙа тыуған?
1. Өфөлә.
2. Ейәнсура районында.
3. Ырымбур өлкәһе Ҡунаҡбай ауылында.
2. Р. Бикбаев ниндәй юғары исемгә һәм премияларға лайыҡ булған?
1. Ғ. Сәләм премияһына.
2. С. Юлаев премияһына. 3. Халыҡ шағиры.
3. Р.Бикбаев ҡайҙарҙа белем ала? 1. Ғәбдрәфиҡ ете йыллыҡ мәктәбендә.
2. Аҡбулаҡ педучилишеһында.
3. БДУ. 4. Аспирантурала. 5. Бөтәһендә лә.
4. Мин бит башланамын һинән, унан,
Кешеләрем, һеҙҙән башланам. Был юлдар Р. Бикбаевтың ҡайһы шиғырынан алынған?
1. “Башҡортостан бында башлана”
2. “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”
3. “Дауыл”
4. “Барып етһен ине хаттарым”
5. “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”
5. Илкәйемдең зарлы уфтаныуы
Йөрәгемә күпме ут һала. Был юлдар Р. Бикбаевтың ҡайһы шиғырынан алынған?
1. “Башҡортостан бында башлана”
2. “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда”
3. “Дауыл”.
4. “Барып етһен ине хаттарым”
5. “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”

2- се ҡушымта.

Мөһим даталар	0	20	30	0	0
Шиғырҙы таны	0	20	30	0	0
Әҙәбиәт ғилеме	0	20	30	0	0
Биография	0	20	30	0	0
Башҡортостан	0	20	30	0	0

Шиғырҙы таны.

1. Ниндәй шиғырында Р.Бикбаев Уралды ҡылыс менән сағыштыра?(“Уралыма”)
2. Р.Бикбаевтың “Йүкәләрҙән һығылып бал тамғанда” шиғыры нимә хаҡында? (Шиғыр тәбиғәтте наҡлау, ҡәҙерләү, уны наҡ файҙаланыу тураһында.)
3. Был ҡоросҡа уйып кемдең ҡулы
Аманаттар итеп эҙ һалған?
Улының ҡулына ҡылысы күсмәһе лә,
Телдән телгә күсер һүҙ ҡалған.
Был өҙөк Р.Бикбаевтың ҡайһы шиғырынан алынған? (“Салауат ҡылысы”)
4. “Әллә мәсеткә барыуым сәбәп булды. Хәҙистәр яңынан үҙенә тартып алды. Ижадҡа ваҡыт аҙ ҡала, тиһәм дә, тағы ла бер хәҙистәр китабы әҙер булған бит!”- тип яҙа Р.Бикбаев үҙенең көндәлектәрендә. Бында ниндәй китап хаҡында һүҙ бара? (“Йөҙ ҙә бер хәҙис”)
5. “Йырҙар яҙам. Ләкин халҡым наҙан…” Батыр Вәлидтең ижадынан алынған был цитатаны Р.Бикбаев ҡайһы шиғырына эпиграф итеп алған? (“Барып етһен ине хаттарым”)

Әҙәбиәт ғилеме.

Р.Бикбаев ниндәй талантлы шағирыбыҙҙың тормошон һәм ижадын өйрәнеп, 1981 йылда монография яҙған? Ул китап нисек атала? (“Шәйехзада Бабич. Тормошо һәм ижады.”)

1997 йылда баҫылып сыҡҡан мәҡәләләр йыйынтығы нимә тип атала? (“Шағир һүҙе- шағир намыҫы”)

Нимә ул хәҙис? (Мөхәммәт пәйғәмбәрҙең Көрьәнде аңлатып биргән үҙ һүҙҙәрен, дини йолалар хаҡында әйткәндәрен, тапҡыр һүҙҙәрен хәҙистәр тип атайҙар.)

Р.Бикбаевтың башҡорт поэзияһы хаҡындағы китабы нимә тип атала? (“Замандың шиғри йылъяҫмаһы”(1980))

“Халҡыма хат” шиғырынан бирелгән өҙөктә һүрәтләү сараларын табығыҙ.

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым-йым нурлана.(сағыштырыу)
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.

Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә.

Еркәйемдең тарих һөйләмәгән
Юҡ һүкмағы, һыуы, юҡ тауы.(йәнләндереү)
Ишетәмен әле ҡылыс сыңын,
Әле һылыу ҡыҙҙың һыҡтауын.

Күпме моң бар еләҫ аҡландарҙа,
Күпме наҙ бар дала елендә.
Ҡарай улар ғәзиз әсәм булып, (йәнләндереү)
Һөйләшәләр башҡорт телендә.

1. Башҡортостандың географик күренеше Р.Бикбаевтың ҡайһы шиғырында һүрәтләнә? (“Башҡортостан бында башлана”)

2. Был фотоһүрәттә ниндә ваҡиға мәңгеләштерелгән?

(Р. Бикбаевтың 70 йәшлек юбилейына арналған ижади кисәлә Мортаза Рәхимов уға “Башҡортостан Республикаһы алдында күрһәткән хеҙмәте өсөн”орденын тапшыра.)

3. Р. Бикбаевтың Икенсе Бөтә Донъя Башҡорттары Ҡоролтайына арналған шиғыры нисек атала?(“Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!”)

4. Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыңа дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Был юлдар хаҡында нимә әйтерһегеҙ? (Башҡортостан Республикаһы дәүләт гимнының тексты. Р.Бикбаев, Р. Шәкүр һүҙҙәре)

5. Т. Йосоповтың юбилярға арнап яҙған “Бөркөт саңҡыуы” тип аталған шиғырын уҡығыҙ һәм Р.Бикбаевтың Башҡортостан яҙмышында тотҡан урыны хаҡында һөйләгеҙ.

Бөркөт саңҡыуы
Сама тигән аттар тыпырсынып,
Алмашынған саҡта дәүерҙәр.
Һин ҡалҡаһың алға,
Оло булып,
Кесерәйгән саҡта дәү ирҙәр.
Тере ҡуҙҙай күҙҙә осҡон янһа,
Өмөттәрҙең ҡалһа остоғо,
Һин ҡалҡаһың алға,
Сая рухлы
Рәмиҙең дуҫы, ҡустыһы.
Күңелдәреңә яҙға сарсағанда,
Ал ҡояшҡа тейә устарың.
Һин еләһең,
Йәшен тынын тоя
Эйәрҙәш тә килгән дуҫтарың.
Һөрән һалмай,
Илгә оран һалдың,
Тик ил ғәме генә уйыңда.
Үҙәгеңә үткәс,
Йыр йырланың,
Һәм сарсаның йылға буйында… (Тимер Йосопов)

Биография.

1. Р. Бикбаев ҡайҙа, ҡасан тыуған? (Рауил Төхфәт улы Бикбаев 1938 йылдың 12 декабрендә Ырымбур өлкәһе Покровка районында Соран йылғаһы буйындағы Үрге Ҡунаҡбай ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған)

2. Ниндәй уҡыу йорттарын тамамлай? (1953-1956 йылдарҙа Аҡ-Булаҡ педагогия училищеһы, БДУ, филология факультеты, 1962-1965 йылдарҙа СССР Фәндәр академияһының Өфөләге ТТӘИ аспирантураһы.)

3. Ырымбур өлкәһе башҡорт әҙәбиәтенә тағы ла ниндәй әҙиптәр биргән? (Ғабдулла Амантай, Мөхәмәтша Буранғолов, Сәғит Агиш).

4. Р. Бикбаевтың ҡатыны хаҡында нимәләр беләһегеҙ? (Фәриҙә Бикбаева, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы)

5. Был һүрәт хаҡында нимәләр һөйләй алыр инегеҙ? Кем төшөрөлгөн? Һүрәттең авторы?
(Р. Бикбаевтың портреты, Әхмәт Лотфуллин, 1973 йыл)

Мөһим даталар.

1. Р. Бикбаевтың шиғырҙары нисәнсе йылдан республика матбуғатында баҫылып килә?
(1957 йылдан бирле)

2. Тәүге шиғырҙар йыйынтығы нисәнсе йылда сыға һәм нимә тип атала. (“Дала офоҡтары”, 1964 йыл)

3. Шағирға Башҡортостандың халыҡ шағиры исеме нисәнсе йылда бирелә? (1993)

4. Р.Бикбаев нисәнсе йылда Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты булған? (1989)
5. Р.Бикбаевтың тәүге поэмаһы нисек атала? Ул ҡасан һәм ҡайҙа донъя күрә?
(1962 йылда “Ағиҙел” журналында “Вокзал” исемле тәүге поэмаһы донъя күрә.)

ВНЕКЛАССНОЕ МЕРОПРИЯТИЕ:«ЖИЗНЬ И ТВОРЧЕСТВО НАРОДНОГО ПОЭТА РБ РАВИЛЯ БИКБАЕВА»

Хайруллина Насима Талгатовна,
МОБУ СОШ с. Красный Яр Уфимского района

Цель мероприятия:

1. Познакомить учащихся с жизнью и творчеством народного поэта РБ, нашего современника Равиля Тухватовича Бикбаева.
2. Подчеркнуть актуальность произведений поэта.
3. Развивать любовь к литературе, к поэзии.

Наглядное пособие:портрет писателя, выставка книг поэта, слайды.

Ход занятия

1. - Здравствуйте, садитесь.

Чтение учителем стихотворения

Башҡортостан бында башлана
Сөн ярынан алыҡтарға баҡтым,
Офоҡтарҙа даръя-баҫыу аҡты,
Бар тарафта донъя ниндәй яҡты,
Ҡан тибешем офоҡтарҙы ҡаҡты:
– Башҡортостан бында башлана!
Туҡтап ҡалдым Яйыҡ туғайында,
Аҡ нур яғыла кеүек һәр ҡайындан,
Талпына ла күңелем күктә тулай,
Яҙ айында һабан турғайындай:
– Башҡортостан бында башлана!

- Ребята, кому принадлежат эти строки?

2. Просмотр видеовырезки с поэтом Р. Бикбаевым.

- Ребята, кто это, узнали ?

(Ответы учащихся)

3. Слайд № 1.

Эти строки принадлежат народному поэту РБ, нашему современнику – Равилю Тухватовичу Бикбаеву. В этом году 12 декабря ему исполняется 75 лет. Сегодняшнее наше мероприятие посвящяется изучению жизни и творчества великого поэта Равиля Бикбаева.

Слайд № 2. - Итак, цель урока:

Познакомиться с жизнью и творчеством народного поэта РБ, нашего современника Равиля Тухватовича Бикбаева.

Слайд № 3- Задачи:

1. Изучить биографию поэта.
2. Познакомиться с его творчеством – стихотворениями, основной тематикой его произведений.
3. Проверить и закрепить полученные знания.

Ход мероприятия:

I. Вводная часть.

– Фамилия Бикбаев образована от восточного мужского имени Бикбай, что в переводе с арабского на русский язык означает (отвечают учащиеся) «очень богатый». Вероятно, нарекая ребенка таким именем, родители желали, чтобы у их сына сложилась счастливая и благополучная жизнь. Они хотели, чтобы в будущем он стал знатным и властным господином. Именно так сложилась судьба Равиля Тухватовича Бикбаева.

II.Основная часть.

Слайд № 4

Известный обладатель фамилии - Бикбаев Равиль Тухватович, башкирский поэт, литературовед, депутат Государственного Собрания-Курултая Республики Башкортостан. Народный поэт Башкортостана (1992 год), доктор филологических наук (1996 год), профессор, заслуженный деятель науки Республики Башкортостан (1992 год), заслуженный работник культуры Чувашской Республики, Почётный гражданин города Уфы (1999 год), Член-корреспондент Академии наук Республики Башкортостан (2009 год). Он является одним из авторов Гимна Республики Башкортостан.

Слайд № 5

(Сообщение учащегося) - Бикбаев Равиль Тухватович родился 12 декабря 1938 года в деревне Верхне-Кунакбаево Покровского района Оренбурской области. В 1953 году окончил семилетнюю школу, в 1953-1956 годы учился в Ак-Булакском педагогическом училище. Окончил филологический факультет Башкирского государственного университет(1962 год). После окончания университета в 1962-65 годы учился в аспирантуре Института истории, языка и литературы Башкирского филиала Академии наук СССР. С 1965 года - научный сотрудник отдела литературы Института истории, языка и литературы Уфимского научного центра Российской Академии наук. В 1966 году защитил кандидатскую диссертацию на тему «Современная башкирская поэма», в 1996 – докторскую диссертацию.

Слайд № 7

С 1995 года председатель правления Союза писателей Республики Башкортостан, является секретарём правления Союза писателей России. Плодотворно сочетает занятия наукой с многогранной литературной деятельностью. Слайд № 8

(Сообщение учащегося) Его творческая деятельность стартовала в студенческие годы. Первые стихотворения были опубликованы в республиканской печати в 1957 году.

С поэмой "Вокзал" дебютировал в журнале "Агидель". В образе вокзала для него олицетворены и судьба страны, и судьба малой родины – деревни, родного очага, соседей, поколения, вынесшего все тяготы военного времени. Впечатляет и образ женщины, проводившей с этого вокзала мужа на войну, а теперь сына в армию. Тема войны, поднятая впервые в поэме "Вокзал", до сих пор остается одной из главных в творчестве Бикбаева.

Слайд № 9

В 1964 году была издана первая книга его стихов под названием "Степные горизонты". После первой книги один за другим увидели свет сборники "Млечный путь" (1967), "Автобиография" (1969), "Лирика" (1971), "Середина жизни" (1976), "Радостная весть" (1979).

(Сообщение учащегося) За книгу "Автобиография" в 1970 году автор был удостоен республиканской премии имени Г.Саляма. Сборник стихов "Поющие скалы" (М., 1978) получил высокую оценку и в центральной печати.

Произведениям Бикбаева присуща философичность, осмысление сегодняшней действительности с позиции нравственных ориентиров былых героических времен, неразрывная связь исторического прошлого с настоящим, преклонение перед вечностью жизни на земле.

– Ребята, давайте поближе познакомимся с его стихотворениями. (Чтение стихотворений Р. Бикбаева на башкирском и русском языках)

1-й ученик Һыуһаным - һыуҙар бирегеҙ!

Ағиҙелкәй!
Күпме бөгөлөңдә
Матурлыҡтан күҙем сағылды.
Ҡаяларҙың ап-аҡ таштарына
Йән серҙәшем күреп ҡағылдым.
Саңҡып оҫкан бөркөттәрең менән
Күктәреңә ҡанат ҡағындым.
Тик тағы ла хафаларым артты:
-Һауаларҙан ергә төш, туған.
Урал күкрәгендә бер шеш тыуа-
Һыҙлана бит бөгөн Иштуған.

2-й ученик

Дауыл

Дауылдарҙа минең байрамдарым,
Дауылдарҙа торам йән атып.
Йәшен күрһәм, күҙ йәштәрем йәшнәй,
Осам ҡанатымды ҡанатып.
Дауыл булһам икән,
Ер өҫтөнән
Иҫкергәнде ҡырып үтергә,
Таяуҙарға, аяуҙарға ышанып,
Ниңә ерҙә донъя күрергә?

3-й ученик

Халҡыма хат

Туған телем минең! Күпме һүҙең
Йондоҙ кеүек йым- йым нурлана.
Тамырыңды уйлап ғорурланам,
Бөгөнгөңдө күреп хурланам.
Туған телкәйемдең хәлдәренән
Бәғерҙәрем яна, теленә.
Халҡыма мин ошо хатты яҙам,
Оран һалам башҡорт иленә…
Башҡорт балаһы мин,
Ер хәтерендә
Мең йыл уйылып барған эҙем бар.
Быуындарға ялғап быуындарҙы,
Илде тотҡан телем, һүҙем бар.

4-й ученик

Уралыма

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡандан ҡынға кергән ҡылыҫка-
ҡулдарына һине алмаҡ булып
Күпме дошман ерҙә тырышҡан.
Был ҡылыстан ауған туралып.
Күпме генә һиңә ҡараһам да,
Күҙем тала белмәй, Уралым.
Шишмәләреңминең йөрәк аша
Сылтыр-сылтыр ағып үтәләр.
Йөрәгемә, гүйә, ҡаным түгел,

Шул шишмәләр йәшәү итәләр…

(Прослушивание звукового текста – стихотворения «Млечный путь» Р. Бикбаева)

(Смысловой перевод каждого стихотворения, краткий аназиз, выявление основного замысла стихотворения)

III. Подведение итога и выводы: - Сегодня мы говорили о народном поэте РБ Равиле Бикбаеве. А сейчас блиц-опрос.

1. Сколько в Башкортостане народных писателей и поэтов? (16)
2. Назовите их имена.
3. Когда родился Р. Бикбаев? (12 декабря 1938 г.)
4. Где родился Р. Бикбаев? (в д. Верхне-Кунакбаево Покровского района Оренбургской области)
5. Где учился Р. Бикбаев после окончания школы? (В педучилище; в БГУ, филологический факультет)
6. Первая поэма Р. Бикбаева. (Вокзал)
7. Основная тематика его произведений. (Тема войны, о Родине, о красоте её природы, о своём народе…)
8. В каком году ему было присвоено почетное звание Народного поэта РБ? (1992 г.)

IV. Заключительная часть.

Посещение страницы Р. Бикбаева социальных сетях «ВКонтакте», просмотр его фотографий и видеороликов.

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Инеш..... 3

Мусина Г. Р.
Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Төхфәт улы Бикбаев ижадына бағышланған кисә..... 5

Әбхәлимова З. С.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһына лингвокультурологик анализ..... 7

Исхаҡова Ә.Ә.
Рауил Бикбаев ижады..... 11

Хәйбуллина З.Х.
“Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта”..... 12

Шәмсетдинова Г.Т.
Рауил Бикбаев“Тәбиғәттең теле асылған саҡ”..... 13

Хәкимйәнова Л.Ә.
Рауил Бикбаев ижадына арналған әҙәби кисә..... 15

Ғафарова Л.М.
Рауил Бикбаевтың “Яңғыҙлыҡ” шиғырын өйрәнеү..... 18

Хөснәтдинова Н.Г.
“Ир уртаһы – ил тотҡаһы”..... 19

Зарипова Б.С.
Р. Бикбаевтың “Тәбиғәттең мәле асылған саҡ” шиғырын өйрәнеү..... 22

Хәйруллина Ә.И.
Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнеү..... 23

Абдрахманова Л.Ф.
Рауил Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнеү..... 25

Байрамғолова Г.Р.
Рауил Бикбаевтың ”Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнеү..... 27

Дилмөхәмәтова Ю.Ә.
Рауил Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”..... 29

Ситдикова В.М.
Рауил Бикбаевтың “Салауат ҡылысы” әҫәрен өйрәнеү..... 31

Саматова А.И.
Р. Бикбаевтың “Уралыма”, “Салауат ҡылысы” шиғырҙары..... 33

Бәҙретдинова А.М.
“Башҡортостан бында башлана” шиғыры..... 36

Хизәева Л.Й.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында экология проблемаһы..... 37

Фәттәхова Р.Р.
“Шағир һүҙе – шағир намыҫы”..... 40

Сәләхова Г.Р.
Рауил Бикбаев ижадында Башҡортостандың ете мөғжизәһе..... 42

Баймөхәмәтова Л. А.
Р. Бикбаев “Салауат ҡылысы”. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр..... 46

Батыргәрәева Ә. Ә.
Рауил Бикбаев “Уралыма”. Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре..... 48

Мөхәмәҙиева Д.В.
Рауил Бикбаевтың “Уралыма” шиғырын өйрәнеү..... 49

Сәфәрова Р.Х.
Р. Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында
экологик һәм рух проблемаһы…….. 51

Мөхәмәтова Р.М.
“Оранында бөркөт саңҡыуы бар,ҡылыстарҙың унда бар сыңы”…….. 53

Ғәлиуллина Ә.И.
Рауил Бикбаевтың “Йәншишмәбеҙ ошо тупраҡта “ шиғырын өйрәнеү…….. 56

Ноғманова Л. Р.
Барыһы ла беҙҙең намыҫта.…… 57

Зәйнетдинова Р.Д.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным , һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы …….. 59

Мәфтәхова Ф.Х.
Рауил Бикбаевтың“ Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнеү..... 60

Бакирова Л.Х.
Р. Бикбаев „Салауат ҡылысы”…….. 62

Фәтхетдинова В.Ф.
Р. Бикбаев “ Башҡортостан бында башлана” шиғырын өйрәнеү…… 64

Ҡәйниева Ф.Ә.
Рауил Бикбаевтың “Атайҙар һәм улдар” шиғырының идея-тематик
йөкмәткеһен асыу..... 66

Нигмәтуллина Н.М.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнеү…….. 67

Дәүләтбаева Г.Ф.
Гражданлыҡ яуаплылығы менән көслө…
(Р. Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғырын анализлау)…….. 69

Иҡбаева Л.Ғ.
“Мин йыһанға ғашиҡ” …….. 72

Дәүләтшина Г.М.
“Туған телем тыуған еремдә яңғыраһын мәңге йыр булып”..... 76

ИшкининаФ.Ғ.
Йөрәгендә милләт һағышы…… 78

Ғабдулбасырова Г.З.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы..... 82

Хажиәхмәтова Р.Т.
Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың тормошо һәм ижады..... 85

Фаршатова Ә.Ә.
Рауил Бикбаев“Даламды һағынғанда”…… 88

Кәримова А. З.
Уян, халҡым, ҡуҙғал милләтем (Рауил Бикбаев ижадына, тыуған
көнөнә арналған кисә сценарийы)…….. 92

Садыҡова Р.Н.
Рауил Бикбаев «Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнеү”…….. 94

Сәхибгәрәева Г.М.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын
өйрәнеү буйынса проекттар яҫлау дәресе…….. 97

Ғимранова Р.Ф.
Р. Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында экология проблемаһы..... 100

Ҡотошова Л.И.
Мин башланам һеҙҙән, кешеләрем!..... 102

Муллахмәтова А.Р.
Барып етһен ине хаттарым (Башҡортостандың халыҡ шағиры
Рауил Бикбаевтың 75 йәшлек юбилейына арналған ижад кисәһе)…… 104

Нурмөхәмәтова Ф.К.
Рауил Бикбаевтың “Салауат ҡылысы” шиғыры.
Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы…….. 108

Танһылҡужина Ә.З.
Рауил Бикбаевтың «Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнеү…… 109

Руфиева Ф.Б.
Башкортстанның халык шагыйре Рауил Бикбаевның “Салаватның
чаңгы эзләре” шиғыре буенча дәрес-әңгәмә…… 111

Әхмәдиева Н.Ф.
Тастымал-сөлгеләрнең серле бизәкләре... (Башкортостанның халык шагыйре
Равил Бикбаевның “Тастамал” һәм татарстанның халык шагыйре Ренат
Харисның “Ак сөлге” шигыре буенча ачык дәрес үрнәге..... 113

Мирхәйҙәрова Г.Р.
Р. Бикбаевтың “Ете быуын” шиғырын өйрәнеү..... 115

Шәйәхмәтова Р.В.
“Шағир күңелендә – ил яҙмышы”..... 117

Исламғәлиева Р. Р.
Теле барҙың – иле бар, иле барҙың – көнө бар…… 119

Хәмиҙуллина Ф.Р.
“Теле барҙың – иле бар” …… 122

Сәлихова Г.С.
Р. Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”……... 125

Фәйзуллина Г.Й.
Рауил Бикбаев “Тәбиғәттең теле асылған саҡ”..... 128

Мөхәрәмова Р.Т.
Күкрәгәндә күңел күктәре…… 129

Вәхитова Р.Ә.
Рауил Бикбаев шиғриәтендә тәбиғәт темаһы..... 131

Камалова Э.Г.
Рауил Бикбаевтың тормош һәм ижад юлы…… 134

Хафизова Ф.М.
Рауил Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”…….. 135

Иманғолова Г.Р.
“Үçһен шәжәрәбеҙ - беҙҙең хазинабыҙ!” (уҡыусылар ҡоро)…… 137

Мәүлиева Т.Ғ.
“Уян, халҡым, ҡуҙғал, милләтем!”..... 140

Борисова А.Ш.
Йөрәгендә ике ут (әҙәби кисә)…….. 143

Бикҡужина З.М.
Замандаш- шағир (арҙаҡлы шағир Рауил Бикбаев ижады буйынса
әҙәби кисә сценарийы)…….. 147

Хәсәнова Н.Р.
“Аҡ тирмә”лә ҡунаҡта…… 149

Ғайсина М.М.
Уралып ятҡан Уралтау…… 151

Айбатова Л.В.
“Хазина” интеллектуаль уйыны…… 153

Ибәтуллина Г.Ф.
”Ҡолон кеүек”шиғырын өйрәнеү…….. 155

Ялалова Ә.Ә.
Рауил Бикбаевтың"Уралыма "шиғырын өйрәнеү..... 156

Нотфуллина Г.Р.
Р.Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар биреген! ” 157

Әминева А.Ә.
Рауил Бикбаевтың ”Уралыма” шиғыры буйынса дәрес өлгөһө…… 159

Аҡмалова Л.Р.
Рауил Бикбаев“Салауат ҡылысы”…… 160

Миркамалова А.Р.
Рауил Бикбаев “Туған тел”…… 162

Сәғитова З.Ә.
Шағир һүҙе – шағир намыҫы…… 164

Мөхәмәтдинова Р.Т.
Р. Бикбаев ижады буйынса брейн-ринг…… 168

Баймырҙина Л.Ш.
Рауил Бикбаев “Халҡыма хат”..... 170

Настрединова К.Ғ.
“Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар биреген!” поэмаһында экологик
проблеманың сағылышы..... 173

Ғималетдинова М.З.
Башҡортостан бында башлана. Өндәш һүҙҙәр..... 175

Ишемғужина Л.Ғ.
Р. Бикбаев. “Бөтә донъя башҡорттары, берләшегеҙ!”…… 177

Ҡаһирова Г.Ғ.
Р. Бикбаев “Яңғыҙлыҡ” шиғыры…… 179

Ризуанова Г.М.
Р. Бикбаевтың “Башҡортостан бында башлана” шиғырын әйрәнеү…… 181

Рамазанова А.Н.
Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһын өйрәнеү…….. 182

Мусина И.Р.
Рауил Бикбаевтың “Уралыма” шиғыры аша илһөйәрлек тәрбиәләү…….. 184

Тажетдинова М.Т.
Рауил Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар биреген!”..... 187

Хәйруллина Л.Н.
"Йәйғор кеүек балҡый тыуған ерем"…… 189

Ҡускарова З.Р.
“Үҙе – баҫыу, үҙе – һабансы”…… 190

Байбулатова З.Н.
“Уралыма” шиғырының йөкмәткеһе менән таныштырыу..... 191

Сәфиуллина З.Ғ.
Р. Бикбаев. “Тәбиғәттең теле асылған сағ” шиғыры. Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр (нығытыу)..... 193

Кашапова З.Ә.
Тәбиғәткә мәрхәмәтһеҙ булып, унан мәрхәмәт көтөп булмай..... 195

Ғибәҙуллина Ф.Р.
Рауил Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”..... 199

Хөснәтдинова Р.Ә.
“Мин ышанам, кеше матурлыҡты һәләкәттән барыбер ҡотҡарыр”……..... 200

Төхбәтуллина Д.Р.
“Ниндәй бәхет, ниндәй сикһеҙ бәхет – ошо ерҙә тыуып үҫеүҙәр!”…….. 203

Искәндәрова Ә.Ә.
“Йәйғор кеүек балҡый тыуған ерем”……..... 206

Яхина Л.Р.
“Рауил Бикбаевтың “Бикбай менән Бикбай һөйләшеүе” шиғырында замана, мораль-этик мәсьәләләр”..... 207

Әделгәрәева З.Ф.
Һағыштарым тыуған яҡта (Рауил Бикбаевтың ижады буйынса әҙәби кисә)…… 210

Дәүләтбаева Ф.Р.
Р. Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһын өйрәнеү……... 212

Мөхәрәмов М.Ә.
Республикам, йондоҙ булып балҡы һин, күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ!
(Р. Бикбаевтың ижадына арналған кластан тыш сара)…… 216

Фәхретдинова Л.Х.
Рауил Бикбаев “Туған тел”..... 219

Ибраһимова Р.Р.
“Уралыма” шиғырын өйрәнеү..... 221

Нурисламова С.З.
«Рауил Бикбаев – ҙур шәхес, атаҡлы кеше»…… 223

Хөсәйенова Г.Н.
“Халҡыма хат” поэмаһы…….. 225

Мөхәмәтғәлина Г.Н.
Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел, үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә……... 227

Насирова М.А.
‘Башҡорт балаһы мин”…… 228

Яманһарина М.Д.
Рауил Бикбаевтың тормош юлы һәм ижады буйынса
“Мөғжизәләр яланы” уйын…… 230

Рәхмәтуллина Ә.Р.
Рауил Бикбаевтың “Уралыма” шиғырын өйрәнеү..... 232

Ғәзизуллина М.Ә.
Рауил Бикбаев “Халҡыма хат “шиғыры (дәрес өлгөһө)…….. 239

Солтанова Л.И.
Рауил Бикбаевтың “Тәбиғәттең теле асылған сағ” шиғырын өйрәнеү.
Хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәр”…….. 241

Ғирфанова Г.Т.
Рауил Бикбаевтың ижадын өйрәнеү…… 243

Ибраһимова З.М.
“Башҡортостан бында башлана”..... 245

Әхмәтшина А.Т.
“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһында экология проблемаһы……. 246

Распаева Д.В.
Ғүмер йомғағы төйөндәре..... 250

Аптикаева З.Т.
“Башҡортостан – минең тормошом!”..... 252

Ишкыуатова И.Б.
“Теле юктың иле юҡ, иле юктың көнө юҡ”……. 253

Аҫылбаева А.Ә.
Рауил Бикбаев ижадында башҡорт халҡының арҙаҡлы улдары..... 254

Ишмеева Р.Р.
Рауил Бикбаевтың “Ете быуыным” шиғырын өйрәнеү……... 257

Солтанова Л.М.
Рауил Бикбаевтың ижады буйынса “Мөғжизәләр яланы”..... 260

Ниғәмәйева Ҡ.Г.
Рауил Бикбаевтың “Тәбиғәттең теле асылған саҡ”…… 262

Әбсәхова Э.З.
«Теле барҙың – иле бар, иле барҙың – көнө бар»..... 263

Шәрәфиева Г.Ф.
Рауил Бикбайҙың “Уралыма” шиғыры…… 264

Шәймиева Э.С.
Рауил Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”…….. 266

Буданцева Г.Р.
“Ғүмер юлым....” (Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың
75 йәшлек юбилейына арналған сара)..... 267

Мәтиғуллина З.Ә.
“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнеү..... 270

Вәлиева З.Ҡ.
Тәбиғәттең теле асылған саҡ..... 271

Саҙретдинова Г.М.
Рауил Бикбаевтың “Халҡыма хат” поэмаһы буйынса дәрес-ҡоролтай..... 275

Шәрипова Ә.В.
“Халҡыма хат”…… 277

Ғәрфүтдинова Ф.Т.
”Уралыма”…… 279

Ғәлиева Р.Х.
“Уян, халҡым,ҡуҙғал милләтем!” әҙәби-музыкаль кисә……..... 280

Ахундова И.Х.
Р. Бикбаев “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!”..... 282

Сәләхова Н.Ф.
“Кеше ерҙән биҙер өсөн түгел, биҙәр өсөн тыуа был ерҙе…”(телдән журнал)…… 283

Кинйәғолова Г.Ф.
«Уралыма» шиғырын өйрәнеү…….. 286

Ғәлиуллина Т.И.
Рауил Бикбаев – шағир, ғалим, сәйәсмән. Проект өҫтөндә эш. Дәрес-уйланыу…… 288

Батталова Т.З.
Барыбыҙ өсөндә уртаҡ һыҙланыу…… 291

Морозова Ф.К.
“Тәбиғәттең теле асылған саҡ” шиғырын өйрәнеү…….. 293

Ибраһимова Ә. Ә.
Дан һиңә, Башҡортостан!..... 295

Кәйепова Р.Н.
“Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһы буйынса дәрес өлгөһө..... 296

Мөхәмәтйәнова Л.Ә.
Рауил Бикбаевтың “Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!” поэмаһын өйрәнеү…….. 298

Яндугушева С.А.
Квн – путешествие, посвященное 75-летию народного поэта Равиля
Тухватовича Бикбаева “В дороге ноги, а в песнях думы…”…….. 299

Йыһаншина Т.М.
Р. Бикбаев “Башҡортостан бында башлана”…… 300

Шарипова А.М.
Рауил Бикбаев “Халҡыма хат”…….. 301

Сәлихова Л.Ә.
“Мин башланам, һеҙҙән, кешеләрем! Күңелегеҙҙән һеҙҙең яралдым!”..... 304

Сәғитова Р.Ғ.
Р. Бикбаев „Салауат ҡылысы” шиғыры…….. 309

Иҫәнбаева З.К.
Рауил Бикбаевтың«Башҡортостан бында башлана» шиғырын өйрәнеү…….. 311

Ғилмуллина Э.Р.
Р. Бикбаевтың тормош һәм ижад юлына байҡау яһау..... 313

Ғиҙҙәтуллина Р.М.
“Башҡортостан бында башлана»…… 316

Янышева Г.Ф.
Тәбиғәт ҡомартҡыларыбыҙ юҡҡа сыҡты…… 317

Сәфәрова Р.Х.
«Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһында экологик һәм рух проблемаһы…….. 319

Ғарипова А.М.
«Һыуһаным, һыуҙар бирегеҙ!» поэмаһы..... 321

Ғәлләмова З.Р.
Рауил Бикбаевтың «Халҡыма хат» әҫәрен өйрәнеү…….. 323

Кинйәбулатова Р.Ғ.
Рауил Бикбаев «Халҡыма хат»…… 325

Ҡужабаева А.С.
Р. Бикбаевтың ижады буйынса дәрес-уйын…….. 327

Хайруллина Н.Т.
«Жизнь и творчество народного поэта РБ Равиля Бикбаева»…… 330

СЛОВО ПОЭТА – СОВЕСТЬ ПОЭТА

Сборник, посвященный к 75-летию
народного поэта Башкортостана Равиля Бикбаева

Ответственный редактор:
З.М. Габитова

Директор РИЦ:
Р.Р. Тухватуллин

Дизайн обложки:
З.А. Емалетдинова

Компьютерная верстка и макет:
Р.И. Рыскужина

Подписано к печати 17. 02. 2014.
Бумага писчая. Формат 60х84 1/8.
Гарнитура a_Helver Bashkir.
Отпечатано на ризографе / KONIKA MINOLTA
Усл. печ. л. 30,7. Уч.-изд. л. 31,7.
Тираж 200 экз. Заказ 026.
Цена свободная.

Издательство Института развития образования РБ
450005, Уфа, ул. Мингажева, 120.
rio_biro@mail.ru